ҒАЙСА ХӨСӘЙЕНОВ

# БАТЫРҘАР ҠИССАҺЫ



ҒАЙСА ХӨСӘЙЕНОВ

# БАТЫРҘАР ҠИССАҺЫ

Тарихи проза

ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
1986

84 Баш
Х 75

**Хөсәйенов Ғайса**

Х 75 Батырҙар ҡиссаһы. Тарихи проза: повестар һәм хикәйәләр. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1986 й. — 296 бит.

Республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреаты, филология фәндәре докторы профессор Ғ. Хөсәйеновтың был китабына тупланған әҫәрҙәре башҡорт халҡының героик үткәнен, тарихи шәхестәренең ҡатмарлы яҙмыштарын сағылдыра. Улар тарихи документтарға нигеҙләнеп яҙылған.

«Повестар» һәм «Хикәйәләр» бүлектәренән торған был китапта әҫәрҙәр хронологик тәртиптә бирелде.

Х $\frac{4702110000 — 127}{М\ 121\ (03)—86}$ 73—86 84 Баш

© Башҡортостан китап нәшриәте, 1986

# АВТОРҘАН

Заман менән заман уралған, ти ҡобайыр. Ысындан да, улар айырылғыһыҙ: үткән заманды белмәй, хәҙергене төшөнөү ҡыйын икән, хәҙергене аңламайынса, киләсәкте күреү мөмкин түгел. Заман, Тыуған ил төшөнсәләре үҙҙәре үк шул үткәне, хәҙергеһе, киләсәге менән бер бөтөн. Һәр кемгә, автобиографияһы шикелле, туган халҡының тарихын белеү ҙә кәрәк. Шунһыҙ кеше нәҫел-нәсәбен онотҡан, тарихи хәтерен юғалтҡан хәтерһеҙ бер бәндәгә әйләнер ине.

Был китабымда мин башҡорт халҡының боронғо яҙма сығанаҡтарҙа, төрлө документтарҙа теркәлеп ҡалған мең йылдан ашыу тарихынан бары бер быуынын — XVIII быуаттың 10—70 йылдар эсендәге айырым биттәрен — асып ҡарарға булдым. Ни өсөн тигәндә, минең аңлауымса, XVIII быуат — туган халҡымдың ирек яулау көрәшенең иң героик һәм трагик осоро; Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫланов, Алдар Иҫәнгилдин, Бәҙергол Юнаев, Батырша, Исмәғил Тасимов кеүек ҡаһарман шәхестәрен һәм аҡыл эйәләрен күпләп тарих майҙанына сығарған, азатлыҡты, хаҡлыҡты ҡылыс һәм ҡәләм, һүҙ һәм эш менән даулаған иң сая заман. Шағир әйткәнсә, сәмле тарих ҡандар менән яҙылған саҡ. Өҫтәүенә, был осор һаҡланып ҡалған рәсми документтарға, тарихи материалдарға ифрат бай. Һәр хәлдә, XVIII быуат — минең үҙемде, ғалим һәм яҙыусы булараҡ, иң ныҡ ҡыҙыҡһындырған, уйландырған дәүер, һәм мин, ҡулымдан килгән ҡәҙәре, шуларҙың үҙ ҡарамағымда булған айырым сәхифәләрен асмаҡ булдым.

Бында мин китап уҡыусы әле сағыштырмаса аҙ белгән һәм тарихсылар тейешенсә өйрәнеп етмәгән тарихи шәхестәргә, ҡатмарлы яҙмыштарға күберәк диҡҡәт иттем.

Батша чиновниктары тарафынан яҙылып, дәүләт архивтарында һаҡланған һәм аҙаҡ байтағы томлап-томлап баҫылып сыҡҡан рәсми документтарҙы — төрлө каратель отрядтары башлыҡтарының рапорттарын, губернатор, батша ғәскәре командующийы экстракттарын, приказдарын, донесениеларын, старшиналар хаттарын, шикәйәттәрен һ. б. — хәҙер әлбиттә, тәнҡит күҙлегенән ҡарарға, шулар эсенән мөмкин хәтле тарихи хәҡиҡәтте юлларға, тарихты һәм тарихи шәхестәрҙе, заманынан сығып, үҙ дөрөҫлөгөндә асырға тырышылды. Документ шыйыҡ ерҙәрҙә, тарих һәм тормош логикаһына нигеҙләнеп, бер ни тиклем фараз ителде. Әммә төп хәл ваҡиғалар бөтә тарихи ерлегендә, документаллегендә ыҡтырылды, буш хыялға, уйҙырмаға юл ҡуйылманы. Һаран рәсми һүҙҙәрҙә, даталарҙа, цифрҙарҙа ҡатып ҡалған һәм быуаттар көл-күмере менән ҡапланған ҡоро факттарға, тарих ҡуҙына, күпмелер күҙаллау, терелтеү, саҡ ҡына дөрләтеү өсөн, тәбиғи, үҙ тыным өрөлдө. XVIII быуат рухын, шул заман кешеләренең көнкүреш, йәшәү, фекерләү рәүештәрен, реаль бөтә барлығын бирергә ынтылыш шуға бәйле. Тарихҡа әҙәбиәтсе булып бағыуымдың төп функцияһы — шунда.

Ғәҙәттә, тарих ул әҙәбиәт кеүек, тиһәләр ҙә, тап ана шундай осрактарҙа ғына тарих менән әҙәбиәт килеп осраша. «Тарихи проза» тигән жанр төрө шулай барлыкка килә. Йәғни унда тарих бөтә документаль дөрөҫлөгө менән әҙәби формала сағыла. Художестволылык, тарихи хәкикәткә һис бер хилаф итмәйенсә, алған заманды тулырак, йәнлерәк итеп күрһәтеүгә булыша. Тарихи прозаның киммәте һәм һиммәте шунда.

Һәр хәлдә, был китапка ингән «Алдар батыр киссаһы», «Пугачев фельдмаршалы», «Рудасы Исмәғил Тасим улы», «Ете ырыу» әҫәрҙәрендә ошо принцип тотолдо. Ә Көнсығыш әҙәбиәттәре традицион жанр формаһынан килгән «кисса» төшөнсәһенә хикәйә менән роман араһында торған урта күләмдәге тарихи-героик йөкмәткеле жанр мәғәнәһе һалынды. Киссаның бер хиссаһы — айышы — хикәйәләү.

«Караһакал хакында һүҙ», «Батыршаның батшаға хаты» — ошо XVIII быуат тарихи шәхестәре галереяһын үҙенсә тулыландырышыр тарихи-публицистик яҙмалар. Улар ҙа, асылда, йөкмәткеләре, хатта күпмелер иркен формалары, стилдәре менән тарихи прозаға кан кәрҙәш.

Китапта төп вакиғалар XVIII быуатка караһалар ҙа, тарихи экскурс рәүешендә башкорт халкының боронғо Болғар, кыпсак осорҙарына ла үҙенсә байкау юк түгел. Башкорт ырыуҙарының үҙ ихтыярҙары менән Россияга кушылыуҙары, рус һәм башкорт, башка халыктарҙың тарихи туғанлык, дуҫлык ептәре, уртак Ватан — Россияны яклап яу сабыуҙар, батырлыктар сагылып үткәнен дә укыусы тойор («Ете ырыу», «Алдар батыр киссаһы»), хеҙмәтсән рус, башкорт халыктарының бергәләп ирек өсөн яуга күтәрелеүҙәрен («Пугачев фельдмаршалы») асығырак күрер, тим.

Тарих такыр юл түгел, уның һикәлтәләре, сокор-сакырҙары, үҙ үрҙәре, хатта түбән, тар һукмактары ла бар. Тарих үрнәкле һәм ғибрәтле лә ул.

Китапка ингән повестар һәм хикәйәләр үҙ бүлектәрендә хронологик тәртиптә урынлаштырылды.

# ПОВЕСТАР

# АЛДАР БАТЫР ҠИССАҺЫ

## ПЕТР БАТША ЯРЛЫҒЫ

«Тархану Алдарбаю Исекееву — детям его, племянникам и внучатам — за бытие им Алдаром в Крымском и Азовском походах, и за три получение им раны, также и за убивство сразившегося с ним Черкашенина, за поимку языка Крымчинина, ... и объявление Его Величеству блажения и вечной славы достойной памяти Государю Императору Петру Первому».

*(«Из указа царства Российских», 1734 г.)*

1

Йәш Петр Беренсе батшаның тәхеткә ултырғандан һуң тәүге ҙур эше төрөктәргә ҡаршы Азов походына әҙерләнеүенән башланды. 1695 йылдың яҙында, йылғалар боҙҙан әрселеү менән, Преображенск, Семеновск полктарынан һәм стрелецтарҙан торор егерме меңлек һайланма ғәскәрен ҡайыҡ-кәмәләргә, оло касмуйҙарға ултыртып, Дон буйлап, көньяҡҡа яуға ҡуҙғалды. Ғәскәрҙәр менән етәкселекте Головин, Гордон һәм Лефорт тигән генералдарына тапшырып, батша үҙе яуҙа Петр Алексеевич атлы тупсы-бомбардир булып ҡына ҡатнашмаҡ булды. Ни өсөн тиһәң, тәүге яуҙа әгәр еңелә ҡалһаң, батша булып оятты үҙеңә алмаç һәм төрөктәрҙе лә бик маһайтып ебәрмәç өсөн. Ғәскәре араһында белгертмәй, ябай бер тупсы ғына булып, һалдаттарҙың ҡылығын, күңел-сафаһын үҙе күреп-тойоп йөрөүе лә мөһим ине уға.

Ике айҙан артығыраҡ ауыр юлдан һуң, батша ғәскәрҙәре Дон йылғаһы түбәненә етеп, Азов ҡәлғәһенән ун биш саҡрымдар өçтәрәк ҙур хәрби лагерь ҡороп туҡтаны. Юлда яҙғы быçраҡтарҙа бата-сума ауыр туптар, йөклө ылауҙар һөйрәп алйыған аттарҙы штурм алдынан ал-ял алдырырға кәрәк ине. Тупсы Петр Алексеевич үҙе лә һалдаттары менән ишкәк ишешеп, ҡулдары ҡабарып, туп, обоздарҙы һөйрәшешеп арманһыҙ булып бөткәйне.

Ләкин рәсми рәүештә һуғыш иғлан итеп тормайынса, дошманға аңғармаҫтан һөжүм итергә йыйынған Петр Беренсе батшаның штурмға әҙерлекте һуҙырға ла самаһы юҡ. Ул әле үҙенән алдараҡ килеп тупланған Гордон генерал лагерына ашыҡты. Унда борғо уйнатып, туптар шартлатып ҡаршыланылар батшаны.

Петр батша штурмға әҙерлек хәлдәрен һорашҡас та, генералдың сатыры янындағы ҡалҡыулыҡҡа күтәрелеп, күҙәтеү трубкаһы аша Азов ҡәлғәһен текәмләп ҡарарға тотондо. Был түбәнән ҡәлғә аҡһыл һорғолт ҭаш диуарҙары, Дондың ҡәлғәгә һуғылып аҡҡан текә яры, диуар артындағы өй түбәләре, мәсет манаралары ус төбөндәгеләй күренеп ята. Ҡәлғә ҡаршыһындағы текә ер өйөмдәрен, тәрән урҙарҙы, бишәр мөйөшлө редут, траншея соҡорҙарын да батша айырым-асыҡ күрҙе. Ҡәлғә аръяғында, Дон тамағына табан ҡултыҡта, монар аша елкәнле караптарҙы ла шәйләргә мөмкин ине.

Петр Беренсе шулай күҙәтеү трубкаһы аша ҡәлғә менән таныша биргәс, генерал Гордон уға әкренләп хәлде аңлатырға кереште:

— Үткән аҙнала ана теге аръяҡ ҡултыҡта торған елкәнле караптар менән төрөктәр мең ярымлап янычар [1] килтерҙе. Беҙҙең походҡа сыҡҡанды, ғәскәр тупланғанын төрөктәр күптән белгәнгә оҡшай. Ҡисә беҙ бер «тел» ҡулға төшөргәйнек. Әгәр ул ялғанламаһа, ҡәлғәлә гарнизон өс мең кешенән хәҙер ете меңгәсә арттырылды, ти. Төркиәнән тағы яңы ғәскәрҙәр килерен көтәләр икән. Өҫтәүенә, Азовтан бик алыҫ түгел далаларҙа Ҡырым ханының атлы ғәскәрҙәре лә булырға тейеш. Һәр хәлдә, ҡәлғәне ҡамап ҡына ҡулға төшөрөргә мөмкин түгел. Дон тамағы, диңгеҙ улар ҡулында.

— Фәҡәт штурм менән генә мөмкин, — тип һүҙгә ҡушыла Лефорт.

Петр батша уйлап-уйлап тора ла бойороҡ биргән рәүешсә киҫә генә:

— Штурм икән — штурм! Берәһе көнгә әҙерләнергә! — ти.

Билдәләнгән көндө, июль башында, рус ғәскәрҙәре Азов ҡәлғәһенә штурмға китте: Гордон ғәскәре — урталыҡтан, һул яҡлап — Лефорт, уң яҡлап — Головин ғәскәре. Тупсы Петр Алексеевич туп, мортиралар [2] менән атышты алдағы һырттан башламаҡ булды. Ҡырым ханы атлыларына ҡар-

---

[1] Янычар — төрөк армияһының һайланма ғәскәрҙәре.
[2] Мортира — бәләкәйерәк пушка.

шы Дон казактары — һыбайлылар менән башҡорттарҙың Алдар батыр башлығындағы атлы тупланы[1] ебәрелде.

Тәүге штурм төрөктәрҙең ҡәлғәнән бер уҡ атымы аралыҡта Дондың ике яҡ ярына ҡоролған ике каланчаһына һөжүмдән башланды. Был таш каланчалар, Дон йылғаһынан ҡәлғәгә рус ҡайыҡтары, кәмәләре үтмәһен өсөн, йыуан тимер сымдар менән тарттырып, бағаналар ҡағып нығытылғайны. Төрөктәр шул каланчаларға ҡуйылған туптарҙан атып, һөжүм итеүсе рус ғәскәрҙәрен күпләп ҡырыуға ҡарамаҫтан, генерал Гордон һалдаттары төш ауыуға ярым емертелгән ике каланчаны баҫып алды. Туптарҙан ҡыйратылған ҡайыҡ киҫәктәре, үле һалдат кәүҙәләре йылғаны быуып торған сымдарға йыйылып, үҙенсә быуа барлыҡҡа килде. Дон һыуы ҡан менән буръяҡланды.

Ҡөн кискә һарҡҡанда ғына, рус ғәскәрҙәре, яу майҙанында меңәрләп үле-яралыларын түшәп, Азов стенаһына яҡынлашты. Ләкин диуар тишектәренән туп йәҙрәләре, таш, уҡ ямғырҙарына ошрап, штурмлаусы ғәскәр окоптар ҡаҙып йәшеренергә, ҡанһырап, һөжүмде туҡтатырға мәжбүр булды. Далала Дон казактары, башҡорт атлы тупланы, Ҡырым ханы атлылары менән тиңһеҙ алышта еңелеп, үҙҙәренең тәүге позицияларына сигенде.

Бер аҙнанан һуң Азов ҡәлғәһенә икенсе тапҡыр ҡаты штурм да көтөлгән һөҙөмтәне бирмәне. Төрөктәр диңгеҙҙән өҫтәмә көс ала торҙо, һәр бер һөжүмде кире ҡаға торҙо. Шулай итеп, Петр Беренсе батшаның Азовҡа беренсе походы уңышһыҙ сыҡты: тупсы Петр Алексеевич үҙ генералдары менән Азов диуары янынан хурлыҡлы боролоп, ҡалған ғәскәре менән Мәскәүгә кире ҡайтып китте.

Уның ҡарауы, был тәүге уңышһыҙ походтан күп һабаҡ алған батша шул уҡ йылдың көҙөндә Азовҡа икенсе походҡа ныҡлап әҙерләнергә кереште. Ул ғәскәрҙәр һанын икеләтә арттырҙы, бөтә ғәскәргә баш итеп бер генә кешене — баяр Шеинды тәғәйенләне. Воронежда, Яуза йылғаһы буйында ҡыш буйына флот төҙөттө. Шулай ҙур әҙерлек менән Петр батша 1696 йылдың яҙғыһын Азовҡа икенсе походҡа сыҡты.

Һыуҙан һәм ҡоронан килгән ғәскәр былтырғыса Азовтан ун биш саҡрымдар өҫтә, Дон йылғаһы буйында, оло лагерь ҡороп ятты. Йылғаның ике яғындағы яҫы һыртлауға атылауҙары, палаткалары, туптары менән ҡайҙарҙан ҡайҙарға йәйелеп ятҡан был хәрби лагерь шул тиклем оло яуы менән дошмандың ҡотон алмалы ине хәҙер. Ә кистәрен лагерҙа яғылған усаҡтар дошман ҡәлғәһенән осһоҙ-ҡырый-

[1] Туплан — эскадрон.

һыҙ ут диңгеҙендәй булып күренер ине. Төрөктәрҙе тамам шомландырыр һәм ҡурҡытыр өсөн, рус ғәскәрҙәре үҙҙәренең көс-ҡеүәтен, яу туплашын был юлы мөмкин тиклем юрый күргәҙеп шашындырып күрһәтергә тырышты.

Дон менән төшөп, лагерға яҡынлашҡан рус флотилияһын — 23 галеранан[1], 3 брандер[2] һәм меңдән ашыу ҡайыҡ-кәмәләрҙән торор йылга яуы каруанын — тантаналы ҡаршы алыу үҙе бер хәрби парад төҫөн алды дошман ҡаршыһында. Уның алдында «Апостол Петр» исемле, 36 туплы карап менән Петр Беренсе батша үҙе баш булып килә ине. Тупсы Петр Алексеевичтың карапморонондағы туптан атыуы булды, уға флотилияның әллә нисәмәләгән туптарының ер һелкеткес тауышы ҡушылды. Лагерҙа быға шулай уҡ туптарҙан, мылтыҡтарҙан бер юлы атып, бик хәтәр яуап бирҙеләр.

Йылғаны ябып килгән флотилияның ҙурлығы, туптар гөрһөлдәүе, ҡара яу булып ятҡан ярҙағы ғәскәр төрөк ҡәлғәһенең ҡотон алырлыҡ та ине шул. Парадтай тамашаһы ла баштан ашаһы.

Петр Беренсе баш командующий баяр Алексей Семенович Шеин менән хәл-әхүәл, ғәскәрҙең яуға әҙерлеге хаҡында белешкәс, икенсе көндө ғәскәрҙәрҙе позицияға ҡуйҙылар. Дондың һул яҡ ярына, бейек түбәгә урынлашҡан Азов ҡәлғәһе янына төп көстө, күпселек туптарҙы тупланылар. Ҡәлғәгә ҡаршы йылға аша ярға атлы һәм йәйәүле ғәскәр менән тиҫтәләгән туп батареяһын тартырға булдылар. Ҡырым татарҙары атлыларының флангыларҙан, тылдан һөжүме ихтималына Дон һәм Запорожье казактарының, шулай уҡ башҡорт полктарының һыбайлылары билгеләнде. Туптар атыуы аҫтында йылғанан, каланчалар янынан, Петр Алексеевич етәкселегендә флотилия һөжүмгә күсергә, ҡәлғәне һыуҙан ҡамарға тейеш.

Азов ҡәлғәһе лә, бейек таш диуарҙары башынан уйым, улаҡтарынан көбәктәре ҡарайып күренгән йөҙәрләгән туптары, меңәрләгән ғәскәре, янычарҙары менән яу ҡайтарырға әҙер икәнлеген тойҙороп, шомло булып шымып ҡалғайны.

Бына бер заман, баш командующий бойороғо буйынса, йөҙәрләгән рус туптары ҡәлғәгә төбәп бер юлы ут асты. Таш стеналарға, һыу өҫтәренә, ҡәлғә эсенә барып төшөп ярылған туп йәҙрәләренән яман шартлауҙар ҡолаҡтарҙы тондорҙо. Саң-тупраҡ болото ҡарайып һауаға күтәрелде. Ҡалала емеректәр менән бергә ут ялҡындары күренде.

---

[1] Галера — күп ишкәкле ҙур касмуй кәмә.
[2] Брандер — вағыраҡ судно.

Бер нисә хәтәр ҡаты залптан һуң туптар бер юлы тынып ҡалды. Ниндәйҙер шомло һиллек ҡәлғә эсендәге ығы-зығылар, ҡысҡырыштар менән генә бүленгеләнде.

Шул саҡ рус ғәскәрҙәре сафынан ике һыбайлы атылып сыҡты. Береһе аҡ нәмә болғап, ҡәлғәгә ҡарай сабып китте улар. Азов комендантына, Хәсән Арыҫлан бейгә, һуғышһыҙ-ниһеҙ баш һалырға, үҙ-ара ярашлы шарттарҙа килешеү яһарға саҡырып яҙылған ярлыҡ менән ебәрелгән илсе казактар ине былар.

Яуға ингәнсе, дошманды әүәл һынап, ҡылын тартып ҡара, тигәндәр бит. Һынамыш илселәр, таш диуар буйына етеп, ҡулдағы ҡағыҙын, бүректәрен болғап һөрәнләүҙәренә бер аҙҙан ҡапҡа асылып, эскә лә үттеләр. Тик күпме генә ваҡыт уҙғандыр, береһен, һөрөп тигәндәй, кире сығармаһындармы. Бер үҙе әйләнеп ҡайтҡан был казактың ярлыҡ ҡағыҙына үтәнән-үтә хәнйәр ҡаҙалғайны. Ҡалған яуап шарты — яуҙы ике яҡ батырының хәнйәр менән алышыуынан башлау — телдән еткерелгәйне. Ҡәлғәлә ҡалған илсе шуға бер аманат икән.

Төрөктәрҙең был ҡылығы рустарҙы аптыратты ла, аптыратманы ла. Аптыратты, яу алды шарты шаҡтай сәйер: ғәҙәттәгесә, һыбайлылар алышы түгел, хәнйәрле алыш. Аптыратманы, илселәр береһе булһа ла иҫән ҡайтты. Ҡанһыҙланып, уларҙың баштарын, һөңгө осона ҡаҙап, ҡәлғә диуарына күтәреүгәсә эш барып етмәне әле.

Ҡуйылған шартты үтәмәй сара юҡ: ил-ғәскәр намыҫын һаҡлап, яман булһа ла, яу йолаһын йолаламай ярамай. Шарт үтәлһә, аманаттың да имен әйләнеп ҡайтыуы бар.

Ҡазактарҙың атта һөңгөлә яман алышын, ҡылыста хәтәр сабышын күп татыған төрөктәр, был юлы хәнйәрле алыш шартын ҡуйып, рус яу башлыҡтарын уйға һалды. Байтаҡ ҡына кәңәшләшкәндән һуң улар етмеш меңдән ашыу ғәскәр араһынан дүрт батырҙы һайлап алды. Шуларҙың икеһе уҫлаптай Дон казактары, өсөнсөһө Алып һынлы Мәскәү воеводаһы, дүртенсеһе башҡорттарҙан Алдар батыр ине. Ошо батырҙарҙың батырҙары араһынан көстө, таҫыллыҡты самалап һайлай торгас, рус ғәскәренең намыҫын һаҡлау өлөшө башҡорт батырына төштө.

Көс-ҡеүәте ташып торған олпат кәүҙәле, киң күкрәкле утыҙ йәштәр самаһындағы Алдар көрәштәрҙә ер күрмәгән, алыштарҙа ал бирмәгән, яуҙарҙа аҙмы дошман тураған. Ҡырым, Азов походтарын кискән шаҡтай тәжрибәле яугир ир ине. Әле иң кәрәге — хәнйәр менән үлемесле яҫҡыштың сая таҫыллығына ла күпмелер эйә ине ул.

Төрөктәр яғынан хәтәр алышҡа сыҡҡан батыр мыҡты кәүҙәле, йыуан беләкле, оло ялтыр башлы черкес кешеһе

икән. Алдар батыр хәнйәрен тағып, Петр батша, баш командующий Шеин менән хушлашып, ҡәлғә ҡаршыһындағы оло алыш майҙанына йүнәлгәндә, төрөктәр яғы батыры үҙен оҙата килгән һыбайлыһынан бер ер буйындай ҡалҡыу таҡыр урында көтөп тора ине инде.

Булат хәнйәр ҡынһыҙ булмаһа, батыр ҙа бағауылһыҙ[1] булмаҫ. Алдар батыр ҙа алыш майҙанына бағауыл менән — әлеге Мәскәү воеводаһы батыры менән — һыбай сыҡты. Черкес батыры баҫып торған урынға бер ер буйы ара ҡалғас, улар, аттарынан төшөп, үҙәккә ынғайланылар. Төрөк бағауылы ла, атын ҡалдырып, былар янына килде. Бағауылдар батырҙарҙа хәнйәрҙән башҡа артыҡ нәмә юҡмы икәнлеген тикшереп, алыш шарттарын асыҡлағандан һуң, аттары янына кире боролдо.

Алыш майҙанында, ике сажиндар самаһы арала ҡара-ҡаршы баҫып, ике батыр ғына тороп ҡалды.

Секундант-бағауылдар ҡул күтәреп, оран менән ишара яһағас, үлемесле алыш башланып та китте. Батырҙар башта бер-береһен һынап, алыш-сәнсеш яйын самалап, бер-береһенә яман секрәйгән көйө ярым бөксәйеп, ҡара-ҡаршы әле былай, әле тегеләй түңәрәкләп әйләнгеләнеләр. Төрөк батырының бер аҙҙан ҡапыл бер нисә тапҡыр хәнйәр менән яҫҡыныуына Алдар батыр, уң ҡулын гел алға һоноп хәнйәрен тоҫҡаған көйө, дошманын яҡын ебәрмәй йөрөнө, үҙенең бер-ике ынтылып ҡарауы ла бушҡа булды.

Хәнйәр һуҙылмалы, сәнсәйем тип артҡа киҙәнгәндә, үҙең дошмандыҡына ҡаҙалыуың бар. Алдар башта үҙе һөжүмгә күсергә бик ашыҡманы, күберәк һаҡланыу яғын ҡараны. Ғүмере буйы биленән хәнйәре төшмәгән черкесты яҫҡындырып ярһытып арытырға, алйытырға тырышты ул.

Ике яҡтан ҡарап торған ғәскәрҙе бындайыраҡ тамаша, бәлки, ялҡыта ла башлағандыр, ләкин хәтәр алыштағыларға ваҡыт бизмәнен үлем йә ҡалым алыштырғайны. Үлемесле был майҙанда көскә ҡарағанда таҫыллыҡ еңергә тейеш ине.

Бына бер мәл дошманын оборонаға күсергә мәжбүр иткән Алдар уның хәнйәрен гел алға һоноп тапанған сағында аңғармаҫтан уң аяғы менән тегенең ҡулына йәнтәстем килтереп тибеүе була, хәнйәре ысҡынып бер яҡҡа осоп китеүе була. Ул арала Алдар йәшен тиҙлеге менән хәнйәр юлын бүлә һикерә. Ҡоралһыҙ ағарынып ҡатҡан ҡорбанын сәнсеп ташларға бер ни тормай ҳоҙер батырға.

Намыҫланған башҡорт батыры, «сәнсешмәк юҡ, көрәш бар» ти ҙә, үҙ хәнйәрен бер яҡҡа бырактырып, ҡоро ҡул

[1] Бағауыл — бында «һаҡсыһы, секунданты» мәғәнәһендә.

дошманына ҡул көрәшенә ташлана. Аптыраған черкес, аңына килеп, яман айҡашырға тотона. Алдарҙың уны ҡыҫып ҡулдарын шаҡарайым тигәнсе, черкес нисектер ысҡынып, башҡорт батырының башын ҡайырып, яман ҡыҫырға керешмәһенме. Тимерҙәй ҡаты ҡулдар ҡыҫыуынан Алдарҙың күҙ алдары ҡараңғыланып, аңын юғалта барған сағында, ул тағы бушанып ҡалыуҙы тоя. Шул саҡ черкес, ике-өс сажиндар самаһы ситтә ятҡан хәнйәрен алып, һөжүмгә әҙерләнгәнен шәйләп ҡала ул. Яман киҙәнеп үҙ өҫтөнә килгәндә, тегенең беләҙек тәңгәленән ҡаплан етеҙлеге менән ҡулын эләктереп ала Алдар.

Алыштың иң сая сағы етә: хәнйәрҙән яҙғанға — үлем. Алдар үҙ өҫтөнә һаман яҡынлашып килгән хәнйәрле ҡулдарҙы көскә шаҡарып бар ғәйрәтенә этеүе була, дошманы үҙ ҡоралына үҙе сәнселеп ергә сүгә. Алдар батыр, хәнйәрҙе тартып алып, бер-ике аҙым артҡа сиккән арала, төрөк яғы батыры, эсен тотҡан килеш бөгөлөбөрәк баҫып, күҙҙәрен алартып ҡарап тора-тора ла ҡапыл гөрҫ итеп ергә ауа.

Рус ғәскәрҙәре яғында ҡупҡан көслө шау-шыу, ура тауыштарынан һуң ғына Алдар нисектер айнып киткәндәй булып, үҙенең арыған, йонсоған көйө үле дошманы ҡаршыһында көскә баҫып торғанын, үлемесле алышта еңеп сыҡҡанын аңлап ала.

Яу алды алышындағы был еңеү походтың хәйерле бөтөрөнә һәйбәт ишара ла ине.

2

Алдар батырҙы үлемесле алышта еңеүе менән ҡотлап ҡыуанышҡан рус ғәскәре иртәгеһен иртән, йөҙәрләгән туптан атып, оло яуҙы башлап ебәрҙе. Туп йәҙрәләре ҡәлғәлә йәнә емеректәр яһаны, янғын сығарҙы, тик таш диуарҙар ғына, бер ни булмағандай, шулай һерәйешеп торалар ине.

Оҙаҡламай ике меңләгән Дон һәм Запорожье казактары һөрән һалып һөжүмгә күтәрелде. Атаман Фрол Минаев башлығындағы казактар, уйһыу ерҙәрҙе йәһәт кенә йүгереп үтеп, ҡәлғә алдындағы траншея һәм редуттарға яҡынлашты. Шул саҡ төрөк туптары бер юлы телгә килде. Ҡолаҡ тондорғос шартлап йәҙрәләр ярылыуға, сафтар тарҡауланып, яу яланы үле кәүҙәләр менән сыбарлана башланы, яралыларҙың һөрәне, ыңғырашы ишетелде. Бер төркөм казактар таш стеналарға етеп, баҫҡыстар менән үргә үрмәләргә лә тотонғайнылар. Ләкин өҫтән яуған таштарҙан, ҡайнар ыҫмалаларҙан ҡыйралышып, кире траншеяларға сигенделәр.

Йәҙрәләрҙән, пуляларҙан, уҡтарҙан ышыҡланыр өсөн траншеяларҙы тәрәнәйтергә, позицияларҙы нығытырға кәрәк ине. Шундай урҙарға һалдаттар арҡандар менән һөйрәкләп бер-ике тупты ла килтерә алды. Ҡазактарҙың алғы сафы шул ҡаҙылған редут, урҙарҙа боҫоп, атыш башланы.

Штурмдың шулай ҡыҙып ҡына барған сағында, рус ғәскәрҙәре торған Дон йылғаһының уң яҡ ярындағы ҡанатына — атлылар һәм йәйәүлеләр лагерына — Ҡырым татарҙарының һыбайлылары ҡапыл һөжүм итте. Ун меңләп атлылар сардауылы [1] ҡара яу булып аңғармаҫтан ғәскәр өҫтөнә ябырылды. Иҫ киткес тураш, сабыш китте. Атлылар, йәйәүлеләр бергә буталды, өҙөк баштар, башһыҙ кәүҙәләр ергә тәгәрәне, яралы аттар айҡалды, хужаһыҙҙары өркөп янтайып кешеләрҙе тапаны. Бөтә лагерь һөрән, ҡәһәрле өндәр, һүгенеүҙәр, ыңғыраштар менән тулды.

Пехота бер аҙ тәртипкә килеп, дүрт мөйөш булып ойошоп, мылтыҡтан атыша башлағас ҡына, дошмандың алғы рәттәгеләре ҡаушап ҡалды, арттағы ташҡынды ҡыра барырға форсат тыуҙы. Уңарсы рус атлылары, башҡорт полктары дошмандың ике яҡ флангыһына ташланып, сардауылды кире ҡаҡтылар, һырт биргәндәрен йән-фарман ҡыуып алып киттеләр. Дошмандың уҡ, пуля тейгәндәре, ҡыуып етеп ҡылыстан ҡыйылғандары эйәрҙән ауа барһалар, ҡыуыусыларҙың аттары яраланып һөрлөгөп киткәндәре тәкмәсләп баш аша ла осалар ине. Шулай ҡыҙып китеп дошманды унарлаған саҡрымдар эҙәрлекләп эскә инеп киткән рус һыбайлыларының алғы рәттәгеләре, татарҙарҙың атлы боҫҡоларына [2] эләгеп, үҙҙәре лә ҡамала яҙып, күп ҡырылды. Шул арҡала арттағылары ла кире сигенергә мәжбүр булды. Ошо яуҙа ҡатнашҡан Алдар полкының байтаҡ ирҙәре яу яланында ятып ҡалды, батыр үҙе еңелсә яра алды.

Хәнйәр ике ҡырлы. Был тәүге штурм көнөндә ике яҡтан да бик күп ғәскәр ҡырылды. Етмәһә, шул төнгөһөн ҡәлғә стенаһы ҡырына урҙарға нығынған казактарҙың байтағын ҡәлғәнән шым ғына сыҡҡан янычарҙар ятағандары [3] менән йоҡо аралаш һуйып ташланы.

Икенсе штурм уңышлы сыҡһын өсөн, дошмандың ҡалған көсөн, позицияларын ныҡлап белеү, «тел» ҡулға төшөрөү үтә хәжәт ине. Был хәтәр төнгө «һунар»ға барырға теләүселәрҙән ике төркөмдө һайлап алдылар: биш ҡазакты һәм өс башҡортто. Ҡазактар — нисек тә ҡәлғәгә инергә,

---

[1] Сардауыл — аръергард.
[2] Боҫҡо — засада.
[3] Ятаған — ҡыҫҡа кәкре ҡылыс.

башҡорттар татар һыбайлылары урҙайына[1] барырға тейеш ине. Бәхетеме-өлөшөмө, атлы разведкаға Бирҙеғол тигән сос бер башҡорт, ағаһы Дәүләтҡол менән Алдар батыр эләкте.

Өс һыбайлы аттарының тояҡтарына сепрәк урап, көньяҡта Дон тармағындағы бер фордтан бик үк алыҫ булмаған ерҙә тупланған дошман урҙайына ҡарап төн эсенә инеп юғалды. Башта бер аҙ юрттырып, аҙаҡ аттарын атлатып ҡына улар күпме барғандыр, төн ауышып килгәндә, бер кескәй йылғаны кистереп сыҡҡас, дошман урҙайына яҡынлашҡанлыҡтарын самаланылар. Бер йырын эсләп байтаҡ барғас, Алдар юлдаштарын ҡалдырып үҙе разведкаға барып килде: дошман постарының ҡайҙалығын, ғәскәр таборҙарын күҙәтте. Бирҙеғол менән бергә шыуышып барып, һаҡтағыларҙы шым һәм йәһәт кенә юлдан алдылар. Артабан үтеп, бер оло аҡ сатырға ыңғайланылар. Дошман урҙайы ҡара төн эсендә бер ни белмәй тыныс йоҡлай ине. Тик ҡайҙалыр йыраҡтараҡ аттар бышҡырғылағаны ғына ишетелгеләп тынлыҡты боҙғолай.

Ике юлдаш шыуышып аҡ сатырға еткәс, тауыш-фәлән, ул-был юҡмы, тип бер аҙ тыңлап яттылар ҙа, һаҡ ҡына итеп сатырҙы асып, береһе эскә инде. Мышнауҙарына ҡарағанда, бында өс кеше йоҡлай ахры. Ингән Алдар, күҙе өйрәнә төшкәс, һул ҡулында, сатыр ситләберәк берәүһенең башын ишек яғына ҡаратып йоҡлап ятҡанын шәйләп алды. Баш тәңгәленә килеп йәһәт кенә яңағын ҡайырып тигәндәй бер ҙур киҫәк сепрәкте уның ауыҙына төйөп тығыуы булды, теге тыпырсына башлағансы бар көсөнә һөйрәп сатыр ауыҙына килтерҙе. Уғаса быны Бирҙеғол бөтөнләй тышҡа тартып сығарҙы. Ул арала икәүһе быны яғаһынан эләктереп, эйелә-атлай, йырын буйына һөйрәтеп алып та киттеләр. Тик шул саҡ ҡайҙандыр быларҙы бер шәүлә шәйләп ҡалғандай булды. Арғы пост, күрәһең: атыу тауышы яңғыраны.

Алдар менән Бирҙеғол «тел»де һөйрәп килтереп, Дәүләтҡолдоң атына арҡыры бәйләп һалып, үҙҙәре лә атланышып, йырын түбәненә сабып киткәндә, урҙайҙа шау-шыу ҡубырға өлгөргәйне инде.

Бер аҙҙан улар арттарынан сапҡын төшкәнен тойҙолар. Дәүләтҡол атында һалыулап һелкенеп килгән тере йөк уларға йән-фарман сабып китергә ирек бирмәй ине. Ә теге кескәй йылғаны кистереп сығып, һыртҡа күтәрелгәндә, ҡыуғынсылар быларҙы күреп үк алды. Шул саҡ эргәләренән бер-ике уҡ жыулап үтеп китте. Дәүләтҡолдо ҡаплар

[1] Урҙай — хәрби лагерь.

өсөн Алдар үҙе арткараҡ ҡалды ла, ҡараңғы аралаш шәүләләнгән атлы ҡарасҡыға тоҫҡап, уғын атып ебәрҙе. Шунан нисектер күҙҙән яҙғандай булды был ҡарасҡы. Үҙе яңынан юлдаштарын ҡыуып еткәндә, арттан ат тояҡтары һәм һөрән тауыштарын тағы нығыраҡ ишеткәндәй итте. Тағы бер угын ҡыуғынсыларға ҡарап атты ла Дәүләтҡол менән йәнәшәләп саба башланы. Шулай күпме генә сапҡандарҙыр, Алдар һөрән, тояҡ тауыштарының уң һәм һул яҡтарынан ишетелгәнен дә тойҙо. Ҡыуғынсыларҙың уйы, күрәһең, уларҙы ҡамалау ине. Көнсығыш офоҡта беленә башлаған таң әреһенән улар һулдан өс һыбайлыны тоҫмаллап алдылар. Уңдан бер-ике ер аралыҡта ике һыбайлы елә ине. Алдар Дәүләтҡолдан һул ҡулда сабыусн Бәҙерғолға эргәгә сыҡҡан шул өс һыбайлыларға тоҫҡап атырға бойорҙо ла үҙе лә, атын тыя бирерәк боролоп, һул яҡтағыларын мәрәйгә алыу яғын самаланы. Тоҫҡап бер уғын атып ебәреүе булды, алдағыһы гөрҫ итеп ҡолап төштө. Ул арала Бирҙеғол уғынан ундағы бер һыбайлы ла тәгәрәне. Шул мәл арттан атҡан бер уҡ Дәүләтҡолдоң арҡаһына килеп ҡаҙалды. Ул «аһ» итеп ҡалды ла артҡа бер ҡайҡая бирә барып, башын алға һалындырҙы. Быны күреп алған Алдар ағаһына ҡатар килеп, уң яҡ ҡалаҡ һөйәге аҫтына ҡаҙалған уҡты төптән тотоп һағыраҡ ҡына һурып алыуға, Дәүләтҡол яман аһылдап ебәрҙе.

Шул араларҙа Бирҙеғол икенсе уғын йәнә бер ҡыуғынсының атының күкрәгенә тигеҙеүҙән, ат һөрлөгөп китеп, һыбайы баш аша тәкмәсләп әллә ҡайҙа осоп барып төшкәндә, үҙе лә арттан атҡан уҡтан ҡапыл ҡолап ҡалды. Алдарҙың балтырын бер уҡ ярып үтте.

Шундай хәтәр хәлдәрҙә ағаһының аты ла, үҙенеке лә атлауға күскәндә, Алдар үҙҙәре өҫтөнә ҡылыс болғап ажғырып килгән ҡыуғынсыны күреп ҡалды. Йәшен тиҙлеге менән үҙе ҡылысын һурып алған арала, атын дошманына киҫә бороп өлгөрҙө батыр. Дошман аты ҡапыл үрәпсеп киткән ыңғайға, Алдар һыбайлының бот тәңгәленә ҡылысын сабыуға, теге эйәренән икенсе яҡҡа ауып та төштө.

Шунда иҫ-аңын йыйған араларҙа Алдар ҡайҙандыр атыу, ҡыйҡыу тауыштары ишетте. Абайлаһа, үҙҙәрен икеөс ер буйы алда ҡамалап алған ҡыуғынсыларға табан һырттан унлап казак һыбайлыларының ҡыйҡыулашып йәнфарман сабып килеүен күрҙе ул. Үҙҙәре лә өс-дүрт бөртөккә ҡалған ҡыуғынсылар, атлы казактарҙы күргәс тә, тырым-тырағай кире боролоп сапмаһындармы.

Ошо мәлдә генә Алдар үҙенең хәлдән тая барыуын, һул аяғының һулҡылдап һыҙлауын тойҙо; йәнәшәлә ағаһын эйәр өҫтөндә алдындағы арҡыры ятҡан тотҡонона бөтөн-

ләй иçһеҙ эйелеп төшкән хәлдә күрҙе. Бер яҡта яртылаш сабылған дошман кәүҙәһе ята ине. Арыраҡ бер нисә ат кешнәшеп юртып йөрөй. Таң һыҙылып, көн тыуып килә икән.

Сабып килеп еткән атлы казактар ҡулға төшөрөлгән «тел»де үҙен бер эйәргә һалып, Дәүләтҡолдоң яраһын бәйләп, атҡа ипләп ултыртып, үлгән Бирҙеғолдо табып, шулай уҡ эйәргә бәйләп һалып, лагерға табан боролдолар. Алдар үҙенең балтыр яраһын йыуып бәйләгәс, яраһының, үҙ хәленең бик мөшкөл түгеллеген тойҙо. Тик иçһеҙ ятҡан ағаһының хәле генә ныҡ борсоно уны.

Алдар батыр алып ҡайтҡан «тел» берҙән-бер һәм иң ҡиммәтле улъя[1] булып сыҡты, казактарҙың ҡәлғәгә разведкаһы уңышһыҙ бөтөп, үҙҙәре береһе лә кире әйләнеп ҡайта алмаған саҡта — бигерәк тә. Алдарҙар ҡулға төшөргән Ҡырым татары ҙур бер ҡорбашы булып сыҡҡан. Уның аша Ҡырым ханы атлыларының ихтиатын[2], позицияларын ғына түгел, Лютик фортындағы, Азов ҡәлғәһендәге көстәрҙе, төрөктәрҙең хәрби пландарын белә алғандар.

Был ҡорбашы биргән ҡиммәтле мәғлүмәттәрҙән һуң, ике көндән рус ғәскәре Азовҡа икенсе штурмды башланы. Тәғәйене, туптар атыуы аçтында рус флотилияһы ғына башта һөжүмгә күсте, ҡәлғә янындағы һыуҙа ун өс галеранан һәм егерме бишләп ваҡ судноҙан торор төрөк эскадраһын ҡыйратып, Азовты Дон тамағы яғынан уратып алды. Төрөктәрҙең диңгеҙ караптары яйһыҙ йылға тамағында һуғышҡа инергә баҙнат итмәне.

Рус ғәскәрҙәре икенсе көндө төрөктәрҙең ҡәлғә диуарынан айлы йәшел тыуҙарын түбән эйеүҙәрен ғәжәпләнеберәк ҡарап торҙолар. Шунан ҡәлғә ҡапҡаһынан ал флаг менән ике кеше сыҡты. Улар рус ғәскәрҙәре менән килешеү хаҡында һөйләшергә килеүсе төрөк илселәре ине. Азов коменданты Хәсән Арыçлан бей, ҡәлғәнең ҡамалыуын күреп, еңеп сығарҙарына ышаныстары булмағанлыҡтан, һуғышты туҡтатыуҙы тәҡдим итә, Азовты рустарға тапшырырға вәғәҙә бирә. Тик шул шарт менән: рустар төрөк ғәскәрҙәренә бөтә ғаиләләре, бала-сағалары, иң төп кәрәкяраҡтары, ҡоралдары менән ҡәлғәнән китеүҙәренә риза булғанда.

Орошло ерҙә ырыç юҡ. Меңәр ҡорбанға ҡарағанда, баш эйер яу дошманды ярау-ҡоралды көйө ярлыҡау ҙа ярар. Петр Беренсе, рус яу башлыҡтары әлеге шартҡа күнә: төрөктәр ҡәлғәне ҡалдырып, караптарына имен-аман ултырышып, Дон тамагын ташлап китәләр, Азов һуғышһыҙ рус-

---

[1] Улъя — хәрби трофей мәғәнәһендә.
[2] Ихтиат — резерв.

тарға күсә. Тик ул яман емерелгән, яндырылған, таланған хәлендә ҡулға төшә. Шулай ҙа рустар өсөн ғәниматенә [1] ҡарағанда, ҡәлғәнең үҙенең ҡулға төшөүе бик ҡиммәт ине. Рус ғәскәренең оло еңеүе ине Азовтың алыныуы.

Был оло еңеүгә иң ҡыуанған кешеләрҙең береһе — Петр Беренсе батша үҙе Азов походында ҙур ғәйрәтлектәр күрһәткән яу батырҙарын бүләкләгән саҡта тантаналы шарттарҙа иң беренселәрҙән булып батырҙарҙың батыры башҡорт Алдар Иҫәнгилдингә үҙ ҡулы менән ярлыҡ-грамота тапшыра, алтын ҡынлы ҡылыс бүләк итә.

Тик Алдар батырға еңеүсе рус ғәскәрҙәре сафында Мәскәүгә ҙур тантана менән ҡайтып төшөү шатлыктарын күрергә генә насип булмай. Төнгө разведкала алған ҡаты яранан үлгән ағаһының мәйетен үҙ илендә — Урал тауҙарында ерләү өсөн батшаның рөхсәте һәм ылауҙары менән оҙон ауыр юлға сыҡҡан була ул саҡтарҙа батыр.

## АЛДАР-КҮСЕМ ЯУҘАРЫ

«Алдар-Күсем бунты тип аталған башкүтәреү 1704 йылда Алдар менән Күсем юл башлығында башланып китте».

(П. И. Рычков. История Оренбургская, 1770)

«Ҡазанды яулап алғас, бунтсылар бөтә өйөрө менән Мәскәүгә йүнәлмәкселәр икән...»

(Письма и бумаги императора Петра Великого, том VII)

### 1

Азов походынан оло дан менән ҡайтҡас, Алдар батырҙың яуҙағы ғәйрәтлектәре һәм Петр батшаның үҙ ҡулынан алған грамота ҡағыҙы ил-йорт ҡаршыһында уның абруйын тағы күтәреп ебәрҙе. Әүәл Ҡырым походтарындағы батырлыҡтары өсөн тарханлыҡ исеме алған олатаһы Ҡәҙербәк менән атаһы Иҫәнгилдегә тиң яугир ир итеп таныныла р уны.

Батырлыҡ ҡоро дан ғына түгел, дәрәжә лә ине. Яуҙа яулап алынған мәртәбә. Батша ярлығы менән беркетелгән рәсми исем, халыҡ ололаған яҡшат. Йәш булһа ла, аҡыллы Алдарға аҡһаҡаллыҡ хөрмәте лә тиҙ йоҡто. Уҙаман урыны гел түрҙә, түрәләр, аҡһаҡалдар ҡоронда булды.

---

[1] Ғәнимәт — байлыҡ.

Бөрйән волосынан, тирә-яҡтан күп ҡунаҡтар йыйып, оло туй үткәреп ебәрҙе Алдар батыр. Оҙаҡ та үтмәй, тағы йәшерәк, матурыраҡ икенсе кәләш әйттерҙе. Ул-ҡыҙҙары тыуып, ғаилә ишәйеп китте, мал-тыуар артты. Атай-олатай нигеҙенән башҡа сығып, яңы йорттар, ҡаралтылар ҡорҙо. Йылҡы малдары яланябып йөрөй башланы, ваҡ мал түлләнде. Йәйгелеген алыҫ йәйләүҙәрендә аҡ тирмәләр ҡороп, ҡымыҙ эсеп, кәйеф-сафа ҡылып, мәҙрәп йәшәүгә күнекте. Байман ҡунды.

Батыр ҡушына Алдар бай тигән ил ҡушылды. Йәп-йәш көйө дан-шәрәфе баштан ашҡан, донъяһы тигеҙләнгән кеүек ине инде уға. Барына шөкөрана ҡылғанда ла ярай.

Ләкин донъялар тыныс түгел ине. Петр батшаның Азов походынан ҡайтҡас, оҙаҡламай шведтар менән һуғыш башлап ебәргәне ишетелде. Был күп йылдарға һуҙылыр Төньяҡ һуғышы касафаты алыҫ Башҡортостанға ла ҡағылмай ҡалманы. Яуға күпләп ир-ат, йылҡы талап итә башланылар башҡорттарҙан. Яңы һалымдар һалдылар.

Әүәл, аҡ батша менән килешеү буйынса, бары йәнлек тиреләре, баллата яһаҡ түләгән башҡорттар өсөн бик сәйер тойола был башта. Указдар килеп уҡылғас, һалымдар талап итә башлағас, ул ил-йорттоң ризаһыҙлығына күсә, яу-тартышҡа әйләнә.

Тауҙар араһында, Һаҡмар буйҙарында йыраҡта йәшәгән Алдар был донъя хәлдәрен шымыйыбыраҡ тыңлай. Шомланып та ҡуйғылай. Шулай ҙа үҙ ҡулы менән грамота тотторған Петр батшаның үҙенә ел-ямғыр тейҙермәҫенә ышана. Ышанысын нығытып, Өфөгә батша түрәләренә аманатын илтә. Тыныслыҡ донъяны үҙе өсөн шулай тынысыраҡ итмәксе ул...

Бер йәшенле-ямғырлы йәйҙә Алдар батырҙың йәйләүенә Азов походында бергә булған полкташы Ыҫмаҡай килеп төшә. Асыҡ йөҙ менән ҡаршылай яуҙашын батыр. Ер аяғы ерҙән ерле юҡҡа килмәҫен тойоп, эстән борсолоп та ҡуя. Хәл-әхүәл һорашып, яу-сәфәр хәтирәләрен иҫкә төшөрөп бер аҙ йәнләнеп алғас, әңгәмәләре бер үҙәккәрәк йүнәлә, мосафирҙың теле, теләге асыла бара. Уран волосы старостаһы Көнбайыш Башҡортостандағы, Өфө, Ҡазан яҡтарындағы әлеге күп кенә дау, бәләләрҙең уртаһында ҡайнаған йә шаһиты булған икән.

— 1704 сәнәлә Мәскәүҙән Өфөгә Әндрей, Михайло тигән ике түрә килгәйне. Шулар сапҡындар ебәреп Ноғай, Себер, Ҡазан, Уса юлы башҡорттарын, татар, сыуаштарын ҡалаға саҡыртып алды. Мин дә барҙым, — тип һөйләп алып китә Ыҫмаҡай. — Саҡыртылған халыҡты Ағиҙел буйына, Ҡаратун тауы янына йыйҙылар. Теге түрәләр батша указын

уҡып ишеттерҙеләр. Нимә генә бойоролмаған ул указда! Йән башын иҫәпкә алып һалым һалыу ҙа, өй беренә ҡаралты, мунсаларға саҡлы һалым. Туй ҡалымынан да өлөш. Һунар, ау иткәнгә, сәфәр йөрөгәнгә, һәр мал затына. Хатта мәсет янында зыярат яһарға, мулла янына поп килтерергә әмер ителгән. Ниҙәр генә юҡ ул указ тигәнендә. Халыҡтың иҫе-аҡылы китте. Тауыш-ғауға ҡупты. Ярһыған ирҙәр теге ике түрәне туҡмап ташланылар. Ярай әле, үлтереп ҡуйманылар. Указды йыртып, Ағиҙелгә ырғыттылар.

Шулай ярһып даулашып таралышҡас, күпме ваҡыт үткәндер, воевода Дмитрий кенәз, сапҡын ебәртеп, тағы Өфөгә саҡырта ил-йорт старосталарын. Өркә-ҡурҡа ғына йыйылдыҡ. Тағы батша указын уҡынылар. Теге килгән кешеләр түләмдәрҙе батша указы буйынса түгел, үҙ белдектәре менән эшләгәндәр, тиелгән. Хәҙер батша хәҙрәттәре һеҙгә, үҙ ҡолдарына, мәрхәмәтлек күрһәтте, теге һалынған һалымдарҙан ғәфү итеп ҡотҡарҙы, һеҙ элеккесә йәшәрһегеҙ, яһаҡ түләрһегеҙ, ылау сабырһығыҙ, тигән. Быларҙы ишеткәс, халыҡтың эсенә йылы инеп китте, ҡыуаныштыҡ.

Тик ҡыуаныс күпкә барманы шул. Үҙең дә ишеткәнһеңдер, бер заман батшанан яңы фарман: әрмегә башҡорттарҙан — биш мең баш ат. Уның артынса ҡыш көнө мәрхәмәтһеҙ түрә Сәргәйев Минзәлә тирәһендәге башҡорттарҙы ҡаты ҡыҫа башлаған, күп кешеләрҙе ҡулға алған. Үҙе, Өфөгә килгәндә, халыҡтың ҡотон алыр өсөн, әллә ни хәтле ылау саптырып, уны йән-фарман ҡыуҙырыуҙан байтаҡ атты сәсәтеп, яндырып үлтергән. Күп кешеләр тапалып имгәнеп бөткән, юлда туңған. Өфөгә килгәс, шул тирәләге халайыҡты йыйҙы. Күп түрәләр, старосталар ҡурҡып килмәне. Әмәлгә ҡалғандай, үҙем бармай булдыра алманым — йортомдо туҙҙырыр, миҙалымды ҡайырып алыр, тип шикләндем. Барҙыҡ. Был яманы, таяҡ менән төртөп, бер ҡағыҙға ҡул ҡуйырға бойорҙо. Ҡул тамғаларын ҡуйғас, уҡып ишеттерһә, беҙ биш мең ат бирергә тейешлебеҙ булып сыҡты. Беҙ аптырашып, быға беҙҙең хәл етерлек түгел, унан яҙыу менән таныштырмай-нитмәй белмәгән көйө көсләп, ҡурҡытып ҡул ҡуйҙырҙығыҙ, был дөрөҫ түгел, тип бәхәсләшә башлағайныҡ, был, ҡәһәр һуҡҡыр, ҡайһыбыҙҙы приказ кәнсәһенә, ҡайһыларыбыҙҙы төрмәгә, бәғзеләрен һыуыҡ келәткә бикләтеп ҡуйҙы. Бөтәбеҙҙе йорт-ил менән аҫып-ҡырып бөтөрөргә, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ҡоллоҡҡа һатырға янап, ҡурҡытып, яҙалап яфаланы. Фарманды үтәргә көсләп ант иттертте. Шунан бөтәбеҙҙе бейек ҡоймалы ихатаға индереп бикләтте. Тирә-яғыбыҙға айбалта, мылтыҡ менән ҡоралланған һалдаттар ҡарауылы ҡуйҙы. Ихатаға туптар сығарҙылар ҙа ҡурҡытыр өсөн беҙгә тоҫҡап әллә нисә ҡат

аттылар. Дары төтөнө, еҫтән ҡолаҡ тондо, аң томаланды. Шунан ниндәйҙер эсемлек сығарып, көсләп эсерергә тотондолар. Унан күптәр иҫереп иҫтән яҙҙы, бер нисә кеше үлеп ҡуйҙы. Был мәсхәрә, ыҙаны, язаны һөйләп бөтөрлөк түгел. Уны күрергә хатта сит-ятҡа яҙмаһын.

Шул Сәргәйеп аҙаҡ Ҡазан юлы, Минзәлә тирәләрендә отряте менән ауылдарҙы талап, кешеләрҙе ҡулға алып йөрөнө. Ул үҙ урынына ҡалдырған Сидар тигәне, илата-илата, халыҡтың иң яҡшы аттарын йыйып алып китте...

Был аяныс хәлдәрҙең күбеһен элек үк ишетеп белһә лә, Алдарҙың уны полкташы, шунда ҡатнашҡан кешенең үҙ ауыҙынан ишетеүе йөрәген нығыраҡ яндырҙы. Ләкин тыштан тыныс булырға тырышты. Алдарҙың шулай тыныс тыңлауына, көйәләнмәүенә аптырабыраҡмы, нисектер, Ыҫмаҡай аҙаҡтан ҡыҙыбыраҡ һөйләргә тотондо, төрлө һорауҙарын яуҙырҙы:

— Бындай ыҙа-яфаларға нисек түҙмәк кәрәк? Көн бөттө бит! Тәҡәт ҡалманы. Көрсөккә терәлдек. Сабырлыҡтың да бит сиге бар. Нишләмәк кәрәк хәҙер? Ыҙа сигеп мәсхәрәләнеп баш орғансы, аяҡ өҫтө үлеү артыҡ. Тегеләй ҙә, былай ҙа барыбер бер үлем. Аҡ батшаның ата-бабаларыбыҙға ярлыҡ менән нығытылған вәғәҙәһе нишләп боҙола? Ул боҙоу батшаның эшеме? Яман түрәләренең баш-баштаҡлығымы? Уны нисек итеп беләһең?

Шулай, ҡорҙаш батыр, халыҡ аптырап, алйып бөттө. Түҙәр әмәл ҡалманы. Баш ороп та, хаҡлыҡ даулап та йәлсемәне. Эйгән башты ла, ҡалҡытҡанын да ҡылыс бик аяп тормай. Шундай хәлдә, нишләргә белмәй, ҡаңғырып, һиңә килдем. Һин, уҙаман, сабыр аҡыллы кеше. Кәңәшеңде бирһәң икән: нишләргә беҙгә? Был яфаларҙан нисек ҡотолорға? Шуның берәй әмәле юҡмы? — Һөйләүсе, тыныслана төшөп, тағы өҫтәп ҡуйҙы: — Был минең үҙ һорауым ғына түгел, беҙҙең шикелле күптәрҙең һорауы. Ниндәй кәңәш ҡылырһың? Шуның өсөн ер аяғы, ер башы тип тормай килдем. Аҡыллы кәңәшеңде ишетер өсөн килдем, ҡорҙаш. Бигәйбә.

Алдар Ыҫмаҡайҙың шулай бер ҡыҙып, бер тынып һөйләгәнен тыңлап бөткәс, үҙе лә яйлап ҡына һүҙ алды. Өмөт итеп күҙен тегәп килгән ҡорҙашының күңелен тынысландырыуҙы ла, үҙ дәрәжәһен белеп, аҡыллы кәңәшен, төплө фекерен әйтергә кәрәклекте лә онотмай, һәр һүҙен үлсәп, самалап һөйләне ул:

— Донъя хәлдәрен мин дә ишетә-күрә торам. Донъялар тыныс түгел. Боларыҡ күп. Тик боларыҡ тип, бола күтәреп тә, башты ташҡа ороп та булмай.

Беҙ — батша хәҙрәттәренең ҡолдары, раҫлыҡ табиғтар[1]. Үҙең әйткәнсә, ата-бабаларыбыҙ аҡ батшаға баш ороп подданный булған, ярлыҡ алған. Батшаға тоғро хеҙмәт итәбеҙ. Битер падишаһ хәҙрәттәре тоғро хеҙмәт иткән кешене хөрмәтләй ҙә, ололай ҙа белә. Уны үҙең дә беләһең. Һин һөйләгән, мин ишеткән бәлә-ҡазалар, яфалар падишаһтың эше булмаҫ. Ул бары — яман, ҡомһоҙ түрәләрҙең баш-баштаҡлығы. Түрәлектән үрә һикереп ҡотороноуҙары.

Ҡотороғандың ҡотороғо етер, тип көтөп ятыу та булмай. Уға ташланыу ҙа файҙаһыҙ. Дөмәй уҙаман сыҙамай баш күтәрҙе — тик башын ғына ауға тыҡты. Имән батыр күтәрелде. Нишләне? — имгәтеп ырғытылды. Батырлыҡтан түгел, алабарманлыҡтан ил-йорт зыян күрә. Бер ҡорбанға биш ҡорбан менән түләргә тура килә.

Яуға яу мәллә? Аҡ батшаның көсөн беләһең, ҡорҙаш. Уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс менән генә регуляр әрмене, ут-тупты ҡыйратып булмай. Был — башты ташҡа ороу менән бер. Дыуамаллыҡ менән түгел, аҡыл менән эш итеү хәйерле. Мин шундай кәңәш бирәм, Ыҫмаҡай ҡорҙаш: яман түрәләрҙең баш-баштаҡлығын батша хәҙрәттәренә еткерергә кәрәк. Уны шул ыҙа күргән, ил-ере таланған, кешеләре үлтерелгән волостарҙың башлыҡтары, старосталары шикәйәт-үтенес хаты рәүешендә яҙырға тейеш. Хат фәҡәт Әстрхан аша, Шереметев фельдмаршал арҡыры ышанысл ы вәкилдәр ҡулы менән Мәскәүгә, батшаның үҙенә тапшырылһын ине. Шереметев — абруйлы, ышаныслы ҙур түрә. Һин — уның командаһында Ҡырым походында ҡатнашҡан кеше — аманатлы хатты үҙең илтешһәң икән. Шулай батша хәҙрәттәре аша ғына хаҡлыҡты табып булыр. Башҡа юл күрмәйем мин. Битер батша — ғәҙел батша, аңлар, яҡлар.

Был кәңәште Ыҫмаҡай староста хуп күрҙе. Алдар уға шикәйәт хатының нисегерәк яҙылышын, түрәләр ҡылған яманлыҡтарҙы бәйнә-бәйнә, әммә ҡыҫҡа, дәлилле итеп яҙыу яҡтарын, тылмас, писарь мәсьәләләрен өйрәтеп бирҙе. Үҙе киҫәтеберәк шуны ла әйтеп ҡалды: был эшкә ул ҡыҫылышлы түгел. Алдар — падишаһ, рус түрәләре ҡаршыһында тоғролоҡло ҡол, бай-батыр. Өҫтәүенә, ул аманат итеп энеһе Тарпанды, тағы биш-алты кешене Өфөгә илткән. Уның тоғролоғо — аманаттары иҫәнлеге.

Кәңәшле ил тарҡалмаҫ тигәндәй, Өфө өйәҙе башҡорттары, 1706 йылдың ҡышында йыйын йыйып, әлеге шикәйәт хатын ҡабул иттеләр. Төркисә яҙылған хатты тылмастан тәржемә иттереп, рус писарынан аҡҡа күсертеп, Өфөлә старшиналар үҙ ҡул тамғаларын һалдылар. Ыҫмаҡай ста-

[1] Раҫлыҡ табиғ — верноподданный.

ростаға нык ышанып, башлаған эшен аҙағынаса аман еткерһен тип, хатты Мәскәүгә илтешеүҙе йөкмәттеләр.

Юл уң башланды: Ыҫмаҡай һигеҙ вәкил менән ил хатын Әстрхан ҡалаһына илтеп, Шереметевҡа тапшырҙы. Фельдмаршал элекке яуҙашын, вәләкәтте йылы ҡабул итте. Ҡунаҡ итеп, хәстәрлек күреп, Мәскәүгә оҙатты. Ләкин юлдың аҙағы туң булды: Петр батша башҡорт илселәренең ҡул-аяҡтарын бығаулатып, ҡарауыл аҫтында Ҡазандағы власть ҡарамағына ебәрҙе. Шикәйәт хатының үҙ өҫтәренән икәнен белгән Ҡазан түрәләре эште ҡыҫҡа тотолар. Башлыҡтары Ишкәйевте дарға аҫтылар, ҡалғандарын төрмәгә яптылар. Батшаның «ғәҙел» хөкөмө шулай осланды.

Был яман хәбәр Алдар батырҙы башта аптыратты. Аптырауы, инанысы ҡаҡшауға әйләнде. Петр Беренсе һынлы батша хәҙрәттәренең ғәҙелһеҙлегенән йөрәге өшөнө. Өшөү башын биргәндәр алдында намыҫы уяныуҙан тетрәнеүгә күсте. Хатта үскә ашыр төҫлө ине.

Батыр йөрәген барыбер сабыр аҡыл енде. Ул барына шымып, эстән һыҙып күҙәтеүсе булып ҡалды.

## 2

Халыҡтың түҙер хәле ҡалмағайны. Күсем батыр башлығында Көнбайыш Башҡортостанды яу ҡапланы. Уға Нуғай, Уса юлы башҡорттары ҡушылды. Ағиҙел буйындағы йыйындағы дау ҡанлы яуға күсте, батшаларға бикәр хат яҙыр ҡауырый ҡәләмде ҡылыс алыштырҙы. Иркен яҡларға, илселәренең ҡаны, аҫылғандарының ҡонон алырға ир-азаматтар атҡа атланды. Өфө, Һамар, Минзәлә ҡәлғәләренә сабыуылдар яһалды, ауылдар янды, мал-тыуар ҡырылды, баштар киҫелде.

Батыр урыны яуҙа. Алдар батыр алыҫта, Урал аръяғында ауҡан ерҙә. Ләкин батыр йөрәге барыбер түҙмәне: хәүефле тип, Өфөнән аманаттарын йолоп алды. Алыуы булды, Алдар бай биләмен Өфө воеводаһы отряды килеп тә баҫты. Йәйләүен тар-мар килтереп, ике кешеһен үлтереп, ҙур өйөр йылҡыһын ҡыуып алып китте.

Алдар батыр ажарланып атҡа атланды — бөтә волосы дәррәү уға ҡушылды. Дүрт-биш тәүлек эсендә урман-тауҙар артылып, йылғалар кисеп, Табынға[1] яҡынлашҡанда, Алдар нөгөрө ике мең һыбайлынан ашҡан оло яуға әйләнгәйне.

Өфө воеводаһы Лев Аристов, ҡойроғон ҡыҫып өңөнә боҫҡан бүреләй, ҡәлғәгә инеп бикләнергә саҡ өлгөрөп

---

[1] Табын (Соловарный городок) — хәҙерге Табинск ауылы.

калды. Инде лә ҡурҡышынан саҡ ҡағырға кереште, ярҙам һорап, тирә-яҡҡа сапҡындар саптырҙы.

Бик хәүефле ине мәл. Нуғай юлы башҡорттарын Алдар батыр яуға күтәрҙе. Ҡазан юлынан Күсем батыр биш мең һыбайлы менән Өфөгә яҡынлап килә. Берҙән-бер Өфө полкы бар. Уны ла Ҡазан дворяны Петр Хохлов башлығында Стәрле йүнәлешенә ебәреп ҡуйҙы. Ебәргән генә ине, Күсем яуы Өфө янына килеп тә етте. Тамам ҡото алынды воеводаның.

Күсем батыр Өфөнән биш саҡрым ғына ерҙә лагерь ҡорҙо. Биш мең һыбайлыһы менән ҡалаға һөжүм ҡылһа, Аристовтың кескәй генә гарнизоны ҡәлғәне тоторлоҡ түгел ине. Өфөнөң хәле ҡыл өҫтөндә генә.

Күсемдән воеводаға илселәр килде. Батыр үҙенең падишаһ йортона тоғролоғон, боласы нуғайлыларҙан Өфөнө һаҡлар өсөн килгәнен әшкәрткән. Воеводаның ҡурҡышы ҡыуаныс менән алышынды: хоҙай һаҡланы, былай булғас. Күсемдең шарты шул: Аристов уның сиреүенә баш итеп бер абруйлы дворянды бирһен, байраҡ һәм дары ебәрһен. Бик ҡыуанып күнде бығa воевода — Өфө дворяны Федор Гладышевты аманатлы баш итеп, янына байраҡ һәм ике бот тәмәке ебәрҙе.

Дары урынына тәмәке — төтөн осорғанды тойҙо батыр. Ләкин артыҡ һиҙҙермәне: дворянды һәйбәт ҡабул итте. мыштырламай уның башлығында Алдарға ҡаршы көньяҡҡа яуға ҡуҙғалды.

Өфө воеводаһы үҙ башына төшөр яу ҡазаһының кире хас дошманына йүнәлеүен күреп, үсәнешле һөйөнә-һөйөнә, ҡулдарын ыуғыланы: «Ахмаҡтарҙы шулай алдайҙар уны, бер-берегеҙҙе сабышып ҡырығыҙ әле, ҡалғанын үҙебеҙ ҡарарбыҙ...»

Өфө полкы аҡ батша байрағы аҫтында Күсем ғәскәре менән бергә Нугай юлы сиреүенә ҡаршы килеүҙәрен хәбәр иттеләр Алдарға. Алдан ныҡ уйлап, Күсемгә сапҡын ебәрҙе батыр. Ниәте барып сыҡты буғай, ике батыр күрешеп һөйләшергә килештеләр. Йәшерен күрешеү урыны итеп ышаныслы бер башҡорттоң Ағиҙел буйындағы аулаҡ бер йәйләүен һайланылар.

Осрашыуға Алдар батыр эстән тимер яу кейемен, тыштан әрле еләнен кейеп, иң шәп аҡ бәкәлле ерән атына атланып барҙы. Ҡиәфәте яугир батырға ҡарағанда олпатлы илсегә оҡшабыраҡ тора ине. Яраҡ-яһаулы биш-алты һыбайлыһы бар ине. Һаҡлыҡ өсөн арттан ҡораллы нөгәр ҡуйырға ла онотманы. Күсем батырҙың иһә үҙе лә, ярандары ла шау ҡораллы булып сыҡты.

Осрашыуҙың башы, нисектер, яу алды алышын хәтерләткәндәй итте. Алдар батыр тәғәйен ваҡытҡа йәйләү майҙанына әлеге биш-алты һыбайлыһы оҙатыуында аттарын атлатып ҡына килеп инһә, Күсем батыр иһә баштан-аяҡ ҡоралды иллеләп нөгәре менән икенсе яҡтан туҙан туҙҙырып килеп сыҡты. Яу төҫлө баҫҡан батырҙың ҡиәфәтендә хәтәр бер тәкәбберлек менән уҫал ҡараш та сағылып ҡалғандай булды.

Ике яҡта шомло серлерәк тынлыҡ күпме дауам иткәндер, Күсем батыр ҡапыл атының башын киҫә ҡайырып, ҡамсыһы менән бер һелтәп, атын тыпырсытып ярһыта-ярһыта, майҙан уртаһына уҡталды. Алдар батыр бик ашыҡмай атын үҙәккә ыңғайлатты. Күсем ярһып-тоноп яҡынлашҡанда, Алдарҙың сәләм тауышы яңғыраны:

— Әссәләмәғәләйкүм, Күсем батыр!

— Вәғәләйкүмәссәләм, Алдар батыр!

Күсемдең аптырашлы сәләме лә шулай киҫә генә булды ла тағы өҫтәне:

— Алыш бармы, сабыш бармы, батыр?

— Алыш менән сабыш — яу эше, батыр. Ниәтем йүн менән, мир менән, йән ҡорҙаш!

Шулай тыныс яуапланы Алдар батыр, үҙе һул ҡулын күтәреп. Быныһы ишара булды, артында боҫҡан нөгәре ҡыуаҡтан килеп тә сыҡты. Ҡәпәренгән Күсем, барын аңлағандай, тыныслана төштө. Уңарсы йәйләү хужаһы ике батыр янына килә һалып етеп, уларҙы алдан әҙерләнгән аҡ тирмәгә саҡырҙы. Шулай шомлораҡ башланған осрашыу көйләнеүгә табан китте кеүек. Батырҙар, аттарынан төшөп, ике ҡуллап күреште, хужа менән таныштыы. Хужа кеше, әлеге ҡырҡыу хәлде йәһәтерәк бөтөрөргә, онотторорға ашыҡҡандай, йомшаҡ сүтерләй-сүтерләй, батырҙарға берәр туҫтаҡ ҡымыҙ һондо, үҙе, араға инеп әйҙүкләп, уларҙы тирмәгә табан әйҙәне.

Алты кирәгәле аҡ тирмә эсе йыһазлы ла, һый-хөрмәтле лә ине. Араҙашлыҡ ҡылған хужа, кейеҙ өҫтөндә түргә тартылып, аяҡтарын ипле бөкләп ултырышҡан батырҙарҙы, яҡын ярандарын ит, ҡымыҙ менән һыйлай-һыйлай, именамանлыҡ теләп, ара-тирә йор һүҙҙәр ҡатнаштырып, күрешеүҙе тыныс яйға, килешеүгә йәйлап ебәрергә тырыша ине.

— Илләштермәк — илсенән, яулаштырмаҡ — яусынан, — тип төп һүҙен башланы Алдар батыр. — Башҡорт ил-йорто яман түрәләрҙән күп ыҙа, яфа күрҙе, күрә. Күпме ир-егеттәребеҙ, ил азаматтары баш һалды. Дау яуға әйләнде. Берҙәм булмағас, яулашыу ҙа файҙа итмәй. Киреһенсә, йорт-ер зыян күрә, мал-тыуар ҡырыла, ауылдар үртәлә, ғүмерҙәр киҫелә.

Күсем батыр, һин — ғәййәр ир, арҙаҡлы старшина, атаҡлы батыр. Һинең волыс, Ҡазан юлы, күп ҡырғынлыҡ күрҙе, иң ауыры һеҙҙең яҡҡа төштө. Яу сапмай, баш күтәрмәй сабырлығығыҙ ҡалмағандыр. Хәҙер Нуғай юлы ла һеҙгә ҡушылды, һеҙҙе лә, үҙен дә яҡлап. Беҙ һеҙгә ярҙамға тип киләбеҙ. Күмәкләгән генә яу ҡайтарған.

Күсем батыр, түҙемһеҙләнеп, Алдарҙың һүҙен бүлде:

— Ярҙам яу, күмәкләгән, тигән булаһың, Алдар бай. Күмәкләгәс, ниңә беҙ күтәрелгәндә һин ҡыбырламаның? Үҙ донъям тыныс, башым һау, бүтәндәр теләһәләр нишләһен, тинеңме? Ҡәмәңә һыу керә башлағас ҡына ҡуҙғалдың түгелме һуң?! Беҙ үлешеп, ҡырылып ятҡанда, һин кәйеф-сафа һөрҙөң, батшаның арҙаҡлы батыры, оло бай булып ҡыландың. Шулай ел-ямғыр, яу, дау теймәҫ, тип уйлағанһыңдыр. Һинең әле ниндәй уй менән килеүеңде лә белеп булмай: әллә Күсемгә ҡушылырға, әллә Күсемде тоторға? Хәйләләп, йомалап маташма, Алдар бай! Мин дә алйот түгел. Яу сапҡанмын икән, батша хәҙрәттәренә ҡаршы түгел, Сидор менән Әлександр түрәгә генә ҡаршы. Үсемде, ҡоттарын алдым — шул етте. Хәҙер батшаға баш һалам. Эйелгән башты ҡылыс сапмаҫ. Өфө воеводаһына баш орҙом да инде. Ана аманаттарым бар. Ғәскәремә мин түгел, Федор Гладышев дворян баш. Мин хәҙер уға баш һалған батыр ғына.

Һиңә лә кәңәшем шул, Алдар бай: батша хәҙрәттәренә баш һал! Миңә баш ор, үҙең дә, мин дә имен ҡалырбыҙ. Ярлыҡау табырбыҙ. Үҙ ихтыярың менән бирелмәһәң, ана тора яуым. Биш мең һыбай. Ул саҡ һин — быҒаулы әсир. Ярлыҡау юҡ. Тегеләй ҙә, былай ҙа минең ҡулда һин хәҙер.

— Һүҙең тиҫкәрегә китте, — тине Алдар батыр, тыңлап ултыра-ултыра. — Һин өркөтмә мине, батыр. Ҡурҡыу йәшенән үткәнмен мин хәҙер. Миндә йән ҡайғыһы түгел, ил ҡайғыһы. Һин дә йән тип, ил тип ҡылыс күтәргән батыр бит. Ә ҡылыс күтәргән ҡылыстан да үтер. Юҡҡа йыуатма, алдама үҙеңде, Күсем. Беҙҙең баштар бер үк бауға бәйләнгән. Хәҙер иң дөрөҫө — башлаған эште аҙағынаса еткереү: шул бер күтәргән ҡылыс менән ата-бабаларыбыҙ ярлыҡҡа яҙҙыртып алдырған хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлау. Яу менән даулау. Уны, әлхәмделилла, батша хәҙрәттәре мәрхәмәте вәғәҙәһенә ҡайтарыр.

Ике ил-йорт халҡы беҙгә ҡарап тора, Күсем батыр. Улар өмөтөн аҡлай алһаҡ, аҡыллыраҡ булалһаҡ — беҙгә һап, уларға көн, аҡламаһаҡ — үлем, бөлгөн.

Хәҙер һис кисекмәҫтән, иң кәрәге — ике яҡлап ҡамап, Өфө полкын ҡырып ташларға. Шунан бергәләп, бөтә илйорт халҡын күтәреп, Ҡазанға яу менән барырға.

Әлегә сер, ә һеҙҙән йәшермәйем: беҙ Ҡубандән Хажи ханды саҡырҙыҡ. Ул әле ышаныслы кешеләр менән, һайлам ғәскәр менән Дим буйында. Илгә баш кәрәк, яуға батыр кәрәк. Яуыбыҙ уң булһа, ханды һайлап ҡуйһаҡ, илле-көнлө булырбыҙ, иншалла...

Шулай ышаныслы, өмөтлө һөйләп, күп кенә яҡтарҙы асыҡлай-асыҡлай, Күсемде яйлап ыҡҡа килтерҙе, үҙенә ауҙарҙы Алдар. Аҙаҡ улар, Өфө полкын ҡасан, ҡайҙа, нисек ҡамау тураһында ентекләп һөйләшеп, әллә ҡасанғы дуҫ батырҙар кеүек булып, таңға табан ғына үҙ сиреүҙәренә ҡарай юл тарттылар.

## 3

Ҡыуғанаҡ буйҙарына яҡынлап килә ине инде Өфө полкы. Биш туп һөйрәгән атлы арбаларҙы, аҙыҡ-түлек, яу-яраҡ йөктәрен, тиҫтәләп һыбай драгундарҙы иҫәпләмәгәндә, полк йәйәүлеләрҙән ғибарәт ине. Өс тәүлек буйына йүнләп ял итмәй барған полк оло юлға ныҡ һуҙылғайны. Туптарҙы тартып барыуы ла еңелдән булманы.

Полк башлығын билдәһеҙлек йонсотто. Алдар яуының ҡайҙалығы мәғлүм түгел ине. Күсемдең ярҙамға килгәнен ишетһә лә, унан да әлегә бер ниндәй хәбәр-хәтер юҡ. Сапҡындар ебәреү ҙә хәүефле.

Дүртенсе тәүлек тигәндә арттан Күсемдең алғасҡы һыбайлылары күренде. Һөйләшеүгә Күсем батыр үҙе килде. Үҙе менән Федор Гладышев башлыҡты, байраҡты ла алғайны.

Һөйләшеү шуны күрһәтте: Күсем батырҙың яулашырға, ҡан ҡойорға һис бер уйы юҡ. Ул килешеү яғында. Алдар батыр менән Хохлов полковник араһындағы һөйләш, араҙашлыҡты ул үҙенә алырға әҙер. Күсем аманатлыҡҡа полковниктан илле һалдат һорай, үҙе илле кешеһен бирә. Хохлов полкын Өфөгә кире борорға тейеш.

Ләкин полковниктың кире боролорға самаһы юҡ. Ул тауыҡ биреп ҡаҙ алмаҡсы. Шунан баҙ ҡаҙмаҡсы: Күсем батырҙың аманаттар алмашыу, һөйләшеү шартын ҡабул итһә лә, батырҙы алдап, Гладышев ярҙамында аманат һалдаттары менән уның сиреүен үҙенә буйһондороп, барына үҙе баш булып, Алдарға ташланырға эске ниәте.

Хәл ҡырҡыу: хәйлә еңерме, ҡеүәт-таҫылмы? Хохлов илле һалдатын ебәрә Күсемгә аманатлыҡҡа. Күсемдән дә илле һыбайлы айырып алына. Полк оҙон юл буйына һибелеп ялға туҡтаған.

Тәүҙә алда бер төркөм һыбайлыларҙың сабыш килеүе күренә, ҡыйҡыу тауыштары ишетелә. Һалдаттар улай-былай иткәнсе, сабыуыл алғы рәттәгеләр араһына килеп тә инә, ҡылыстан сабыш, атыш ҡыҙып та китә. Полк буйлап ығы-зығы, буталыш ҡуба, борғо тауышы сыға, барабан ҡағыла. Остағыларҙы ҡылыстан ҡыйып, тапап, иҙеп һыбайлылар уртағараҡ йомола. Иҫ-аҡыл йыйып өлгөргән һалдаттар мылтыҡтан атырға тотона, арбалар түңкәреп, бер нисә урында тотҡар яһала. Тупсылар туптарын яйларға, ҡорорға булаша. Офицерҙарҙың әле бында, әле тегендә һөрәне, командаһы ишетелә. Атыуҙан атлыларҙың ауып төшкәне күренә, ҡылысҡа ҡылыс бәрелгәне ишетелеп ҡала.

Шул саҡ юлды ике яҡлап боҫҡон һыбайлылар, йәйәүләләр ябырыла. Оборона тоторға самалаған һалдаттар, драгундар араһында буталыш китә. Күптәр һөңгөгә сәнселеп ауа, ҡылыстан ҡыйыла. Тырым-тырағай ҡасҡандарҙы баҫтырыу башлана. Боҫҡон яуҙы боҫторор ти, күптәре ҡоралын ташлап ҡаса, ергә боҫа.

Һайлам нөгәре менән Алдар батыр уртала көймәләр күренгән, түңкәрелгән арбалар менән уратып алынған, атыш көсәйә барған иң урталыҡҡа бәреп инә. Шул арауыҡта Алдар батыр офицерҙары араһында яурынында оло погондары ялтыраған, ҡулына һыҙма пистолет тотҡан полковникты шәйләп ҡала. Полковник ҡыҙып, матлап команда, бойороҡ биреп баҡырына. «Анау башлыҡҡа!» — тип ҡаты оран һалыуы була батырҙың, бер төркөм һыбайлы көймә яғына ябырыла. Атыуҙан бер нисә ат түкмәсеп, эйәләре алға осоп барып төшә. Ҡылыстар ҡылысҡа, мылтыҡҡа сатраш килгән иң буталыш тошҡа Алдар батыр ҡыҙған атын йән-фарман саптырып, үлектәрҙе, ауған аттарҙы һикертеп үтеп етеүе була, аты үрәпсеп киткән ыңғайға ялтырап, ялтанып ҡалған полковниктың погондары менән ҡуша яурынына ҡылысын умыра һелтәп тә өлгөрә. Шул мәлдә һөңгөгә ҡаҙалып аты ауа, батыр үҙе бер яҡҡа янтайып барып төшә. Батырын ҡурсып, йәшен тиҙлегендә дүрт-биш һыбайлы арага инә. Йәлп иткәнсе уны икенсе атҡа ла атландырышалар.

Атыш, сәнсештең иң ҡыҙған урынынан ҡурғып, батырҙарын ҡалҡандай ҡаплап, яҡын ярандары Алдарҙы яндағы бер ҡалҡыуға сығарғанда, яу майҙаны әле мәхшәр хәлендә ине. Көймә тирәһендә ҡаты атыш, үлемешле алыш бөтмәгән. Күп һыбайлылар алға әллә ҡайҙа үтеп киткән. Юл өҫтөндә, юл тирәләй үле кеше, үле ат кәүҙәләре тулып ята. Яралыларҙың аһлап ыңғырашҡаны, йөрәк өҙгөс өндәре иңрәп тора. Тиреҫ яҡлап оран, шау-гөр тауыштары килә. Ҡайҙалыр атыш бара.

Хәлде асыҡлар өсөн шул атыш тарафына Алдар бернисә кешеһен ебәрҙе. Улар оҙаҡламай һөйөнөслө хәбәр менән килделәр: Өфө полкы тарап үтелгән. Уның сардауылын, ҡасҡан һалдат, драгундарын Күсем батыр ҡырған. Яралы Хохлов бер төркөм һалдат-офицерҙары менән генә ҡасып киткән. Күсем уларҙы ҡыуа ебәргән. Ҡалғандар ҡасҡан-боҫҡанды эҙәрлекләү, ҡарыулашҡанды ҡамау менән мәшғүл.

Угаса ҙур сиреүе менән Күсем батыр үҙе лә килеп етте. Алдар батыр һыбайлылары ла йыйыла башланы. Ике батыр кәрешеп, һуғышсыларҙы бер үҙән буйына тупларға, ял бирергә, еңеү шәрәфенә йыйын йыйырға ҡарар ҡылдылар. Шул уҡ ваҡытта ике тарафҡа һаҡсы отрядтар ебәрергә, үлектәрҙе йыйып күмергә, яу улъяһын барларға бойоролдо.

Яу үткәндең өсөнсө көнөнә Йөрәктау янында йыйылды йыйын. Күсемдең биш мең, Алдарҙың өс мең кешеһенән торған сиреүе, тирә-яҡтан йыйылған былай халыҡ әллә күпме ерҙе ҡаплап, диңгеҙҙәй алҡынып-тулҡынып ята ине. Тулҡынырлыҡ та шул — еңеү шатлығы ҙур ине: дошмандың регуляр полкы юҡҡа сығарылған, ҡулға биш туп, меңләп мылтыҡ, бүтән ҡорал-ярак төшөрөлгән. Күп ир-егеттәр тағы атҡа атланған, көрәшкә таярланған. Тимәк, күмәкләгәндә аҡ батша ғәскәрен еңергә, иркенде яҡларға мөмкин икән.

Шулай ҙа оло байрам яһап торорға форсат та юҡ, иртәрәк тә ине әле. Олораҡ, ауырыраҡ яуҙар алда ине. Шуға күрә батырҙар теҙгенде ҡыҫҡа тоттолар. Сиреүҙе ял иттереп, ҡыуанысты уртаҡлашып алдылар ҙа алдағы яуҙарға оран да һалдылар: өркөтөлгән дошмандың алҡымынан алырға — Ҡазанға яу менән барырға!

Алдар батыр өс мең һыбайлыһын Күсем батырға ҡушып, Ҡазан тарафына яуға оҙатты. Үҙе Өфө яғына сиреү тупларға йүнәлде. Оҙаҡламай Башҡортостандың дүрт юлы буйынса ҡупҡан яу Ҡама яны ныҡытмаларын емереп, Зәй, Яңы Шишмә, Минзәлә ҡәлғәләрен алып, Ҡаракүл, Сарапулды ҡамап, Ҡамаға сыҡты. Күсем-Алдар сиреүе, Алабуға ҡәлғәһе янында Ҡаманы кисеп, Ҡазанға 40—50 саҡрымдар ғына ҡала ҙур лагерь ҡороп туҡталды. Ҡазанға бер көнлөк юл Саурыш ауылында уларҙың штабы урынлашты. Баш күтәреүсе башҡорттарға татарҙар, сыуаштар, мариҙар ҡушылды.

Ҡазан губернаторының, батша түрәләренең алҡымынан алыр алыш яҡынлашты. Оло хафаға төшөп, шыр ебәрҙе былар. Ҡазан коменданты Кудрявцев өҫтәмә ҡораллы ярҙам һорау һылтауы менән Мәскәүгә тайҙы. Унан әҙ генә

отряд менән кенәз Петр Хованский килеп төштө. Ҡазанда үҙ-ара тартыш китте.

Восстаниесылар яғы ла тыныс түгел ине. Тылда Өфө воеводаһының төрлө отрядтары боласыларҙы эҙәрләкләп йөрөй: әле тегендә, әле бында бәрелештәр булып тора; карателдәр үткән ерҙә ауылдар төтәп ҡала. Баш күтәреүселәр батша яҡлы феодалдарға һөжүм итә, йорт-ҡураһын туҙҙыра, мөлкәтен талай. Төрлө ерҙәрҙәге бәрелештәрҙә ике яҡтан да күпләп кеше ҡырыла.

Ҡазан тирәһе ҡаҙан урынына ҡайнай. Әле бер ауылды батша ғәскәрҙәре килеп баҫа, әле икенсе урындан уларға баш күтәреүселәр һөжүм итә. Ауылдар ҡулдан-ҡулға күсә, ҡәлғәләр яна, сиркәүҙәр емерелә, мәсеттәр үртәлә.

Восстаниелар үҙәге Саурыш ҡырмыҫҡа иләүендәй мыжғый. Төркөм-төркөм һыбайлылар яуға ебәрелә, булғандары йонсоп, һирәкләнеп кире ҡайта. Ауылға алыҫтан һәм тирәйүндән мылтыҡ, киҫтән, балта менән барынса ҡоралланған крәҫтиәндәр килә тора. Ҡыш булһа ла, штаб ишеге йүнләп ябылмай тиерлек: берәү сыға, икәү инә. Эстә шау-шыу, ултырыш терәр урын юҡ.

Бына шундай киҫкен боларыш саҡта ун бишләп һыбайлы менән Алдар батыр килеп төштө Саурышҡа. Алдағы яуҙарҙың яҙмышын хәл итер хәрби кәңәшмәгә саҡырылған ине ул асылда. Бөтә хәрәкәткә етәкселек, төп башлыҡ мәсьәләһе лә уғараҡ төбәлгәйне.

Алдар батыр бер нисә яраны менән килеп инһә, штаб эсе мыж килеп тора. Күсем батыр менән Исмәғил абыҙ бер подъячий менән тылмастан һорау алалар, дөрөҫөрәге, уларҙы ҡыҫмаҡлап баралар. Күсем батыр, тирә-янындағы яран-дары тамам ҡыҙған. Килгәндәр күрешеп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашып алғас, әлеге боларыштан шул аңлашыла төштө, хөкүмәт менән һөйләшеп килешеүҙе воеводалар боҙған икән, ә вәкилдәре баш күтәреүселәрҙе буйһонорға өндәй. Берәүҙәр буйһоноуҙы, икенселәре көрәште яҡлай.

Күсем батыр, килгән яуҙаштарына аңлатырға теләгәндәй, һөйләп китте:

— Батша ғәскәре башлығы кенәз Петр Хованский менән яулашыуҙы туҡтатырға килешеү булғайны. Кенәз батша хәҙрәттәре исеменән мир, ярлыҡау, әүәлге хоҡуҡтарыбыҙҙы вәғәҙә итте. Күндек. Осрашырға, һөйләшергә һораныҡ. Ризалыҡ биреп, вәкилдәрен ебәрҙе. Ә үҙе килешеүҙе боҙоп, беҙгә һөжүм ҡылды, ауылдарҙы яндырҙы, мал-мөлкәтте талап китте. Мамонов тигән бер башкиҫәре биш ауылды үртәне, кешеләребеҙҙе үлтерҙе.

— Ә был поп менән тылмас, эйәрсендәре һөйләшеү ти-

гән булып, араға инеп шымсылыҡ ҡылалар, — тип өҫтәне Исмәғил абыҙ. — Улар вәкил түгел — шымсы.

Электән ныҡ ҡыҙған Мәскәү Уразай батыр түҙмәне — хәнйәрен алып, подъячийҙарҙың боғаҙына терәне:

— Суҡынмыш тылмас, әйт, побың ант итһен! Хыянатсының хәҙер йәнен йәһәннәмгә ебәрәм! Ғәйепһеҙ бәндәләрҙең хәләл ҡаны өсөн.

Кенәздән вәкил булып килгән өс татар байын да, тылмасын да дөрөп бер ергә һырыҡтырҙылар. Ғауға ҡуҙғалды:

— Аҫырға кәрәк үҙҙәрен!

— Мамоновын тотоп бирһендәр!

— Кенәз үҙе килһен!

— Шымсыларға — үлем!

Ҡапыл Алдар батыр аяғына тороп баҫты ла бер аҙ әйелеберәк Күсемдең ҡолағына ниҙер шыбырланы. Күсем: «Быларҙы сығарып ҡарауыл аҫтында тотоғоҙ!» — тине, бойороп. Уғаса тауыш та тынғандай булды.

— Йәмәғәт, — тип асыҡ һәлмәк тауыш менән һүҙен башланы Алдар. — Ҡоро ғауғала файҙа юҡ. Вәкилдәрҙе тотоп үлтереү ҙә ирлек булмаҫ.

Яҡшы һүҙ яу туҡтатыр, тигән боронғолар. Килешеү хаҡында тағы һөйләшергә кәрәк. Хованский кенәз исеменә хат яҙайыҡ, шарттарҙы яҡшылап аңлатайыҡ. Хатты үҙебеҙҙән ике кеше әлеге вәкилдәрҙең икеһе менән кенәзгә илтер. Вәкилдәрҙең ҡалғаны аманат булыр.

— Һөйләшеүҙең ни менән бөткәнен күрҙек бит инде, — тине, һүҙҙе бүлеп, Уразай батыр. — Улар алдап беҙҙе ҡырып бөтөргә самалай. Яу сабырҙан кире ҡайтҡан яман. Яуҙан аяр йәнебеҙ юҡ — яулашмай көн булмаҫ. Йә йән, йә мал — Ҡазанға яу менән!

Арала: «Дөрөҫ, хаҡ һүҙ: Ҡазанға! Ҡазанға!» — тигән тауыштар ишетелде.

— Яумы, мирме мәсьәләһен былай аяҡ өҫтө генә хәл итеп булмаҫ, йәмәғәт, — тине, һүҙен дауам итеп, Алдар.— Уны хәрби кәңәшмә хәл ҡылыр. Тик шуны самалағыҙ: яуға, Ҡазан һынлы Ҡазанға көсөбөҙ етерлекме һуң? Таш диуар алдына етеп, себен урынына ҡырылыуҙа ни мәғәнә? Тупҡа уҡ менән генә барып булмай. Бер ҡарыуға — унда йөҙ ҡарыу. Алдыңдан артыңды ла ҡара: арт асыҡ бит. Өфөнән беҙгә ҡаршы тағы полк килә.

Бая әйткәнемсә, һөйләшеп килешеү юлын эҙләйек, йәмәғәт, Питер батша хәҙрәттәренең кенәз алып килгән указы бар. Баш ороу, ярлыҡау, элекке хоҡуғыбыҙҙы тотоу хаҡында. Кенәздең үҙе менән тиҙерәк күреп һөйләшергә кәрәк. Кенәз һүҙе тылмас һүҙе түгел.

Икенсе көндө хат яҙып кенәз Хованскийға ебәрҙеләр. Кенәздең Саурышҡа үҙе килеүен үтенделәр. Ләкин кенәз яуап хатында указды дөрөҫләү менән генә ҡәнәғәтләнде. Ярлыҡау, мир вәғәҙә итте.

Февраль аҙаҡтарында Саурышта хәрби кәңәшмә булды. Унда Күсем, Алдар, Уразай батырҙарҙан, Исмәғил, Туҡай абыҙҙарҙан, Ирмәк, Мәмәт старшиналарҙан тыш татар, сирмеш, ар яу башлыҡтары ла ҡатнашты. Оҙаҡ ҡына бәхәс, тартыштан һуң Алдар батыр фекере өҫтөнөрәк сыҡты: Ҡазанға яу менән барырға көс бик самалы, тиккә ҡан ҡойоуҙа, гүмерҙәрҙе киҫеүҙә мәғәнә юҡ. Кенәз менән килешергә, батша хәҙрәттәренең ярлыҡауын көтөргә.

1708 йылдың март башында Ҡазандан утыҙ-ҡырҡ саҡрымдар самаһында походты туҡтатып, баш күтәреүселәр отряды тыуған яҡтарына, ауылдарына таралды. Ләкин күп кенә татар, сирмеш, сыуаш крәҫтиәндәре, карателдәр эҙәрлекләүенән ҡурҡып, ғаиләләре менән Алдар-Күсем сиреүенә ҡушылып Башҡортостан эсенә, Ағиҙелдең түбән ағымына, Дим буйҙарына, хатта Һаҡмарғаса киттеләр, башҡорт араһында төпләнделәр.

Дүрт йылга һуҙылған яу үҙенекен итте — батша хөкүмәте баш күтәреүселәрҙең күпселек талабы менән килешергә мәжбүр булды: элекке хоҡуҡтар һаҡланды, иҙеү-ҡыҫым әҙерәк еңеләйә төштө, ил-йорт күпмелер тынысланып, иркенерәк тын алып ҡалды.

## 4

Һыуҙан ҡоро ҡотолғандай булды Алдар батыр. Һыуҙан ғынамы, ҡан ҡойоштоң үҙенән. Әллә дөйөм ярлыҡауҙың шойҡаны тейҙе, әллә Петр батша хәҙрәттәре ҡаршыһындағы элекке хеҙмәттәре һаҡланы, күпме яу башлыҡтары тегеләй йә былай хөкөмгә, язаға эләккәндә, баш боласы Алдарға батша хөкүмәте артыҡ ҡағылырға баҙнат итмәне. Ул үҙе лә бер ваҡытты, тарих майҙанынан ғәйеп булғандай, күҙгә-башҡа бигүк салынып барманы, барына күнеп, йыуашайып, һәүетемсә генә донъя көткәндәй итте. Ғаилә ишәйҙе, йорт-ҡура бөтәйҙе, дуҫ-иш күбәйҙе. Дан шәрәфе үҙенән алда йөрөнө. Батыр данына ҡарағанда аҡыллы аҡһаҡаллығы алғырлыҡ алды хәҙер.

Ил-йорт барыбер һил түгел ине. Оло янғындан һуң, ут ҡайҙалыр төпкәрәк китеп, эстән көйрәп ятҡан шикелле, күпмелер ваҡыттан әле бынан, әле тегенән ләүкеп тә киткеләй ине.

Ат яҡшыһы арҡанда, ир яҡшыһы тарханда тиһәләр ҙә, Алдар арҡаны ныҡ-ҡа терәп күп ята алманы. Ил-күсе һулҡылдағанда, батыр йөрәген май бөрөрмө ни.

Батша вәғәҙәләре тиҙ онотолдо. Урындағы түрәләр тағы ҡыҫымды көсәйтте. Завод һалырға тин күп ерҙәрҙе тартып ала башланылар. Һалымдарҙы арттырҙылар.

Ҡарға күҙен ҡарға суҡыймы, элекке яуыз түрәләрҙең башбаштаҡлыҡтарына бер ни ҡылманылар. Береһе китһә, йәнә залимыраҡтары килде. Алдар түҙмәне, башҡорт ил-йортоноң атаҡлы аҡһаҡалдарын, старосталарын йыйып, дүрт юл халҡы исеменән Петр батшаның үҙенә, Сенатҡа яңы шикәйәт яҙышты. Уны ышанысла кешеләр арҡылы Мәскәүгә ебәрҙеләр. Күпмелер ваҡыт үткәс, теге ҡанһыҙ, иманһыҙ Сергеев, Аристов, Жигаров яуыз түрәләргә, башҡорттарҙы ҡыҫҡан-рәнйеткән өсөн, тикшереп хөкөм итеү эше башланған икән тигән хәбәр килде. Икәүһен төрмәгә япҡандар. Сергеевын аҫырға хөкөм иткәндәр, имеш тигәне лә ишетелде. Был күпме дөрөҫтөр инде, әллә ҡайҙа Мәскәүҙәге хәлде нисек беләһең, шулай ҙа шикәйәттәренең ятып ҡалмауына Алдар ҡәнәғәт ине. Ирек, гәҙеллек өсөн көрәштә уғы ла, ҡауырый ҡәләме лә кәрәк.

Алдар күп нәмәләр хаҡында баш вата. Батшаларҙан ирек даулау еңел түгел. Яу менән генә алдырырмын тимә. Бер яуға унда мең яу. Ана күпме ир-егеттәр башын һалды, йорт-ер ҡыйралды, көткән ирек килмәне. Берлек юҡ, ҡуштан түрәләр тамырға балта саба.

Элекке яу батырының уйҙары киңлеккә буйлай: күршетирә халыҡтар менән берләшкәндә, бергәләп яу сапҡанда нисек булыр икән? Ишле илдә өмөт бар. Ҡыр-ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ хандарынан ярҙам һорағанда?

Түлле урынынан тағы ҡупты Алдар. Бер йәйҙе Мысыр улын, ике ир-егетен ныҡлап юлға әҙерләне лә ҡарағалпаҡ иленә ҡарай юл тартты. Ике айға һуҙылған ыҙалы оҙон юлдары йүн генә булды: ҡарағалпаҡтарҙың Ишем ханына етеп һөйләштеләр. Башҡорттарға ла баш булырға самалап, Ишем хан улы Солтанморатты башҡорт ханы итергә, уларға ярҙам — улы менән бер мең һыбайлы сиреү — ебәрергә вәғәҙә бирҙе.

Ҡайтышлай ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың Бөгенбай батырына һуғылырға ине уйҙары. Ләкин батырҙың йәйләүлектәренә етеп, Жим йылғаһы буйына ҡуна туҡтаған ерҙәрендә юл баҫҡынсыларға юлыҡтылар. Ун бишләп ҡаҙаҡ һыбайлыһы аңғармаҫтан быларҙы килеп тә баҫты, аяҡ-ҡулдарын бәйләп тә ташланы. Быларҙың башҡорттар икәнен белгәс, башлыҡ урынындағы бер атменәре тағы үсәшеп ярһып китте.

— Ә, истәктәрме ни әле? Ҡулыма ҡаптығыҙ, былай булғас! Ҡарымтаның ҡонон ҡайтара алмай үсем ҡарғый ине. Мин барығыҙҙы ла Хиуаға ҡол итеп һатам. Олаҡһын башығыҙ ҡоллоҡҡа!

Аҡса-малға алышырға, Бөгенбайҙы күрергә теләү ҙә һөҙөмтә бирмәне. Бер нигә ышанманы ҡараҡ башлыҡ. Батырҙың туры атында ҡалды бер әмәле. Айырып алып китерҙән алда аты менән хушлашырға үтенде ул. «Атыңнең менән мәңгегә хушлаш, алайһа!» — тине ҡараҡ, көлөп.

Ҡулы-аяғы бәйле, әммә баҫып торған Алдарға туры атын килтерҙеләр. Аты хужаһын күреп кешнәп ебәрҙе. Йүгәнен ҡаты итеп тотҡан ҡараҡты һөйрәкләгәндәй хужаһына яҡынланы. Алдар башын атының башына терәп, һағышланып хушлашҡандай итте лә башы менән ат тотоусыны ҡаныл һөҙөп тә, шундуҡ әсе һыҙгырып та ебәрҙе. Теҙгендән ысҡынған арғымаҡ ажғырып һикереп сабып сығып та китте. Артынан ҡыугын төшөп ҡараны. Далалағы ел ни, ат ни, ул гәйеп тә булды (өйрәтелгән арғымаҡты ҡараҡ ҡалай белһен).

Ҡараҡтарға хәҙер барыһы ла ҡуш күренә башланы. Тиҙерәк был тирәнән тайырға, Хиуа ҡарай йүнәлергә йәһәтләнделәр. Тик һуң ине инде: ярты көн барҙылармы-юҡмы, үҙҙәрен күп һыбайлылар уратты, тотҡондары менән үҙҙәре лә тотҡонга әйләнде.

Көткән өмөт ерҙә ятҡан икән. Бөгенбай һыбайлылары ине ул. Ажар тураттың эҙенән килгәйнеләр улар.

Бөгенбай батыр менән Алдар шулай сәйер осраштты. Әсир булып. Ҡаҙаҡ батыры уның ҡотҡарыусыһына, аҙаҡ яҡын дуҫына әйләнде. Батырҙың Ярҡамыш буйы йәйләүендә оҙаҡ һөйләштеләр. Ике халыҡты ла һөжүмдәре менән йыш ҡына йонсотҡан ҡалмыҡ хантайшыларына бергәләберәк көрәшергә һүҙ беркеттеләр.

Бөгенбай батыр ҡыҙыҡһынып китеп, Алдарҙың Ҡырым, Азов походтары тураһында һорашты, үҙе хантайшылар менән яулашыуынан бер алышты һөйләп бирҙе.

— Ҡалмыҡтарҙың Шуно-Дабо тигән бик ҡеүәтле баһадирҙары бар ине, — тип алып китте ул. — Унан бөтәһе лә уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡалар ине. Бер шулай далала япа-яңгыҙ юлдар тап килде беҙҙең. Күрәм, аҡ яллы ҙур атта — Шуно-Дабо баһадир. Янында — ҡалҡан, билендә — алдаспан ҡылыс. Белеп алдыҡ бер-беребеҙҙе ике яҡтың ҡан дошмандары, атаҡлы батырҙары. Китте далала алыш. Ҡылыстарҙан саҡҡылар осоп торҙо. Үҙебеҙ әлһерәп, аттар бышлыгын бөттө. Шулай ике бейә һауымы ваҡыт үткәндер. Беҙҙе күреүсе лә, белеүсе лә юҡ, ә беҙ ахмалға төшөп алышабыҙ. Аҙаҡ аттарҙы ташлап, йоҙроҡ һугышына күстек.

Бер-беребеҙҙе быуып-иҙеп ташлар мәлдәр булды. Ниһайәт, хәлдән тайҙыҡ. Ҡөстәр бер сама икәнен тойоп, нисектер, имен-аман айырылып киттек. Хәйер, айырылғанда баһадир һыр һәм һүҙ бирмәй киҫәтеп ҡуйҙы: «Бөгенбай батыр, намыҫлы алыштың. Ата-бабалар йолаһын боҙманың. Иҫән ҡалыуыңа ҡыуан. Әммә миңә икенсе осрай күрмә. Ғүмереңдең аҙағы шул булыр!..»

Нишләйһең инде, яҙмыш беҙҙе икенсе тапҡыр яу яланында осраштырҙы. Яу яман үлемесле булды. Ҡалмыҡ сиреүе ҡырылып һырт биргәндә, арттағы рәттә тап булды бит Шуно-Дабо нойон. Күреп, атын миңә борҙо. Мин бер яҡҡараҡ тайшандым. Китте тағы алыш. Ҡулымда алты ҡырлы нарзай һөңгө ине. Шуның менән, нисектер, баһадирҙы барыбер яралағанмын бит. Ул аты менән сигенеп һыуға төштө, көс-хәл менән йылғаны йөҙөп сыҡты. Мин теләһәм, артынан уғымдан атып үлтерә инем. Батыр намыҫын һаҡлап, ҡаты яралы баһадирға теймәнем. Ләкин шунда яман тамашаның таныҡына әйләндем: Шуно-Дабо ярға ғына сыҡҡайны, әллә ҡайҙан ағаһының улы Галдан-Сәрән хантайшы күренде. Башы аты елкәһенә һалынып төшкән яралы баһадирына һырттан ҙур суҡмар менән тондорҙо. Мейеләре сәсрәп киткән баһадирҙың кәүҙәһе ярға ауып, йылғаға тәгәрәп төштө. Мин йәйәгә уҡты һалғылағансы, хантайшы күҙҙән дә юғалды. Аҙаҡ ишетәм: ҡалмыҡтарҙың ханы Сыбан-Рабтан да үлгән, уны алыштырыр Шуно-Дабо баһадир ҙа юҡ хәҙер. Кем хан тиһең, әлеге Галдан-Сәрән ҡалған. Бына нисек итеп килде ул ҡалмыҡ тәхетенә. Бәхете — минең ҡулдан ысҡынды. Инде үкенәм, шул ысҡынғанды күпме ҡан-яу менән түләргә тура килә хәҙер...

Шпо оҙон сәфәренән һуң Алдар тағы бер-ике тапҡыр алыҫ юлға сыҡты. Иләүенән өсәр-дүртәр айҙар юғалғылап торҙо. Хатта ырыуҙаштары ла уның ҡайҙа йөрөгәнен йүнләп белмәй ине. Уны Кубангә лә барып еткән икән, хатта Мәскәүҙең үҙендә Петр батша янында булған имеш, тигән хәбәр ҙә ишетелеп ҡалды. Һәр хәлдә, юламан Алдар сит-ят күҙҙәрҙән юлын ябып йөрөргә өнәтмәне.

Өс-дүрт йыл эсендә ул ниндәй генә юлдар, илдәр кисмәгәндер, кемдәрҙе генә күрмәгәндер, — уны бары үҙе белә, — бына бер заман 1722 йылдың йәй башында Алдар батыр алты йөҙ атлы сиреү менән Өфө ҡалаһы янында пәйҙә була. Янында ҡарағалпаҡтарҙан килгән Солтанморат хан, уның ике йөҙләп үҙ нөгәрҙәре. Ҡыр-ҡаҙаҡтарҙан Ҡәҙергол башҡорт башлығында дүрт йөҙ һыбайлы. Хан сафында ебәк менән үрелгән ат ҡыллы тыу елберләй.

Шул саҡлы сиреү йыл да май аҙағында Өфө янында йыйылыр бөтә башҡорт йорт-иле йыйыны көндәренә дәл

итеп тупланғайны. Шунса ғәскәр ил аҡһаҡалдарын, күп старшиналарҙы хайран итте. Бер ҙур көс-ҡеүәт булып, шунса ҡоралды-яһаулы сиреү яндарында торгас, вәкилдәр дәртләнеп батырланып китеп, йыйын исеменән хөкүмәткә үҙ хоҡуҡтарын яҡлар байтаҡ талаптар ҡуйып ташланылар. Башҡорт биләмдәрен ҡыҫыуҙы, тартып алыуҙы туҡтатыу, һалымдарҙы аҙайтыу тураһында батшаға хат яҙҙылар. Урындағы администрацияға ҡәтғи талап белдерҙеләр. Күпме башҡорттоң, татарҙың башын ашаған, ил-йортҡа бәләҡаза килтергән бер нисә түрәне, Өфө судьяһын хөкөмгә тарттырыу мәсьәләһен күтәрҙеләр.

Бөтә башҡорт йыйыны ҡарарын Өфө воеводына еткереү һәм үтәтеү эше Алдарға тапшырылды.

Яуга әҙерлек хәлендә, мең кешелек сиреүҙе Алдар Өфө тауы ҡаршыһына уҡ килтереп тупланы. Өфөнө дүрт яҡтан да уратып, бар юлдарға дозорҙар, юртауылдар[1] ҡуйҙы. Йыйын вәкилдәрен дә тараттырманы. Үҙе Ҡилмәк абыҙ, Йосоп батыр, Туҡсура мулла, тағы ике староста, һаҡсыһағауылдар менән барыһы ун һыбайлы вәкил булып Өфөгә йүнәлде. Аҡ флаг менән килгән һыбайлы илселәрҙе ике ҡат имән ныгытмалар менән уратылған ҡалаға үткәрҙеләр. Ҡаланың яуга әҙер хәлендә торғаны күренә. Һәр аҙымда — һалдаттар, ныгытмала — туптар, тупсылар. Өфө воеводаһы Шаховский кенәз илселәрҙе хәүефләнеберәк ҡаршыланы. Һөйләшеү ҙә ҡырҡа төҫ алды. Вәкилдәр йыйын ҡарарын воеводага ярым ультиматум рәүешле ҡуйҙылар. Ҡилмәк абыҙ баштаға шикәйәт хаты менән барыр өсөн биш кешегә паспорт әҙерләтеүҙе, вәкилдәрҙең именлегенә яуап биреүҙе талап итте.

— Ә бына Өфөлә әле йәшәп ятҡан өс хаким-судьяның икеһен башҡорттар хөкөмөнә биреүҙе талап итәбеҙ, — тине Алдар. — Закон буйынса бер генә хаким тейеш. Хәҙер улар өсәү булып китте. Улар бер көнлөк эште ун көнгә һуҙалар, башҡорттарҙан алым алып йөҙәтәләр. Алым өсөн үҙ-ара талашалар, эште юрый һуҙалар, тотҡарлыҡ яһайҙар. Шундай баш-баштаҡлыҡтары, өсләтә алым алғандары өсөн, улар халыҡ хөкөмөнә хаҡ, икеһе бөтөнләй артыҡ.

— Судьялар рус администрацияһының эше, — тине Шаховский. — Уның менән асессор Андрей Лихачев шөғөлләнә.

— Улай икән, уларҙың алым алыуҙары, бүтәнсә закон боҙоуҙары тураһында күп дәлилдәребеҙ бар. Хөкөм ҡарарына тиклем уларҙы башҡорттар араһына илтеп тикшерергә, күҙләштерергә кәрәк. Ә асессор Андрей хөкөмдар

---

[1] Юртауылдар — атлы разведчиктар.

була алмай. Ни өсөн тиһәң, уның үҙенең мутлыҡтары күп. Үҙе хөкөмгә тарттырылыр кеше.

— Яла был! — тип аҡырып ебәрҙе Андрей Лихачев үҙе, — тотоп, үҙҙәрен хәҙер үк төрмәгә ябырға кәрәк.

— Ҡыҙмай тор, асессор түрә, ҡылған эштәреңә яуап бирергә тура килмәгәйе!

Өфө администрацияһының, бигерәк тә судьяларҙың һәм Андрей Лихачев, Иван Туменов асессорҙарҙың алымсаҡлығын, урлашыуҙарын, закон боҙоуҙарын яҡшы белгән Шаховский кенәз бер аҙ йомшай төштө. Хәйләләнеп йомшаҡ телгә күсте:

— Вәкилдәр, мин һеҙгә шуны әйтә алам: йыйындың ҡарарҙары менән яҡшылап танышайыҡ. Талаптарығыҙ хаҡ булһа үтәлер. Судья, асессорҙарҙың гәйептәрен тикшерергә вәғәҙә бирәм..

— Һөҙөмтәне, яуапты ҡасан алырбыҙ?

— Ҡәм тигәндә аҙна-ун көн.

— Был мөддәт [1] күп. Ләкин күбенә түҙгәнде унынына ғына түҙергә лә мөмкин. Тик шул шарт менән, Шаховский кенәз, — тине Алдар, — әгәр беҙҙең был талаптарҙы өс көн эсендә өйрәнеп ҡәнәғәтләндерерлек яуап бирергә тип ҡул тамғағыҙҙы һалһағыҙ.

Шаховский кенәз быға аптырашта ҡалып асыуланырға ла, ярһырға ла иткәндәйерәк булып торҙо ла өҫтәлгә һалынған талап ҡағыҙына йәһәт кенә һыҙмаҡлап, ҡулын ҡуйып, вәкилдәргә табан һирпеп ебәрҙе:

— Йә, хәҙергә хушығыҙ! — тип өҫтәне, тынысланырға тырышып.

Вәкилдәр воеводаның ҡул тамғаһын алып сығып киттеләр. Сығып күпме киткәндәрҙер, воевода бүлмәһендә дау ҡупты.

— Ниңә һеҙ воевода, кенәз түгелме, ебеп төштөгөҙ, Юрий Матвеевич? — тип ҡысҡырып һораны Лихачев. — Был ультиматумды ҡабул итеү бит. Боласыларға баш эйеү.

— Ярһыма, Андрей Трофимович! — тине кенәз. — Был бары маскарад ҡына. Финита ла комедия [2] алда.

— Нисек?

— Вәкилдәрҙең береһе лә станына ҡайтып етмәйәсәк. Уларҙы бер ун-ун биш минуттан атлы казактар һуясаҡ.

— Ә улар башы өсөн үҙебеҙгә яуап бирергә тура килмәҫме һуң?

---

[1] Мөддәт — срок, ара.
[2] Эштең аҙағы (*латинса*).

— Уныһы ла уйланган инде, Андрей Трофимович. Казактар һуя, мишәрҙәр яуап бирәсәк. Теләһәләр, мишәрҙәрҙән алһындар ҡондарын. Тик был ворҙар Өфө территорияһында ғына һуйылмаһын. Шул еткән.

Әммә Алдар администрация тирәһендәге ышаныслы кешеләре арҡыры был мәкерҙең булырын, теге өс һатлыҡ мишәрҙең икеләтә ике яҡҡа һатылыуы арҡаһында, алдан белгәйне инде. Шуға уның воевода тарафынан төҙөлгән сценарийының режиссураһын Алдар үҙе үҙгәртеп башҡарҙы. Ҡазактар засадаһы үҙе башҡорттарҙың ҡармағына эләкте. Йәнәһе, шау ҡуптарып һөжүм иткән мишәрҙәр ҡыуып ебәрелде. Вәкилдәрҙе һуйырға әҙерләнгән утыҙ ҡораллы казак башҡорт ҡоролтайы хөкөмө алдына баҫтырылды. Үҙ һәм утыҙ казағы башын һаҡлар өсөн Шаховский воевода ҡоролтайҙың бөтә талаптары менән килешергә мәжбүр булды. Батшаға шикәйәт хаты ебәрелде. Өфөлә бер судья ҡалдырылды. Ҡалған икеһе һәм асессор хөкөм тикшереүенә бирелде.

Шикәйәт хаты батшаға юлыҡҡандан һуң башҡорттарҙың байтаҡ ҡына талаптары ҡәнәғәтләндерелде. Өфө администрацияһы Шаховский воевода менән бергә барыһы тиерлек алыштырылды. Яңы воевода булып йомшаҡ тәбиғәтле, итәғәтле Иван Бахметьев килде. Яфа-яуызлыҡ бер аҙ артҡа сиккәндәй итте.

Ете йөҙөнсө йылдарҙа Россия батшалығы ҡаршыһында үҙ хоҡуҡтарын яҡлап яулашыу һәм даулашыуҙарында башҡорттарҙың был икенсе ҙур ғына еңеүе ине. Икенсеһендә лә шулай Алдарҙың өлөшө мул ғына булды.

## ИЛСЕ ИЛДӘР КИСЕРӘ

«Алдар тархан Тевкилев менән ҡырғыҙ-ҡайсаҡ ханы Абулхайырҙы бөтә биләм-ырыуҙары менән Россия империяһына подданствоға килтерҙе».

(Оренбург экспедицияһы указынан, 1734, декабрь)

### 1

Ятҡан таш мүкләнер, йөрөгән таш шымарыр тигәндәй, йөрөмтәл Алдар һис тынып ятманы.

Бер йылды батыр Сәйхундаръя[1] ҡарағалпаҡтарына өсөнсө тапҡыр барырға йыйынды. Был юлы алыҫ сәфәргә

[1] Сәйхундаръя — хәҙерге Сырдаръя.

ете һыбайлы, һигеҙенсегә еткән ҡыҙы Нәркәсен алды. Әлек барышлай, ҡарағалпаҡ Тайып батырҙың Теләнбиргән исемле улын оҡшатып, ҡоҙа-ҡоҙағый булышыу хаҡында һүҙ беректкәйнеләр. Ғәҙәти туйлашырға ҡарағанда Алдарҙың ниәте олораҡ ине: батырға батыр ул-ҡыҙ бирешеп, ҡоҙалыҡ ептәрен бәйләү, ил-йорт туғанлығын яңыртыу. Асылында ҡарағалпаҡтың данлы ырыу башы батыры менән ҡоҙалашып, айырылмаҫ яуҙаш, союздаш табыу ине. Оҙон ҡолаҡ өсөн оҙон сәфәрҙең дә сәбәбе бар: ул — ҡыҙ йәрәшеү.

Батырҙың уртансы ҡатынынан тыуған Нәркәсе, күп улдары һәм ҡыҙҙары араһында иң сибәре, иң иркәһе булыу өҫтөнә күберәк ага-энеләре менән уйнап сая тәбиғәтлерәк булып үҫте. Ағалары уҡ атыш уйнаһа, Нәркәс тә сәнкә атырга өйрәнде. Бергәләп йәйләүҙәрҙә ат ҡушаҡлап сапты, бейәләр бәйләште. Йыш ҡына ау-һөнәрҙән дә ҡалманы. Апа-һеңелдәренең ҡай саҡ, үсәшеп, «ирҙәүкә» тигән һүҙҙәрен дә ҡолағына элмәне. Үҙ һүҙле, ныҡыш, етеҙ булды ул.

Алдар ҙур эшкә һөйгән ҡыҙын юҡҡа ғына һайламагайны шул. Башы әллә ҡайҙа китер булһа ла, ҡыҙы ла күңде. Хатта ҡарағалпаҡтарға килен булып төшөүҙе үҙе бер сая ғорурлыҡ тип һананы.

Алыҫ юлға ныҡ әҙерләнделәр. Ете һыбайлының икеһе — Морат менән Муса — Алдарҙың өлкән улдары ине. Ҡәрәк-ярағын, килешле бүләк, йыуасаларын төйнәнеләр. Айырыуса йәрәшеләсәк ҡыҙҙың юл, кейем-һалымдарын тейешенсә һайлауға иғтибар иттеләр.

Һыуһыҙ сүл-сахралар аша ике аҙнаға яҡын һуҙылган оҙон юл ғазабын Нәркәс еңел кисерҙе. Булғандырмы, бошоноуын, үкенесен дә һиҙҙермәне. Ә Арал аръяғына Тайып батырҙың ҡамышлы тугай биләмәләренә килеп еткәс, әҙерлек буйынса, сәйәхәтендә үҙҙәре лә әрһеҙерәк юл кейемдәрен әрлеһенә алмаштырғас, бигерәк тә Нәркәсте яңы яһауҙан кейендергәс, барыһына ла байрамса төҫ инде.

Алдан хәбәр биргән ҡунаҡтарҙы Тайып батыр ырыуы ололап ҡаршыланы. Алда ике ағаһы уртаһында оҙон яллы йылгыр күк атта йәтеш ултырған Нәркәстең килеүе тамашаның тамашаһы ине. Уҡалар менән сигелгән, буй-һынына һылашып торған яңы камзул, бала итәкле атлас күлдәк, йылтырап торған аҡ ҡамсат солтан башлыҡ уға солтанат ҡиәфәтен бирә ине.

Ҡоҙалар аттарынан төшөп, ҡуш ҡуллап күреште. Булаһы кейәү, ҡайны, ҡайнага, ҡәйенбикәләр кәләш менән танышып сыҡты. Еңгәләр, үҙ йолалары буйынса, ҡәҙер-хөрмәтләп килен тирмәһенә Нәркәсте алып киттеләр. Ҡоҙалар, ырыу аҡһаҡалдары аҡ тирмәгә йыйылды.

Ыҙан-йолаһына килтереп, ике көн һырға туйын туйланылар ҙа ҡоҙа-ҡунаҡтар ҡайтырға таярланды. Бик иркенләп, оло байрамсалап ятыр заман түгел ине. Ҡаҙағстан, Ҡарагалпаҡстан ил-йортта хәтәр-хәүефле саҡ. Көнсығыштан жунғар ҡара яуы килә. Төркөстан, Сайран яҡтарында ҡаҙаҡ йәйләүҙәре туҙҙырылған, ҡалалар ҡыйратылған тиҙәр. Күп ырыу, халыҡ, йорт-ерен ташлап, Арал буйҙарына, төньяҡҡа ҡаса. Ҡарагалпаҡтар ҙа шомланып тора, яу-хәтәр көтә.

Юл хәүефле булһа ла, Алдар батыр Арал диңгеҙен көнсығыш ягалап ҡайтырға йыйынды. Уға бер ҡырғыҙ-ҡайсаҡ солтанын һәм Бөгенбай батырҙы күрәһе бар ине. Тайып батыр ҡоҙаларын хәүеф-хәтәр ерҙәрҙе үтеп киткәнсе Теләпбиргән менән дүрт һыбайлыһын оҙатыша ебәрҙе.

Дауыл алдынан булыр бер тынлыҡ кеүек, юл һил дә, шомло ла ине. Ҡамышлы туғайҙар, йәйләүҙәр буп-буш. Ҡом сәхрәләрендә ҡара көҙҙөң бары яман еле ыжғыра. Йөҙәр саҡрымға бер йән эйәһен күререм тимә. Ҡаҙаҡ белештәре солтан Ниязның да, Бөгенбай батырҙың да йәйләүҙәре бушап ҡалған булып сыҡты.

Өсөнсө төн юлда ҡунғанда көнсығышта Ҡыҙыл Ҡом сүлендә офоҡта ут шәүләләрен шәйләнеләр. Оҙата килеүсе ҡарағалпаҡ һыбайлыларының береһе әллә күпме ер барып, бының бик ҙур яу тупламы икәнен белеп ҡайтты. Сәфәрселәр йәһәт кенә ашап, йыйынып алдылар ҙа төн ҡараһында юлға ҡуҙғалдылар. Таң атҡансы юрттыра-саба оҙон юл үттеләр. Көндөҙ алыҫта бер төркөм ҡоралды һыбайлыларҙы күреп, эҙ яҙҙырып өсөн ситкәрәк тайпылдылар. Әммә кисенә тағы бер төркөмгә килеп төртәлделәр. Ун ике һыбай юлсы ҡотолорға теләп, ни тиклем сабып ҡарамаһын, ҙур төркөм быларҙы барыбер ҡамалап алды. Юлдаштарын ҡаплабыраҡ арттаныраҡ елгән Алдар батырга берәүһе етә килеп, ҡаҙау башлы оло суҡмарын һелтәйем тигәндә, ҡапыл атын шаҡарып, ике араға Нәркәс килеп инмәһенме. Ҡараңгыла ҡыҙ кешене шәйләп аптырап ҡалган ҡыугынсы суҡмарын бушатҡандай итте лә «апармай, кем син, солтанай!» тип һөрәнләне. Ҡамаған төркөмдөң ҡыр-ҡаҙаҡтар икәнен белеп, Алдар: «Беҙ Бөгенбай батырҙы эҙләүсе юлсылар» тине.

— Юлсымы, шымсымы — белепер! Бәйләгеҙ үҙҙәрен!— тип бойорҙо башлығы.

— Минең түрәгеҙгә әйтәһе кәрәк хәбәрем бар, — тиеүенә лә ҡарамай, Алдарҙың, бөтәһенең ҡорал-яраҡтарын һалдырып, үҙҙәрен эйәрҙәренә ҡуша бәйләп, күҙҙәрен томалап, төн ҡараһында ҡайҙалыр алып та киттеләр.

Бер саҡ Алдарҙы эйәрҙән бушатып, нәмәгәлер алып инеп, томалаған сепрәкте сисеп ебәрһәләр, ул бик иркен тирмә эсендә баҫып тора. Бер нисә шәмдәлдә май шәме яна. Ике яғында уҡ-һаҙаҡлы һағауыл. Аҡ тирмә түрендә ҙур кейеҙ келәм йәйелгән түшәк өҫтөндә ҡылыс танаулы, оҙонса битле, нескә ҡара мыйыҡлы ҡыр-ҡаҙаҡ ултыра. Һынына, ҡиәфәтенә, үҙен эре тотоуына ҡарап, «был ҙур түрә, ахры», тип уйлап алды Алдар.

— Һин кем? — тип ҡырт, ҡырыҫ ҡына һорау бирҙе был утыҙ йәштәр самаһындағы әҙәм.

— Мин ҡарағалпаҡ Тайып батыр улына ҡыҙымды бирмәгә барған яусымын. Башҡорт батыры Алдар! Ҡайтышлай белешем Бөгенбай батырҙы эҙләп килешем.

— Жаусымы, әллә жаучымы? — тине, һүҙгә ике мәғәнә һалып, был түрә. Унан ҡоралды һағауылын ымлап саҡырып, ҡолағына ниҙер шыбырланы. Шул арала теге ниндәйҙер бер кеше менән килеп инде. Алдар боролобораҡ ҡарауға һөйөнөсөнән ҡоласын йәйеп һөрәнләп үк ебәрҙе?

— Бөгенбай батыр! Аманмы, белеш?

— Аманмын, аманбыҙ, Алдар батыр!

Түрҙәге түрәнең ҡырыҫ йөҙөнә нур йүгергәндәй булды. Шулай сәйер осрашып танышҡандан һуң, Алдар батыр түрҙә ултырған кешенең ысындан да ҙур түрә — ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың Кесе урҙаһының башы Абулхайыр хан икәнен белде.

Хан эште ҡыҫҡа тотто. Башҡорт батыры яу яҡынлау хәбәрен әйткәс тә, хан уға артыҡ иҫе китмәгәндәй генә, Бөгенбай башлыҡҡа бер нисә бойороҡ бирҙе, юртауыл ебәрергә, дозорҙарҙы көсәйтергә, һул ҡанатҡа төнөн ҡуҙғалырға боҙорҙо. Алдарға иртәнгә хәтле хәл йыйырға, бүтән юлдаштарын да, бауҙан бушатып, тирмәләргә урынлаштырырға ҡушты бағауылдарына.

Ниндәйҙер бер тынсыу ҡыҫыҡ тирмәлә оҙаҡ йоҡлай алмай ятты Алдар. Тирмә тирәләй һаҡсыларҙың йөрөүен тойҙо (тимәк, ул тотҡон икән әле). Уйы хан тирәһендә уралды.

...Абулхайыр тураһында төрлөһөн ишеткәне бар. Белеүенсә, ул хан нәҫелдәренең Кесе йөҙ тармағынан. Бүләкәй-Ҡуян ырыуынан. Уны Кесе урҙа менән Урта урҙаның төп ырыуҙары 1710 йылда Бәҙәм йылғаһы буйындағы Урҙа башы тауында ҡоролтайҙа хан итеп һайлағандар. Солтандар, аҡһаҡалдар аҡ кейеҙҙә күтәреп, ҙур хан итеп ололағандар, тоғро хеҙмәт итергә бата биргәндәр. Йола буйынса Өлкән урҙаның Ягалбайхан тармағынан сыҡҡан аҡһөйәк зат ҡына бөтә урҙаға уртаҡ өлкән хан була алһа ла, Абулхайыр уға теймәҫ оло дәрәжәне тәүҙән үк үҙе дәғүәләй башлаған. Бөгенбай, Яныбәк, Есем батырҙарға таянып,

Урта һәм Өлкән урҙаларҙың Тәүкә, Семекәй хандарын бик үк һанга һуҡмаған, уларға ла үҙ хөкөмөнән йөрөтөргә тырышҡан. Хәйләкәр һәм аҫтыртын Абулхайыр хан әллә ниндәй хәйләләргә, мәкерлектәргә лә барған тиҙәр. Үҙенә ҡаршы килгән солтандарҙы юлынан алып ташлаған, бәғзеләрен һатып алған, ҡай берҙәрен юҡ иттерткән. Ҡаты ҡуллы сит дошмандарга ла ҡаты төшкән. Бер нисә яуҙа жунгар, ҡалмыҡ ғәскәрен ҡыйратып, батыр хан тигән арҙаҡ ҡаҙанған. Күп батырҙар уны яҡлар, солтандар ҡурҡыр, старшиналар өркөр булған.

Бына хәҙер Алдар үҙе шул хан ҡулында. Улдары, ҡыҙы, юлдаштары ла. Иртәгәһе яу нисек бөтөр, — улар яҙмышы шуға ла бәйле. Хәйерле сәғәткә килһә, хан дуҫ яһар, килмәһә, ҡол итер йә юҡ итер...

Таң алдынан ғына күпмелер серем итеп, иртүк уянып китһә, бөтә хан ҡышлагы — аяҡ өҫтөндә. Бер түбәләстә һыбайлы батырҙары, йөҙ башлыҡтары араһында турат өҫтөндә Абулхайыр хан үҙе күренә. Ул йәһәт-йәһәт бойороҡтар бирә, ҡамсыһы менән төртөп ниҙер күрһәтә. Улар янына әле бер һыбайлы сабып килеп етә, икенсеһе сабып китә. Ҡышлаҡ мыж килә.

Яу алды мәле. Батыр хан төркөмөнә табан ҡуҙғалды. Уны күреп, йәһәт кенә үҙенең атын да килтереп еткерҙеләр. Хан уга үҙ янында булырға бойорҙо. Уға ныҡ ышанғандай хәлде аңлатып бирҙе. Юртауылдар белгәнсә, таң менән теге оло яу юлға сыҡҡан. Самаһы ҡапыл хан ҡышлағын баҫыу, күрәһең. Әммә Бөгенбай батыр башлығындағы хандың һул ғәскәр ҡанаты яуҙы боҫҡонға алмаҡсы. Есем батыр ғәскәре тура сабыуыл яһарға, уңдан Жәнебәк батыр һыбайлылары арҡыры төшөргә тейеш.

Яуҙағыса Алдар батыр ҙа ҡапыл теремекләнеп китте лә һорау биреп ташлағанын да һиҙмәй ҡалды:

— Абулхайыр хан, дошман яуы күпме самаһы икән?

— Иң күбе бер төмән [1].

— Ҡорған уйығыҙ шәп, хан тәҡсир. Тик әҙ генә былай иткәндә, — тип төҙәтмә индерергә йөрьәт итте тағы батыр. — Есем сабыуылы осрашҡас, сиреүен артыҡ ныҡ ҡырҙырмай сигенеп ҡаса башлаһа, шулай итеп яуҙы үҙ артынан эйәртһә икән. Шунан уң ҡабырғанан Жәнебәк батыр ҡырҡып инер. Ә Бөгенбай батыр бер аҙ көтөп, сардауылдың артынан төшөүе хәйерлерәк.

— Ярай, күҙ күрер, — тине хан эре генә, үҙе төҙәтмә менән сапҡындарға яңы әмерен бирҙе.

---

[1] Төмән — бында — бер меңле ғәскәр.

Алдағы һырт аръягындағы уйһыулыҡҡа төшкән дошман яуы алғырғыһына Есем һыбайлылары ҡыйҡыу-һөрән һалып ташланды. Ике яҡтан килгән йөҙәрләгән ат тояҡтары тауышынан ер дөбөрләп, һелкенеп торғандай тойолдо. Алдағылар бер-береһенә ташҡындай килеп бәрелеп, ҡылыс, ҡалҡан тауыштарынан, аттар кешнәүенән шомло шау ҡупты, уйһыулыҡта күҙгә аҡ-ҡара күренмәç алыш-киçеш башланды. Есем һыбайлылары дошман яуы эсенә инеп йотола, ирен бөтә барған кеүек ине. Ә ҡара яу бары ябырылыуын белә, тәүге сабыуылды иҙеп-ҡырып үтә. Бойороҡ бирелер-бирелмәçтән ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың күбеһе яуға нимәй аттарын кире бора. Сигенеүсе һыбайлыларҙы баçтырып, эҙәрлекләү ҡыҙып китә. Шунан ғына уңдан ҙур рәт булып ҡабырғаға Жәнебәк һыбайлылары бүçеп инә. Аҙағыраҡ арттан Бөгенбай төшә.

Шулай үҙе аҙ юғалтыу менән Абулхайыр хан жунгар нойондың бер төмән ғәскәрен еңел ҡыйрата. Ҡапы, кәре — ғәскәргә, даны — ханға, әлбиттә.

Еңеү байрамы ла ҡора хан. Урта урҙанан солтандарҙы, старшиналарҙы саҡыра. Әйҙә, Абулхайыр хандың батырлығын тағы бер ҡат күрһендәр, уға һыйынһындар. Уртаһы ла, Өлкәне лә үҙ ерҙәрен һаҡларға уға ялынмай хәлдәре юҡ.* Ул яуҙарҙы еңһә — өлкән ханлыҡ уныҡы. Шулай уға еңеү шәрәфенән бигерәк шауы, дөмбөрө ҡиммәт ине.

Шан-шәрәф шаулы уҙҙы. Һый-хөрмәт ташып торҙо. Хан йомарт, эре ҡыланды. Ун һигеҙ кирәгәле хан тирмәһенә иң арҙаҡлы солтандарҙы, батырҙарҙы, аҡһаҡалдарҙы йыйҙы. Думбыра сиртергә, жыр һамаҡларға атаҡлы Бохар йырауҙы саҡыртты. Алдар батыр ҙа хан табыны түрендә булды. Ҡунаҡтар бик ҡыҙыҡһынып унан Ҡырым, Азов походтары, Петр батша тураһында һораштылар. Алдар үҙе күргәндәрен, Азау янындағы яуҙы, черкес батыры менән үлемесле алышты, Петр батша хәҙрәттәренең уны нисек ололауын бәйнә-бәйнә һөйләп биргәнен ауыҙ асып тыңланылар. Урыç батшалығының көс-ҡеүәтенә хайран булып ултырҙылар. Абулхайыр хан Башҡортостандағы яу, Алдар-Күсемдең Ҡазан походы хаҡында ла төпсөштө. «Олуғ батшаларға хеҙмәт иткән, ҡулынан ярлыҡаш алған истәк батыры шул уҡ падишаһҡа яу ҡуптарып, шунан да ҡотолоп ҡала икән, был ни хикмәт?» — тип сетерекле һорауын да һалды хан уртаға. Илдәге хәлде, Башҡортостан хәлен үҙе аңлағанса аңлатты ла Алдар һүҙен шулайыраҡ кинәйәләп осланы: «Урыç батшаһынан тархан исеме алған атайым Иçәнгилде бер хикмәтле хикәйәт һөйләгәне иçтә: борон Урал тау буйҙарында төрлө януар бик күп булған тиҙәр. Бар януарға батша арыçлан икән. Януарҙар арыçлан батшанан яман

ҡурҡҡан. Күргән береһен тотоп ашаған, ашамаһа имгәтеп ташлаған. Ә бер ҡама арыҫланды бар тип тә белмәгән, үҙ көнөн, үҙ йүнен күреп йәшәгән. Быға көҙәндең бик көнсөлөгө килгән. Яйын табып, был бер мәл ҡаманы арыҫланга юлыҡтырған. Өҙгөләп ташлауын көткән арыҫландың. Ҡама арыҫлан алдына килеп сыҡһа, теге урынынан тора алмай ах-ух килеп ята, ти. Ҡурҡмай янына барған ҡама. Барһа, арыҫландың бер аяғы туптай шеш, имеш. Табанында балта дәүмәле шырау. Әйләнгеләп-тулғашҡылап шырауҙы һурып алған бит ҡама. Арыҫланға йән инеп киткән, шеше ҡайтҡан, аяғына баҫҡан. Ҡаманы дуҫ иткән арыҫлан. Бергә һунар йөрөр булғандар. Аҙаҡ юлдары айырылышҡан: арыҫлан — үҙ юлы, ҡама үҙ юлы менән киткән.

Ҡаманың нҫән ҡалыуына нҫе киткән көҙәндең. Байтаҡ замандар үткән. Бер саҡ ниндәйҙер яман януар тағы донъяларҙы туҙҙыра башлаған. Күп януар ҡасып-боҫоп бөткән. Тик ҡама ғына ҡурҡмай һыу менән тегенең йөрөр юлын бүлгән. Урман батшаһы быға яман асыуланған. Көҙәнгә шул ғына кәрәк: тағы ҡаманы тотоп биргән был. Батша теге үк арыҫлан булған имеш, элекке ҡама дуҫын аяған, асыуы килһә лә, ярлыҡаған. Шулай, Абулхайыр хан, батшалар, хандар теләһә — ярлыҡар, теләһә — язалар. Хөкөмдәре үҙ ҡулында».

Абулхайыр хан, табындағылар Алдарҙың хикмәтле һүҙенең айышын төшөнһә лә, батырҙың һыуҙан нисек ҡоро сығыуын белеп етмәгән барыбер. Хан, ныҡышып, «ярлыҡаш бар, ә шундай яуҙан һуң нисек ҡоро ҡотолмаҡ кәрәк» тигән һорауына Алдар: «Әгәр ҡама яңылыш яраланмаһа, уга һыу йоҡмай», — тип кенә яуаплаған.

Аҙаҡ Абулхайыр хан Алдар ҡунағының ҡыҙы Нәркәстең сибәрлегенә, саялыгына һоҡланып, башҡорт ҡыҙҙарының һылыулығы хаҡында бер тарих һөйләп ташлай. Тарихының ахырын: «Шулай Хаҡназар хан жағалбайлы ырыуы башҡорто Ҡарасайҙың ҡыҙы Аҡбалаға өйләнгән. Ҡаҙаҡ хандарының Аҡбала ханша нәҫеленән таралған ул-ҡыҙҙары — иң сибәр тоҡом. Аҡбала хаҡында ҡаҙаҡта әле лә риүәйәттәр йәшәй», — тип бөтөрә хан. Алдар батыр хандың һүҙен йөпләп шулай ти: «Жағалбайлы ҡыҙҙары, хаҡ хан тәксир, һылыуҙарҙың һылыуы. Беҙ бөрйәндәр жағалбайлы нәҫеле. Күрәһең, Аҡбаланың һылыу заты беҙҙең ҡыҙҙарга ло йоҡҡан. Бирһен хоҙай, жағалбайлынан йәнә зат яңыртырга яҙһын».

Ҡунағының тел төбөн аңланы хан. Тик ул әле ун бишь-ун алты йылдарҙан һуң башҡорт ҡыҙына хан кейәү булып ултыраһын гына күҙ алдына килтерә алмай ине.

Байрамдың шәбе ат сабышта, күкбар — кәзә түшкәһе яҫҡышта, мәрәйгә атыш, ҡылыстан сабыш ярыштарында, йырауҙарҙың айтыстарында булды. Хан, ҡыр-ҡаҙаҡ батырҙары, улар янында Алдар, Теләпбиргән батыр ҡылыстан сабышта ҙур таһыллыҡ күрһәтеп, ҙур сайранды тағы күркәмләп ебәрҙеләр. Алдар саҡма мылтыҡтан бүректе бүҫә атып, бар халыҡты хайран итте. Яу үткән мылтығын Абулхайыр ханға һыйланы. Бүләктән бик ҡәнәғәт ине хан.

Шулай итеп, был сәфәрҙә Алдар батырҙың киреңке мәлдә Абулхайыр хан менән тәүге осрашыуы еңеүле туйға ялғанып, дуҫлашыуҙарына һәйбәт башланмыш булды. Шуның аманат һымаҡ бер билдәһе итеп, Алдар батыр хан янына улы Мусаны ҡалдырҙы. Был ил-йорт, хан-ара тура тере элемтә ине асылда.

## 2

Бынан һуң күп һыуҙар аҡты. Нәркәс ҡарағалпаҡтарға килен булып төштө. Алдарҙың бүтән ул-ҡыҙҙары башлы-күҙле булып бөттө. Ейән-ейәнсәрҙәр тыуҙы. Батырҙың үҙен ололап Бөрйән волосының старостаһы итеп һайланылар. Тарханлыҡ аты уны бүтән түрәләрҙән бер башҡа юғары ҡуйҙы. Ил-йорт ҡашында, хөкүмәт ҡаршыһында абруйы бермә-бер күтәрелде. Алты мөйөшлө ҡунаҡ өйөнөң түрендәге стенаға батша писерҙары тарафынан матур семәрләп яҙылған, алтын буталдар менән уратып ташҡа баҫылған ҙур грамота элеп ҡуйылды. «Тархану Алдарбаю Исекееву — детям его, племянникам и внучатам...» тип башланған грамотаны уҡып, рус түрәләре Алдар тарханды хөрмәт итер, эстән генә шөрләр ҙә булды. Өфө воеводаһы, хатта Ҡазан губернаторы уның менән иҫәпләшеп, килешеп йәшәне хәҙер.

Алдарҙың яҙыулы йә яҙыуһыҙ әллә күпме дан-шәрәфенә, дәрәжәләренә йәнә илселек вазифаһы өҫтәлде. Был яуаплы вазифа уны ил-ара аренаға алып сыҡты, ҡыр-ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ ханлыҡтарына илтте.

Алдарҙың Арал буйҙарына барып ҡайтыуына күпме ваҡыт үткәндер, егерменсе йылдарҙа был яҡтарҙа — Урта Азияла, Ҡаҙағстанда — хәлдәр тағы ҡырҡыулаша төштө. Ете йылға, Балхаш, Төркөстан, Арал буйҙарына жунгарҙарҙың ҡара яуы ябырылғанын ишетте ул. Хәбәрҙәр бере-һенән-бере шомло, яман ине: баштан-аяҡ ҡоралды жунгар ханы Цецан-Рабтан ғәскәре ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың кескәй төркөм-төркөм һыбайлыларын апһат ҡыйратҡан, Ташкент, Сәйран, Төркөстан ҡалаларын баҫып алған. Ауылдар, балсыҡ ҡалалар, йәйләүлектәр туҙҙырылған. Ҡаршылыҡ күрһәтеүселәр аҫылған, киҫелгән, бала-сағалар, сабыйҙар һөң-

гөнән үткәрелгән, ҡыҙ-ҡырҡын мәсхәрәләнгән, ҡоллоҡҡа олаҡтырылған. Эшкә яраҡһыҙ ҡарт-ҡоро ҡомлоҡтарға ҡыуылып, аслыҡтан ҡырҙырылған. Ҡасып ҡотолғандарҙың күбеһе юлда, шыҡһыҙ таҡырҙарҙа һәләк булған. Бик аҙҙары ғына Арал ҡамышлыҡтарына, Яйыҡ, Турғай йәйләүлектәренә килеп морон төрткән. Ҡүргәндәр һөйләүенсә, күп ауылдарҙан бары көл-күмер тороп ҡалған, далалар мәйеттәр менән тулған.

Был оло һәләкәт, ҡырғын хаҡында Алдар ҡаҙаҡтарҙың «Аҡтабан шубырылды» тигән йән өҙгөс йырҙарын, дошмандарына ҡарғыш һүҙҙәрен ишеткәне бар. Тик ҡарғыш менән генә ҡарышып буламы ни? Ҡапыл шаңҡып ҡалған хәлдән айныйтөшкәс, ҡыр-ҡаҙаҡ ир-егеттәренең атҡа атланғанлығын, батырҙары уларҙы сарбаз-һалдат итеп туплап, яуға ташланғандарын да белә ул. Ләкин нисек кенә йән аямай һуғышмаһындар, аҙ сарбаз ғына оло яуҙы нисек туҡтата алһын. Бының өсөн оло ғәскәр, берҙәм башлыҡ — баш сардар кәрәк. Аҙаҡ өс урҙаның бар сарбаздарын бергә туплап, уға Абулхайыр ханды баш сардар итеп һайлап ҡуйғас, Буланты — Һарыһыу буйҙарында ҡаҙаҡтар жунгарҙарҙы ике тапҡыр еңеү шатлығы хәбәре таралды. Яйыҡ буйында ҡалмыҡ ханы Әйүкә яуының кире ҡағылыуы ишетелде.

Ләкин был еңеүҙәр генә ҡырғыҙ-ҡайсаҡ ил-урҙаһын ҡалмыҡ-жунгар илбаҫҡынсыларынан тамам ҡотҡара алмағанын күптәр яҡшы аңлай ине. Ана Өлкән урҙа ерҙәре — бөтә көньяҡ-көнсығыш Ҡаҙағстан һаман илбаҫҡынсылар ҡулында. Улар артында ҡытай бағдыхандары тора. Үҙәк Ҡаҙағстанға әленән-әле сапҡындар ҡабатлана. Көньяҡтан Хиуа, Бохара хандарының, көнбайыштан ҡалмыҡ хантайшыларының ҡыҫымы өҙөлмәй. Хәүеф-хәтәр һаман көслө.

Ҡарағалпаҡ ҡоҙаларына барған бер сәфәрендә был яу харабаларын Алдар үҙ күҙҙәре менән күрҙе. Ҡыр-ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡтарҙың, үзбәктәрҙең башҡорт ырыу-ҡәрҙәштәренең көслө рус хөкүмәте ҡанаты аҫтында булыу арҡаһында бөлдөргөс сит яуҙарҙы күрмәү-белмәү бәхеттәренә көнләшеп ҡарауҙарын тойҙо. Уларҙың шундай илгә һыйынырға теләүен, туғанлыҡ, дуҫлыҡ ынтылыштарын аңланы.

Оҙаҡламай йөрөмтәл Алдарҙың юлдары илселек сәфәренә ялғанып китте. 1729 йылдың ҡышында Өфө воеводаһы Бутурлин Алдарҙы Имән ҡалаға саҡыртып алды. Уға ҙур хөрмәт күрһәтте, ҡунаҡ итте. Ҡарағалпаҡ ҡоҙаларын, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ-ҡайсаҡ хандарының, халайыҡтың тын-һулышын һорашты, төрлө хәл-әхүәлдәрен белеште. Тарханың үҙ ҡылдарын тартып ҡараны.

Төп фекер илселек мәсьәләһенә күсте. Воевода ла, тархан да шуны яҡшы белә: көнсығыш дипломатияһын шул

ил-халыҡтарға ҡәрҙәш, диндәш кешеләр уңышлыраҡ башҡарыусан. Ана Петр Беренсе батша үҙе быға баштан уҡ шундайыраҡ йүнәлеш биргән — Ҡавказға, Урта Азияға, Иранға күберәк мосолман илселәрен ебәргән. Ҡаҙағстанда воевода исеменән бер Маҡсут Юныс мулла булып ҡайтҡан. Ҡыр-ҡаҙаҡ хандары, солтандары үҙ-ара кәңәш-төңәштә, араҙашлыҡта башҡорттарҙы үҙ күреүсән, ихласыраҡ аралашыусан. Шуға рус дипломатик миссияларын үткәреүсе кенәз Бутурлин өсөн хәҙер ҡырғыҙ-ҡайсаҡ хандарына илселектә Алдар тархандан да ҡулай кеше юҡ ине. Уның ҡыр-ҡаҙаҡ далаларына ла киң таралған батыр, тархан тигән дәрәжәһе, Абулхайыр хан менән яҡшы танышлығы, солтан, батыр дуҫтары, ҡарағалпаҡ ҡоҙа-ҡорҙаштары эште күпкә ыңғай хәл итерлек ныҡлы нигеҙҙәр ине. Алдарҙың аҡыллы илселек, һүҙ үтемлек ҡеүәһе лә күптәргә мәғлүм.

Ил-халыҡтарҙы яҡынайтыу, ил ҡеүәтен нығытышыу — ҙур миссия — быны Алдар яҡшы аңлай. Уға ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ күрше ҡәрҙәштәрен бөйөк Рәсәй иленә тартыу, бер ҡанат аҫтына алырға илселек ҡылыу — үҙе изге эш бит.

Кенәз менән бөтә шарттарҙы асыҡланы ла, ер-һыу һорығыу менән, Рәсәй исеменән ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарҙың Кесе урҙаһына әле рәсми төҫ алмаған илсе булып юлға ла сыҡты Алдар. Илселектең тәүге миссияһы Абулхайыр хандың ҡылын тартып ҡарау, рус-ҡаҙаҡ ил-ара рәсми килешеүгә ерлек әҙерләү ине.

Ҡаҙаҡ ханы менән ҡасандыр мосафир булып осрашҡан Алдар батыр бына хандың йәйләү аҡ тирмәһенең түрендә аяҡ бөкләп Рус дәүләтенең илсеһе булып ултыра. Илсе кеше, шартына килтереп, сын-яһаулы дүрт һыбайлыһы менән килеп төшкән, Абулхайыр хандың үҙен генә күреп һөйләшергә лә, бүләк-һыйландарын күрһәтергә лә өлгөргән. Һүҙ төйнәлгән. Икенсе көн сапҡындарын ебәреп, иң арҙаҡлы батырҙарын, солтан һәм бейҙәрен аҡ тирмәгә хан ҡорона йыйған бына. Иң яҡын һайлам кешеләрен генә. Уң ҡулы Бөгенбай батыр, яугиры Сәйетҡол батыр, ил аҡһаҡалы Ҡотломбәт бей, Мөмәт солтан һәм улы Нурғәли солтан, Кесе, Урта йөҙҙән дүрт старшина.

Хәҙер ҡырҡҡа яҡынлап килгән Абулхайырҙың шаҡтай таушалғанлығы һиҙелә, ҡара мыйығына сал ингән, маңлайында һырҙар артҡан, ҡуңыр ҡаҡса битенә улаҡтар йүгергән. Әммә уның үткер ҡарашы, ҡаймалы атлас кейеме, башындағы әйләндермәле ҡаҙаҡ эшләпәһе, уртала баҙлап торған бриллианты ханға олпатлыҡ биреп тора. Яугирлыҡ ҡиәфәте, алтын-көмөш ҡынлы ҡылысы уны ысын батырға ла оҡшата. Ни генә тимә, бынан ун-ун ике йыл элек күргән йәш кенә хан түгел, күпте күреп кисергән, бер нисә ҙур

яуҙарҙа еңеп сыҡҡан, өс урҙаның баш сардары, өлкән ханы дәрәжәһендәге, исемен әйтеү менән ҡаушап, ҡалтырап ҡалдырыр Абулхайыр хан үҙе бит. Һөйләүендә лә үҙ дәрәжәһе, һимməте һиҙелә.

— Ҡәҙерле бей, солтандарым, батыр йәнә старшиналарым, — тип йомшаҡ ҡына башлай хан һүҙен. — Рәсәй иленән, Өфө ҡалаһынан илсе булып Алдар тархан килде. Тархан батыр урыҫ батшаһының беҙҙе — ҡаҙаҡ урҙаһын үҙ азаматлығына [1] өндәүен алып килгән. Тыңлайыҡ илсенең һүҙен. Ҡәңәшләшәйек.

— Ҡәҙерле олуғ Абулхайыр хан! Ҡәҙерле тыуышҡан [2] ҡаҙаҡ-ҡайсаҡ солтан-бейҙәр, батырҙар, старшиналар! Илсенең эше — изге, тиҙәр. Рәсәй иленән, Анна Иановна әйел батша йәнәптәре исеменән, тыуышҡанлыҡ, дуҫлыҡ, бер өлкән илдә азаматлыҡ булып йәшәү үтенесен алып килдем мин. Урыҫ батшаһы, уны азаматтары беҙ башҡорттар ҙа күреп тора: күрше ҡаҙаҡ-ҡайсаҡ ҡәрҙәштәр жунгар-ҡалмыҡ яуынан яфа сигә; боронғо ҡалалары дошман ҡулында. Ороштан [3] халайыҡ ҡырыла, мал-мөлкәт тәләф була, ил-күс тарҡала. Ҡеүәтле Рәсәй иле именлек теләй, уға азаматташ булһалар, ҡыр-ҡаҙаҡ урҙаларын яуҙарҙан ҡурғарға вәғәҙә ҡыла. Шул хаҡта кәңәшләшергә, риза булһағыҙ, Рәсәйгә илселек ебәреү кәрәклеген еткерергә ҡуштылар һеҙгә.

— Азаматлыҡ шарттары ҡандай? — тине хан.

— Әүәл үҙегеҙ әйткән шарт-вәғәҙәләр көсөндә ҡала. Рәсәй закондарын таныу, яһаҡ түләү, барымта-ҡарымталарҙы туҡтатыу, каруандарҙың имен йөрөшөн һаҡлау. Ике ил-йорт араһында тыныслыҡ, татыулыҡ булдырыу. Рәсәй үҙ азаматтарын сит яуҙарҙан, сапҡындарҙан ҡурсыясаҡ. Иң мөһиме, дуҫ, тыныс, имен йәшәүҙе тәьмин итеү.

— Ә беҙҙең тағы бүтән шарттар? — тине хан. — Ҡалмыҡтарҙан беҙҙе тиҙерәк ҡотҡармаҡ. Яйыҡ менән Иҙел араһы йәйләүлектәрендә йәйләүгә ирек ҡуйыш. Рәсәйгә хәүефһеҙ үтеүҙе булдырыш. Яйыҡ казактары, башҡорт барымталарын бөтөрмәк. Өфөлә әсирҙәр алмашыу — былары нисек?

— Быларҙың һәр береһен, ханым, һеҙҙең Рәсәйгә ебәрер илселек Мәскәүҙә бергәләп хәл итергә тейеш. Һәр шарт атап һөйләшеп, ике яҡ та килешкәс, ярлыҡ-грамотаға теркәләсәк. Уға батша йәнәптәре менән һеҙ олуг хан ҡул ҡуйғас, үҙ хоҡуғына инер.

---

[1] Азаматлыҡ — подданство.
[2] Тыуышҡан — туған, ҡәрҙәш (*ҡаҙаҡса*).
[3] Орош — һуғыш (*ҡаҙаҡса*).

Бөгенбай батыр, үҙе ягынанырак бөгөп, һүҙ кыçтырҙы:

— Ҡаҙаҡ-ҡайсаҡтарга иң хәжәте рус хөкүмәтенән хәрби ярҙам булһын. Беҙгә тураҡты әскәр[1] кәрәк, мылтыҡ, туп хәжәт. Шул тиҙләтелһен ине.

— Вәғәҙә ҡоро вәғәҙә булып ҡалмаһа ярар ине. Башты һалыуы еңел, ҡотолдороуы ҡыйын булыр,— тип шик һалды бер старшина.

Ике һөйләргә, икеләнергә юл ҡуйырға теләмәгәндәй, хан ҡор-кәңәште ҡоро тотто. Һүҙ төйпәгән кеүек, ул Рәсәй иле менән килешеп, азаматташ булып йәшәүҙең мәғәнәһен, уңайлығын аңлатып бирҙе, жунгар-ҡалмыҡ яуҙарынан ҡотҡарыр ҡургаусы ил булырын күрҙе. Урыçтар менән сауҙа итеү яйлығын һөйләне, имен-аман тормош, ырыç булырына өмөт белдерҙе. Илселек ебәрергә ризалыҡ бирҙе. Ә Алдар батыр урыç хөкүмәте исеменән Өфө воеводаһы ебәргән бүләктәрҙе тапшырғас, хан ҡорҙаштарының күңелдәре булып, Абулхайырҙың һүҙен тиҙ йөпләнеләр. Шул арала табаҡ-табаҡ турам ит, һаба-һаба ҡымыҙ, ҡымран килеп ултыргас, табын тамам түңәрәкләнеп, йәмләнеп китте. Аҡыллы һәм хәйләкәр Абулхайыр хан илсе ҡунағы алдында ла, бигерәк тә үҙ ҡор-ярандары ҡаршыһында, үҙен бөйөк Рәсәй иленең иң яҡын дуçы, рус батшаһын яҡлашыусы, дошмандарынан аралашыусыһы итеп күрергә, күрһәтергә теләне. Аҡылы, батырлығы, таçылы менән дә маһайғанын һис йәшермәне. Ҡилер көп: хан бүләген дә алыр, ҡылысын да онотмаç. Йомарт вәғәҙәләрен бирһә, боҙоуға ла аптырамаç, тыштан яҡшатланһа, аçтан киçергә лә күп алмаç. Хан әлегә үҙенә йүн-һан эстәне.

Икенсе көндө хан Алдар илсе-араҙаш менән үҙ-ара оҙаҡ һөйләште, ярым ышанып йә юрамал ҡай бер серҙәрен сискеләне, тарханды үҙ кешеһе итергә тырышты, йәнә вәғәҙәләр бирҙе, шарттар ҡуйҙы.

Һыбайлы илсене нөгәрҙәре менән хөрмәтләп оҙаттылар. Хан түләнгеттәре[2] уларҙы Яйыҡҡа саҡлы оҙата килде. Хан үҙе тиҙ арала Өфөгә илселек ебәрергә булып ҡалды.

Ҡалды, ләкин вәғәҙәһен үтәй алманы. Шул йылдың көҙөнә көнсығыштан тағы жунгар яуы ябырылды. Абулхайыр хан йәнә орошҡа әҙерләнде, сарбаз тупланы. 1730 йылдың яҙында Этесмәç күл янында дошманға ҡаты яу бирҙе. Ҡыйратылған дошман яуынан, ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың киçелгән-йәрәхәтләнгән сарбаздары өнөнән оло яу яланы ыңғырап ятты. Шуға ул ҡанлы-аһлы яланға Ыңғырау ялан тигән

---

[1] Т у р а ҡ т ы  ә с к ә р — регуляр гәскәр (*ҡаҙаҡса*).
[2] Т ү л ә н г е т — хан һәм солтандарҙың һаҡсы нөгәрҙәре.

исем тарихта йәбешеп ҡалды. Халыҡ та бындағы яман һуғышты Ыцғырау яуы тип йөрөттө.

Ыңғырауҙа дошман еңелде, ләкин хандар араһы боҙолдо. Өлкән урҙа ханы Әбелмәмбәт Төркөстан яғына күсеп китте, Абулхайыр хан Яйыҡ буйына яйланы. Бәрәк солтан Турғай буйҙарына йүнәлде. Ҡораштырған берҙәмлек сайраны.

Абулхайыр хан һуңлабыраҡ булһа ла вәғәҙәһен үтәне. Яуҙан ҡайтып, күҙ-баш алғас та, хан илселекте ойҡаштырҙы. Илселәр итеп Ҡесе урҙанан Ҡотломбәт бей менән Сәйетҡол батырҙы тәғәйенләнеләр, ҡулдарына хат тотторҙолар.

Ҡырғыҙ-ҡайсаҡ илселеге, теге саҡтағы һөйләшеү буйынса, башта Башҡортостанға, Һаҡмар буйына Алдар йәйләүлегенә килеп төштө. Алдар Өфөгә алып килде. Бутурлин воевода, бөтә күрһәтмәләрҙе биреп, илселеккә башҡорттарҙан иң абруйлы Алдар менән Таймаҫ тархандарҙы ҡушып, хәстәрләп Мәскәүгә оҙатты.

Өфөнән сығып китеүгә өсөнсө ай тигәндә, Мәскәүҙә Кремль һарайының Сенат палатаһында илселекте, ниһайәт, императрица Анна Ивановна үҙе ҡабул итте. Бик әҙерләнеп, яһанып барҙылар илселәр. Зиннәтле ҙур һарайҙың ифрат иркен, бейек палатаһына ингәс, улар башта ҡаушап, юғалыбыраҡ ҡалһалар ҙа, оҙатыусы һарай вельможалары янында тиҙ тынысландылар. Әллә ҡайҙа түрҙә алтын тәхетендә ултырған императрица янына яҡынлап, көнсығышса баштарын эйеп, ҡулдарын ҡушырып, Анна Ивановна менән килешле генә иҫәнләштеләр. Императрица, күперенке күлдәктәре менән ҡабарған күркә төҫләрәк, ҙур тәхетендә илтифатһыҙ һәм һауалы ултырыуын белде. Иҫәнләшеүе лә алтын йөҙөклө уң ҡулын ҡыбырлатып ҡуйыуы булды, ахры. Һүҙҙе күберәк ғалиә йәнәптәренең иң яҡын ярҙамсылары граф Головкин менән барон Остерман алып барҙы. Илселәр менән тылмастар арҡыры аңлаштылар. Императрица илселеккә бәйле әллә ни һорауҙар ҙа бирмәне, сәйәсәткә лә инеп китмәне. Арала, Таймаҫ тарханға ҡарап, һорай ҡуйҙы: «Һин быйыл яҙ мыңә тере төлкө килтереп бүләк иткән башҡорт батырымы әллә?» Таймаҫ раҫлап баш эйҙе. Барон шул саҡ башҡорт һәм ҡыр-ҡаҙаҡ илселәренең ғалиә йәнәптәренә бүләк итеп, ҡама, ҡамсат тиреләре, бүтән аҫыл бүләктәр килтергәнен белдерҙе, Таймаҫтың ил таянысы булырлыҡ ир, Алдарҙың Петр Беренсе менән Азов походына ҡатнашҡанын һәм император йәнәптәренән грамота алған батыр икәнен әйтергә онотманы.

Илселек хаҡында һүҙ бер нисә һорау, аныҡлау, раҫлау менән сикләнде. «Башҡорт подданныйҙарым шикелле, ҡа-

ҙаҡ-ҡайсаҡтарҙы ла Россия империяһының подданныйҙары итергә ҡаршы түгелмен, — тине императрица, һөйләшеүҙе бөтөргәндәй. — Абулхайыр ханға минән ышаныс һәм падишаһ сәләмен тапшырығыҙ».

Күпме йылдар көткән, күпме юлдар үткән, мәшәҡәтлеҙалар кискән илселектең аудиенцияһы шулай тиҙ һәм ҡыҫҡа тамамланды.

Батша бойороғо — бер һүҙ, ҡалғандары — һарай түрәләре эше. Ләкин батшалыҡтың хәстәрҙәре аҙмы ни? Власть өсөн һарай интригалары ҡыҙып китә. Ҡылығы менән тупаҫ тол императрица власҡа килеү юлына арҡыры төшкән эре дворяндарҙы — Голицын менән Долгорукийҙарҙы хөкөмгә тарттыра, һөргөн ебәрә, күптәрен язалата. Барына хужа булып алған «ят бауыр» герцог Бирон тирәһендә болот ҡуйыра. Батша ҡатын үҙе хөкүмәт эштәре менән шөғөлләнеүгә ҡарағанда көнө-төнө бал-маскарад, ғишыҡ-ғишрәт менән ғүмер үткәрә. Әллә нindәй ваҡ ҡаҙаҡ-ҡайсаҡ эштәре онотола, һуҙыла. Илселәр айҙар, миҙгелдәр көтөп ята бирә. Ҡаҙна иҫәбенә йәшәһәләр ҙә, эш ҡуҙғалмауы, сит-ят ерҙә ятыу ялҡыта, биҙрәтә уларҙы.

Күрәһең, һәр нәмәнең үҙ яйы. Бары 1731 йылдың 19 февралендә генә императрицаның ҡул тамғаһы ҡуйылған грамота пәйҙа була. Күпте көткән, күпте өмөт иткән документ. Алтын буталдарҙа семәрләп, хикмәтләп яҙылған батша ярлығы:

«Божиею поспешествующаго милостию мы всепресветлейшая державнейшая великая государыня Анна Иоановна императрица и самодержица всероссийская... киргиз-кайсацкой орды Эбулхаир хану, старшине и всему кайсацкому войску нашего императорского величества милость.

Понеже мы великая государыня наше императорское величество из писания твоего Эбулхаир хана чрез посланцев твоих усмотрили желание твое со всем твоим владением быть в подданстве нашем и с поддаными российскими с башкирцами быть в миру, а те посланцы твои, Эбулхаир хана, словесно здесь доносили, что желаешь ты, с войском кайсацким быть в подданстве у нас на следующих пунктах:

1. Обещаетесь нашему императорскому величеству служить верно и платить ясак, так как служат башкирцы; 2. чтоб от подданных российских обид и раззорения вам никакова не было; 3. ежели на вас кайсаков будут нападать какие неприятели, чтоб вы могли от того наш'им -го в-ва защищением охранены быть и счислить бы вас с поддаными российскими...»

Тағы сауҙа бәйләнеше, әсирҙәр алышыу, аманат биреशеү хаҡындағы пункттары ла булған был грамотаның төр-

кисә конияһы төҙөлә. Был эште аҙағынаса еткереү өсөн рус илселеге ойошторолоп, уның башлығы итеп тылмас татар мырҙаһы, суҡынған Ҡотлуғ Мөхәммәт (Ҡотломбәт-Мәмәт) — Алексей Иванович Тевкилев тәғәйенләнә. Ул түрә тағы үҙенсә юл-яраҡ хәстәрлеген күрә торғас, ике айлап ваҡыт үтеп китә. Илселеккә дәүләт сит ил эштәре коллегияһының яҙма инструкцияһы тапшырыла, телдән йәшерен инструктаж бирелә. Уға бер һылтау аҫтында шымсылыҡ эштәре, бүтән вазифалар ҙа йөкләтелә. Илсе исеме йөрөткәндәр араһында ғәҙәти кейем бөркәнгән хәрбиҙәр ҙә бар ине.

3

Рус илселеге Өфөгә 1731 йылдың 4 июлендә — йәй уртаһына ғына килеп етә. Был әле бары ярты юл. Сәфәрҙең ауырырағы, вазифаның яуаплырағы алда. Рус хәрби-административ үҙәге Өфө ҡалаһы — илселек өсөн һуңғы транзит ҡына түгел, ҡатмарлы әҙерлек майҙаны. Тевкилевкә ҡалған эш-хәстәрҙе Өфөлә асыҡлап, бөтәһен нығытып бөтөү мөһим. Илселектең уңышы-уңышһыҙлығы шуға бәйле. Айырыуса һаҡлыҡ хәстәрен күрергә кәрәк.

Был эштәрҙә Тевкилев түрә Алдар батырға нығыраҡ таянды. Алдар ҡыр-ҡаҙаҡтарға барып, Абулхайыр хандың ағаһы Мөхәммәт Хужа солтанды Өфөгә алып килде. Уның аша күп мәғлүмәт алдылар.

— Абулхайыр хан быйыл Турғай менән Ырғыҙ һыу буйҙарында йәйләй, — тине Хужа солтан. — Бүтән хандар ҙа шул тирәләрәк. Хандың әмере шундай.

— Йыраҡмы ул йәйләүҙәр?

— Атлы-йәйәүлегә биш-алты аҙналыҡ юл.

— Абулхайыр хан рус илселеген көтәме? — тине тағы Тевкилев.

— Көтөүен көттө, ләкин өмөтө өҙөлөп бармай микән? — тип шик һалды солтан. — Ни өсөн тиһәң, ҡаҙаҡ илселәре киткәнгә ҡанса ғүмер уҙҙы. Йыл үтеп китте, һыуға төшөп юғалдылармы ни, һис бер хәбәр-хәтер булманы. Хан, солтандар икеләнә башланы, илселәрҙең юлы уңмағандыр, тотоп япҡандар йә аҫҡандарҙыр тип.

— Илсе эше көн менән түгел, йүн менән бит. — Тевкилев шулай тине лә ҡаршыһында ултырған йонсоу йөҙлө Ҡотломбәт менән Сәйетҡолға ҡарап ҡуйҙы. Тағы һорауын бирҙе: — Юлдә хәүеф-хәтәр булмаҫмы? Барымталар, баҫҡындар күбәйгәндер, тиҙәр, хәҙер.

— Башҡорттар барымта ҡыла. Уларҙан ғына хәтәрерәк, — тине солтан.

Алдар батыр һүҙгә ҡыҫылыуҙы кәрәк тапты:

— Барымтаһы-ҡарымтаһы бер хәл. Уныһын булдырмаҫҡа булыр. Ә бына Абулхайыр хандың илселек килеүен белеүе мөһим. Ул белһә, ҡаҙаҡтар яғынан булыуы ихтимал хәүеф бөтөр. Белмәмешкә һылтаныу ҙа булмаҫ. Мин шуны тәҡдим итәм, Тәфтиләү түрә: ханға сапҡын ебәрергә, илселек килә ятыуын, уны ҡаршылауҙы хәбәр итергә кәрәк.

— Башта башҡорттар барымта яһап, әсир алған ҡырҡаҙаҡтарҙы ҡайтарырға кәрәк. Аттарын, дөйәләрен кире ҡайтарырға, — тип ҡаршы төштө Ҡотломбәт бей. — Шул саҡ хәүеф ҡалмаҫ.

— Әсир мәсьәләләре әле Өфөләге илселек эше түгел, — тине быға ҡарата Тевкилев. — Ул мәсьәлә Абулхайыр хан грамотаға ҡул ҡуйғас, ант иткәс, үҙенән-үҙе хәл ителер. Әсирҙәр хаҡында грамотала ла яҙылған бит. Хәҙер барымта-ҡарымта үҙе булмаһын. Сапҡын ебәреү хаҡында Алдар тархан тәҡдимен хуп күрәм.

9 июлдә Алдарҙың Мысыр тигән улын, ҡаҙаҡтан Ырыҫбайҙы Абулхайырға ебәрҙеләр. Тевкилев үҙ яғынан иң ышаныслы дуҫы башҡорт Ҡыҙрас старостаны ла индерҙе. Ҡыҙрасҡа түрәнең үҙ йәшерен йомоштары ла бар ине.

Сапҡын ай ярым эсендә әйләнеп ҡайтты. Уға Абулхайыр хан Сөйөндөк Батыр солтан менән дүрт кешеһен дә эйәртеп ебәргәйне. Сөйөндөк ҡуйынында — хандан хат. «Хөрмәтле илчү тылмач Мәмәт Тәфтиләү әфәндегә, — тип башлаған төркисә хатын хан. — Олуғ вә ғиззәтлү ғәзими хәзрәтләренә алтын тәхеткә ултыру илә тәбрик сүзем. Ғалиә жанаблары олуғ теш ҡазнасын безгә ҡондорса, без башларымызны салармыз; ҡандый хезмәт илә безә бойорса, бер көңелдән, жан-тән илә хезмәт ҡылырмыз. Алламызның рәхмәте илә Бохар ханы Әбелфайыз хан безнең ихтиярымызда, ҡәрдәшем Хиуа ханы Албас хан безнең ихтиярымызда. Хажи Ченнәт дарьясы буйында жәйләүче Аҡ батур бей минем ихтиярыма күчде. Бораҡ хан 4000 биләме, Ташкент, Төркөстан ҡалалары илә беҙнең ҡулымызда. Ҡулымызда күп ҡоллар, әсирләр. Ғалиә хәзрәтемезнең күпчлары безә килсенләр, безнеке алар барырлар. Бохарлар, үргәнчләр минем ихтиярда. Бу хатымны яздым казак-ҡайсыҡ ханы Абулхайыр хан, ҡалғанын сөздән Сөйөндөк баһатүр үзе әйтер».

Хандың былай маһайып яҙылған хатына ҡарағанда Тевкилев сапҡынсыларҙың үҙҙәренән, бигерәк тә Ҡыҙрас һүҙҙәренән, күберәк белде: Абулхайыр хан илселеге китеп оҙаҡ ҡайтмағанга өмөтөн өҙә башлаған икән шул. Һуңғы йыл башҡорттарҙың барымтаһы көсәйеүен дә шуға юраған, батша ҡотортоуылыр тип. Илселек килеүенә бик һөйөнгән.

Хан үҙе Ырғыҙ буйына күсеп, илселекте ҡабул итергә әҙерләнеп ҡалған. Ҡаршыларға улы Нурғәли солтан менән кейәүе Батур солтанды мең сарбаз башында Яйыҡ буйына ебәрәсәк. Хәүеф-хәтәрҙән ҡурсыр тағы түләнгеттәре булыр.

Өҫтәүенә, хандан йәнә бер хикмәтле ҡағыҙ бар. Хандың мөһөрө баҫылган ҡагыҙ. Үҙенә бер ни яҙылмаған. Ҡыҙрас әйтеүенсә, хан уға, теләһә, Тевкилев түрә хатта телгә алған хандарҙың исемен яҙһын, ә Абулхайыр хан уларҙы ла рус батшалығына азамат булырға вәғәҙә итә имеш. Булмаһа, илсе үҙе белгәнсә хәл ҡылһын. Хан риза, йәнәһе.

Хикмәтле ҡағыҙ һәм һүҙ уйландырманы түгел түрәне. Тевкилев тиҙ генә Мәскәүгә Бохара илселәрен баш ҡаланан ебәрмәй торһондар, китһәләр, Әстрханда туҡтатһындар, тип яҙыу ебәрҙе. Бәлки, бер юлы ике-өс януар эләгер.

Хан хәүефһеҙлек вәғәҙә итһә лә, Тевкилев илселеген тағы көсәйтә, ишәйтә төштө. Мәскәүҙән сыҡҡанда егерме ике кешенән ғибарәт илселеккә Өфөлә ун һыбайлы дворян, ун һаҡсы һалдат, һигеҙ ҡаҙаҡ-ҡайсаҡ, утыҙ башҡорт, ун алты ылау, ун дөйә йөк өҫтәлде. Шулай итеп, илселек, оло бер каруандай булып, 26 августа Өфөнән көньяҡҡа юл алды. Ә шул уҡ көндө баш ҡалаға донесение елде.

...Илселек икенсе аҙна юлда инде. Һулдан оҙаҡ оҙата килгән Ағиҙел тугайлыҡтары, иҙел бөгөлө лә күптән артта ҡалды. Әбейҙәр сыуағы сағы. Юл оҙон-оҙай булһа ла, көндәр һәйбәт, тирә-йүн һил булғас, әллә ни йонсотҡан тойолмай. Юлсылар, кистәрен йылға-күл, шишмә буйҙарын һайлап, ҡуналҡага туҡтай. Юл тирмәләре ҡорола, биш-алты урында оло ҡаҙандар аҫыла. Илселеккә игән был яҡ башҡорттары үҙ ырыу-биләмдәренән ҡымыҙын, йәш һуғымын, бүтән кәрәк-ярағын таба. Илселектә үҙ кешеләрен, бигерәк тә атаҡлы Алдар менән Таймаҫ батырҙарҙы күреп, сәфәрҙәренең изгелеген тойоп, халыҡ былай ҙа ярҙамлаша.

Хәүеф-хәтәр булмауына Тевкилев түрә айырата шат. Һалдаттары, бар юлсылары сәхрәләй тәбиғәт ҡуйынында ашай-эсә, туйгансы йоҡлай. Геодезист тигәндәре, сүкешнәмәләр алып, таш эҙләргә китkeләй. Бер нисә дворяны, ваҡ-төйәк һылтау таңҡылап, әллә ҡайҙарга барып килгеләй. Тевкилев түрә үҙе был яҡ башҡорттары, уларҙың көнкүреше, шөғөлө, ер-һыу биләмдәре, ҡорал-яраҡтары тураһында Ҡыҙрастан, ҡай саҡ бүтәндәрҙән күп нәмә һораша, төпсөнә. Алдарга ла мөрәжәғәт иткеләй. Ләкин тархан бик үк сиселеп китмәй. Түрәнең бүрәнә үтә бүре күргәнен, шымсылыҡ ҡылғанын һиҙмәй буламы. Шыма, хәйләкәр, аҫтыртын әҙәмгә оҡшай был мырҙа. Мәскәүҙә булганда, Ҡазанга тейешләй байтаҡ нәмә ишетте Алдар уның хаҡында.

Тевкилевтәр боронғо мырҙалар тоҡомонан икән. Уларҙың Уразгәли тигән ата-бабаһы ҡан эскес бер әҙәм булып, хан замандарында халыҡты ҡан-йәш илатҡан, киҫкән-ҡырған башкиҫәр яманаты сыҡҡан, тиҙәр. Уразмәмәт исемле улы, Иван Грозныйға баш һалып, элекке мырҙалығын һаҡлап ҡала алған, ти. Тоҡомдаштарының, татар халҡының ҡанын ҡойған. Уның улы Мамыштан Ҡотломөхәммәт донъяға килгән. Бер заман сирмеш, муҡшы, сыуаш, татар халыҡтарын көсләп суҡындырыу киткән. Дәүер елена танауы һиҙгер мосолман Ҡотломөхәммәт, суҡынып, христиан диненә күскән — Алексей Ивановичҡа әйләнгән. Суҡынмыш татар мырҙаһы шулай ата-бабаһының биләм ерҙәрен тотоп ҡалған, халыҡ ҡуҙғалыштарын баҫтырып, иҙел буйҙарында йәнә яңы биләмдәр алған. Аҙаҡ ниндәйҙер кадет корпусындамы уҡыған, тиҙәр үҙен. Урыҫса грамота алған, көнсығыш телдәрен үҙләштергән, хәрби белеме булған.

Ҙурыраҡ түрәлек ҡыҙыҡтырған Тевкилевте. Мәскәүҙә Сит ил эштәре коллегияһында тылмас булып эшләп йөрөгәндә, хәрби походҡа ҡушылыуына бик ҡыуанған ул. 1722 йыл Петр Беренсенең Персия походына. Һыу юлы менән ул Әстрханга килеп еткәс, рус кавалерияһы составында Каспий диңгеҙе буйлап походта ҡатнашҡан. Тарҡы ҡалаһы солтаны Ғәҙелгәрәйҙең Петр батшаға үҙе ирке менән баш һалыу церемонияһында ул Ҡантимер кенәз батшалығындағы тылмастар төркөмөндә булған. Ләкин ул бында, аҙаҡ, Дербент ҡалаһына ингәндә лә, хәрби яҡтан да, тылмас булып та күҙгә күренерлек әллә ни эш күрһәтә алмаған. Тик тамам баш һалып бөтмәгән ҡумыҡ солтаны Мәхмүт Үтәмештең ауылдарын яндырғанда ғына, ут үртәүсе булып алда йөрөгән. Ҡулға төшкән ҡумыҡтарҙы, баш һалһалар ҙа, рус түрәләренә баш бирмәҫ баш киҫәрҙәр итеп күрһәтеп, аҫтыртып үлтерткән.

Элегерәк бер бәхет ҡапҡаһы асылырҙай булған икән. Бер саҡ Петр батшаға Тевкилевте көнсығыш халыҡтарын белеүсе һәйбәт тылмас тип тәҡдим иткәндәр. Уны батша шымсы итеп Ҡаҙағстанға, ары Бохараға ебәрергә самалаған. Ләкин шул осор Хиуа ханлығына Бекович-Черкасский кенәздең илселеге уңышһыҙ бөтөп, яңы сәфәр ҙә өҙөлөп ҡалған. Илселеге итеп, ҙур ғына ғәскәр менән барып, элекке ҡабарды кенәзе Дәүләтгәрәй — хәҙер, суҡынгас, Александр Бекович-Черкасский кенәз — Амударъя тамағына етеп, ҡолға ҡора башлаған икән, хан ғәскәре тегеләрҙе уратып алып, һеҙ илселәр түгел, баҫҡынсылар, тип ҡырып ташлаған ти. Ә кенәздең үҙен әсир ҡылып, Хиуа ханы тиреһен тунатып, баш тиреһенә кәбәк тултыртып, ғибрәт өсөн бағанаға аҫтырып ҡуйҙырған, тиҙәр...

Алдар уйлап та ҡуя, Тевкилевтең дә илселегенә ҡарағанда шымсылығы алда тормай микән? Башҡортостандың төрлө яғы хаҡында төпсөнә, Ҡаҙағстанда уйы ла юҡ кеүек. Сәфәрҙе лә һуҙа, күп туҡтай, ашыҡмай. Йорт-илгә оло түрәләй иркен эш итмәксе. Башҡорттарға түрәнең, әлбиттә, үҙенә яҡыны яҡшыраҡ. Әгәр был илселек ҡыр-ҡаҙаҡтарҙы рус хөкүмәтенә ҡуша алһа, башҡортҡа ла күпмелер тыныслыҡ килер, ҡаҙаҡ-башҡорт боронғо туған-ҡәрҙәшлеген яңыртыр ине. Ил-йорт ара именлек, татыулыҡ булыр кеүек.

Оҙон юлда Алдарға шулай төрлө уйҙар килгеләй, ул күбеһен яҡшылыҡҡа юрарға тырыша. Донъялар именлегенә, халыҡтар татыулығына ни етә.

Ана, урталараҡ һәйбәт көймәлә Тевкилев түрә үҙе бара. Ул, көймәһенең әкрен генә тирбәлеүенә киҫәнеп, ат тояҡтары, бышҡырыу тауыштарын тыңлай-тыңлай, төрлө уйҙарға батып бара кеүек. Көнө лә сыуаҡ, юлы ла тыныс, тәбиғәт матур. Былар түрәне татлы хыялдарға көйләй төҫлө.

Күптән көткән бәхете, бәлки, хәҙер асылыр. Бынау иҫ киткес хозур тәбиғәтле бай башҡорт ерҙәрен, тиҙ ышаныусан, тоғро хеҙмәт итергә әҙер тороусан башҡорттарҙы ҡулына тиҙерәк төшөрһә, хөкүмәткә өнһөҙ баш эйҙерһә, батша хәҙрәттәре эшен ҙурламай ҡалмаҫ. Ағиҙел, Яйыҡ буйҙарында ҡәлғә ҡорор уңайлы урындар бар. Ҡәлғәләр баш бирмәҫтәйҙәренә ҡәртә, тоҙаҡтар булыр. Мәғдән, алтын булырына ышаныс хәбәрен дә батша буш итмәҫ. Үҙенә ҙурыраҡ түрәлек бирһәләр, ул ни ҡылырға белер ине. Башҡорт ерҙәренән быны тигән биләмдәр алһа...

Илсе түрәнең уйҙары тағы алғараҡ йүгерә: Ҡаҙағстанға илселек ниәте лә ғәмәлгә ашты. Ул кенәз Бекович-Черкасский булмаҫ. Һағыраҡ, хәйләкәрерәк булыр. Абулхайыр ханды оло дәрәжәләр, байлыҡтар менән юмалар, солтан, старшиналарын ҡыҙыл малға ҡыҙыҡтырыр. Эше уңһа, ары Бохара, Хиуа юл тотор. Барыһын рус хөкүмәтенә шырт килтерер [1]. Шунан күрер инегеҙ Тевкилев мырҙаның кем икәнен... Бирһен хоҙай... боже, әле юлы уңай килеп тора, башҡорттар өлтөрәп йөрөй, Абулхайыр хандан һәйбәт хәбәр бар, илселекте ҡаршылау хәстәрен күрәләр...

Шулай көймәһендә тирбәлә-тирбәлә, татлы хыялдарға батып килә торғас, Тевкилев үҙенең иҙрәп йоҡоға сумғанын да һиҙмәне. Хыялы төш менән ялғанды.

Өнөндәге төшөндә тигәндәй, шул уҡ илселек каруаны, имеш. Ер буйы ер һуҙылған каруан сын-яһау икән. Түрәнең

---

[1] Шырт килтересү — ҡөрьән үптереп, хөкүмәткә тоғролоҡҡа, буйһоноуға ант иттереү.

көймәһе батшаларҙың алтын-көмөш менән биҙәлгән каретталарына оҡшаш, имеш. Һәр тарафында һыбайлы лейбгвардеецтар, свитаһы, йөк-йөк алтын-көмөш, ҡыҙыл мал. Һәр ылау көймәле, аттар ебәк-атлас япмалы. Һалдаттары барабан ҡағып, оркестр уйнап бара.

Бер заман һорнай тауыштары ишетелә. Тевкилев түрә күтәрелеп ҡараһа, офоҡтан ялтырап Нургәли солтан һанаттары килә. Солтан үҙе — көмөш эйәр-өпсөнлө күк атта. Артында мең кешелек сарбазы. Тевкилев үҙ тирәһен байҡаһа, үҙе дүрт дөйә өҫтөндәге шау алтын тәхеттә ултыра, имеш. Илселекте солтан мең ғәскәрен, һанат, старшиналарын юлдың ике яғына теҙеп, сәскәләр сөйөп, ура ҡысҡырып ҡаршылай. Ҡыр-ҡаҙаҡ йырауҙары думбыра сиртә, сибәр ҡыҙҙар, билдәрен һығылдырып, түрә алдынан бейеп, йылмайып үтеп тора. Түрәнең көймә-тәхете осҡандай йөҙөп бара, имеш. Уғаса алыҫта хандың аҡ кейеҙ өйө лә ялтырап күренә. Тирә-йүндә йылға, шишмәләр шылтырап ағып, ҡоштар һайрап тора. Хан урҙуғаһы — торғаны бер ожмах, илселек, гүйә, бер коронация инде. Ҡаҙаҡ ханы солтандары менән килеп, Тевкилевтең дөйәләр өҫтөндәге көймәтәхетенә баш эйә, ҡорьән үбеп анттар әйтә. Диңгеҙ кеүек йыйылған халыҡ ханының һүҙен ҡабатлай. «Ҡаҙаҡ-ҡайсаҡ ҡолдарым, һеҙҙе рус подданныйҙары иттем. Амин», — тип батшаларҙай ниндәйҙер суҡыныуға оҡшаш ишаралар яһай Тевкилев. Унан китә аҙна буйы оло байрам. Ҡымыҙ, ҡымран шишмә булып аға. Һәр кем ит, ҡаҙы һоғона, уйнай, бейей, көлә. Бер саҡ Тевкилев түрә ҡымыҙ шауҡымынан ҡыҙып китеп, шатлыҡтан тупсыларына, ике туп атырға бойороуы була, туп тауышына шаңҡыуҙан, бөтә ғәләм аяҡтан йығыла. Тевкилев түрә менән Абулхайыр хан икеһе генә ҡайҡайып баҫып тора, имеш. «Ай, беҙҙең түрә», — тип былларҙың тағы иҫ-аҡылы китә. Урта, Өлкән урҙа хандары Тевкилевкә килеп баш ора, рус подданствоһына күсә. Тағы һый, тағы оло туй: батырҙар ярыша, ҡапҡар-кәзә тартыш уйындары уйнала, аҡындар әйтешә, ҡоштар сөйөлә, ҡыҙҙар һөйөлә, туҡалдар[1] ҡосола.

Ҡаҙағстанда айҙар буйы һуҙылған был оло байрамдарҙы ишетеп, ҙур илселек килгәнлеген белеп, Хиуа, Бохара хандары ла бар йорт-иле менән Тевкилевкә килеп баш һала, олуғ илгә ҡушыла икән. Китә бит Тевкилевтең оло дан! Ул үҙе һаман шул дүрт дөйә өҫтөндәге алтын тәхеттә ултыра, имеш, Абулхайыр хан, Сәмеке, Әбелмәмбәт хан — ат өҫтөндә, Бохара, Хиуа хандары — ишектә, имеш, ти. Ил ара-

[1] Туҡал — йәш ҡатын (*ҡаҙаҡса*).

һында ҡош ҡанаттарына хат ҡыҫтырып осоп йөрөп тора, ти. Тәхеттәге бишмәтле мырҙаның өҫтө алтын погонлы, алтын төймәле хәрби кейем — генералиссимус чины менән алышына. Шунан бөтә тирә-яҡ халыҡ, бар ғаләм бер төҫ ярым хәрби кейем-униформа ала икән. Генералиссимус, күп тә үтмәй, өс бойороҡ бирҙе, ти. «Динегеҙ бөтһөн!» — тигән икән, шул яҡ ғаләм, сүкынып, әллә ниндәй булды ла ҡуйҙы, ти. «Телегеҙ бөтһөн!» — тигән икән, ни ҡаҙаҡ, ни татар, ни урыҫ түгел, әллә ниндәй керәшен телендә һөйләшә башланы, ти. «Ҡөнөгөҙ бөтһөн!» — тигәнендә, осһоҙ-ҡырыйһыҙ тирә-яҡты ут-туҙан ҡаплап алды, ти. Ни ғәләмәт, тәхет-ние менән Тевкилев үҙе күккә сөйөлгән. Ҡот осҡанда, тағы йән иңгән быға, янында Гавриил фәрештә, имеш. Үҙе ғаләмдә осоп бара. «Ниңә әле батша хәҙрәттәре байбисә Анна Иоановна, ә ир заты Алексей Иванович түгел?!» — тип уй ҡорһа, ни хикмәт был, «Алексей Иванович — батша хәҙрәттәре!» — тигән шау ҡолағына салына, имеш...

Ысындан да, бер шау-тауыштан уянып китә Тевкилев:

— Яйыҡ! Яйыҡ!

— Яйыҡ йылға, Алексей Иванович!..

Күҙен асһа, бер һыртты артылалар. Алда аҫтараҡ бер йылға үҙәне йылтырап күренә. Талсыҡҡан ылауҙары тағы һүҙыла төшкән. Һыбайлылар үшән генә килә. Ҡисәү көн болотлап тора.

Бер аҙҙан атын шаҡтай тирләткән Алдар килеп етте:

— Яйыҡ етәбеҙ, Тәфтиләү түрә. Мин кисеү таптым. Аръяҡҡа сығып ҡуныу хәйерле. Көн яуынлап китеүе бар.

Тевкилев татлы төшөнән айнып, йоҡоло тәндәрен яҙғылап, көймәһенән эйәртеүле эйәрле атҡа күсеп ултырҙы. Шағыр-шоғор килеүсе ылауҙарҙы уҙып, Яйыҡҡа ыңғайландылар. Юлдашы кисеүҙе күрһәтте. Алдар үҙе аты менән алдан төшөп, уның артынан Таймаҫ батыр, күсергә ултырып, тәүге ылауҙы кисеүгә индерҙе. Бер аттың ҡапыл һулғараҡ ҡайырып, йөктө ағыҙып, шуны тотоу, ярга сығарыу мәшәҡәттәрен иҫәпләмәгәндә, бүтән ылау, һыбайҙар ҡаты ағым кисеүҙе имен-аман сыҡты. Был кисеүҙе Алдар батыр тапһа ла, илсе түрә хөрмәтенә Тәфтиләү кисеүе (Тевкилев брод) исеме йәбешеп, ил теленә инеп китте аҙаҡ.

4

Өфөнән сығыуға икенсе ай киткәндә, октябрь баштарында ғына, илселек Нурғәли солтан иғәрен осратты. Тауын-тынһыҙ ҡарһылау тағы дүрт көн юлдан һуң илселәр төркөмөн Мәцгөб тигән далага илтеп ҡуйыу менән осланды. Абулхайыр хан йәйләүе унан күпкә арыраҡ ине.

Хан тантаналы ҡаршылау түгел, хәбәре-хәтере лә юҡ. Инсектер тын, шомло, хәүефле ине өн дала.

Боларыҡ хәлдәрҙе бер аҙ һөйләп ҡуйғайны ла, барын да әйтеп бөтмәгән икән шул солтан. Байтаҡ ҡаҙаҡ-ҡайсаҡ солтаны Абулхайыр хандың рус илселеген саҡырыуын һис хуп күрмәй икән. Ирекле баштарын һалырға ниәттәре юҡ.

Абулхайыр хан, Тевкилев илсе менән рәсми осрашҡансы, башта үҙ-ара йәшерен күрешеп һөйләшергә ниәтләне. Ләкин быны һиҙенгән солтандар хан аҡ кейеҙ өйөнә лә, Тевкилев тирмәһенә лә һаҡ ҡуйған булып сыҡты. Аптырашҡан хан менән илсе тәүге кисте Ҡыҙрас Муллаҡай башҡорт арҡыры ғына хәбәрләшә алды. Ҡыҙрас төнгә ҡарай хандан «Бөгөн төнөн һөйләшмәһәк, эштәр харап, ни яйын табып булһа ла далаға сыҡһын!» — тигән хәбәрен килтерҙе. Тевкилев бер һәләмә генә ҡаҙаҡ сәкмәне, алама малахайбүрек кейеп, бер байғош ҡиәфәтендә Ҡыҙрас менән ҡасабоҫа далаға сыҡты. Көҙҙөң күҙгә төрткөһөҙ ҡараңғы төн уртаһында ниндәйҙер бер һаҙламыҡ буйында хан менән күреште. Һөйләшеү ҡыҫҡа булды. Илсе башта ханға асыуланмаҡсы итте:

— Нисек инде алдан, бүтән хандар, солтандар менән килешмәй тороп, Мәскәүгә илселек ебәрергә, рус илселеген саҡырырға мөмкин? Хан һүҙе буламы был — ялған бит!

— Илсе түрә, ҡыҙма. Шуны бел, — тине хан тыныс ҡына. — Берҙән, мин бөтә ҡыр-ҡаҙаҡ хандары, Хиуа ханы исеменән тип оло итеп саҡырмаһам, рус илселеге башы минең алда шулай баҫып торор инеме? Илселек килер инеме бер ниндәйҙер ҡайсаҡ ханы өсөн тип? Йәнә, Урта, Өлкән йөҙҙөң һайланған баш сардары мин. Раҫ, минең улар исеменән һүҙ йөрөтөр хаҡым бар. Ә Хиуа ханы Илбарс хан — минә ике туған кеше. Былары хандар эше, илсе. Ҡыр-ҡаҙаҡтар урыҫ азаматтығына барыбер серт килтерер [1]! Быға шикләнмә. Һинә шул үтенес: былдай ауырыраҡ хәлдә беҙҙән серт килтереүҙе ҡапыл талап итмә. Башта арҙаҡлы старшиналарҙы, ҡаршыраҡ әҙәмдәрҙе бүләктәр менән һыйла. Күңелдәрен күр, уйҙарын аула. Йәнлекте лә ем менән әүрәтеп аулайҙар бит.

— Аулай алмаһам нишләрмен? Илселеккә хәүеф килмәҫме?

— Бүләк-һыйыңды йәлләмәһәң, килмәҫ. Минең әле старшиналар менән үҙемдең һөйләшәһем дә бар.

Шулай килеп сыҡты тәүге күрешеү. Сыҡты тиһәң дә, хан менән илсенең был төнгө һөйләшеүен һаҡлап торған

---

[1] Серт килтереү — ҡөрьән үбеп ант итеү (*ҡаҙаҡса*).

Ҡыҙрасты, ханды оҙатып ҡайтышлай, үҙен старшиналарҙың йәшерен ҡарауылы эләктереп алды. Үҙҙәре хан менән илсене шөйләмәй ҡалған икән. Таңғаса Ҡыҙрасты, хан менән илсене осраштырмағанмы, тип шикләнеп, туҡмап-яҙалап әйттерергә аҙапландылар. Ләм-мим һүҙ әйтмәгән башҡортто таң алдынан, һушһыҙ-һаңһыҙ итеп, Тевкилев тирмәһе эргәһенә килтереп ташланылар.

(Был хаҡта Тевкилев үҙе тотҡан серле «журналына»: «Ҡыҙрас ни саҡлы яҙалауға ла түҙеп, әйтмәүе менән мине — үлемдән, илселекте һәләкәттән һаҡлап ҡалды», — тип яҙып ҡуйған.)

Хәл ҡырҡыу ине. Хан иртүк илсегә үҙенең йәшерен йомошсоһон ебәрҙе, старшиналарға бирер өсөн бүләктәрҙе тиҙерәк килтереп еткерһен тип. Тевкилев уны, хан ант итмәйенсә, һый ярлығы һәм бүләктәрҙе бирә алмайым, тип ҡайтарҙы.

Хан бойороғо ике булмаç. Ул йомошсоһон шул уҡ талап менән кире ебәрҙе. Бүләктәр килеп етмәһә, илсенең дә, ханның да эше харап, тип өçтәгәйне.

Илсе күнмәй нишләһен, хан бойороғона буйһоноп, барырға мәжбүр булды барын алып. Барһа, хандың аҡ кейеҙ өйөнә бар арҙаҡлы старшиналар, солтандар йыйылған. Барыһының да йөҙҙәре ҡырыç, хәл үтә киеренке. Ингәс тә, аяҡ өçтө көйө илсе үҙенең килеү маҡсаты, батша грамотаһы хаҡында ҡыçҡа ғына нотоҡ тотто. Тантаналы булаһы был һүҙ, церемония хөкөм ителеүсенән яуап алыу һымағыраҡ килеп сыҡты. Хан шулай ҙа ултырған урынынан тороп, батша грамотаһын ҡуш ҡул менән алды, уны баш өçтөнәрәк күтәреп тирәләрендәгеләргә күрһәткәндәй итте лә үҙе ултырған мендәр янына һалды. Шунан илсене оҙата килеүсе Алдар менән Таймаç батша бүләктәрен: ҡондоҙ, ҡама тиреләрен, йомшаҡ күн әйберҙәрен, буçтау-тауарҙарҙы хан эргәһенә өйөп ҡуйҙылар. Хан илсегә үҙенең һул яғына ултырырға тәҡдим итте. Хан, солтан, старшиналар доға ҡылдылар. Тик Тевкилев кенә ни доға ҡылмай, ни суҡынмай ҡатып ултыра ине. Кейеҙ өйҙәгеләрҙең доғаһы ла илсенең һый ярлығын хуплау булдымы, әллә ғәҙәти йола инеме — ни булғандыр. Уғаса илсене, йомошҡа ингән малайҙай күреп, хан өйөнән сығып китергә бойорҙолар.

Илсе китеү менән, хан өйөндә ғауға ҡупты. Бер нисә старшина бер юлы өйөүле бүләккә ябырылды. Тартыш, өҙгөш, ҡысҡырыш китте. Хан ҡылысын һурып сығарғас ҡына, үҙенә яçҡынып килеүселәрҙән ҡотолғандай булды. Әммә асыулы ажғыр тауыштар, янауҙар туҡтаманы:

— Үҙ белдегең менән илде һатмаҡсы булдыңмы, хан?

— Батша һый-бүләген үҙеңә йоммаҡсыһыңмы?

— Тәфтиләү илсе түгел, шымсы ул.
— Тәфтиләүҙең тотоп башын киҫеү кәрәк!
— Суҡынмыш мырҙага — үлем!..

Быга ирекһеҙҙән шаһит булган Алдар илселеккә, Тевкилевтең үҙенә оло хәүеф тыуыуын ҡайтып һөйләне. Ҡото алынған Тевкилев йәһәт кенә үҙенә яҡындарын йыйып алды. Улар Алдар менән Таймаҫ тархан, Ҡыҙрас менән Көҫәмеш староста, Уразай менән Баҡый аҡһаҡал башҡорттар ине.

Илселекте, илсе түрәне нисек һәләкәттән ҡотҡарырга? Күптәр был һорауга яуап таба алманы. Бирелмәй, һуғышып үлергә, тине бер нисәһе. Алдар шундай тәкдим итте: «Кесе йөҙҙөң бик арҙаҡлы яугиры, старшинаһы Бөгенбай батыр бар. Уның далала, хан ҡашында абруйы оло. Уның нәҫел-ырыуы кейәүе Исәт батыр, ике туған энеһе Хоҙайназар мырҙа шулай уҡ бик абруйлы аҡһаҡалдар, өсөһө лә ҙур ырыу башлыҡтары. Улар менән һөйләшеп ҡарау, яҡлау һораш кәрәк. Бөгенбай батыр менән минең танышлыҡ, күпмелер дуҫлыҡ бар. Риза булһагыҙ, күрештереүҙе үҙ өҫтөмә алалам».

Килештеләр быныҡ менән. Алдар атына атланып, бынан ярты көнлөк Бөгенбай йәйләүенә сапты. Төнөнә инде Тевкилев тирмәһендә һөйләшеп, һүҙ беркетеп ултыралар ине. Тевкилев үлемдән ҡотолор өсөн ҡаҙаҡ батырына ниҙәр генә вәгәҙә итмәне, нисек кенә ялынманы, ниҙәр ялбарманы. Бөгенбай батыр, үҙ ҡәҙерен һәм ҡиммәтен яҡшы белгәндәй, үҙен тыныс тотоп, тау-тау вәғәҙәләргә, бүләктәргә лә иҫе китмәне. Илсе йәне лә уны артыҡ борсоманы. Аҡыллы батырҙы, старшинаны борсоғаны ҡаҙаҡ-ҡайсаҡ йорт-ил яҙмышы ине. Ул Абулхайырға ҡарағанда ла ҡаҙаҡ-ҡайсаҡтарҙың хәҙерге ауыр хәлдән сығыуы Рус дәүләтенә һыйыныуҙа икәнен яҡшы белә. Жунгар ябырылыуына сик ҡуйылырын тоя. Башҡорттар менән мөнәсәбәтте яҡшыртыу, туғанлыҡты нығытыу ҙа бик мөһим. Рус иле, уның азаматтары менән туған-дуҫ булғанда ғына, ҡаҙаҡ иленә именлек, тыныслыҡ киләсәк. Рус илселеген, Тевкилевте тынысландырғандай һәм вәғәҙәһен йомғаҡлағандай итеп, Бөгенбай батыр шулай тине: «Беҙ, ҡаҙаҡ-ҡайсаҡтар, урыҫтар, уның башҡорт, ҡалмыҡ, бүтән азаматтары менән татыулыҡ, дуҫлыҡ эстәйбеҙ. Абулхайыр хан, уның яҡлы старшиналар урыҫ иленең азаматтары булырга әҙер. Илселек беҙҙең һөйләшеү буйынса килгән. Борсолма, илсе түрә, илселекте, үҙеңде ҡыйырһытыуға, үлемгә бирмәбеҙ. Азаматлыҡты яҡларбыҙ. Батыр һүҙе бер булыр».

Тевкилевтең эсенә йылы инде, йөҙөнә әҙәм төҫө керҙе. Батыр киткәс, түрә Алдарға, ғүмерен һаҡлап ҡалыуһа,

мәңге дуҫ булырға, башҡорт ил-йорт мәнфәғәтен яҡлашырға, тағы әллә ни саҡлы вәғәҙәләр бирен бөттө. Илсе түрәлә ил ҡайғыһы түгел, йән ҡайғыһы ине.

Әммә барыһы өсөн яуап бирәү, үлем йә ҡалым алда ни әле, — ҡыр-ҡаҙаҡ далаһында.

Унынсы октябрҙә старшиналар йыйыныи йыйҙылар. Сикһеҙ даланың яҙылмаған йолаһы буйынса, был саҡ илгә хан түгел, йыйын хужа. Шуға уның йыйылыр урыны ла хандың аҡ кейеҙ өйө түгел, ә өс кейеҙ өйҙө берләштергән ғәләмәт ҙур махсус тирмә майҙаны ине.

Йыйын, борониоса, байрамсаға оҡшамай. Төнлөк, кирәгәләр тартып ҡуйылған. Йыһаз да бик затлы күренмәй. Өс тараф япма ишектә уҡ-һаҙағы, ҡылысы әҙер һаҡсылар. Тик хандың теләүгәрҙәре генә юҡ.

Абулхайыр хан үҙе ҙур тирмәнең һул тарафынан ултырған. Уң яғында Бөгенбай, Исәт батыр, Хоҙайназар мырҙа, һул яҡлап Нурғәли солтан, Тевкилев илсе, Алдар, Таймаҫ батыр, бер нисә старшина. Түрҙә ике аҡһаҡал бей. Уң тарафта Сырлыбай, Батур старшиналар, солтандар, батырҙар.

Түрҙә түшәк тә түрәймән, ти. Түрҙә түшәктә ултырған Тиләү аҡһаҡал бей йыйынды асып, тәүге һүҙҙе ханға бирҙе. Дөрөҫөрәге, рус илселеге килеү айҡанлы хандан һорау, яуап алыу башланды. Абулхайыр хан илселектең килеү сәбәбен, рус хөкүмәтенән ярҙам һәм яҡлау көтөүен, жунгар ил баҫҡынсыларынан ҡотолоу әмәлен ҡыҫҡаса аңлатырға тырышты.

— Урыҫ илсеһе ярҙамға ғәскәр менән килгәнме? Әллә боғалаҡ менәнме? — тип ярһып сыҡты Сырлыбай старшина. Ярым мыҫҡыллау тонына күсеп, Тевкилевкә өндәште. — Хан әйтмәһә, һин әйт әле, Типкелә, нәмә беҙҙе, ҡаҙаҡтарҙы, типкеләргә, боғалаҡ һалырға йөрөүме?

Йыйын шаулаша башланы. Тевкилевкә яуап тотаһы ҡалды:

— Хөрмәтле хан, солтан, старшиналар! Мин һеҙҙең Абулхайыр хандың яҙма үтенесе, Кесе урҙаның Ҡотломбәт бей менән Сәйетҡол батырҙың илселеге Мәскәүгә килеп һорауы буйынса, олуғ Рәсәй иленең илсеһе булып килгәнмен. Батша ғалиә йәнәптәренең грамотаһы, һыйлы ярлығы менән. Илселек үҙ белдеге менән йөрөмәй.

— Әйтеп бир әле ул ярлыҡтың төп шартын?

— Рус иленең подданныйҙары булыу, кескәй яһаҡ түләү. Дуҫ-татыу йәшәү, үҙ-ара ярҙамлашыу. Рус хөкүмәте ҡаҙаҡ-кайсаҡтарҙы дошмандарынан һаҡлашырға вәғәҙә итә. Күршеләр менән татыу йәшәү.

— Илсе түрә йомшаҡ әйтеп ҡаты ултыртмаҡсы, — тип һүҙ башланы Батур старшина, шау-шыуҙы баҫырға тырышып. — Ҡөрпәүле тоҙаҡҡа төшөргә — бында бит ҡуяндар йыйылмаған. Төркисә ярлыҡ менән танышбыҙ, тәүелде ил [1] хаҡында һүҙ бара. Тәүелде — ул муйынға тоҙаҡ тағылды. Ҡулға богал һалынды. Бына һинең ярлығыңдың әрәсәһе [2], түрә.

Сырлыбай старшина ханға төбәлде:

— Абулхайыр хан, һиңә бит старшиналар, ил аҡһаҡалдары урыҫтар менән аман, татыу йәшәргә тип, илселәр ебәрергә ҡушты. Ә беҙ бит тәүелде ил булыу, баш һалыу һораманыҡ. Был ни хикмәт? Хыянатмы? Йоланы боҙоумы? Нисек һин, боронғо йоланы боҙоп, Ҡасим хан, Хаҡназар хан, Тәүкә хандар ҡанунын емереп, старшиналар йыйынын йыйып хәл итмәй, үҙ белдегең менән быны эшләнең?

Аҡһаҡалдар, йәмәғәт, боронғо ҡаҙаҡ йолаһын боҙғаны, хандар ҡанунын һанламағаны өсөн Абулхайыр хан үлем язаһына хаҡ.

Тағы шау-шыу ҡупты, бөтә йыйын хәрәкәткә килде:

— Хыянатсы — хан түгел.

— Ханға — яза!

— Ханға — үлем!

Абулхайыр хан ярһып аяҡ үрә баҫты.

— Нимә, мин ханмы әллә ҡоро йәнме? Хоҡуғы бар, хаҡы юҡ кеше ханмы ни? Яу килгәндә, Абулхайыр хан кәрәк, сардар башы кәрәк. Ә дау килгәндә, старшиналар баш, ханға һан юҡ. Шулаймы? Сырлыбай старшина, һин бик күп беләм йәнә батыр ҙа булғас, бына ҡылысым, — шул саҡ Абулхайыр көмөш ҡынынан ҡылысын һурып сығарҙы. — Ҡалмаҡ ҡырылған, Сарысу, Бәдәм, Ыңғырай, Яйыҡ яуҙарын кискән, йөҙәрләгән дошман башын киҫкән яу ҡылысым! Ҡулыңдан килһә, сабып өҙ ханыңдың башын!..

Йыйын тып-тын ҡалды. Хандың ҡындан һурылған ҡылысы кире ҡынға ҡанһыҙ инмәҫен йыйындағылар яҡшы белә ине. Шом, ҡурҡыу ураны барыһының йөрәген.

— Старшинаға бәйелде [3] булғансы, батшаға тәүелде булыу йөҙ артыҡ, — тине кинәйәле итеп хан һәм, ҡылысын шул көйө эргәһенә ҡуйып, кейеҙ урынына кире ултырҙы.

Шаңҡыбыраҡ ҡалған бей йыйынды дауам итә алмай йөҙәне.

---

[1] Тәүелде ил — вассалитет, бойондороҡло ил.
[2] Әрәсә — асылы, төп мәғәнәһе.
[3] Бәйелде — бәйле, буйһонған.

Яңынан һүҙ алырға мәжбүр булды Тевкилев илсе:

— Рус илселеген бындай янъял аптырата. Илселек даулашырға түгел, туғанлашыу, именлек ниәте менән килде. Дау, янъял — беҙгә ят. Россия иле — олуғ дәүләт, бөйөк мәмләкәт. Уға ҡаҙаҡ-ҡайсаҡтар артыҡ хәжәт түгел, һеҙҙе ул көсләп ҡул аҫтына алырға, буйһондорорга йыйынмай. Россияға подданный булырга теләйһегеҙме-теләмәйһегеҙме — үҙ ихтыярығыҙ. Күршеләрегеҙ башҡорттар, ҡалмыҡтар үҙ ихтыярҙары менән Россия азаматтары булды. Уның ундай подданныйҙары күп — Грузия батшалығы, Әйүкә ханлыгы, Ҡумыҡ солтанлығы, Ҡабарды кенәзлеге...

— Ҡабарды кенәзлеге тиһеңме? — тип һүҙен бүлде Батур старшина. — Һин, ҡабарды Дәүләтгәрәй кенәздең яҙмышын беләһеңдер бит. Әллә һин дә уның шикелле башта мосолман булып, аҙаҡ суҡынып, урыҫтарҙың шымсыһы булып киттеңме? Юлдар оҡшаш кеүек, Типкелә керәшен!.. Динен һатҡан илен дә һатыр. Һин хәҙер хан менән бергә беҙҙең башты һатмаҡсыһыңмы? Һатмай тор, үҙ башың осоуы бар, алланан йәйәү ҡасҡан, кем.

— Илсегә үлем юҡ, — тине Тевкилев, тыныс булырға тырышып. — Шуны белегеҙ: илсе башы ҡиммәт тора. Илсе ҡаны, ғәҙәттә, ил ҡаны менән түләнә. Рус туптарынан тыш башҡорт барымталары, ҡалмыҡ сабыуылдары булыу ихтималын да онотмағыҙ.

— Был керәшен мырҙа ҡурҡытмаҡсы итә түгелме? — тине бер старшина. — Етте. Сүбәк сәйнәүҙә мәғәнә юҡ. Ул беҙгә изгелекле илсе булып түгел, шымсы, ҡотҡосо булып килгән. Уны былай имен ҡайтарып ебәрһәк, ысындан да, ул яһил әллә нәмәләр өҫкөтөр. Ҡулда саҡта тотоп үлтереү хәйерле.

Күп старшиналар, был фекерҙе хуплап, шау-гөр килеп алды.

Тевкилев бөтөнләй ҡойолоп төштө, инәлергә, ялбарырға кереште:

— Зинһар, оло бәләле булмагыҙ, имен генә ҡайтарып ебәрегеҙ. Һис ни ҡылмаҫҡа, батшаларға бер ни башырмаҫҡа ант итәм. Һеҙҙең һаулыҡҡа ғүмер буйы ғибәҙәт ҡылырмын.

— Суҡынмыштың анты, ғибәҙәте хаҡ түгел.

— Мең... бин мең һум аҡса, йөк-йөк ҡыҙыл мал башым өсөн...

Шулай Тевкилевтең ни эшләргә белмәй ялбарган, анттар, тәүбәләр иткән шау-шыулы боларыңҡы мәлдә Алдар, киң күҙәле яурынҡы хан, батырҙар артынан һиҙҙермәй генә эйелеп барып, Бөгенбай дуҫының ҡолагына байтаҡ

низер шыбырларга яй тапты. Ул арала Бөгенбай, Исәт батыр, Хоҙайназар мырҙа үҙ-ара һөйләшкеләп алдылар, ханга ла низер еткерҙеләр.

Алдар шуны яҡшы тойҙо: илселектең һәләкәткә юлығынан, тырышһа, бары Бөгенбай батыр ҡотҡара алыр. Батырҙың ҡаҙаҡ-ҡайсаҡ илендәге оло данын, абруйын яҡшы белә. Ҡараһы ла, түрәһе лә уны хандай күреп ололай. Арғын ырыуының ҡапъягалы араһынан, ҡара халыҡтан сығышы менән дә ул бик яҡын һәм үҙ. Яугирлыҡта уга тиң батыр юҡ. Ул бер нисә жунғар-ҡалмыҡ яуын ҡырған ғәскәр башы. Үҙенең, кейәүе, туғаны Исәт менән Хоҙайназарҙың бергә баш булған ырыуы хәҙер ете мең тирмәнән ашыу үҙе бер оло олоҫ [1].

Бөгенбай батыр ҡапыл ҡалҡына биреп «тоҡтаң!» тип ҡаты ҡысҡырып, уң ҡулын алға һоноу ыңгайына шау, болаорыҡ тынып ҡалды.

— Жәмәгәт, — тип һүҙен башланы ул, — ҡаҙаҡ әйткән, хан — ил башы, старшиналар ил ағаһы, батырҙар — ил ягаһы, тип. Онотмайыҡ ул нәкел [2] һүҙҙе. Батырҙар бар ерҙә — яу бар, түрәләр бар ерҙә — дау бар, тигәндәр. Бушҡа даулашыуҙа, бигерәк тә янъялда, мәғәнә юҡ. Батша илсеһе килгән, ил-көн хәстәре менән. Илсене үлтереү — яман, илгә яу килтереү булыр ине. Батша хәҙрәттәре исеменән илсе ҡаҙаҡҡа азаматлыҡ, татыулыҡ, аманлыҡ вәғәҙә итә. Шуны батша һый ярлығы менән ныгыта. Жунгар-ҡалмыҡ ҡара яуҙарынан ҡотолорға, ҡаҙаҡ йорт-илен ҡотҡарырға теләһәк, олуг урыҫ батшаһына, урыҫ иленә һыйыныуҙан, ҡанаты аҫтына инеүҙән дә яҡшыраҡ әмәл юҡ. Быны айыҡ аҡыл менән аңлау кәрәк. — Шунда ҡатыраҡ тауышын баҫып, батыр һалмаҡ тантаналы бер тонға күсте: — Мин, Бөгенбай батыр Түләк улы, бөтә ырыуым менән ҡаҙаҡтың Ҡесе йөҙ башы Абулхайыр хандың илселеге йомошон хуплап, олуғ урыҫ иленең азаматы булырға серт бирәм.

Алдар батыр ни арала хәстәрен күреп, Бөгенбай янына килтереп баҫтырған мулла, аяҡ өҫтө торған батыр ҡаршыһына сыгып, ҡалын ҡөрьән тотҡан көйө матур ғына мәҡәм [3] менән бер сүрәне уҡып ишеттерҙе. Бөгенбай батыр менән мулла бергә йәнә низер уҡып, икеһе лә ҡуш ҡуллап доға ҡылды. Бөгенбай, әйелеп, ҡөрьән үпте. Алдар батырҙың тәғәйен бүләктәрҙе ант иткән ҡаҙаҡ батырына тапшырыуы йыйынга, нисектер, йәп һәм йәм индереп ебәрҙе.

---

[1] Олоҫ — өлкә мәғәнәһендә.
[2] Нәкел — тапҡыр, мәргән һүҙ.
[3] Мәҡәм — тауыш.

һөйөнөсөнән Бөгенбай батыр: «Дат, Абеке!»[1] — тип Абулхайыр ханға мөрәжәғәт итте.

Абулхайыр хан, үҙе тағы рәсми тантаналырак төҫ биреп, ант итте, ҡөрьән үпте, батша грамотаһын, һыйлыҡ ярлығын ҡабул итеп алды. Шулай ҙа барыһын да хайран иткән тамаша ханға батша һый-бүләктәрен тапшырыу булғандыр, моғайын. Ҡыны, һабы алтын менән биҙәлгән ҡылыска, йылтырап торған кеш туиға, ҡара төлкө тиреле бүреккә, әллә ни саҡлы ҡыҙыл малга кемдең генә күҙе ҡыҙмаған икән.

Хан артынса Исәт батыр, Хоҙайназар мырҙа, Байымбәт, Балтабәк, Алсаҡ батырҙар, тағы егерме ете старшина рус иленең азаматтары булырға ҡөрьән үбеп ант иттеләр.

Рус илселеген бөтөрөргә, Тевкилев түрәне үлтерергә йыйынған йыйын шулай Бөгенбай менән Алдар батырҙың таһыллығы, ҡаҙаҡ батырының ҙур абруйы арҡаһында ҡаҙаҡ-ҡайсаҡтарҙың Кесе урҙаһын Рәсәйгә подданный итеп ҡушыу анты менән тамамланғандай булды.

Ләкин был тәүге аҙым, ауыр хаҡ юлдың башы ғына ине әле. Сырлыбай, Батур, Байморат, Баҡтыбай, Бабыбей һәм бүтән күп кенә старшиналар йыйынды танымай ташлап сығып киттеләр. Һатлыҡ йән шымсы Тевкилевте барыбер үлтереү менән янанылар.

Һалҡын аҡрап ахырының — октябрь айының болоттары кеүек, илселек тирәһендә ҡара болоттар тағы ҡуйыра төштө. Ҡире яҡ старшиналар Тевкилевтең һәр аҙымын күҙәтте, нисек үлтереү яйын эҙләне. Илселек йәшәгән төбәккә яҫҡыныу, аттарын, дөйәләрен ҡыуып алып китеү башланды.

Ант иткән Абулхайыр ханды ла аңларлыҡ түгел: әллә үҙенең хәле мөшкөл, әллә Тевкилевкә асыуы бар — ул үҙе илсе түрәне ҡыҫырға тотонды. Бер төн тағы йомошсоһон ебәргән хан: йөҙ аршынлап буҫтау, егерме ҡондоҙ, ҡырҡ ҡама тиреһе, егерме йомшаҡ күн әйберҙәре, бүтән тауарҙар талап итә, ҡаршы торған старшиналарҙы һыйлау өсөн тип. Тевкилев хәҙер аяҡ терәмәксе — бер ни бирмәне.

Хан бойороғо яңынан әйләнеп килде, тағы ҡатыраҡ булып: «Батша бүләген йәллəгәнсе, башыңды ая. Ике шәм араһында әйткән бүләктәр килеп етмәһә, үҙем баҫып тартып алам!»

Нишләһен инде түрә, баш йәл, хан һүҙе ике булмаҫ — ебәртте бүләктәрҙе. Ә хан белә, бай ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың ҡыҙғаны шул ҡыҙыл мал. Ҡурҡытып алған бүләк менән былар-

---

[1] «Дат, Абеке!» — Абулхайыр ханды ололап-кеселәп ихлас өндәшеү билдәһе.

ҙы һыйлағайны — старшиналар майҙай булдылар. Бүләк бәрәбәренә ханға, батшаға тоғролоҡҡа шырт ҡылдылар.

Уның ҡарыуы ҡалған старшиналарҙы шаштырҙы. Тегеләр асыуҙан, йәнә Бөгенбай, Исәт, Хоҙайназарҙар үҙ йәйләүлектәренә ҡайтып китеүҙән файҙаланып, илсе обоздарын ҡамап алдылар. Тевкилев тирмәһен баҫып, үлтерергә тип йыйынып бөткәндә, Алдар менән Ҡыҙрастың араға инеп, ярһыған старшиналарҙы көйләп, бүләктәр биреп, тағы бер әжәлдән һаҡлап ҡалдылар түрәне.

Былдай ҡырҡыу мәлдә илсенең ғүмеренә, илселеккә ҡарағанда үҙ йәнен һәм үҙ көнөн уйлаған хан, эштең фажиғәләр менән бөтөрөн тойоп, тиҙерәк был хәтәр ерҙән алыҫҡа, Арал буйҙарына күсеп китеү яғын ҡараны. Уның менән бөтә ырыуы, хан яҡлы старшиналар, батырҙар, илселек бергә ҡубарылды.

Арал буйҙары ауҡан ине. Ҡышлау урдуғаһында Абулхайыр яҡшы бүрәнә хан йортона ҡайтты. Старшиналарҙың, батырҙарҙың ҡышлаҡтары ла тыныс, йылы ине хәҙер. Ырыуҙаштары ҡамыш өйҙәргә инделәр. Илселек өсөн ҡышлаҡ һәйбәт урындар әҙерләнде. Хәүефтән ҡотолоп, иркен тын алып ҡалғас, хан үҙе бер нисә тапҡыр оло ҡунаҡ йыйҙы, үҙе ҡунаҡҡа йөрөнө. Рәсми осрашыуҙар уҙҙы. Илсе менән ҡай саҡ көндәр, төндәр буйы йәшерен кәңәшер булдылар, бергә һунар йөрөнөләр.

Ирәйеп алған мырҙа үҙен ысын түрәләй күрә башланы. Хәҙер ҡәҙер-хөрмәт көттө, бойороҡтар бирергә тотондо, бауыр баҫып, баҙарын күтәренке ҡуйҙы. Аҫтан ут йөрөтөү, шымсылыҡ эштәрен яйға һалып ебәрҙе. Нимәгәлер ҡулы ҡысыны.

Тевкилев хәҙер Абулхайыр хандан Хиуа, ҡарағалпаҡ хандарына илсек ҡармаҡ һалыу яҡтарын ныҡышты. Төрлө уй, план ҡорҙолар. Оҙаҡламай хан улы Нурғәли солтанды туғаны Абулфайыз Хиуа ханлығын Рәсәйгә ҡушылырға өндәмәккә оҙатты. Ошондай уҡ илселек вазифаһы менән Алдар тархан ҡарағалпаҡ ханына юл тотто.

Тарихта был 1731 йылдың аҙағы — аҡпан[1] башы ине.

## 5

...Усаҡта тандыр ғына ут яна. Өйгә аш-һыу еҫе таралған. Танауҙы ҡытыҡлап яңы бешкән нан-сүрек еҫе килә. Ҡайҙалыр әтәс тауышы, һыйыр мөңрәгәне ишетелеп ҡала. Ярым ҡараңғы өй эсе йылы. Кирәгәләргә таҫтамал, затлы ғына кейем-һалым эленгән. Иҙәндә эре дамбалы күк кейеҙ,

---

[1] Аҡпан — декабрь айы.

тирәләй келәм. Түбәндән түшәмгә суҡлы-биҙәкле янбау һуҙылған. Ярым асыҡ шағараҡтан, күҙҙе иркәләп, яҡтылыҡ төшә.

Иртән иҙрәп йоҡоһонан уянған Алдар кейәүе Теләнбиргәндең аҡ аҡтауында — иркен тирмәһендә түшәктә ятҡанын иҫләне. Нисәмә айҙар мосафир көнкүрештән, хәүеф-хәтәрҙәрҙән һуң был йылы кейеҙ өй, йомшаҡ түшәк, татлы ашһыу эсе, тыныслыҡ гәжәйеп донъя төҫлө тойолдо. Кисен ҡоҙа-ҡоҙағыйҙары, кейәү-ҡыҙы менән түңәрәк табын ҡороп ултырҙылар. Ашанылар, эстеләр, донъя хәлдәре хаҡында оҙаҡ гәпләштеләр, күңелдәре туйғансы һөйләштеләр. Өсөнсө көнгә китте хәҙер ҡоҙа ҡунағы, ҡәҙер-хөрмәт һыйы. Тыуған яғын, туғандарын үтә һағынған Нәркәстең атаһы килеүенә һөйөнөсөнөң иге-сиге булманы. Йүгерә-оса йөрөгәндәй, атаһын ҡәҙерләне, һый-хөрмәт күрһәтте. Алдар иһә бар хәстәрен, хәсрәттәрен онотоп, йүгереп йөрөгән, эле яңы теле асылып килгән ейәне Аҡбулат менән булды, уны етәкләп далаға сығып йөрөнө. Ҡейәүе менән бер көн ҡош һунарына барып әйләнделәр. Һунар ҡомары, далалар иркенлеге ирәйтеп ебәргәндәй итте.

Ләкин иркенләп ҡунаҡ булып ятыр саҡ түгел ине. Әмәлгә таянғандай, илсегә өс атсабар килеп төштө. Улар Яңыдарьянан ике көнлөк юл ары, ҡарағалпаҡ ханына барышлай юл өҫтөндә ятҡан тиерлек, өс башҡорт ауылы атсабары булып сыҡты. Ул тоҡомдаштары хаҡында Алдарҙың элегерәк ишеткәне лә, эле Нәркәсенең ауыҙынан төшөрмәй һөйләгәнен дә тыңлағаны бар. Үҙ башҡортон, оло батырҙы үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡыра килгәндәр. Юл ыңғайы булғас, Алдар һүҙҙәрен йыҡманы — йәһәт йыйындылар ҙа юлға сыҡтылар. Уларға ҡыҙы-кейәүе лә ҡушылды. Ташҡоҙоҡ тигән ҡом сүллеге тирәһендә йәшәйҙәр икән. Үҙ-ара яҡын уйпат ергә йолошоп ултырған өс ауыл. Торлаҡтарының байтағы балсыҡ йә ҡамыш өй. Ҡейеҙҙән ойҡаштырылған тирмәләр — ҡара өйҙәр күп. Уларҙың шаҡтайы бары байра, сентә менән ябылған. Күренеүенсә, көнкүрештәре фәҡиргә, ауырға оҡшай.

Саҡырыусы атсабарҙар ҡунаҡтарҙы өс ауылдың абруйлы аҡһаҡалы Бикйән ҡарт өйөнә төшөрҙөләр. Бикйән — күпте күргән етмеш йәштәр самаһындағы башҡорт ҡарты. Билэр ырыуы.

Бикйәндең улы Байгары өс башҡорт ауылына баш — старшина кеүегерәк кеше икән. Ике аҡ тирмәләре, ике балсыҡ өйҙәре бар. Мал-тыуарҙары ишле генә. Төп кәсептәре — малсылыҡ, ҡышын — һунар.

Бикйән аҡһаҡал менән Байғары Башҡортостандан килгән оло ҡунағы хөрмәтенә кисен оло табын ҡорҙолар. Та-

бынға өс ауылдың абруйлы кешеләрен, бер нисә ҡарагалпаҡ дуҫтарын, ҡоҙаларын саҡырҙылар. Аҡ тирмәләге табынды Бикйән аҡһаҡал үҙе алып барҙы. Һый ризығын ауыҙ иткәс тә, аҡһаҡал был алыҫ ҡарағалпаҡ сүллектәренә килеп юлыҡҡан башҡорттарҙың яҙмышын Алдар батырға, уның юлдаш ҡунаҡтарына ҡыҫҡа ғына һөйләп аңлатты.

— Беҙ үҙебеҙ Ыҡ, Сөн буйы башҡорттарыбыҙ. Биләр, байлар, юрмый ырыуынан күбебеҙ, — тип башланы ул. — Заманында беҙҙең ерҙәр, көндәр иркен генә ине. Батшаға яһағын түләнек, беркеткән ерҙәребеҙҙе биләнек. Бер саҡ батша түрәләре беҙҙе ҡыҫа, эшебеҙгә ҡыҫыла башланы. Яҡшы ерҙәрҙе тартып алғыланылар, урыҫ мужиктары, татар мырҙалары күсеп ултырҙы. Шул ғына етмәгән, дин яғынан ҡыҫырға тотондолар. Ҡөсләп суҡындырыу китте. Ҡалмыҡтар барымтаһы көсәйҙе. Халыҡтың түҙем-сабыры бөттө, уҡ-һаҙаҡҡа тотондо. Шулай Сәйет Йәгәфәр яуы ҡупты. Ыҡ, Сөн буйы башҡорттары ҡубарылып, еребеҙҙе тартып алып ултырған килмешәк ауылдарҙы үртәргә тотондоҡ. Китте һуғыш, китте үс алыш. Шул саҡ был яҡҡа ҡалмыҡтар ябырылды. Улары таларға, туҙҙырырға кереште. Ыҡ буйында бер бик ҡаты яу биреп ҡараныҡ, ләкин ҡыйратылдыҡ. Ҡалмыҡтарҙың Әйүкә ханы, башҡорттарҙы яҡлашам, урыҫ батшалығына яу асам тип, башҡорттарҙы ла үҙ ғәскәренә көсләп тигеләй йыя башланы. Бер-ике еңелһәк тә, тағы көс йыйып, Һамар ҡәлғәһенә һөжүм ҡылдыҡ. Урыҫ ғәскәренең ҡыҫымы арҡаһында ҡалмыҡтар менән көньяҡҡа сигергә, унан Йайыҡ түбәненәсә ҡасырға мәжбүр булдыҡ. Ҡалмыҡ тайшылары башҡорттарҙың бик күп малын әйҙәп алып китте, әсирҙәр алды. Улар менән бергә яулашҡан Ыҡ, Сөн, Базы буйы башҡорттарына башта артыҡ ҡағылманылар. Тирмә, мал, ғаилә менән ҡасып килгәс, ер, йәйләүлектәр бүлгән булдылар. Унан йә барымта ҡылып, йә урлап, мал, йылҡыларыбыҙҙы ҡыуып алып китә башланылар. Ҡыҙҙарыбыҙҙы, йәш сибәр ҡатындарҙы тартып алырға, көсләргә лә тартынманылар. Был мәлғүндәрҙән барыбер көн булмаҫын, ҡол хәленә ҡалыуыбыҙҙы уйланыҡ та өс йөҙ тирмәнән артыҡ башҡорт Арал буйҙарына ҡасып китергә йыйындыҡ. Төньяҡҡа, үҙ йорт-еребеҙгә юл ябыҡ ине. Берҙән, беҙҙең элекке ерҙәребеҙгә төрлө мырҙа, бай, баярҙар килеп ултырған, тинеләр. Икенсенән, әйләнеп ҡайтҡас та, ғаиләләребеҙҙе таратып, яуҙа ҡатнашҡан ирегеттәрҙе аҫыу, яза көтөр, тинеләр.

Айыуҙан ҡасҡан бүрегә тө. Арал буйҙары ла беҙҙе ауыр яҙмыштан араламаны. Жунгар баҫҡынсыларынан, ҡаҙаҡ, Хиуа хандарынан ыҙа сиктек. Ҡарағалпаҡ ханына килеп баш орҙоҡ, үләп-һыуһыҙ тигеләй буш Ташҡоҙоҡ сүллегенә

килеп төпләндек. Ҡола далала тирмәләребеҙҙе ҡорған, балсыҡ, ҡамыш өйҙәр теркәштергән булдыҡ. Ҡуй малы үрсеттек, һунар иттек. Шулай итеп, ете ят ерҙә йән аҫрап, ғүмер итә башланыҡ. Бында төпләнеүгә хәҙер ҡырҡ-ҡырҡ биш йылдар тирәһе. Минең ҡорҙаштар, яусабар ирҙәр үлеп бөттө. Хәҙер тыуған еребеҙҙе — атайсалды белгән, шунда йәшәгән тиҫтә самаһы ғына ҡарттар ҡалдыҡ. Урта йәштәгеләрҙең байтағы Яйыҡ буйында тыуҙы, йәштәребеҙ — яңы ерҙеке. Күптәр шуға Башҡортостанды, ата-бабаларының атайсалын беҙҙең һөйләү буйынса ғына белә.

Бына шулай беҙҙең яҙмыш юлыбыҙ. Далалағы ҡамғаҡ төҫлө... Ярай, күңелһеҙ тарих менән ҡунағыбыҙҙың кәйефен боҙмайыҡ әле. Табын күрке — яҡты йөҙ, һый-хөрмәт, — тип һүҙен осланы ла Бикйән аҡһаҡал, тағы, нисектер теремекләнеп алғандай, ҡунаҡтарҙы һыйларға, уйын-көлкөлө һүҙҙәр әйтергә тырышты.

Үҙ сиратында Алдар Башҡортостан хәлдәрен, унда ла тормоштоң еңел түгеллеген, аҡ батшалыҡ ҡыҫым-йәберҙәрен, оло яу йылдарын һөйләп алды. Әҙерәк үҙенең илселек вазифаһына ла ҡағылды. Унан уйын-моңға күсеп, ҡәҙерле тоҡомдаштарына бағышлап, үҙе менән йөрөткән ҡурайында «Азамат» көйөн уйнап ишеттерҙе. Аҡһаҡалдарҙың күҙе йәшләнде, йәштәрҙе ҡурай үҙе әсир итте. Үҙе лә бик әҫәрләнгән Алдар түҙмәне, «Урал» йырын йырлап ебәрҙе. Тирмәгә һағышлы моң таралды:

Күгәренкәй ятҡан Урал тауы —
Атай-олатайҙарҙың төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге.

Урал да ғына Урал, ай, тимәгеҙ,
Урал буйы ҡыҙырым сауҡа икән.
Уралҡайҙы маҡтап йыр йырлаһаң,
Күңелдәргә үҙе лә зауҡы икән.

Ҡарһыҙ ҡыш айының ҡола Ташҡоҙоҡ сүллегендә яңғыраған был башҡорт йыры табындағыларҙың һәр берсһен үҙенсә арбап, уй-тойғолар даръяһына һалды. Аҡһаҡалдарҙа тыуып-үҫкән ярын, яуҙа баштарын һалған ҡорҙаштарын хәтерҙәрендә яңынан уятты, йәштәргә йәшел урман-таулы ата-бабаларының төйәге ожмахтай булып күҙ алдына килде. Баҙыҡ ирҙәрҙең алыҫ тоҡомдаштары менән ҡыҙыҡһыныуы артты. Йөрәкһетте йыр барыһын.

Табын аҙағына табан, өҫтөнә биҙәкле күк күлдәге кейгән, оҙон толом сәстәренә тәңкәләр таҡҡан һылыу Нәркәс, атаһының алып килгән йыуасаһы итеп, Урал мәтрүшкә сәйен таҡмаҡлай-таҡмаҡлай тәҡдим итте:

Ағиҙелдең буйында
Үҫкәнгәме мәтрүшкә,
Тәнгә сихәт, йәнгә рәхәт
Бирәләр ул мәтрүшкә.

Йыр-моңдан хисләнепме, Урал мәтрүшкәһе тәмендән тәьҫирләнепме, ҡымран шауҡымынанмы, нисектер инде, бик тулҡынланып Байғары хужа үҙе һүҙ алды:

— Минең кеүек урта йәштәгеләр, йәштәр тоҡомдаштарыбыҙ йәшәгән Башҡортостанды, Ағиҙел, Ыҡ, Яйыҡ буйҙарын ата-әсәләребеҙ һөйләгәндән генә белә. Сахра кеүек матур бай яҡ тип белә. Әле оло ҡунағыбыҙҙың йыр-моңон тыңлағас, йыуаса мәтрүшкә сәйен ауыҙ иткәс, шундай уй уянды: ҡамғаҡ һымаҡ дала еленә еленләп йәшәгәнсе, атайсалға — Ыҡ, Ағиҙел буйҙарына кире ҡайтһаҡ икән. Башҡорттарыбыҙ ят итмәҫ, йәшәр ер-төйәк бирер ине әле. Кире ҡайтыуҙы йыйынға ҡуйһаҡ, илсе башҡорт батырының Ҡайып хан алдында юллауын үтенһәк ине, тимәксем.

Табын хужа һүҙен тыңлап шау-гөр килеп алды, хуплау һүҙҙәре ишетелде. Бөтәһе йөрәкһегән, күҙҙәре йәшкәҙгән ине.

— Мәтрүшкә тигәс, бер ҡыпсаҡ риүәйәте иҫкә төштө әле, — тине Алдар. — Беҙгә бөрйәндәр менән йәнәш ҡыпсаҡ башҡорттары йәшәй. Шуларҙан ишеткәнем. Борон ҡыпсаҡтар оло диңгеҙ буйы далаларында йәшәгән икән. Яулыдаулы заманалар күп булған. Бер ҡаты һуғышта күрше батшалыҡ быларҙы ҡыйратҡан. Ҡыпсаҡтар хандары менән ҡайҙалыр алыҫҡа, һилерәк урынга ҡасып киткән. Хандың бер энеһе китмәй ҡалған. Бер ваҡыт быларҙы еңгән батша үлеп киткән. Ҡалған ҡыпсаҡтарға бер аҙ иркенлек тыуған. Элекке йәйләүлектәренең күбеһен кире ҡайтарып алып, иркен генә йәшәй башлағандар. Энеһе хан ағаһына: «Батша үлде, ҡыпсаҡтар иркенәйҙе, тыуған илеңә ҡайт!» — тип сапҡын ебәргән, ти. Сапҡын килһә, хан яңы ерҙә үҙенсә төпләнеп алған, икенсе ханға ҡыҙын биреп ҡоҙалашҡан, үҙенсә баш-түш булып йәшәп ята, ти. Сапҡын хан энеһе әйткәнде һөйләп биргән. Ләкин хандың хәҙер тыуған иленә кире ҡайтырға һис самаһы юҡ, ти. «Миңә тыуған ерҙән арыу торған ер яҡшыраҡ», — ти икән. Энеһе өйрәтеү буйынса, сапҡын ҡыпсаҡ йырҙарын да йырлап ҡараған, тик хандың күңеле барыбер иремәгән, ти. Шунан сапҡын үҙе алып килгән емшән үләнен еҫкәткәйне, хан илап ебәрҙе, ти. «Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан булыуы яҡшыраҡ!» — тип тыуған иленә ҡайтырга булған.

Һеҙҙең йөрәкһеү ҙә шулай ғына булмаҫмы? Урал буйы ожмахтан матур булһа ла, тормош унда ла тамуҡтан кәм түгелдер.

...Икенсе көн тағы аҡһаҡалдар менән кәңәшеп, йыйында һүҙ төйнәп, ике йөҙ тирмәлек өс башҡорт ауылын үҙ илдәренә кире ҡайтырға Ҡайып хандан үтенергә тип хат биргәндәр Алдарға һәм, илсене хөрмәтләп оҙатып, изге теләктәр теләп ҡалғандар.

Юлсының юлда йөрөгәнс, илсенең илдәр күргәне яҡшы. Ханға саҡлы юғары ҡарағалпаҡтарҙың иң абруйлы старшинаһы Ураҙаҡ батыр менән Сәйетхажиҙы күрергә кәңәш иткәндәр илсегә. Уларҙы күндереү ханды күндереүгә бәрәбәр икән.

Ҡаратаулыға Ураҙаҡ батырға еттеләр. Ҡола тау итәгенә йәйелгән бик ҙур ауыл күберәк балсыҡ, ҡамыш өйҙәрҙән ғибарәт. Бер нисә түрәнең, шәйехтәрҙең ҙур өйҙәре, оло тирмә — аҡтауҙары ғына айырылыбыраҡ тора. Старшинаның аҡ кейеҙҙән көпләнгән аҡтауы уғата күркәм. Ул тигеҙ тумалаҡ түбәле. Ҡирәгәләре яҫы бау-билдәүҙәр менән нығытылған. Биҙәкле аҡ баҫҡырҙар үткәрелгән. Ҡаплама ишектә матур итеп биҙәлгән дыуашыҡ.

Хужаһы ла Алдарҙы илсе күреп, асыҡ йөҙ менән ҡаршыланы, кисенә манғыт ырыуының абруйлы аҡһаҡалдарын, шәйехтәрен йыйҙы. Аҡһаҡалдарҙың күбеһе башҡорт батырының элек ил йомошо менән мүйтәндәргә килеп йөрөгәнен ишетеп белә, ҡоҙаһы Тайып, кейәүе Теләпбиргән менән яҡшы таныш булып сыҡты. Һүҙ ҙә тиҙ беректе. Юғары ҡарағалпаҡтар, Абулхайыр ханға рус илселеге килгәнен күптән белеп, нисектер үҙҙәре лә бәйләнешкә инергә самалап торғандар икән. «Бирер ҡолона сығарып ҡуйыр юлына тигәндәй, хоҙа илсене төклө аяғы менән килтерһен, — тине Сәйет хажи, һүҙҙе йомғаҡлағандай. — Айҙың көнө аманда саҡ [1]. Иртәгә Ҡайып ханға бергәләп юлға сығабыҙ, илсе битеген [2], илсе теләген тапшырабыҙ. Иншалла, бергәләп урыҫ илселегенә барырға ла яҙһын!»

Бер төптән һүҙ төйнәлгәс, табындың ҡалған өлөшө һыйхөрмәт, рәхәтләнеп күңел асып ултырыу менән үтте. Ҡунаҡтар илсене ҡарағалпаҡтың үҙ татлы аш-һыуы — тандырҙа бешкән наны, ҡыуырҙаҡ балығы, турама ите, әскелтем шубаты менән һыйланылар. Был яҡтың иң шәрбәтле ҡауын, ҡабағын да ауыҙ иттерҙеләр. «Ҡарағалпаҡтар йылғы ашау-эсеүе хаҡында, өс ай — һауыным, өс ай — ҡауыным, өс ай — ҡабағым, өс ай — сабағым, тиҙәр. Шуның барына ла рәхим ит, илсе ҡунағыбыҙ!» — тип һыйланы хужа.

---

[1] Айҙың көнө аманда саҡ (ҡарағалпаҡ фразеологияһы) — яҡшы ваҡыт мәғәнәһендә.

[2] Битек — яҙыулы хат.

Алдар, гәзәтенсә, башҡорт моңон ҡурайында уйнап иштеттерҙе. Бер йырау аҡһаҡал, ҡасандыр ҡаҙаҡ, ҡарагалпаҡ, нуғай, башҡорттарҙың Иҙел, Яйык буйҙарында бергә-бергә йәшәгән замандары хаҡында һөйләп, үҙҙәренең яратҡан бер тулгауҙарын тулғап күрһәтте.

«Был тулгауҙың мәгәнәһе ҡобайыр булып башҡортта ла һаман йәшәй бит. Әүәлге бергәлек, татыулыҡ тағы берегергә булһын!» — тип йөпләне йырауҙы ла, кәңәште лә Алдар илсе.

Дүрт күл яғында йәшәгән Ҡайып хан илсене, үҙенең иң арҙаҡлы аҡһаҡалдарын, шәйехтәрен ололап ҡабул итте. Ҡәҙер-хөрмәт күрһәтте, хандарса һый, ҡунаҡ ҡорҙо. Ахырҙа илселәр ҡулына шундай тарихи хат тотторҙо:

«Олуғланмыш ғиззәтле падишаһымыз императрица, без ки, ҡарағалпаҡ ханы Ҡаип хан вә Морат шәйех илчегез Мәмет мурза артынан хат юлығып алдыҡ. Ҡазаҡ ханы вә бейләре кебек, ҡарағалпаҡ ханы вә шәйехләре урыс пухарасылығына[1] өткәнемез килгәнен белдерәмез. Вә сөйләшмәк өчөн Сәйет хажи илә биш атаҡлы бәкләремезне ебәрәмез. Аларға баш улыр Уразаҡ батырға хатымны бирәм мөһерем илә: Ҡаиб-Мөхәммәт-Батыр хан вә Муратшаһ».

Аҡпан айының — декабрҙең уңдарында иһә Алдар юлдаш башҡорто һәм Уразаҡ батыр башлығындагы һигеҙ кешелек ҡарағалпаҡ илселеге менән Абулхайыр ҡышлауына Тевкилев янына ҡайтып төштө. Бер көн һөйләшкәндән һуң ҡарағалпаҡ илселәре Ҡайып хан исеменән Ҡарагалпаҡстандың Рәсәйгә пухарасылыҡ булып ҡушылыуын, көнсығыш йолаһынса, ҡөрьән үбеп шырт менән нығыттылар. Тик улар яһаҡ түләү, аманаттар, әсирҙәр алмашыу тарауҙарын ҡабул итмәне. Быға күнергә мәжбүр булды Тевкилев түрә. Әммә Алдар иһә ике йөҙ тирмәлек өс башҡорт ауылы халҡын үҙ тыуған ерҙәренә ҡайтарыу тураһында килешеүгә ирешә алды. Ҡарагалпаҡҡа илселек шулай тиҙ һәм уңышлы барып сыҡты.

Тик Тевкилев тирәһендә хәлдәр бик шәп түгел ине. Түгел генәме, Алдар ҡарағалпаҡтарҙа булған ун-ун биш көн арала әллә ниндәй буталыштар, хәтәрҙәр тыуып өлгөргәйне бында. Бер көн Абулхайыр хан менән Тевкилев Арал буйына һунарга сыҡҡан икән, хан айырылып киткән сағында тегегә Сырлыбай старшина ҡаҙаҡтары менән һагалап һөжүм ҡылған. Тевкилев янында ун уҡ-һаҙаҡлы башҡорт та ике Өфө казагы ғына икән. Ҡаҙаҡтар һыбай тонон кило ти. Нишләргә, Таймаҫ батыр башҡорттар менән

---

[1] Пухарасылыҡ — подданство.

һыбайлыларҙы тоҡтарларға булып Тевкилевте ике дворяны менән тиҙерәк үҙ обоздарына ҡасырға бойора: «Беҙ үлһәк үлербеҙ, түрә иҫән ҡалһын», ти. Яман алыш китә, һуйыл, күҫәктәр өҫкә төшә, ат, кеше шаңҡый. Тевкилев ҡасып өлгөргәнсе алыша торғас, ун һыбайлы башҡорт тамам ҡамауҙа тороп ҡалған. Сырлыбайҙың ҡырҡ-иллеләп ҡаҙағы ҡамауҙағы туғыҙ башҡортто ебәреп, башлыҡтары Таймаҫ батырҙы йәрәхәтле көйө туҡмай-туҡмай әсир итеп алып киткәндәр. Икенсе көндө Сырлыбай янынан ҡасып килгән бер шымсы ҡаҙаҡ Тевкилевкә Таймаҫтың үлтергәнсе туҡмалыуын, әҙәм булмаҫын хәбәр иткән. Урыҫ түрәһенең үҙен тотоп тиреһен тунап үлтерергә йыйыныуҙарын әйткән. Йәне алҡымына килгән түрә тағы Бөгенбай батырға ялынған. Бөгенбай энеһе Хоҙайназарҙы ебәреп, Сырлыбайҙан ярым үле Таймаҫты йолоп алған. Ҡанһыҙ Сырлыбай бай сыҡмай ҡалган йән иҫәбенә йәнә түрәнең үҙенең йәнен дә малын көҫәп, күп һыбайлыһы менән үҙе лә килеп төшкән. Түрәнең үҙ йәне аяулы, ҡаҙаҡ байына әллә күпме тауар-мал биргән. Бай ҡыҙышып түрәнең өҫтөндәге шәп кейемдәрен дә һалдырып алған тиҙәр.

Абулхайыр хан менән Тевкилев араһы боҙолған. Рус түрәһе ханға баш бирмәй башлаған имеш. Боҙолоуҙың сәбәбе икенсерәк тә тиҙәр. Оҙон телдәр һүҙенсә, аҫтыртын тоҙ күҙ Тевкилев хандың йәш сибәр бисәһе Ҡараҡыҙ ханымға ғашиҡ булған имеш. Күҙҙәре ут уйнатып янып торған, ҡуңыр тығыҙ тәне эсендә ҡыҙыу ҡалмыҡ ҡаны ҡайнаған йәш байбисәнең үҙе арбауы ла бар. Ҡараҡыҙҙың ҡайнар ҡосағында булган, күрәһең, түрә. Йәш ханым ханынан түрәне ҡунаҡҡа саҡырыуҙы, үҙҙәре йышыраҡ барыуҙы талап итә башлаған. Ҡуйында саҡтамы, ниҫектер, Ҡараҡыҙ түрәгә бер серен дә сискән: хандың ҡалмыҡтар менән йәшертен бәйләнеше барлыгын әйткән.

Тевкилев аҫтан ут йөрөтһә, Абулхайыр хан да — төшөп ҡалгандарҙан түгел — аҫтан киҫеп, өҫтән ямаған. Башта Тевкилевкә бүтәндәрҙең ҡаныгыуын күрмәмеш булғылаған. Әллә Арал буйындағы хәлде лә үҙе ойошторған.

Бер саҡ түҙмәгән хан, яман бер бойороҡ биргән: Тевкилев бар байлығын, һүрентеһенә саҡлы ҡалдырмай, ханға килтереп еткерһен, тип йомошсоһон ебәргән, Сырлыбайса, «йә йәнең, йә малың?» — тип тә иҫкәрткән. Түрәгә йән ҡиммәт, ике һандыҡ, ике ҙур бәйләм ҡыҙыл малын ханга ебәрткән.

Сәмсел хәйләкәр хандың шулай бер аҙ үсе лә, көсө лә ҡанған, ахры: түрәне тамам шәрә ҡалдырған. Дошмандарының асыуын һүрелткән. Өҫтәүенә, түрәнән тартып алған малды таратып, күңелдәрен күргән быларҙың.

Ләкин ташҡа талау тейәме, үс-талаш барыбер туҡталмаған.

Тарихтың яңы, 1732 йылы, ҡышҡы бурандары менән Тевкилев ҡышлауы өҫтөнә тағы үслерәк өйөрмәләрен алып килде. Залим старшиналар илселекте ҡыҫмаҡлауҙан, иленә иҫән ҡайтһа, яу ебәрер, тамам башыбыҙҙы ашар, тип Тевкилевтең үҙен үлтерергә самалай башланылар. Көндән-көн янау, яҫҡыныу йышайҙы.

Түрәләрен ҡалҡандай булып һаҡлаған башҡорттарға бигерәк тә асыуҙары ҙур ине. Шуға, һыныҡҡа һылтау итеп, башҡорттарға ҡаныҡтылар башта.

Науруз байрамы айы кергән бер буранлы көндө Бабыйбей менән Жантүрә старшиналарҙың йөҙләгән атлы ҡаҙаҡтары Тевкилев обозын ҡамап алды. Ике һыбайлыһы килеп, йәнәһе, үткән бер бәрелештә старшинаның энеһен үлтергән башҡортто бирегеҙ, тип зилте [1] ҡуйҙы. Ҡанга — ҡан йәки ҡон шарты менән. Әгәр ул башҡортто ҡулдарына бирмәһәләр, теләһә кемен тотоп тураҡлауҙары бар. Йәки Тевкилев түрә, боронғо ҡаҙаҡ йолаһы буйынса, ҡон түләргә тейеш: йөҙ баш ат, бер тимер кейем, бер мылтыҡ, бер дөйә, бер шоңҡар. Түрә быға, баҫҡынсыға илсе кешене биреү ғәҙәте юҡ. Кireһенсә, баҫҡынсы ҡараҡтар илселеккә килтергән зыянды үҙҙәре түләргә тейеш тип яуап бирә.

Шулай ҡон талап итү барып сыҡмаһа ла, баҫҡынсылар туранан-тура һөжүм итергә баҙмай, обозды ун көн буйы ҡамап, һыуһыҙ, утынһыҙ тоталар, аслыҡ, сарсау менән бөгөргә самалайҙар. Ләкин бер көн Ҡарағалпаҡстандан сыҡҡан башҡорттарҙың яҡынлашып килеүен ишетеп, уларға ҡаршы аяҡланалар. Обоздан ярты көнлөк юлда таңға саҡлы бәрелеш бара. Бөгөнбай батырҙың килеп еткән һыбайлылары башҡорттарҙы аралап, баҫҡынсыларҙы ҡыуып ебәрә.

Йөҙ ҙә алтмышлап тирмәле башҡорт юлсылары килеп ҡушылғас, рус илселеге обозы көсәйеп, ҡорал тотор ир-егеттәре өс йөҙләп булып китә. Хәҙер илселек үҙе баҫҡынсыларға ультиматум ҡуя: башҡорттарҙың ҡыуып алып киткән 46 атын ҡайтарырға, илселеккә килтергән зыянды ҡаплатырға. Килешмәй сара ҡалмай: старшиналар үҙҙәренең әсир төшкән һәм яраланған кешеләрен ҡайтарып ала, үҙҙәре килтергән зыян өсөн 347 һум 56 тин көмөш аҡса түләй. Ҡыуып алып киткән аттарҙың утыҙ бише ҡайтарыла, ун бере бәрелештә йәрәхәтләнгән йә үлгән үҙ аттары өсөн тотоп ҡалына.

---

[1] Зилте — ультиматум.

Илселеккә йыл башындағы тәүге ҙур һөжүм шулайыраҡ бөттө. Бигерәк тә Бөгенбай батырҙан ҡурҡып, залим старшиналар бер аҙ баҫылып, шымып ҡалғандай итте.

Абулхайыр хан менән Бөгенбай батыр яҙғы науруз байрамы хөрмәте тип, асылда ҡарағалпаҡтарға илселектең уңышлы барып сығыуы, башҡорттарҙың тыуған илдәренә ҡайтып барыуы, дошман старшиналарын өркөтөү шәрәфенә, дүрт көн оло мәжлес ҡорҙолар. Бер көн ханда, бер көн батырҙа, бер көн ҡаҙаҡ мырҙала, бер көн Исәт старшинала. Илселәр, арҙаҡлы аҡһаҡалдар һәр саҡ түрҙә булды. Айырыуса Абулхайыр үҙендә ҡаҙаҡ йолаһын бөтә яҡлап еренә еткереп үтәргә тырышты. Оло һыйыр башын үҙе бүлеп, яҡын ҡунаҡтарына өләшеп сыҡты. Үҙ старшиналарын, батырҙарын саҡырып, ҡулынан ҡаҙы һоғондорҙо, ҡымыҙ, дөйә һөтөнән әҙерләнгән ҡымран һемертте. Илселәргә лә өлөш тейҙе. Тик был юлы йәш сибәр туҡалдары Нурбикә менән Ҡараҡыҙ ханымдың йөҙҙәре яҡтырып ҡай саҡ ҡымыҙ индергеләп сығыуҙары ғына күренмәне. Хандың күп хеҙмәтселәре лә хәҙер бүтәндәр ине.

Тыштағы ҡарлы-боҙло төн кеүек, йылы елдәр аралаш һалҡындары ла килеп бәрелгеләй торҙо. Ҡалмыҡтарға барымтаға барган Бахтыбай старшина ҡайтышлай рус каруанын талап, Тевкилев обоздары янынан үткәндә: «Тиҙҙән үҙенде лә талап китәм, һаҡлан», — тип янап китте байрам артынса. Бер көндө ҡарагалпаҡ старшинаһы Уразай батыр: «Һөйөнсө! Аҡ дөйәнең ҡарыны ярылды!» [1] — тип килеп инде һәм Арал буйы ханы Шаһтимерҙең Рәсәйгә азаматлыҡҡа ҡушылыу теләге хәбәрен еткерҙе. Ҡар башына ҡар етә, хан башына хан етә тигәндәй, Хиуа һәм Арал ханлыҡтарында һуңғы ун-ун биш йыл эсендә бер нисә хан үлтерелеп, йыш алышынып торалар ине. Абулхайыр хандың ҡулы ла аҫтан йөрөнө бында. Шуларға, бәлки, сик булыр.

Юл өҙөлмәҫ элек, ҡарағалпаҡтарҙан килгән башҡорттар Өфө ҡарай юл тарттылар. Йөҙ иллеләп ғаиләле, атлы, йәйәүле мосафирҙарҙы, баҫҡынсыларҙан һаҡлап, Хоҙайназар мырҙа һәм Түлебай старшина утыҙлап һыбайлы менән Өфөгә саҡлы оҙата барырға булды. Юл баҫып, мал талап кәсеп иткән ҡыр-ҡаҙаҡ старшиналарының, ҡараҡтарҙың өс йөҙ һыбайлыһы менән ҡанлы бәрелешкә инергә, баҫҡынсылығын ауырлыҡ менән кире ҡағырға тура килде юлда уларға. Байтаҡ ғаилә башы, бала-саға, ҡатын-ҡыҙ ҡола далаларҙа ҡәбер тапты.

---

[1] Аҡ дөйәнең ҡарыны ярылды (ҡарагалпаҡ фразеологияһы) — шатлыҡлы, һөйөнөс хәбәр мәғәнәһендә.

Ҡаҙаҡ далаларында яуҙарҙан тыш төрлө барымта-ҡарымталар, юл, каруан баҫыуҙар һис тынманы. Ҡалмыҡтар менән ҡаҙаҡтар араһында яулашыуҙар һаман дауам итте. Башҡорт-ҡаҙаҡ барымта-ҡарымталарына ла сик ҡуйылманы. Әленән-әле каруандар таланыу, оло юл баҫыштар тураһында ҡурҡыныс хәбәрҙәр ишетелә торҙо. Ярлыҡ менән беркетелгән антты тотоу, батша, хандарҙы һанлау әллә ни тойолманы. Күрәһең, көс-ҡеүәт менән ғәмәлдә ныҒытылмаҒан, һауаҒа осҡан һүҙҙең, ҡағыҙҙағы яҙыуҙың баһаһы ла шунса.

Хәҙер атһыҙ-ниһеҙ, ҡорал-ярағһыҙ ҡалын бөткән ун биш-ләп кешеһе менән Тевкилев түрә ни генә ҡыра алһын. Илселекте һаҡлай һәм йүнләп яҡлай алмаған Абулхайыр ханға ла ни һан. Ул үҙе баш бирмәҫ старшиналарынан ҡасып батша итәге аҫтына боҫмаҡсы. Хандың төп уйы: урыҫ батшаһынан Ур йылғаһы тамағында бер ҡәлғә һалдыртып, шунда үҙенә бер таш өй төҙөтөп, хәүефһеҙ йәшәү, шунан тороп, иле өҫтөнән хөкөм йөрөтөү. Ҡалғанын ни ҡылырға белер инде: баш бирмәгәндәрен тотоп төрмәгә яптырыр, бер нисәһен ғибрәт өсөн язалатыр, күптәрен Рәсәйгә оҙатыр. Шулай күрһәтер ине Абулхайыр хандың кемлеген.

6

Әле ҡыуан далала төрлөһө сығып тора. Ана, яуыз старшиналар рус полковнигы Гарберҙың каруанын баҫҡандар. Өфө воеводаһы ебәргән башҡорт каруанын талағандар. Урта йөҙгә башҡорттар үҙҙәре ҡарымтаға килгән. Күп мал, әсир алып киткәндәр, ти. Ил эсендә ҡалмыҡ агенттары, төрлө шымсылар солтан, старшиналарҙы, ҡара халыҡты бутап йөрөй.

1732 йылдың ноябрь айында тағы шомлораҡ хәбәр килеп төштө. Урта йөҙ ҡаҙаҡтары Абулхайыр ханға сапҡын ебәргән. Семекәй хан, Тевкилев түрәне, уның янындағы башҡорттарҙы ҡарауыл аҫтына алып, бер ҡайҙа ебәрмәҫкә бойорған. Башҡорттар Урта йөҙгә бик ҙур ҡарымта ҡылған икән! Күп мал ҡыуып алып киткәндәр, әсир алғандар. Мал, әсирҙәрен башҡорттар кире ҡайтармай, урыҫ илселеген ҡулдарынан ысҡындырмаҫҡа иҫәптәре.

Абулхайыр хан был хәбәрҙе алғас та, урыҫ илселеген имен-аман ҡотҡарыу өсөн, тиҙерәк Өфөгә кире ҡайтарып ебәрергә ҡарар итте. Хан, солтандарҙың киҫәтеүенән үҙе нисек тә, бәлки, ҡотолор. Ә илселәр имен ҡала алмаҫ. Юлға тиҙ йәһәтләргә кәрәк.

Ләкин хандың был уйын ҡайҙан белеп, ишетеп ҡалғандар, икенсе көндә иртүк йөҙәрләгән ҡаҙаҡ һыбайлылары, Тәңребирҙе старшина сарбаздары Абулхайыр хан ҡышла-

гын, Тевкилев обозын уратып та алды. Талаптары ҡаты: Тевкилевте йә улар ҡулына бирә, йә хан үҙ башы менән иҫәпләшә.

Илсене улар ҡулына биреү — үлемгә тапшырыу тигән һүҙ. Тевкилев урынына Таймаҫ менән Алдар батырҙы ебәрергә була хан менән илсе түрә.

Ноябрҙең егерме икеһендә дошман ҡорона килә Алдар менән Таймаҫ. Улар ниндәй хәтәргә барғанын тоя, үлем ҡурҡытмай батырҙарҙы. Әжәл менән йөҙгә-йөҙ, күҙгә-күҙ күп ҡарашҡандары бар. Тик илселекте нисек ҡотҡарырға? — шул уй биләй уларҙы.

Дошман ҡоро ҡоторонған йыртҡыстай булып ҡаршылай башҡорттарҙы. «Суҡынмыш мәлгүн Тәпкилә урынына истәктәрме? Ярай, баш урынына ике баш, — тип башлай ажарлы һүҙен Тәңребирҙе старшина. — Ала аяҡ хайын Тәпкилә үҙе лә ҡотола алмаҫ беҙҙең ҡулдан. Истәктәр әсир алған йөҙ ҡаҙаҡ — ир башы, ҡырҡ үлтерелгән кеше гүмере, ике мең ат, дөйә малы, таланған мал-мөлкәт өсөн ул баштар ғына етмәҫ. Ҡанға — ҡан, ҡонга — ҡон булыр. Әле шартыбыҙ шул, истәк аманаттары: талап алып киткән ике мең баш йылҡы малын, йөҙ ҡаҙағыбыҙҙы истәктәр кире ҡайтармай тороп, Тәпкиләне бер ҡайҙа ебәреү юҡ. Таймаҫ старшина, һин үҙ истәктәреңә барырға, шуны хәл итеп ҡайтырға тейешһең. Алдар старшина беҙҙә аманат урынына ҡала. Бүтәнсә ҡотолоу әмәле юҡ һеҙгә».

Яуап һүҙен Таймаҫ батыр тотто: «Тылмас Тәфкил түрәне бында ҡалдырып, башҡорттарға бараһы башым юҡ. Мин әйел батша хәҙрәттәре әмере менән бергә ебәрелгән, илсе, менән гел бергә булыр кеше. Тәфкил түрәне ҡалдырғансы, мин үҙем башымды бирергә әҙер. Мине үлтергәнсе язалаһағыҙ ҙа, күрәһегеҙ, мин һаман тере. Илселәрҙе үлтерергә йыйынғансы, күберәк үҙ башығыҙҙы уйлау мәғкүл. Хәҙер үҙегеҙҙең олуғ Рәсәй иленең азаматтары икәнегеҙҙе онотмағыҙ. Ә үҙ батшаңа тел тейҙереү, падишаһ хеҙмәтселәрен рәнйетеү — енәйәт. Ә урыҫ иленә енәйәтегеҙ әле аҙ булдымы ни: әле ҡасан ғына урыҫ каруанын таланығыҙ, Яйыҡ казактарының 16 ҡатынын һәм балаларын алып киттегеҙ. Башҡорттарҙың 6 мең атын урланығыҙ, 40 кешеһен үлтерҙегеҙ, күпмеһен әсир иттегеҙ. Ә берәм-һәрәм алып киткән кешеләрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Былар өсөн һеҙ, поддан-ныйҙарҙы, батша хөкүмәте башығыҙҙан һыйпамаҫ. Башҡорттар Урта урҙаға ҡарымта ҡылған тиһегеҙ. Был әллә булған, әллә юҡ, беҙгә мәғлүм түгел. Бәлки, ялған хәбәрҙер. Әгәр дөрөҫ булһа, ҡарымта бит барымтаға яуап. Әле лә бит әсир башҡорт балаларын ҡол итеп Хиуаға һатаһығыҙ. Бөтә был енәйәттәрегеҙ өсөн урыҫ батшалығы алдында

яуап бирергә тура килер. Асыуландырһағыҙ, олуғ падишаһ хөкөмө ҡаты булыр. Иң хәйерлеһе, үҙ ғәйептәрегеҙҙе күпмелер аҡлар өсөн урыҫ илселеген тотҡарламай, Тәфкил тылмас менән Рәсәйгә имен-аман оҙатыу.

Шул саҡ ҡорҙағылар Таймаҫтың һүҙен шау-шыу менән бүлделәр. Шашынып үлтереп ташларҙай булып, Таймаҫты бөрөп алдылар. Ҡыҫмаҡтан ысҡынып, Алдар арағa килеп инде. «Ҡағылмағыҙ! — тип ҡысҡырып ебәрҙе ул. — Илсене үлтермәк, үҙ илеңә яу килтермәк — шуны белегеҙ. Иң яҡшыһы, илселек аша килешеп, әсирҙәрҙе алмашыу, барымта-ҡарымталарҙы бөтөрөү».

Иләүҙәй ҡайнашҡан ҡор саҡ ҡына һүрелгәндәй итте. Бер старшина ҡысҡырып һөйләргә тотондо:

— Таймаҫ истәк, артын ҡыҫаһы урынға, үҙе янамаҡсы итә. Йәнең йәл булһа, янашма, Таймаҫ. Беҙ Тәпкил ала аяҡты үҙебеҙҙән имен ебәрәһебеҙ юҡ. Ул беҙҙең ер-һыуҙарҙы, бөтөн ерҙе күргән, бары хаҡында шымсылыҡ иткән әҙәм. Уның — беҙгә, беҙҙең уға асыу ҙур. Ул беҙҙе һый менән дә кинәндермәне. Бөтәһен аштырып, батшаларга ашырыр. Ул саҡ беҙҙең башҡа олораҡ бәләләр килер.

— Ҡабанбай старшина, — тип үҙенә тура мөрәжәғәт итеп, һүҙен бүлде Алдар, — Тәфтиләү мырҙа — хөкүмәт кешеһе, падишаһ илсеһе. Ул үҙ эше, үҙ көнө менән йөрөмәй. Беҙҙең көндәребеҙҙе, йүндәребеҙҙе ҡайғыртып йөрөй. Илдәрҙе, халыҡтарҙы килештереп, үҙ-ара аманлыҡ, татыулыҡ уйы менән. Ундай ил кешеһендә изгенән башҡа яман уй булмаҫ. Ул барлыҡ ғәйебебеҙҙе, рәнйетеүҙәрҙе ярлыҡар, ғәфү итер. Беҙгә, башҡорттарға ла, ҡаҙаҡтарға ла, үҙ-ара асыу-үстәребеҙҙе ҡалдырып, туғанлашырға, килешергә ваҡыт. Бер илдең, олуг Рәсәйҙең, азаматтарыбыҙ бит хәҙер.

Ҡор шулай һүрелә төшөп, яйғараҡ киткәс, Абулхайыр ханды күреп һөйләшергә, уртаҡ тел табырға тиеберәк таралыштылар. Урта урҙала ине аҙаҡҡы һүҙ.

Абулхайыр хан Таймаҫ менән Алдарҙың иҫән ҡайтыуына бик өмөт итмәгәйне. Башҡорт баштары менән генә бәләнән ҡотола алмаҫын самалап, хан тиҙерәк үҙенән илселекте ебәреүҙе ашыҡтырҙы. Ҡорҙан Таймаҫ, Алдар батырҙар менән бергә килгән ҡаҙаҡ старшина вәкилдәренә лә киҫә әйтте: «Олуғ Рәсәйгә азамат, тогро булырға ант иткән хан урыҫ илселегенең именлеге өсөн башы менән яуап бирә. Тоғролоғомдоң билдәһе итеп, ғәзиз улым Ирғәлене Өфөгә аманат итеп ебәрәм. Һеҙ, хәсис, ант боҙоусылар, антығыҙ башығыҙға төшмәй, үҙ ханығыҙҙың ҡанын ҡоя ҡалһағыҙ, ғаилә, балаларымды үлтереп бөтһәгеҙ, барыбер бер аманат улым ҡалыр. Бар үсте ата исеме менән генә түгел, батша

исеме менән үҙегеҙҙән алыр, ҡонон ҡайтарыр. Хандың ҡарары, һеҙгә ҡәһәре шул».

Хан әйтте — эшләне. Иртәгеһен атһыҙ-ниһеҙ ҡалған урыҫ илселеген, 15 атын биреп, ҡайтыр юлға таярланы. Уларға улы Ирғәле солтан менән энеһенең улы Нияз солтанды Өфөгә аманат итеп ҡушты. Хоҙайназар мырҙа, Түлебай батыр бер нисә һыбайлыһы менән илселекте Өфөгәсә оҙата барыр булды.

Юлға, тирә-яҡ һил булғас, төнөн сыҡтылар. Ул-был, ҡыуғын булмаһын тип, Абулхайыр хан түләнгеттәре менән илселекте таңға саҡлы типкен итеп ебәрҙе.

Илселек, икенсе аҙна тигәндә Яйыҡты үткәс кенә, иркенләберәк тын тартты. Аҙым һайын хәүефле осһоҙ-сикһеҙ ҡырпаҡ ҡаҙаҡ далалары артта ине инде. Йыл ярым буйына көн дә төрлө хәреф-хәтәрен кисереп, төрлөһөн күреп, илселек тарафынан бөйөк Рәсәйгә азаматлыҡҡа килтерелгән, Яйыҡтан Аралгаса, Иҙелдән Балхашҡаса йәйрәп ятҡан ҡаҙаҡ-ҡайсаҡ йорт-иле, әле ҡулға эйәләшмәгән ҡырағай януарҙай, берсә дулап, берсә тынып торғандай тойолдо.

Ҡышҡы ауыр юлда айҙан артыҡ өшөп-туңып, арып-талып илселек ҡыш башында Өфөгә ҡайтып төштө.

## АЛҒЫШ ҺӘМ ҠАРҒЫШ

Һиммәтле лә батыр эшкәйҙәре
Йөрәк остарының башында,
Һүҙкәйҙәре — телдә, исемдәре —
Урал ҡаялары ташында.

*(Халыҡ йырынан)*

Тәфтиләүҙең менгән, ай, аттары
Сантар ҙа ғына менән тимер күк.
Тәфтиләүҙәй ҡанһыҙ булыр микән —
Һуйҙы илде ҡырағай йәнлек күк.

*(«Тәфтиләү» йырынан)*

1

Биш йылдан һуң әлекке ике илсенең юлы тағы осрашты. Тик береһе — бик ҙур түрә, икенсеһе... тотҡон хәлендә.

...Өшөп-туңып, яман ауыртыныи уянды Алдар. Үҙе ҡаҡ таҡта өҫтөндә ята. Тирә-йүне дөм ҡараңғы. Ағылмаған камерала марттың шартлап торған төнгө һалҡыны. Танауҙы ярып әсе еҫ килә. Ҡаты туҡмалыуҙан бөтә тәне һыҙлай. Баш-ҡул — шеш. Иҙгеләнгән гөптөй ике аяҡты ҡуҙғатыр әмәл юҡ. Йүнләп ҡыбырлай алмағас, һыуыҡтан бөтә тән

ҡатып туңып бара. Бер яғы туңһа, икенсе яғы әҙ генә ҡыҙғандай итә. Тик һыҙланыуҙары үҙәккә үтә.

Нисек был һалҡын төрмәгә килеп юлыкты һуң ул? Яҙмыш ҡушҡанымы? Әллә үҙенең һағыраҡ булмауымы? Түрәләрҙең хаталаныуымы? Аҡ батшаларға хеҙмәт иткән батырҙы, ололанған тарханды, ил-йорт старшинаһын шулай итмәк — төрмәгә япмаҡ, туҡмап язаламаҡ яраймы?

Өшөп туңыуын, һыҙланыуын күпмелер онотоорға теләгәндәй, шулай һораулы уйҙарға бата, үткәндәргә ҡайта тотҡон.

Теге 1733 йылдың яҙында уҡ, Кесе һәм Урта урҙа ҡаҙаҡ ханлыҡтарын Россияга ҡушыуҙағы ҙур хеҙмәттәре өсөн, Алдар илсене императрица Анна Ивановна указы менән нәҫелдәренән-нәҫелдәренә күсер тарханлыҡ дәрәжәһенә икенселәй мәңгегә беркеттеләр. Уға байтаҡ бүләк, исемле ҡылыс тапшырҙылар. Көмөш һаплы, көмөш ҡынлы.

Хәҙер хеҙмәттәренең хөрмәтен күреп, дәрәжә-байлыҡ кинәнесен татып йәшәргә лә мөмкин ине. Ситтә күп йөрөүҙәр, тынғыһыҙ юламанлыҡ та етеп торор. Олоғайып барғанда ғаилә тыныслығын, түрәлек күркен күрергә ваҡыт. Дәрт тә, дарман да бар икән әле, дүртенсегә йәш һылыу бисә алып ебәрҙе. Иләүе менән шаулатып туй үткәрҙеләр. Оло-йәш ҡатындары ла түлле булды — тупылдатып ул-ҡыҙ табып торҙо. Олораҡ ете-һигеҙ балаһы үҙҙәре башлы-күҙле булып бөттө. Күбеһе башҡа сыҡты. Тархан айырыуса ике йыл самаһы маҙрап йәшәп ҡалды. Ул-килендәр, ҡыҙ-кейәүҙәр, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, дуҫ-иштәр менән ҡунаҡ-төшөш йыш булды, төрлө түрәләр ҙә үҙенән өҙөлмәне. Үҙенә ҡарар Бөрйән волосы тыныс, йорт-ер имен, ырыуҙаштары татыу булһын өсөн аш-һыуын да, малын да йәлләмәне. Бер мәл бәхет, байлыҡ хатта арты менән ингән кеүек ине уға.

Тик тиҙ арала тағы донъялар боҙолоп китте. Тағы шул тынғыһыҙ Тевкилев Мәскәүҙә әллә ниндәй хәрби экспедиция ойошторошоп, Өфөгә килеп төшкән. Яйыҡ, Ур буйҙарында ҡәлғәләр ҡормаҡсылар, заводтар һалдырмаҡсылар икән. Күрәһең, уйҙары башҡорттарҙы нығыраҡ ауыҙлыҡлау, биләмдәрен бүлгеләү, ахры. Быға ҡаршы күптәр йәнә ҡоралға тотондо. Башта Ҡазан юлы башҡорттары атҡа атланды. Уларға Нуғай, Себер юлдары ҡушылды. Аҡай батыр һыбайлылары Минзәләне алган имеш, Килмәк абыҙ зур яу менән Кириллов-Тевкилев экспедицияһын ҡамаған, Йосоп батыр бер драгун полкын ҡыйратып ташлаған икән, тигән өмөтлө генә хәбәрҙәр ишетелде. Унан карателдәр ауылдарҙы үртәй, яусыларҙы аҫа-киҫә, язалай тигән шомло хәбәрҙәр күбәйә башланы. Тевкилев үҙе генә лә Себер юлында бер ауылда мең кешене бала-сагалары менән бергә

туратып бөткән, бер һарайға йөҙ кешенс бикләп, тереләй яндырған, тип һөйләнеләр .

Алдар тархан был хәбәрҙәрҙе башта бик һағайып тыңланы, донъя болғаныуына эсе бошто. Үҙ волость халҡын ул тыныс йәшәргә, баш күтерҙәй эштәргә ҡыҫылмаҫҡа өндәне. Күрше-тирә старшиналарын, тархандарын аҡ батшаға тоғро булырға көңәш итте. Ул үҙен, хөкүмәт, рус түрәләре алдында яҡшатланып, ысын тархан, ышаныслы старшина итеп күрһәтергә тырышты.

Әммә илде яу ялҡыны ялмағанда, батыр йөрәге үҙ урынында түгел ине барыбер. Тыштан тыныс төҫлө булып, эстән көйрәгәндә, баш күтәреүселәрҙең күбәйеүен, айырым еңеүҙәрен ишетеп һөйөнөп ҡуйғыланы, ямандарына көйөндө. Мәгәр уға ил-йорт хәстәренә ҡарағанда үҙ көнө, үҙ дәрәжәһе ҡиммәтерәк ине, ахры, шулай ҙа. Май бөрә башлаған ҡарт йөрәген, батыр исҽмен тарханлыҡ дәрәжәһе, оло байлығы еңде шикелле. Уны элекке батырлыҡтары менән сәмләндергәндә лә: «Атаһы угым атылған, йәйәм сөйгә эленгән», — тип кенә ҡуйғыланы.

Күпме тыйып ҡарамаһын, Бөрйән волосынан да яуға ҡуҙғалыусылар байтаҡ булды. Элекке яу башлығының, батырҙың халыҡты кире һүреүенә ҡоро асыуланыу түгел, яҫҡыныусылар табылды. Утяткин комиссарға ер һатҡан өсөн әллә күпме даулашып йөрөнөләр.

Ерһеҙ ҡалыуҙан, төрлө ҡыҫым-йәберҙән ыҙа сиккән халыҡ батша ғәскәренә, карателдәренә оло юлдарҙа, тау араларында төркөм-төркөм булып һөжүм ҡылды. Ике яҡтан да күп кешеләр ҡырылды. Баш күтәреүселәр батша яҡлы тархандарға, старшиналарға ла тынғылыҡ бирмәне. Үҙ-ара ауылдарҙы баҫыу, мал-мөлкәтте талау ҡабатланып торҙо. Алдар менән бергә илселектә булған Таймаҫ Шайым тархан, Ҡудаш Рахманҡол старшина карателдәр яғында яу баҫтырып йөрөнө.

Алдар улай яу-фәләнгә ҡатнашманы. Ләкин үҙ күкрәгендә йәнтәстем йән көрәше көсәйҙе. Икеләнде. Шул уның ҡулын, уйын төрлө яҡҡа йөрөттө. Ышаныслы кеше күренеп, бер ҡулы менән Алдар Тевкилев түрәгә ышаныс хаттары яҙһа, икенсе ҡулы менән баш күтәреүселәрҙе төрлө хәүефязаларҙан йолоп алғыланы. Батыр йөрәге түҙмәне — яуға йәшертен әҙерлек башланды. Алдар ышаныслы кешеләрен ҡоралландырҙы, карателдәрҙән ҡасып килгәндәрҙе үҙ волосында йәшереп аҫраны. Күптәрен штраф түләүҙәрҙән ҡотҡарҙы. Оло исемен, дәрәжәһен, ышанысын ҡалҡан итте.

Ниңә икеләнде икән ул саҡ? Шуға үкенә хәҙер. Аңлашып, килешеп йәшәр замандар үткән ине бит. Бүре менән

һарыҡ ҡасан дуҫ булған? Үҙе элеккелэй яу алдында ҡылыс болған саба алмаһа, яу туплар, һүҙ көсө һалыр ине.

Ана, ышандылармы үҙеңә? Ҡәңәшләшеү тигән һылтау менән Тевкилев Һаҡмар ҡәлғәһенә саҡыртып алды. Алды ла, йәнәһе, кәңәшсем, ярҙамсым булырһың тип, 1737 йылдың йәйенән 1738 йылдың ҡышынаса ҡәлғәлә һаҡ аҫтында тотто. Ирекһеҙҙән тотҡон айҙары ине был. Ир-егеттәр ирек тип ҡан ҡойҙо, ә ул ҡәлғәлә ултырҙы. Ултырыуының шул бер файҙаһы булды икән, икеләнгән старшиналарҙың күбеһе, Алдар тархандың асылда һаҡ аҫтына алыныуын күреп, баш күтәреүселәр яғына баҫтылар. Тевкилев быға ҡаршы үҙенсә мәкер ҡорҙо. Тиҙҙән үҙе командир булып сыҡмаҡ каратель отрядына ярҙамсы итеп Алдарҙы саҡырҙы. Барып сыкһа, полковник бер юлы ике ҡуян атмаҡсы ине: Алдарҙы баш күтәреүселәр алдында палач итеп баҫтырыу, аҙаҡ артынан уҡ ебәреп йәнен йәһәннәмгә оҙатыу. «Батыр йәлләт хәленә төшә алмай», — тип кире ҡаҡты Алдар. Әлеге палач полковникка яуабы ла, баһаһы ла булды был. Юлдары күптән айырылғайны уларҙың.

Тевкилевкә ул юлы Алдарҙы ҡайтарып ебәрмәй бүтән сара ҡалманы.

...Ҡайтҡас, уны Ҡыуаҡан иләүсенә туйға саҡырҙылар. Дуҫы Абулхайыр хан туйына. Ырымбур крайы баш начальнигы Татищев фарманы менән хандың Башҡортостанға болаһы бөтөрөү өсөн ебәрелгәнен ишеткәйне ул. Ғәжәп, бола баҫтырыр хан башҡорттарҙа ҡыҙ ҡуйынына инер кейәү булып йөрөһөнсө.

Бәпәнәй старшинаның хан туйы барған ауылы Ҡалҡан күле буйында булып сыҡты. Алдарҙы баш ҡоҙалай күреп, ололап ҡаршыланылар. Хикмәт тә бар икән шул, ханға кейәүгә сығаһы башҡорт ҡыҙы Бөрйән яғы яғалбайлы ырыуынан имеш. Әллә кемдәрҙең күңелен арбар сибәр йәш кәләш.

Яңы еләндәрен кейеп, Бәпәнәй абыҙ төп хужа, баш ҡоҙа һәм мулла вазифаһында туйҙың никах алдын оңгәмәнән башлап ебәрҙе:

— Башҡорт менән ҡаҙаҡ борон-борондан күрше, ҡан ҡәрҙәш булып, ул-ҡыҙ бирешеп, туғанлашып йәшәгән. Хатта ҡаҙаҡтың өлкән ханы Хаҡназарҙың йәш кәләше башҡорт ҡыҙы сибәрҙәрҙең сибәре Аҡбала һылыу булған. Шул һәйбәт йоланы яңыртып, шул уҡ яғалбайлы ырыуы ҡыҙы Миңзифаны Абулхайыр ханға никахларға булдыҡ. Уларҙың ризалығын алдыҡ. Хан менән ҡыҙыбыҙ Миңзифа туйы илйортобоҙҙо күркәмләһен, туғанлығыбыҙҙы нығытһын, мәртәбәбеҙҙе арттырһын.

Алдар тархан Бөрйән ырыуы исеменән үҙ фатихаһын бирҙе, изге теләктәр теләне.

Никах, хан туйы һиммәт менән үтте.

Әлбиттә, туй бер йола, тышҡы тамаша ғына ине. Күптән инде ханды үҙ ҡулына төшөргән, үҙ ҡурайына бейеткән аҡыллы һәм хәйләкәр Бәпәнәй абыҙҙың Абулхайырҙы сымылдыҡҡа индереп, ебәк ептәр менән сырмауы ла ине быныһы. Старшина-абыҙға ныҡлы терәк кәрәк. Ул бола баҫтырырға тип килгән ханды боласыларҙы ҡурсыр яҡлашсы итте, кейәү яһаны. Шуға ялғап, Абулхайырҙың улы Хужәхмәтте Башҡортостанға хан итеп үҙенең һәм ханның мәртәбәһен йәнә күтәрмәксе. Абыҙҙың ниәттәр оло, тик ҡулдар ҡыҫҡа.

Алдар ҙа ҡурҙы ҡуҙғытып ебәрҙе: хан улы исеменән Башҡортостанға фармандар бирә торорға ла хаҡлы. Хан вә кейәү булып, үҙ ырыу-туғандарын, тәүкил[1] ил-йортто яҡлашырға лазым. Былай ҙа маһайырга торған ханга шул ғына кәрәк, башҡорттарҙы ҡурсылап, Өфөгә, Ырымбурға фармандар елде. Ырымбурға барғас та, ҙур рус түрәләре алдында аяҡ терәп, ҡылысын ҡынынан һурып һөйләшмәк иткеләне.

Ләкин үҙе лә тәүкил, үҙ эштәре мөшкөл Абулхайыр хан менән генә ниәттәре барып сыҡмаҫын яҡшы аңлай ине башҡорт башлыҡтары. Ниндәй генә әмәлгә тотоноп ҡараманы улар. Күпме кәңәш ҡорҙолар. Төрлөсә баш ваттылар.

Яуҙар бер ҡыҙып, бер һүрелеп дауам иткән 1739 йылдың йәйендә баш күтәреүселәрҙең башлыҡтары Нуғай юлы Тамъян волосына йәнә кәңәшмәгә йыйылды. Бында Алдар ҙа ҡатнашты.

Был саҡ күп кенә баш бирмәҫ старшиналар, батырҙар батша ҡулында ине инде. Кәңәшмәлә Төлкөсура батыр бары яулашыуҙы, үлгәнсе баш һалмауҙы яҡланы. Күптәр көс аҙлыҡҡа, тарҡаулыҡҡа зарланды. Сәйетбай батыр һөйләшеп килешеү яғын ҡайырҙы. Алдар Ырымбур комиссияһы башлығына вәкилдәр ебәреп, болала ҡатнашҡан өсөн ат менән штраф түләүҙән ҡотҡарыуҙы, төрлө бәлә-ҡазалар өсөн түләмдәрҙе бөтөрөүҙе үтенергә кәңәш итте. Петербургка аҡ батшаға бөтә башҡорттар исеменән үтенес хаты менән барырға рөхсәт һорауҙы кәрәк күрҙе. Кәңәш-ҡорҙагылар был фекергә күнә ҡуйҙылар. Әммә уны атҡарыуҙы Алдар тархандың үҙенә күндерҙеләр. Һин, тархан, ил-йорт алдында абруйлы, дәрәжәле кеше, батыр, хөкүмәт ҡашында билдәле, ышаныслы старшина, фәлән, фәләнһе. Бөтәһе үтен-

---

[1] Тәүкил — буйһонган.

гәс, нишләһең, күндә. Үҙ көңөшең — үҙ эшең. Вазифа ифрат ауыр ҙа, хәтәр ҙә: йә уңаһың, йә туңаһың. Уңыуы шикле ине, күпме ир-азаматтар шул юлда баш һалды. Әммә шундай ҡарарға килделәр: әгәр вәкилдәрҙең үтенестәренә ҡолаҡ һалмаһалар, үҙҙәрен тотоп япһалар, яңынан яуға күтәрелергә.

Ил йә йән тип, Алдар күпме йәндәр атманы, ниндәй тәүәккәллектәр ҡылманы. Һаҡлағас, хоҙай һаҡланы бығаса. Алдағыһы ла шулай булырға яҙһын. Тағы тәүәккәлләне.

Хәтәр юлға әҙерләнгәнсе ил-йорт хәстәрен күрҙе. Батырҙар, старшиналар менән һүҙ беркетте. Үҙ волосын яуға әҙерләүҙе үҙ өҫтөнә алды. Йәшерен тотҡан кешеләрен ҡоралландырҙы. Улдарына ныҡ таянды. Властар сапҡын ойоштораbыҙ, тип ҡурҡытыуҙарҙың буш һүҙ икәнен әйтеп халыҡты тынысландырҙы. Баш күтәреүселәргә ҡаршы сапҡында ҡатнашырға тип, Табын ҡолғаһенән килгән фарманды ла үтәмәне. Киреһенсә, яуап яуы әҙерлеген көсәйтте. Ҡулынан килгәндең, өлгәргәненең барыһын эшләргә тырышты ул.

Элеккесә асыҡ яуға сығырға ярһыны батыр. Ҡорал менән хоҡуҡ дауларга. Күпме кешене ут эсенә, үлемгә илткәнсе, ауылдар үртәткәнсе, башта властар менән һөйләшеп ҡарау, килешергә тырышыу хәйерлерәк, әлбиттә, килешеп булһа. Мәкер, тоҙаҡҡа эләгеп баштары китһә? Икеләнмәй, шикләнмәй мөмкинме ни?

Әмәлгә таянғандай, бер көн Һаҡмар ҡәлғәһе комендантты подполковник Останковтың атсабары килеп төштө Алдарға. Тарханды Ырымбур комиссияһы башлығы генерал-лейтенант Урусов үҙенә Һамарға һөйләшеү өсөн килеүен үтенә икән. Бынан алда уның саҡырыу хатын да алғайны. Генерал һынлы генерал, кенәз үҙе саҡыра икән, барырға, һөйләшергә кәрәк.

1740 йылдың март башында Алдар Иҫәнгилде тархан Теләү волосы старшинаһы Йәммәт Биккилде, Тамъян волосынан Сәйетбай Алҡалы батыр менән тәүәккәлләп бергә юлға сыҡтылар. Һамар ҡалаһы ҡарай. Ике аҙна эсендә Һамарға ла еттеләр. Ләкин генералға йәүкә булыу менән Урусов, һөйләшеп-нитеп тә тормай, вәкилдәрҙе ҡул-аяҡтарын быгаулатып, һаҡ аҫтында Минзәләгә генерал Соймоновҡа оҙатты. Бына ышан генерал-лейтенант, оло кенәз һүҙенә, ышаныс хатына.

Башҡорт эштәре комиссияһының башлығы Соймонов уларҙы башҡорттарҙан вәкилдәр булып һөйләшеү түгел, тотҡон, хыянатсылар итеп һорау ала башланы. Туҡмауға, ҡаты язалауға түҙмәй, икенсе көндө үк Йәммәт старшина йән бирҙе. Бер ауыҙ ҙа һүҙ ала алмағас, Сәйетбай батыр

менән Алдар тархан иҫһеҙ-һаңһыҙ итеп туҡмап ташландылар. Тағы ҡатыраҡ яза өсөнсө көндө лә ҡабатланды. Тағы...

Ҡупмегә түҙерҙәр. Йә көн-мал, йә ил-йорт әсөн йән фиҙа. Батырлыҡ, фиҙакәрлек, көрәшеү, яу яланында ғына түгел, яман язаларҙа ла һынала. Йәнде аҫрар тән бар бит. Ҡурғаш башлы ҡамсыға, сәнскеле суҡмарға түҙһә лә, утлы тимергә, осло беҙгә сыҙармы? Нисәнсе тәүлектәр инде хәҙер үҙеңдеке түгел тәндә сыҡмаған йән генә бар. Йән йәл түгел. Нисек...

Һуштан яҙҙы тотҡон.

## 2

Минзәләнең агас төрмәһенә ҡыйыҡлабыраҡ майҙан аша ҡалҡыулыҡта өйәҙҙең контора, түрә йорттары, бер-ике казарма, тағы вағыраҡ өйҙәр өймәкләшкәндәйерәк ултыра. Шулар араһында генерал торған Башҡорт эштәре комиссияһы йортоноң ҙур бер ҡунаҡ бүлмәһендә йоҡлаған Алексей Иванович Тевкилев таңға табан ни эшләптер бик һиҫкәнеп уянды. Һуңғы йылдарҙа йыш ҡына эҙәрләй башлаған шомло төш булды, ахрыһы. Ниндәйҙер шәүләләр, уттар күҙенә һаман сағылғандай ине. Башы ла һиңкеберәк тора. Кистән генерал Леонтий Яковлевич менән байтаҡ кәйефсафа ҡороп ултырғайнылар шул.

Йомшаҡ түшәгендә, йылы юрған аҫтында бер-ике әйләнгеләп-нитеп ҡараһа ла, Тевкилев кире йоҡоға китә алманы. Шулай йылы түшәгендә бошаланып ята-ята, иҙрәп, үҙенән-үҙе уйҙар донъяһына сумды.

...Ҡыр-ҡаҙаҡ далаларынан имен-аман ҡайтҡас, уга бәхет ҡапҡалары асыла башланы. Уны полковник итеп күтәрҙеләр. Мең һум ярлыҡаш аҡса бирҙеләр, тағы биләм ерҙәр билдәләнеләр. Теге татлы төшө ғәмәлгә аша башланы түгелме һуң? Хәҙер нисек шул көнсығыш яҡтарҙа ныгынырга? Башҡортостанда төпләнеп, башҡорттарҙы ауыҙлыҡлап, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡтарҙы мисәүгә еккәндә... Яйлап губернатор, унан хандарға хан булып алырға. Белер ине ул саҡ ни эшләргә!.. Буш хыял — томан, әбей батша хәҙрәттәренә — Анна Иоановнаға ымһындырыр тәкдимдәр кәрәк. Әүәл Петр Беренсе батша йәнәптәре әйткәнсә, Башҡортостанды Ҡаҙағстан менән Урта Азияға асыр ҡапҡа иткәндә, башҡорт ерҙәренең ҡибла-көнсығышлап ҡәлғәләр ҡорғанда. Берәүгә — ҡапҡа, икенсегә ҡапҡан булыр ине. Башҡорттар баш бирмәй булашһа, йорт-ерен утҡа ортәргә, үҙҙәрен аямай ҡырырга мөмкин. Уларҙы үҙ ерҙәренән ҡыуып, бүтән яҡҡа таратып, Себер, төньяҡтарға һөргәндә инде... Һис юғы, ҡаҙаҡ-ҡайсаҡтар, ҡалмыҡтар менән үҙ-ара

һугыштырып, ҡырҙырып, миктәтеп бөтөрөргә лә була бит. Быны проект итеп тиҙерәк ҡағыҙға төшөрөргә, батша хәҙрәттәренә еткерергә кәрәк. Ашығырға.

Тевкилевтең эшләп биргән шундайыраҡ проекты менән бергә хөкүмәт ҡарамағына Сенаттың обер-секретары Иван Кириллович Кириллов тапшырған проект та бар булып сыҡты. Ҡем элек өлгөргәндер, кем-кемдең фекерен үҙләштергәндер, ҙур рус түрәләре үҙ кешеһен ситләтәме ни, Кириллов проектына туҡталалар. Етмәһә, Иван Кириллович— үҙе ҙур түрә. Ә түрә түрәне тиҙ күрә. Ни эшләһен инде элекке Ҡотломөхәммәт мырҙа, — утлы асыуын эсенә йотто. Кириллов проектын императрица Анна Иоановна 1734 йылдың майында тәсдиҡ ҡылды, обер-секретарҙы статский советник итеп үрләтте. Проектты ғәмәлгә ашырыр Ырымбур экспедицияһының начальнигы итеп Иван Кирилловичты ҡуйҙы, ярҙамсыһы итеп Тевкилевте тәғәйенләне. Шуныһы ла ярар инде.

Теге ваҡытта ҡаҙаҡ-ҡайсаҡтарға барыр илселек ине түгел ине шул быныһы. Үҙе ҙур хәрби экспедиция. Ур йылғаһы буйында ҡәлғә һалдырыр көс. Уның составында һалдат, офицерҙарҙан тыш йөҙ утыҙлап белгес, төҙөүселәр бар ине. Ҡорал-яраҡ, ҡорамал үҙе әллә ни хәтле, 30—40 туп, мортира. Өҫтәмә гарнизон полктары. Төҙөүсе белгестәргә ҡарағанда хәрбиҙәр бик күп.

Ҙур экспедиция 1734 йылдың 10 ноябрендә генә Өфөгә килеп етә алды. Өфөлә йәнә ете ай буйы походҡа әҙерләнеп ғүмер үтте. Кириллов башҡорттар ризаһыҙлығынан шөрләне, командаһын ныҒытты. Ҡазан, Өфө дворяндарынан, Яйыҡ казактарынан яңы роталар төҙөнө, мишәр, башҡорт байҙарын ярҙамға саҡырҙы. Экспедиция 15 июндә Өфөнән сығып, көньяҡҡа, Ур йылғаһы буйына, йүнәлгәндә, уны дүрт меңләп ғәскәр оҙата барҙы.

Башҡорттар экспедиция үҙҙәренә алып килгән бәғәлаҡты яҡшы аңланы. Уны юлда уҡ юҡ итеп йә һүтеп ташламаҡ булып, ҡоралға тотондо. Тевкилев элек тыныс ҡына вайран булып үткән юлдарҙа ҡанлы яу тоҡанып китте. Башҡорт һыбайлылары әле бер ерҙән, әле икенсе урындан экспедицияға сабауыл яһаны, ярҙамға килер полктарҙың юлын бүлде. Килмәк абыҙҙың, Аҡай батырҙың ун меңгә яҡын яуы айырыуса оло ҡурҡыныс һалды.

Тевкилев үҙ йәне өсөн яман ҡалтыранһа ла, эстән үсәп, һөйөнгөләп тә ҡуйҙы: әйҙә баш командирҙың башына күберәк бәлә төшөрһөндәр әле. Ҡем белә, бер башҡорт уғынан, бәлки, йәне йәһәннәмгә лә китеп барыр. Күсер ине үҙенә ул саҡ баш түрәлек, бар мөлкәт. Күрһәтер ине

башҡорттарга күрмәгәндәрен: бөтә илен үртәп, ҡанға батырып юҡ итеп ташлар ине! Урт ҡабара, ҡан эске киләӏ..

Һуғыша-һуғыша, көс-хәл менән август баштарында ғына килеп еттеләр Ур буйына. Ниһайәт, 1735 йылдың 15 августында яңы Ырымбур ҡалаһына нигеҙ ташы һалдылар. Хәҙер, бәйҙән ысҡынған уҫал эттәй, ҡара халыҡты — ҡара һарыҡты быуып ташларға, ҡанында аунарға мас бар.

Тик ҡайҙан килеп сыҡты форсатһыҙ бынау Башҡорт эштәре комиссияһы тигән нәмәстәкәйе. Начальнигы итеп генерал-лейтенант Румянцев тәғәйенләнгән икән. Ҡылыслы генерал боласылар менән һүҙ-өгөт аша көрәшмәксе имеш. Һөйләштең, тотторорҙар ҡапсығыңды! Батша исеменән ярлыҡау менән килгән имеш. Ярлыҡау түгел, аҫыу, киҫеү таман уларга. Ут, ҡылыс теле менән генә һөйләшергә мөмкин башҡорттар менән.

Иҫендә, әллә шатлыҡтан, әллә берәй сарсауҙан эсеүҙе, гөмүмән, кире ҡаҡҡан Кириллов түрә менән бер төн буйы ҡотороп эстеләр. Шунда баш түрәне шомландырып та, шөрләтеп тә бер нәмәне тылҡыны: күренгән бер боласыны, башҡортто ҡалдырмай ҡырып бөтөрөргә, ауылдарын үртәп, донъянан эҙҙәрен юйырға. Ҡандарында йөҙөргә, бөтә ил алдында боласыларҙың ҡотон, йәнен алырга! — Ыҫылдап ҡотортто шулай.

Яман иҫерек баштарынанмы, нисек, кем ҡалай итеп күберәк ҡыра, язалай ала — шул өҫтөн тигәнгә ярыш асып, шуны ҡулдарын йәрәхәтләп ҡан үбеп ант та иттеләр шикелле (иртән икеһенең беләгендә лә яра эҙҙәре бар ине).

Иң шомлоһо: ҡара уйҙан тыуған ҡотороҡтоң гәмәлгә ашыу ихтималы ине. Баш күтәреүселәрҙе баҫтырырға походҡа сыҡҡан Кириллов менән Тевкилев, әллә шул ҡара төндәге ҡара уй-ниәттәренең шойҡаны менән, Һаҡмар ҡолғәһенә килеп туҡталгас та, ҡот осҡос вәхшилек ҡылырға тотондолар. Һаҡмар төрмәһенә тугыҙ башҡорт әсире ябылған булған икән. Мырҙа түрә, ҡорбанын килеп тапҡандай, быларҙың туғыҙын да ҡәлғә майҙанына сығартты. Аралары нан иң йәш ауан егетте һайлап алып, тимер ҡаҙауга ултыртып, язалап үлтертте. Икенсе бер таҙа башҡорт ирегетен башта ҡул-аяҡтарын, аҙаҡ башын киҫтереп ботарлап язалатты. Бишәүһен дарға аҫтырҙы. Әҙәм заты күрмәгән был вәхшәтте күреп һәм бына хәҙер үҙҙәренә лә етәһен көтөп торған икеһе галәм күҙ алдында, бер сәгәт эсендә ҡап-ҡара сәстәре ағарып, аҡылдан яҙҙы. Аҡылдан яҙғандарға яза яҙыҡ икәнен белеп, Тевкилев йәллә т[1], йәнәһе,

[1] Йәллә т — палач.

быларҙы йәлләп, миргә ғибрәт өсөн сығарып ебәрҙе. Йәғни быңа һеҙҙе лә ни көтә.

Ҡан үбеп әйткән анттың бер акты шулай раҫланды. Язалау һөнәрендә беренселекте әле оло түрәһе алды.

Был фажиғә башы 1735 йылдың 7 сентябре ине.

Ҡулдарын әсирҙәр ҡанына буягас, улар йәнә бер төн ҡоторонол эсеп, үлем туйы башын туйланылар. Шунда тағы бер шарт ҡуйҙылар: үҙ ҡулың йәки әмерең менән үлтерелгән йә язаланған һәр башҡа бармағыңды манып махсус кенәгәгә ҡанлы тамга баҫырга. Ҡемдеке күберәк булыр — беренселек шуға.

Шунан Кириллов каратель отряды менән башҡорт ауылдарын ҡырыр өсөн Ағиҙел буйҙарына Нугай юлына йүнәлде. Тевкилев Урал тауҙары аша Себер юлы яҡтарына юл тотто. Себерҙән килер аҙыҡ-түлек ылауҙарын һаҡлашыр өсөн полковникка күп ыҙалар сигергә, яуга һырт бирел сигенергә лә тура килде. Асыҡ яуҙа алдыра алмауына, үсе ҡанмауына үртәлде. Бер яры ҡыйралып, яфаланып кире Өфөгә ҡайтҡас, тагы алты рота һалдат, 400 мишәрҙәрҙән торған карателдәр туплап, Бөрө аша Әй буйҙарына юҫыҡланы.

1736 йылдың 19 ғинуар төнөн Балыҡсы волосының Сейәнтусы ауылын килеп баҫты. Һалдаттары йоҡолағы ауылдың һәр өйөн баҫып, кем булыуына ҡарамай, ир-аттар менән бергә бала-сағаларҙы ла, ҡарт-короларҙы ла тотош һуйып сыҡтылар. Уяныл ҡасып ҡалған йә нисектер ҡылыс, хәнйәргә эләкмәгән йөҙҙән артыҡ кешене — ир-ат, бала-сағаны бер ҙур һарайға бикләп, ут төртөп, тереләй яндыртты Тевкилев. Был вәхшәтте үҙ күҙҙәре менән күргән Рычков секретарь аҙаҡ шулай яҙҙы:

«...близ 1000 человек с женами и детьми их в этой деревне перестрелено и от драгун штыками, а от верных башкирцев и мещеряков копьями переколото: сверх того, 105 человек собраны были в один амбар и тут огнем сожжены. Понеже все сие ночью случалось, и деревня вся сожжена была, то от великого их вопля и оружейной стрельбы самое ужасное было тогда позорище». Аҙаҡ атаҡлы тарихсы булып киткән Петр Иванович Рычков «История Оренбургская» тигән китабында был үҙе күргән фажиғәне шулай ҡәһәрләп тарихҡа теркәп ҡалдырҙы.

Ләкин Тевкилевтең ҡанда йөҙөүе быңың менән генә ҡанманы әле. Ул тагы илленән артыҡ башҡорт ауылын талап, бер ҡаҙығын ҡалдырмайынса яндырып, күккә осорҙо, бар халҡын мылтыҡ, ҡылыстан үткәрҙе.

Хәҙер исеме генә ҡалган Сейәнтусы ауылынан тыш уның хәтерендә Тапын волосындагы бер ауыл һаҡлана икән әле.

Ул да күптән ер йөҙөндә юҡ. Бер кисте был ҙур ғына ауылды карателдәре менән йәнә ҡапыл килеп баҫты ул. Атҡа менеп өлгөрөр-өлгөрмәҫ ир-егеттәрен еңел ҡыйратты. Шунан карателдәренә ауылды талапға, ҡыҙ-ҡырҡынын, йәш бисә-сәсәләрен көсләргә ихтыяр ҡуйҙы. Ни теләйһегеҙ, шуны ҡылығыҙ — киҫегеҙ, баҫығыҙ, талағыҙ! Полковник түрәнең үҙенә бер ун алты йәштәр тирәһендәге тумалаҡтан һылыу ҡыҙҙы һайлап, аулаҡ ҙур йортҡа япҡандар. Килде ул. Инһә, ҡыҙыҡай илап шешенәп бөткән. Сантырға төшөп торор ҡалын толом сәстәре туҙынгач. Үҙенең һылыу йөҙө, күҙе янып тора. Ҡатын-ҡыҙҙы һуңғы саҡта һирәгерәк татыған түрәнең ҡапыл нәфсеһе ҡоторонон китте. Үҙен шулай ҙа башта тыйыбыраҡ, ҡыҙҙы иркәләргә, үҙенсә көйләргә булашып ҡараны. Ләкин бынан бер ни сыҡманы. Ҡыҙ ҡурҡып сәбәләнде, ситкә ҡасты. Атайҙай күреп, иңәлеп-ялбарып ҡараны. Тевкилев күп түҙмәне, ҡыҙҙы ике ҡулынан ҡаты шаҡара тотоп, күлдәген билдән түбән ярып төшөрҙө. Йәш ҡыҙҙың нескә, әммә тығыҙ тәнен, ҡалҡыу күкрәген ҡосаҡлап ҡыҫып, һикегә ауҙарҙы, үҙе алыптай кәүҙәһе менән өҫтөнә ҡапланды. Ҡыҙ бала ни араладыр әсе сыйылдап битен тырнап алды, әллә ҡайһы ерен өҙгәнсе тешләне. Шыма тәне менән йомалаҡтай шылып, тыпырсынып, уга нәфсеһен ҡандырырга ирек бирмәне. Түрә әлһерәп, әллә нишләп бөттө. Күҙен ҡан баҫҡан әҙәм ҡорбанын иҙерҙәй булып ҡаплауы менән бергә йән асыуынан, оло мендәрҙе тартып алып ҡыҙҙың йөҙөнә бер ҡулы менән ҡуша баҫты. Терһәге менән богаҙын ҡыҫты. Ҡыҙ күпмелер ҡаты-ҡаты ғына тыпырсынды ла тынып ҡалды. Шунда ғына түрә, яй алгандай булып аһылдап, нәфсеһен ҡәнәғәтләндерер форсат тапты. Бер аҙҙан үҙенең ҡайнар беләге менән ҡыҙҙың ялангас осаһын ҡосаҡлағанда, ҡыҙ тәненә үлем һалҡынлығы ингәнен тойҙо. Үле тәнде аҙаплап ятыуын белде, ниһайәт.

Йәһәт кейенеп тышҡа сыҡты. Ғинуар һалҡыны ҡурып алып бара. Ҡайҙалыр ҡысҡырышҡан, геүләшкән тауыштар ишетелә. Мал баҡырыша. Бер мылтыҡ тауышы ла ишетелеп ҡалды. Полковник битен һәрмәп ҡараһа, тырналған урындарҙың әсетеүен, йөҙөнөң шешенеп торғанын шәйләне. Угаса адъютанты килеп етте. Уга хәҙер үк өйҙө уртәргә бойорҙо. Үҙе туҡталган урам аша йортҡа барып ингәндә, үле кәүҙәле ҡыҙ ятып ҡалған өйҙө ялҡын солгап алғайны инде. Икенсе әмере шул булды: вәхшиҙәр, бурҙар ауылын таңға саҡлы көлөн күккә осорорга. Киҫәһен киҫеп, көсләйһен көсләп, нимдәй вәхшәтлек ҡылырга мөмкин, барыһын ҡылып, үҙ эҙҙәрен ут-көл менән күккә осороп, Тевкилев карателе иртән яңы ҡорбанын аңдырга юлга сыҡты.

Ләкин яңы йылды күп шашынырға ирек бирмәнеләр Тевкилевкә. Йософ менән Төлкөсура батырҙарҙың һыбайлылары полковникты сигенергә, ҡойроҡто һыртҡа һалырға мәжбүр итте. Ут-ҡорал ғына түгел, һәр ерҙә уны халыҡтың ҡара ҡарғышы эҙәрлекләне.

Тевкилев был бер походы буйынса рапортында яндырылған 51 ауылды, үлтерелгән, язаланған ике мең кешене теркәне. Улар араһында бала-сага, ҡыҙ-ҡырҡындар ҙа байтаҡ ине. Ҡанлы бармаҡ менән баҫылған ҡан кенәгәһен дә теүәл алып баргайны ул. Аҙаҡтан беленеүенсә, оло түрәнең ауылдарҙы үртәү, кешеләрен үлтереү һөнәре һан яғынан ҡайтышыраҡ булып сыҡты. Үртәү-үлтереш ярышында беренселек Тевкилевкә тейҙе.

Аҙаҡ тағы күпме ҡырмаһын был башҡорттарҙы, һаман ҡырып бөтөп булманы. Тотош ҡыргын килһә икән. Күпме язалама, ниҙәр генә ҡылма, барыбер дүндереп баш эйҙереп булмай. Ҡырағай халыҡ.

### 3

Тевкилев Минзәләгә был юлы башҡорттарҙың һуңгы башлыҡтарының баштарын киҫтерер өсөн килгәйне.

Башта, йәнәһе, элекке юлдашы, яҡын танышы күреп Алдар менән һөйләшеп ҡараны, уны бар гәйептәрен танырға, баш һалырга өндәне. Алдар, йәлләт миңә юлдаш түгел, тип һөйләшеүҙән баш тартты. Туҡмап, язалау ҡороуҙар ҙа файҙа бирмәне. Аптырағас, аҙаҡ ҡыҙыу, сабырһыҙ холоҡло Сәйетбайға ныгыраҡ ҡаныҡтылар. Ул тоҡәтһеҙ язаларга түҙмәй баш күтәреүҙәге гәйептәрен һөйләп бирергә мәжбүр була. Юлдаштарының гәйебен, ҡорған уйҙарын да асып һала.

Бер нисә көн тыныс ҡалдыргандан һуң Алдарҙы йәнә һорауға саҡырттылар. Һорау алыу, яза бүлмәһенең тимер рәшәткәле тәҙрәләре аша март ҡояшы ҡарай. Түрҙәге оло өҫтәл артында Соймонов генерал-майор үҙе ултыра. Өҫтәл башында — Тевкилев полковник. Яндарында — бер офицер, тылмас.

Тәндәренең һулҡылдап һыҙлауын, туңған бер аягының ҡаты ауыртыуын һиҙҙермәҫкә, ифрат йонсоуын артыҡ белдермәҫкә, тыныс булырга тырышты Алдар. Иҙән уртаһына килеп баҫҡан көйө, ҡатып ҡалды.

— Алдар Иҫәнгилдин, тагы ҡабатлап һорайым, батша хәҙрәттәре алдында гәйептәрең, яу сабыуҙарыңды танымыһыңмы? — тип һораны Соймонов.

— Генерал-майор йәнәптәре, минең батша хәҙрәттәре алдында гәйебем юҡ. Хеҙмәтем өсөн Петр батша хәҙрәт-

тәренең маҡтаулы грамотаһы бар. Хеҙмәт итеп тарханлыҡ алғанбыҙ.

— Ә яу сабыу, бола ҡуптарыу?

— Яу сапҡанбыҙ икән, батша хәҙрәттәренә ҡаршы түгел, батша әмерен боҙған яуыз түрәләргә ҡаршы. Батша хәҙрәттәре менән ата-бабаларыбыҙҙың килешеүҙәрен яҡлап. Генерал-майор йәнәптәре, һеҙ хәрби кеше, яҡшы беләһегеҙ, яу булғас, төрлөһө була. Ҡанға — ҡан, үскә — үс китеп барғылай. Әгәр шунда ғәйебебеҙ бар икән, уларын батша хәҙрәттәре ярлыҡаған бит.

— Ә һуңғы ҡотҡо һалыуҙар? Штраф аттары түләмәҫкә ҡотортоу? Борҙарҙы аҫрап ятыу?

— Бөрйән волосында Ырыҫбай старшина командаһынан башҡа болаға ҡатнашыусылар булманы. Улар үҙ эштәре өсөн үҙҙәре яуап бирәләр. Мин хөкүмәт ҡаршыһында вернайҙар рәтендәмен.

Тевкилев һүҙ ҡушты:

— Ырыҫбай старшина Игембәтов һинең күпме борҙар йәшереп тотоуыңды, штраф аттары түләттермәүеңде раҫлай. Дәлилдәре бар.

— Үҙен аҡлар өсөн сығарған хыянатсы һүҙе был. Тархан улай әйтмәҫ ине.

Шул саҡ Сәйетбайҙы алып инделәр. Үҙен танырлыҡ та түгел: күҙ-баш күгәреп бөткән, бит шеш. Элекке яҫы яурын һәленеп төшкән, күкрәк шиңгән. Алда батыр түгел, гүйә, шуның бер өрәге баҫып тора.

— Сәйетбай Алкалин, үҙеңдең ғәйептәреңде әйтеп бир әле? — тине уға генерал-майор.

Ҡаш аҫтынан күҙен бер Соймоновҡа, бер Алдарға һөҙөп ҡарап торҙо ла ҡарлыҡҡан тауыш менән яуапланы:

— Булды инде, Соймонов генерал түрә. Алдар батыр яуында ла булдым мин. 1736 йыл Ҡилмәк абыҙ яуына ҡушылдым. Табын ауылына ябыуыл ҡылдыҡ. 1737 йыл бошман-ҡыпсаҡтарҙың вернайҙарын туҙҙырҙым.

— Биштау янында ла һинең менән осраштыҡмы әле беҙ, Сәйетка? — тине генерал.

— Булды инде, генерал түрә, ғәйеп беҙҙә. Дыуамал башта, йәшлектә. Ғәйептәремде таныи, Табында үҙегеҙгә килеп баш һалдым бит. Штраф атын түләнем. Ант иттем.

— Ант иттең — антың башыңа төшөр әле — уны үтәмәнең. Минең перевесчиктарымды ҡыуып ҡайтарҙың. Борҙар йыйынына барып, тағы болаға ҡушылдың.

— Ул йыйында Алдар булдымы?

— Юҡ. Ул ҡатнашманы.

— Алдар тураһында нимәләр беләһең?

— Алдар тарханды ни бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ инде. Арҙаҡлы батыр. Элекке яу башы. Старшина.

— Һин уның менән үҙең бергә булғанды һөйлә, — тине генерал.

— Теге яуҙа Өфө янында Алдар батырҙы күрҙем. Ул Ҡубандән алып килгән Батыр хан менән ине. Аҙаҡ уныһы ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарға ҡасты, ахрыһы. Әле Һамарға барырға Алдарҙы алырға Бөрйәнгә мин барҙым.

— Шунда ни һөйләштегеҙ?

— Алдар хөкүмәткә бер ниндәй штраф аттары түләмәҫкә, ҡаты торорға бойорҙо. Һинең һүҙҙе тоторғамы, генералдың бойороғона буйһонорғамы, тип күптәр һорағас, Алдар тархан, мин башҡорттар өсөн үҙем генерал. Минең әмерҙе тотоғоҙ, тине. Ана, Соймонов генерал, хатта Татищев баш түрә хөкүмәттән 70-әр һум жалунья ала, ә мин — 75 һум. Шулай булғас, кем өҫтөн, тине. Ана, Ҡублицкий поручик ҡулында — 100 һалдат, ә беҙҙә — 1000 һыбайлы. Уйла, кем көслө, тине.

— Сәйетка дөрөҫ һөйләйме? — тип Алдарға мөрәжәғәт итте генерал.

— Батыр һүҙе түгел, бахыр һүҙе, генерал йәнәптәре.

Ҡире Сәйетбайға боролдо генерал:

— Әйт әле, Сәйетка, юлға сығыр алдынан ниндәй һүҙ төйнәнегеҙ?

— Хәтәр юлға сығабыҙ, урыҫ түрәләренә ышанып булмай, тине Алдар. Шуға беҙҙе тотоп ҡайтармаһалар, бөтә ил-йортто баш күтәрергә саҡырҙы. Үҙ улдарын ул шулай киҫәтте. Мин дә ул әмерҙе улдарыма еткерергә тейеш булдым.

— Шундай һөйләшеп килешеү булдымы, Алдар?

— Батыр — һаҡсыһыҙ, генерал һалдатһыҙ булмай. Беҙҙә йәнә сығырҙан алда артыңды уйла, тиҙәр...

— Аңлашыла, тылды нығытып китмәксе булдығыҙ инде...

Шулай Сәйетбай батырҙың, яҙалауҙарға сыҙамай батырҙан бахырға әйләнеп, серҙәрҙе сисә башлауы арҡаһында, яңы яуға әҙерлек серҙәре, башҡа ғәйептәр асылды. Быға рус түрәләре, сүп өҫтөнә сүмәлә итеп, булған-булмаған бүтәндәрен өйҙөләр.

Тевкилев эште ҡыҙыулатырға булышты. Генерал-майорҙы күндереүенсә, был атаҡлы башлыҡтарҙың башына етеп, тағы ҡуйырып килгән яуҙы өркөтмәксе ине иҫәптәре. Ләкин киреһе килеп сыҡты. Тевкилевтең үҙ иҫәп-хисабы ла юҡ түгел ине. Үҙен нисә ҡат үлемдән алып ҡалған илсе юлдашын ҡотҡараһы урында, ул Алдарҙы тиҙерәк батырырға тырышты. Ҡаҙаҡ йәйләүендәге бахырлыҡтарына шаһит ке-

шене ғәйеп итеүҙә ине бар уйы. Был ҡара уйына ла иреште йәлләт.

Иң ҡаты хөкөм ҡарары алдынан ғәйепләнеүсегә һуңғы һүҙ бирелде. Теләр-теләмәҫ кенә, әллә әҙерәк күңелен бушатыр өсөнмө, әйтергә булды Алдар:

— Таш диуарҙа һүҙ әйтеүҙең ғәжәте юҡ. Таш йөрәктәргә лә. Йәлләттәргә хатта һүҙ йәл.

Ата-баба йолаһын, тарих ҡанунын тотоп, олуғ Рәсәйҙең тоғро подданныйы булырға тырыштым. Петр батшаға тоғро хеҙмәт иттем. Хеҙмәтемдең хаҡлығына ышандым. Хоҡуҡ-ирektәребеҙ ҡыҫыла башлағас, уны бары яуыз түрәләрҙән күрҙем. Ирек тип яуға сыҡтым. Аҡ батшанан ярлыҡау таптым, дәрәжәләр алдым. Шулай ҙа батшалар ҙа яңылыша икән. Ил аманаттары аҫылғас, батшалыҡҡа инанысым ҡаҡшаны. Тағы ниҙер өмөт иттем, икеләндем. Мал тинем. Тархан, йәнәһе. Икеләнеү ҡанатымды ҡайырҙы. Шуға хәҙер яу яланында түгел, дар ағасында үлеремә үкенәм. Батша һүҙе, кенәз һүҙе тип бер ҡатлы ышаныуҙарым да сәбәпсе быға. Ҡатын аҙһа — ир башына, түрә аҙһа — ил башына, тиҙәр. Аҙынғанды ҡайҙан белеп етәһең. Ҡуйында йәлләп аҫрап, йәнен ҡурсыуыма әрнейем хәҙер. Халыҡтың ҡара ҡарғышы башыңа етһен, Тәфтиләү йәлләт. Хоҙай ҡушһа, үлтерелгәндәрҙең ҡандары барыбер тотмай ҡалмаҫ.

Беләм: бында килеп эләккәндәр ҡотолғаны бик һирәк. Күпме аҫыл ирҙәр аҫылды Минзәләлә. Төлкөсура батыр, Бәпәнәй хәҙрәттәр дарҙа йән бирҙе. Ләғнәт һеҙгә, йән ҡыйыусыларға! Мең ләғнәт!

— Әхирәтең уйла! Тәүбә ҡыл!

— Иманһыҙҙар алдында тәүбә ҡылмайҙар...

Хаким ашығып хөкөм ҡарарын уҡыны.

Батшалыҡҡа ҡаршы баш күтәреүҙә ҡатнашҡандары өсөн 1740 йылдың 16 мартында тотҡондарға үлем хөкөмө сығарылып, Минзәләлә дарға аҫып үлтерелде. Бына улар:

Алдар Иҫәнгилде улы
Көҙәк Бүләш улы
Ҡаныҡай Аллаяр улы
Илекәй Үҫән улы
Сәйет Алҡалы улы
Яҡуп Әбләй улы
Исҡужа Ҡараш улы
Алдаҡай Мерәк улы
Йәнеш Юныс улы
Йәммәт Бикәй улы.

Йәммәт Бикәй улы яза ваҡытында үк үлгәс, уны аҙаҡ мәйетен аяғынан булһа ла аҫып, хөкөмдө еренә еткерҙеләр.

Соймонов генерал менән Тевкилев полковниктарҙың Нуғай юлы башҡорт вәкилдәре менән «һөйләшеүе» шулай тамамланды. Башҡорт халҡының батыры, 1704—1711 йылдарҙағы восстание етәксеһе, Ҡаҙағстанға Россия илсеһе, Петр Беренсе ҡаһарманы Алдар Иҫәнгилдене ғүмерe шулай дар ағасында өҙөлдө.

Алыҫтан ҡарайып күкрәп килгән йәшенле ямғыр, дауыл кеүек, тиҙҙән ошо батырҙарының үсен алыр өсөн башҡорт йорт-иле, батырҙарҙың үҙ улдары, яҡындары Урал буйында яңы яуға ҡалҡынды. Тарихта Ҡараһаҡал яуы исеме менән ҡалған восстание ҡабынып китте ошо яҙҙа.

Халыҡ күңеленән батырына — алғыш йыры, йәлләткә ҡарғыш йыры яңғыраны быуаттар аша.

Алғышы:

Алдар ҙа ғына батыр, ай, Уралда,
Сал бөркөттәй һайлам ир ине.
Яуға ҡаршы сапҡан саҡтарында
Күкрәктәре ғәййәр, кир ине.

Алдар ҙа кеүек, һай, ирҙәр менән
Илкәйҙәрҙе айҡап йөрөнөк.
Илсе булып илкәйҙәр ҡыҙырҙыҡ, —
Юлда булды һәр саҡ йүгерек.

Үҙе өсөн тыуып, иле өсөн
Башҡайҙарын һала күп ирҙәр,
Ата юлын улдар ҡыуһа, һай кем,
Данҡайҙарға сығыр күп ирҙәр.

Һиммәтле лә батыр эшкәйҙәре
Йөрәк остарының башында,
Һүҙкәйҙәре — телдә, исемдәре —
Урал ҡаялары ташында.

Ҡарғышы:

Тәфтиләүҙең меңгән, ай, аттары
Саптар ҙа ғына микән тимер күк.
Тәфтиләүҙәй ҡанһыҙ булыр микән —
Һуйҙы иҙде ҡырағай йәнлек күк.

Аҫтындағы эйәр атҡа тейәр,
Эйәре лә белмәҫ, ат белә.
Тәфтиләүҙең ҡылған, ай, ҡәһәрен
Үҙе белмәһә лә, ил белә.

Ҡайнап ҡына сыҡҡан Иҙел аша
Тәфтиләүҙәр кисеү табалмаҫ.
Ир-егеткәйҙәрҙең өмөткәйен
Тәфтиләүҙәр генә быуалмаҫ.

Ҡара ла ғына урман, ҡая бите
Шаулайҙыр ҙа кисен ел саҡта.
Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта.

Алғырға — алғыш, ҡалғырға ҡарғыш тарихта шулай ҡалды.

Ҡиссаның хиссаһы ла шул

*1981.*

# ПУГАЧЕВ ФЕЛЬДМАРШАЛЫ

## ТӘҮГЕ ҺАБАҠТАР

### 1

Губерна үҙәгенән һурғыслы хат килеп төштө. Башта Бәҙерғол (Баҙарғол) аптырай ҡалды. Провинсанан түгел, Ырымбурҙың үҙенән үк тә баһа. Ни хикмәт был. Мөһөрлө һурғысын ватып уҡыһа — халыҡтың наказын йыйырға үтенес ҡағыҙы. Старшинаның аптырауы йәнә артты. Бығаса оло түрәләрҙән ниҙер талап итер бойороҡ та киҫәтеүҙәр генә килә торғайны — быныһы ни ғәжәп — рәсми бер мөрәжәғәт. Үҙе волость башҡорттарына тәғәйен. Волость исеменән наказ әҙерләгеҙ, аҫаба башҡорттарҙың хөкүмәт алдына ҡуйыр уй-теләктәрен, үтенестәрен туплағыҙ тиелгән. Вәкилдәр һайларға ҡушылған. Хәйерлегә микән былдай булмаҫ мөғәмәлә? Башҡорттоң тормошона, ер-һыуына, тығылыуына етмәгән, уның эсенә, йөрәк-бауырына инеп, күңел ирегенә дә ауламаҡ түгелме был? Әллә төрлө яу-ҡырғындарҙан һуң бер аҙ ирек, иркенлек булмаҡсымы?..

Шундай шикле-шөбһәле уйҙар ҡатыш танышты хат менән Бәҙергол. Аралаш күңелен сиртеп, йылы уй-тойғолар ҙа йүгереп үткеләне. Тәхеттәр алышынғанда, ниндәйҙер өмөттәр ҙә уянғылап ҡуя. Петр Федорович батшаға ниҙер бағлағайнылар. Хәҙер тәхеткә әбей батша менде. Уны үтә аҡыллы, мәрхәмәтле, имеш, тип һөйләнеләр. Үҙе бик ғилемле, уҡымышлы икән. Мәхлүкте лә рәнйетмәҫ изге йән йә иһә. Йәбер-яфаны ишетәһе лә, беләһе лә килмәй, ти. Телендә бары, олуғ илем дә хөр подданныйҙарым, тиме... Шулар, фәрештәнең амин тигән сағына тура килеп, ысын булып китһәсе. Ҡош телендәй әлеге хат-ҡағыҙ шуның бер изге хәбәре булғыры. Бир, хоҙай!..

Йыбанып торор саҡ түгел ине, китте Бәҙерғол кәңәшергә Юламан ҡорҙашына. Барһа, ул да шундай ҡағыҙ алған. Ул, кем, тынғыһыҙ әҙәм, Таймаҫ тархандан белешкән, һәр старшина үҙ волосының вәкәтле кешеләрен саҡырып, фекер төйнәй ҙә, Исәт провинцияһының старшиналары, Силә-

бегәме, Байғазығамы йыйылып, араларынан бер депутат һайларға тейеш икән. Һайланған депутат, һәр волость-иләү үтенестәрен берләштереп, провинса башҡорттары исеменән наказ төҙөй, шуны Мәскәүҙең үҙенә илтә ти. Бер һәйәт-комиссияғамы, әбей батшаның үҙенәме индә.

Ысындан да, шаҡтай хикмәтле икән шул. Бүтәнсә төпсөнөүҙең артыҡ хәжәте юҡ ине — ҡорҙаш старшинаһы белгән хәтлеһен әйтте; ҡайтырға, иләү менән кәңәшләшергә кәрәк. Ни әйтерҙәр, ни ҡушалар — шуны тейешле еренә еткерер. Уның бурысы шул.

Ҡайтты. Үҙ ҡарамағына ҡараған сотниктарын, яһаулдарын, писарын, волость муллаһын саҡырҙы, иләүҙең абруйлы унлап аҡһаҡалына әйтте.

Волосҡа хәбәр тиҙ тарала. Мәкәтегә, старшина ауылына, саҡырылғандар ғына түгел, саҡырылмағандары ла йыйылып китте. Бәҙерғолдоң оло ҡунаҡ өйө, хатта кесе өй халыҡ менән тулды. Яҙғы юл өҙөк саҡ тип тормағандар, ситке ауылдарҙан да байтаҡ ир-ат килгән. Йыйын-төйөнмө ни.

Ил-йорт көнө һәр кемгә ҡағыла шул. Бәҙерғол старшина губернанан килгән хаттың тотмарын ҡыҫҡа ғына аңлатып бирҙе, үҙе белеп ҡайтҡан хәбәрҙәрен ишеттерҙе. Ил-йорт нужаһын, донъябыҙ хәстәрен, йәмәғәт үтенестәрен әйтәйек, бер фекер төйнәйек, тип һүҙен бөтөрҙө.

Йыйылғандар башта шымыбыраҡ торҙо ла дәррәү һорауҙар яуҙырырға тотондо. Старшина үҙе белгәнсә, фараз иткәнсә, яуап бирергә тырышты. Ләкин улар күбеһен әллә ни мөрхәтһендермәне. Нишләһен, иләү башлығының үҙенә лә шаҡтайы асыҡ түгел ине.

Бер нисә яу күргән, яза-ҡазалар татыған бер аҡһаҡал, тороп: «Белмәйем, ағай-эне, башҡорттан барын тартып алып бөтөп барһалар ҙа, быға са уның үтенесен, донъя хәжәтен һорағандары юҡ ине әле. Ни гилләләр. Заманында интизар булып, ялыу, шикәйәттәр яҙғыланыҡ, мәрхәмәт өмөт итеп, ялынып-ялбарып ҡараныҡ оло түрәләргә. Ни таптыҡ? — Зарлы башҡа — зәңге таяҡ. Аптырағас, даулашып булаштыҡ, хатта яуҙар ҡуптарҙыҡ. Ни ҡырҙыҡ? — Йорт-ерҙәрҙе ҡырҙырҙыҡ. Әҙме ирҙәрҙең баштарын һалдыҡ. Мәсхәрәләүҙең аръяғына сығарылып, әҙәмгә күренгеһеҙ танау-ҡолаҡһыҙ ҡалдыҡ. Ни тим, был яҙыу тигәндәре лә бер мәкер булмағайы, уйынды аулап, — тип шик-шөбһә һалды.

Ҡупҡалйыған өйгә йәнә тынлыҡ урынлашты. Хәҙер һүҙ әйтергә әллә ни атлығып барыусыларҙы күрмәгәс, киреһенсә, барыһы шымып, шомланыбыраҡ ҡалғас, Бәҙерғол үҙе эңгәмәне ыңғайға юҫыҡламаҡ булды:

— Йәмәғәт, губерна ҡағыҙын шиккә алмайыҡ әле. Мөһөрлө, ҡул тамғалы яҙыу. Нисек тә яуап итергә кәрәк беҙ-

гә. Еткерәһе һүҙебеҙ ялыу ҙа, шикәйәт тә түгел, һорағанға яуап, хәжәтебеҙҙе әйтеү ҙә баһа. Батшаларҙың да ялпы һүҙен, үтенестәрен ишеткеһе киләлер, бәлки. Яҡшыраҡ ҡанундар сығарыу өсөн, мәҫәлән. Ана, әбей батша үҙе бит, яңы закон әҙерләр өсөн, комиссия-һәйәт төҙөткән тиҙәр. Шуға кәрәк беҙҙең һүҙ.

Башҡорттоң да йәмәғәт хәстәре әҙме ни? Бына ер-һыуыбыҙҙы алайыҡ. Борон аҡ батша тарафынан ярлыҡ менән тәғәйен ерҙәребеҙҙе яңы законда ниңә ныҡлап раҫлауҙы һорамаҫҡа? Аҫабалар ер-һыуы Рәсәй законында нығынһын! Ул саҡ баш-баштаҡлыҡтар, тартып-талап алыуҙар бөтөр ине.

Йә иһә яһаҡ, һалым мәсьәләләре беребеҙҙе лә борсомаймы ни?..

Ҡорға ҡапыл йән инде. Хуплау, йөпләү тауыштары ишетелде. Аранан Ишдәүләт яһауыл ырғып тороп һүҙ асты:

— Бәҙерғол старшина хаҡты һөйләй. Ер-һыуыбыҙҙы закон менән нығытыуын һорайыҡ. Яһаҡты беҙҙә юҡҡа бөтөрҙөләр. Йәнлек тирелəй-бүтәнсәме яһаҡ үҙе үк ерҙәребеҙгә үҙебеҙ хужа икәнлек шарты ине. Яһаҡ бөткәс, ер-һыуға хоҡуҡ та бөтә түгелме һуң? Заводчиктар ана шулай тип аҡлана ла баһа.

Яһаҡты һалым менән алыштырыуҙың икенсе яман яғы ла килеп сыҡты. Элек фәләнсә ергә фәләнсә шәшке, кеш тиреһе түләй ҙә ҡотола инек. Хәҙер һалым тип, тоҙҙо ботон 35 тиндән һатып алабыҙ. Ул өс-дүртләтә ҡыйбатҡа төшә. Шул тоҙ һалымын бөтөрөп, әүәлге яһаҡ түләүгә кире ҡайтарыуҙы һорарға кәрәк.

— Ылау ҡыуыу, хеҙмәткә йөрөүҙе лә онотмайыҡ, — тине Һибәтулла сотник. — Әүәл поход сыҡҡанда, ылау ҡыуғанда, прогон хаҡы түләнгән. Ә инде Себер линияһы тип аҡсаны бөтөрҙөләр. Унда ла шул уҡ ваянный хеҙмәт бит. Үҙ атың, үҙ аҙыҡ-түлегең, үҙ кәрәк-ярағың менән шунда йөрөү бөлдөрә. Буштан бушҡа эшләү был. Ә үҙ донъяң ҡырылып ята. Хеҙмәт йөрөйһөң икән, Себер казактарынығы кеүек, аҙыҡ-түлекләтә, аҡсалата жалунья түләнһен!

— Көсләп суҡындырыу бөтһәсе. Мосолман дине урыҫ дине менән тиң йөрөһөн ине, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы мулла.

— Үҙ йолаларыбыҙға теймәһендәр икән.

— Еребеҙҙән заводтарын алһындар!

— Сауҙа эшен ҡыҫмаһындар...

Шаулы ғына уҙған был ҡорҙан һуң, ҡарпы ҡолаҡ шымсы мишәр писарына һиҙҙермәй генә, Бәҙерғол үҙенә иң яҡын һәм абруйлы бер нисә аҡһаҡал, сотниктары менән кәңәшләште, бар фекерҙәрҙе туплап, нигеҙләп, волость наказын төҙөп ҡараны. Тағы дәлилләйһе, нығытаһы яҡтар бар ине

әле. Нишләптер, ыҙан-йола, ҡанун, хоҡуҡ, ғәмәл мәсьәләләре башында буталды. Әлегәсә килгән батша закондары, уларҙы үтәтмеш түрә-һәрәләр уйынан үтте. Үҙенең тормош һабағын барланы.

## 2

Етеш ғаиләлә үҫте Бәҙерғол. Атаһы Юнай ҡарт Мәкәте волосы старшинаһы ине. Һырлы башҡорттарының ер-һыуы иркен, мал-тыуар ишле ине ул заман. Оло, Кесе Ҡәҫле, Ҡыҙылташ күл буйҙары йәйрәп ятыр йәйләүлек, урештә — ҡышлау ерҙәре. Уның бала, үҫмер саҡтары ошо сабаҡлы күл буйҙарында иркенлектә үтте. Тәпәй баҫҡас та тиерлек, атҡа атланды. Күлдәрендә супырлап һыу ҡойондо, ат йөҙҙөрҙө, ҡомдарында ҡыҙынып ятты, малдар туплашты, сабаҡ ҡармаҡланы. Үҫә төшкәс, күлдең эстәренә үк инеп нәрәтә һалыуҙы хирес күрҙе, ҡамышлыҡтарға ҡаҙ-өйрәк һунарына йөрөнө. Һунар ҡоштары өйрәтте ҡомарланып.

Һәй, ирәүән, сайран саҡтар! — Барыһын да хәҙер бары һағынып иҫкә алырға ғына ҡалды инде.

Бер нисә хәтирәһе күңеленә мәңге инеп ултырған, һабаҡ булып.

Шулай бер мәл Ҡәҫле буйҙарында урыҫтар тимер тапҡан икән, тип хәбәр сығарҙылар. Буш булманы, ахры, был — Демидов тигән баярҙың приказчиктары килеп, атаһын, аҡһаҡалдарҙы Ҡәҫле буйҙарын һатырға өгөтләй башланы.

Был ваҡыт Бәҙерғолға ун өс, ун дүрт йәштәр тирәһелер, ул да хәҙер ололар янындараҡ урала. Бер төркөм халыҡ, ер-һыуҙы һатмайыҡ, ти. Икенселәре, һатайыҡ, барыбер тартып алырҙар, тип бара. Ул Демид яманға тошоҡма, тошоҡһаң, бошоҡма, ана бит Билембай, Һалйығут ерҙәрен нишләтте — барыбер үҙенеке итте, тиҙәр. Приказчиктар ҡаршыҡандарҙың ауыҙын ябыр өсөн ҡыҙыл малын да, сәйшәкәрен дә йәлләмәне шикелле. Түкләп-түкләп килтерен тараткан, йәнәһе, бүләк-һый иткән саҡтары булды. Араҡы менән һыйлап, күптәрен илертеп-тилертеп бөктөләр. Атаһы Юнай ҡарт бөгөлмәне, бөгөлмәгән көйө һындырылды, күрәһең. Аҙаҡтан ул да ҡул һелтәне — тәҡәте ҡалманы.

Әбей сыуағы миҙгелендә шикелле баяр управляющийы, приказчиктары, пүпәтәйҙәре, тағы әллә кемдәре бер нисә ылау менән килеп төштөләр Ҡәҫле буйына. Оло күл аръяғындағы ҡайынлыҡ янына иләү халҡын йыйҙылар. Алдарында — түк-түк тауар, әрйә-әрйә сәй-шәкәр, араҡы, һый. Күптәрҙең күҙе уйнай, теле тирмән тарта башланы. Управляющий тылмасы ярҙамында ер-һыу һатып алыуҙың шарт-

тарын, хаҡтарын аңлатты. Аҡсалата нисә һум, тауарлата, сәй-шәкәрләтә күпме икәнен әйтте. Тәүге аванс тип, старшинаға күпмелер аҡса һанап бирҙе. Тауарҙы, сәй-шәкәрҙе таратты.

Ҡайһы бер аҡһаҡалдар, һатыу-алыу шарты, хаҡтары менән килешмәйенсә, бер аҙ шаулашып, бәхәсләшеп булаштылар. Ләкин алдарына килеп ятҡан ҡыҙыл малға, нисә әсмухалыр сәйгә, шәкәргә әүрәп, күптәр өндәшмәҫ булды, аҡһаҡалдарҙың һүҙе баҫылып ҡалды.

Шулай ҙа Юнай старшина хаҡтан бигерәк Ҡәҫле күлдәрендә башҡорттарға балыҡ тотоу, туғайында бесәнен сабыу шарты, Кесе Ҡәҫленең төньяҡ өлөшөн генә һатыу хаҡында ҡат-ҡат киҫәтте заводчиктарға. Оло күлдә мал туплау рөхсәтен ныҡытты. Управляющий ризалашып ҡул бирҙе, купчий документта таҡлап күрһәтелеүен иҡрар итте. Шунан инде старшина ла, теге аҡһаҡалдар ҙа күпмелер тынысланғандай булып, ҡағыҙға тәүге тамғаларын һалдылар. Артынса бүтәндәрҙеке сатай-сотай булып теҙелә барҙы.

Аръяғына китте һый — ер-һыу һатыу мәжлесе. Оҙон көн, оҙон төн буйы Ҡәҫле арьяғы араҡы, бал эсеп иҫерешкән башҡорттарҙың шауы, йыр, ҡурай тауыштары менән гөрләп торҙо.

Мәжлес булды ла үтте — тикәй көндәр килде. Эскәс, бер мәл күңелле булып та аҙаҡ араҡы зиты башты сәңкетеп сыҡҡандай, үҙҙәренең дыуамалланыпмы-нисек ҡылған эштәренең ғөҙөрөн башҡорттар яйлап айныға төшә хәсрәтләнә-уфтана аңлай башланылар шикелле. Әсмуха сәйҙәр ҙә, киҫәк-киҫәк шәкәрҙәр ҙә тиҙ бөттө. Әсмуха хисабына әсминлек кенә түгел, дисәтинә-дисәтинә ерҙәр китте. Йөҙәр, меңәр дисәтинә. Шулай баҡыр, көмөш тиндәр тотоп, һырлы башҡорттары, әтәмбәйҙәре күҙ етмәҫ Ҡәҫле буйҙарынан яҙып һемәйешеп ҡалды.

Аҙаҡ шул да мәғлүм булды: купчий ҡағыҙына башҡорттар атаған межалар түгел, ә Ҡәҫле күлдәрен эскә ҡалдырып, яңы межалар исеме яҙылған булып сыҡты. Быныһы һемәйтеү генә түгел, күрәләтә алдау, көпә-көндөҙ талау ине. Юнай старшина, килешеү улай түгел, былай ине, тип Екатеринбург тау управлениеһына ла, Никита Демидовтың үҙенә лә барып йөрөнө, управляющий, приказчиктар менән һөйләшеүҙәрен күҙләштереп ҡараны. Тегеләре күҙенә ҡарап танды. Аҡҡа ҡара менән яҙылғанға, һалынған тамғаларға һылтандылар.

Ҡуйған шарттар ҙа бары күҙ буяу ҙа ҡағыҙ бысратыу булған икән. Бүләк тип килтереп тараҡҡан тауар, сәй-шәкәрҙәре лә хисапҡа инеп, әллә күпме арттырып яҙылған.

Шулай ярым тейеш хаҡ та теймәне. Ҡәҫле туғайлыҡтарында бесән сабырға ла, күлдә балығын тоторға ла тыйылды. Ҡөн тыуыштағы туплау, һыулауҙарҙан да яҙҙылар. Ҡәҫле буйы һырлыларҙың диңгеҙҙәй йәйрәп ятҡан оло күлдәренең күрке, ирке тураһындағы элекке шат йырҙарын аһ-зар йырҙары, бөтмәҫ һағыштары алыштырҙы. Бәйеттәр сыҡты.

Йәмле Ҡәҫле буйҙары,
Хуш ине тугайҙары,
Теҙелеп торған тауҙары,
Быуат-быуат күлдәре,
Тирә-яғы гөлдәре, —
Һай Ҡәҫлекәй буйҙары!
Теҙелеп бейә бәйләүҙәр,
Һай-һыу тиеп әйҙәүҙәр,
Дәүрән һөрөп йәйҙәрен
Күсеп йөрөп йәйләүҙәр
Ҡалды һағынып һөйләргә, —
Һай, Ҡәҫлекәй буйҙары!
Инде килде шул заман,
Уйлаһаҡ, беҙгә яман.
Яттар тулдылар тамам,
Завод һалдылар ҡамап,
Ерҙе алдылар талап.
Һай, Ҡәҫлекәй буйҙары
Бөтөрәлер уйҙарҙы! —

тип мөнәжәтләп моңая торған булдылар, һатылған, таланған ерҙәрен һағынып.

Әсе һабаҡ, йөрәк аһы ине был.

Бөгөнгөләй күҙ алдында, Ҡәҫле буйҙары һатылғандың икенсе йәйенә Ҡәҙербәк менән Бәҙерғол күлгә нәрәтә һалырға барҙы. Тирәктән юнылған оҙонса ҡайыҡ кәмәләре менән күл уртаһына табан инделәр. Нәрәтәләрен һалып та бөтмәнеләр, ни арала яҫы кәмәлә өс кеше килеп тә етте яндарына. Ниҙер ҡысҡырып, ҡул һелтәүҙәренә иғтибар итмәй, үҙ эштәре менән булған саҡта, береһе нәрәтәгә үреләйем тигәндә, Бәҙерғол тегене ялтанлатып һалып та ебәрҙе, кейеме-ние менән шапылдап һыуға ҡолап та төштө. Ул-был абайлағансы, остағыһы мылтығына йәбеште. Атыу тауышы гөрһөлдәне, Бәҙерғолдоң ҡолаҡ төбөнән пуля жыйлап уҙҙы. Ағаһы берләм ишкәк менән һелтәгән ыңғайға, тегенең мылтығы һыуға сумды. Бәҙерғол кәмә төбөндәге күҫәккә һонолдо.

Һыуҙағыһы үҙҙәренең кәмәһенә йөҙөп йәбеште. Уны тартып алғанда, яҫы кәмәнекеләр Бәҙерғолдарҙан ике-өс арҡан буйы йыраҡлашҡайны инде. Ҡоралһыҙ ҡалған баҫҡынсылар тамам шөрләне, ахры, ҡысҡыра-һүгенә, йоҙроҡ төйә-төйә, арғы ярға иштеләр.

Бәҙерғолдар эш йүнгә түгелен күреп, нәрәтәләрен кире алдылар. Ағаһы шулар менән булған арала, Бәҙерғол йәһәт кенә сисенеп төшөп, кәмәләре ышығында самалап, теге һыуға сумған мылтыҡты эҙләп тапты. Тиҙҙән үҙҙәре лә эҙ юйҙы. Ҡәмәне лә күлдән йыраҡ илтеп йәшерҙеләр.

Бының икенсе-өсөнсө көнөнәме, теге кәмәселәрҙең өлкәне приказчик менән старшинаға килеп етте. Бәҙерғолдо сырамытып бәйләнеп булашты. Мылтыҡ таптырҙы. Бәҙерғол үҙҙәрен һемәйткәндәге шикелле танды, бер ни белмәмеш булды. Юнай ҙа, хаҡы булһа ла, беҙҙең халыҡ Оло күлгә балыҡҡа йөрөмәй, ундай хәл булмаҫ, тип кире ҡаҡты.

Ике күл араһында оҙаҡламай Ҡәҫле заводы һалынды. Алдатҡан, һемәйткән өсөн тәүге осорҙағы үсләшеүҙәр, хаслыҡтар баҫыла төштө. Уға Никита заводчик, управляющийҙары сәбәпсе булһа ла, заводта йәһәннәмдәй ут ялҡыны бөркөп торған домна мейестәре алдында эшләүсе эшселәрҙең ғәйебе юҡ та баһа. Улар нужанан үҙҙәре ҡайҙарҙан ҡасып килгән, икенсеһенә килеп юлыҡҡан. Көн итештәре лә ярлы. Башҡорттоң ярлы-ябағаһы шикелле ябайҙар. Шуға улар хәҙер дуҫлашып, знакумлашып бара, бала-сағалары күл буйында бергә уйнай, аралаша.

Әкәмәт хәлдәр ҙә булғылай. Бына ҡара көҙҙә ҡаты һыуыҡтар етеп, күлде зәңгәр боҙ ябып алыуы була, заводтыҡылар ҙа, башҡорттар ҙа күлгә ағыла. Һай урында бәғзеләре балыҡ шаңғыта, өлкәнерәктәре тәрәндә боҙ уйып төпкә һала. Яр буйлап бала-саға уйнап, тимер аяҡ шыуып кинәнә. Мәрйәләр кистәрен хоровод ҡора.

Юҡ-юҡ та ҡай саҡ ҡырыҫ ҡылыҡ та ҡалҡҡылай. Бер мәл ярайһы ҡыҙмаса булып алған, көстәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәгән уҫлаптай завод егеттәре күл өҫтөндә сыбалышып йөрөй-йөрөй ҙә, күлдең икенсе яртыһында боҙҙа балыҡ ҡармаҡлап ултырған башҡорт егеттәре араһына ла килеп инәләр, уларға бимазалай, бәйләнә башлайҙар. Ҡитә шунан сәкәләш, йоҙроҡ һуғышы.

Һуғыш тигәс тә яман үсле, ҡан ҡойошло түгел ул үҙе. Дыуамал бер көс һынамаҡ орошло алыш һымаҡ нәмә. Шуныһы ла бар: унда инде ғәйрәте еткәне, тимерҙәй ныҡлыһы, йөрәклеһе генә ҡатнаша ала. Көс-ғәйрәт ишенә сәм-саран ҡушыла.

Көс-кәре арта барған ун ете-ун һигеҙ йәштәр тирәһендә Бәҙерғол да сыҡты бер йоҙроҡ һуғышына. Ҡиң күкрәкле ауан булып килгән сағы. Завод яғы егеттәре бер ун бишләп булыр, һырлылар ҙа шул сама. Ул уҫмаҡлы уйындың бер ҡыҙыҡ яғы бар: ике яҡ ҡапма-ҡаршы рәт булып теҙелеп килә лә, ҡапыл төкәшкән кәзә тәкәләре кеүегерәк, кем ғәйрәтлерәк күкрәк-яурыны менән һөҙөп-һөрөп алып китә, йә

әле береһе, йә әле икенсеһе ҡыҫмаҡлай. Быныһы үҙе бер тамаша. Шунан көстәр күпмелер самаланғас, еңелә башлағаны ялтаныу яғын ҡарай. Ялтаныу — хурлыҡ. Тик нишләһен инде, һуңғы әмәле шул уга. Шунан йоҙроҡҡа сират етә — уйын уҫмаҡҡа әйләнә.

Бәҙерғолдар ҙа шулай биш-алты сажин ара ҡалдырып теҙелгән һымаҡ иттеләр ҙә заводтыҡыларға ҡаршы атланылар. Аҙымдар һәлмәк, ҡараштар ҡаршылағы үҙеңә тап килер уҙаҡҡа төбәлгән. Уҫал, өткөс ҡараш. Завод егеттәре күбеһе ҡыҫҡа һырманан, башҡорттар — ҡыптыр тунлы.

Бәҙерғолда ғына ҡайыры тун ине. Бына күкрәккә-күкрәк килеп төкәштеләр. Боҙ ялтыр, тайғаҡ, аяҡ терәр яй юҡ. Шуға һөҙөп-һөрөп алып китеүе ҡыйын. Ана ике-өс уҙаҡ тайып һөрлөгөп тә киттеләр буғай.

Аяғын киреп ипләберәк терәгәс, Бәҙерғолдоң оҙон ҡуныс күн ҡатаһы бик тайып барманы. Үҙенә тап килгән һипкел йөҙлө бер егетте яурыны менән еңел этте, шылдырып ике-өс сажин дороп алып барҙы. Ҡарыулашаһы урынға, теге, ҡәһәрең, хәрәмгә күсте: бер тим ялтанды бит, Бәҙерғол янтайып һөрлөгә яҙыуға, ҡалын төлкө бүрек үтәләй ҡолаҡ төбөнәрәк арттан йоҙроҡ та килеп ҡунды. Бераууыҡ шаңҡып китеп, бер тубығы менән боҙға сүгәләне, күпмелер шыуып барҙы. Уңарсы теге өҫтөнә тағы йомолоп килгәндә, тиҙ генә иҫ алып, һелтәнеүенә ялтанды ла ярым боролоуына туҡмаҡтай йоҙроғо менән тондороп та өлгөрҙө. Һипкел һеңк итеп ҡолап китте.

Йығылғанды түбәләмәйҙәр. Бәҙерғол тын-йүн тартып боҙ майҙанын байҡаны. Бер нисә кеше шаңҡып йә иҫәңгерәп боҙ өҫтөндә ултыра. Өс-дүрте уралып-суралып яй бирмәй яҫҡыша. Арғыраҡтар һырт биргәнгә оҡшай. Абайланы тағы, яҡында ғына өсәү берәүҙе дөмбәҫләй. Заводтыҡылар. Бәҙерғол йәһәт шул яҡҡа уҡталып, береһенең елкәлегенән шаҡарып алып киҫә тартты ла йөҙөн бора биреүгә яҫы усы менән эйәгенә бәреп тә өлгөрҙө. Ҡыптыр тунды ҡап та ҡоп йоҙроҡлап мауыҡҡан икенсеһенә лә иҫәңгерәтә йоҙроҡ эләкте. Өсөнсөһө тороп ҡасты.

«Мин тондорған төп кенә итеп ҡала, ә теге ҡап та ҡоп дөмбәҫләй» тигән мәрәкә һүҙ шундай йоҙроҡ һуғыштарынан ҡалманы микән? Һәр хәлдә, булғылай торғайны шундай орошлар Бәҙерғолдоң егет сағында.

Ул бынан да үҙенсә һабаҡ алды: алышта ла, көрәштә лә көс кенә түгел, таҫыллыҡ та кәрәк. Сос бул, үҙеңде лә ҡурсыла, яҡын-яраныңды ла онотма.

Үҫмер саҡ түбәләштертә лә, дуҫлаштырта ла. Боҙ майҙаны уҙағы теге һипкел Яшка менән аҙаҡ шәп знакум, дуҫ булып китте Бәҙерғол.

Ҙаводтыҡылар менән килешеп була, тик бына тоҙ күҙ управляющийынан һис көн юҡ. Йә солоҡ ағастарын ҡыйраттыра, балын тунай, йә туғайға ыңғайлаған малдарҙы тота; балыҡҡа төшөрмәй. Асыу ҡабара шуға. Теге замандағы яман алдатыуы ла баштан сыҡмай.

Хәтәр бер уйға килә Бәҙерғол: шул яуызды атып үлтерергә. Ҡулдән алып ҡайтҡан улъя мылтығын таҙартып, майлап ҡуйған була ул. Ваҡиға онотола төшкәс, алыҫ китеп, дары, ваҡ йәҙрә төйөп, мылтығынан сәпкә атырға өйрәнә.

Костиков управляющийҙың ике аҙнаға бер йәкшәмбегә ҡарай Екатеринбургҡа барып йөрөүен яҡшы белә. Ҡышын ул кашауай санала толопҡа төрөнөп, йәйгелеген еңел ырандаста яҡшы аттарҙа елдереүен, йыш ҡына ҡыҙмаса икәнен күҙәткәне бар. Екатеринбургҡа көнөнә иртәрәк етер өсөн, ғәҙәттә, таң әреһенән юлға сыға.

Һағаларға заводтан бер ун биш саҡрымдар ары ҡара урмандың тар һаҙламыҡ үткәүелен һайланы Бәҙерғол. Йәшенеп, кистән китеп ятты. Май аҙағы етһә лә, төндәрен һалҡын икән, өшөп бөттө. Серем итеп, иҙрәп киткеләп йөҙәне. Төнгө урманы ла ҡурҡыныс, әллә нәмә килеп сығыр кеүек. Баҡаһы, өкөһө, тағы әллә ниҙәре ухылдап тертләтеп ҡуя. Төнө таңға тарта, ахры, ҡош-ҡорто уянмаҡсы иткәндәйме. Ә теге юҡ. Көткәне заяға ғына булмаһа ине. Тағы тып-тын.

Сеү... Ниҙер ишетелә түгелме? Ат тояғы тауышы. Завод яғынан. Үҙе. Әҙерләнергә... Бәҙерғол таң ҡараңғыһы аралаш ҡаршы юлын байҡаны. Йәшеренгән ағас төбөнән нисек яйлыраҡ атыу яғын самаланы. Мылтығын тағы бер ҡарап, ҡапшаштырып сыҡты.

Тауыш һаман яҡынлай. Тар юлдан атын атлатып ҡына килә, ахры. Быныһы шәп. Тура тоҫҡап сәпәргә яй булыр. Ат ҡына һиҙенеп өркөп алып ҡасмаһын.

Ана, килеп тә сыҡтылар буғай; ҡара шәүлә шәйләнде. Ат юртыбыраҡ килгәндәй. Бәҙерғол ҡаушай биреп ҡуйҙы. Ҡулы әҙ генә дерелдәй түгелме? Тыңлап киләләр бит. Малҡай ғына һиҙмәһә ине. Ваҡыт... Ә ул ҡымшанырға ҡурҡа. Ат эргәлә генә. Ҡырандасы. Үҙе...

Тәте тартылды. Шартлау яңғыраны. Таң һарыһында дары уты ялтланы. Яман аҡырған тауыш, аттың сыйнағандай өркөп йән-фарман сабып китеү гөрөлдөһө ишетелеп ҡалды. Сапҡан тауыш та алыҫая барҙы ла тынды. Бәҙерғол артыҡ ҡуҙғалмай һаман шул ағасы төбөндә тора. Нишләне? Үлтерҙеме? Юҡмы?..

Хәҙер бында бер минут ҡалырға ярамай. Эҙ юйырға.

Урман эслэп кире яҡ осҡа. Яҡтырғансы, ағаларына барып йығылырға тейеш...

Төнгө ғиллә бер кемгә беленмәне.

Инде Бәҙерғолдоң йөрәген управляющийҙың иҫәнме-түгелме икәне тырнаны.

Хоҙайҙың ҡарғышы һуҡмағаны: иҫән. Үҙе генә түгел, заводҡа өс стражник менән ҡайтып төшкән. Бер-ике кешелә тентеү үткәрткән, тиҙәр. Оҙаҡламай Бәҙерғолдарға ла килеп етте стражниктары менән. Йөрәк жыу быныц. Тотондо яцынан ҡыҫырға Бәҙерғолдо, атаһын: ҡайҙа мылтыҡ? Табығыҙ! Юғиһә башығыҙ баструкта серер!..

Атаһы йортонда, ағаларында тентеү яһанылар. Бер ни тапманылар.

Аҙаҡ управляющий Юнай старшина менән икәү-ара оҙаҡ һөйләштеләр. Атаһы Костиковты ҡымыҙ, әсе бал менән дә һыйланы, буғай. Ҡобараһы осҡан управляющий, ҡыҙара-бүртенеп, алпан-толпаныраҡ ҡайтып китте кисләтеп.

Ҡырыҫ Костиков ҡыҫыла төштө шикелле. Быға атаһының һүҙе сәбәпсеме, әллә улының саялығымы, әллә бүтәнеме — билдәһеҙ. Бәҙерғол быны үҙенсә юраны. Һәр хәлдә, ошо ваҡиғанан һуң управляющий һағыраҡ ҡыланды. Башҡорттар ҙа Кәҫле күленең көнсығышында йәшерен йә ярым асыҡ бесәнен сапҡылай башланы, көтөүҙәрен ҡыйыуыраҡ ыңғайлатты, туплауға төшөргөләнеләр. Балыҡҡа ла йөрөштөрҙөләр.

## 3

Атаһы Бәҙерғолдо өс ҡыш Мәкәтелә һабаҡ таныттырғас, Һалйығут башҡорттары араһына Мөслим мәҙрәсәһенә илтте. Әбделмырҙа ахун Мөслимдә үҙе мөҙәрислек иткән тирә-яҡтарға мәшһүр мәҙрәсә ине ул. Нәху, сарыф, тәжүит, фиҡты, мантыйҡ ише иҫке ғилем, дин һабаҡтарын шунда үҙләштерҙе.

Яҙ артынан күк үлән ҡалҡыр бер миҙгелендә Мөслимгә Танып яғынан атаҡлы Батырша мулла килде. Теркә малы йомоштары менән иң ғәҙел хаким итеп саҡырылған, тинеләр. Һалйығут башҡорттары уны бик хөрмәтләп ҡунаҡ иткән бер мәжлестәренә эләкте Бәҙерғол — старшина улы, иң зирәк шәкерт сифатында. Шунда ул ишетте лә бик ғибрәтле, фәһемле һүҙҙәрҙе Батырша мулла ауыҙынан. Ҙур аҡыл, ғилем эйәһе икәненә иманды уның. Дин ҡанундары, мәҙрәсә һабаҡтары бер нәмә, ә тормоштоң үҙ ағышы, халыҡтың тын алышы, айыҡ аҡыл эше бөтөнләй икенсе икән — шуны тәрәнерәк тойҙо. «Дин, көн өсөн йән фиҙа»,

«Һүҙ үтмәгән ерҙә уҡ үтә», «Йәнегеҙҙе лә, малығыҙҙы ла үҙегеҙ ҡурсымаһағыҙ, яттар көн бирмәҫ», «Күмәкләшкән — яу ҡайтарған» кеүек мәғәнәле үгөт һүҙҙәре, мәҡәлдәре йөрәгенә инеп урынлашты.

Башҡорттар, мишәрҙәр Батырша һүҙҙәрен йөпләп ҡыҙып-ҡыҙып һөйләнеләр, әллә ниндәй түрәләргә, заводчиктарга янанылар, оло ҡунағына ҡай саҡта бышылдап ниҙер аңлаттылар, үтенделәр.

Боларынҡы ине шул заманалар. Һәр ҡайҙа алдап-йолдап, завод тип, башҡорттарҙың ерҙәрен һалдырып алалар. Солоҡ, һунар, мал утлар ерҙәр аҙая. Һалым тигәне теңкәне ҡорота. Ылау ҡыуыу, линия хеҙмәте сей елкәгә тейә. Хатта көнөңдө түгел, динеңде ҡыҫып, ғәҙемгә ҡағылалар. Сабырлыҡтың да сиге барҙыр бит. Күпме түҙмәк кәрәк.

Ара-тирә фәлән ырыу башҡорттары губерна түрәһен ҡыуып ҡайтарған икән, төгәндәр ер-һыуҙарын кире дәғүәләйҙәр, имеш, һымаҡ төрлө хәбәрҙәр ишетелеп ҡуя. Дауҙың дәүе яҡшыраҡ тип, күптәр яу-дауға әҙерләнә икән дә тиҙәр.

Бәҙерғол үҙе лә байтаҡ гәҙелһеҙлектәрҙең шаһиты булды, ир-егеттәрҙән оло түрәләргә асыулы, үсле һүҙҙәр, янауҙар ишетте. Үҙенең, ырыуының зитына тейгән хәлдәргә осраны. Йөрәге ярһыған, ҡулы ҡысытҡан саҡтары ла булманы түгел.

Уйламағанда бер көндө Әбделмырҙа ахун Бәҙерғолдо өйөнә саҡырҙы. Зирәклеге, итәғәтлеге өсөн шәкертен маҡтай-маҡтай һыйланы, атаһының старшиналыҡ эштәрен һорашты, Ҡәҫле заводы хәлдәрен, халыҡтың тын алышын һүҙ айҡанындай белеште. Бәҙерғол, әсенеп китеп, заводчиктарҙың баш-баштаҡлыҡтарын, алданып ҡалған һырлыларҙың үс-асыуҙарын һөйләп ташланы.

— Һин зирәк егет, тырыш шәкерт, атайыңдың эшен алыштырыр кеше, — тип һүҙенә күсте ахыры ахун. — Һиңә һүҙ һыйыр тигән өмөттәмен. Ҡарап торор киләсәгебеҙ — һеҙ, йәштәр. Дин, көн хәстәре генә түгел, донъя хәстәре лә яйлап һеҙгә күсер. Заманалар ауырлығын, боларығын да күреп тораһың. Дин, көнөбөҙҙө яҡлар йүн мәслихәт. Мөхтәрәм Ырымбур ахун-муллаларының үтенесенә мөбәйән Батырша мөҙәристең мосолмандарға яҙған ҡыҙҙырмаҡ ғарызнамәһе бар. Шуны, ышанып, һиңә лә таныштырмаҡсымын. Белеү, гафил булмау өсөн. Мә уҡы ла гоман ит!

Уға дүрт-биш битле ҡағыҙ тотторҙо. Хаттарса семәрләп яҙылған өндәмә. Уның әле лә күп һүҙҙәре шул көйө хәтерендә: «Башҡортлар, мишәрләр вә ғәйре, ғәйре мосолманнар! Безләрнең динемезне, көнөмезне ҡысалар. Ер-суларымызға хужа булалар. Завутлар салалар. Печәнлекләре-

без, сунар билəмнəремез бөтə. Азмы йəбер-яфалар күргəзəлəр. Ҡыйнамаҡ, хатта үлтермəк илə. Ходаның хазинаһындағы ҡолларҙан тоз алмаҡны маниғ итделəр. Салым салдылар.

Урыс түрəлəргə, чит дин эйəлəренə баш ормасаҡ иде, динемезне, йолаларымызны таптатмасаҡ иде. Ятларға ерездə ҡəлғəлəр ҡорырға, завутлар салырға ирек ҡуймайыҡ. Муйынымызға күрəлəтə боғалаҡ кейертмəйек. Ата-бабаларымыздан мирас ҡалған ер-суларны саҡлайыҡ. Бер сүздəн булыңыз, мөьминнəр! Ҡəрəк икəн, яуға хəзер тороңыз. Сөңгөлəрне очлағыз, укларыңызны барлағыз. Намысы, ғəйрəте барлар атҡа атланмаҡ лазым».

Батыршаның үҙ ҡулы, төркисə үҙ һүҙҙəре. Йəне бар, атланырға аты бар əҙəм, мосолман түҙеп ятырмы шундай ил ағалары хатынан һуң? Ирек тə, ирлек тə шуға нисбəт.

Батырша үҙе əйткəн был ҡыҙҙырмаҡ вə өгөтлəмəк хат Бəҙерғолдоң былай ҙа урынында түгел йөрəген дөрлəтергə сəбəпсе бер осҡон булды: уға тынғы бөттө, һабаҡ ҡайғыһы китте. Ул, гүйə, ил-йорт йөрəге тибешен, тын алышын тойоп, абайлап йəшəй башланы. Һағайып, ниҙер көттө.

Көткəне, тауҙар аръяғынан ҡабарып килгəн ҡара яуындай, ҡапыл ҡалҡты. Ҡайҙалыр Урал төпкөлөндə Бөрйəн башҡорттары баш күтəргəн икəн, ҡатын-ҡыҙҙарын мəсхəрəлəп, ил-йортто мыҫҡыллап йөрөгəн бəйелһеҙ бер заводчикты иптəштəре менəн үлтерен ташлағандар, завод-ҡəлғəлəрен ҡыйратҡандар икəн, тигəн хəбəр йəшен тиҙлеге менəн таралды. Тау араһында бер драгун һалдаттарын да ҡырғандар, тип һөйлəнелəр .Бирерəк почта стандары туҙҙырылыуы ишетелде.

Яу башланыу шулдыр. Ə Бəҙерғолға нишлəргə? Ул ҡайҙа һуғылырға, кемгə кəңəш итергə яй тапманы. Үҙҙəрендə əле һип-һил. Атаһы ла, ниҙер һиҙенеп, улын тыйып килде. Тиҡ түҙмəне барыбер, Ҡəҫле туғайында көнө-төнө бесəн сабышты ла, кəбəнгə һалыуы бөтөр-бөтмəҫтəн, атаһының нисек-етте ризалығын алып, бер төндə, иң яҡшы аттарын менеп, Мөслим ҡарай сапты. Тура Əбделмырҙа ахунға төштө. Мөҙəрисе Батыршанан һис бер хəбəр-хəтəр булмауын, үҙе лə аптырашта йəшəгəнен һөйлəне. Күп көтөр саҡ түгел. Бəҙерғолга өс шəкертен ҡушып, Ғəйнəгə ебəрмəк булды: белешергə, Батыршаның үҙенə етергə. Үҙе ойоштороп йөрөгəн, ғарызнамəһен яҙған ил ағаһының яуҙы етəклəүҙе лə үҙ ҡулына алырға тейештер бит инде? Барын өйрəтте, һаҡ, абай булырға киҫəтте ахун.

Башта ғəйнəлəргə һуғылырға тейештəр ине. Өсөнсө көнөнə волость үҙəге Ҡыҙылъярға етеп, ахундың туған тейеш кешеһенə кис, аяҡ һил булғас ҡына, килеп инделəр.

Әбделмырҙаның был мишәр туғаны әллә ахунды ҡурсылап, әллә быларҙы йәлләп, шәкерттәрҙе бер ҡайҙа ла ебәрергә теләмәне. Ирәхте тирәләре бик хәтәр, юлдар хәүефле, тип ҡурҡытты. Юлда батша һалдаттары һәр кемде ҡарап, тентеп үткәрә имеш, аттарын, әйберҙәрен һалдырып алалар икән, ти.

Ҡилгәндең икенсе кисенә быларҙы алыҫ баҫыуына алып китте. Ҡүрәһең, әзмәүерҙәй шәкерт егеттәрҙе аттары-ние менән файҙаланып ҡалырға тырышты, аҙна-ун көн бер ҡайҙа ебәрмәй көнө-төнө бесән эшләтте, кәбән ҡойҙорҙо. Тыпырсыныуҙан да рәт сыҡманы. Шулай ахун йомошо тип, килеп ҡаптылар бер мишәр ҡайнаға ҡулына.

Ниһайәт, ауылға ҡайтһалар, Ҡыҙылъяр, ҡырмыҫҡа иләүендәй, ҡымырйыу. Урам тулы атлы-йәйәүле. Төркөм-төркөм халыҡ. Ни икән тип һорашһалар, старшинаны хөкөм итәләр, тинеләр.

Аттарын һуғарып, ашарға һалдылар ҙа, үҙҙәре унанбынан ҡапҡылап киттеләр баҙар майҙанына. Майҙан мәхшәр төҫлө. Ул ҡысҡырыш, ул талаш. Әптүк Ҡужағауыл тигән старшиналарын бөрөп алғандар, унан әллә ни таптыралар.

— Ғуж тамаҡ йәмәғәт елкәһендә байыны. Малын таратып бирегеҙ!

— Йыйған аҡсаларҙы кире ҡайтарһын!

— Аҫып үлтерегеҙ үҙен!

— Терелэй ергә күмергә кәрәк! Ғаләмгә ғибрәт булһын!

— Писарь мишәрен дә — бергә!

Халыҡ төркөмөн нисек-етте йырып, уртағараҡ үткәндә, ике таҙа әҙәм, старшинаның шаҡарылған ике ҡулынан тотоп, алға төртмәкләйҙәр ине. Волость башлығының күҙбаштары күгәреп, кейемдәре йыртылып, быҫранып бөткән. Ауыҙ-танауынан ҡан килә.Ниҙер әйтерлек, ҡарышырлыҡ хәле лә юҡ. Аяҡ аҫтында ҡан-талаҡ итеп ташланған писары ята. Әҙ генә ара ҡалдырып, юл биргән ялпы старшинаға йә йоҙроҡ күрһәтеп, ҡәһәрләп, йә төкөрөп ҡала.

Аҫмаҡсылар икән. Арҡыры бүрәнәле бейек ҡапҡа һымаҡ ҡуш бағана янына килтерҙеләр. Унан элмәкле арҡан аҫылып төшкән. Әлеге таҙа ир — уны Аҡбаш батыр тинеләр — аты менән ҡыҫмаҡлап ҡыҫылған түңәрәкте киңәйтә төштө. Һыбайлы икенсе ир, ҡалын тауышы менән ҡаты ҡысҡырып, ҡамсылы ҡулын күтәреүгә, шау-шыу, ығы-зығы тынғандай итте.

— Ғәйнәләр, беҙ бөгөн яуыз старшинаны хөкөм итәбеҙ, — тип ҡысҡырып һөйләргә кереште ул. — Әптүк йәмәғәттең етерлек ҡанын эсте. Алдап йыйған мир аҡсаһын

туҙҙырҙы. Алымсылыҡ итте. Үҙ әшнәләрен, туған-тыумаларын бүтәндәр иҫәбенә һалымдан ҡотҡарҙы, улар өсөн бүтәндәр сиратһыҙ ылау ҡыуҙы, линия хеҙмәтендә йөрөнө. Күп хужалыҡ ас-яланғас ҡалды. Аҙғынлығы аҙбарға һыймаҫ.

Аҡһаҡалдар, йәмғәт, был әҙәм аҡтығы Әптүкте яман эштәре өсөн аҫып үлтерергә хөкөм сығарҙы. Бөтөһөҙ гонаһ язаһын донъялыҡта ла алһын. Бүтәндәргә ғибрәт булһын. Йола, шәриғәтте тапағаны өсөн. Мал-мөлкәтен таланғандарға таратырға.

Алтмыштар самаһындағы был ир Мостай исемле аҡһаҡал икән. Ул аты өҫтөнән ҡул һелтәүе булды, муйынына элмәк эленеп, түмәргә баҫтырылған Әптүк, түмәрҙе тибеп ауҙарыуға, ауыр кәүҙәһе менән аҫылынып ҡатып та ҡалды. Аһ та итә алмай, йөҙләгән кешеләрҙең күҙ алдында башы бөксәйеп, йөҙө ҡан һауып, телен арҡыры тешләгән килеш һерәйеп ҡатты.

Һаман күҙ алдынан китмәҫ был ҡотһоҙ тамаша аҙаҡ та Бәҙерғолдоң йөрәген йыш-йыш телгеләне, төрлө һорауҙар уятты: әллә бөтә бөлгөнлөккә, ыҙа-яфаға Әптүктәй залим, һатлыҡ старшиналар сәбәпсеме? Батырша бит бөтөнләй икенсене һөйләй ине. Старшиналарҙа ғына эш торһа, уларҙы яңылары, изге күңеллеләре менән алыштырыу ҙа етә түгелме һуң? Шуның өсөн былай ниңә йән ҡыйырға? Ялпы ана былай ҙа ямандарҙы ялмап йоторға әҙер.

Теге саҡта ҡаты хөкөм менән генә эш бөтмәне әле. Ун бишләп һыбайлы майҙандың икенсе яғына сығып, халыҡты шунда йыйып, Мостай аҡһаҡал йәнә нотоҡ тотто, атҡа менерҙәй, ҡорал тоторҙай ир-егеттәрҙе Әптүк шикелле яуыздарға, һатлыҡ йәндәргә ҡаршы яуға әҙерләнергә саҡырҙы. Күрше-тирә ауылдарға сапҡындар ебәртте. Ике көндән поход сығырға әмер итте.

Үҙҙәре төшкән мишәрҙән шуны белделәр: Мостай менән Аҡбаш Ҡарышҡа, Батыршаға ла сапҡын ебәргәндәр икән, Батырша үҙе ҡоралды ярандары менән йәһәт килеп етһен тип. Тимәк, шәкерттәргә Ҡарыш мөҙәрисен бында көтәһе ҡала.

1755 йылдың 1 сентябрендә Бәҙерғолдар әлеге майҙанға походҡа китәһе ир-егеттәр янына барһалар, тағы бер яман боларыштың шаһиты булдылар. Әллә ун биш, егерме атлы, ҡоралды кеше йыйыла башлағайны, әллә юҡ, ҡапыл ике тыҡрыҡтан туҙан туҙҙырып, ҡырҡлап һыбайлы майҙанға ябырылды. Әлеге төркөмдө ҡамап алдылар. Сымыры кәүҙәле бер башлығы хәҙер үк өйҙәренә таралырға, ҡоралъяраҡтарын майҙанға ҡалдырырға бойорҙо. Ҡарыулаш, талаш ҡупты. Шул араларҙа ҡайҙандыр Аҡбаш батыр

атында атылып килеп сыҡты. Һыбайлыларын этеп-ҡыҫып, йырып, теге башлыҡҡа ҡысҡыра-ҡысҡыра, ҡылыс менән уҡталғанда, арттан атылған уҡтан саңҡайып бер яҡҡа ауҙы. Шундуҡ тағы өс-дүрт уҡ зыйлап үтте, ике һыбайлыны яраланы. Йыйылғандар тырым-тыраҡай ҡаса башланы.

Яр аҫтынан ҡупҡан яу, аңғармаҫтан сыҡҡан ҡан ҡойош ине был. Аҙаҡ белделәр, был баҫҡынсы һыбайлылар — Барҙы волосыныҡы икән, башлыҡтары — Туҡтамыш Ишбулатов старшина. Батша яҡлылар. Шулай итеп, улар походты ла өҙҙө, юҡҡа ҡан ҡойорға ла өлгөрҙө. Һуңғы өмөт тә аҡланманы: Батыршанан көткән ярҙам да, уның үҙе лә, хәбәр-хәтере лә булманы. Бөттө, өҙөлдө.

Бәҙерғолдарға былай ятыу ярамай ине. Бер төн һаҡлыҡ менән Ҡарыш ҡарай юл тарттылар. Юлдары хәүеф-хәтәр. Әле бында, әле тегендә ҡоралды һыбайлылар пәйҙа булып ҡала. Ҡемдең кем, ҡайһы яҡ икәнен белер әмәл юҡ. Шуға улар күберәк төн ҡата, оло юлдан ситтә юл-һуҡмаҡтар менән аулағыраҡ урындарҙан барырға тырышты.

Шулай көс-хәл менән Ҡарышҡа етһәләр, шул: бында ла халыҡ ике-яра айырылған икән. Яныш старшина командаһы Өфө воеводаһы ҡарамағына ҡуҙғалған. Батырша ун ике шәкерте, ғаиләһе менән урманға ҡасып киткән. Бәғзеләре уны тоторға эҙләйҙәр, бәғзеләре уға ҡушылырға, яҡлашырға самалай шикелле. Ҡырылыш булмаһа ла, ҡаты боларыш бында.

Ахундың Ҡарыштағы таныштары арҡыры Батырша яҡлы ышаныслыларҙы таптылар. Уның ҡалған шәкерттәренән ун ике кешелек һыбай туплanылар. Батыршаны эҙләп ҡарарға, һис юғы, уны тоттормаҫҡа тырышырға ҡарар иттеләр. Өс шәкертте мөҙәристәре киткән урман юлы менән эҙләй ебәрҙеләр. Үҙҙәре шул урман тарафын темеҫкенеп йөрөгән ят күҙҙәрҙән һаҡларға булдылар. Уларға тағы бер төркөм ҡушылды. Бер-ике урында бәрелеш тә булып алды.

Береһендә Ҡарыштан ун биш саҡрымдар самаһы түбән урман ҡырында һыбайлы мишәрҙәргә юлыҡтылар. Батыршаны тоторға эҙләгәндәрен белгәс, урманға яҡын юламаҫҡа бойорҙолар. Әллә быларҙы йәш күрепме, әллә киҫәтеүҙәрен ысынға алмаймы, аттарын урман ҡарай борҙолар. Етмәһә, шаулашып, сүкетеп килгәндәре.

Урманға ышыҡланды шәкерттәр. Бәҙерғол бер йыуан ағас төбөнән тороп, алда килгәненә уғын төҙәп атып ебәрҙе. Ара шаҡтай йыраҡ. Уғы яҙа китмәгәйе... Тоҫҡалған әҙәм ҡапыл бөксәйгәндәй итте, эйәренә ауҙы. Аты йәйланы. Ана, арттағылары йәнәшенә сыҡты. Береһе ниҙер аҙаплана — уҡты тартып алмаҡсы, ахры. Тейеүе хаҡ. Тәненән ниндәйҙер йылы рәхәтлек йүгереп үткәндәй булды Бәҙерғолдоң.

Тағы бер уҡ икенсеһенә эләкте. Ҡемдекелер. Саңҡайып уҡ китте быныһы.

Шунан күҙ алдарында батырайып йомолоп килгән һыбайлылар һөрлөгөшә туҡталып, аттарын кире борҙолар.

Шәкерттәрҙең шатлыҡлы ҡыйҡыу-һөрәне менән бергә Бәҙерғолдоң да шат тауышы яңғыраны:

— Һырт бирҙеләр! Мәрҙәс, егеттәр!

Бәҙерғолдоң үҙенә ҡаршы килгәнде беренсе яралауы, дошманын тәүге һырт бирҙертеүе ине был. Уғы үлтергәнсе теймәне тейеүен. Әммә шулай ҙа ул үҙен ошо мәл яулашырға һәләтле яугир итеберәк тойҙо. Ҡаушамаҫына, ҡулы ҡалтырамаҫына ышанды.

Аҙаҡ төрлөһөн күрҙе. Бер-ике тапҡыр ҡылысҡа-ҡылыс килде. Хәтәр мәлдәргә эләкте. Нисектер, имен, иҫән-һау ҡалды. Асығыу, туңыу хәлдәрен кисерҙе. Бик ныҡ ябығып, хәлдән тайып, мең бәлә менән тыуған төйәгенә ҡайтып йығылды...

Ул даулы, ҡанлы, ҡара ҡайғылы ҡараңғы көндәрен Бәҙерғол хәҙер бик хәтерләргә теләмәй. Йөрәге өшөй.

Әммә улар күп нәмә тураһында уйланырға, һабаҡ алырға мәжбүр итте.

Ярай, оло бәләләрҙән еңел ҡотолдо әле. Инде имен-аман йәшәп китергә яҙһын.

### 4

Тормош үҙ яйы менән аҡты.

Юнай старшина донъя ҡуйҙы. Уның эшен Ҡәҙербәккә тапшырып торҙолар ваҡытлыса.

Бәҙерғолға тиҫтәнән ашыу йылдар мәҙрәсәлә мейе серетеү, әллә ҡайҙарҙа олағып, елгә еленләп, боҙға быҙаулап йөрөү етерҙер. Донъя көтөргә, ата-баба ерено төпләнергә ваҡыт.

Әсәһе кесе улының, нисектер, баҫылып бошаманланып китеүен дә уйланы, ахры. Тиҙерәк кәләш эйттерергә булдылар. Ҡариҙел уренән — ҡатай эсенән.

Ағаһы барып, кәләш йәрәшеп ҡайтты. Бата уҡытылды, ҡалым яғы хәл ҡылынды. Йолаһын йолалаһалар ҙа, ҡыҫҡараҡ тоторға килешкәндәр, күрәһең, тәүге сана юлы төшкәс тә, ҡыҙ яғына туйлай киттеләр. Үҙҙәре йәнә дүрт саналы туй ҡунағы. Ҡейәү йыуасалы, баллы, мөсәле һыйбүләк йөгө.

Бәҙерғол әсәһе менән ҡупшы кашауайға ултырҙы. Теҙгенде кейәү үңәре тотто. Баш ҡоҙа ағаһы, ҡоҙалар икенсе саналарҙа.

Таныш туғайҙарҙы, бер төҫлөрәк осһоҙ-ҡырыйһыҙ яландарҙы үткәндә, шыҡһыҙыраҡ та, моңһоуыраҡ та тойолһа, урманлы үрҙәргә үрләй башлағас, түбәләстәр, тауҙар күренгәс, күңеле асылып киткәндәй итте Бәҙерғолдоң. Тауҙа ҡар ҙа ҡалыныраҡ, даланыҡынан ағыраҡ төҫлө. Шыршы, ҡарағай йәшеллеге лә күңел күтәрмәле. Ылыҫ, сайыр еҫе танауҙы ҡытыҡлай.

Тауҙарҙың ылыҫлы урманы ла икенсе төрлөрәк шаулай икән: Бәҙерғол күберәк шыулау өндәрен ауланы. Бара-тора, тауҙары бейегәйгән һайын, ағастар өҫкә ауып килгән төҫлө тойолдо. Нисектер, тын тарыға башланы: ике яҡлап тау-ҡаялар ҡыҫып килгән кеүек. Текә ҡаяға саҡ-саҡ йәбешеп торған ҡарағастар, тамырҙары ялбырашҡан ҡумырыҡтар йышыраҡ осраны. Бер яҡлап ара-тирә тәрән йырындар, упҡындар күренде. Аҫҡа ҡараһаң, баш әйләнмәле.

Артылыштарҙы артылыуы ла дала кешеһе өсөн уйын түгел икән. Ҡашауайың ҡапыл һалыулап түңкәрелеп китер һымаҡ. Тилбер ат та хәҙер лапшып һөрөнөп бара таштошҡа. Һелкенгән һайын аҫта тауҙар сайҡала төҫлө.

Артылыштың арҡаһы, ахры, бер мәл офоҡ киңәйеп китә, тирә-йүндәге, алдағы тау битәре күм-күкләнеп күренә, тын алыш иркенәйә. Ат еңел юрта. Хатта сүкетергә, сабып китергә әҙер. Ҡашуай сана үҙе дөрөп-төртөп бара. Ҡейәү егет теҙгенде ҡаты тоторға, ат башын шаҡарып барырға мәжбүр. Тау аты түгел, аҫҡа йән-фарман алып ҡасмағайы. Унан бөттөң — кейәү менән төп ҡоҙағыйҙың, үңәрҙең үлсәүҙәләрен генә табырҙар тапһа.

Юл иңкеүгә китте шикелле, хәтәр ауыштар, бормалар аҙайҙы, һикәлтәләр һирәкләнде. Урманы ла хәҙер ул саҡлы ҡуйы, шомло түгел. Юлы иркенләнде. Алда эт өргәндәре ишетелеп ҡалды. Бер аҙҙан әтәс ҡысҡырған, мал баҡырған тауыштар ҡушылды. Ҡаралтылар күҙгә салынды. Бында урманы ла ауылға терәлеп тора икән. Урамына килеп инмәйенсә, ауылы күренмәй.

Өйҙәр тарау ултырған. Барыһы ла тиерлек ҡабыҡ башлы. Ҡәртәләр ҙә, нисектер, унан-бынан ғына бәйләп эйҡаштырылған. Күбеһендә ел ҡапҡа, Ихаталары былай иркен, шау ҡаралтылы. Баҡса-фәлән юҡ.

Үҙҙәре сос икән, ауылға килеп инеүҙәре булды, ҡоҙалар ҡаршылай сыҡты. Төп ҡоҙа үҙелер инде, ҡысҡырып һаулаша-һаулаша йүгереп килеп, алдағы аттың башынан тотто, етәкләп, уны үҙ өйөнә табан ыңғайлатты. Уңарсы йәш ҡайнағалармы, егеттәрме шулай уҡ етешеп, арттағы ҡоҙаларҙың бер-икеһенең кәпәсен эләктереп алырға ла өлгөрҙөләр, ахры. Ҡөлөш, тартыш, йүгереш китте.

Биш саналы туй ҡунагы төп ҡоҙаның ихатаһына тулды. Хужа ҡоҙағыйы, баш ҡоҙаһы, кейәүе, бүтән ҡоҙалары менән ҡуш ҡуллап күрешеп сыҡты. Ҡайны кеше күп булһа ҡырҡтарҙы яңы уҙған урта буйлы, оҙонсараҡ йөҙлө мөләйем кеше икән. Һирәк һаҡал-мыйығы ла килешле. Үҙе ҡатай ырыуының бер старшинаһы. Сөләймән Шөғәйеп улы. Иләүендә абруйлы аҡһаҡал тиҙәр...

Күтәрмәлә ҡатын-ҡыҙ заттары, бер егет кеше күренде. Йәш сырайлы, олорағы, ҡәйнәһелер, асыҡ йөҙ менән йылмайып ҡоҙағыйы янына ыңғайланы. Эргәһендәге йәш көләстәре — ҡәйенбикәләре, балдыҙҙары — ҡыҙыҡһынып йәш кейәүгә, үңергә баҡҡандар. Бәҙерғол улар менән дә ҡуш ҡуллап күрешеп, танышып сыҡты. Тик барыһын да хәтеренә һеңдереп бөтмәне әле.

Ҡайны, ҡайнағалары аттарҙы туғарышып, урынлаштырып ашарға һалған араларҙа, Бәҙерғол йорт-ҡураларға иғтибар итте.

Эре ҡарағай бүрәнәле өй иркен кеүек. Ҡабыҡ соланы бар. Ихата ҙур. Ҡаршыла келәт. Уға терәп бурама оҙонса аҙбар. Өй яҡлап аласыҡ. Аҙбар ҡырында һөйәүле утын; тап, ярпыҡ менән тулы утынлыҡ. Һәр ҡайҙа ағас-таш ауып ята. Арғы кәртә ауыҙында урман ҡарап ҡара мунса ултыра. Кәртә аръяғында урман терәлеп тора.

Белеүенсә, тау халҡының шөғөлө лә шул урман. Ҡышын ағас ҡырҡа, бура бурай, һунар итә, күнәк, янтау яһай, туғын бөгә, йүкә-йышыу менән була. Яҙ-йәйгелеген ҡыуғын ҡыуа, һалабаш һала, күмер үртәй, дегет ҡайната. Һуғымтүллек мал аҫрай. Солоҡсолоҡ — ҙур кәсеп.

Тау халҡының көнкүреше, гөрөф-ғәҙәттәре лә үҙенсәрәк. Улар өсөн туй ҙа бер йола ғына түгел, байрам төҫөн ала икән. Бер өйҙә туй икән, унда бөтә ауыл ҡатнаша, байрам итә. Туй тамашаларын күрә, һыйлана, күңел аса. Туған-тыумасалар, ҡоҙалар һәр береһе кейәү, ҡоҙаларға өй күрһәтә,мәжлес ҡора. Башта йыйнаулашып сәрмә сисәләр, кейәү йыуасаһы менән һыйланалар. Шулай аҙна-ун көн тирәһе туй менән ауыл дәррәү геүләп ҡала.

Ҡатайҙан кәләш алһаң, ҡалтайма, тигән боронғолар. Бәҙерғолдоң әсәһе шул уҡ ҡатай араһынан килен булып төшкән кеше, ырыуҙаштарының туй ыҙан-йолаһын яҡшы белә. Шуға улына барыһын баштан уҡ таҡлап-таҡлап өйрәтте, һәр тәртибен мөмкин хәтле еренә еткереп үтәргә, һемәйеп, аҙап ҡалмаҫҡа күндерҙе.

Кейәүҙең булмышы туйҙа ла һынала ине. Бәҙерғол былай туйҙа үҙен һынатманы шикелле инде. Һәр йолаһын йолалап, еренә еткереп, ысын кейәүҙәрсә маһир үтәргә тырышты. Хатта кейәүҙе ҡыҫып алыр, аҡса-бүләген нык һау-

ҙырыр урында, былай мул ҡыланһа ла, еңгә-ҡәйенбикәләрен үҙе һоҡландыра-аптырата ҡуйғылаңы. Ҡейәү урынына үҙебеҙ һемәйә яҙып ҡалғыланыҡ, тип һөйләнеләр улар аҙаҡ. Бына, исмаһам, сос кейәү!

Ҡыҙ йортонда күңелен ныҡ иреткәне, яҡты хәтирәләр булып ҡалғаны шундайҙарылыр, моғайын.

Береһе, әлбиттә, ҡыҙҙы тәүге күреү теләге. Ҡайҙан табып, уйлап сығарып бөткәндәр шул хәлте интизар итеүҙе, күрһәтмәйенсә. Кәләшеңә йәрәш, туйына кил, ә уны һаман күрмә. Күңелдең нисек ҡымырйығанын белһәгеҙ икән шул саҡ! Ямаҡ түгел микән? Һине һанларлыҡмы? Уңғанмы? Бер ҡарашынан белеп булыр ине инде кемлеген.

Еңгәйҙәргә инәлеүҙәре үҙе ни тора.

Ҡыҙ иң яҡын туғандары өйөндә. Ә ул еңгә ҡулында. Күҙ ҡараһы кеүек һаҡлай, ҡәһәрең. Әйтерһең, алдан күрһәң, күҙ тейә, уҡаһы ҡойола.

Түҙмәне Бәҙерғол, төп еңгәне яй килтереп, мул ғына бүләк сумырып, кәләшен күрһәтеүҙе үтенде. Иртә күргәндең күҙе һуҡырайыр, тип шаяртһа ла, наян еңгә ризалашҡандай итте, киске шәфәҡ ҡалҡҡас, шишмә яныңдараҡ булырға ҡушты. Үҙе көн буйы һый-хөрмәт эсендә булды, күңеле — шишмә буйында. Ҡис еткерә алмай, шәфәҡ ҡалҡыта алмай йөҙәне.

Шишмә буйында күрҙе, ниһайәт. Кәләше еңгәһе менән һыу ала килгәйне, йәнәһе. Бәҙиғолъямал (кәләшенең исеме шулай) ыҫпай кейенгән, шәльяулыҡ ябынған. Йөҙө саҡсаҡ ҡына күренә, бары күҙҙәре янып тора. Бәҙерғолға бер һирпелеп ҡарауы булды, кейәүенең һушын алды. Бер һүҙ ҙә әйтә алмай ҡатып ҡалды. Һыу менән шишмәнән күтәрелгәндә инде, шәльяулыҡ йөҙҙө нығыраҡ ҡаплағайны. Кәләше лә, әллә ниндәй гонаһ эшләгән кеүек, уға бүтәнсә ҡарамаҫҡа, йәһәтерәк үтеп китергә ашыҡты. Билдәрен һығылдырып, йәтеш туйтанлап атлауын ҡарап ҡалды бары.

Буй тиһәң, буй, һын тиһәң, һын бар, янып торған ҡара күҙле икән кәләше — яратышып тигеҙ ғүмер итергә яҙһын. Бәҙиғолъямал менән Сәйфелмөлөк мөхәббәттәре кеүек булһын.

Ләкин был — ай күрҙе, ҡояш алды — «күреү» тигәне һис мөрхәтһендермәне, тик ярһытты ғына Бәҙерғолдо. Иртәгәме әле ысынлап күрер, ҡауышыр көн?

Кәләште кейәүе менән ҡушыр алдынан кейендереүяһандырыу — үҙе бер мәшәҡәт. Ҡауышыр аулаҡ өй әҙер. Ә ул өйгә, ҡыҙ ҡуйынына барып ингәнсе, кейәү юлында йөҙ төрлө кәртә. Зәмзәм һыуына юлығыр өсөн йөҙ төрлө мәниғ-кәртәләрҙе йырып сығыр батыр юлымы ни? Әллә ул зәмзәмдәй татлы нәмәләр, рәхәттәр еңел генә бирелмәй

микән? Шулай ҡәҙере артыбыраҡ китәлер, бәлки. Михнәттең бер рәхәте, тиҙәрме әле.

Оҙата барған еңгәгә лә бер бүләк. Өйгә еткәс, ишек бикле — астырырға ла бүләк. Төп еңгәнең баҙары тағы күтәренке.

Ҡәртәләр үтелеп, бүләктәр бирелеп бөттө буғай. Барын рәтләп-йүнәтеп, еңгә лә сығып китте. Ниһайәт, икәүһе аулаҡта ҡалды. Ҡәләше оялып-тартынып ҡына һике ситендә ултыра. Мөйөштә сымылдыҡлы урын. Ә Бәҙерғол иҙән уртаһында сисенмәгән көйө һаман баҫып тора. Йола буйынса, кәләше килеп өҫтөн-башын һалдырырға, булаһы ирен ҡәҙерләп ҡауышырға әҙерләргә тейеш. Ә ул оялыпмы-нисек ултырыуын белә.

— Сисендер мине, кәләш! — тине бойороулы тауыш менән Бәҙерғол. Бәҙиғолъямал һирпелеп кенә ҡарап алды. Ҡыйыуһыҙ баҫып кейәүе ҡаршыһына килде. Сибәр икән кәләше: ҡара ҡаштары һыҙылып тора. Сем-ҡара күҙҙәр. Оҙонсараҡ йөҙ. Өстән үргән ике ҡалын толом билгә төшкән. Ҡәүҙәгә лә ярайһы йомро ғына.

— Һаумы, Бәҙиғолъямал! — тип ҡуш ҡулын һуҙҙы. Тегеһе, тартына-тартына ғына, устарын һондо. Ҡесе икән ҡулы, ҡуш усына йомолоп бөттө. — Өҫтөмдө һалдыр инде!

Ҡайры тунының һәйбәт бәйләгән ҡушағына тотондо кәләше. Унық ныҡлап йәшерелгән осон таба алмай йөҙәне. Сымыры кәүҙәле, етмәһә, ҡалын тунлы Бәҙерғол янында күлдәксән генә кәләше шаҡтай кескәй, үҙе нескә булып күренде. Йөйҙө эҙләгәндә толом сәстәренең үҙенсә еҫ-төмен тойҙо. Әллә зәғфрән дә бөрккән инде.

Ҡөскә тапты, ахры осто: ҡушаҡ бушаны. Тундың ағас ҡаптырмалары ысҡындырылды, сөйгә эленде. Аяҡ кейемдәре сиселде. Ойоҡсан, күлдәксән ҡалғас, кәләшенең биленә ҡағылды. Тән ҡыҙыулығын, һаҡ дерелдәүен тойҙо Ямалының. Ҡалғаны инде тәмле хыялда ғына хәҙер: сымылдыҡ, ҡайнар ҡуйын. Илерткес мәл. — Мәңге онотолмаҫ йофаф төнө...

Бәҙерғол бер аҙна кейәүләп ятты. Башта ирмәк тойолһа ла, тик көн дә мунса инеү аҙаҡ йәштәрҙе ялҡыта башланы. Әммә кәләш ҡуйыны уны тамам иретеп, йә мунса, йә көн дә һый күңел юшҡындарын да йыуып алып киткәндәй итте. Әйтерһең, аҡланып, паҡланып ҡалды. Бәҙергол, йәш кейәү һәм ир булып, донъяға, гүйә, яңыса баҡты.

Бәҙиғолъямалды ата йортонан сеңләп оҙатыу йолаһы, былай күпме моңһоу булмаһын, Бәҙерғолдоң үҙенә ирмәк булып тойолдо. Ҡыҙ-килен исеменән атаһына, әсәһенә йә туғандарына ҡарап, еңгәләре сеңләй:

Ай-һай ҙа башым ауырый,
Ҡайҙа ғына һалып ятайым?
Яҡынға бирһәм, ялҡытыр, тип
Алыҫҡа бирҙе атайым.
Әй-й-й...

Түбәләгє дүрт сауыл,
Түбән генә ҡарап үҫһәсе.
Түрҙә генә ултырған әсәйем,
Быйылға йәш әле, тиһәсе.
Әй-й-й...

Ялан да ялан, ялаидыр,
Яландарҙа үҫкән баландыр.
Фатихаңды бир, атаҡай,
Үҙ ҡулыңда үҫкән балаңдыр.
Әй-й-й...

Шулай бер еңгә башлай, икенселәре моңайып ҡушлай. Ҡыҙҙары ла сеңләгәндәй булып ауыҙын ҡыбырлата, күҙҙәре йәшләнә. Ата йортонда үҫкән илгәҙәк ҡыҙ баланың туған ата-әсәһе ҡуйынынан, тыуған төйәгенән, туған-тыумасаларынан айырылып, әллә ҡайҙа ят ергә, ят кешеләр араһына барып инәһе бар. Унда әле әллә нисек була. Ҡейәүе, ҡәйнәһе. Уфтанмай, борсолмай мөмкинме ни? Тыуған төйәк менән генә түгел, йәшлек, ҡыҙ саҡ менән хушлаша бит. Нисек моңһоу булмаһын ул. Ҡейәүен эстән оҡшатҡан кеүек булһа ла, уға ла сеңләп һүҙ тейергә тейеш икән әле.

Сейәһе сейә икән дә,
Һабағы нәҙек икән дә.
Ҡейәүе кейәү икән дә,
Тамағы нәҙекәй икән дә...

Ана ни ти бит еңгәләре.

Ҡиленде Мәкәтегә, кейәү йортона ла, йолаһына килтереп төшөрҙөләр. Ҡилен менән ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, биш-алты саналы туй ҡунағы, һый-бүләк, игәт мал килде. Ҡиленде аҡ кейеҙ өҫтөнә баҫтырҙылар. Теле тәмле-татлы булһын тип, ауыҙына бал-май ҡаптырҙылар. Әсәһе киленен һамаҡлап ҡаршылауҙы ла онотманы:

Бейек тауҙа ҡуҡләгән
Ҡарсығалай бул, килен,
Ырыҫ-бәхет түшәлгән
Төклө аяҡлы бул, килен.
Мал-тыуарың күп булһын,
Балаларың иш булһын,
Ирең өсөн терәк бул,
Яман эштән йыраҡ бул.
Бары изге теләгем,
Ҡиленем, киленсәгем!

Ҡоро һамаҡ түгел, киленгә килешле өгөт-нәсихәт һүҙене был асылда.

Туй шауынан һуң әллә ни күп тә үтмәне, Бәҙерғолдо, ир, йорт башы һанап, атаһы урынына старшина итеп һайлап ҡуйҙылар. Шулай итеп, үҙенең донъяһы, хужалыҡ мәшәҡәттәре янына ил-йорт, иләү хәстәрҙәре ҡушылды. Бәҙерғол старшина һырлыларҙың игенселек, малсылыҡ кәсептәренә ныҡ иғтибар бирҙе, тирмәндәр һалдырышты. Ылау ҡыуыу, линия хеҙмәте эштәрен сират буйынса алып барырға тырышты. Ер-һыу бәхәстәренә, мал-мөлкәт бүлеү, ыҙан-йола, шәриғәт тәртип-низамдарын тотоу мәсьәләләренә лә ҡыҫылды. Йәмәғәт, аҡһаҡалдар фекере менән иҫәпләшеп эш итте. Заводчик, баярҙар менән ер-һыу хаҡында низағлашҡан саҡтары булды. Волость эштәрен тырышып башҡарғаны, йәмәғәттең мәнфәғәтен яҡлағаны, уңғанлығы, үҙенсә ғилемлелеге, урыҫсаһы яҡшы булыуы, аҡыллылығы өсөн уны ырыуҙаштары яратты. Яҡын-тирә волость, йорт-ил ҡаршыһында ла уның абруйы арта барҙы.

Азаматҡа ҡул бирһәң, абруйың артыр, ти. Бәҙергол күрше-тирә ғәҙел старшиналар, әҙәмсә түрәләр менән бәйләнешен, дуҫлығын нығытты.

Бәҙиғолъямал менән матур итеп донъя көтөп алып китте ул. Ҡиссалағы Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямалдан кәм ғишыҡлы булмағандарҙыр, яратышып, татыу йәшәнеләр. Бәҙиғолъямал туптай тупылдатып бер-бер артлы улҡыҙҙар табып торҙо. Ишле ғаиләнең үҙе менән бәрәкәте, йәме артты. Мал-тыуар үрсене. Бәҙерғол үҙе түрәләр рәтенә генә түгел, яйлап аҡһаҡалдар ҡатына ла инде. Аҡһаҡал күреп, уның һүҙенә, кәңәшенә ҡолаҡ һалыр, фәһем, һабаҡ алыр булып киттеләр.

Донъяның эске ҡытыр-мытырҙары булһа ла, ул һәүетемсә үҙ яйы менән аҡты.

## 5

Донъя ағышының яҙғы ташымдай, йәйге ҡайтымдай төрлө миҙгелдәре бар. Тобалары, шарламалары күп. Тәрән йылғалай өҫтән тыныс кеүек күренһә лә, аҫта уның үҙ өйөрмәләре өйөрөлә, берсә урғып сыға, берсә талғынлана, төптә шишмәләре бәрә.

Бәҙерголға йәмәғәт фекере ошо даръя ағышын хәтерләтте. Ул да, абайлаһаң, гел тулҡынып, ҡайнап тора бит. Үҙенең төпкө ағымы бар. Шуны нисек бер үҙәккә йүнәлтергә?

Байгазыға кәңәшкә йыйылды старшиналар. Исәт провинцияһының ун өс волосынан ун ике старшина, өс тархан,

ахун килгән. Һәммәһе лә вәкәләтле түрә, абруйлы аҡһаҡал. Араларында иң өлкәне арҙаҡлы Таймаҫ Шайым тархандыр, моғайын. Ул инде етенсе тиҫтәне ҡыуған аҡһаҡал, бөтә илгә танылған батыр. Уның менән провинция түрәләре һәр саҡ кәңәш итешә, Ырымбур губернаторы үҙе иҫәпләшә. Йомош-ярҙам менән күптәр уға килә. Потомственный тархан йорт-илде, провинцияны тетрәтеп тота. Әле лә Байғазыға тархан, старшиналарҙы ул йыйҙырған. Теҙген уның ҡулында.

— Мөхтәрәм тархан вә старшина түрәләр! — тип һалмаҡлап ҡына кәңәште асты Таймаҫ тархан. — Әбей батша галиә йәнәптәре үҙе, уның һәйәте тарафынан наказ әҙерләтеү эше барығыҙға ла мәғлүм. Яңы ҡанундар төҙөр өсөн, волость менән кәңәшләшеп, һүҙ төйнәп килгәнһегеҙҙер тип уйлайым.

Наказдан элек указы бар: депутат һайларға. Кемде, нисек һайлайбыҙ? Шуны ла хәл ҡылмаҡ кәрәк. Һайланмыш депутатҡа тәүсиәт [1] төҙөү йөкләтелер. Исәт провинсаһы аҫабаларының уртаҡ тәүсиәте итеп ойошторор. Ҡарамаҡта әйтеүе анһат, ә барын бергә туплап, ҡағыҙға төшөрөп, төплө вәҫиҡәт [2] итеүе бик анһат та булмаҫ. Уға үҙенсә ғилемле лә, тәжрибәле лә, ил-йорт хәстәрен, нужаларын яҡшы күргән-белгән кеше лайыҡ. Быныһы — бер. Икенсеһе, бар эште депутатҡа ғына ауҙарып ҡалдырмай, үҙебеҙ иң кәрәк тигәндәрен таҡымлап әйтеп бирергә, уға күндерергә тейешбеҙ. Шулай-шулай тип. Яҙма көйө лә, телдән дә.

Байғазыға йыйылыуыбыҙ әле шуның өсөн. Мин провинса түрәләре менән һөйләшеп шулай килештем. Бында эште бөтөрәбеҙ ҙә үҙебеҙ әле тәрәйенләр кешене Силәбегә депутат итеп һайлап ҡайтырға ғына барып әйләнәбеҙ. Бына шул.

Йыйылғандар тын ултыра. Һәр кем уйға сумған. «Бына шул», — тип кенә әйтә лә ул тархан — «шул»дың яйын нисек табырға? Таймаҫ тархан менән тура һөйләшеүе лә ҡыйын. Ярып әйтһәң дә ярамай. Шымып та ҡалып булмай. Күпме старшина, батырҙарҙың башына етте инде ул мәлғүн. Элекке яуҙарға ҡаршы сығып баҫтырышып йөрөнө. Губерна түрәләре алдында яҡшатланып, ил-халыҡ мәнфәғәтенә арҡыры төштө. 1735 йылғы яу осоронда үҙенең Мейәс буйы ерҙәрен буштан бушлай хөкүмәткә бирҙе, Силәбе ҡәлғәһен һалдырышты. Шулай итеп, Исәт башҡорттарының муйынына боғалаҡ кейҙертте. Һырттан ҡаматты.

---

[1] Тәүсиәт — наказ.
[2] Вәҫиҡәт — документ.

— Йәгеҙ, ауыҙ йомоп ултырырга килмәнек. Әйтәһе һүҙегеҙҙе әйтегеҙ, — тине үҙе лә бер аҙ тынып көтөп ултырған тархан.

Оло Уҡтай волосы старшинаһы Ҡоломбәт тамаҡ ҡырҙы.

— Заманына күрә ғәмәле, ғәмәленә күрә әмәле, тигәндәрме әле беҙҙең ата-бабалар. — Шулай хикмәтләберәк башланы ул һүҙен. — Беҙ үҙ волосыбыҙҙа йыйнаулап кәңәшләштек. Төрлө һүҙ булды. Күптәр ышанманы. Бушты, булмаҫты, тинеләр. Һорағас, яуап бирмәй ҙә ярамайҙыр инде тип, сусҡанан бер ҡыл тигәндәй, үтенестәр ҙә әйтелде. Шуның бер нисәһен бисер менән ҡағыҙға төшөргән булдыҡ. Бына ул. Һүҙ күберәк ер-һыу тирәһендә барҙы. Ирек, иркенлек, тигәндәрен, һай, белмәйем, улары сәмреғош томшоғондалыр инде ул булһа.

Ҡоломбәт артынса Арғаяш волосы старшинаһы Юламан Ҡушаев ҡулындагы наказ ҡағыҙын ҡыштырлатты (Уның һүҙ алыу ишараһы шул ине). Юламан — Ҡоломбәттең киреһе, — әйтһә, һүҙен киҫеп әйтә, һөйләһә, өҙөп һөйләшә:

— Уратып-суратып тормайым, наказ икән, наказ — әҙерләнек беҙ уны үҙ иләүебеҙ менән. Ата-бабаларыбыҙҙан мираҫ еребеҙҙе яңы закон менән раҫлатыу — беренсе талап. Йәғни-мәҫәлән, төп наказ. Һалымдарҙы элекке яһаҡ менән алыштырырға — икенсеһе. Сауҙаға сик булмаһын, пошлина түләтелмәһен — өсөнсө наказ. Линия хеҙмәтендә башҡорттарга ла жалунья бирергә.

Бына беҙҙең Арғаяш волосының төп наказы. Халыҡ үтенесе. Уның вагыраҡтары ла бар, — улары ҡағыҙға яҙылған — әйтеп тормайым.

Ниндәйҙер ягымлы мәҡам менән ойотоп, Әбделмырҙа ахун Мөслөмаев вәғәз ҡорҙо:

— Көн хәстәре менән мауығып, динде ситтә ҡалдырмағыҙ, мосолмандар, — тине ул. — Диндән башҡа мөьмин юҡ. Беҙ Мөхәммәт пәйғәмбәр өммәттәре, әхирәтте лә ҡайғыртайыҡ. Аллаһы тәғәләгә тоғро булғанда, намаҙ, ғөшөрсаҙаҡанан ҡалмаганда ғына, иман, бәрәкәт бар. Ислам динебеҙгә яттар хилафлыҡ ҡылмаһын. Шәриғәтебеҙ — беҙҙең ҡануныбыҙ. Тәүсиәтмс-ниме, кем, кәрәк икән шул яғы законда ла иҡрар ителһен. Мәсеттәребеҙҙе һаҡлау фарыз. Иман кәрәк, мөьминдәр! Көсләп суҡындырыу рухыбыҙҙы, йәнебеҙҙе рәнйетә. Шунан да яман көфөрлөк юҡ. Хоҙай шомлоғо. Ундайҙар мәңге тамуҡта яныр, нәҫел-нәсәбе ҡарғалыр, тамырҙары ҡорор. Ил-йортҡа ҡәһәр, афәт килер, Төрлө ҡырғын, боларыш, боҙоҡлоҡ нимәнән килә тиһегеҙ? Шуларҙан да һаҡлаһын хоҙайым. Алланың ерҙәге наибы батшалар көфөр эштәрҙе мәниғ ҡылһын ине. Әҙәмдәрҙең

нәфсеһе аҙа, йәмәғәт. Аҙағы тағы яман булыуы бар. — Шулай шомландырып вәғәзләне ахун.

Бүтәндәр ҡағылып ҡына үткәнде аңлатыбыраҡ һөйләргә, ныҡыраҡ нигеҙләргә теләне Бәҙерғол Юнаев үҙ нотоғонда:

— Хөрмәтле тархандар, старшиналар, мөхтәрәм ахун хәҙрәт, мин Юламан старшина ҡағылған ер-һыу мәсьәләһен үҙәккә ҡуйыуҙы яҡлайым. Ҡарап торғаныбыҙ — ер-һыу. Уһыҙ беҙгә көн дә, йүн дә юҡ. Ер-һыуың бар икән — һин аҫаба, юҡ икән — әтәмбәй. Ә ер-һыуҙарыбыҙ йәлап әҙ йә күмәртәләп ҡулдарыбыҙҙан китеп бара ла баһа. Һатып ебәреүҙе хәҙер кәсепкә әйләндерҙек. Етмәһә, һатҡанда күпме алданып һемәйеп ҡалабыҙ. Ҡәкре ҡайынға терәтәләр беҙҙе. Заводтарга алынған артыҡ ерҙәрҙе кире ҡайтарыуҙы талап итергә кәрәк.

Бөтә Исәт провинсаһы аҫабаларының төп наказы итеп ер-һыуҙарыбыҙҙы батшаның яңы законында раҫлауҙы һорайыҡ.

Хаҡ әйттеләр, яһаҡты кире ҡайтарыу мөһим. Ул ер-һыуға хужа булыу, төп аҫабалыҡ шарты ине. Уныһынан да яҙып ҡалмайыҡ инде.

Хәҙер, иншалла, игенселек менән ныҡлап шөғөлләнәбеҙ. Малсылыҡҡа ҡарағанда ул күпкә файҙалыраҡ. Әммә-ләкин бында ҡамасау байтаҡ. Иген бар ерҙә, мәҫәлән, тирмәне кәрәк. Ашлыҡты бетәү-яра ашап булмай. Ә һыу тирмәндәребеҙгә яһаҡ һалына. Хатта ҡул тирмәненә хәтле. Игенселек кәсебебеҙ ныҡыһын өсөн, наказ итеп, һыу, ҡул тирмәндәренә һалымды ташлатыуҙы һорайыҡ.

Игенсе тимерлекһеҙ эшләй алмай. Тимерлекторҙе тыймаҫҡа ине. Хәҙер алыш-бирешһеҙ, сауҙаһыҙ йәшәр заман да түгел. Өфө, Ырымбур сығам тиһәң, пошлина түләү кәрәк. Хатта йәнәшәләге Себер йәрминкәләренә барыу өсөн дә. Бер ил эсендә, һис юғы, башҡорттоң үҙ иләү-волостары, провинсалары эсендә пошлинаһыҙ сауҙаны яҡлайыҡ. Үҙебеҙгә лә, илгә лә шулай күберәк файҙа.

Провинса башҡорттары наказында линия хеҙмәте өсөн жалунья түләүҙе һорау мотлаҡ ҡуйылырға тейеш. Бер эш башҡарып та, бер халыҡҡа түләү, икенсеһенә түләмәү — үҙе тиңһеҙлек.

Йәнә бер мәсьәлә. Беҙҙең старшиналарҙың һәр береһенең мишәр писары бар. Элек бәғзе бер старшиналарыбыҙҙың уҡымышы етмәгәндә был, бәлки, шулай кәрәк булғандыр. Ә хәҙер бөтә старшиналарыбыҙ ҙа китап таныр, уҡый-яҙа белер кеше. Башҡорттарҙан хәҙер уҡымышлылар етерлек. Шуға күрә наказда писарҙарҙы башҡорттарҙан тәғәйенләүҙе үтенәйек. Былай итеү, әлегә ситтән ҡу-

йылған писарға өҫтәмә эш хаҡы түләүҙән дә ҡотҡарыр иләүҙе...

Старшиналар ҡеүәтләп геүләшеп тә алдылар:

— Һай, мәрҙәс, Бәҙерғол. Быларҙы күптән ҡуйырға ваҡыт ине.

— Хуплайбыҙ. Тамғабыҙҙы һалабыҙ.

— Бик раҫ...

Байғазы волосы старшинаһы Байғазы Көҙәмешов һүҙ алды:

— Мин дә бында һөйләгән старшиналар һүҙен ҡеүәтләйем. Бәҙерғол старшина әйткәндәр, минеңсә, барыһы ла провинса наказына инергә тейеш. Үҙем шуны ла өҫтәмәксемен, ер-һыуға ҡағылышлынан. Беләһегеҙ, хөкүмәттең 1736 йылғы указы бар. Унда батшаға ҡаршы яуҙа ҡатнашҡан кешеләр, башҡорттар йәғни-мәҫәлән, ер-һыуынан яҙа тиелгән. Ә ғәмәлдә нисек килеп сыға? Иләүҙән бер-ике кеше яуға ҡушылған икән, шуға һылтанып, бөтә иләүҙең йә ауылдың ерен тартып алалар. Берәүҙең гонаһы арҡаһында гонаһһыҙҙар ҙа яза татый — ерһеҙ ҡала. Хаҡ түгел бит был. Указса ла түгел. Ошо боҙоуҙарҙы төҙәтәһе ине. Берәүҙең гәйебен бөтә ил-йорт күтәреү законға һыймай. Ә килмешәк мишәрҙәр башҡорттоң иркенә арҡыры төшөп, уның арҡаһына бысаҡ ҡаҙап, еренә хужа була. Үҙе һалымдан да ҡотола, ерле лә булып китә...

Таймаҫ тархан, айырым һүҙ ҡыҫтырыуҙарын иҫәпкә алмағанда, тыңлап ултыра-ултыра, үҙе лә бер нисә тәҡдим индереүҙе кәрәк тапты, ахры:

— Тархандар хоҡуғын, старшиналарға тейешлеһен дә онотмайыҡ әле, йәмәғәт. Тархандар хоҡуғы тағы артырға лазым. Ил-йорт йолаһы, аҡһаҡалдар ҡануны йәшәй. Ер-һыуға ғына түгел, ил-күскә лә мыҡты хужа кәрәк. Килмешәк менән аҫаба бер тиң булмағандай, байғош менән байғура, старшина менән тархан да бер түгел. Шулар ҙа мәшруҡ ҡанунда[1] урынын табасаҡ. Ә беҙ, аҫабалар, тархандар уны тәүсиәт-наказ итеп хәтерләтәйек.

Шуныһын да иҫкәртәм, кем, старшиналар, наказ тип, саманан да сыҡмағыҙ. Тейерен-теймәҫен белегеҙ. Шулай һәммәһен уйларға, самаларға кәрәк булыр. Ахун хәҙрәт әйтмешләй, үҙебеҙ көфөр һүҙгә күсеп китмәйек.

Кәңәште үҙенсә төйнәүе лә шул булды, ахры, тархандың.

— Тағы әйтмәй ҡалған һүҙ юҡмы? Булмаһа, депутат мәсьәләһенә ҡайтайыҡ. Кемде күрһәтәһегеҙ? Кемгә ил-йорт яҙмышын ышанып тапшырырға? Әйтегеҙ! — Ҡоро яңғыраны тархан һорауы.

---

[1] Мәшруҡ ҡанун — закон проекты.

Ян-яғына ҡарана һалып, Әбделмырҙа ахун ҡумшынды:

— Үтә мәсьүлиәтле вазифа был, мосолмандар, мәбьус, йәғни, кем, депутат тигәне. Ил эше. Уға ғилеме, оло абруйы, олуғ түрәләр алдында һүҙе үтер аҡһаҡал лазым. Быға мин, йәғни-мәҫәлән, Таймаҫ тархандан да мәғкүл затты күрмәйем. Тарханыбыҙҙы мәслихәтләйем.

— Раҫ. Таймаҫтан мәғкүл юҡ, — тине бер нисә старшина бер юлы. Тархан ҡуҡырая биреп, ҡорҙағыларҙы күҙәтте. Юламан старшина ҡалҡынды:

— Ахун хәҙрәттең һүҙендә дөрөҫлөк бар. Таймаҫ тархан иң лайыҡ вәкил кеүек. Дәрәжәһе оло. Батыр исеме бар. Оло түрәләрҙең яйын таба белә. Ҡулы ҡаты. Ҡәрәк ерендә йомшаҡ та.

Әммә, минең уйымса, депутат булырға исем-дәрәжәләр генә етмәҫ. Уның ил-йорт алдында тигеҙ яуаплылығы хәжәтерәк. Ул бөтә халыҡ хәстәрен күрер, тиң ҡарар булһын. Уға ыҙан-йола низамдарын ғына түгел, батша закондарын яҡшы белеү, урыҫса грамоталы булыу ҙа шарт. Шунһыҙ наказдарҙы дәлилләү, ышандырыу мөмкин түгел. Уға әле Ырымбур, Силәбе, Мәскәү араһында йөрөү ихтыяжы тора. Һәйәт-комиссияла, бәлки, айҙар буйы ултырырға, һөйләргә, яҡларға тура килер. Эше иҫ киткес күп, үтә мәшәҡәтле, яуаплы, минеңсә.

Таймаҫ тархан быға мәғкүл булыр ине ул. — Юламан старшина әҙерәк ярамһаҡланыуға, һүҙ йүнәтеүгә шулай еңел күсте. — Ләкин шулай ҙа ул оло йәштәге кеше. Хәҙер етенсе тиҫтәне ҡыуа. Уңа бик ауыр булыр. Өҫтәүенә, ишетеүемсә, депутат булыр кеше алтмыштан өҫтә булмаҫҡа тейеш шикелле.

Шуларҙы иҫәпкә алғанда, мин ошо ҡоробоҙҙа үҙебеҙҙең арабыҙҙан Бәҙерғол старшинаны иң ҡулайы күрер инем. Йәше ил ағаһыныҡы. Ғилеме, уҡымышы бар. Урыҫса һөйләшеүе шәп. Урыҫ грамотаһы менән таныш. Арабыҙҙа иң хөрмәт иткән ғәҙел старшинабыҙ. Һәммәһен тиң ҡарай. Һүҙен төплө, раҫ итеп әйтә белә. Бөгөнгө төплө һүҙен үҙегеҙ ишеттегеҙ. Волосы исеменән үҙе яҙған наказдарын ҡарап сыҡтым мин. Әле беҙ һөйләгәндәрҙең барыһы ла унда бар. Ул наказ провинса наказының төп маяһы булырлыҡ.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, депутатлыҡҡа Бәҙерғол старшина Юнаевты тәҡдим итәм.

Баязит, Мортаза, Ғайса старшиналар Юламан тәҡдимен ҡеүәтләп сыҡтылар. Күпселек фекергә Таймаҫ тархан да ризалашырға мәжбүр булды. Ҡалғаны — Силәбегә барып, Бәҙерғолдо Исәт провинцияһынан Мәскәүгә Закондар төҙөү комиссияһына депутат итеп һайлау эше — тиҙ һәм шыма үтте.

## ЗАКОНДАР ТӨҘӨҮ КОМИССИЯҺЫНДА

### 1

Тәхеткә сәйер килде Екатерина II. Дәүләт түңкәрелеше эшләтте ул. Йүнләп батшалыҡ итә белмәгән ире Петр III-нө үҙ тирәһендә ярамһаҡланып уралған атаҡлы графтар, Семеновск гвардия полкы ярҙамында тәхеттән еңел бәреп төшөрҙө. Таждан баш тарттырылған Петр Федоровичтың тиҙ үлеме лә шомло, серле булды, төрлө имеш-мимештәр тыуҙырҙы.

Атаһы яғынан Лифляндия барондары тоҡомонан килгән, Балтик буйында прусс рухында тәрбиәләнгән Ҡатерина үтә көйәҙ, үҙ һүҙле, ғорур тәбиғәтле, маһайыусан аристократка булып үҫте. Нескә генә биле, аҡһыл йөҙө, кескәй йомшаҡ ҡулдары, күперенке бәрхәт күлдәге менән торғаны бер тере ҡурсаҡ ине. Ҡыҙ булып етеп килгән саҡта, салондарҙа баронессаларҙың юҡ-бар ғәйбәт-ғөйбәтен тыңлап, ғишыҡ-ғишрәттәрҙе, үпкә-низағтарҙы күҙәтеп, күп ваҡытын рыцарь романдары уҡып, хыял донъяһында йөҙөп үткәрҙе. Романовтар тоҡомо Петр Федоровичҡа маҡсат менән кейәүгә сығыуы тиңһеҙ өҫтөнлөктәргә, ниндәйҙер ҙур өмөттәргә бағланғайны.

Дан-тәхет сихырланы аҙаҡ батша ҡатынын. Ире урынына Рәсәй тәхетенә үҙе яман юл менән менгәнен күпмелер томалар өсөн, күҙ буярға, мәрхәмәтле булып ҡыланырға тотондо. Башта свитаһын ныҒытты, үҙен күтәрешкән графтарға, дворяндарға оло титулдар, ҙур вазифалар, зиннәтле һарайҙар бирҙе батша исеменән. Фавориттары менән сәйер йәмғиәт ҡороп алды. Шуға тип ҡаҙна хазинаһынан алып мең һум аҡса бүлде. Обществоның апартаменттары Ҡышҡы һарайҙың иң шәп антресолдәрендә урынлашты. Председателе итеп иң яҡын фавориты, былай әйткәндә, һөйгәне Григорий Орлов граф тәғәйенләнде. Общество, йәнәһе, эш башҡарған булып, ер эше, һөнәр мәсьәләләре буйынса илгә анкеталар, төрлө һорауҙар таратып булашты. Асылда иһә, ул благообщество тигәндәре тәхет тирәһендәге эре аристократтарҙың йыйылып күңел асыр, һыйланыр, ә йәш тол императрицаның ғишыҡ-ғишрәт итер, уйнаш ҡылыр урыны ине.

Екатерина II тәхеткә менгән йылдар — Көнбайыш Европала мәғрифәтселек идеялары, мәғрифәтле абсолют монарх ҡараштары нык таралған заман. Францияла данлыҡлы энциклопедиясылар, атаҡлы Дидро, Вольтерҙар күтәрелеп сыға. Уларҙың ҡыйыу ҡараштары Европа йәмәғәтселеге фекерен биләй.

Йәш императрицаның уйы томана ҡараңғы Россияның үҙенә ҡарағанда ана шул мәғрифәтле Европаға күберәк

йүнәлә. Шул шөһрәтле аҡыл эйәләре кимәлендә торғоһо, мәғрифәтле монарх булып күренгеһе килә. Екатерина үҙен культуралы итеп танытмаҡсы булып, Дидро, Вольтер, Даламбер кеүек оло философтар, әҙиптәр менән хат алыша. Төньяҡ Семирамида — Россия иле хаҡында иркен әңгәмәләр алып барырға ынтыла. Әйҙә, бөтә Европа, ер шары уның мәғрифәтле изге батша икәнен күрһен! Королдәр, маҡтансыҡ Фридрих II үҙе шаҡ ҡатһын!

Даламберҙы, Вольтерҙың үҙен Россияға саҡырғанда ҡалай шәп булыр ине. Ниңәлер күнмәйҙәр. Һис юғы, уларҙың яҙмаларын, тотош китапханаларын һатып алырға кәрәк. Аҡса, алтын ҡыҙғанмаҫҡа! Кем алған? — Ее величество императрица Екатерина II, тиһендәр. Уларға буш жалунья, пенсия түләү ҙә йәл түгел — күрһендәр мәрхәмәтте мәғрифәтле монархтан! Таң ҡалһын Европа!

Либераль ғына түгел, эшлекле эшмәкәр булып та күренергә ине уға. Ә ниңә закондар буйынса һүҙ ҡуҙғатмаҫҡа? Йәмәғәтселектең дә был юҫыҡта һүҙе йөрөй. Ысындан да, 1649 йылғы Россия закондар йыйылмаһы иҫкереп бөткән бит инде. Шуны яңынан ҡарап, яңыртып ҡарағанда? Йөҙ йыл ашыу тейелмәгән был мәсьәләне кем күтәрҙе? — императрица Екатерина Алексеевна ғалиә йәнәптәре, тиһендәр. Тағы баһаң, мәртәбәң артыр. Законды йомшаҡ әйтеп, ҡаты сығарырға ла була бит әле. Һәр хәлдә, барыһы үҙең ҡулыңда, теләһәң нишләйһең.

Бына 1766 йылдың декабрендә яңы Закондар проектын төҙөү буйынса комиссия ойоштороу турында манифест сығарҙы императрица, уға һайлауҙар хаҡында указдар иғлан итте. Ә үҙе комиссияға наказ яҙырға төпләнеп ултырҙы. Былай дәүләт эштәре араһында элек тә ике йыл буйы әҙмәҙләп уйҙарын, китаптан уҡығандарын аҡҡа төшөргөләй килгәйне ул. Дөрөҫө, уға артыҡ баш ватаһы юҡ ине. Ана, Европала күпме закондар йыйылмаһы бар. Ҡара ла күцеленә ятҡанын ал. Бына, мәҫәлән, Монтескьеның «Закондар рухы» китабы, Италия юрисы Беккерий хеҙмәте, француз энциклопедистары томдары.

Күсерергә, һайлап алырға керешә императрица. Компиляция, иҫке әйберҙең тиҫкәреһен әйләндереп типсеү кеүегерәк килеп сыҡты сығыуын. Уны кем белә лә кемгә кәжәт. Мәғрифәтле императрицаның наказы тигән исеме булһын — шунда хикмәт.

Йәш батша бикәнең Наказ тигәне һабын ҡыуығы ине. Тыштан ялтыр, йомро, эсе — буп-буш. Екатерина Наказын тыштан матур һүҙҙәр менән биҙәп, күҙгә төтөн, мейегә шауҡым ебәрергә ниәтләне. Европа уны закондар әҙерләүсе, тип күтәреп алды, үҙ иле халҡы хәстәрлекле батша итебе-

рәк аңланы. Батшаға шул ғына кәрәк тә: ғәмәле түгел, әмәле ҡиммәт. Аҙаҡ ул Наказ комиссия депутаттарына уҡылды ла йыйып та ҡуйылды. Аңлағаны аңланы, аңламағаны ауыҙ асып алды. Татлы һүҙ ишетелде лә онотолдо.

Комиссияның да эшенән бигерәк шаулауы шарт батшаға. Шартынан шаштыртты ул хатта башта.

## 2

Депутат Бәҙерғол Юнаев Мәскәүгә 1767 йылдың 6 июлендә генә саҡ килеп етте. Провинциялағы әҙерлек мәшәҡәттәре, Өфөлә тотҡарланыу, айға яҡын оҙон юл күп ваҡыт алды.

Өфө провинцияһы башҡорттары депутаты Туҡтамыш Ишбулатов 2 июлдә килеп төшкән икән. Уның менән депутаттарға тәғәйен ҡунаҡ йортонда күреште. Теге заманда Ғәйнә иләүендә күргән ғәййәр Туҡтамыш старшина ҡарамаҡҡа хәҙер баҫылып, шаҡтай ологайып киткән кеүек. Сәстәре тамам салланған. Ҡуперенке шырт мыйығында ла аҡ төк күп. Әммә улар үҙенсә бер олпатлыҡ бирә уға. Былай ҙа әле лә баҙыҡ, ҡаты баҫһа, ер һелкетер ауан әҙәм.

Туҡтамышты Өфөлә тап килтерә алманы Бәҙерғол. Алдан һөйләшәһе, бергәләп хәл ҡылаһы һүҙҙәре бар ине. Башҡорттар бер бөтөн халыҡ, Өфө провинцияһы аҫабаларының наказы бер төрлө, исәттекеләрҙеке икенсе төрлө булып тормаһын ине. Ҡөнкүреш, нужалар, хәстәрҙәр бер, наказдарҙың да күбеһе уртаҡ булып, бер нөктәгә һуғыуы шарт. Ике документтың бер хәҡиҡәтте ҡеүәтләүе ҡиммәт. Аҙаҡ бер төптән яҡлауы ла еңелерәк булыр.

Теге даулы заманда ғәйрәтләнгән ғәйнәләрҙең араһына инеп ҡанаттарын ҡайырған старшина әле лә тиҫкәрегә бармағайы. Өҫтәүенә, үҙен хәҙер эре промышленник тиҙәр. Үҙ рудниктары күп, заводтары ла бар, ти. Ундай әҙәмдең ил-йорт хәстәреме, әллә күберәк үҙ ҡайғыһымы башында? Наказдары ҡалай? Беҙҙеке кеүекме-түгелме? — Шундайыраҡ уйҙар ҙа йүгереп үтте Бәҙерғол башынан.

Иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, танышып алғас та, Туҡтамыш, Бәҙерголдан күпкә өлкән һәм олпат кеше, һүҙҙе төп эшкә борҙо.

— Мин һине дүрт күҙ менән көтәм, — тине ул. — Беҙгә ҙур мәсьүлиәт йөкләнгәнен тояһыңдыр инде, Бәҙергол туған. Халыҡтың һайланмыш ирҙәре — депутаттарыбыҙ бит. Ил-йорт беҙгә ҡарап тора. Өфө провинсаһы башҡорттары — миңә, исәттекеләр — һиңә. Ә беҙҙе Урал тауы ғына айырһа ла, тоҡомобоҙ ҙа, көнкүрешебеҙ ҙә, хәжәттәребеҙ ҙә уртаҡ. Наказдарыбыҙ ҙа бер төрлөрәк булһын ине. Шуларҙы үҙ-

ара ҡарап, бер йүнәлешкәрәк борһаҡ ине, тим, кем, Бәҙерғол старшина.

— Беҙҙең уйҙар бер төрлө икән, Туҡтамыш старшина. Бик шатмын. Һүҙҙәр берегергә, бер төптән эш итергә яҙһын! — тине Бәҙерғол, һөйөнөсөн белдереп.

Шунан бер-береһенең яҙылмыш наказдары менән яҡшылап танышып сыҡтылар. Өфө провинцияһы башҡорттарының наказы шаҡтай ҙур икән — 35 тарау[1]. Ентекләп, таҡымлап төҙөлгән. Исәт аҫабаларыныҡы — 22 тарау. Шуныһы ҡыуаныслы, — әйтерһең, бер-береһенә ҡарап-ишетеп яҙғандармы ни — тарау-тарау үтенестәре дәл килеп тора. Уртаҡ көн-хәжәт — уртаҡ наказ. Өфө провинцияһы башҡорттары наказында йәнә тау-руда эшенә, идара итеүгә, айырым йола-көнкүрешкә бәйле мәсьәләләр бар.

— Бик мәмнүнмен, — тине, Бәҙерғолдарҙың наказын ҡат-ҡат уҡып, Туҡтамыш. — Бер төрлөрәк уйлайбыҙ икән, бик мәғҡүл. Шулай ҙа бер-беребеҙҙекенә таянып, өҫтәйһе йә дәлилләй төшәһе урындар ҙа бар кеүек. Беҙгә, икебеҙгә лә, Рәсәйҙең элгәрге закондарына, хоҡуҡ әсастарына нығыраҡ таяныу мәслихәт. Хоҡуҡ башы — законда, закон башы — башында, тигәнме әле аҡыл эйәләре? Закон хоҡуҡ ҡына түгел, бурыс та. Мәҫәлән, ил алдындағы важиб[2]. Беҙ — Рәсәй подданныйҙары. Хоҡуғыбыҙ ҙа, важибыбыҙ ҙа уртаҡ булаһы. Ил алдында үҙ ҡөсиәтен[3] үтәп, ата-бабаларыбыҙ яу сапҡан, Азов, Ҡырым, Рига, бүтән походтарҙа булған. Наказ башында Рәсәйгә үҙ иҳтыярыбыҙ менән ҡушылғанды, аҡ батшанан ер-һыуҙарыбыҙға грамоталар алғанды әйткәндә, Рәсәйҙе яҡлап яуға йөрөгәнде лә күрһәтәйек.

— Бик мәслихәт. Олуғ Рәсәй — уртаҡ илебеҙ. Уртаҡ бурыстарҙы атау тиң хоҡуҡҡа хаҡлыҡты ла ҡеүәтләр. Ерһыу мәсьәләһендә батша грамотаһы, указдарына таянып, атап әйтеп, тағы нығыта төшкәндә яҡшы булыр.

— Сауҙаны сикләмәү ил иҡтисадына[4] файҙа ғына. Шул фекер ҙә ике наказда ла урын тапһа, үҙ көнөбөҙҙө генә түгел, олуғ ил көнөн дә хәстәрләйбеҙ күренер.

— Игенселек, тимерлек, рудниктар эшен дә дөйөм иҡтисадҡа һуҡтырып әйтеү хәйерле.

— Әбей батшаны һәр кемгә хоҡуҡ, мәрхәмәтлек хаҡында һөйләргә ярата, тиҙәр. Дин, выждан иркен шуға бәйләберәк нигеҙләһәк, һәйбәт булыр ине.

---

[1] Т а р а у — пункт, параграф.
[2] В а ж и б — мөҡәддәс бурыс.
[3] Ҡ ө с и ә т — бурыс.
[4] И ҡ т и с а д — экономика.

Ил-халыҡ йолаларын хөрмәт итеү — шулай уҡ миһырбанлы батша ҡулында.

— Башҡорттарға идара итеү хаҡындағы тарауҙы яҡшылап ҡарайыҡ әле.

— Старшина хоҡуҡтарын да...

Шулай Туҡтамыш менән Бәҙерғол депутат алып килгән наказдарын икәүләшеп бик ныҡ тәфтишләп тикшереп, һәр пунктын ныҒытып, өҫтәп, дәлилләп бер нисә көн ултырҙылар. Һәр һөйләмен, формулировкаһын асыҡ, теүәл итеп бирергә тырыштылар. Рәсәй закондарын, бигерәк тә башҡорттарға ҡағылышлы батша указдарын, яҡшы белеү наказдарҙы төплөрәк, законсараҡ итеште. Ер-һыу, сауҙа, игенселек, идара итеү, дин, шәхес азатлығы мәсьәләләрен тарихи, экономик яҡтары менән бергә ижтимағи, әхлаҡи йәһәттән дә үҙҙәренсә нарыҡланылар.

Төркисә яҙылған ике наказдың яңы нөсхәләре хасил булды. Улар йәнә ҡат-ҡат шымартылды. Өфө провинцияһы башҡорттарының наказы бер аҙ йыйнаҡлана төштө. Әммә Туҡтамыш вағыраҡ мәсьәләләрҙе лә ҡалдырыу яғын яҡланы.

Бик шәп тылмас табып, руссаға әйләндерттеләр. Һәйбәт писарҙан яҡшылап күсерттеләр — наказдар хәҙер тамам әҙер.

Шул хәлгә еткерелеүе үҙе ҙур эш. Әммә — иң мөһиме һәм ауыры алда әле. Наказдарҙы яҡлап, раҫлап, комиссия ҡаршыһында һүҙ тотмаҡ, ғәмәлгә ашырышмаҡ төп бурыс. Батша ҡаршыһында, уның һәйәте, хөкөм эйәләре алдында хоҡуғыңды даулаш был асылда. Бында аҡыл ғына түгел, һүҙ ҡеүәһе, таҫыллыҡ, сослоҡ — барыһы кәрәк.

Наказдары менән булып, йомошлайһы бүтән йомоштарын йомошлап, төрлө депутаттар менән танышып, Мәскәүҙе күпмелер күреп, ниһайәт, комиссия ултырышы асылыр тантаналы көндө көскә көтөп алдылар.

Закондар сығарыу комиссияһы 1767 йылдың 30 июлендә Мәскәүҙә Кремлдең Грановитая палатаһында гәйәт тантаналы итеп асылды. Шунын алдынан Успен соборында сиркәү ҡыңғырауҙарының даң-доңо аҫтында тантаналы ғибәҙәт ҡылыу үткәрелде. Саң, ғибәҙәт шауҙары бөтә илгә, гүйә, ҙур эштең башланыу хәбәрен һалды.

Кремль Грановитая палатаһы алтын буталлы диуарҙары, йомшаҡ бәрхәт креслолары, киң бейек тәҙрәләре, мәрмәр колонналары, ғәләмәт люстралары, түрҙәге ғәжәйеп президиум урыны менән иҫ китмәле ине ул көн. Төрлө биҙәк, һүрәт күҙҙең яуын алмалы. Залда оло Рәсәйҙең төрлө тарафынан һайланып килгән ярты меңдән артыҡ депутат. Түрҙә уҡалы мундирҙары, ордендары, миҙалдары ялтырап

торған оло түрәләр, графтар, вельможалар, принцтар, сит ил ҡунаҡтары. Сенат, Синод, коллегия вәкилдәре.

Депутаттарҙың көслө алҡыштары аҫтында императрица, хөкүмәт, комиссия бюроһы ағзалары президиумға сыға. Екатерина II иң алда йомшаҡ ҡына баҫып, алдағы ҡалҡыу урынға, тәхет һымаҡ артлы, алтын төҫлө иркен креслоға уҙып ултыра. Бүтәндәр сасаҡлы бәрхәт менән ябылған президиум өҫтәле артына ултырышалар.

Императрица иң затлы кейемдә. Әллә ниндәй алтын-көмөш йүгертелгән күлдәгенең түше ярым асыҡ, биле нескә, итәктәре киңәйеп ҡабарып киткән. Үҙе тош-тош аҫыл таш биҙәкле. Париклы бөҙрә башында алмас таж. Яурынына ғәжәйеп мантия һалған. Алтын барсалы, шәшке тиреле парфита. Оҙон шлейфы креслоның өҫтөн ҡаплап тора. Артта ҡуш башлы сәмреғош һыны күренә. Иҙәнгә тейеп торған итәктәре аҫтынан бәләкәс кенә туфлиҙарының осо сығып тора. Алтын туфлиҙары үтә ҡыҫынҡы, ахры. Батша түгел, сын-яһау тере ҡурсаҡ, тиерһең үҙен.

Тантаналы ултырышты Мәскәү депутаты вице-канцлер генерал-аншеф Голицын кенәз асып, ҡапаҡ телмәр тота:

— Олугтарҙан олуғ государыня Екатерина Алексеевна, юғары титуллы ғали йәнәптәре, депутаттар, бөгөнгө тарихи тантаналы йыйылышты асырға миңә ышанысығыҙ өсөн сикһеҙ рәхмәтемде белдереү менән бергә, асыу шатлығын кисереүем менән дә ифрат бәхетлемен. Беҙ тарихҡа алтын хәрефтәр менән яҙылып ҡалыр, киләсәк быуындар ғорурланып хәтерләр мәңге онотолмаҫ оло ваҡиғаның шаһитыбыҙ. Яңы закондар проекты комиссияһының тантаналы рәсми эше башлана. Бының менән беҙ һәммәбеҙ ҙә бөйөк Россия империябыҙҙың императрицаһы Екатерина Алексеевнаға мәңге бурыслыбыҙ. Мәрхәмәтле сеятельствобыҙҙың алтын аҡыл эше, инициативаһы ул. Олуғ илебеҙ, бөтә сословиеларыбыҙ тураһында изге әсәләрсә ғәзиз хәстәрлеге, оло йәнлелеге билдәһе...

Шундай тантаналы шарттарҙа императрица исеменә яуҙырылған ялтыр һүҙҙәр, алҡыштар аҫтында башланды комиссия ултырышы. Шунан Сенаттың генерал-прокуроры Вяземский кенәз почетлы президиумы ағзаларына кандидаттар исемен иғлан итте: комиссия директоры Шувалов граф, Алексей һәм Григорий граф Орловтар, Петр Панин генерал, Бибиков генерал-аншеф, Строганов барон, Чернышев граф, Щербаков кенәз һ. б. бик күп оло титуллы, дәрәжәле һарай вельможалары, ҡунаҡтар.

Ҡомиссия йыйылышының председателе йәки маршалы итеп Ҡострома депутаты, прусс һуғышы геройы Бибиков һайлана. Уға маршаллыҡ жезлы тапшырыла.

Тантананың кульминацияһы митрополит Дмитрийҙың сығышында һәм тәкдимендә булғандыр, моғайын. Екатерина II, сиркәү биләмәләрен сикләп, секуляция яһаһа ла, Синод митрополиты тыйнаҡ булаһы урында, киреһенсә, үгә сөсө яҡшатланып, императрицаға «Ватандың бөйөк, аҡыллынан аҡыллы инәһе» тигән олуғ титулды биреү тәкдимен күтәрҙе. Уны овация менән президиум вельможалары ҡеүәтләне, зал да ҡушылып сәпәкәйләргә тейеш булды. Төрлө сословиенан — дворяндарҙан, купецтарҙан, чиновниктарҙан иң күп, казактарҙан, ерле крәҫтиәндәрҙән һәм рус булмаған халыҡтарҙан бик аҙ һайланған депутаттар араһында башҡорттарҙан Туҡтамыш Ишбулатов менән Бәҙерғол Юнаев та ултыра ине.

Шулай ҙа Екатерина II йәнле ҡурсаҡтай оҙаҡ ҡупырайып ултыра алманы. Күперенке итәктәрен ҡабартып ҡалҡынды ла комиссияға уңыштар теләне, үҙ исеменә әйтелгән йылы һүҙҙәр өсөн йомшаҡ ҡына рәхмәт белдергән булды. Һүҙенең аҙағын хикмәтле һәм томанлы ғына осланы:

— Хөрмәтләп бирергә һеҙ теләгән һәм тәкдим иткән олуғ титул хаҡында шуны ғына әйтә алам: бөйөк булыу исеменә бинайән минең эштәремә хисһеҙ-ниһеҙ баһа биреүҙе үҙем ваҡыт һәм киләсәк быуынға тапшырам. Аҡыллыларҙың аҡыллыһына килгәндә, үҙемде мин улай тип әйтә алмайым, сөнки берҙән-бер аҡыллыларҙың аҡыллыһы аллалыр, тим. Ватан инәһе тигәндә, алланың ерҙә наибы итеп тапшырған вазифаһын үтәүҙе, ҙур атын күтәреүҙе үҙемдең изге бурысым итеп һанайым һәм һәммәгеҙгә лә был йәһәттән теләктәшмен. — Императрицаның тәкдим иткән оло титулға шулай ҡыландырып риза биреү ғәләмәте ине был.

Ғөмүмән, Закондар проекты төҙөү комиссияһының берҙән-бер ҡабул ителгән һәм Сенат тарафынан раҫланған ҡарары Екатеринаға иң оло титул биреү булғандыр. Батша, гүйә, ошоноң өсөн генә комиссия төҙөткән, уны шундай тантаналы шарттарҙа астырҡан һәм алҡыштар яуҙырҡан төҫлө ине. Ә ул титул тураһында өмөтләнеп тә, шомланып та бөтә Россия шауланы. Бөтә Европа газеталары яҙып маҡтап сыҡты. Батша мажара менән менгән алтын тәхетен дә шулай нығытты, исем-дәрәжәһен дә угаса булған батшаларҙыҡынан уҙҙырып ебәрҙе, шикелле.

Зиннәтле һарайҙарға, Кремлдәге ғәжәйеп палаталарға, сиркәү саң-соңдарына, шунса ихтифал[1] комиссия йыйынына иҫтәре китте башта башҡорт депутаттарының, күптәрҙе-

[1] Ихтифал — церемониялы.

ке кеүек. Хәйер, шул хәтле ихтифал тамаша булыр тип көтмәһә лә, артыҡ аптыраманы, ахры, Туҡтамыш старшина. Ул — промышленник, күпте күргән, рудниктары эше менән Петербургка оло түрәләргә килеп йөрөгән, бәхәсләшкән, даулашҡан кеше — барыһын былай тыштан тыныс күҙәтте кеүек. Бәҙерғол — быҒаса Силәбе, Өфө тирәһенән ары үтмәгән йәш кеше — күбеһенә хайран итте. Олуғ батшаның үҙен күреү үҙе тамашаның тамашаһы. Әбей батша тигәс, был хәтле йәш, сибәр, көйәҙҙер тип башына ла килтермәгәйне. Әллә ниндәй ҡабарынҡы күлдәктәргә сумған, өҫтө-башында алтын-көмөш, аҫыл таштар ялтырап торған тотәй нәмәҫтә төҫлө. Алтын тәхете лә, шуға ялатылған ҡуш баш сәмреғошо, башындағы тажы ғына үҙен батша итеп тойҙортһа тойҙорталыр. Эргәһендә сабый ғына бөйәк кенәз Павел — уныһы бөтөнләй ҡурсаҡ. Сасаҡлы бәрхәт япма оҙон өҫтәл артында теҙелешеп ултырған һарай түрәләрандары ҡандай: ул уҡалы-суҡлы кейем, таҫ-таҫ бөҙрәле ерән, сал сәс, бәғзеләренең яурыны, күкрәге тулы ус яҫыһылай ялтыр ордендар, миҙалдар, әллә ниндәй таҫмалар. Сығып һөйләгәндәренең теле телгә йоҡмай. Нисек һайрайҙар — йәш сибәр батшаны күккә күтәреп ҡупырталар.

Тағы бер һуйыш алғаны депутаттарҙың батша алдына барып ҡулын үбеп ант иткәне булды. Үҙенең исеме сыҡҡас, Бәҙерғол батша ҡаршыһына нисек барып еткәндер, меңәр күҙ ҡарашы аҫтында бары келәм күтәрмәнән күтәрелгәнен, шыштырлап торған күлдәк еңдәре осондағы йомшаҡ нескә ҡулға иренен тейҙерә яҙғанын, батшаның төпһөҙ күкле-йәшелле күҙҙәренең әллә йылмайғандай, әллә секрәйгәндәй төбәлешен әҙ-мәҙ иҫләй. Үҙенсә антын мығырланы, уңарсы түшенә оҙон таҫмалы миҙал тағылды — депутатлыҡ миҙалы.

Ҡайтҡас, миҙалды иҫләп ҡаранылар: алтын сылбырлы алтын ялатылған түңәрәк миҙал. Бер яғында ҡалҡытып яһалған йәш батша — императрица һыны, икенсе яғында яҙыу: «Блаженство каждого и всех». Хикмәтле һүҙҙәр. Тик үҙебеҙсә уйлағанда, һәр кемгә, һәммәһенә хозурлыҡ, ирәүәнлек ҡоро ниәтме, әллә алтынға ялатылған ялтыр һүҙҙәр генәме? Хаҡ булып, ғәмәлгә ашыр булһасы...

Аҙаҡ Закондар сығарыу комиссияһының ғәҙәти көндәре китте. Комиссия төрлө мәсьәләләр буйынса ваҡ комиссия-һәйәттәргә бүленде. Бәҙерғол менән Туҡтамыш башта сауҙа, экономика һәйәте йыйылыштарына йөрөнө.

Купец депутаттар, Россияла сауҙа эше менән фәҡәт купецтар ғына шөғөлләнергә хаҡлы, тип ярһып-янап һөйләнеләр. Предприниматель депутаттар, промышленность, завод эштәре бары байҙар, заводчиктар шөғөлө, тип бар-

ҙылар. Өфө ҡалаһы депутаты Алексей Подьячев, рус крәҫтиәндәренә, башҡорт һәм татарҙарға ҡалала, өйәҙҙә сауҙа итеүҙе тыйырға кәрәк, тип сыҡты. Бигерәк тә Ырымбур ҡалаһы депутаты Илья Ҡоченов төкөрөктәр сәсте. «Хәҙер башҡорттар менән татарҙар Ырымбур губернаһында күн, һабын, май заводтары аса башланы, — тине ул, ҡысҡырыныпп. — Шул әйберҙәр менән сауҙа итәләр. Был хәл рус купецтарын ҡыҫырыҡлап сығарыуға алып бара.

Татар, башҡорттар Урта Азия менән алыш-биреш эшен дә көсәйттеләр. Ырымбурҙа үҙҙәренең лавкаларын, кибеттәрен асалар. Ә Урта Азия халҡы — үзбәктәр, ҡаҙаҡтар, бохаралылар — күберәк улар менән сауҙа итә. Килтергән аяҡлы малдарын ҡыҙыл малға алыштыралар. Кәтөргә лә еңел килешәләр.

Башҡорт, татар купецтары менән рус купецтары конкурировать итә алмай. Уларҙың тамам бөлөүе ихтимал. Шуға күрә башҡорт һәм татарҙарға сауҙа эше менән шөғөлләнеүҙәрен бөтөнләй тыйырға кәрәк!»

Ә Өфө казак ғәскәре депутаты Прокофий Бурцов иһә, киреһенсә, башҡорттар менән татарҙарҙың губернала сауҙа итеүе экономиканы ныҒытыша, рус купецтары ҡулында булмаған күп әйберҙәрҙе — мал, йәнлек тиреләрен, бал, ашамлыҡ әйберҙәрен күп рустар, казактар башҡорттарҙан һатып ала, тине.

Өфө өйәҙе, дүрт юл башҡорттары исеменән Түктамыш Ишбулатов депутат сығыш яһаны:

— Өфө ҡалаһы депутаты Алексей Подьячев Өфө өйәҙендә купецтарҙан башҡа кешеләргә сауҙа эшен тыйырға теләй. Ул күберәк ҡала купецтары хаҡында һүҙ алып барҙы. Ә Өфө өйәҙе ҙур. Ул Рәсәйҙең үҙәктәге бер нисә өйәҙҙәренә тормалы. Өфө купецтары өйәҙҙә әллә ни һатыу итә алмай. Сыҡһалар, Өфөнән 100—150 саҡрымдарҙан да ары китмәйҙәр. Ә өйәҙ халҡына алыш-биреш итергә кәрәк. Тегеһе кәрәк, быныһы кәрәк.

Өфө өйәҙе күпселеге инородецтар — башҡорттар, татарҙар, сыуаштар, сирмештәр, арҙар. Улар үҙ-ара алыш-бирешһеҙ йәшәй алмай. Мал алыша, ит, тире һата, йортҡа, хужалыҡҡа кәрәк-ярағын ала. Ә Өфө купецтары йыраҡ. Күбеһе уларҙы ғүмерендә лә күргәне юҡ, Өфөгә бармаһа.

Унан бүтән халыҡтарға сауҙа итмәҫкә тигән указ юҡ та баһа. Өфө купецтары киңерәк сауҙа йәйелдерә икән, рәхим итһен. Үҙҙәренә лә файҙа, халыҡҡа ла.

Башҡорттар хәҙер күн, һабын, бүтән заводтар тота. Шул сығарған әйберҙәре менән һатыу итәләр. Әйҙә, купецтар теләһә, заводын да тотһон, һатыуын да киңәйтһен. Әйбер

етештерер заводтарҙы, сауҙаны бергәләп йәйергә кәрәк, ә тарайтырға түгел.

Сәйет биҫтәһенән депутат Мансур Букатаев та сауҙаның илгә әһәмиәте, Сәйет татар сауҙагәрҙәренең эше тураһында һөйләне. Бәҙерғол Юнаев та комиссияла үҙенең тәүге телмәрен тотто:

— Мин Өфө өйәҙе башҡорттары депутаты Туҡтамыш Ишбулатов тәҡдимдәрен хуплайым. Сауҙа эшен сикләргә түгел, уны мөмкин хәтле киңәйтергә кәрәк. Сауҙа илдең иҡтисадын күтәреүгә хеҙмәт итә. Бер халыҡ сауҙаһыҙ, алыш-бирешһеҙ йәшәй алмай. Башҡорттар тоҡомло ат, мал һата, бал, йәнлек тиреләре һата. Үҙе хужалыҡ кәрәк-яраҡтары, ҡыҙыл мал һатып ала. Ваҡ заводтар ҙа хужалыҡты нығытыша. Исәт өйәҙе башҡорттары заводта эшләүселәр менән алыш-биреш итә, Себергә сыға. Ике яҡҡа ла файҙа.

Ғөмүмән, бер ил эсендә сауҙаны сикләү, пошлиналар һалыу алыш-бирешкә ҡамасаулыҡ тыуҙыра. Сикләүҙәрҙе, пошлиналарҙы бөтөрөү экономика, ил өсөн төшөмлөрәк булыр ине...

Бәҙерғол менән Туҡтамыш дүрт-биш көн линия хеҙмәте, казак эштәре буйынса комиссия ултырыштарында ҡатнашты. Бында дебаттар күпкә ҡатмарлыраҡ һәм ҡыҙыуыраҡ ине. Казак депутаттар линия хеҙмәтенең ауырлығына, көнкүреш ҡыҫынҡылығына, ер аҙлығына зарланды. Йорт хужаһы линия хеҙмәтендә күп ғүмере үткәнгә, өйҙә хеҙмәтселәр тотоу мәсьәләләре ҡуҙғатылды. Казак йәмғиәте хоҡуҡтарын аяҡҡа баҫтырыу мәсьәләләре ҡуйылды. Казактар ярһып-ярһып һөйләнеләр, ораторҙарҙы бүлеп, репликалар ташланылар. Хатта бер-ике ораторҙы трибунанан һөйрәп төшөрҙөләр.

Ошонда Бәҙерғол Яйыҡ казагы депутат Тимофей Подуров менән танышты. Тура һүҙле, ҡыҙыу ҡанлы казак ине Тимофей. Ул казактар иркен ике тапҡыр яҡлап сыҡты, башҡорттар менән сауҙа бәйләнешен хупланы. Уларҙы намыҫлы, батыр халыҡ, тине.

Бәҙерғол үҙенең бер сығышын, наказда күрһәтелгәнсә, башҡорттарҙың линия хеҙмәте мәсьәләләренә арнаны:

— Башҡорттар — Россияның именлеген яҡлауҙа күп походтарҙа ҡатнашҡан халыҡ. Яйыҡ казактары менән улар Азов, Рига походтарында ла булдылар, Прусс һуғышында батырлыҡ күрһәттеләр. Ил елкәһенә төшкән хәрби йөктө тиң күтәрҙеләр. Хеҙмәттәре өсөн хаҡлы жалуньялар, батырлыҡтары өсөн миҙалдар алдылар.

Улар, мәғлүм булыуынса, тыныс йылдарҙа ла линия хеҙмәтен алып бара. Ырымбур линияһында. Иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем ир-аттың көнө шунда үтә. Үҙ аты, кәрәк-

ярағы менән, үҙ аҙыҡ-түлеге. Бындай хеҙмәт башҡорттарға гәйәт ауырға төшә, жалуньяһыҙ, түләүһеҙ-ниһеҙ. Ә үҙ хужалығында эшләр кешеһе булмағанда, хужалығы тарҡала, бөлә.

Яңы законда башҡорттар линия хеҙмәттәре өсөн жалунья түләнеү ҡаралыуын, өҫтәмә хеҙмәттә провиант менән тәьмин ителеүен һорайҙар. Башҡорттарҙы казактар менән тиңләгәндә лә хаҡ булыр ине. Башҡорттарҙы, етмәһә, полковник, офицерҙарҙың үҙ хужалыҡтарында файҙаланыуы закондан тыш хәл. Ул приказ эше түгел. Мундирһыҙ, жалуньяһыҙ һалдат хатта приказға буйһонмаһа ла хаҡ. Әжере юҡтың — хеҙмәте юҡ.

Шулай бәхәстәр ҡыҙҙы, һүҙҙәр ҡуйырҙы. Ләкин комиссияларҙың ниндәйҙер уртаҡ фекергә һәм ҡарарға килеүенең генә осо-ҡырыйы күренмәне. Һүҙ күп, һөҙөмтә юҡ ине.

Крәҫтиән, ер эштәре комиссияһы ултырыштары йыш ҡына ауыл сходтарын хәтерләтте. Берәү һөйләп бөтөр-бөтмәҫтән, икенсеһе һикереп тора. Урындан репликалар яуа. Шау-шыу ҡуба.

Урыҫ крәҫтиәндәре ер аҙлыҡҡа зарлана. Баяр-помещик ерҙәрен киҫеүҙе, йә арендаға биреүҙе талап итә. Електе ҡоротҡан оброк, барщинаны аҙайтыуҙы һорайҙар. Ергә шәхси милек, мираҫ итеп ҡарау, һатыу-алыу мәсьәләләрен күтәрәләр. Крепостной правоға ҡағылалар. Ҡанһыҙ Салтычиханы ғибрәт итеп телгә алалар.

Урыҫ крәҫтиәндәренең хәле, ер мәсьәләһе тағы ауырыраҡ икән шул.

Башҡорт общинаһында башҡасараҡ. Ни тиһәң дә, аҫаба башҡорттар — үҙҙәре әлегә ер-һыу хужаһы. Ер-һыу — община милке. Тик ул ана шул үҙәк Россиянан килеүсе помещиктар, купецтар, заводчиктар тарафынан төрлөсә итеп тартып-һалдырып алыу арҡаһында ҡыҫыла бара. Ҡаҙна үҙ иҫәбенә башҡорт ерҙәрен киҫеп ала. Ер-һыу хоҡуғына ҡаршы килер указдар сыҡҡылай.

Туҡтамыш Ишбулатов үҙ телмәрендә Өфө өйәҙе башҡорттарының ер мәсьәләһендәге наказдарының төп асылын аңлатырға тырышты. Россияға ҡушылғанда, башҡорт ерҙәренең община милке булып, Иван Васильевич батша грамоталары менән беркетелеүен, яһаҡ түләнеүен һөйләне. Шул законлы эште аҙаҡ төрлө баш-баштаҡлыҡтар менән боҙоу хәлдәрен күрһәтте. 1736 йылдың 11 февраль указында ер мөнәсәбәте менән закондың үҙе араһындағы ҡаршылығын, законға ярашмаҫ күрһәтмәләрҙе атап үтте. Комиссияның яңы закон проектын төҙөгәндә, башҡорттарҙың үҙ ер-һыуҙарына ҡарата элекке хоҡуҡтарын раҫлаусы параграф индерелеүен һораны.

Бәҙерғол Юнаев иһә Исәт провинцияһы башҡорттарының ер хаҡындағы наказы Өфө провинцияһы башҡорттары наказы менән уртаҡ булыуын, Ишбулатов депутаттың тәкдимдәрен тулыһынса хуплауын әйтте. Ул шул уҡ ваҡытта төрлө заводчиктарҙың, купецтарҙың алдау-йолдау юлы менән тартып алған башҡорт ер-һыуҙарын кире ҡайтарыуҙы талап итте. Заводтар өсөн договорҙа билдәләнгән тейешле ерҙәрҙең генә ҡалыуын яҡланы. Ергә рента түләү мәсьәләһенә ҡағылды. Хаҡһыҙ тартып алынған ерҙәр әгәр кире ҡайтарылмаһа, уға тейешле хаҡын түләүҙе законлаштырыуҙы комиссия алдына ҡуйҙы.

Комиссия председателе башҡорт ерҙәре мәсьәләһендә Ырымбур губернаторы Аврам Путятиндың махсус «представлениеһы» булыуын әйтте һәм губернаторҙың үҙенә һүҙ бирҙе.

— Комиссияға губерна представлениеһын уҡып тормайым, төп положениеларын ғына әйтеп китәм, — тине губернатор бик һауалы ғына. — Башҡорт депутаттарҙы тыңланыҡ. Улар айырым дәүләт кешеләре кеүек сығыш яһай. Әйтерһең, Россия подданныйҙары түгел.

Донъяла бүленмәҫ, берҙәм Россия империяһы ғына бар. Уға ҡараған ерҙәр — Россия милке. Ғәмәлдә, Башҡортостан тигән төшөнсә юҡ. Булмаҫ та. Ырымбур губернияһы, провинциялары бар. Дистрикт бар.

Элек башҡорттарға ниндәйҙер ташламалар яһалған икән, булған да бөткән. Хәҙер икенсе заман.

Губерния комиссияға шундай тәкдимдәр индерә: Себер, Ырымбур линияһы буйындағы ерҙәрҙе тотошлай ҡаҙнаға ҡалдырып, уларҙы дворяндарға, генералдарға, офицерҙарға бүлеп бирергә.

Ҡазандан Ырымбурға Яңы Мәскәү юлы һалырға. Уны ике яҡлап ҡаҙнаға бирелер ерҙәргә урыҫ кешеләрен күсереп ултыртырға. Яңы Мәскәү юлынан Волгағаса ерҙәрҙе, башҡорттарҙан алып, дәүләт милке итергә.

Уралда завод ерҙәрен киңәйтергә. Унда урыҫ крәҫтиәндәрен күсерергә.

Бына шундай проект Сенатҡа ла тапшырылған. Комиссия быны хупларға тейеш. Башҡорт ер-һыуы тигән мәсьәлә булыуы мөмкин түгел...

Губернаторҙың приказы төҫлө яңғыраған был башҡа һыймаҫ тәкдим-проектҡа башҡорт депутаттар ныҡ аптырап ҡалһалар ҙа, шунда уҡ аңдарына килделәр буғай. Һүҙһеҙ ҡалыу һис ярамай ине.

Бәҙерғол, йәшерәк, сосораҡ кеше, һикереп торҙо. Трибунаға килеп баҫҡанса, һарыуы ҡабарыуын баҫа, бер аҙ тыныслана башлағайны шикелле:

— Хөрмәтле губернаторыбыҙ үҙ резиденцияһында түгелгә һәм депутат полномочиеһы булмауына ҡарамаҫтан, губернаторса ҡыланды, ахры. Вазифаның да үҙ урыны, ҡылыҡтың да үҙ яйы бар түгелме?

Аврам Абросимович кенәз бер нимәлә хаҡ: башҡорттар — Россия подданныйҙары. Улар ҙа Россия закондарына тулыһынса буйһона, шуны үтәргә тырыша. Закон ҡаршыһында тиңдәр. Ә закон алдында барыбыҙ ҙа берҙәй яуаплыбыҙ һәм бурыслыбыҙ. Ә бына губернатор величествоһы, башҡорт ер-һыуҙары хаҡындағы батша грамоталарын, 1649 йылғы Россия законадарын һанға һуҡмай, үҙе указ бирмәксе. Кем хаҡлы? Ғали йәнәптәре батшалармы, әллә губернатормы? Икенсе яҡтан, губернатор 1736 йылдың 11 февраль батша указын иҫәпкә ала төҫлө. Ә ул указ башҡорт аҫабаларының ер-һыуға булған хоҡуғын таный. Губернатор бер таный, бер танымай. Уның ҡайһы һүҙенә ышанырға?

Законадар менән хисаплашмау, үҙ ҡул аҫтындағы халыҡтың ихтыяжын, хәжәттәрен һанға һуҡмау баш-баштаҡлыҡҡа алып барыу түгелме икән? Батша ҡул ҡуйған грамоталарҙы, указдарҙы буш ҡағыҙға һанап булмайҙыр ул.

— Башҡорттарҙың ер хаҡындағы грамоталары юҡ улар. Булғаны 1759 йыл янғында янып юҡҡа сыҡҡан, — тип реплика ташланы губернатор: — Янғай — бөткән. Яңы закон ҡалғанын үҙе ҡарар.

— Ырымбурҙа янһа ла, уның нөсхәләре, копиялары башҡорттарҙың үҙҙәрендә бар бит. — Һүҙен дауам итте Бәҙерғол. — Бында һүҙ ҡоро ҡағыҙ тураһында түгел, закон, кеше хоҡуҡтары хаҡында бара.

Закон буйынса, башҡорт общинаһы ерҙәренең яҙмышын башҡорттар үҙҙәре хәл итә. Ә губернаторҙың башҡорт ерҙәре яҙмышы хаҡында үҙе генә проект төҙөргә һәм административ рәүештә хәл итергә тырышыуы законға һыймай. Губернатор проектына мин, депутат кеше, протест белдерәм.

Туҡтамыш Ишбулатов та губернаторҙың проектын кире ҡағып, уға протест белдереп сығыш яһаны.

Комиссияның был ултырышы шулай оло ғауғаға әйләнеп китте.

3

Даусыға ла ял кәрәк. Йәкшәмбе — комиссияларҙың ял көнө. Депутаттар йәйҙең йәмле көндәрендә көн оҙон таш палаталарҙа хәҙер айҙан артыҡ ултырып, ялҡып, ялап бара.

һүҙе күп булһа ла, эштең осо-ялы күренмәй. Әҙ генә лә һөҙөмтә юҡ. Шул эсте бошора.

Теге көн губернатор Путятиндың представлениеһын ишеткәс һәм үҙенең сығышын тыңлағас, Бәҙерғол менән Туҡтамыш, протест телмәрҙәренән тыш, комиссияға губернаторҙың проектын тикшермәүҙе, уға ундай проект менән сығыш яһауҙың компетенцияһына инмәүен нигеҙләп, ике аңлатма, яҙма протест тапшырҙылар.

Ике башҡорт депутаты Мәскәүҙә хәҙер көн дә осрашып һөйләшеп тора, теге йәки был мәсьәлә буйынса йыш ҡына бергәләп һүҙ төйнәйҙәр, бер төптән эш итәләр. Береккәнде, бәлки, Путятиндай бүреләр ҙә ала алмаç.

Бәҙерғол, үҙ сиратында, үҙенә бүтән теләктәштәр ҙә тапты. Башҡортостан мишәрҙәре депутаты Әбделжәлил Мансуров менән дуçлашып алды. Ҡорҙаш кешеләрҙе күп нәмә яҡынайтты: Әбделжәлил дә, мәçәлән, заманында Батырша яуына юлығып киткән. Аҙаҡ старшина булып һайланған. Хаҡлыҡ эстәгән ҡыйыу әҙәм.

Әбделжәлил бер ялды Бәҙерғол менән Туҡтамышты үҙенә ҡунаҡҡа саҡырҙы. Ул депутаттарға тәғәйен өс ҡатлы йорттоң беренсе ҡатындағы йыйнаҡ ҡына бүлмәлә йәшәй. Әллә ҡайҙан ҙур самауыр тапҡан — сәй ҡайнатҡан. Килтергән ҡаҙылыҡтары, балы ла бөтмәгән икән, бүтәндәре лә бар — өçтәл тулы һый.

Күңелле генә һөйләшеп-гәпләшеп ултырҙылар. Йорт-ерҙәрен, ғаиләләрен һағынышып иçкә алдылар. Әммә күп һүҙҙәре комиссия тирәһендә — ил-йорт хәстәре хаҡында барҙы.

Әбделжәлил дә күп нәмә менән ҡәнәғәт түгел ине:

— Был комиссия тигәндәренә өмөт ҙур кеүек ине — әле бер ҙә рәтен күрмәйем. Һүҙе күп, мәғәнәһе аҙ. Ҡоро һөйләнеү генә булып ҡалмағайны.

— Кәңәш булғас, һүҙһеҙ булмаç инде, — тине Туҡтамыш. — Беҙ фәҡирҙәрҙең, депутаттарҙың, вазифаһы наказдарҙы телдән дә еткереү. Дәлилләү, ышандырыу ҙа баһа.

— Һөйләгәнең елгә осмай, ҡағыҙға теркәлә бара. Һүҙең, бәлки, тарихта ҡалыр, — тине көлөп Бәҙерғол.

— Тарихынан беҙгә бөгөнө ҡиммәт.

— Һеҙ икегеҙ ҙә урыçсаға шәп кеше, сатнатып әйтәһегеҙ. Ә бына беҙгә әйтер һүҙенде әйтеп аңлатып бирә алмай йонсойһоң ҡай мәл, — тине Әбделжәлил.

Быны тағы көлкөгә борҙо Бәҙерғол:

— Ана, бәғзе бер сирмеш, сыуаш, татар депутаттары, беҙ урыçса белмәйбеҙ, тип үҙҙәренең наказдарын үткәрешер опекун итеп камер-юнкер Потемкинды һайлағандар икән. Эп-рәхәт, үҙҙәре ауыҙ йомоп ултыра. Улар хәстәрен,

күрһә, опекуны күрә. Ә түрә үрә күрә. Һиңә лә, бәлки, шулай итергә кәрәк булғандыр?

— Юҡ инде, халыҡ аманатын үҙем, үҙ һүҙем менән нисек тә еткерергә тейешмен. Күҙле бүкән булып ултырырға һайланмағанмын.

— Наказдарығыҙҙа нимәләр үҙәктәрәк?

— Һалым ныҡ йонсота мишәрҙәрҙе. Шуны күпмелер әҙәйтеүҙе һорайбыҙ.

— Ә ылау ҡыуыу? Линия хеҙмәте?

— Улары ла наказда бар.

— Ә ниңә шуларын да һөйләмәнең?

— Һеҙҙең һөйләгәнгә ҡушылып тауыш бирҙем бит, Бәҙерғол.

— Тауыш биреү ҙә ярай ярауын. Әммә тауышланыу тағы шәберәк.

— Ә һин шуны әйт әле, Әбделжәлил туған, — Туҡтамыш хужа кешенең беләгенә һаҡ ҡына ҡағылды. — Батшаларҙың, Ырымбур губернаторының башҡорт менән мишәрҙе сәкәләштерергә тырышыуына нисек ҡарайһың? Ихласын ғына.

— Туған ике халыкты талаштырыу ике яҡтың да йәнен ҡыя. Аңлайым. Арала төрлө бәндә бар. Бәғзегә йән ҡиммәт, бәғзегә мал ҡиммәт. Залимдар араны боҙа.

Туҡтамыш старшина, һеҙ был яҡтан мишәрҙәрҙең башҡорттарҙан яуҙа алған ерҙәре өсөн түләү мәсьәләһен күтәреүегеҙ менән хаҡлыһығыҙ, тим.

— Ә һин шуны комиссия алдында ла әйтһәң, ысын ир булыр инең, — Ишбулатов тағы дауам итте. — Әбделжәлил туған, күп мәсьәләләрҙә комиссияла бер һүҙлерәк булһаҡ, һүҙебеҙ күберәк үтер ине. Шуны ныҡлап уйла әле.

— Айырылған — айыуға, бүленгән бүрегә юлығыр, тигән шикелле, айырырға тырышалар беҙҙе, — тип йөпләне Бәҙерғол. — Бик айырылмай, бүреләргә бергәләп йәбешһәк, ҡойроҡтарын ҡыҫыр ине, бәлки.

— Туғанлаштырмаҫ өсөн хатта кәләш алыуҙы ла ҡыҫҡас инде, — тине ихтыярһыҙҙан Туҡтамыш.

— Ҡалымы — ата-әсәһенә, яҡшы аты — хөкүмәткә, мишәр кәләше — үҙенә, — тине көлөмһөрәп Бәҙерғол. — Йәнкәй йәнәше йәргә.

Шул саҡ ҡайҙандыр шаулап Тимофей Подуров казак килеп инде. Төшөрөп алған, күңеле күтәренке:

— Ба, бына ҡайҙа йыйылған яҡташтар. Ә мин Базаргулканы үҙенән эҙләйем. Кәңәштәр уртаҡ булһын!

— Ултыр, Тимофей. Ҡунаҡ бул! — тине хужа.

— Ултырырға араҡығыҙ күренмәй. Ә сәй мине иҫертмәй, — тине шаярып Яйыҡ казагы. — Шуны әйтәм һиңә,

Базаргул, молодец! Әйттең бит әйткәс, губернаторҙың үҙенә. Үҙендә губернатор, кенәз намыҫы булһа, мыҫҡыллы ецелеүенән атылып үлер ине. Үҙем булһам шулай итер инем, биллаһи. Намыҫтың остого ла юҡтыр инде, күрәһең, ул кенәздә.

Үҙе шулай ҙа ултырып бер шәшке сәй эсте, үҙе һөйләнеүен белде:

— Беҙ, Яйыҡ казактары, хәҙер ваҡланып барабыҙ. Ҡазак ирке бөттө. Ҡазак ҡаны шыйыҡлана. Ана, Запорожье казактары — молодец. Ҡазак хоҡуғын яҡлап дау күтәргәндәр. Уларға хохолдар ҡушылған. Румянцев кенәз, һайлаған депутаттарын арестовать итеп, төрмәгә яптырган, һайлаусыларына штраф һалған. Мәрхәмәтле күренеп, Ее сиятельство Екатерина Алексеевна үҙе амнистия биргән тиҙәр.

Хоҡуҡ бирһен ине ул. Вот булыр ине, исмаһам...

Оҙаҡ ултырманы Тимофей, «Ҡазак башка гуляет», — тип хушлашып үҙ яйына юлланды.

Ә табындаштарҙың әңгәмәһе тағы байтаҡка тартылды әле.

4

Төрлө комиссия ултырыштары, берсә ҡыҙып, берсә һүрәнәйеп, әллә нисә айҙарға һуҙылды. Депутаттар баштараҡ ярһып һөйләнеләр, наказдарын ҡыйыу даулаштылар. Ҙур-ҙур түрәләргә, дворяндарға, помещиктарға ҡаты-ҡаты тел тейҙергән саҡтар булғыланы. Хатта бер мәл Хлынов ҡалаһы депутаты Петр Ҡарякин аристократтар хоҡуғына ҡағылған пунктты тәнҡитләп сыҡты. Бүтәндәр элеп алды. Был диспутта Бәҙерғол менән Тимофей казак та ҡатнашты. Закон алдында һәр кем берҙәй яуаплы, тинеләр улар, Законды боҙғанһың икән, яҙаһы ла һәр кемгә бер булһын. Депутаттар хаҡ, килешергә мәжбүр булды был тәкдим менән Бибиков маршал.

Бәҙерғол, быға бәйләп, ептең икенсе осон эләктерҙе. Бер ултырышта Ырымбур губернаторы Путятин башҡорт ерҙәре хаҡындағы проектын ҡалҡытып сығарғайны, Бәҙерғол комиссия полномочиеһы Путятиндың проектын тикшереү түгел, губернаторҙың комиссия эшенә хаҡһыҙ тығылған өсөн ғәйепләнергә тейешлеген ҡуҙғатты. Губернаторҙы мыҫҡыл һәм ниндәйҙер яҙанан һаҡлап ҡалыр өсөн, Сенат вәкиле маршал, уның проекты мәсьәләһен йомоп, Путятинды телдән иҫкәртеү менән сикләп, баҫып ҡалдырыу яғын һайланы. Әммә штраф һалынды. Башҡорт депутаттар өсөн был ваҡытлыса булһа ла ҙур еңеү ине.

1767 йыл аҙағында, алдағы йылына Закондар төҙөү комиссияһы эшенә ҡыҙыҡһыныу күҙгә күренеп кәмене. Айҙар буйы ултырыуҙарҙан, мәғәнәһе күренмәгән ҡоро һүҙҙәрҙән депутаттар үҙҙәре лә тамам ялҡты. Комиссия эшенә хөкүмәттең иғтибары бөттө. Ҙур түрә депутаттар ултырыштарға бөтөнләй йөрөмәҫ булды.

Йыл аҙағында Комиссия эшен баш ҡалаға — Санкт-Петербургка күсерҙеләр. Шулай тағы өҫтәмә мәшәҡәттәр артты. Төрлө һылтау табып, күп депутаттар тыуған ерҙәренә ҡайтып китте. Килмәгәндәре урынына яңылар тәғәйенләнде.

Бәҙерғол күпме сабыр булып ҡараһа ла, уны ла ултырыштар тамам ялҡытте. Күптәр кеүек, һүҙ яҙып, май сыҡмаҫын тоя ине ул хәҙер. Шулай ҙа тик ятманы, Комиссия эше Петербургка күскәс, Исәт өйәҙе башҡорттары, үҙ иләүе эше менән Сенатҡа, Берг-коллегияға биш-алты тапҡыр барҙы, аудиенцияларға йөрөштө. Заводҡа алынған ерҙәр хаҡында шикәйәттәр бирҙе. Ләкин һөҙөмтәһе генә әллә ни күренмәне.

Йәшәй-йәшәй, Бәҙерғол Мәскәү, Петербург кеүек ҙур ҡалаларға ла эйәләшкәндәй итте, дуҫтар, таныштар, хатта яҡташтарын тапты. Депутат булып ҡаҙна һурпаһын эсеү уға яңы һабаҡтар өҫтәне. Үҙенсә гилемгә эстәне буғай.

Ара-тирә депутаттарҙы баш ҡаланың иҫтәлекле урындары менән таныштырҙылар. Бәҙерғол байтаҡ зиннәтле һарайҙарҙы, Петергофты, Кронштадтты күрҙе. Бер саҡ Нева һыуы менән Онега күленәсә сәйрән-сәйәхәт ҡылдылар. Шунда ғибрәт өсөнмөлөр-инсектер Шлиссельбург ҡәлғәһен дә күрһәттеләр.

Дарья уртаһындағы устай ғына утрауға һалынған таш ҡәлғә депутаттарҙы хайран итте. Әллә нисә арҡан буйы бейек ҡалын таш диуарҙар. Мөйөш, бөгөл һайын һаҡсы торған таш манаралар. Эсендә батшаға тел тейҙергән йәки берәй төрлө яуызлыҡ ҡылған яман тотҡондар ябылыр ҡараңғы, тар, сүеш таш казематтар. Быларҙы күреүе генә лә йөрәкте өшөткөс ине.

Бәҙерғолдоң башҡорт кешеһе икәнен белеп, уларҙы оҙатып йөрөүселәрҙән бер капрал уға ошо Шлиссельбург казематында алты йыл башҡорт батыры Батыршаның ябылып ятыуын, бер төн быҒаулы көйө балта менән өс-дүрт һаҡсыны үлтереүен, шунда үҙенең дә сәнсеп үлтерелеүен бышылдап ҡына һөйләп бирҙе. Был хәбәргә иҫе китте Бәҙерғолдоң. Бына ҡайҙа килеп юлыҡҡан икән Батыршаның һуңғы яҙмышы, гүмер осҡайы. Бер манаранан әлеге капрал аҫта утрауҙың бер осло моронсаһын да күрһәтте, шунда

тип баш бирмәҫ тотҡондоң ҡәбере. Һай, ҡайҙарҙа ғына ятмай бит ир-егеткәй һөйәккәйҙәре...

1768 йылдың яҙында Бәҙерғол Петербурҙан тыуған яғына, Мәкәтегә, ҡайтты. Йәнә волость эштәре, үҙ хужалығы менән мәшғүл булып китте. Уға үҙ иләүе кешеләре, старшиналар йыш килде, комиссия эшен һораштылар, берәй өмөтлө хәбәр көттөләр. Ләкин депутаттары әллә ни ҡыуандырырлыҡ нәмәләр әйтә алманы. Уларҙың күңелен бик һүрмәҫ өсөн, Рәсәй бик ҙур, депутаттар күп, наказдар тау саҡлы — барыһын тикшереп хәл итеп бөткәнсе бер нисә йыл кәрәк булыр, ниҙер ғәмәлгә ашырҙыр, тип тынысландырырға тырышты.

Бәҙерғол көҙөнә Петербурға тағы китте. Комиссия ултырыштары һаман үҙ яйы менән барған кеүек. Төрлө сословиеның, төрлө өйәҙҙең, ҡаланың депутаттары бер-бер артлы һөйләй. Һүҙ ҡуйыра, бәхәстәр ҡуба. Ләкин байтаҡ мәсьәләләр буйынса уртаҡ фекергә килгән кеүек булһалар ҙа, конкрет ҡарар сығарып, Сенат ҡаршыһына ҡуйырлыҡ хәлгә һис еткәндәре юҡ. Комиссия председателдәренең ниндәйҙер ҡарар сығарырға, хөкүмәт алдында конкрет талаптар ҡуйырға самалары тойолмай. Бибиков маршал да батшаға хәбәр ташыусы ғына булып бара.

Күп депутаттарҙың, шул иҫәптән Бәҙерғолдоң да, өмөттәре төкәнгәндәй. Рәте булмаҫ төҫлө был комиссияларҙың: һүҙе күп, һөҙөмтәһе юҡ. Бары күҙ буяуға оҡшай был буш һөйләнеүҙәр. Ҙур түрәләрҙең, комиссия маршалының уйы наказдарҙы ғәмәлгә ашырыу түгел, бары шул тирәлә аҡыл һатыу, аҡыллы булып ҡыланып, төтөн осороу. Шундай уйға килә Бәҙерғол депутат комиссия эштәренән. Нишләйһең, һайлап ҡуйылғас, йөрөргә, һүҙ көрәштерергә, ниҙер көтөргә ҡала әлегә.

Шул йылды төрөк һуғышы сығып китте. Һынныҡҡа һылтау табылды: һуғыш, тип комиссия эштәре туҡтатылды. Депутаттар таралышты. Өмөт-хыялдар төтөн булып күккә осто.

Бүтән депутаттар нисегерәк булғандыр, Бәҙерғол үҙе комиссия эшенең һөҙөмтәһеҙ бөтөүен ифрат ауыр кисерҙе. Күпме өмөттәр бағлағайны уға. Күптәр ышана ҡуйғайны. Әбей батша мәрхәмәтле, имеш, донъялар, бәлки, йүнлегә китер, йәнәһе. Халыҡтың ниәтен, ышанысын йөкмәп, аҙмы ваҡытын, көс-ҡеүәтен сарыф итте. Дәғүәләр, дауҙары бары бушҡа сыҡты. Һайлап ебәргән провинса халҡы алдында, аҡһаҡалдар ҡашында оят, эшең рәтһеҙ бөткәс, өмөттәрен аҡламағас. Батшаның батшалары һүҙендә тормағас, үҙең ил-йортоң теләген, әҙ-мәҙ хоҡуҡтарын телдән яҡлай алмағас, хәҙер нишләмәк кәрәк? Башыңды ташҡа ораһың-

мы? Яҙған яҙмышыңа буйһонаһыңмы? Ул саҡ ниңә кәрәк ине ул комиссия-һәйәт тигәндәре? Вәғәҙәләр, шау-шыуҙар? Мең мәшәҡәт, бикәр сығым, буш һүҙҙәр!..

## ДАУҘАН ЯУҒА

### 1

Үтә бошоноп, күңеле төшөп ҡайтты Мәскәүҙән Бәҙерғол. Сөй өҫтөнә туҡмаҡ — ил-йорт эсендәге хәлдәр быны тағы көсәйтеп ебәрҙе. Халыҡтың көнкүреше һаман насарая бара. Һалымдар арта, ер-һыу ҡыҫыла. Ылау сабыу, линия хеҙмәте електе ҡорота. Яфа-золомдоң сиге юҡ.

Бәҙерғол йәнә старшиналыҡ эштәренә сумды. Көн дә ауыл, иләү араһына сыҡты. Һәр ерҙә зар, ризаһыҙлыҡ ишетте. Аптырап, күрше иләүҙәргә, яҡын старшиналарына барып әйләнгеләне: һәр ҡайҙа бер үк хәл — ауыр тормош, йәбер-ҡыҫым, аһ-зар, үс-асыу. Былар Бәҙерғолдоң былай ҙа болоҡһоу йөрәген йәнә телгеләне, борсоулы уйҙарын үс-асыу үрте ялмарҙай итте.

Хаҡлыҡ, хоҡуҡ тип, комиссияла тел дауынан да мәғәнә күренмәне. Балалай алдатылып, teләк-өмөттәр селпәрәмә килтерелде.

Яу алды — дау, тигән боронғолар. Әллә дау шуға илтерме? Тел үтмәгәс, бүтән ни ҡала?..

Ил һис тә һил түгел. Ил ауыҙына иләк ҡаплап та булмай. Моң-зар менән бергә үс-асыу ауаздары, шомло хәбәрҙәр ишетелә. Бәғзе бер депутаттарҙың миҙалдарын өҙөп алып ташлағандар икән. Бәғзеләре буш вазифаларынан ваз кискәндәр, имеш. Бер нисә өйәҙҙә баяр-алпауыттарҙы тотоп үлтергәндәр, ти.

Күптәрҙең ҡолағын торғоҙғаны шуныһы ине: алыҫта Дон, Яйыҡ буйҙарында Петр Федорович батша пәйҙа булған имеш. Тәхеттән төшөргәс, ҡасып ҡотолоп, хәҙер үҙенә дошман баярҙарға, батшалығын алған ҡатынына ҡаршы сыҡҡан, тиме. Үҙе ҡара халыҡҡа ер-һыу, ирек вәғәҙә итә икән. Әле ғәскәр йыя ти. Түрәләр аша икенсе һүҙ ҙә йөрөй: имеш, ул бер ниндәй ҙә батша түгел, бары дәги[1], Емельян Пугачев тигән бер берәҙәк Яйыҡ казагы, йәнәһе.

Ҡәҫле буйҙарына ла килеп еткән бындай имеш-мимештәрҙең ҡайһыһына ныҡлап ышанырға белмәне Бәҙерғол башта. Әммә, ғәҙел батша үҙеме-түгелме, кем булһа ла барыбер, әгәр ул халыҡ яҡлы икән, үҙе ҡыуаныс. Донъяла ирек яҡлашыр, яулашыр әҙәмдәр юҡ түгел икән әле.

[1] Дәги — ялған әҙәм, самозванец.

Оҙаҡламай волосҡа бер-бер артлы тигәндәй ҡағыҙҙар ҙа килеп төшә башланы. Береһе — ниндәйҙер фетнәселәрҙе баҫтырыу өсөн әбей батша исеменән төҙөлгән губернатор указы. Икенсеһе — халыҡты яуга күтәрелергә өндәп, Петр III батша исеменән яҙылған манифест. Бер юлы ике батша мөрәжәғәте — тел̆әгәнеңде һайла йә икегә ярыл. Үҙ башың гына түгел, ил башы әле — ныҡлап уйланмай, икеләнмәй ҙә булмай. Күпмелер баш ватты ла аҡһаҡалдар, яҡын дуҫ старшиналары менән кәңәшләшергә булды Бәҙерғол. Үҙенең уйы күптән ойошоп, иләү халҡының тын алышын, ҡайһы яҡҡа ауырын белә торһа ла, тағы бер ҡат һөйләшеү, бергәләп уртаҡ һүҙ төйнәү хәжәт ине ил агаһына ла.

Мәкәтеләр былай бер һүҙҙән кеүек. Ә бүтән иләүҙәр нисек? Бәҙерғол күрше Арғаяш волосына, ҡорҙашы Юламан Ҡушаев старшинаға китте. Ул да ике төрлө ҡағыҙ алған, аптырап ҡалған икән.

Төрлө нәмә түгелме икән, тип, башта икеһенең ҡулына ла килеп ингән манифест ҡағыҙын сағыштырып уҡып ҡаранылар. Үҙебеҙсә, төрки телендә яҙыу: «Мәңләрчә олуғ вә бөйүк дәүләт эйәсе, барлыҡ илемез хужасы... императур Петр Федорович, Русиә падишаһы һәммә данлы вә ғәйре ғаләмгә... Башҡорт иләүләренә, старшина вә батырларға, олуғ вә кечек әдәмләргә падишаһыңыздин зур тәбрик. Миңә жан вә тән илә туғры хезмәт итеңез. Әгәр падишаһыңыза туғры хезмәт итсәңез, бер ходанан ниләр үтенәсеңез һәммә теләгеңез үтәлер, чөнки мин сезнең мәрхәмәтле падишаңыз. Шушылар турында белеңез һәм инаныңыз: бөгөннән башлап мин сезгә ер, сыу, урман, балыҡ тотоу урыннары, торлаҡ, бечәнлек, икмәк, тоз, үз динеңез вә ҡануннар, азыҡ-түлек, жалунья, ҡурғаш, дары вә провиант, ҡыҫҡасы, ниләр теләгәйсез — һәммәсен ғүмерлеккә бирәм. Вә дала кейекләре кеүек иректә йәшәңез!»

— Һүҙмә-һүҙ тура килә. Бер ҡулдан яҙылған. Бына икеһендә лә кәкерсәк бер ҡултамға, батша мөһөрө, — тине ҡыуанып Юламан. — Беҙ теләгәнде вәғәҙә итә. Үрҙән көткән — ерҙән килмәксе.

— Беҙ наказда ҡуйғандар, даулашҡандар бында түмәләм әйтелгән, — фекерҙе Бәҙергол да хупланы. — Тик үҙен батша түгел тигәндәре генә һағайта. Үҙе кеүек һүҙе лә ялған булмағайы.

Юламан шикте таратырлыҡ итеп әйтте:

— Миңә был ҡағыҙҙы Әй буйынан ышаныслы кешемдең сапҡыны килтерҙе. Шайтан-Көҙәй старшинаһы Юлай исеменән. Уның улы Салауаттың батша хәҙрәттәренә барып баш һалғанын, Юлайҙың атаман итеп тәғәйенләнгәнен

һөйләне. Ырымбур, Өфө яғы башҡорттарының, старшиналарҙың күбеһе шул Петр батшаға ҡушылғандар, тине. Салауат та, кире әйләнеп ҡайтып, ғәскәр йыя икән. Дуҫымдың бушты һөйләмәҫенә ышанам мин.

— Буш булмаҫ кеүек инде. Эҫем, Залатаус, башҡа завод кешеләре лә шул батшаны яҡлай икән. Завод халҡы юҡтан ҡумшынмаҫ.

— Ә бына губернатор указы менән ниишләйбеҙ? — тине уйланып Юламан старшина. — Әбей батшаға ант иткән, губернатор ҡулындағы старшиналарбыҙ бит әле.

— Әбей батшаның хәҙер кем икәнен, һүҙендә тормағанын бөтә ил күреп тора ла баһа. Вәғәҙәһен үтәмәгән иманһыҙ батша батшамы? Ант ҡоһоро төшһә, үҙенә төшөр.

— Шулай унһы, Бәҙерғол ҡорҙаш. Халыҡтың әбей батшаны яҡларға, белмәйем,.һис самаһы юҡ.

— Яҡлашыу-нитеү тиһең тағы. Уға ҡаршы яу сығырға әҙер ул, белгең килһә. Шуны һиҙмәйһеңме ни?

— Һиҙәм дә ул...

— Шулай булғас.

— Мин шул яғын да уйланым әле, — тине Юламан бер серен асҡандай итеп. — Петр батша кем ул, ысын батшамы-түгелме, беҙгә бит батша исеменән манифест килгән. Беҙгә буйһонорға лазым. Үҙебеҙ ҙә, аҡылыбыҙ булһа, халыҡ яҡлы батшаға ҡушылырға, шуға инанырға, ил-йортоборҙо инандырырға тейешбеҙ. Шулай тим мин.

Бар ҡарарға килгәндәй, Бәҙерғол һөйләшеүҙе үҙенсә түңәрәкләне:

— Төрлө һүҙ булмаһын өсөн халыҡҡа манифесты ла, губернатор указын да иғлан итергә кәрәк булыр. Ни әйтерҙәр — тыңлайыҡ. Төрлө халыҡ бар — тарханы, байы, байғошо. Бәғзеһе — указды, күптәре манифесты яҡлар, тим. Ә беҙгә, старшиналарға, йыйын алдында тураһын киҫә әйтеү ярамаҫ. Шулай ҙа, указ тигән булып, отрядтар ойоштора башлау кәрәк. Һәр хәлдә, беҙгә әҙер торорға кәрәк, халыҡты үҙ иркен яҡлар юҫыҡҡа һаҡлыҡ менән йүнәлтеү беҙгә төшә. Шуға иманым камил минең.

Бәҙерғол был хаҡта Һалйығут, Һырлы, Ҡатай волосы дуҫ старшиналары менән дә күреп һөйләште, бер үк фекергә килделәр. Дуҫ-таныштары аша депутат исеменән был иштәрен ул бүтән волостарға ла еткерергә тырышты, үҙе Мәкәте волосында Туғыҙаҡ Тауабылов поход старшинаһы менән йөҙгә яҡын һыбайлы отряд ойошторҙо. Ҡорал-яраҡтарын, яуға әҙерлек яҡтарын хәстәрләште. Провинция түрәләре алдында шик-шөбһә тыуҙырмаҫ өсөн, ул отрядын тыштан губернатор Рейнсдорп указы буйынса төҙөлгән итеп күрһәтергә тырышһа ла, ҡораллылары күңеленә манифест

ойотҡоһон һалды. Силәбенән бер нисә күрһәтмә ҡағыҙ килһә лә, үҙ волосында ла, бүтәндәрҙә лә поход сығыуҙы әле әҙерлек етмәүе йәки бүтән һылтауҙар менән туҡтатып, тыйып торҙо.

Бәҙерғол депутат бөтә Исәт провинцияһы башҡорттарын тиерлек үҙ ҡулына алып, Пугачевҡа ҡаршы барыр ҡораллы отрядтарҙы бер ҡайҙа ебәрмәй ятыуын, әллә ниндәй мәкер ҡороуын Силәбе администрацияһы тоймай ҡалманы, әлбиттә.

Исәт воеводаһы Веревкин оҙаҡламай Силәбенән өйәҙгә утыҙ һыбайлы сығарҙы. Әҙер отрядтарҙы поход оҙаттырыр өсөн. Уның башында отставкалағы поручик һәм тәржемәсе Осип Мещеряковский ине. Буйһонмаһа, Бәҙерғолдо ҡулға алыу эше лә йөкмәтелгәйне уға.

Мещеряковский юл өҫтөндәге ике волоста булып, башҡорт ҡораллы отрядтарын Ырымбур оҙата алмағас, бөтә мәкер башы Бәҙерғол старшинала икәненә тамам ышанып, Мәкәтегә ашыҡты. Мәкәтеләр һиҙмәй ҙә ҡалды, ҡыштың сасҡау кисендә воеводаның атлы казактары старшина ауылын килеп тә баҫты.

Ишле ғаиләһе күптән ятып бөтһә, Бәҙерғол үҙе оло өйөнөң түр яғында май шәм яҡтыһында боронғо бер яҙылмыш тарихнамә китабын уҡып ултыра ине. Бер саҡ таҡта ҡапҡа шығырлап асылғанын, ат тояҡтары тауышын, тәҙрә ҡаршыһынан ҡара төн аша ниндәйҙер шәүләләр үткәнен шәйләп ҡалды. Ихатала шау-шыу ишетелде. Тышҡы ишекте ҡаҡтылар. Урта өйгә Бәҙерғол үҙе сыҡты. Йоҡлағандарҙы уятмаҫ өсөн, шымыраҡ итеп, «Кем бар унда?» — тип һорауына тыштан руссалап: «Старшина, асығыҙ, Силәбенән пакет», — тинеләр. Оло келәне ысҡындырыуға, ишекте ҡаплап, тәүҙә бер ҙур толопло әҙәм, артынса бүтәндәре һөрлөгөп инде. Хужаны уратып алып, тура оло яҡҡа үттеләр.

Иҫ-аҡыл йыйғансы Бәҙергол шәмдәлдәрҙәге тағы бер нисә май шәменә ут төрттө. Өйҙә тоноҡ яҡтылыҡ арта төшкәс, кергәндәрҙе асығыраҡ төҫмөрләне. Унлап кеше. Барыһы ла ҡоралды. Толобон һалып ташлағандарының береһе, мундирына ҡарағанда, өлкән генә поручик, ҡалғандары — казак стражниктар. Мундирлыһын сырамыта ла бугай: отставкалағы поручик Мещеряковский шикелле. Шул, керәшен Яков Мещеряковский мишәр улы. Ҡараһаҡал яуын ҡара ҡанға батырышҡан яуыздың балаһы. Поручик үҙе Батырша яуында ҡаҙаҡ далаларында күпме башҡорт баштарына етте. Шул ҡәбәхәт икән. Бынан ҡотолоп булырмы? Баш китеүе шул микән? Шикле уйҙар йүгереп үтте башынан.

— Веревкин воевода тарафынан поручение менән ебәрелгән поручик Мещеряковскиймын, — тине теге үҙе лә ғаныштырған рәүештә, әммә үтә ҡырыҫ итеп. — Ниңә воеводаның указдарын үтәмәйһегеҙ? Отрядтар ҡайҙа?

Хужа әҙ генә тыныслана төштө:

— Отрядтар әҙерләнеү өҫтөндә, поручик превосходительство.

— Ә ниңә һаман поход сыҡмайҙар?

— Ҡорал-яраҡ етешеп, әҙерлек эше бөтмәгән.

— Ялған! — тип аҡырҙы поручик. — Күпме ваҡыт уҙҙы. Аңлы рәүештә һуҙыу — саботаж был. Үҙенде — ҡотҡосо, боласы әҙәмде — ҡулға алырға тура килер. Етте! — Приказ төҫлө йәнә өҫтәне. — Ҡоралды ике йөҙ кеше иртәгә үк поход сыға йә үҙ башың менән иҫәпләшәһең — воеводаның әмере шул!

Урамда ҡалған казактарҙың өйҙө ҡарауыллауына, өй эсендәгеләренең, ҡоралды көйө баҫып инеп, ҡыҫып алыуҙарына ҡарағанда, Бәҙерғол тотҡон хәлендә ине. Уны иҫһеҙ итеп туҡмап ташлауҙары, бәйләп Силәбегә оҙатыуҙары ла бик мөмкин. Һүҙ көрәштереүҙә мәғәнә юҡ. Шулай ҙа Бәҙерғол ҡыйыр-ҡыймаҫ һорай ҡуйҙы:

— Воеводаның яҙма поручениеһы юҡмы ни?

— Һиңә тағы күпме ҡағыҙ? Мә, ҡара! — Поручик, мундиры эсенән ҡарманып, асыу менән бер яҙыу һондо. Шәм яҡтыһына яҡыныраҡ килтереп ҡарағас, воеводаның ике йөҙ кешене походҡа әҙерләп, ике көн эсендә Силәбегә ебәреү бойороғон уҡыны Бәҙерғол.

Эште хәҙер үк башлар өсөн, төн ҡараһы тип тормай, поручик сотниктарҙы саҡырырға бойорҙо. Старшинаның бер улын ике һалдат менән шул йомошҡа ебәрҙе.

Бәҙиғолъямал йәһәтләп сәй ҡайнатып ултыртҡас, өҫтәлде һый-ниғмәт менән тултырып ташлағас, ҡаҙанда аш еҫе сыҡҡас, өй эсендәге шом-хәүеф әҙерәк таралғандай итте. Өс сотник менән писары килеп ингәндә, юлда асыҡҡан поручик һәм ярандары сәй эсеп, һыйланып ултыралар ине инде.

Ләкин көсөргәнеш барыбер баҫылманы. Осип һаман ҡырыҫ ҡыланды. Килеп ингәс тә, писарь менән сотниктарҙы һүгеп ташланы, губернатор указын, воевода поручениеларын үтәмәгәндәре өсөн ябып ҡуйыу, штраф һалыу, язаға тарттырыу менән янаны.

Иртән иртүк һалдаттары һәм писарь ярҙамында тәғәйен ун баштарын, есаулдарҙы, бер нисә аҡһаҡалды йыйҙырғас та, шул уҡ янауҙар ҡабатланды, отряд талап ителде. Поручик, ҡурҡытып-ҡыҫып, поручениеһын тиҙерәк үтәт-

терергә, бер ыңғайҙа старшинаны ла Силәбегә илтергә ашыға ине.

Ләкин мәкәтеләр поручиктан өлгөрөрәк булып сыҡты. Бәҙерғолдоң ун ике йәшлек улы хәүефле хәлде төн ҡата ышаныслы кешеләргә хәбәр итә алды. Күрше ауылдарға кеше китте.

Шомло оҙон төн үтеп, ҡышҡы көн төшкөлөккә ауалағанда, көстәр нисбәте иләүҙекеләр файҙаһына үҙгәрҙе. Инде Мещеряковский үҙе ярандары менән ҡоралды старшина кешеләре ҡулсаһында ҡалды. Поручиктың ҡапыл кикреге шиңһә лә, ул үҙен һаман власть кешеһе итеп, воеводаның талабын ҡуйып булашты.

Бәҙерғол инде үҙен, төнгө тотҡон хәлендә түгел, волость башы итеп тойоп, уны ҡурсыған кешеләре алдында хәлде тынысҡына уртаға һалды:

— Йәмәғәт, Осип керәшендең ҡара төндә килеп йорт баҫыу ҡылығын ҡалдырып торайыҡ. Ишеттегеҙ, былай ул үҙе воевода порученеһы менән килгән: Ырымбур ҡарай поход сығыр ике йөҙ кеше йыйырға. Шуға тип йән алып бара, сығырынан сыға. Йәшерен түгел, Петр Федорович батшанан килгән манифест ҡағыҙы ла бар ҡулыбыҙҙа. Батша хәҙрәттәре ер-һыу, ирек вәғәҙә итә. Шуны яҡлап ул да яу сығырға саҡыра. Ике батша исеменән ике ҡағыҙ. Шуның ҡайһыһын мәғҡүл күрәһегеҙ, әйтегеҙ, һеҙҙең эш.

— Петр Федорович сиятельствоһы юҡ, ул үлгән. Манифест таратыусы ялған әҙәм — Емелька Пугач — Яйыҡ казағы. Фетнәсе! — Шундай реплика ташланы поручик.

— Батшамы-түгелме, кем булмаһын, ул ер-һыу, ирек бирә. Башҡорттарҙы яҡлай. Беҙ Питер батша хәҙрәттәренең саҡырыуына ҡушылабыҙ, — тине Арғынбай сотник.

Уның фекерен хуплап, ир-егеттәр шау-гөр килеп алды.

— Һеҙ — хыянатсылар! Фетнә ҡубармаҡсыһығыҙмы? Үҙегеҙҙең, ил-йорттарығыҙҙың башына булыр, — тип аҡырынды поручик.

— Һаман янауын, кеше башы менән уйнауын белә, яуыз. Яков атаһының башҡорт ил-йорт башын ашағаны ла баштан ашҡан. Ҡаҙаҡ далаларына киткән күпме ир-егеттәрҙең юлына арҡыры төштө үҙе. Барыһы өсөн ҡондо алырға кәрәк үҙенән! — Арғынбайҙың яуабы шулай тағы ҡаты һәм ышаныслы яңғыраны.

Ул арала бер нисә ир Мещеряковскийҙы тамам бөрөп алды. Ярандары ҡымшанмаҫтай ителде.

— Был яуызға ниндәй хөкөм сығарабыҙ, әйт, Бәҙерғол старшина, — тип мөрәжәғәт итте икенсе сотник.

— Аҡһаҡалдар хөкөмөнә тапшырам... Ә һалдаттарының ҡоралдарын һалдырып, үҙҙәрен элегә һаҡ аҫтына алығыҙ! — тип бойорҙо старшина.

Икенсе көндө аҡһаҡалдар, ил-йортто йыйып, атаһы һәм үҙенең күп кешеләрҙең башына еткәне өсөн, Мещеряковский поручикты аҫып үлтерергә хөкөм сығарҙылар һәм еренә еткерҙеләр. Шул уҡ йыйында Петр Федорович батша хәҙрәттәренә ҡушылыр өсөн волоста ике йөҙ кешелек отряд төҙөргә ҡарар ителде. Отряд башлығы итеп Бәҙерғол старшина тәғәйенләнде.

Депутат Бәҙергол Юнаевтың батша комиссияһындағы дауҙан ҡорал тотоп яуга күтәрелеүе шулай башланып китте.

## 2

Урал тауҙары аша 1773—1774 йылдың ҡышҡы бурандары менән бергә Исәт провинцияһына һәм Себергә Крәҫтиәндәр һуғышының утлы өйөрөлмәләре үтеп инде. Пугачев манифестары, ҡоро ергә килеп төшкән осҡон кеүек, азатлыҡҡа сарсаған, үс менән янған күңелдәрҙе дөрләтер ялҡын булды. Халыҡ күтәрелеше әле бер, әле икенсе урында ләүкеп ҡабынды, унан, тотош янғын һымаҡ, бөтә провинцияны ялмап ала барҙы.

Башҡортостан, Урал, Себер яҡтарындағы ҡуҙғалыш менән етәкселек итер өсөн тәғәйенләнгән Пугачев атамандарының береһе Иван Зарубин-Чика Исәт провинцияһындағы хәрәкәтте ойоштороу өсөн 1773 йылдың аҙағында Табын казагы Иван Кузнецовты ебәрә. 22 декабрҙә Һатҡы заводына егермеләп һыбайлы менән килгән Кузнецовты завод эшселәре икмәк-тоҙ менән ҡаршылай, восстаниесыларға ҡушылып, туптар, ҡоралдар бирә. Златоуст заводы ла ҡушыла. Оҙаҡламай Кузнецов төньяҡҡа, Красноуфимск-Көңгөр яҡтарына халыҡты яуга күтәрергә күсерелгәс, уның урынына Исәт провинцияһына Иван Грязнов казак килә. Ул Усть-Ҡатау, Һатҡы, Златоуст заводтарында эшселәрҙән отрядтар төҙөй, уны шунда уҡ ҡойған туп, мылтыҡтар менән ҡоралландыра. Уның йөҙ кешелек отрядына дүрт йөҙ башҡорт һыбайлылары ҡушыла. 1774 йылдың башында был отрядтары менән Силәбе тарафына йүнәлә.

Красноуфимск-Көңгөр тирәләрендә Салауат Юлаев — Кузнецов отрядтары уңышлы хәрәкәт итһә, Екатеринбург яғында атаман Иван Белобородов бер-бер артлы заводтарҙы ҡулға төшөрә, Ҡыштым-Kәҫле тарафына сапҡындар яһай.

Урал тауҙары аша Исәт урман-далаларына ана шул яу ялҡындары үрләй башлаған саҡта, Бәҙерғол Юнаев башта үҙ волосын дәррәү көрәшкә күтәрә. Уның ике йөҙ һыбайлыһы ғинуарҙа Ҡәҫле заводына бәреп инә. Бер-ике домнаһы төтәр-төтәмәҫ ултырған завод әллә ни ҡаршылыҡ та күрһәтә алмай. Управляющийҙары, ҡурҡып, күптән Екатеринбургка ҡасып киткән була. Дүрт-биш тиҫтәгә лә етмәҫ һалдат-стражниктарҙы, үҙҙәренә эшселәр ҡушылмағас, ҡасҡаны ҡасып, ҡаршылашҡаны уҡ-ҡылыстан йәки әсир төшөп, тарҡала. Пугачевсы башҡорттарға Бәҙерғолдоң йәшлек дуҫы Яков Плотников завод эшселәре отряды менән килеп ҡушыла.

Завод башҡорт һәм рус отрядтары ҡулына күскәс, Бәҙерғол, сиркәү саңдары ҡаҡтырып, Ҡәҫле күленең бейек яр башына һалынған сиркәү майҙанына эшселәрҙе йыйҙырҙы. Бәҙерголга, яуҙаштарына кәҫленекеләр күбеһе таныш танышын. Шуға йыйын ҡороп, нотоҡ тотоп тороуҙың кәрәге лә шунса. Яңы власты иғлан ит, заводҡа башлыҡтар һайлат — шул инә эшләйһе. Әммә Бәҙерғол һәр нәмәне еренә еткереп, һайлау церемонияһын бар шартына килтереп, тантаналы рәүештә башҡарыуҙы тейеш тапты.

Сиркәү майҙанында Петр Федорович батшаның — Пугачевтың эшселәргә манифесы ҡысҡырып уҡылды. Уны башҡорт һыбайлылары оҙон өскөл рәткә теҙелеп ат өҫтөндә ҡылыстарын ҡындан һурып алған көйө тыңланы. Завод эшселәре, йолалары буйынса, бүректәрен һалып, ҡулдарын өҫкәрәк һоноп тын ҡалды. Шунан сиркәү саңдары аҫтында яңы власҡа тоғролоҡҡа тантаналы ант иттеләр. Аҙаҡ заводтың яңы власы һайланды. Завод атаманы булып Яков Плотников үтте. Есаул, урядник, капралдар билдәләнде. Яңы указ уҡылды. Унда эшселәрҙән отряд төҙөү, пугачевсыларға туп, дары, ҡоралдар әҙерләп тапшырыу, завод ҡаҙнаһын конфисковать итеү күрһәтелгәйне.

Ҡасып киткән управляющийга үлем хөкөмө сығарылды. Һалым, штраф буйынса канцелярия ҡағыҙҙары халыҡ алдында яндырылды. Атаман Белобородов ғәскәренә Ҡәҫле заводы туп, мылтыҡ, дары илтер делегация тәғәйенләнде. Бәҙерғол завод кешеләрен яңы власть менән ҡотланы һәм шуның хөрмәтенә мәжлес иғлан итте. Был Ҡәҫле эшселәренең һәм Ҡәҫле буйы башҡорт крәҫтиәндәренең үҙҙәрен ысын хужа итеп тойоп, иркенләп, кинәнеп уҙғарған дуҫтарса оло байрамына әйләнде.

Икенсе көн Үрге Ҡыштым (Ҡиштәм) заводынан бер шейхтмейстер ҡасып килде. Заводты һаҡлаған Тубыл ка-

зактары араһында буталыш башланған икән. Иртәгәһен уларҙы тотоп язалауҙары йәки үҙ-ара алыш, ҡан ҡойош сығыуы ихтимал. Кисектергеһеҙ ярҙам кәрәк.

Бәҙерғол Яков Плотников менән кәңәшләште лә, йәһәт әҙерләнеп, төн эсендә Үрге Ҡыштымды барып баҫмаҡ булдылар.

Йөҙ илле ат эйәрләнде. Барышлай Түбән Ҡыштымды ситләтеп үтеп, ике завод юлын бүлеп, илле кешелек тотҡар ҡалдырҙылар. Түбән заводтыҡылар ярҙамға килергә уйлаһа, юлдарын киҫмәгә. Төп көс Киштәм һыуы буйлап Үрге заводҡа йүнәлде. Оҙаҡламай төн ҡараһында домналарҙың ике оло мөрйәһе төҫмөрләнде, эттәр өргөләгән тауыштар килде. Һыбайлылар аттарын яйлата төштө.

Оло быуаға яҡын ҡарауыл посын шейхтмейстер менән ике казак таңғы йоҡоға табан еңел алдылар. Хәҙер юл асыҡ: шейхтмейстер отрядты тура Тубыл казактары казармаһына илтергә тейеш — уға эйәрҙеләр. Казармала йүнле ҡарауыл да булмай сыҡты. Булғанын йоҡола көйө баҫтылар. Ҡорал-яраҡты ҡулға төшөрҙөләр. Тик бер капрал йоҡо аралаш ырғып тороп, тауыш күтәргәндә, мылтыҡтан бары бер атып ҡалғанда, кәҫләләр отряды казармаға хужа ине инде. Иләҫ-миләҫ уянған ҡоралһыҙ казактар бер ниндәй ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Эштең ниҙә икәнен аңғарып алгас, үҙҙәре үк ҡыуанышты.

Таң беленгәнсе завод конторалары ла, Үрге Ҡыштым шулай уҡ һуғышһыҙ-ниһеҙ тотошлай кәҫләләр ҡулына күсте.

Иртән Бәҙерғол тағы сиркәү саңдары ҡаҡтырып, Ҡыштым кешеләрен майҙанға йыйҙырҙы. Кәҫләләгесә Пугачев манифесы уҡылып, Петр III батшаға тоғролоҡҡа ант иттерелде. Яңы власть һайланды, завод милке конфискацияланды. Яңы атаманға отряд төҙөп, туп, дары әҙерләү эштәре тапшырылды. Тубыл казактары үҙҙәре бер регуляр отряд тәшкил итте. Тик уларҙың капитаны ғына, бар яуызлыҡтары, яңы батшаны танымағаны өсөн, аҫып үлтерергә хөкөм ителде.

Был тантаналы церемония бөтөр-бөтмәҫтән, уға яңыһы ялғанды. Түбән Ҡыштымдыҡылар күршеләрендәге хәлде ни арала ишетеп-белеп, үҙҙәренән делегация төҙөгәндәр. Алты вәкил поп башлығында мисәүле аттар, ҡыңғырауҙар, икмәк-тоҙ, тәре-иконалар менән ҡалдырылған илле һыбайлы оҙатылыуында тантаналы рәүештә Үрге Ҡыштым майҙанына килеп инделәр. Биҙәкле кейемдәр, рясалар, ризалар, шартына килтереп ғибәҙәт ҡылыу, Петр III батшаға ант итеүҙәр тамашаны йәнә күркәмләп, оло байрамсалап ебәрҙе.

Бына тағы байрам иглан ителде. Түбән заводтан ҡунаҡтар саҡырылды. Мөғәрәптәрҙән һыра, шарап мисколәре тәгәрәтелде. Ашау-эсеү, йыр, уйын-көлкө тәүлеккә саҡлы һуҙылды.

Яңы власть вәкилдәре управляющий йортоноң ҡунаҡ бүлмәһендә табын ҡорҙо. Бәҙерғол түрҙә ике атаман уртаһында ултырҙы. Петр батша һаулығына, азатлыҡ хөрмәтенә, дуҫлыҡ, тоғролоҡ шәрәфенә күпме шатлыҡлы тостар әйтелде. Бәҙерғол башына сыҡҡан шарап шауҡымы, ҡорҙағыларҙың ҡыуаныстары, типтереүҙәре аҫтында әлеге ике-өс көнгә еңеүле хәл-ваҡиғаларҙы уйынан кисерҙе. Шул арала күпме һөйөнөс, күпме тамаша! Үҙен кеше, хужа тойған халыҡтың, гүйә, көс-ҡеүәттәре, шатлығы таша. Ниндәй асыҡ йөҙҙәр, осҡон сәскән күҙҙәр! Ғәйрәтле ҡулдар! Былар менән тау-таштарҙы ғына түгел, шулай яуыз түрәләрҙе, тәхеттәрҙе түңкәреп ташларлыҡ. Үс-нәфрәттәре ҡалай хәтәр — арҡыры торғанын он-талҡан итерлек. Яуыздарға нисек кинәнеп боғалаҡ һалалар. Ә еңеүҙе ҡайһылай байрамлайҙар! Әйтерһең, һис бер ниндәй яфа-йәбер, ҡайғы-һағыш күрмәгәндәр. Күңелдәрендә бары шатлыҡ, ҡыуаныс ятҡанмы ни! Әллә ҡәһәрле үткәндәрен шарап менән йыуҙырып, йыр-моң менән ҡаплаталармы?.. Хуш, зарығып көткән көндәр килеүе шул булһын! Алдағылары ырыҫ-ҡот менән тулырға яҙһын! Йөҙҙәрҙән әлеге алсаҡлыҡ, күңелдәрҙән ихласлыҡ китмәһен! Әйткән анттарынан, алған юлдарынан тайшанмаһалар — булыр! Барыһы булыр, иншалла!

Бәҙерғол үҙе лә күпме көткәнен, старшина, депутат булып аҙмы даулашҡандарын әле бары яулашып ала түгелме һуң? Бәлки, шулай күптән тәүәккәлләргә кәрәк булғандыр? Йөҙ һөрәнләгәнсе бер ороуға ни етә! Тик баҙнатланғас, хәҙер баҙама! Бүтәндәрҙе лә баҙалтма, тайшандырма — башлыҡҡа шунда хәҙер бер бурыс.

Яуға ташланыу — йөрәк, еңеп сығыу — ғәйрәт эше. Ә еңгәнде нығытыу, яңыса ҡороу — аҡыл эше. Зиһен дә, таһыл да кәрәк быныһына.

Байрам — бер көн, хәстәр — көн дә. Иртәгәһенә Бәҙергол менән Яков әле йүнләп күтәрелеп тә етмәгән кисәге табындаштарын — яңы власть вәкилдәрен контораға йыйып, алдағы походтарга әҙерлек, завод эше мәсьәләләре хаҡында ныҡлап һөйләштеләр; заводты туп, картечь ҡойоуға яйлау яҡтарын ҡаранылар, ҡаҙна-хазинаны, ҡорамал складтарын барланылар. Атамандарға, есауыл, сотниктарға, шеймейстр, шихтмейстрҙарға конкрет вазифалар тәғәйенләнде. Бәҙерголға өс заводтың эшен күҙәтеү, от-

рядтар төҙөү, башҡорт һыбайлылары менән берлектә походҡа әҙерлек эштәре йөкмәтелде.

Шулай яңы донъяның үҙенә бик үк таныш түгел эштәренә баштан-аяҡ сумды элекке депутат, хәҙер хәрби кеше.

Ике-өс көн эсендә өс заводты ҡан ҡойошһоҙ тигеләй ҡулға төшөрөү, ҙур төбәктә яуға сыҡҡан халыҡтың яңы власын урынлаштырыу, меңгә яҡын яугир туплау, ҡорал әҙерләү яу башлығы Бәҙерғол Юнаевтың тәүге ҙур хәрби ҡаҙанышының ҡыуаныслы башы ине.

3

Ҡыштым заводтарын алғас та, Бәҙерғол үҙҙәренән төньяҡта хәрәкәт итеүсе Иван Грязнов отрядтары менән бәйләнеш булдырҙы. Юнаевҡа Пугачев полковнигы өс заводта ҡорал-яраҡ яһау, туп ҡойоу һәм уға ярҙамға отрядтар туплап походҡа әҙерлек эштәрен тапшырҙы.

Төньяҡ флангыһының ныҡлығын тойоп, полковник Грязнов 1774 йылдың башында Уралдың завод райондарынан күлле-далалы Исәт провинцияһына үтеп инде. Уның биш меңгә яҡынлаған ғәскәрен Сыбаркүл, Күндерәүҙе ҡәлғәһе казактары һәм крәҫтиәндәре икмәк-тоҙ менән ҡаршыланы. Силәбенән етмеш саҡрым ғына бире ятҡан Күндерәүҙе, провинция үҙәген штурмлау өсөн, төп хәрби лагерға, ставкаға әйләндерҙеләр. Шул уҡ ваҡытта Үрге Убыл, Ҡуййылға ҡәлғәләре, провинцияның бөтә көнбайыш өлөшө пугачевсыларға ҡушылды. Башҡорт һыбайлылары Силәбене ситләтеп көнсығыш дистрикттарға ла үттеләр. Хәҙер төп маҡсат Силәбене яулап алыуға йүнәлдерелде.

Силәбе — Мейәс йылғаһы буйында ятҡан ағас ҡәлғә. Ул 1736 йылда Таймаҫ Шайым тархан ерҙәренә һалынған. Тархандың был Мейәс буйындағы Силәбе-Ҡарағай тигән йәйләү ере бик йәмле, урман-убалы яйлы урын булған. Губернаторға, һөйләүҙәргә ҡарағанда, хатта батшаның үҙенә үк ярамһаҡланыпмы, әллә ерҙәренең барыбер китерен һиҙенепме, тархан ҡәлғә өсөн уңайлы йәйләүен һатып ебәргән. Шунан Мейәс һыуының ҡалҡыу ярына бүрәнәләрҙән уратып ҡәлғә ҡоролған, уға шул йәйләү исеме бирелгән. Ҡәлғә йылғаның ике яғына шаҡтай ғына йәйелеп, тиҙ ҙурайып китеп, 1743 йылда инде ул Исәт провинцияһының үҙәгенә әйләндерелгән. Унда казактарҙан ғибарәт ғәскәр һаны, администрация кешеләре, сауҙагәрҙәр артҡан. XVIII быуаттың икенсе яртыһында инде ул ҡанһыҙ түрәләре менән яманаты сыҡҡан, халыҡтың асыуын ҡабартҡан, бейек ағас диуарҙары, туптар ҡуйылған ағас манаралары менән ҡотто алыр ҡәһәрле ҡалаға әүерелгәйне.

Башҡорттар, үҙ ерҙәрендә үҙ ирке менән ҡәлғә һал-

дыртҡан Таймаҫ тарханды ҡәһәрләп, яман шеш төҫлө Силәбегә бер нисә тапҡыр сапҡын яһанылар. Ләкин күп кешеләрен юғалтып, диуар янына етһәләр ҙә, эскә инә алмайынса, ҡәлғәгә ут төртөп, кире сигенергә мәжбүр булдылар. Ағас ҡәлғә шулай бер нисә тапҡыр тош-тош яндырылһа ла бирешмәне, яңынан ныҡлыраҡ итеп төҙөлдө. Ғәскәр арттырылды. Башҡорт ерҙәренә баҫҡындар, ҡыҫымдар көсәйҙе. Шеш, гүйә, ҡағылған һайын аҙынды.

Пугачев яуы ҡубып киткәс, быға дәррәү ҡушылған Исәт провинцияһы башҡорттары ла иң беренсе сиратта тиҙерәк провинция үҙәген ҡыйратырға уҡталдылар. Силәбе тирәләй яусыл һыбайлылар, ҡоралы урыҫ крәҫтиәндәре йышыраҡ күренә башланы. Провинция воеводаһы Веревкин, ҡото алынып, ҡәлғә гарнизонына ғына ышанмай, тирә-яҡ волостарҙан дәүләт крәҫтиәндәрен ҡәтғи приказ менән йыйып ҡоралландырырға, ҡурғау эшен нығытырға тотондо. Ярҙамға йәнә Себерҙән подпоручик Пушкарев командаһында туплы бер рота һалдат килтертте.

Силәбенең үҙ эсендә лә хәлдәр хәүефле ине. Ҡала халҡына, казактарға ышаныу ҡыйын. Түрәләрҙе күралмау, пугачевсыларға теләктәшлек көслө. Етмәһә, ҡотҡо таратып, боласылар ҙа йөрөй, тиҙәр ҡалала.

Ҡауҙан ергә бер осҡон етә. Осҡондо казактар саҡтыра. Наум Невзоров тигән хорунжий 1774 йылдың 5 ғинуарында, йәкшәмбе көн, халыҡ сиркәүҙә саҡты файҙаланып, ҡоралы ике йөҙ казак менән Силәбе воеводаһы йорто янындағы тупсы һалдаттарға һөжүм ойоштора. Казактар алты тупты ҡулдарына төшөрә лә йәһәт ҡороп, фитилдәрен әҙерләп, воевода йортона тоҫҡай. Ә буш йортто ҡыйратыуҙа ни мәғәнә. Казактар хорунжий командаһында ҡорал, дары складтарын яулап алаһы урында, шау-шыу ҡуптарып, воеводаның үҙен эҙләргә, бүтән түрәләрҙе тоторға таралыша. Веревкинды, яҡын ярандарын өйҙәрендә табып, туҡмап, майҙанға килтереп япҡансы, иректә ҡалған подпоручик Пушкарев ҡоралы ротаһы менән туптарҙы кире яулап ала. Боласы казактар майҙанға кире әйләнеп килһәләр, үҙ өҫтәренә йәҙрә яуа башламаһынмы. Хәҙер ҡоро ҡул-штык менән генә яһау туптарҙы штурмлау мөмкин түгел. Шарт-шорт атыш аҫтында ҡасып ҡотолоуҙан башҡа сара ҡалмай.

Наум Невзоров хорунжий йөҙ иллеләп казагын Силәбенән имен-аман алып сыға сығыуын. Дөрөҫө, ҡасып сығалар. Ә ҡала эсендә атыш, киҫеш кискә хәтле дауам итә. Пушкарев тупсылары тырым-тырағай таралған боласыларҙы берәмләп ҡыйрата, Максим Уржумцев атаманды әсир төшөрә. Шикле күп кешеләргә, казактарға арест һалына.

Ярһыған казактарҙың, бигерәк тә башлыктары хорунжийҙың, бирешергә самалары юҡ ине әле. Улар, ҡаланан ҡасып, Мейәс һыуынан дүрт-биш саҡрым өҫтә туҡталалар ҙа, йәһәт кенә лагерь ҡороп, ҡорал-яраҡтарын барлап, Силәбегә һөжүм итергә йыйыналар. Уларға ҡасып-боҫоп килгән тағы йөҙләп казак, крәҫтиән өҫтәлә. 7 ғинуарҙа Невзоров шул көс менән Силәбегә ҡапыл сапҡын ойоштора. Тик воевода ла йоҡламаған икән, боласыларҙы туп йәҙрәләре менән ҡаршылай. Хәтәр атыш-киҫеш китә. Ләкин туп-һыҙ-ниһеҙ Силәбене алыу мөмкин түгел — сигенә былар кире лагерҙарына.

Ләкин ярһыған хорунжий был еңелеүе менән дә баҫылмай — китә юллап полковник Грязнов ғәскәрен. Таба полковникты, һөйләй барыһын, Силәбелә боласы казактар менән ни булғанын. «Әҙ генә көс етмәй ҡалды, йәһәннәмгә оҙата инек воеводаһы менән бер ус ярандарын, хыянатсы подпоручигын», — ти Невзоров. Ышандыра, күндерә Грязновты.

Тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға булалар. Етеһенән һигеҙенә ҡаршы төндә дүрт мең ғәскәрҙе ҡуҙғатып, алты туптарын һөйрәтеп, Грязнов Силәбе янына, Невзоров лагерына йүнәлә.

Полковник ҡыҙыу ҡанлы түгел, сабыр, аҡыллы кеше, юҡҡа ҡан ҡойғоһо килмәй, Силәбене һуғышһыҙ-ниһеҙ алырға ниәтләй. Барып сығырмы-юҡмы, башта хат яҙып гарнизондың баш һалыуын талап итә, ультиматум ҡуя. Яуап булмағас, форсатты ҡулдан ысҡындырмаҫ өсөн, һөжүмгә күсә. Алда алты тупты яҡын ҡуйып, ҡәлғәне терәп аттыра. Ағас бағаналар ҡыйрала, янғын сыға, диуарҙа емеректәр барлыҡҡа килә. Артынса ғәскәре ябырыла. Ә ҡаланан быларҙыҡынан күпкә яман ун һигеҙ туптың аллы-артлы атыуҙары яңғырай. Йәҙрә, картечтар ғәскәрҙе ҡыра. Былай ярамай, һөжүмде туҡтата полковник. Ғәҫкәрен Силәбенән ике саҡрым ғына аралағы Мәтке ауылына туплай.

Тап ана шул һөжүмле-сигенешле киҫкен мәлдә, Грязнов сапҡынының ашығыс саҡырыуы буйынса, Бәҙерғол Юнаев Ҡәҫле, Ҡыштым заводы кешеләре һәм башҡорт һыбайлылары, Тубыл казактарынан торған барлығы ете йөҙгә яҡын ғәскәре, ике тубы менән Мейәс йылғаһы буйлап 9 ғинуарҙа Силәбе эргәһенә, Мәтке ауылына килеп етә. Атлы-йәйәүле яусылар ҙур ауылдың киң урамын ҡаплап ала. Ә ҡыҫҡы тар юлда һуҙылған яуҙың ҡойроғо әллә ҡайҙа артта яланда ята.

Сотниктары Самойло Телегин менән Григорий Туманов Грязновҡа өҫтәмә көс килгәнен хәбәр иткәндә, Бәҙерғол Юнаев менән Яков Плотников баш атаман-полковник туҡ-

таған өйҙөң ихатаһына һыбай килеп тә инәләр. Баш атаман, казактар ғәҙәтенсә, яңы ярандарын ҡолас йәйеп ҡосаҡлап ҡаршылай.

Иван Грязнов үҙе урта буйлы, ҡуңыр йөҙлө, йоҡа ҡара һаҡал-мыйыҡлы ҡырҡтар тирәһендәге казак икән. Йөҙө көләс — кәйефе шәп, күренеү. Бәҙерғол, тунын һалып тормаҫтан, төлкө бүрекен генә ҡулына алып, турайып рапорт бирҙе:

— Батюшка баш атаман, һеҙҙең саҡырыуығыҙ буйынса, ярҙамға Ҡаҫле, Ҡыштым заводтарынан, шул тирәләге башҡорттарҙан ете йөҙ кеше килде. Завод отрядтарының атаманы — Яков Плотников. Тубыл командаһынан илле казак бар. Ике туп йәҙрә, картечтары менән.

— Һай, молодецтар, минең завод халҡым, башҡорттарым! — Грязнов шулай күрешеп, танышып алды ла кисә һораны: — Ә яуға әҙерлек нисек?

— Унынһын, батюшка Иван Никифорович, яу үҙе күрһәтер. — Шулай Плотников эрерәк яуапланы.

— Хуш, күҙ күрер... Самойло Иванович, хәҙер үк килгән ғәскәрҙе күрше ауылдарға урынлаштырыу хәстәрен күрегеҙ. Ә, атамандар, һеҙ сисенегеҙ. Ял иткәнсе бер аҙ әңгәмәләшеп алырбыҙ. — Полковниктың был бойороғо ла, тура эшкә күсеүе лә ине.

Юлдан килгәндәр сисенеп-йыуынып бер аҙ тын алгас, ҙур өҫтәлде тирәләй самауыр янына ултырышҡас, Иван Грязнов һүҙ ара һынамышлы шаяртып та ҡуйҙы:

— Юнаев, әйт әле, һин бит императрица депутаты. Уға ант иткән кеше. Хәҙер антың башыңа төшмәҫме?

— Төшмәҫ, баш атаман. Һүҙендә тормаған әбей батшаға ант харам.

— Петр Федорович батша хәҙрәттәренә ышанаһыңмы? Уға ла антыңды боҙмаҫһыңмы? Аҙаҡ үкенмәҫһеңме һуң?

— Үкенмәм. Боҙмам. Петр Федорович — үҙебеҙҙең батша. Ул беҙ теләгәнде, беҙ көткәнде вәғәҙә итә. Юҡ, вәғәҙә генә итмәй, яулап алып бирешә. Ир әғзәм батша һүҙе бер булыр, тим, — шулай таҫпатып яуап бирҙе Бәҙерғол. Һүҙе сығып тороуына үҙе лә аптырап ҡуйҙы.

— Силәбене алһаҡ, генералды ҡыйратһаҡ, шул саҡ һине провинцияға атаман итеп ҡуйһаҡ, нишләр инең, Базаргул? — Һынаулы һорау ине быныһы ла.

— Петр Федорович батша хәҙрәттәре указдарын ғәмәлгә ашырыр инем, батюшка, әгәр ундай оло дәрәжәгә хаҡлы булһам. Генералын, баярын ил-йорт хөкөмөнә бирер инем.

— Яҡшы. Депутат түгел, ысынлап та, атаман ҡылығы һиндә, Базаргул.

— Һүҙ үтмәгәндә, ҡул — хөкөм, тигән беҙҙең башҡорт-

тар. — Шулай тине лә, бүтәндәргә ҡушылып, үҙе лә көлдө Бәҙергол.

Баш атаман һаман һорау яуҙырҙы:

— Ә Яшка Плотников менән уртаҡ тел табып буламы һуң?

— Һис шикһеҙ. Уйҙар, юлдар уртаҡ бит.

— Беҙ бала саҡтан уҡ дуҫ Базаргул менән. — Шулай йөнләне Яков Плотников.

Боҙ өҫтөндәге йоҙроҡ орошонан хәҙер бергәләп оло яуға сыҡтыҡ. Ҡәҫле башҡорт-урыҫы бер төптәнбеҙ, батюшка баш атаман.

— Да, башҡорттар ғәҙеллек, ирек һөйөр тогро халыҡ, — тине уйланып Иван Грязнов. — Уларҙы мин күп һынаным. Әле гәскәремдең яртыһы тиерлек башҡорттар. Улар әҙерлекле казактарҙан тамсы ла ҡалышмай, әгәр артығыраҡ булмаһа әле.

Икс-өс чарка көмөшкәне түңкәреп ҡуйғас, яуҙаштарҙың әңгәмәһе ҡыҙа төштө. Аҙаҡ һүҙ иртәгәһе яуҙы нисек башлау, ҡалай һөжүм итеү мәсьәләһенә күсте.

Бөтә Исәт провинцияһы, Себер яғы яу башлығы Иван Грязнов баш атаман менән яу юлында танышыу шулай башланды.

Дошманға тын алырға ла ирек бирмәҫкә кәрәк ине. Бәҙерголдар килгәс, баш атаман биш меңдән дә ашып киткән гәскәрен Силәбенең төбөнә үк килтерҙе, ҡаланы ҡулсаға алды.

Унынсы ғинуарҙа яңы һөжүм ҡыҙып китте. Пугачевсыларҙың хәҙер һигеҙ тубы телгә килде. Ярым емерелгән ҡәлғә стеналарында, эстә тағы янғындар сыҡты. Һөжүмгә күскән атлылар, йәйәүлеләр йәнә йәҙрә, картечтар аҫтында ҡалып ҡырылды. Сафтар һирәгәйҙе. Һыбайлы башҡорттар, казактар сабыуыл яһап, ҡәлғә төбөнә үтеп сабыша-киҫешә башлаһа, барлы-юҡлы киҫтән-яраҡ менән ҡоралланған йәйәүле крәҫтиәндәр бер-ике туп йәҙрәһе ярылыуҙан уҡ тырым-тырағай боролоу ягын ҡараны. Берҙәм хәрәкәт, ойошҡанлыҡ етмәне.

Шулай ҙа әле бер, әле икенсе танҡыр ябырылып һөжүм итә-сигенә торғас, өҙләкһеҙ һуғыш биш сәғәт буйы дауам итте. Әммә һис бер көтмәгәндә бер ағас манараның ишектәре асылып, ҡала эсендәге атлылар үҙҙәре сабыуылға сыҡты. Улар, Мейәстең һөҙәк яры, яланы буйына һибелеп килеүсе йәйәүлеләрҙе турап-киҫеп еңел ярып үтеп, атлы казактарға ташланды. Хорунжий Наум Невзоров отряды уратып алынды. Хорунжий үҙе ҡаты яраланып, ярым һушһыҙ көйө дошман ҡулына эләкте. Бәҙерғол бер отряды менән воевода һыбайлылары юлын артабан бүлде бүлеүен.

Ләкин тегеләр сафтарҙы тарҡатып, байтаҡ баштарҙы киҫеп-ҡыйып, хатта хорунжийҙың үҙен, йөҙҙән артыҡ казак, башҡорт яусыларын әсир алып, ҡалаға кире әйләнергә өлгөрҙө.

Баш атаман элекке позицияларға кире ҡайтырға бойороҡ биргәндә, ҡала тирәләй яланда һибелеп йөҙәрләгән кеше, ат мәйеттәре, ҡаты яралылар ятып ҡалды. Һуңғыларын төндә генә йыйып алдылар.

Дошманын тын алдырмаҫ өсөн иртәгеһен һөжүмде тағы ҡабатларға әҙерләнгәйне Иван Грязнов, Себер яғы баш командующийы генерал де Колонгтың ғәскәрҙәре Силәбегә яҡынлашыуын ишетеп, уйынан кире ҡайтты. Силәбе тирәһендә айырым дозор башҡорт отрядтарын ғына ҡалдырып, төп көсөн Сыбаркүл ҡәлғәһенә борҙо. Батша генералы, шул айырым отрядтар менән генә һуғышып, Силәбегә юл ярҙы.

Яңы көс килгәс, Силәбе гарнизоны ҡеүәтләнеп, тын алып ҡалды. Әммә еңеү шәрәфен татырға иртәрәк ине әле.

Пугачевтың баш атаманы маневрлы алышҡа күсте. Батшаның баш командующийы ла, ҡалаға ингәс, баш ҡалҡытмай ғына ятманы. Тик кем алға сығыр: батша генералымы, Пугачев полковнигымы?

Шуны төшөнә генерал: төп масса ҡайһы яҡҡа ығыр, еңеү шунда булыр. Ялпыға ялыныс төшөүе генә аяныс. Әммә дворян намыҫы түгел, түбәнселекле ялыныс өҫтөнөрәк әлегә. Генерал үҙенә Әбделғафар Мансур мулланы, Әбделмырҙа Мөслөмаев ахунды саҡыртып алып, башҡорт һәм мишәрҙәрҙең әбей батшаны яҡлап яуға сығыуҙарын үтенеп, провинцияға ебәрә. Ә ахун менән мулла буш йөрөп ҡайта, алдаҡсы әбей батшаны, уның генералын түгел, үҙҙәрен яҡлар ир батшаны үҙ күрә халыҡ. Өҫтәүенә, генералға иҫкәртеү ҙә яһайҙар: башын иҫән ҡалдырғыһы килһә, килгән юлынан тиҙерәк кире тайһын. Тегеләр үҙҙәренең саҡ имен-аман ҡотолоп ҡайтыуҙарын бик һөйләмәй, генералды нисек итеп мыҫҡыллауҙарын һәм янауҙарын бик әйтеп бөтмәйҙәр, әлбиттә. Әйттең — үҙең бөттөң.

Ә Пугачев полковнигы сапҡындары етеҙерәк елә. Петр Федорович батша исеменән ер-һыу, ирек вәғәҙә ителгән төркисә хаттарҙы башҡорт һәм мишәрҙәр, изге йәндәр килтергән өмөтлө хәбәр кеүек, шатланып ҡаршылай. Күптәр атҡа атлана. Бәҙергол үҙе бер нисә сотниги менән волостарға сығып, байтаҡ отряд туплап алып ҡайта.

Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ. Иван Грязнов халыҡтың улар яғында икәненә ҡыуанһа ла, де Колонг алдында үҙенсә күҙ буяу һәм күҙ яҙҙырыр өсөн, генералдың үҙенә лә мөрәжәғәт итә. «Генерал әфәнде, — тип яҙа баш атаман

бер хатында, — һеҙҙең Әбделғафар Мансуров мулла арҡыры ебәргән үтенес хаттарығыҙ беҙгә лә килеп юлыҡты. Беҙ ҙә һөйләшергә, өгөт-нәсихәт ҡылырға әҙер. Шуға күрә, һеҙҙең ниәткә ҡушылып, мин дә халыҡты йыйып һөйләшергә саҡырыуҙарымды тараттым. Улар йыйылғас ни әйтер, беҙ хәбәр бирербеҙ. Мин үҙем, генерал әфәнде, килешеү яғында. Бер дәүләт халҡы, христианы, сит диндәгеләре, ыҙғышмай-талашмай, ҡан ҡоймай, үҙ-ара килешеп татыулашыу хәйерле». Шулайыраҡ төтөн осорҙо Пугачев полковнигы. Һауалы ят бауыр генералға, бәлки, шауҡымы тейер. Теймәһә, әҙ генә булһа ла ваҡыт отоу хәжәт уға.

Шулай бер ҡайҙан өҫтәмә ярҙам ала алмай, де Колонг Силәбе ҡалаһында үрһәләнеп ғүмер уҙҙырһа, Иван Грязнов, үҙ яу-ярандары менән, тиҙ арала өҫтәмә көс туплап, ғинуарҙың егермеләрендә ғәскәрен йәнә провинция үҙәгенә походҡа ҡуҙғатты. Ҡара яу булып Силәбене тағы уратып алды ул. Ҡаланан алты саҡрым бире Пиршино ауылын ставка итте, уны нығытты, һөжүмгә әҙерләнде.

Баш атамандың башы бар — ваҡытты отто, әммә ашыҡманы. Ашыҡҡан ашҡа бешер — таһыллы танһығын ҡандырыр. Яу алдынан ҡалаға тағы хат ебәрҙе ул, һуғышһыҙнһеҙ бирелегеҙ, юҡҡа ҡан ҡойошмайыҡ тип. Хатты гарнизонға, ҡала халҡына уҡыһалар, улар һүҙһеҙ ҡушылыр ине лә бит, уны воевода менән генерал үҙҙәре генә алды ла йомдо. Генералға баш һалыу — үлемдән яманыраҡ. Тик шуныһы, генерал мундиры өсөн бүтәндәр ҡан ҡойорға тейеш. Ҡара халыҡ ҡаны уға йәлме ни.

Ҡәлгә тын. Яуап-хәбәр юҡ. Ваҡыт: Иван Грязнов бер нисә отрядын яуға күтәрә. Ҡаршыға де Колонг һалдаттары сыға. Ләкин полковник отрядтарын һуғышҡа индермәй Пиршиноға кире бора. Генералдыҡылар ҙа ҡалаға кире керә.

Полковниктың был тактик манevrы йыртҡысты һөскөтөп алыуға оҡшай. Һөскөт, бәлки, үҙе ташланыр. Үс, ҡанға һыуһаған генерал күп көттөрмәй, боласыларҙың көсө самалылыр, күрәһең, яу бирергә ҡурҡалыр тип, ғәскәрен яуға ташлай. Беренсе февралдә бөтә пехотаһы һәм кавалерияһы менән Пиршино ауылына ябырыла. Ә Пиршино, генерал көтмәгән, ҡаты сәтләүек булып сыға. Ауылдың тирә-яғы бик ныҡ нығытылған. Ҡалҡыулыҡтарға туптар ҡуйылған. Унда йәйәүлеләрҙе йырып үтерлек түгел. Флангыларға һыбайлылар йәшерелгән. Быларҙы ул һуғыш дауамында ғына белә.

Генерал, регуляр ғәскәрен сафҡа теҙеп, боласылар тупланған ауылды еңел генә иҙеп үтмәксе. Офицерҙары, һалдаттары мылтыҡтарын һоноп, ҡайҡайып, ер һелкетеп теҙе-

лешеп килә тора, атҡан туптарҙан ҡырылып тарҡала бара. Ҡавалерия атакаһы ла пугачевсылар һыбайлылары менән ҡылысҡа-ҡылыс килеп ярты юлда туҡтатыла. Полковниктың йәйәүле ғәскәре яуға инә. Өс-дүрт саҡрым асыҡ яланда ҡанлы алыш ҡыҙа. Ә генерал яңынан-яңы роталарын индерә. Яланда үле кәүҙәләр өйөлөп ҡала. Ай-һайлап атлылар саба.

Һул флангыла Бәҙерғол өс йөҙ һыбайлыһы менән дошман сабыуылына ҡаршы сыға. Ара бары бер саҡрымдар самаһы. Үҙәккә, ике ҡанатҡа йүнәлтә атлыларын. Үҙе, алдан иләү оранын ҡысҡырып, үҙәккә елә. Алда ялтыр-йолтор ҡылыстар ялтырашҡан һәм минут һайын ҙурая барып яҡынлашҡан һоро ташҡындан, ер һелкеткес ат тояҡтары дөбөрләүенән башҡаны күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә. Күҙен ҡан баҫҡан... Бына ҡапыл тап үҙ ҡаршыһында күбеккә батҡан атты, мундиры ялтыраған офицерҙы шәйләне. Улар ҡара-ҡаршы икеһе алдараҡ елә икән. Командирҙарылыр, моғайын. Өлөшөңә тейгән көмөшөңмө?.. Ҡапыл килеп төкәшкәндәй, аттары үрәпсеп китеүе булды, Бәҙерғол тегенең һуҙылган ҡылысын сатраш һыҙырып һелтәп тә ебәрҙе. Ҡылыстың беләккә ҡытырлап үтеүен ҡулы менән тойҙо. Аһылдап йөҙө яман һытылған кәүҙә ҡолап төшкәндә, йәнәшенән бүтәндәрҙең һөрәнләп үткәнен иҫләне. Абайларға форсат ҡалманы, алдында яңы шәүлә пәйҙа булды. Аты апсайыу ыңғайына ҡаршынан һелтәнгән ҡылыс малҡайының муйын һыртына килеп тә батты. Үҙе һелтәргә форсаты ла, яйы ла юҡ мәлдә ҡурсылап һонған ҡылысын тегенең ҡултыҡ аҫты тәңгәленә ажарланып тығып өлгөрҙө. Аты менән үҙе бергә тәгәрәгәндә, батҡан ҡылысына ҡайырылып, йәнәшенә дошман кәүҙәһе ауҙы. Үҙе йәһәт ҡалҡынған арала, ауған яралы атының шарлап ҡаны атылғанын, сыйнап кешнәүен, тыбырсынып ыҙаланыуын шәйләне. Тороуына, ни ғәжәп, ярҙамсы егете, ауылдашы эргәлә. Ул алыш майҙанын атыние менән ҡаплап, башлығын ҡурсығандай тойолдо. Уғаса икенсе берәү Бәҙерғолға ат килтереп еткерҙе.

Өҙәңгегә баҫып етеҙ атланғас, тирә-йүнен байҡаһа, әллә күпме ат, кеше кәүҙәләре ауып ята. Үлә алмай ятҡан ҡаты яралы аттар ушҡыра, йәрәхәтлеләр ыңғырашҡан иңрәүҙәр килә. Алдараҡ ҡылыста айҡаш, киҫеш дауам итә.

— Иҙрис сотник отрядын уң ҡулдан ярҙамга! — тип бойорҙо Бәҙерғол, тураш барған үҙәкте абайлап. Һулдағылар ары киткәйне.

Иҙрис һыбайлылары күренде. Ике яугиры менән Бәҙерғол улар ҡаршыһына сапты. Дошман кавалерияһын үткәрмәҫкә, әле турашҡандарын һырт бирҙертергә ине.

Һугыш дүрт сәғәт барҙы. Ләкин генерал ауылды алыу

түгел, хәтәр ҡаҡлығып кире сигенергә мәжбүр булды. Фәҡәт уң флангыла ғына кавалерияһы, йәйәүлеләр һуғышҡан Мейәс һыуы буйында пугачевсыларҙың бер өлөшөн ҡамап алып, йөҙ һикһәнләп кешене әсир итергә өлгәште. Ярты көн үлемесле һуғыштан бар табыш шул булды дошманға.

Бәҙерғол һыбайлылары генерал кавалерияһы атакаһын кире ҡағып, күбеһен тураи һирт бирҙерһәләр ҙә, уң яҡ ҡанаттағы ҡаҡшау, байтаҡтарҙың илеп төшөүе үкенесле. Арала таныштары ла бар ине уның.

Үҙ һыбайлылары былай ажар алышты. Ҡаушап ҡалыусы, ҡойроҡ күрһәтеүсе тойолманы. Бәҙерғол үҙе лә ҡылыс һуғышының саялығын татыны, Иҙрис отрядын ваҡытында алышҡа индереп, сабыуылды үҙ файҙаһына борорга өлгәште. Тимәк, еңергә була регуляр генерал ғәскәрен дә. Инде Силәбене алмай ҡуймаҫҡа ине.

Ҡаты уйға тарыны генерал: еңел еңеү түгел, тағы шундай бер яу булһа, үҙең тамам еңелеп хур булырһың. Мыштырлаһаң, ҡамап юҡ итеүҙәре ихтимал. Былай ҡалыу ярамаҫ. Тиҙерәк Силәбене ташлап китергә. Себер линияһына һыйынырға.

Шулай 4 февралдә йәһәт сигенергә, Силәбене ҡалдырырға приказ бирҙе генерал де Колонг. Бар ғәскәре, провинция канцелярияһы, чиновниктары менән. Уларга халыҡ үсенән ҡоттары осҡан сауҙагәрҙәр, төрлө эйәрсендәр эйәрҙе.

Ҡаланан ҡасып сыҡҡан бер завод крәҫтиәне батша ғәскәрҙәренең иртән Силәбене ташлап китәсәген Грязновҡа килтереп еткерҙе. Полковник шунда уҡ яусыларын аяҡҡа баҫтырҙы ла Силәбене уратып та алды. Де Колонгка хәҙер ҡаты алыш менән сигенергә, юл ярырга, күп кешеләрен яу ҡырында ҡалдырып китергә тура килде.

Ҡанһыраған дошман, яралы йыртҡыс кеүек, тағы бер яманлыҡ ҡылды. Генерал үткән яуҙа әсир алынган 180 пугачевсыны аҫтырып үлтертте. Завод крәҫтиәненә Грязнов лагерына ҡасып китергә ярҙам итешкән алты кеше шулай уҡ дар ағасында йән бирҙе.

Силәбе пугачевсылар ҡулына күсте. Әммә вәхшәтлекте күреп ярһыған һугышсыларҙың ҙур ғына отрядтары ҡасып киткән генерал ғәскәре артынан төштө. Бигерәк тә башҡорттар дарға аҫылган яуҙаштарының ҡонон алыу менән янdылар. Де Колонг ғәскәренә бер нисә тапҡыр һөжүм иттеләр. Әле теге юлда, әле был күл буйында ҡанлы алыштар булып торҙо. Батша баш командующийының һирт һалған ғәскәре халҡы ҡасып-йәшеренеп буш ҡалған ауылдар аша аслы-туҡлы сигенергә, күптәре юлда туңып үлергә дусар ителде. Генералдың Екатеринбургка барыр юлы бү-

ленеп, Себергә, Шадринскиға табан мәсхәрәле ҡасыр яйы ғына ҡалды. Унда ла, һыртынан ҡайыҙлай-ҡайыҙлай ашыҡтырып ҡыуылған мал өйөрө шикелле, ҡалдыҡ ғәскәре әленән-әле туҡмала-ҡайыҙлана оҙатылды. 1774 йылдың февраль-март айҙарында казак атлылары байтаҡ биҫтәләрҙе Мейәс, Тишә, Ҡалмаҡ ҡолғаләрен яулап алды. Себергә, Далмат ҡолғаһенә, Шадринскиға юл асылды.

Әммә Себерҙән де Ҡолонгка ярҙамға майор Жолобов командаһы ашыҡты. Ул каратель команда юлда осраған боласыларҙы, ҡоралһыҙ кешеләрҙе рәхимһеҙ ҡырып, туҙҙырып үтте. Март башында де Ҡолонг менән Жолобов командалары ҡушылып, 9 мартта Шадринскиҙан алыҫ түгел Үксән биҫтәһе янында пугачевсылар менән ҡаты һуғышҡа инделәр. Ләкин Пугачев яҡлылар ни тиклем йән аямай һуғышһалар ҙа, регуляр батша ғәскәренән еңелделәр. Күп әсир, туп, ҡорал дошман ҡулына эләкте. Батша карателдәре боласыларҙы аяуһыҙ ҡыра-язалай башланы. Тарҡатылған отрядтар берәм-һәрәм Силәбегә табан сигенде. Оло Ҡатай, Тишә биҫтәһе тирәләрендә Ҡоломбәт Аҫылбаев, Баязит Мәгсүмов старшина отрядтары, эҙәрлекләп килеүсе ғәскәр юлын киҫеп, ҡанлы алыштарға инде.

Был саҡта полковник Иван Грязнов үҙе Силәбелә төп ғәскәрен тәртипкә килтереү, тулыландырыу эше менән мәшғүл ине. Уға бүтән атамандар менән бергә Бәҙерғол Юнаев старшина туранан-тура ярҙамлашты. Бәҙерғол үҙе ике мең кешелек башҡорт һыбайлыларын тупланы һәм шуға башлыҡ итеп тәғәйенләнде. Ҡалған өс мең ғәскәр казак, завод крәҫтиәндәренән ғибарәт ине.

Ырымбур янында 1774 йылдың мартында Емельян Пугачевтың үҙенең төп көсөн ҡыйратҡан, төньяҡта Екатеринбург тирәһендә Иван Белобородов отрядтарын, Өфө янында Зарубин-Чика гәскәрен тар-мар иткән батша регуляр ғәскәрҙәре апрель башында төрлө яҡлап Башҡортостан еренә, Исәт провинцияһы тарафына ябырылды. Бөтә батша ғәскәренең баш командующийы Александр Бибиков Гагрин секунд-майор отрядын төньяҡтан Исәт провинцияһына ебәрҙе. Ул отряд Ҡыштым, Ҡәҫле заводтарына бәреп инде, Силәбегә юл ярҙы. Силәбе тирәһендә яңынан һуғыш ҡабынып китте. Ләкин Иван Грязнов ныҡ ҡаҡшатылған яусыларын ике яҡтан — алдан Гагрин, арттан де Ҡолонг отрядтарынан — ҡамалыуҙан ҡурҡып, төп көсөн Сыбаркүл менән Ҡуййылға ҡолғаләренә сигендерҙе. Бәҙерғол Юнаевтың һыбайлылары ла, һуғыша-һуғыша, артҡы рубеждарға күсте.

Исәт провинцияһында 1774 йылдың башында өс айға һуҙылған һуғыштың тәүге мөһим этабы шулай тамамланды.

4

Өнөмө-төшөмө, йылы түшәктә ҡатыны ҡуйынында ята. Уныһы, әсәһе түшенә моронон төрткән сабыйҙай, башы менән ире күкрәгенә һыйынып йоҡлаған. Бар тәне менән уға һарылған. Яланғас йомшаҡ аҡ беләгенә ҡара толом сәстәре һибелеп төшкән. Тумалаҡ имсәкәйҙәре тиртеп тора. Бәпкә йөндәре беленеп торған күперенке иренендә, яҡты сырайында ниндәйҙер ҡәнәғәтлек, рәхәтлек билдәләре һирпелә кеүек. Бәҙерғол үҙе лә танһыҡтары ҡанып талсыҡҡан тәненең рәхәт иҙрәүен тоя.

Ғүмер шулай бары татлы мәлдәрҙән торһа икән. Йәшәүҙең йәмен, ләззәтен татыуға ни етә. Үҙеңде, һөйгәнеңде киләндереү ҡалай ҡыуаныс. Тән рәхәте, йән хозуры бит...

Быға са Бәҙиғолъямалына, ғаиләһенә ниндәй генә ҡыуаныс килтерә алды һуң? Күберәк айырылышыу һағыштары, һағайып көтөү хафалары, ирле көйө ирһеҙ нужа ҡыуыу яфалары төштө түгелме? Ул ғынамы, боласы ире арҡаһында донъялары боларып, йорт-еренән яҙып, ағасынан өҙөлгән япраҡ шикелле, утлы ел-дауылдан ҡубарылып, ҡайҙа морон төртөргә, йән аçырарға белмәй ҡаңғырған ҡара яҙмышҡа уҡ дусар бит.

Силәбенән сыҡҡас, Бәҙерғол йөрәк өшөткөс хәбәр ишетте: Гагрин каратель командаһы Ҡәçле, Ҡыштым заводтарын ҡайтарып алғас, болаға ҡатнашыусы шул тирәләге ауылдарҙы ҡырып-яндырып үткән, күп кешеләрҙе язалатҡан. Бәҙерғолдоң йорт нигеҙендә лә көл-күмер генә ятып ҡалған. Ғаиләһе ғәйеп. Ағаһы ҡайҙалыр оҙатылған.

Поход старшинаһы яман ярһынып бар отрядын Мәкәтегә барорға булғанда, баш атаман тыйҙы. Көстө тарҡатыуҙа, башты тупҡа бороуҙа мәғәнә юҡ ине. Аҙаҡ шуны ла әйттеләр: хафаланыу артыҡ — ғаиләң иçән-һау, тыныс ерҙә, ышаныслы ҡулдарҙа.

Мең рәхмәт, миһырбанлы кешеләр ғаиләһен үлемдән аралап ҡалған. Хәстәрен күреп, тыныс урман-тау араһына атаһы йортона илтешкән.

Бына хәҙер үҙе лә — ҡайныһы йортонда, мең ғазап күргән бисәһе ҡуйынында. Хәләл ефете, гүйә, бар ыҙа-яфаларҙан ҡасып, ҡурсыу өмөт итеп, иренә тағы нығыраҡ һыйынған, ҡулдары менән һарылған.

Ысындан да тыныс ер. Һил яҡ. Өй эсе, тирә-йүн тып-тын. Әйтерһең, бөтә донъя һил. Ана, яҙғы таң һарыһы тәҙрәгә ҡунған. Ишек төбөндә сыуал артында быҙау мышылдағаны ишетелеп ҡала. Ара-тирә ел ниҙелер ҡыштырлатып ҡуя. Ғәжәп, былары ла бары тынлыҡты белгертеп ҡуйыртыша һымаҡ.

Ә ниңә һуң шулай бөтә ғаләм тыныс, имен-аман түгел? Ҡайҙалыр туптар шартлай, мылтыҡ атыла. Мәлһеҙ гүмерҙәр өҙөлә. Әҙәмдәр иңрәй. Хәүеф--хәтәр күп. Берәү «власть» тип лаф ора, күптәре «ирек» тип баш һала. Алама ҡылығы, нәфсеһеме әллә ҡоторта бәндәне?

Ирекка ирекмәҫ баштар ҙа аяулы. Баш ҡауын түгел ҡылыстарҙан тәгәрәтергә. Аҡыл менән тыныс хәл иткәндә һуң барыһын...

Уйланмаһаң ғына, донъя вайран. Бына әле ҡалай тыныс. Юрған аҫты йылы. Ҡатының эргәңдә, балаларың өйҙә. Тик ил ҡубарылған заманда йәне бар әҙәмгә аулаҡ яҡта башыңды ҡасырып, бисәңдең итәге аҫтына йәшеренеп тыныс йәшәп буламы икән? Ҡалтырай-ҡалтырай йән аҫрап булалыр, бәлки. Ундай йәндең булғанынан булмағаны артыҡ.

Ҡайҙалыр алыҫ йылы яҡтарҙа дәү бер дөйәғош йәшәй, тиме. Үҙе ҡош, үҙе осмай икән. Ҡурҡыныс тыуһа, әллә ни ҡасып-нитеп булашмай, тота ла башын ҡомға тыға имеш. Ҡасты инде, йәнәһе. Хәҙер хәүефте күрмәй ҙә, белмәй ҙә. Һерәйеп торған оҙон тороҡ кәүҙәне әллә ни эшләтмәгәйҙәре. Баш йәшерен. Шул дөйәғошондай, үҙ башын йәшерергә булашыусылар барҙыр ул. Ил-йорт хәүеф-хәтәр эсендә саҡта, ундай аяулы баштар ҙа иҫән-һау ҡала ала микән? Ҡеҫәрткеләй, йәнә ҡойроғоңдо өҙөп ҡасмағанда.

Бәғзелә — йән, бәғзелә — ил ҡайғыһы. Йәнмен тигән йәндең дә үҙ йүне булыр. Ил ирке менән бергә йән ирке лә бар бит. Бына әле бер кискә йәнең тыныс кеүек. Ил, донъя хәстәре, гүйә, тышта, урман-тауҙар аръяғында төҫлө. Гүйә, ғаиләңдән башҡа ғәм юҡ. Шулай нисек булыр ине икән? Юҡ, ғәмһеҙгә ғаилә лә һаңһыҙ. Ғаиләне хәстәрләү ил-йорт хәстәре эсендә. Ил-йортоң имен булһа, ғаиләң имен, хәүефтә булһа, ғаиләң дә хәүефтә. Өй-ҡаралты табылыр, баш һау булһын. Иҫәнлегебеҙгә һөйөнәйек.

Үҙ иркебеҙ ҙә ил-йорт иркенә бәйле. Илгә күпмелер иркенлек килмәйенсә, йәнгә ирек, тыныслыҡ юҡ. Шулай, йөрәм, ил иркен яулашмай, йән иркен табып булмай. Беҙҙең йән ғазабыбыҙ ҙа, күңел йыуанысыбыҙ ҙа шунда. Ил яралары уңалһа, яйлап күңел яралары ла бөтәшер. Сабыр, түҙем булайыҡ.

Таңға табан иҙрәп йоҡлаған Бәҙиғолъямалына һаҡ ҡына күҙ һала-һала, Бәҙерғол шундай һораулы уйҙарға ла төшөп киткеләне. Ул күп ыҙалар күргән ғаиләһе, бисәһе алдында, гүйә, өнһөҙ ғәфү үтенеү, һүҙһеҙ тәүбә итеү тойғоһон кисерә ине. Ята-ята, үҙе ниҙер эсенә төшөрөп, йылмайыбыраҡ та ҡуйҙы: һағындырған хәләл ефетең түшә-

гендә төш тә татлы имеш. Ни арала күрҙе уны. Әле таңда ғына, ахры — бар сәйерлеге менән күҙ алдында.

Төш тиһәң дә төш инде: батша-баярын барын да ҡыйратып ташлағандар, имеш. Мәскәүҙе алғандар. Ололап Петр Федоровичты тәхеткә күтәргәндәр. Теге Грановитая палатала, әбей батша ултырған урында. Тәхет тә, халыҡ батшаһының кейеме лә шау алтын-көмөш. Күҙ яуын алмалы. Депутат булып барған сағында теге буҫтау япмалы оҙон өҫтәл артында графтар, дворяндар, бүтән оло түрәләр урынында Белобородов, Зарубин-Чика, Иван Грязнов, Кинйә Арыҫланов, Салауат Юлаев, тағы Бәҙерғол үҙе белеп бөтмәгән бүтән яу-ярандар, бик бөхтә мундирҙар кейеп, теҙелешеп ултырған. Араларында Бәҙерғол да бар. Петр батша «ура» тауыштары аҫтында тәхетенән тороп, шар башлы алтын таяғын тотоп, «үҙебеҙҙең көн килде, һәммәгеҙ ҙә хөр халайыҡ, ерҙә кейектәр кеүек, һыуҙа балыҡтар шикелле, иректә йәшәгеҙ!» тип әйтеүе булғайны, ни ҡөҙрәт, бөтә тирә-йүн ғәжәйеп матурланып китмәһенме. Һөт йылғалары ағып тора, кәүсәр шишмәләре сыға, ағас тулы емеш. Ҡоштар һайраша. Әллә ниндәй тауис, тутый ҡоштар күп. Хатта хур ҡыҙҙарымы осоп йөрөй. Хас ожмах инде. Халыҡ рәхәтләнеп кәйеф-сафа һөрә. Ҡайҙа ҡарама — йыр ҙа бейеү, уйын да көлкө. Ашар ниғмәттәрҙе ҡоштар суҡыштарына элеп кенә ташый. Ҡабып ҡына өлгөр теләгәнен.

Тағы шуныһы ғәжәп: урман, ялан тулы януар. Ирегешеп йөрөй. Бүре менән һарыҡ, арыҫлан менән ҡолан, төлкө менән тауыҡ дуҫ. Йыртҡыслыҡ тигәндең әҫәре лә юҡ, имеш. Барыһы татыу, барыһы хуш. Эш-көш тә юҡ. Аҙыҡ-түлекте шул аҡыллы татыу януарҙар килтерә. Әллә ҡайҙа бер алыҫ ерҙә генә элекке графтарҙы, заводчиктарҙы, баярҙарҙы ҡара эш эшләргә хөкөм иткәндәр, имеш, тиҙәр тиеүен. Улар ҙа эшләһә эшләй, эшләмәһә юҡ. Ҡараған, күҙәткән әҙәм булмағас, уларға ла хөрлөк, ти. Шундай хозур заманалар килгән, имеш.

Һәммәһе ал да гөл, ә Бәҙерғолдоң эсе боша. Бер мәл башын ҡалҡытып ҡараһа, ни гиллә, алдында йәнә алтын-көмөш кейемдә император Петр Өсөнсө баҫып тора. Үҙе шул уҡ элекке казакса һаҡал-мыйыҡлы, үҙе йылмая:

— Базаргул, мин һине уң ҡулым — баш вәзирем итһәм, нишләр инең? — ти.

Бәҙерғол әйтә була:

— Олуғ батшам, өҙлөкһөҙ кәйеф-сафа ҡороу ялҡытты. Һәр кемгә теләгән эшен, яратҡан һөнәрен бирер инем. Күңел ҡәнәғәт тә, ә эшкә ҡул ҡысый.

— Ә беҙ рәхәтлек, ожмах өмөт иттек. Шул моратҡа етмәнекме ни?

— Үҙебеҙ тапҡан түгел, күктән иңгән ожмах шул ул. Шуға ҡәҙере лә, ҡыҙығы ла, фәһеме лә юҡ.

— Улайһа, уйла, баш вәзирем. Тәҡдимдәреңде көтәм... Уйындағы мәллә төшөндә? Ә-ә... Иван Грязнов та, Силәбене алғас, һине баш атаман итеп ҡуйһам, нишләрһең, тине түгелме һуң? Ана ҡайҙан икән...

Ләкин өн татлы төш түгел. Шуның кирәһе ине хәсрәтле, хәстәрле, боларыҡ ҡырыҫ өн. Ана, бары биш көн турында дошмандан ҡасып, юл яҙҙырып, ике тәүлек ял итмәй, ҡарлы, урман-таулы күпме ауыр юл үттеләр. Аттары лапшып, үҙҙәре тамам йонсоп бөттө. Аптырағас, йыйылыр урынын, көнөн тәғәйенләп, ҡалған һыбайлыларын яҡынырaҡ булһа үҙ ауылдарына йәки ышаныслы төбәктәргә таратырға мәжбүр булды. Бәҙерғол иң яҡын егерме һыбайлыһы менән генә ҡайныһының Урал төпкөлөндәге ауылына юл тартты.

Ҡайныһы өйҙә ине. Өлкән, тәжрибәле, ишле ғаиләле старшина, донъяларҙың боларыуынан, балаларҙан мөмкин хәтле ҡырҙа ҡалырға тырышып, урман-тау араһындағы иләүен төрлө яҡтан иҫкән хәтәр елдәрҙән үҙенсә ҡурсырға булашып ятҡан көнө икән. Күцеле менән яуға күтәрелгән халыҡ яғында булһа ла, губернатор указдарын тотоп, бер кескәй отряд ойоштороп оҙатҡан, үҙ ҡарамағындағы байтаҡ ир-егеттәре пугачевсыларға ыҡҡан. Теге отряды ла Грязнов командаһына ҡушылған, тиҙәр.

Кейәүен һәйбәт ҡаршылап, ғаиләһен үҙенә йолоп алып, боласыларға былай теләктәшлек белдерһә лә, «ҡабағандан ҡаптырма, тибәгәндән типтермә», тип үҙенә һаман ике тарафтан да ел-дауыл бик тейҙертмәҫкә ниәте ҡайныһының. Әйтә биреп ҡуйыуынса, уның кейәүе бик тә төшөнөп һәм хуплап бөтмәгән үҙ тактик иҫәп-хисаптары ла юҡ түгел. Шуғамы икән бына килгәне бирле старшина ҡайныһын бөтә Ҡатай волосын яуға күтәрешергә өндәүе, үҙенең дә асыҡтан-асыҡ пугачевсыларға ҡушылырын теләүе көткән һөҙөмтәне бирмәне. Ҡарт үҙ һүҙендә ҡалды. Әммә үҙе артыҡ ҡыҫылмаҫ, күбеһен белмәмеш-күрмәмеш булып ҡыланһа ла, кейәүенә ярҙам итеүҙән, ирек ҡуйыуҙан баш тартманы.

Бәҙерғол алдында торған бурыс һис еңелдән түгел. Ошо төбәктәрҙәге ҡатай, барын-табын ырыуы башҡорттарын, мишәрҙәрҙе яуға күтәреү кәрәк. Яңы отрядтар туплап, тиҙерәк де Колонг, Гагрин каратель командаларының юлын быуыу шарт. Унан яңы һөжүм таярларға. Полковник Грязновтың приказы шундай.

Был яҡтарҙа ғәскәр йыйыу ифрат ҡыйын. Өҫтәүенә, тау-таш араларында яуҙан ҡасҡан, ауыл, юл баҫып йөрөгән ҡасҡылар бар. Иң ауыры — батша яҡлы мишәр старши-

наларын, башҡорт тархандарын һындырыу. Халыҡты шулар ҡотҡоһонан аралау.

Иртән ҡайны-ҡәйнәләре, бар ғаиләләре менән төрләһән һөйләшә-хәстәрләшә сәй эстеләр ҙә Бәҙерғол егерме һыбайлыһын дүрт төркөмгә бүлеп — үҙе береһе менән — Урал эсенә дүрт тарафҡа таралдылар.

Ҡайныһы әйткәне раҫ булып сыҡты, яҡын-тирә иләүҙәргә Ырымбурҙан — кенәз Щербатовтың, Өфө яғынан — полковник Михельсондың, Силәбенән генерал де Колонгтың батша исеменән башҡорттарға, мишәрҙәргә яҙған махсус яңы хаттары һәр ауылға тиерлек килеп еткән. Ул яҙыуҙар Петр Федорович батша тигәнде ялғансы Пугачев, Дон казагы, тәги тип бара. Уға алданып эйәргәндәрҙе кире дүнергә, хөкүмәткә тоғро булырға өндәй, ярлыҡау вәғәҙә итә. Быға хәҙер күп халыҡ аптырашып ҡалған. Элек яуға сыҡҡандар ҙа, Силәбе тирәһендә еңелгәндән һуң таралышып ,хәҙер йән һаҡла уөсөн баш ороу, ярлыҡау табыу яйын ҡайғырта. Икеләнеүселәр күп.

Шул хәлдә элекке депутат Бәҙерғол йәнә һүҙ маһирлығын, бар тәжрибәһен, аҡыл ҡеүәһен эшкә екте. Икеләнеүселәрҙең йөрәгенә үтерлек, инандырырлыҡ һүҙҙәр, дәлилдәр тапты. Петр Федорович батша манифесын сатнатып уҡып ишеттерҙе. Башҡорттарға вәғәҙә иткән ер-һыу, ирек менән ҡомарҙарын уятты. Элекке батшалар, әбей батша күргәҙгән ыҙа-яфаларҙы, ҡыҫымдарҙы иҫтәренә ҡат-ҡат төшөрҙө.

Ҡайҙа ла ул ир һыналмаҡ бер бурыс икән, «үҙебеҙ һайлаган депутат, арҙаҡлы старшина, дан батыр, юҡты һөйләмәҫ, хаталанмаҫ», тип күптәр былар яғына ауҙы, һүҙе үтемгә әйләнде. Уның тирәһенә шулай байтаҡ ир-егеттәр ылыҡты.

Һынылышҡа сәбәпсе бер ваҡиға булды. Ул ғәййәр ираттарҙы ғына түгел, Бәҙерғолдоң үҙен дә тетрәтте.

Барын-табын волосына сыҡҡанда, үҙ янында ҡалдырған илле һыбайлыһы менән ул Григорий Туманов отрядын тап итте. Ул да Иван Грязнов командаһына ғәскәр йыйып йөрөй ине. Шулай юлда осрашып, аҙаҡ дуҫлашып китте Бәҙерғол Пугачев полковниктарының ҡыйыу бер уҙаманы менән.

Тетрәткәне шул ине: Туманов үҙе менән яман язаланған бер башҡортто алып сыҡҡан. Урта буйлы, утыҙ йәштәр тирәһендәге был башҡорттоң танауы, ҡолаҡтары киҫек: танау урынындағы йәрәхәт-яза эҙҙәре өңрәйеп тора — ҡарауы имәнес. Уң ҡулының бармаҡтарын сабып өҙгәндәр. Уныһы тупыс һерәйеп ҡатҡан. Уны Ҡарағайлы крепосының

коменданты полковник Фок тотоп язалатҡан икән. Ә Үрге Яйыҡ дистанцияһы коменданты Ступишин, бүтәндәрҙең ҡотон алыр өсөн ғибрәт итеп, янаулы хат менән бергә волостарға оҙатҡан булған.

Бәҙерғол хәлен белмәк, һөйләшмәк булып шул башҡорт эргәһенә килде. Йөҙөн һирәк һаҡал-мыйыҡ баҫҡан. Күҙҙәре һағайып асыулы ҡарай. Эйәге тим-тим ҡалтыранып, биттәре тартышып ҡуя. Яуап бирергә теләгәндәй ауыҙын аса — теле лә киҫек — бары иңрәп өн килә. Тамаҡ өнө. Ҡыҙғанып аптырауынан тетрәнеп китте Бәҙерғол. Вәхшилектең сигенә сығып, әҙәмде шул саҡлым да язаларға, мәсхәрәләргә мөмкинме? Эт йәнендәй ҙә күрмәйҙәр бит былар әҙәм балаһын, дворян исемен йөрөткән аҡһөйәк вәхшиҙәр.

Григорий Туманов менән Бәҙерғол Юнаев Барын-табын волосы үҙәгенә ҡорал тота алыр ир-аттарҙы йыйҙырҙылар. Былай халыҡ — ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, бала-саға ла күп ине. Григорий, атҡа атланған көйө, ҙур бер ҡағыҙ алып, халыҡҡа ҡарап, башҡортса өндәште:

— Башҡорт туғандар, тыңлағыҙ, мин һеҙгә Үрге Яйыҡ коменданты яуыз Ступишин яҙған хатты уҡыйым. Русса яҙған: «Башкирцы! Ведомо мне, что меж вами всякая дурость и шатание. И вы ждете, что к вам придет от Оренбурга с великою силою оный вор и самозванец Емелька, который, будучи простым казаком и самого подлого рода, дерзнул назвать себя государем Петром III и якобы великие милости обещает. Не верьте и никакой милости от вора не ждите. Емелька будет пойман и казнен. Да все те, кто его слушает, также не жди себе пощади, все также казнены будут.» — Туманов шул ергә еткәс, туҡтап Бәҙерғолға әйтте: — Базаргул, браток, мин уҡығанды башҡортсаға әйләндереп аңлата бар әле.

Русса яҙыуҙы йүнләп аңламаған халыҡ Бәҙерғолға төбәлде.

— Үрге Яйыҡ коменданты Ступишин шулай яҙған, — тип үҙенсә һөйләп китте. — Башҡорттар, һеҙ Ырымбур яғынан килгән Емелька тигән кешегә ышанмағыҙ, ти. Ул, йәнәһе, Петр третий батша түгел, ә ябай бер Яйыҡ казагы, бур, дағи имеш. Шул кеше һеҙгә вәғәҙәләр бирә, һеҙ ышанмағыҙ, ти, яуыз комендант. Емельканы тоторбоҙ, язаларбыҙ тимәксе. Шуның шикелле һеҙгә лә аяу булмаҫ, яза алырһығыҙ тип янай мәлғүн.

Оҙон хатты шулай Туманов, бүлә-бүлә, русса уҡый барҙы, Юнаев башҡортсаға ауҙарып аңлата барҙы:

— Бур әҙәм казакка эйәрһәгеҙ, берегеҙҙе лә аямам, аяғығыҙҙан, ҡабырғаларығыҙҙан аҫтырып язалап үлтертер-

мен, ти. Ауылдарығыҙҙы үртәтермен, мал-тыуарығыҙҙы ҡырырмын, ти ҡәбәхәт.

Шул саҡ халыҡ гөж-шау итеп ҡуя.

— Бына ғибрәт өсөн танау-ҡолаҡтарын, бармаҡтарын киҫкеләп, бер башҡортоғоҙҙо арағыҙға ебәрәм, ти йәлләт комендант, ғибрәт булһын барығыҙға ла. Һеҙҙе лә шундай яза көтөр, ти. Йәлләү булмаҫ. Ишетегеҙ. Ҡурҡығыҙ. Мин батша кешеһе, военный, һеҙҙе нишләтергә белермен, Аяу көтмәгеҙ, ти.

Шул саҡ әлеге язаланған башҡортто алғараҡ сығарып, атҡа атландырҙылар. Ул танауы урынында өңрәйеп торған яраһы ла бөтәшеп бөтмәгән бите, киҫек ҡолаҡтары менән халыҡҡа күтәрелеп ҡарарға ла яйһыҙланып, меҫкенкәй, тупыҫ ҡулы менән танау урынын ҡаплап булаша, күҙенән сыбашҡып йәше аға.

Халыҡ араһында ҡыҙғанышып аһ-уһ, гөж килеп алған арала, бер ҡалын кәүҙәле әҙәм сығып, Бәҙерғол ҡатарына баҫты:

— Йәмәғәт, мине беләһегеҙ, — тине лә ситтән килеүселәрҙе таныштырырға теләгәндәй, — Дәүләтбай Ҡулкара сотникмын, — тип өҫтәне. — Беҙҙең аранан яу сабыусылар булды. Ҡасып-боҫоп йәшәгәндәр ҙә бар. Батша яҡлы булып булашыусылары ла. Мин егеттәрем менән батшаға баш орорға таярланғайным. Эйелгән башты ҡылыс сапмаҫ тигәндәй, ярлыҡау көтөп. Яңы батшаны күргән-белгән юҡ. Уныһына ла ышанып етмәгәйнем, төрлө һүҙ йөрөгәс.

Бына хәҙер ысынлап та ғибрәт күрҙек. Яман язаланған үҙ башҡортобоҙҙо. Йүнле әҙәм эткә лә шунса этлек ҡылмай. Батша түрәләренә беҙ эт урынына ла тормайбыҙҙыр инде. Шундай залимдарҙан мәрхәмәт көтөү ҡыйын. Ана ҡайһылай янай бит комендант түрә, йән киҫәр ғазраил. Ант итеп әйтә алам, язаланған, баштарын һалған ырыуҙаштарыбыҙҙың ҡонон алырға. Батшамы-кемме беҙҙе яҡлап яу асҡан, үҙенә саҡырған кешегә ҡушылырға тейеш ир намыҫы, йөрәге бар ир-егет. Мин сотнямды атҡа атланырға саҡырам.

— Әҙербеҙ, Дәүләтбай сотник! — тигән тауыштар яңғыраны.

Бәҙерғол Пугачев манифесын ҡысҡырып уҡыны. Уны хуплап ҡеүәтләй-ҡеүәтләй тыңланылар. Мәслихәт итеп ике аҡһаҡал һүҙ тотто. Ике йөҙләп һыбайлы походҡа яҙылды.

Ҡанһыҙ полковник Ступишиндың язалатып халыҡ араһына ебәртелгән башҡорто ғибрәт урынына һабаҡ булып, икеләнеүселәрҙең дә өмөтөн ҡаҡшатып, пугачевсыларға

ылығыуын тиҙләтте. Аңһыҙ туң полковниктың яҙаһы, яман янауы үҙенә, батшалыҡҡа төбәлер ҡазаға әйләнде.

Был үҙәк өҙгөс ҡанһыҙлыҡ, вәхшәт Бәҙерғолдоң ҡайныһы Сөләймән Ҡармышаҡов старшинаның да сабыр йөрәген, бар инанысын, иманын ҡубарып ташлап, үҙе ғүмер буйы хеҙмәт иткән батшалыҡҡа асыҡтан-асыҡ ҡаршы сығырға этәргес бирҙе. Арҙаҡлы старшина йән аянысынан бөтә иләүенә оран һалды, атҡа атланыр бар ир заттары поход әҙерләнде. Бәҙерғол хөрмәтле ҡайныһын өс йөҙ һыбайлыһына баш итеп, Пугачевҡа ҡушылырға Иҙел башы ҡарай оҙатты.

Үҙе бер волостан икенсеһенә сыҡты. Көрәшселәр сафы өҫтәлгәндән өҫтәлде. Тик ҡайһы бер һатлыҡ тархан, мишәр старшиналары баш бирмәҫкә итһәләр ҙә, улары ла ҡойроҡ ҡыҫты йәки буй һалды барыбер.

5

Ил ауыҙын ҡаплап булмай: тиҙ арала төрлө хәбәрҙәр таралды. Имеш, Петр батша исемләнмеш кешенең ғәскәре Ырымбур янында тамам ҡыйратылған. Күп яу-яраҡдары әсир төшкән, ти. Емельян Пугачев үҙе бер нисә атаманы менән ҡайҙалыр — Кубань яғынамы, ҡыҙылбаштарғамы ҡасып киткән икән. Болала ҡатнашҡандарҙы хәҙер эҙләү, эҙәрләү бара, ти. Аяу, ярлыҡау юҡ, имеш. Бәғзеләре шул батша тигән әҙәмде Көньяҡ Уралда яңы ғәскәр йыя икән, тиҙәр. Дон казактарынан ярҙам алырға киткән тип тә һөйләйҙәр.

Бәҙерғол бындай берсә шомло, берсә серле имеш-мимештәрҙе күп ишетте. Шикләнә-икеләнә ҡуйған саҡтары ла булманы түгел. Әммә күңеленә шом үрләтмәне. Ул — ил кешеһе, ҡулында приказ, алдында батша манифесы — шуларҙы үтәргә, үткәрергә тейеш. Шул юлда үҙе лә тынғы белмәне, бүтәндәргә лә тынғы бирмәне. Бер хәҡиҡәтте лә асты ул, күп аҫыл ирҙәрҙең күпме ыҙа-яфа, ецеү-еңелеү күрмәһен, шом-хәүеф ишетмәһен, һәр иҫкән елгә сайҡалып-бөгөлөп бармауын, киреһенсә, имәндәй, ҡаты-тура тороуын тойҙо. Ундайҙар менән хәтәр яу ғәрәсәттәренә ҡаршы торорға, донъяларҙы һелкетергә мөмкин. Тик өмөт, инаныс ҡаҡшамаһын.

Аҙағыраҡ Бәҙергол Яйыҡ буйындағы яуҙарҙа ҡатнашҡан башҡорттарҙан, бигерәк тә Бошман-Ҡыпсаҡ старшинаһы атаҡлы Ҡинйә Арыҫлановтың үҙенән шуларҙы асыҡланы:

Урта Яйыҡ буйҙарында, Ырымбур тирәләрендә яуҙар, ысынлап та, бик ҡаты булған. Башта Пугачев атамандары

хөкүмәт ғәскәрҙәре командующийы генерал Карҙың командаларын ҡыйратып ташлаған. Еңелеп, Петербурға ҡайтып киткән Кар урынына яңы командующий итеп генерал-аншеф Александр Бибиков тәғәйенләнгән. Ул ҙур армия туплап, генерал Голицын менән генерал Мансуров ҡул аҫтындағы полктарын Ырымбурға ебәргән. Ҡиңйә әйтеүенсә, һөжүмде йәйелдерәһе урында Пугачев үҙе Ырымбурҙы ярты йыл буйы ҡамап ятыу менән булған. Шул хәл иткес осорҙа хөкүмәт ғәскәр тартып, Пугачевтың үҙен уратырға форсат алған. Генерал Петр Голицын биш мең ғәскәр, етмеш туп менән Яйыҡ буйына килеп еткән һәм 1774 йылдың 22 мартында Ырымбурҙан түбән Татищев ҡәлғәһенә һөжүм башлаған. Уға Емельян Пугачев һигеҙ мең һуғышсыһын, утыҙ бер тубын ҡаршы ҡуйған. Ләкин алты сәғәткә һуҙылған ҡаты һуғышта пугачевсылар еңелгән, Пугачевтың өс меңләп кешеһе яуҙа һәләк булған, шунса самаһы әсир төшкән, туптарынан яҙған. Апрель башында Пугачев Һаҡмар ҡәлғәһе янында икенсе тапҡыр яу биреп ҡараған. Ләкин нисек етте ҡоралланған баш күтәреүселәр регуляр батша ғәскәренә ныҡлы ҡаршы тора алмаған, был юлы ла еңелгәндәр. Бында Пугачевтың ғәскәре тамам туҙҙырылған, бер нисә атаманы үлгән, Шугаев, Почиталин, Горшков кеүек атамандары дошман ҡулына эләккән. Яҡын атаманы Тимофей Подуров ғәйеп. Үҙе иң ышанысла бер нисә йөҙ Яйыҡ казагы, шунса башҡорт һыбайлылары менән генә ҡалып, генерал гәскәрҙәре эҙәрләүенән саҡ ҡасып ҡотолған.

Ҡиңйә һөйләүенсә, Ташлыға килеп йыгылған былар. Аттар йонсоу, казактар асыулы. Иҫән ҡалған атамандарҙың кикрек шиңгән. Шундай кирепке мәл, йә тиҙерәк эҙ яҙҙыр, йә аҙаҡкаса алышып үл, йә баш һал. Бер ус ярандарына ла ышаныш бөтөп буламы — үҙ баштарын аяп, башлыҡтарының башын ашамағайҙары. Хыянатсылары элек тә булманы түгел.

Бер өйҙә Пугачев дүрт атаманы менән генә ҡалды. Яҙғы ҡара төн. Уйҙар ҡараңғы. Тирә-йүн шомло.

— Бына һеҙ дүртәү ҙә мин бишенсе, казак балаҡайҙар. — Шулай һүҙ башланы ауыр тынлыҡты бүлеп Пугачев. — Бер ус казак менән яу ҡороп булмай. Нишләйбеҙ, атаман туғанҡайҙар?

Һағайып ҡына икеһе тәҡдим яһаны:

— Гурьевҡа китәйек. Ары Кубангә һыҙайыҡ, батюшка.

— Овчинников, Перфельев атамандарҙы табыу, шулар гәскәренә ҡушылыу хәйерлерәк.

— Тапҡансы үҙең ҡабыуың бар, — тине Пугачев һуңғы тәҡдимгә ҡырыҫ ҡына. — Ә Гурьев менән Кубангә китер юл ябыҡ. Ул тарафта аҙым һайын ҡапҡан, атамандар. Ет-

мәһә, оҙон, хәүефле юлға аттар йонсоу, аҙыҡ-түлек наҡыҫ, фураж юҡ.

Тәрән уйға батты барыһы. Тынлыҡты боҙорға береһе лә ҡыйманы. Ҡыйратылһа, ғәскәрһеҙ ҡалһа ла, Пугачевтан барыбер шөрләй ине атамандар.

Атамандар һүҙенә бығаса ҡыҫылмаған Ҡинйә уҙаман, көсөргәнешле хәлде йомшартырға теләгәндәй, башлыҡҡа төбәлде:

— Бадишаһ-батушка, башҡорт иленә, башҡорттарым араһына китергә кәңәш итер инем мин. Ышанам мин тоҡомдаштарыма. Улар һеҙгә һәр саҡ тоғро. Башығыҙҙы һаҡлаумы, батшалығығыҙҙы ҡайтарыумы — йәндәрен аямаҫтар. Башҡортостан эсенә, Урал заводтарына йүнәләйек.

Уйға талған, һөмһөрө киткән Пугачевтың был тәҡдимдән һуң, башы турайып, йөҙө яҡтырып китте:

— Рәхмәт һиңә, ҡәҙерлекәйем Ҡинйә Арысланыч. Тоғро халыҡтың тоғро атаманы һин, дуҫҡайым. Һүҙең хаҡ, башҡорттарға таянырға, һыйынырға мөмкин. Уралда — заводтар. Ундағы балаҡайҙарым туп ҡойор, государына хеҙмәт итер...

Емельян Пугачев бөтөнләй дәртләнеп, ҡабынып китте. Атамандарына ҡыйыу ҡарап:

— Күңелегеҙҙе төшөрмәгеҙ, башығыҙҙы эймәгеҙ, атаман балаҡайҙарым, государығыҙ иҫән-һау саҡта, — тине ул. — Яу эше ул ике яҡлы, ҡәҙерлекәйҙәрем. Бер көн дошман менән һаҡалға үрелһә, икенсе көн мин уның эсен иҙермен. Күрһәтербеҙ әле беҙ казак ҡылысын ул Рукавицын-Голицындарға. Тәпәйҙәренең арҡыры әйләнгәнен белмәй ҡалыр. Ҡатькаға ла [1] башын һалыр көн килер. Килер ул!..

Минең яҡлылар Уралдағы ағастар һаны саҡлы. Йайыҡтағы ҡомташтар һанынса. Бар иҫәпләп-хисаплап ҡара. Бер оран һалыуым етер, тағы меңәрләп миңә ағылыр улар.

Шулай дәртләнеп-кинәнеп һөйләй-һөйләй, Пугачев, Ҡинйәгә ҡарап, бойороҡ рәүешле өҫтәне:

— Ҡинйә Арыҫланыч, ултыр. Башҡорттарға минең исемдән, батшалары Петр Федорович исеменән, яңы манифест яҙ! Иртән сапҡындар сығыр. Ә, атаман балаҡайҙар, хәҙер изге сәғәттә йоҡоға. Иртән иртүк юлға, Урал эсенә!

Ҡайныһы Сөләймәндең ҙур отряды менән бергә Бәҙерғол үҙе лә төшлөк тарафына йүнәлгәндә, яңы манифест ҡағыҙы алдылар сапҡындан. Петр Федорович батша исеменән, төркисә. Урман-тау араһында аҙашып йөрөүҙән ҡаң-

---

[1] Емельян Пугачев Екатерина II-не шулай мыҫҡыллап исемләр булған.

ғырған юлаусылар юл тапҡан кеүек, төҫтәренә нур йүгерҙе походсыларҙың. Тимәк, казак батша иҫән-һау. Ғәскәр йыя. Көрәш дауам итә.

Юлдары айырылышҡанда, тағы шатлыҡлыраҡ хәбәр ишеттеләр. Пугачев Воскресен, Әүжән-Петров заводтарында булып, ғәскәр туплап, туптар алып, Ағиҙел буйлап үрләй икән. Иҙел башы — Белоретҡа, күрәһең, төбәлеше. Шунда борҙо командаһын Сөләймән; Бәҙерғол — ҡояш тыуышына, Иван Грязнов тарафына.

Ике көндән Белорет заводы Емельян Пугачевты икмәктоҙ менән ҡаршыланы. Петр батшаны ҡотлап, туптарҙан аттылар. Пасха тура килеп, бер аҙна буйы байрам иттеләр. Батшаның янынан төҙөгән Дәүләт хәрби коллегияһында Григорий Туманов атаман да булып сыҡты. Кинйә Арыҫланов Сөләймән Ҡармышаҡов старшинаны ололоп ҡаршыланы, Петр Федорович батшаның үҙе менән таныштырҙы. Уға поход старшинаһы миҙалын таҡтылар.

Кистәрен мәжлестәрҙә ултырғылаһа, Пугачев көн оҙон эш менән мәшғүл булды. Атамандарына тынғы бирмәне. Белоретҡа ағылған завод эшселәрен, башҡорттарҙы, ҡасҡы һалдаттарҙы төркөмдәргә бүлделәр, ғәскәрҙе поход, яуға әҙерләнеләр. Туп ҡойҙорҙолар, ҡорал-ятраҡ йүнәттерҙеләр.

Түлләнгәнгә түл, аҙна-ун көн эсендә биш мең ашыу ғәскәр туплап, Пугачев көнсығыш ҡарай поход башланы. Дошман өйөрө йыйылған Үрге Яйыҡ дистанцияһын ситләп, көньяҡтағы кескәй Магнит ҡәлғәһенә ҡапыл һөжүм итте. Гарнизон тәүге штурмды кире ҡаҡты. Бер атакала Пугачев картечтан еңелсә яра алды. Ләкин үҙе сафтан китмәне. Төн етеү менән, яңы һөжүм ойоштороҙо. Үҙе тағы алда ине. Төнгөһөн шуға яйлаштылар, дошман ҡәлғәнән атырға туптарға фитилде яндырыуҙары була — ҡараңғыла ут айырым-асыҡ күренә — ғәскәр лыпын ергә ята. Был саҡ картечь-йәҙрәләр әллә ни оло зыян итмәй. Тупты янынан ҡорғансы һөжүм итеүселәр стенаға яҡынлашып өлгөрә. Бағаналарҙы ҡайырып, яндырып эскә үтә. Шулай Магнит ҡәлғәһе таңға табан яулап алына, комендантты, бер побы аҫып үлтерелә. Сөләймән старшинаның һыбайлылары был яуҙа тәүге сирҡаныс ала.

Еңеү шатлығы ҡушына тағы бер ҡыуаныс, Магнит янында Пугачев ғәскәренә Һатҡы яғынан Иван Белобородов атаман — өс йөҙләп һыбайлыһы менән, ә Яйыҡ ҡаласығы тарафында ғәйеп тигән Андрей Овчинников атаман өс йөҙ атлы казагы, ике йөҙ завод мужиктары менән килеп ҡушыла. Тағы башҡорт атлылары өҫтәлә. Былар — йән аямай ҡыйыу һуғышыр, ғәскәргә төп терәк булыр яу.

Үрге Яйыҡ дистанцияһында ҡурҡа-өркә ултырған де Колонг, Ҡыҙыл ҡәлғәһендәге Фрейман генералдар, Силәбеләге Гагрин командалары улай-былай иткәнсе, Магниттың алыныуын ишеткәнсе, Пугачев яусылары Себер нығытма линияһының Уҡлы Ҡарағай, Петропавловск, Степной ҡәлғәләрен, Подгорный, Санор редуттарын бер-бер артлы баш һалдырып, ары 19 майҙа Троицк крепосына бәреп инәләр.

Пугачевсыларға был юлы өс тапҡыр штурмға күтәрелергә тура килә. Яралы Пугачев, крепосты алғас та, ҡан ҡойғос алыштың яман йән асыуынан комендантты Фейервар бригадирҙы, дүрт офицерын аҫтырып үлтертә, аҙаҡҡаса ҡаршы торған һалдаттарын һөңгөнән үткәртә. Хатта комендванттың йыуан бисәһен, ат ҡойроғона таҡтырып урам буйлап һөйрәттертеп язалай. Ҡәлғә стеналары яндырыла, күн заводына, төрлө ҡаралтыларға ут төртөлә, мал-мөлкәт талана. Пугачев ғәскәрен янған, таланған крепоста ҡалдырмай далаға сығарып лагерь ҡорҙора. Сафтары һирәгәйгән Сөләймән старшина һыбайлылары үҙҙәре бер ҙур туп булып оло уйһыулыҡҡа урынлаша. Шунда ғына ул бүтән яҡ поход старшиналары менән танышырға форсат таба.

Яу менән алһыҙ-ялһыҙ үткән пугачевсылар бер тәүлек тә тын алырға өлгөрмәйҙәр, арттан эҙәрлеклән килеүсе де Колонг ғәскәре аңғармаҫтан Пугачев лагерына етеп кипсәлә. Баш күтәреүселәр алдараҡ абайлап, туптарын йәһәт ҡороп, ут асалар. Хөкүмәт ғәскәре ҡаушап ҡала. Артынса Пугачев үҙе үҙәктән, Белобородов менән Овчинников полктарын ике ҡанаттан атакаға ташлай. Тәүге сафтарҙы иҙеп, сәнскеләп үтә былар. Ике яҡтан атлы сабыуыл ташҡындай бәрелеп ҡара-ҡаршы айҡаша. Ул арала генерал де Колонг регуляр ғәскәрен тәртипкә килтерергә, резервтарын һуғышҡа индерергә өлгөрә. Сигенеү туҡтала. Контратакалар ҡабатлана.

Ике яҡтан ун биш меңләп ғәскәр һуғышҡан оло яу яланы, дәү ҡырмыҫҡа иләүен таяҡ тығып ярһытҡандай мыжғып, мәхшәр килә. Үлемесле алышта кемдең еңерен-еңелерен самалар әмәл юҡ.

Сөләймән старшина бер сабыуылды кире ҡаҡҡанда, һул ҡанатта дошман атлыларының йәйәүлеләргә ябырылыуын шәйләне. Ҡиҫтән, балта менән нисек-етте ҡоралланған крәҫтиәндәр тырым-тырағай һибелеп ҡаса башланы. Һулдан туптар телгә килде. Туҙан, төтөн аралаш баш күтәреүселәрҙең сигенеүен абайларға мөмкин ине хәҙер. Һыбайлыларын туп йәҙрәләренән, бигерәк тә ҡамалыуҙан һаҡлар өсөн, Сөләймән отрядын үҙәнгә борҙо.

Был яҡтарҙа ҡаҙаҡ далаларында ҡай саҡ яман ҡара дауылдар ҡубыусан. Ғәҙәттә, ул ер-күкте иңләп ҡарайып килә. Юлында осраған еңелсә аласыҡ, ҡыуыш, ҡураларҙы ҡубарып алып китә, ҡом-туҙандар күккә олғаша. Ә хәтәр өйөрмәгә әйләнһә, барын емерә, ҡыра бындай ҡара ғәрәсәт. Артынан бары емерек, һыныҡтар ҡала.

Себер нығытма линияһын ҡыйратып, ҡаҙаҡ далаларын төп яҡлап үткән баш күтәреүселәр яуын Сөләймән старшина, нишләптер, ошо ҡара дауылға оҡшатты. Ғәрәсәттең һәләкәтле утлы өйөрмәһен Троицк яланында күрҙе. Ҡара дауылдай ҡапыл ялмап үттеләр ҙә, өйөрмәһендә зил-зәбәр килеп тарҡалып ғәйеп тә булдылар.

Был яу яланын үҙ күҙҙәре менән күргән батша генералдары аҙаҡ рапорттарына шулай яҙҙы: «Дүрт-биш саҡрым ер дошман үлектәре менән тулы. Ат мәйеттәре, ҡыйралған әйберҙәр, арба-фәләндәр тырым-тырағай ята. Барыһы иҫәпләп сыҡҡыһыҙ».

Тик имен ҡалғаны ғына иҫәпле ине. Был ҡапыл ҡупҡан ғәрәсәтле яуҙа Пугачевтың ун меңлек ғәскәре тарҡалды. Дүрт меңләбе яу яланында ятып ҡалды, өс меңгә яҡыны дошман ҡулына эләкте. Ҡалғандары ҡасып ҡотолдо. Егерме һигеҙ тубы еңеүселәргә күсте.

Ҡотто алып күккә олғашып килгән ҡара дауыл ҡапыл үтеп йә тиҙ таралып бөткәндәй, Пугачев ғәскәре шулай тарҡалып юҡҡа сыҡты, үҙе ҡайҙалыр ғәйеп булды.

6

Полковник Иван Грязновтың приказы буйынса Бәҙерғол Юнаев яңы йыйған отрядтары менән генерал де Колонг ғәскәренең — Уралға үтеү, ә Өфө яғынан килгәндәренең Себер тарафына сығыу юлдарын ҡапларға тейеш ине.

Әйтеүе генә анһат — ҡапларға! Өҫтәүенә, ике яҡлап.

Генерал ғәскәре Силәбе, Сыбаркүл, Үрге Яйыҡ яндарында. Уның айырым отрядтарының тегендә-бында күренә ҡалыуынан башҡа әллә ни хәрәкәттәре тойолмай. Ә бына Өфө янында Зарубин-Чиканы туҙҙырған подполковник Михельсон командаһы хәҙер Урал эссн бер итеп йөрөй. Эҫем, Ҡатау-Иван, Усть-Ҡатау заводтары янында Салауат Юлаев һыбайлылары менән һуғышҡан, баш күтәреүселәрҙе урман-тауға ҡыҫырыҡлаған тиҙәр. Яҙғы өҙөк арҡаһында Бәҙерғол улар менән бәйләнеш булдырырға өлгөрмәне, күберәк отряд туплау, көнсығыш флангыны нығытыу менән мәшғүл булды. Ә май урталарында инде юртауылдары Михельсондың, һатҡы заводын алып, Силәбе тарафына йүнәлеүен хәбәр иттеләр.

Бәҙерғол тиҙ арала һатҡынан килер берләм юлға төп көсөн тупланы. Һөжүм өсөн ике яҡтан Нарыл тауҙың ҡая таштары аҫылынып торған бер ҡыҫыҡты һайланы. Арыраҡ боҫҡондар ҡуйырға ниәтләгәйне, ләкин өлгөрә алмай ҡалды. Михельсон полктары килеп тә етте.

Алдағы авангарды — бары һыбайлы. Йәшел буҫтау сюртюк кейгән, өскөл эшләпәле драгундар. Алда үҙгә сағыу мундирҙағыһы офицер, ахрыһы. Урман асыҡлығынан полктар ҙа күренә башланы.

Тау-таш араһына, ағас ышыҡтарына йәшеренгән йәйәүлеләренә Бәҙерғол команда бирергә лә өлгөрмәне, арттан ниндәйҙер ҡыйҡыу-һөрән, атыш тауыштары ишетте. Ә дошман авангарды ҡапыл уҡтай атылып атакаға ташланды. Уларға уҡтар яуҙы. Өс-дүрт ат мәтәләп барып төштө. Әммә алғы рәттәгеләр ҡыҫыҡҡа бәреп инде. Арттағы пехотаһы саф менән тороп, саҡма мылтыҡтарҙан атырға кереште.

Бәҙерғол ҡыҫыҡты быуырға бойорҙо. Ҡаяларҙан түбәнгә әҙерләнгән эре-эре таштар тәгәрәне. Улар аттарҙы, һыбайлыларҙы иҙҙе, юлды ҡапланы. Төп көс ҡыҫыҡҡа яҡынлашты. Аҫта һөңгөнән сәнсеш, ҡул һуғыштары ҡыҙып китте. Тауға үрмәләгәндәрҙе таш ташҡыны ҡаршыланы.

Бындағы ҡурғау алышын бер яһауылына тапшырҙы ла Бәҙерғол тылға ашыҡты. Артҡа, тау урап, дошман эскадрондары үткәйне.

Тауҙар икегә айырылған яланда һыбайлылар һуғыша. Башҡорт атлылары көтмәгән сабыуылдан айный төшкәндәр кеүек. Эштәр ҡылысҡа күскән. Әммә драгундар һаман дөрөп килә. Бәҙерғол шунда ярҙамға резервтағы йөҙ һыбайлыһын йүнәлтте. Үҙе ҡыҫыҡта барған алышҡа тағы йөҙ һыбайлыһын, йәйәүле резервын борҙо. Барыһы былай үтеп сыҡҡан авангардҡа ябырылдылар. Уларҙы тауға кире ҡыҫтылар.

Дошман һалдаттары ҡаяларға үрмәләй. Ҡыҫыҡ юл эре таш, ағас, үлек менән тулы. Арыраҡ юғарынан һаман таштар ишелә. Таш-ҡая араһында ҡул һуғышы бара. Хәнйәр, бысаҡтар ялтыраша. Үлемесле яҫҡышҡан кешеләр күренә, бәғзеләре бер-береһенә сат йәбешеп ҡаяларҙан ауа, йәнтәстем килә.

Ҡаты яралы бер сотнигын осратты Бәҙерғол. Уны ышыҡ урынға сығарғайнылар. Ул рапорт биргәндәй: «Үлһәк, үләбеҙ — ҡыҫыҡты бирмәбеҙ, тиҙәр башҡорттар. Шуға тегеләр хәҙер юлға түгел, тауға үрмәләй. Тау-таш араһында һуғыш...» — тине, саҡ-саҡ тын тартып.

Сәғәттән артыҡ һуғыш бара. Дошман полктары ҡыҫыҡта кипсәүле. Юл үткеһеҙ. Ҡая үрҙәрендәге, тау-урман эсендәге алыш та әллә ни һөҙөмтә бирмәй дошманға. Хәнйәр, бысаҡ

яҫҡышында һунарсы башҡорттар күпкә таһыллыраҡ. Тораташ ни, улар ни — сикмәй, бирешмәй. Ҡатһа, урынында ҡата.

Тау араһында урын яйһыҙ булһа ла, Михельсон биш-алты тубын ҡорҙорта.Ҡыҫыҡҡа тоҫҡап ут астыра. Тар юл саң-туҙан, төтөн менән солғана. Шул ыңғайға байтаҡ ғәскәрен шунда ташлай. Мең бәлә-үлем менән ҡыҫыҡты шулай штурмлап, арғы ауыҙға өс тубын сығаралар.

Туп телгә килеү — яуҙы яртылаш хәл итеү ул. Өс туптан өс-дүрт залп биреү була, яландағы алыш хөкүмәт ғәскәре файҙаһына ауыша. Йәҙрә, картечтан ҡырыла башлаған башҡорт атлылары, йәйәүлеләре урманға һибелә, һырт бирә. Бәҙерғол һуңғы резерв һыбайлылары менән ҡамауҙы ярып киҫеп үтә. Бер төркөм һуғышсылары күл-һаҙлыҡҡа бүленеп ҡала.

Һуңғыларын подполковник Михельсон үҙе ҡамаулап әсир итмәксе. Тегеләр бары иллеләп башҡорт. Йүнле ҡоралдары юҡ. Ә подполковниктың ҡоралды бер полк ғәскәр. Фүзилар полкы. Тереләй алырға бойора подполковник.

Күл янында ҡаты алыш китә. Уҡтан ауа һалдаттар. Аҙаҡ алыш ҡул-хәнйәр һуғышына күсә.

— Ташлағыҙ хәнйәрҙәрегеҙҙе! Бирелегеҙ! Мин начальник, һеҙгә ғүмер вәғәҙә итәм, — тип ҡысҡыра Михельсон ҡамыш араһындағы башҡорттарға.

— Нишләтеренде беләбеҙ, шайтан түрә, — тип яуаплайҙар тегеләр. — Үлһәк, үләбеҙ, бирелмәбеҙ.

Ҡамыш араһында, күл эсендә тағы үлемесле алыш ҡыҙа. Бер тошта өс башҡорт дүрт һалдатты яҡын ебәрмәй хәнйәрҙән ҡаҙап үлтергәне ярҙағыларға күренеп тора. Шул арала быларға тағы биш-алты һалдат ташлана. Буталыш, көрмәкләш китә. Эскә үткән өсәү, өс-дүрт һалдат менән сат йәбешкән көйө, һыу аҫтында юғала — бөтәнсә ҡалҡмайҙар.

Күл эсендә бары икәү ҡала. Береһе — ҡарт. Ун бишләп һалдат ҡамап көс-хәл менән ҡулға эләктерәләр быларҙы. Сәсәп үлергә ирек бирмәйҙәр. Тере алыу бит подполковниктарының әмере.

Был үлемесле тамашаға, башҡорттарҙың баш һалмауына иҫе китеп, Михельсон бер майорынан һорай:

— Ни ғәләмәт был боласы башҡорттар? Әллә шулай барыһы ла үлемде һанламаҫ башкиҫәрҙәрме улар?

— Улар дошманға бирелеүҙе үлемгә тиң һанай, — тине күпте күргән майор Харин. — Үҙе крепоста боҫоп ятҡан полковник Ступишин ҡоттарын алған уларҙың — һеҙгә бары үлем, үлемесле яза тип. Бер әсир башҡортто танауҡолаҡтарын, бармаҡтарын киҫеп язалатҡан. Ғибрәт өсөн, йәнәһе. Ана шул ғибрәтте күрергә теләмәй улар.

— Ҡәбәхәт икән, — тине Михельсон, аптырап. — Крепоста йәшеренеп ултырып, әсирҙән үс ала инде полковник кеше. Шунан да түбәнселек, меҫкенлек булырмы юғары чин эйәһенә. Тыл ялманы бит. Татыһын инс ул үҙе яу ялаңында дары еҫен, йәрәхәт яфаһын...

1774 йылдың 22 майында подполковник Михельсон генерал-поручик Щербатовҡа әлеге һуғыш хаҡында рапорт ебәрә, баш күтәреүселәрҙең үҙ-үҙҙәрен аямай көрәшеүенең сәбәбен аңламауын белдерә.

Эйе, үҙе ҡанһыҙ батша подполковнигы рәхимһеҙ иҙелеүсе, яфаланыусы халыҡтың үҙ ирке-көнө өсөн йәнен аямай алышыуын нисек аңлаһын.

Нарыл тау ҡыҫығы һуғыштан Бәҙерғол Юнаев үҙе дүрт йөҙ кешеһен алып сыҡты.. Бер аҙҙан урман-тауға һибелгән өс йөҙләп һыбайлыһы ҡушылды. Дошман урман эсләп эҙәрлекләргә баҙманы. Бәҙерғол ғәскәрен Күндерәүгә табан тартты. Шулай эҙҙе яҙҙырыу һәм Пугачевтың үҙенә юҫыҡлау тарафын эҙләү яйлыраҡ кеүек ине уға.

Юртауылдар тағы юл юртты. Улары әйләнеп килеп еткәндә, алыҫта урман аръяғында ҡапыл туп тауыштары ҡупты. Тимәк, Михельсон пугачевсыларҙы тап иткән. Юҡтан туптар шартламаҫ. Тиҙерәк шунда ашығырға, дошмандың артынан төшөргә. Шундай ҡарарға килеп, Бәҙерғол һыбайлылары менән бер һыуһында урманды юрта-саба үтеп, Күндерәү яланына яҡынланы. Һуғыш Күндерәү менән Үрге Убыл биҫтәләренән йыраҡ түгел Оло Убыл-үҙәнле яланда бара ине. Бер уйылда ике яҡлап атлы-йәйәүле ғәскәр мәж килеп алыша. Урман ҡырындағы түбәнән дошман туптары ата. Уң ҡанаттан һөжүм иткән казактарға яҡынлашырға ирек бирмәй. Арғы һырт артында ла хәтәр алыш бара, күрәһең. Мылтыҡ, һөрән тауыштары ишетелеп ҡала.

Бәҙерғол шулай яу әхүәлен самалап алды ла яҡындағы туптарға, уң ҡулдағы дошман отрядтарына һыбайлыларын йүнәлтте. Урман эсенән яланға ябырылған башҡорт атлылары аңы-төңөнә килеп өлгөрмәгән дошман отрядтарын һырттан киҫеп үтте. Түбәнән быны абайлап алып, туптарҙы быларға ҡаршы тоҫҡанылар. Бер атырға өлгөрҙөләрмеюҡмы — башҡорттар түбәгә килеп тә менделәр, һөңгөләре менән туптарға йомолдолар.

Урман ҡырында яу менән командалыҡ иткән Михельсон күҙәтеү трубкаһынан хәтәр хәлде йәһәт күреп, тупсыларына ярҙамға резерв гусар эскадронын ебәрҙе.

Үҙ яғынан яу менән етәкселек иткән Пугачев, уң флангылағы һуғышты, ниндәйҙер атлыларҙың туптар торған түбәне штурмлауын күреп, һул флангынан һөжүмде көсәйтергә булды. Һайланма Яйыҡ атлы казактары резервын

үҙе яуға алып инде. Ҡара айғырына атланып алған Пугачев ҡылысын айҡап команда бирҙе:

— Балаҡайҙарым минең! Хоҙай беҙҙең менән! Турарға яуыздарҙы! Минең арттан!..

Еңел казак кафтаны кейгән Емельян Иванович алға атылып сығыуына казактар һөрәнләп уға эйәрҙе, ярһыу аттарында уны уҙып китеп, һул флангылағы дошман кавалерияһын бүҫеп инде.

Михельсонға һул флангынан Пугачевтың үҙенең Яйыҡ казактары менән атакаға ташланыуын, Тамбов кавалерияһын ҡыйратып үтеүен хәбәр иттеләр. Тәжрибәле подполковник, хәлдең киҫкенлеген самалап, үҙе атҡа менде, резервтағы Изюмск полкын яуға индерҙе.

— Изюмсылар! — тип ҡысҡырып команда бирҙе ул. — Айҙар буйы эҙләгән, эҙәрләгән сәғәтебеҙ етте. Алдыбыҙҙа — яуыз Емелька үҙе! Бур боласыларын ҡырырға! Залимдың үҙен тоторға! Кем тереләй тота, тотоша, шуға — беләһегеҙ, батша указы — ун мең һум награда!

— Беҙ әҙер, высокоблагородие!

— Алға, изюмсылар! Хоҙай беҙҙең менән!

Подполковник аты менән алға атылды. Ике атлы ташҡын бер-береһенә яҡынлашты. Хәл иткес алыш, киҫеш башланды. Ҡәүҙәләр ауҙы, баштар тәгәрәне. Һөңгөләр һынды, ҡылыстар ҡыҙҙы.

Яйыҡ казактары эскадрондары һирәгәйҙе. Резерв юҡ. Ярһыған баш атаман үҙен һәләк итеүе бар. Полковник Белобородов үҙ полкы менән Пугачевты ҡурсып, дошман атакаһын бик ауырлыҡ менән кире ҡаҡты. Батшаларын һаҡларға, хәүефһеҙ урынға сығарырға бойорҙо есаулдарына.

Ҡазактар ҡаты ҡыҫымға сыҙаманы, ҡылыстан айҡашаайҡаша сигенә башланы. Бүгән эскадрондар артҡа бирҙе. Йәйәүле, атлы яусылар йәнә, баштарын һакламаҡ булып, төрлө яҡҡа һибелде, урманға таралды. Еңелгән, ғәскәр тағы тарҡалды.

## 7

Ҡара урман. Ҡояш төшмәҫ батҡаҡлы ҡыҫыҡ юлдан иләләп һыбайлы бара. Аттары йонсоу, үҙҙәре кәйефһеҙ. Был — Күндерәү янындағы яуҙан саҡ имен ҡотолған Пугачев ҡалған яу-ярандары менән. Уның хәҙер ғәскәре юҡ. Күбеһе тиңһеҙ яуҙа башын һалды, ҡалғаны ҡасып ҡотолдо.

Алдағы ике һыбайлынан арттараҡ килгән Емельян Иванович тәрән уйға сумған. Атһыҙ казактың ҡәҙере юҡ, ғәскәрһеҙ батшаның ғәйрәте юҡ. Ул инде нишләр? Ҡалдыҡ

атамандары менән тайга, һаҙлыҡтар аша Себер төпкөлөнә һыҙырғамы? Әллә тағы берәй яйын табып, ынтылып ҡарарғамы? Йыя алырмы кәрәк ғәскәрҙе? Яу бөркөттәре, яңы яранадары ҡанат яҙырмы, ярҙамлашырмы?

Батҡаҡлы юлдың ат тояҡтарынан шабырлауы, ҡара урман шауы уйҙы йәнә моңһоулата. Ғәскәрең юҡ, яңғыҙ башың, юлың урман һуҡмағындай батҡыллы, ҡараңғы, ти кеүек ул шауҙар. Ә шул урман үҙе ғәскәргә әйләнһә икән. Үҙе шаулатыр ине донъяһын. Бер урман бөтһә, ҡулҡылары ҡалҡа, бер төбәге ҡырылһа, икенселәре бар ҙа баһа. Бигүк эймәй тор әле, казак, башыңды. Батша тигән исемеңде онотма, онотторма, Петр Федорович император Өсөнсө.

...Бәҙерғол яуҙан яраһыҙ сыҡты. Әммә уның да күңеле яралы. Күпме яу-ярандарын юғалтты. Тырышып йыйған ғәскәре тарҡалды. Ғәжәп, ҡаяға бәрелгән тулҡындай булалар ҙа ҡуялар. Күптән көткән, осрашырға ниәт иткән батшаһына юлыҡҡандай итте, тик ҡыйратылып, күҙ яҙҙырҙы.

Яҙмыш юлдары яҙлыҡмаһын ине. Бәҙерғол был уңышһыҙ яуҙан да шаңҡып ҡалманы. Ул-был булһа, Мейәс буйына Лапаҫты, Байғазы тирәһенә йыйылырға һөйләшкәйне ул яусылары менән. Күндерәү янындағы һуғышта тарҡалған отрядтарының яртыһы ике-өс көн эсендә шул тирәгә йыйылып та өлгөрҙө. Михельсондың һөжүм итеүе ихтимал Сыбаркүл йүнәлешенә ныҡлы һаҡ, типкен ҡуйҙы Бәҙерғол, казактарҙы, Пугачевты эҙләргә сапҡындар саптырҙы, юртауылдарын сығарҙы.

Сапҡындары Пугачевты Илмән яғы урманында тап итте. Тапҡан Ҡойбаҡ сотник уны Мейәс буйына алып килде. Алдан белгән Бәҙерғол лагеры батша хәҙрәттәрен, аҡһаҡалдары менән ҡаршы сығып, башҡорт һыбайлылары һөңгөләренә ҡыҙыл сепрәктәр бәйләп, кәпәс сөйөп ҡаршыланы.

— Петр Федорович бадишаһ хәҙрәттәре, — тип мөрәжәғәт итте бар яуы исеменән Бәҙерғол Юнаев. — Тоғро башҡорттарың беҙ һеҙҙе көтәбеҙ. Күндерәү янындағы яуға ҡапыл килеп юлыҡҡайныҡ та... Бына хәҙер үҙегеҙҙе күреү бәхетенә ирештек. Батша хәҙрәттәре, һеҙҙең ҡарамаҡҡа биш йөҙ башҡорт һыбайлыһы. Улар һеҙгә хеҙмәт итергә, ирек, ер-һыу өсөн йәнен бирергә әҙер.

— Молодец, башҡорттар! — Ат өҫтөндә атамандары алдында торған Пугачев ғорур сәләмләне. — Миңә, батшағыҙға, тоғро икәнлегегеҙҙе яҡшы беләм, башҡорт балаҡайҙарым. Һеҙ, минең казактарым кеүек, ныҡлы таянысым. Бергәләп беҙ немчура Михелька ише яуыздарҙы ҡыйратырбыҙ. Амин.

Мейәс буйына матур ергә алдан әҙерләнгән туғыҙ кирәгәле аҡ тирмәгә урынлаштырҙылар Емельян Ивановичты. Атамандарына ла бына тигән тирмәләр. Пугачев тирмәһе айырыуса ҡиммәтле келәмдәр, аҫалы балаҫтар, затлы йорт-яраҡ менән йыһазландырылғайны. Ул көн, юл кешеләрен артыҡ бимазаламай, ял-ирек бирҙеләр.

Ҡистән арып-йонсоп килгән Емельян Иванович йыуыныпп-таҙарынып, буйтым ашап-эсеп алғас, йомшаҡ тыныс тирмәлә рәхәтләнеп йоҡлағас, хәл ингәс, иртәгеһен бөтөнләй икенсе кешегә әйләнгәйне. Иртән үҙ тирмәһенә атамандарын, Бәҙерғол Юнаевты, бер нисә сотникты саҡыртҡанда, алдарында сын-яһау батша үҙе ултыра кеүек ине. Ҡисәге бысранып бөткән юл кейемдәрен, казак кафтанын ташлап, өр-яңы затлы кейемдәр кейгән. Торғаны батша кейеме. Ни арала табып йүнләп өлгөргән етеҙ Ермилкаһы. Өҫтөндә япма яғалы сатин күлдәк, башында бәрхәт ҡыҙыл түбәле ҡырма бүрек. Түшендә алтын йондоҙ тағылған ҡыҙыл яҫы таҫмалы батша миҙалы. Аяғында ҡыҙғылт йомшаҡ итек. Үҙе аҫалы балаҫ өҫтөнә түшәлгән йомшаҡ келәмдә аяҡтарын бөкләп иркен ултыра. Артында мендәр. Хан-мырҙаларҙан былай.

Сағыу яҡтыла Бәҙерғол Пугачевтың буй-һынына, йөҙөнә лә ныҡ иғтибар итте. Буйы ике аршын ярымдай булыр. Киң яурынлы. Ҡара түңәрәк һаҡаллы. Сәстәре казакса тигеҙләп киҫелгән. Ҡыр морон. Күҙҙәре күк. Ҡуңыр йөҙлө. Һул яңағында яра эҙе бар. Йәнәшәһендә атамандары: Андрей Овчинников, Иван Белобородов, Афанасий Перфильев, Федор Чумаков. Бәҙерғолға яҡын таныш Григорий Творогов. Улар ҙа ялтырап торған яҡшы кейемдә, һәр берәһендә генерал, полковник таҫмаһы. Араларында Бошман-Ҡыпсаҡ старшинаһы Ҡинйә Арыҫланов ҡына еләнгә оҡшаш кейеме, түбәтәйе, ҡарағусҡыл йөҙө менән тегеләрҙән айырылыбыраҡ тора. Үҙе бүтән атамандарға ҡарағанда тынысыраҡ та, уйсаныраҡ та кеүек. Һонтор мыҡты кәүҙәле.

Барыһы ла ултырышып бөткәс, Пугачев хужа кешегә өндәште:

— Базаргул, хәл-әхүәлде аңлатып бир. Ниҙәр бар?

— Тирә-йүн тыныс, Петр Федорович бадишаһ хәҙрәттәре. Дозорҙар ныҡлы. Дошман яғынан ул-был хәүеф, хәбәр юҡ. Ғәскәр походҡа, яуға әҙерлек өҫтөндә. Һеҙҙең бында килеү хаҡында яҡын-тирәләге ышаныслы старшиналарға хәбәр иттек. Уйымса, бына-бына яңы өҫтәмә көс килергә тейеш. Байғазыла — ике-өс эскадрон атлылары. — Шулай ҡыҫҡа ғына итеп рапорт бирҙе Бәҙерғол.

— Яҡшы. Ғәскәр маяһы бар, — тине уйланып Пугачев һәм әмер рәүешле әйтте. — Ә хәҙер ғәскәр туплауҙы йәһәт-

ләргә кәрәк. Алексей Дубровский, һин хәҙер үк минең исемдән манифест яҙырға ултыр. Уларҙы бөгөн үк таратырға. Провиант әҙерләргә.

Бер аҙ тын ҡалғас, киҫәк кенә һораны:

— Ә Силәбе тарафы нисек?

Быға Кинйә Арыҫланов яуап бирҙе:

— Петр Федорович батша йәнәптәре, беҙ Бәҙерғол менән ул хаҡта белештек. Жолобов менән Гагрин командалары ошо көндәрҙә Силәбегә тупланған. Генерал де Колонгты Троицк менән Силәбе араһында тиҙәр.

— Тимәк, ул яҡҡа юл ябыҡ. Ә Башҡортостан, Урал заводтары тарафында эштәр нисегерәк?

— Салауат менән Юлай отрядтары Эҫем, Усть-Ҡатау, Һатҡы заводтары тирәһендә булырға тейеш. Улар Михельсон командаһы менән һуғышты.

— Ул немчура ҡайҙараҡ икән хәҙер? Ҡайҙа темеҫкенеп йөрөй?

— Генерал де Колонг менән берләшергә Силәбегә бармай микән? — тине Андрей Овчинников. — Унан үтә һаҡ, абай булырға кәрәк. Ул йоҡлауын да ат өҫтөндә йоҡлайҙыр, тынғыһыҙ.

— Сыбаркүл яғына разведка ебәрергә кәрәк, — тине Пугачев. — Шуның регуляр командаларын нисек тә ҡотҡо менән ҡаҡшатырға кәрәк. Манифест ҡағыҙы көсһөҙ бында.

Шул саҡ һаҡ ҡына тирмә ишеге япмаһын ҡайырып инеп Пугачевтың адъютанты Ермила хәбәр итте:

— Батюшка, Байғазынан башҡорт старшиналары килгән. Өсәү. Ҡабул итеүегеҙҙе үтенәләр.

— Инһендәр.

Ингән старшиналарҙы Бәҙерғол шунда уҡ таныны. Береһе — яҡын дуҫы Юламан Ҡушаев, икенсеһе — Байғазы Ҡөҙәмешов, өсөнсөһө — Мортаза Йортауылов.

Юламан рапорт бирҙе:

— Бөтөр император әғзәм хәҙрәттәре, беҙ Ҡара-табын, Әйле, Ҡатай башҡорт старшиналары. Өс эскадрон һыбайлыларыбыҙ менән һеҙгә ҡушылабыҙ. Ғәскәр — Байғазыла. Үҙегеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырабыҙ. Һүҙебеҙҙе йыҡмай, рәхим итегеҙ.

Пугачев кинәт аптырағандай итте, көлөмһөрәп һораны:

— Ҡунаҡҡа тиһегеҙме? Һы-ым, уныһы яҡшы. Әммә хәҙер ҡунаҡ ваҡытымы ни, старшиналар?

Юламан һүҙен йүнәткәндәй әйтте:

— Башҡорт йолаһы буйынса, саҡырыу — хәжәт, император әғзәм хәҙрәттәре. Ҡабул итеү-итмәү — һеҙҙең эш. Беҙҙең ул — ғәскәрҙе барып ҡабул итеп алығыҙ тигән һүҙ.

— Вот быныһы шәп, башҡорт балаҡайҙарым. Старшиналарса. Өс эскадрон эсте тишмәҫ. Ҡатька командаһының эсен бүҫер. Ҡабул итәм, яуҙаштарым. Әҙерләнергә!

Батша әмере — закон. Йәһәт генә ашап-эсеп алдылар ҙа, яҡшы аттарға атланып, батша свитаһындай үҙҙәренсә яһанып, 20—25 саҡрым түбән Байғазыға юл тоттолар. Алда Бәҙерғол юл башлығында ун биш башҡорт һыбайлыһы, улар артынса ярты йөҙ самаһы казак атлылары, Пугачевтың атамандары. Шулар уртаһында башҡорттар бүләк иткән туры юрғала Пугачев үҙе. Эйәр, йүгән-эшлейәләре шау көмөш. Ҡейемдәр — йылҡылдап, аттар бейеп тора. Пугачев йәнәшәһендәге казакта — расколь тәреле байраҡ.

Байғазыға етәрәк Пугачевты ололап алға уткәрҙеләр. Башҡорт старшиналары йөҙләп һыбайлылары, ауыл халҡы менән батша тейешле кешене, башҡорт йолаһы буйынса, икмәк-тоҙ, һый-хөрмәт менән ҡаршыланылар. Пугачевҡа һәм биш атаманына яҡшы эйәр-йүгәнле алты арғымаҡ бүләк иттеләр. Һәр береһенә башҡорт еләне яптылар. Ә Пугачев иҫендәгеһе атамандарыныҡынан ҡуйы ҡыҙғылт төҫө, көмөш ҡушып ҡайылышы, нағышланышы менән айырылып тора ине. Батша кешегә, ысындан да, батшаса.

Бындай ололап ҡаршылауҙан, хөрмәттән, ихлас затлы бүләктәрҙән күңеле күтәрелгән Пугачевтың ҡыҫҡа ғына поток һүҙенән һуң осрашыу оло байрамға әйләнеп китте. Ғәскәргә етерлек һыйланыр һыйын, һуғымын, ҡымыҙын әҙерләгәндәр.

Оло ҡунаҡтарға табынды алты мөйөшлө йортта ҡорғандар. Унда һый-хөрмәт ташып тороу өҫтөнә хужалар ысын байрам төҫөн бирер ҡурай, йыр-моң, бейеү оҫталарын да тапҡандар. Шулай итеп, йыр, уйын-көлкө табынға бер күрк өҫтәне. Байтаҡ һыйҙан һуң хужаларҙың теле асылып, һүҙгә, вәғәҙәгә лә йомартлыҡтары беленде. Юламан старшина Пугачевҡа унлап эскадрон әҙерләргә вәғәҙә итеп ташланы, бүтәндәр ҙә ҡалышмаҫҡа тырышты.

Емельян Пугачев Бәҙерғолдо батша комиссияһы депутаты, атаманы Тимофей Подуровтың дуҫы икәнен белгәс, тағы яҡыныраҡ күрҙе. Ғәскәре тарҡалып, хәле ҡыл өҫтөндә ҡалғанда, уны ярты мең һыбайлыһы менән ҡаршы алған, ошондай хөрмәт күрһәтешкән тоғро старшина үҙе. Нисек үҙ күрмәһен үҙҙәрен.

Шунда бер старшина, Емельян Ивановичтан рөхсәт һорап, уға бағышлап сығарылған «Битер батшабыҙ» тигән яңы йырын ҡурайға ҡушылып йырлап ебәрҙе:

Битер батшаҡай ҙа бар икән,
Ҡамсат бүрекәйҙәре тар икән,

Башҡорт бал(а)ларына ер-һыу бирә —
Килер бәхеткәйҙәр бар икән.
Битер батшаны ла күрҙек беҙ,
Алдарына сыҡтыҡ ҡаршылап.
Уҡ-һаҙаҡтар алып, яу сабырбыҙ,
Дошмандары торһа ҡаршыла.
Йән йәл түгел изге юлдарҙа,
Иреккәйҙәре булһын ҡулдарҙа.

Марш моңона тартым был йырҙы тыңлап бөтөп, Пугачевҡа уның йөкмәткеһен аңлатып биргәс, ул тағы күңелләнеп, ирәйеп китте. Бына бит батшаларына йырын-көйөн дә сығарып өлгөргәндәр. Нисек шатланмаҫһың, кинәнмәҫһең дан-хөрмәттәренә.

Ә үҙе бер аҙҙан һағышланып тыныбыраҡ киткәндәй итте. Түҙмәне, эргәһендәге Андрей Овчинниковҡа: «Башла әле үҙебеҙҙең казак йырҙарын», — тигәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ҡыҙмаса атаман көттөрмәне:

Не шуми, мати, зеленая дубравушка,
Не мешай ты думу думать добру молодцу,
Как заутру добру молодцу во допрос идти
Перед грозного судью, самого царя...

Яратҡан был йырға Пугачев үҙе лә, бүтән атамандары ла ҡушылды. Был һағышлы моңдо казак частушкаһы алыштырҙы:

Ходи браво, гляди прямо
Говори, что вольны мы...

Быны казактар барыһы ла дәртләнеп күтәреп алдылар.

Ул кисте Пугачев барыһын онотоп йырланы, бейене, өҙлөкһөҙ шаян һүҙҙәр яуҙырҙы, кинәнеп эсте, ашаны. Шундай хөрмәтләп ҡаршылаған, оло мәжлес-һый ҡорған, үҙен яңынан ғәскәрле, дәрәжәле иткән башҡорттарға, янында ултырған старшиналарына тора-бара күңелендә сикһеҙ һөйөнөсө уянды. Шул тойғоһо бер мәл тышҡа бәреп сыҡты араҡы шауҡымы аралаш.

— Башҡорт старшиналары, мин һеҙгә бер һүҙ әйтәм, тыңлағыҙ. Һеҙ ҙә атамандар, — тине ул, урынынан ҡалҡына биреп. — Башҡорттар — минең ныҡлы таянысым. Казактарым, башҡорттарым булғанда донъяны дер һелкетербеҙ әле беҙ. Рукавицын-Галицындар, немчура Михелькалар, хырансуз Деколонгтар тәпәйҙәрен ялтыратҡанын белмәй ҡалыр. Дарҙың иң йыуандарына аҫырмын мин уларҙы, сит ил имгәктәрен дворян-баяр залимдар менән бергә.

Тик тоғро дуҫтарҙан, яу-ярандарҙан мәхрүм итмә, хоҙайым. Бына эргәмдә Кинйә Арысланыч ултыра. Ул башҡорт

эштәрендә минең, дәүләтемдең Хәрби коллегияһының уң ҡулы. Атаманым һәм өгөтсөм. Ҡәрәк сағында Кинйә Арысланыч ғәскәр туплашты, ауыр мәлдә батшаһын, яҡын атамандарын ҡурсып ҡалды. Батшаһы өсөн, ирек өсөн йәнен бирергә әҙер.

Башҡорттар араһына килдек — хөрмәт, яҡлау таптыҡ. Ғәскәрле, туплы булдыҡ. Яңынан яу ҡубарҙыҡ. Тарҡалдыҡ, яңынан йыйналдыҡ. Бер урман ҡырылһа, яңылары бар. Илебеҙ, еребеҙ синһеҙ. Эргәбеҙҙә йәнә башҡорттар. Бына Базаргул Юнаев старшина ултыра. Бүтән старшиналар. Улар беҙҙе йәнә гәскәрле, ҡеүәтле итеште. Рәхмәт һеҙгә, балаҡайҙарым...

Пугачевтың казак ҡанында батшалыҡ нәфсеһе ҡайнай башланы, ахры. Уның старшиналарға ҡоро рәхмәт һүҙе менән генә сикләнгеһе килмәне. Батша икәнен танытҡыһы килде. Ҡапыл күҙҙәре осҡонланды, һыпын турайтты, үҙе һәлмәк тонға күсте:

— Атамандар, коллегия! Телдән именной указ иғлан итәм. Ә һин, секретарым Алексей Дубровский, тыңла, батша указын иртәгә шартына килтереп, ҡағыҙға төшөрөрһөң.

Бер аҙ тын алғас, тантаналы тауыш менән дауам итте:

— Алла һиммәте менән беҙ, Петр өсөнсө император-падишаһына тоғро хеҙмәттәре өсөн старшина Базаргул Юнаевҡа фельдмаршал тигән юғары чин бирәбеҙ.

...тоғро хеҙмәттәре өсөн старшина Юламан Ҡушаевҡа генерал чины бирәбеҙ.

...старшина Мортаза Йортауыловҡа полковник чины бирәбеҙ. Батшағыҙға иман вә итәғәт менән тоғро хеҙмәт итегеҙ!

Мәжлес шауынан, араҡы шауҡымынан иҫереп, ирәйеп алған атамандар, айырыуса башҡорт старшиналары, бындай указды ишеткәс, айнып, етдиләнеп киттеләр. Алдарында үҙҙәре менән тиң кеүек мас килеп ултырған казакты түгел, барына баш батшаларын тойҙолар йәнә. Үҙ вазифаһын шәйләп, тәүҙә полковник Перфильев ҡауҙарланып эшкә тотондо. Коллегия ағзалары турайышып ултырҙы. Бәҙерғол Афанасий Павлович ҡушарында Пугачев алдына барып баш эйҙе. Емельян Иванович Ермила ҡулынан алып батша һынлы көмөш тәңкә тағылған ҡыҙыл яҫы таҫманы Бәҙерғолдоң муйынына элде. Был фельдмаршаллыҡ миҙалы ине, күрәһең. Бәҙерғол тағы нығыраҡ эйелеп, ҡуш ҡулын ҡымтып рәхмәт әйтте, падишаһына тоғро хеҙмәт итергә һүҙ бирҙе. Шул уҡ церемония Юламан Ҡушаев, Мортаза Йортауылдар менән дә ҡабатланды. Ә Алексей Дубровскийға яҙырға ҡушылған батшаның именной указы иртә-

геһенә түгел, бары бер аҙнанан һуң әллә ҡайҙа Красноуфимск яҡтарында ғына ҡағыҙға төшөрөлдө.

Хәлдәр ҡапыл ҡырҡыулашып китте. Иртән генерал де Колонгтың төп көсө менән Силәбегә инеүен белделәр. Ә Силәбе пугачевсыларға ус төбөндә генә, Байғазынан 25 саҡрым. Дошмандың бер сәғәт эсендә килеп баҫыуы бар. Тынғыһыҙ Михельсон көньяҡтан, Сыбаркүлдән бер һикереүҙә, юлды быуыуы ихтимал. Себер гарнизондары яҡын. Аҙым һайын каратель отрядтары.

Емельян Пугачев самаланы: иркенләп ғәскәр тупларға, ҡапыл һөжүм ойошторорға форсат, ҡеүәт юҡ. Иң яҡшыһы — бар көстө әрәм-шәрәм итмәй әлегә эҙ яҙлыҡтырыу, Урал эсенә, Башҡортостанға йүнәлеү. Шуға ул Силәбе менән Сыбаркүл тарафына Байғазы Көҙәмешов етәкселегендә бер төркөм башҡорт һыбайлыларын юл ҡапларға ҡалдырҙы ла төп көстө — казак һәм башҡорт отрядтарын Златоуст табан юлланырға бойорҙо. Арттан төшөр дошманға эҙәрлекләү ауыр булһын һәм бер ни ҡалмаһын өсөн, юл өҫтөндәге ауылдарҙы яндырырға, күперҙәрҙе емерергә әмер бирҙе. Шул көндө үк Силәбе тирәһендәге, Мейәс йылғаһы буйындағы, Сыбаркүл яғындағы ауылдар, биҫтәләр утҡа сорналды, күперҙәр емертелде, аҙыҡ-түлек, фураж һыпырып алынды. Халыҡтың ҡорал тота алғаны пугачевсыларға ҡушылды, ҡалғандары ауҡан ерҙәргә оҙатылды.

Башҡорт ғәскәрҙәренә баш — фельдмаршал Бәҙерғол Юнаевтың мең ярымлап һыбайлыһы Пугачев армияһының төп өлөшөн тәшкил итте, урман-таулы ерҙәрҙән юл ярып, казак атамандарын көнбайышҡа алып китте. Юлда уларға яңы отрядтар өҫтәлә торҙо.

Инанғандың иманы ныҡ, Урал эсенә һуғышһыҙ-ниһеҙ имен үтеү генә түгел, пугачевсыларҙың саҡрымдар һайын көсө артты, ышаныстары нығынды. Өҫтәүенә — теләгән ҡолона сығарып ҡуйыр юлына — Үргә Ҡыйғы ауылы янында Пугачев ғәскәрен мең ярым һыбайлылары менән Салауат Юлаев ҡаршы алды. Ғәскәр бермә-бер ҡеүәтләнде. Емельян Пугачев үҙен хәҙер ысынлап та ышаныслы атамандары, генералдары бар ҙур армиялы полководец-батша итеп тойҙо.

Бына ҡайҙа килеп осратты Бәҙерғол Пугачевтың яратҡан яугирын, башҡорт халҡының дан алып өлгөргән йәш батыры Салауат Юлаевты — яу юлында. Ҡалай аҡыллы сос егет! Пугачев ғәскәренең ҡайҙалығын самалап, юрта-уылдарын ебәреп, алдан ҡаршылар урынын һайлаған. Үҙ һыбайлыларын тейешле тәртипкә килтергән.

Инеш үҙәне. Тирә-яғы тауҙар. Ике-өс йөҙ сажин киңлек ялан. Салауаттың өс ыҫпай һыбайлыһы байраҡ елберләтеп Пугачев армияһы ҡаршыһына юрттырып килде, башлыҡтары Салауат Юлаевтың хөрмәтле батшаны көтөүен, ғәскәрен уға ҡушыуын хәбәр итте. Уның артынса Салауат Юлаев үҙе, яһауылы, сотниктары менән һыбай килеп, Пугачев алдында ысын хәрбиҙәрсә рапорт бирҙе:

— Петр Федорович батша хәҙрәттәре, мең ярым башҡорт атлыларын һеҙгә алып килдем. Атайым Юлайҙың отряды Эҫем янында. Ул да һеҙгә ҡушыла. Ҡабул итеп алығыҙ ғәскәремде, батша хәҙрәттәре.

— Ҡабул иттем атлыларыңды, Салауат Юлаевич. Батшаңа тоғро хеҙмәттәрең өсөн ҙур рәхмәт! Рәхмәт һеҙгә, башҡорт балаҡайҙарым!

— Олуғ бадишаһ ғали йәнәптәре, мәңге тоғро хеҙмәт итербеҙ!

Шул ыңғай Салауаттың ҡораллы һыбайлылары дәррәү «ура» ҡысҡырып яуап бирҙеләр.

Полковник Афанасий Перфильев Салауатты Пугачевтың яу-ярандары, атамандары менән һыбай таныштырып сыҡты:

— Иван Белобородов, главный атаман, походный полковник.

— Андрей Овчинников, войсковой атаман.

— Алексей Дубровский, дәүләт коллегия секретары.

— Кинйә Арыҫланов, главный полковник, старшина.

— Базаргул Юнаев, фельдмаршал, старшина.

— Юламан Ҡушаев, генерал, старшина.

— Мортаза Йортауылов, полковник, старшина...

Бәҙерғол Салауаттың янып торған күҙҙәренә, киң маңлайына иғтибар итте. Егермеләр тирәһендәге егет-елән, ә йөҙөндә, киң күкрәгендә, беләктәрендә күпме көс-ғәйрәт. Хәрәкәттәре ҡалай етеҙ һәм иплe. Урыҫса һәйбәт һөйләй. Өҫтәүенә, үҙен сәсән-шағир тиҙәр. Башҡорттоң ярты илен яуға күтәргән яугир, дан батыр. Пугачевтың уны ҡәҙерле балаһындай яҡын күреүе әллә ҡайҙан һиҙелеп тора.

Йәһәт кенә кәңәшмә ҡорҙолар. Салауаттың Башҡортостандағы хәл-әхүәл, яу хәрәкәттәре тураһындағы һүҙен тыңланылар, кәңәшеп иштеләр. Ул Красноуфимск аша Усаға сығыу, Урал заводтарын ҡулға төшөрөү, көс туплау, туптар менән ныҡыраҡ ҡоралланыу яғын әйтте. Бер нише атамандар, шул иҫәптән Бәҙерғол менән Исәт провинцияһы старшиналары, берҙәм көс менән Силәбегә һөжүм итеүҙе, Себергә үтеүҙе мәслихәт күрҙе. Һуңғы тәкдимгә Пугачев күнә яҙып ҡуйғайны ла, Себер гарнизондарының көсәй-

телеүен ишетеп, уйынан кире ҡайтты, Салауат фекеренә ҡушылды.

Емельян Ивановичтың үҙ күрһәтмәләре менән ҡеүәтләнгән был план грандиоз ине: Красноуфимск аша марш менән йәһәт Усаға сығырға, Урал заводтарына эйә булырға, Ҡама буйлап Ҡазанға һөжүм итергә. Унан Мәскәүгә юл асыҡ. Бының өсөн тылды нығытырға. Бәҙерғол башлығында Исәт провинцияһы башҡорттары ғәскәренә Силәбе менән Сыбаркүл йүнәлешендә поход башларға. Һул флангыны хәүефһеҙ итер өсөн, Өфө йүнәлешендә сапҡындар ойоштороорға.

Әлеге кәңәшмәлә ҡатнашҡандарға ғына билдәле был серле план хупланып, таң менән Пугачев армияһының төп көсө Златоуст ҡарай поход сыҡты. Бәҙерғол тылды ҡаплар өсөн — кире боролдо.

## АҘАҒЫ ЮҠ ЭПИЛОГ

Стратегик бурыс атҡарылды. Бәҙерғол генерал де Колонгтың Пугачевты эҙәрләп килер юлын бүлде, уны Силәбе, Сыбаркүл тирәләренән ары уҙғарманы. Себер баш командующийының каратель отрядтарының хәрәкәте лә үҙҙәренең нығытмалы төйәктәре, Исәт провинцияһының көнсығыш сиктәре менән сикләнде. Юламан һыбайлылары Силәбе тарафына хәүеф тыуҙырҙы. Бәҙерғол үҙе Ҡыштым, Ҡәҫле заводтарын кире яулап алыу, туп-ҡорал ҡулға төшөрөү ниәте менән төньяҡтан һөжүм ойошторҙо. Ҡоломбәт отрядтары күлдәр тирәһендә ҡанлы бәрелештәргә инде.

Мәгәр әйләнеп, төп йүнәлештәргә тупланып өлгөргәнсе, тик тормаҫ Михельсон отрядтары ғына Пугачев ғәскәре эҙенә төшөп алғайны.

Пугачев менән Салауат үҙҙәре ике тапҡыр Михельсон отрядтарына иҫкәрмәҫтән һөжүм ҡылғандар. Береһе — 3 июндә Әй буйында, икенсеһе — ике көндән һуң Мәсәғүт янында. Һөйләүҙәргә ҡарағанда, ике яу ҙа бик ҡаты булған, әммә бер яҡ та әллә ни өҫтөнлөк ала алмаған, тиҙәр. Михельсон ныҡ йонсоп, ғәскәре аҙайып, Өфөгә ҡайтып китергә мәжбүр булған, т. и. ә Пугачев ары юл ярған, ҡай тарафҡалыр эҙ юйған икән.

Пугачев ғәскәрен батша генералдары, ысындан да, июнь урталарына табан тамам күҙҙән юғалта, һис ни асыҡ хәбәр белә алмай.

Июнь аҙағында Бәҙерғол төп армия коллегияһынан ҡәҙерле ҡағыҙ алғанда, унан да ҡыуаныслыраҡ хәбәрҙәр ишетте: Салауат Юлаев отрядтары Красноуфимскиҙы яу-

лап алған, Көңгөрҙө ҡамаған, ә Пугачев Усаны алып, Ҡама һыуы аръяғына сыҡҡан. Тимәк, Ҡазанға юл асылған.

Ҡағыҙы ла күңелде күтәрерлек. Теге телдән әйтелгән именной указ документы. Аҙагына 1774 йылдың 5 июнь датаһы ҡуйылған, батшаның үҙ ҡултамғаһы, Петр Өсөнсө һүрәте төшөрөлгән, түңәрәкләп, һүҙҙәре ырып яҙылған, һурғыс мөһөр баҫылған. Матур каллиграф яҙыуҙы Бәҙергол ҡат-ҡат уҡыны:

«Божиею милостию мы, Петр Третий, император и самодержец Всероссийский, жалуем от армии нашей в фельдмаршалы депутата Уложенной Комиссии старшины Исетской провинции Базаргула Юнаева, в генералы старшины Кара-Табынской волости Юламана Кушаева, в полковника старшины Айлинской волости Муртазы Юртаулова».

Бер ҡыуанысы, үҙе үк аҙағынаса төшөнөп бөтмәгән оло исемдең үҙенә бирелеүенә ҡарағанда, батша тейешле кешенең ил-көн өсөн йәнен аямаҫ уҙамандарының эшен, һүҙендә тороп баһалап, күңелдәрен күрә белеүендә ине. Генералдарҙы былай күргәне бар,ә фельфмаршал тигәндәрен күргәне лә, ишеткәне лә юҡ шикелле. Петр батша хәҙрәттәре ғәскәрендә ул баш атамандарҙан да башыраҡ була микән инде?

Һәр хәлдә, әле ул именной указдағы исем-чиндың дәрәжәһен төшөнөргә баш та, форсат та етер мәл түгел ине. Указ — батшалар эше. Үтәү — подданныйҙарыныҡы.

Пугачевтың Байғазыла саҡта Бәҙерғолға әйткән икенсе әмере уйында: ҡыр-ҡаҙаҡтар менән бәйләнеш урынлаштырыу, уларҙы яуға ылыҡтырыу. Батшаһы уға май баштарында ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың урта йөҙ башы Аблай ханға, Дауытбай тарханға егерме башҡорт һыбайлыһы менән хат, манифест ебәргәнен әйткәйне. Аҙаҡ тағы ҡыр-ҡаҙаҡтарҙы күтәрешергә бер төркөм башҡорт-ҡалмыҡ отряды киткән. Ләкин ошоғаса береһенән дә һис хәбәр-хәтер юҡ.

Аблай ханға Бәҙерғол батша үтенесе итеп хат менән яңы отряд әҙерләп ебәрҙе. Ун көн эсендә араларынан өсөһө өмөтлө генә хәбәр менән әйләнеп ҡайтты: имен-аман барып еткәндәр, ханға хатты тапшырғандар. Элек киткән башҡорттарҙы осраҡҡандар. Ҡыр-ҡаҙаҡ ялпыһы Петр батшаға ҡушылыу яғында икән, хатта хан үҙе лә. Тик ике солтаны, байтаҡ бай-старшиналары ҡаршы төшөп, ҡамасау һалғандар. Шулай ҙа бер нисә отряд ойошторол ятҡан, Себер линияһына һөжүм әҙерләгән көндәре, ти, киткән башҡорттарҙың ҡыр-ҡайсаҡтар менән.

Яҡындағын йыраҡтан бел тиҙәрме, бер серле хәбәр ҙә килтерҙе оҙон ҡолаҡтар. Троицк яғындағы һуғышта Бәҙер-

голдоң знакомы атаман Григорий Туманов гәйеп булғайны. Уны дошман карателдәре тотоп, айға яҡын Үрге Яйыҡ дистанцияһында һорау-тикшереү алып барғандар икән. Әлеге ҡанһыҙ комендант Ступишин язалап-яфалап та әллә ни кәрәкле мәғлүмәт ала алмағас, көслө конвой менән Ҡыҙыл крепосына оҙатҡан икән, һуңыраҡ Ырымбурға губернатор ҡарамағына тапшыртыу өсөн.

Туманов әле бары Ҡыҙылда булырға тейеш. Тәүәккәлләп сапҡын ебәрә Бәҙергол: Ҡыҙылдан ары Ырымбур юлын һағаларға, конвой сыҡһа, нисек тә Тумановты ҡотҡарырға. Килешеүсә, башҡорт-ҡаҙаҡ отрядтары Яйыҡ буйында, Гөбөрлө ҡолғаһенән йыраҡ түгел юлда, конвойҙы баҫып ҡотҡаралар бит атаманды. Ҡаҙаҡ далаһына үҙҙәре араһына алып китәләр. Губернатор Рейнсдорп бешмәгән генералдарының асығауыҙлығынан, ниндәй тотҡондо ҡулдан ыс҄ҡындырыуҙарына асыуланып, хәҙер Аблай хандан атаман Тумановты «Аҡ батшаның яуыз дошман — баш боласыһын» кире ҡайтарыуҙы үтенеп хаттар яҙа. Ләкин хан атаманды ҡайтарыу түгел, губернаторға хәбәр ҙә итмәй. Ҡаҙаҡса яҡшы белгән үҙ кеше Туманов ҡаҙаҡтарҙы аҡ батшаға ҡаршы яуға әҙерләй. Ҡыр-ҡаҙаҡтарҙың Себер линияһына һөжүмдәре көсәйә, тим-тим яу-баҫҡындар ҡыҙып китә.

Бәҙерғол үҙе ҙур отряд менән тыуған иләүе Мәкәте яғына юллана, Ҡыштым, Ҡаҫле заводтарынан каратель командаларын ҡыҫып сығара. Шул тирәләге яуҙар менән етәкселек итә. Бөтә йәй буйына ауыр, әммә уңышлы һөжүм алып баралар.

Ләкин көҙ айҙары инеүгә хәлдәр ныҡ ауырлаша. Ҡазанды алғас, Волга аръяғына сығып киткән, Саранск, Пенза, Саратов, Ҡамышин, тағы әллә ни саҡлы ваҡ ҡалаларҙы ҡулға төшөргән, Үҙәк Россия ерҙәрендә тағы олораҡ яу ҡубарған Емельян Пугачевтың сентябрҙә Царицындан аҫтараҡ Ҡара яр янында батша ғәскәрҙәре тарафынан ҡыйратылыу хәбәре ишетелә. Уның артынса Пугачев үҙе лә тотолған, ҡул-аяҡтарын бәйләп, конвой менән Мәскәүгә оҙатылған тигән шомло хәбәр ҙә килеп етә. Быны раҫлағандай, батша ғәскәрҙәренең Пугачевты әҙәрләгән ҙур командалары Крәҫтиәндәр һуғышының һаман ҡыҙыу барған Башҡортостан территорияһына, Исәт провинцияһына ябырыла. Туплы, ҡоралллы регуляр ғәскәр ташҡынына оҙаҡ ҡаршы тора алмай, баш күтәреүселәр яуы берәм-берәм ҡыйратыла. Бәҙерғол отрядтарының Салауат, Юлай отрядтары менән бәйләнеше өҙөлә. Үҙе лә төрлө яҡтан һөжүм итеп килеүсе карателдәрҙән бер нисә тапҡыр еңелеп, от-

рядтары тарҡалып, ваҡ төркөмдәргә бүленеп, партизанлыҡ алышына күсә.

1774 йылдың көҙөндә Крәҫтиәндәр һуғышы баҫтырылған, Башҡортостандағы һуңғы яу төбәктәре ҡыйратылған, күптәр баш һалған осорҙа, Исәт провинцияһында әле алыштың тамамланмағаны күренә. Исәт провинцияһы воеводаһы Лазаревтың генерал-аншеф Панинға 1774 йылдың 6 ноябрендә ебәргән рапортында «Бәҙерғол Юнаев, Юламан Ҡушаев һәм Һары Абдуллиндар һаман баш эймәйҙәр» тигән юлдар бар.

Улар тағы оҙаҡмы яулашҡан, баш эймәгән — бөтөнсә мәғлүмәт, хәбәр-хәтер юҡ. Тарихи документтарҙа Бәҙерғолдоң яҙмышы хаҡында бер йылдан һуң һуңғы бер мәғлүмәт кенә күренеп ҡала. 1775 йылдың 2 октябрендә генерал-губернатор Рейнсдорп Сенат обер-прокурорына Бәҙерғол Юнаевтың тотолоуын хәбәр итә.

Баш күтәреүселәргә ҡаршы көрәшеүсе батша ғәскәрҙәренең баш командующийы генерал-аншеф Паниндың адъютанты аҙаҡ офицерҙарға шундай ғибрәтле бер тамашаны һөйләгән:

Бәҙерғол Юнаевтың кескәй генә отрядын Илмән буйында ҙур команда менән ҡамап, бирелмәгәнен ҡырып, үҙен көс-хәл менән ҡулға эләктергәс, провинция үҙәге Силәбегә килтергәндәр. Баш командующий Бәҙерғол Юнаевтан тәүге һорауҙар алған. Үтә йонсоған, туҡмалған, яфаланған булһа ла, тотҡон үҙен сабыр, ғорур тотҡан. Барыһын аптыратҡаны йәнә шул булған, баш командующий, үҙенең ҙур башлыҡ, ҡаты ҡуллы, оло власлы кеше икәнен күрһәтергә теләп, бик тупаҫ, һауалы ҡылана башлаған икән, тотҡон көтөлмәгән талап һәм шарт ҡуйған:

— Мин Екатерина Алексеевна галиә йәнәптәренең депутаты, — тигән ул. — Депутат закон буйынса тейелгеһеҙ. Хәсәннәт әл-нәдеп[1]. Өҫтәүенә, беҙҙең хәрби чиндар ҙа тиң түгел. Әгәр ғәйебем булып, чин-дәрәжәләр алынһа ғына, мин тотҡон. Шуларҙы онотмағыҙ, генерал-аншеф Ваше благородие.

— Һин тотҡон ғына түгел, яуыз хыянатсы, бола башлығы! — тип ярһып аҡырған генерал. — Хатта допрос, следствиеһыҙ язалатырға иркем бар, теләһәм.

— Депутатҡа ундай яман сара ҡағылмай.

— Депутат?! Хыянатсы һин!

— Һағыраҡ ҡыланығыҙ, генерал. Ундай исемгә яла яғыу килешмәҫ һеҙгә, Ваше превосходительство.

---

[1] Хәсәннәт әл-нәдеп — закон буйынса тейелгеһеҙ.

Шул саҡ Бәҙерғол ҡуйынынан таҫмалы депутатлыҡ миҙалын һәрмәп табып, муйынына таҡҡан. Панин миҙалды күреп, аптырап, ҡаушап ҡалған. Миҙалға үрелергә, өҙөп алырға баҙмаған.

— Һы, һине, улайһа, самозванецтың баш атаманы, хатта фельдмаршалы булған тиҙәр. Дөрөҫмө?

— Генерал-аншеф, мин Петр Федорович император Өсөнсө ғали йәнәптәренең һалдаты, именной батша указы менән бирелгән фельдмаршалы. Мин теләһәм, үҙемә тиң исем-чиндарға ғына яуап бирә алам.

— Бына ҡалай һайрамаҡсыһың икән, боласы тотҡон. Самозванецтың үҙе кеүек мундирһыҙ фельдмаршалы. Бәлки, һиңә, ҡараҡҡа, Ваше сиятельство, тип өндәшергә кәрәктер. Ә?

— Уныһы һеҙҙең эш, генерал. Хәрби этикет.

— Этикет?! Нисек телең әйләнә уға? Етте! Шаярыу бөттө. Яуап бир миңә, тотҡон: ни өсөн Екатерина Алексеевна ғалиә йәнәптәренә хыянат иттең, депутатлығыңды аяҡ аҫтына һалып тапаның?

— Екатерина Алексеевна ғалиә йәнәптәре батша исеменән биргән вәғәҙәләрендә тормаған өсөн. Ә депутатлыҡ вазифаһына килгәндә, ул халыҡ наказын Уложенный Комиссияла һүҙ менән даулауҙан файҙа булмағас, ҡорал, көс менән яулауға күсеүе ине.

Генерал, тотҡонон һүҙенән тотоп алғандай, ҡыуанып уҡ:

— Әһә, депутатлығыңа төкөрөп, разбойлыҡҡа күстең инде, самозванецҡа ҡушылдың?

— Юҡ, генерал. Депутатҡа тапшырылған наказдарҙан да олораҡ вәғәҙәләр, ирек, ер-һыу биргән Петр Федорович батшаға ҡушылдым мин. Рус батшаларына хеҙмәт итеү хыянат түгелдер.

— Бер илдә ике батша булмай. Ана, самозванец батшаң, Яйыҡ казагы Емелька Пугачев, тотолоп, Мәскәү казематында ята. Яза көтә. Һинең яҙмыш та шунса. Әгәр ғәйептәреңде таныһаң, тәүбәгә килһәң, яуыз башлығыңды фаш итһәң, бәлки, язаң бер аҙ йомшартылыр.

— Әгәр ил-йорт наказдарын атҡарыу, батша бойороҡтарын үтәү ғәйеп икән, шунда ғына мин ярлыҡау үтенә алам. Бүтән ғәйебем юҡ минең. — Бер аҙ тын торғас, тағы шуны өҫтәне: — Генерал, өҫтәүенә, беҙ хәрби кеше. Беҙгә, устав буйынса, антты тотоу, приказды үтәү — закон.

Был — Бәҙерғол хаҡында офицер мәғлүмәте, шаһит һүҙе. Унан генерал-губернатор рапорты. Шуларҙан башҡа Бәҙерғолдоң һуңғы яҙмышы тураһында бер ниндәй ҙә мәғ-

лүмәт табылмай әлегә тарихта. Уның ғүмер юлы нисек осланғандыр, мәғлүм түгел. Хәбәрһеҙ юғала ул күп һалдаттарса.

Емельян Пугачев Мәскәүҙә язалап үлтерелә. Үҙе менән тағы алты атаманы. Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндар Рогервикка мәңгегә һөргөнгә ебәрелә.

Ә бына Ҡинйә Арыҫлановтың һуңғы яҙмышы мәғлүм түгел. Бәҙерғол Юнаевтыҡы ла. Григорий Тумановтыҡы шулай уҡ.

Улар үлемгә хөкөм ителеп язаланһа, рәсми документтар ҡалыр, бөтә илгә билдәле булыр ине.

Ҡинйә Арыҫланов менән Бәҙерғол Юнаев, бәлки, Григорий Туманов эҙҙәренән ҡыр-ҡаҙаҡ араһына киткәндер, үҙҙәрен үлем-язанан ҡотолдорор йә бүтән юлын тапҡандыр. Баш күтәрлек эштәр эшләп тә, башты һаҡлап ҡала алыу, исемеңде бысратмау — үҙе батырлыҡ. Тик хәбәрһеҙ юғалған оло батырҙарҙың исемен тарих ҡына онотмаһын. Халыҡ хәтеренән сыҡмаһын. Шунда ғына улар ҡәҙерле һәм хәбәрле уҙамандар булып ҡала.

Батырҙар эҙһеҙ юғалмай.

*1982.*

# РУДАСЫ ИСМӘҒИЛ ТАСИМ УЛЫ

1764 йылдың декабре. Санкт-Петербург.

Нева ярындағы Берг-коллегия алдына сана коляска килеп туҡтаны. Ҡыҫҡа бәсә тун кейгән икәү һәм мундирлы чиновник тура парад ишегенә йүнәлде. Барокко стилендәге мөһабәт бина, уның иркен вестибюлдәре, мәрмәр баҫҡыстары, колонналы залдары уларға күптән таныш ине, күрәһең. Зиннәт, йыһазға һис иғтибар итмәй, икенсе ҡатта генерал-прокурорҙың ҡабул итеү кабинеты алдындағы юрист-секретарға йәһәтерәк үттеләр. Уныһы ла бик йыбанманы. «Ҡенәз Александр Алексеевич ғали йәнәптәре, — тип рәсми мөрәжәғәт итте ул, инеп, юғары түрәһенә, — граф Чернышев тартып алған рудниктар мәсьәләһендә башҡорттар килде. Исмәғил Тасимов менән Яҡуп Аҙнағолов. Рудопромышленниктар. Дело, прошениелары һеҙҙең ҡарамаҡта, генерал-прокурор. Тәғәйенләнгәнсә, ҡабул итеүегеҙҙе көтәләр, сиятельство.

— Ә граф Иван Григорьевич бындамы?

— Бына-бына килеп етергә тейеш.

— Улайһа, граф килгәнен миңә хәбәр итерһегеҙ, — тине лә кенәз алдында ятҡан шаҡтай ҡалын делоны аҡтарырға кереште. Прошение, рапорт, тикшереү документтарында граф Чернышев, управляющий Санников, баронесса Строганова фамилиялары, башҡорт рудопромышленник исемдәре, Мотовилиха, Йок, Ягошиха заводтары исеме күҙенә йышыраҡ салынды. Башҡорттарҙың тармаҡ-тармаҡ тамғалы шикәйәттәре осраны. Йөҙәр мең бот руда, төшөм, ташыу хаҡы хаҡында һандар, иҫәпләүҙәр күренде.

Ҡасан инде быларҙы үҙ күҙҙәре менән күреп, үҙе тикшереп йөрөгәйне бит кенәз. Берг-коллегияның генерал-квартирмейстеры вазифаһында. Барыһы ла асылған, асыҡланған кеүек ине. Ҡарарҙар, ҡәтғи күрһәтмәләр булғайны. Нишләп һуң әле быларҙың һаман осо-ҡойроғо юҡ? Хикмәт

нимәлә? Хаҡлыҡ бизмәне табаҡтары ҡайһылай тарта? Ғә-ҙел хөкөм аллаһы үҙе яңылышамы әллә?.. — Генерал-про-курор ҡағыҙҙарҙы ғына түгел, үҙе күргән тикшергәндәрен, күңелендәген барларға тотонғандай булды.

Алғы бүлмәлә ҡабул итеүҙе көтөп, дәғүәсе башҡорттар ишектер тыныр, шымайып ҡалғайны был саҡ. Стенала алтын буталлы биҙәктәргә, ҡулына япраҡлы ҡулса тотҡан ниндәйҙер пар ҡанатлы бала, оҙон таяҡлы ярым яланғас кеше һүрәттәренә сәйерһенеп ҡарап ултыра-ултыра ойобораҡ та киткәйнеләр шикелле. Ә уяу Исмәғилде бигерәк тә дәү имән ишектең ҡалҡыу биҙәктәренән битәр оло еҙ тотҡа урынына ажғырып торған арыҫлан башы һыны аптыра-тыңҡыраны. Оронһаң, ҡулынды ҡабып йотор төҫлө ине уға арыҫлан баш тотҡа. Хәйер, бындай сәйер тотҡаны ғынамы, төрлө еҙ, баҡыр ҡулсалыларын да күп тотто, зиннәтле һа-райҙар алдында, ҙур ишек яңаҡтарында таш һын булып баҫып торған арыҫлан яндарынан да күп үтте инде ул. Көмбәҙҙәрендә осоп йөрөгән ҡанатлы фәрештәләр, стена-ларында әллә ниндәй шөкәтһеҙ нәмәҫтәкәй һүрәттәрен дә күп күрҙе. Хәҙер барыһына күнегеп тә бөттө. Тик йәнһеҙ таш һындарҙың, буяу һүрәттәрҙең хоҙай шомлоғонанмы, юлдары ғына бик уңманы. Әйтерһең, шул ажғыр арыҫлан-дар, ҡуш башлы бөркөттәр гел арҡыры төштө. Әллә донъя-ла бары хоҙай ҡушҡаны, яҙмышыңа яҙғаны шулмы? Ата-баба йолаһын, юлын да тотманы түгел.

Тасимовтар — аҫаба башҡорт. Боронғо ғәйнә ырыуынан. Ата-бабалары Ҡама һыуы буйында бик күп ер биләгән. Хәҙерге Уса юлы Ғәйнә иләүенең Ҡуян ауылын атаһы Та-сим үҙе нигеҙләгән. Шуға уны йыш ҡына Тасим ауылы тип тә йөрөтәләр.

Атаһы ғәйнәләр был яҡҡа борондан уҡ килеп төпләнгән тип һөйләй торғайны. Ҡайҙандыр Алтай яғынан. Чуд йыл-ғаһы буйында ниндәйҙер халыҡты урман эсенә ҡыҫырыҡ-лағандар. Хәҙер был йылғаны Чусовой тиҙәр. Ҡыпсаҡ, Ҡа-зан хандары замандарында ғәйнәләргә Ураҡ Мәмәтҡол менән Ураҡ Һөйөндөк бей баш булған икән. Ураҡ Һөйөн-дөк бей, уҡымышлы кеше булып, имам һәм муллалыҡ ва-зифаһын да алып барған, ти. Әле улар биләгән ерҙәрҙән аҡҡан Юғары Мулла, Түбән Мулла йылғалары ана шул Һөйөндөк мулла исеменән ҡалған. Иван Грозный Ҡазанды алғас, башҡорттар аҡ батшаға баш һалғандар. Ошо ерҙә-рен биләргә ярлыҡ алғандар, яһаҡ түләү шарты менән. Яһағы — өй башына бер һыҫар тиреһе. Исмәғилдең ҡарт-аталары ырыу исеменән йылына 276 һыҫар тиреһе түләгән. Уны ҡышын ҡалтағай менән Чердын ҡалаһына илтер бул-ғандар. Аҙағыраҡ — Өфө ҡалаһына.

Ғәйнәләр шулай ерҙәренә үҙҙәре хужа булып, күпмелер иркен, ирәүән йәшәгән. Тик был күпкә бармаған, ахры. Атаһы һөйләүенсә, ике йөҙ йылдар самаһы элек әлеге Чуд йылғаһы буйына ҡасҡын урыҫтар, урыҫ купецтары килеп сыҡҡан. Ер-һыуға, байлыҡҡа бик ҡыҙыҡҡан былар. Шул һыу буйына, Ҡаманың уң яҡ ярына, бер-ике ауыл булып ултырғандар. Былар менән һәйбәт күрше булышҡандар. Татыу йәшәгәндәр.

Бер заман Строганов тигән барон бик күп кешеләр алып килеп, Ҡаманың һул яғында ауылдар, заводтар һалдырта башлаған. Ғәйнәләрҙең биләм, һунар ерҙәре ҡыҫылған. Ул ғына етмәгән, барон кешеләре башҡорттарға төрлөсә ҡыҫым-йәбер ҡылғандар, туғайлыҡтарын, иген баҫыуҙарын тапатҡандар, солоҡтарын ҡыйратҡандар. Шунан ғәйнәләрҙең бер бабаһы Мәскәүгә олуғ Михаил Федорович батшаның үҙенә барып, Строганов барондың баш-баштаҡлыҡтары хаҡында шикәйәт биргән икән. Аҡ батша башҡорттарҙы яҡлап яңы ярлыҡ яҙҙыртҡан, Өфө воеводаһы Желобовскийға Строгановтарҙың һарауһыҙланыуын тыйырға бойороҡ ебәрткән, ти.

Бер аҙ баҫылыңҡыраған былар. Ләкин Строгановтарҙың яңы тоҡомдары, Григорий Дмитриевич кенәз заманында был ҡыҫым тағы көсәйгән. Кенәздең Пронька Алексеев тигән яман бер приказчигы була торғайны, тип һөйләгәне бар атаһының. Шул приказчик бер йылды ҡоралды кешеләре менән Ҡуян ауылын килеп баҫҡан. Атаһының һыу тирмәнен ватҡандар, быуаһын йырып ебәргәндәр. Тирмән, ау, һунар ҡорамалдарын талап алып киткәндәр. Аптырағас, былар Мулла йылғаһының үренәрәк күсеп ултырырға мәжбүр булғандар. Был да тынғылыҡ бирмәгән: баяр кешеләре башҡорт ерҙәренә керәп бесәнен сапҡандар, ағасын ҡыҫҡандәр, балығын, кейеген аулағандар. Сабырлығы бөткән атаһы киткән Мәскәүгә, Петр Беренсе батшаның үҙенә. Йәш батша башҡорттарҙы яҡшы ҡаршылаған, боронғо биләм ерҙәрен раҫлар ярлыҡ биргән. Вотчина биләмдәрен ҡурсалаған, атаһының ҡәҙерләп һаҡлаған был ярлыҡты Исмәғилдең күргәне генә түгел, уны ҡат-ҡат ижекләп уҡып ятлап уҡ бөткәйне. Тарих булыр документ, ырыуға изге яҙыу урынына ине ул: «От Великого государя, царя и Великого князя Петра Алексеевича всея великие и малые и белые России самодержца на Уфу стольнику нашему и воеводе Ефиму Панкратьевичу Зыбину. В прошлом 1700 году августа в 5 день бил челом Великому государю Уфимского уезду Осинской дороги Гайнинской волости деревни Куяновы Тасимко Маметов с товарищи: истари де прадедов, дедов и отцов их владенья вотчины по рекам от Камы реки

с уст по Мулле и до вершины по обе стороны, а с устья Буртем речки по обеим сторонам до вершины по Кузюльбаевскую пажню и по Чюзу речке пашенные земли и сенные покосы на той же их вотчинной земле прадеды и деды и отцы их они юртами поселились и пашни распахали и сена косили и городьбами прочавечного себе владения разгородились, и с тех де своих угодей платили они ясаку и ныне платят по двести по семидесяти по шести куниц по вся годы без доимки... ... тем русским людям отказать и впредь землю не владеть, а в раззорстве и грабеже и в бою и в увечье указ учинить и о том к тебе дать им нашу Великого государя владенную грамоту...»

Батшаның ошо грамота ҡағыҙы менән ризалашмай, Строганов барон күп йөрөп ҡараған. Бар ерҙә үҙ кешеләре бит. Был ерҙәр күп замандан бирле Строгановтарҙыҡы, ти икән. Улар буш ерҙәргә батша рөхсәте менән килеп нигеҙләнгән, йәнәһе. Ниндәйҙер писчий кенәгәләргә һылтанып булашҡан. Ғәйнәләрҙе батшаға ҡаршы яу ҡуптарыуҙа ғәйепләгән. Көңгөр ҡәлғәһен туҙҙырҙылар, тип сыҡҡан. «Тырышҡанда, ваҡытыңды йәлләмәй йөрөгәндә, ата-бабалар яулап алған хоҡуҡтарыңды яҡларға, хәкикәтте юлларға була ул, улым, — ти торғайны атаһы. — Кешенекен алма, үҙеңдекен бирмә. Үҙ көнөңдө генә түгел, ил көнөн дә күрә бел. Кеше ил-йорт менән көслө».

Тасим ҡарт шулай хаҡлыҡты яҡлап, ил-йорт хәстәрен күреп, Строганов барондарга ла бирешмәгән. Тегеләр тағы шымған.

Йыландың ҡойроғон киҫһәң дә, ағыуы ҡала, ти. Барыбер хаслашҡан бит барондар. 1736 йылғы бола ваҡытында әлеге барон кешеләре килеп, Тасимовтарҙың ауылын яндырып, 102 кешеһен үлтереп киткән. Шунда батша грамотаһы ла янып юҡҡа сыҡҡан.

Был яу-ҡыйралыш мәхшәрен Исмәғил үҙе лә яҡшы хәтерләй, бала ғына булһа ла. Атаһы ғаиләһен, бала-сағаларын нисек ҡотҡарып ҡала алғандыр инде — уны хоҙай ғына белә.

Ярлыҡ-грамота юҡҡа сығыуын сыҡҡан, ә Тасим ҡарт иҫән. Үрһәләнеп, тағы этләшә башлаған барон. Ярлыҡ юҡ, әйҙә ҡыҫ хәҙер. Атаһы ла сос икән, ярлыҡтың копияһын Өфө воеводаһы кәнсәһенән күсертеп алып ҡайтҡан бит. Тағы баярҙың ауыҙын япҡан.

Шулай итеп, төрлө ҡыҫым, баҫып алыу, талау, яндырыуҙарға ҡарамаҫтан, атаһы Тасим Мәмбәт ата-бабаларының төп биләм ерҙәрен һаҡлап ҡала алған.

Исмәғил үҫеп килгәндә, ғәйнә ерҙәрендә бер нисә завод мөрйәләре төтәй ине инде. Рудниктары әллә ни хәтле. Һу-

нар биләмдәре йылға үрҙәрендә, тау эстәрендә генә ҡалып бара. Халыҡ хәҙер күберәк иген игә, урман ҡырҡа, күмер үртәй. Күптәр руда ҡаҙыу, заводтарға ташыу кәсебенә күскән.

Исмәғилдең танауына, завод төтөндәре менән ҡушылып, заман еҫе иртә инде. Ул үҙ алдына донъя көтә башлағанда, ата-бабаларының хәҙер ҡыҫыла барған боронғо һөнәрҙәре менән булмайынса, тура руда кәсебенә тотондо. Ҡаҙнанан үтескә аҡса алып, үҙе рудник асып ебәрҙе. Быға аға-энеләрен, ауылдаштарын йәлеп итте. Тасимовтарҙың рудниктары тағы бер саҡ ун бишкә барып етте. Улар үҙҙәре ҡаҙыған баҡыр рудаһын үҙ ерҙәрендә һалынған Ягошиха, Үрге, Түбән Йок заводтарына ташыйылар. Һәр йөктән тинләп булһа ла төшөм килә торҙо. Меңәрләгән бот руданың тиндәренән һумдар йыйылды. Һумдар рудниктарҙы киңәйтергә, экономиканы нығытырға мөмкинлек бирҙе.

Өҫтәүенә, хөкүмәттән улар бер ни ҡәҙәр льготалар юллап алдылар. Рудопромышленник башҡорттар батша указы менән хәрби хеҙмәттән, ылау ҡыуыу, Илектән тоҙ ташыу йөкләмәләренән бушатылды. Ике ҡулға бер эш күпкә ырамлы китте. Ғәйнә башҡорттары үҙ ерҙәренән төрлө руда-мәғдән таптылар, рудниктар ҡорҙолар, сеймалды[1] заводтарға ташынылар. Ҡуян ауылынан — Тасимовтар, Ҡаҙмаҡтынан — Ишбулатовтар, Ҡолтайҙан — Ҡолтаевтар илленсе йылдарҙа рудопромышленниктарға әйләнеп бара ине инде. Ҡаҙна рудниктарын арендаға алырға яйҙар сыҡты.

Ләкин замандың тиҫкәре елдәре лә көслө ине шул. Эре заводтар тотҡан Строганов баярҙар, Демидов заводчиктар, Чернышев графтар, Санников ише управляющийҙар ҡырында Тасимов кеүек рудопромышленниктар бүре, төлкө өйөрө араһына килеп ингән үр ҡуяндар һымағыраҡ ине. Асыуландылармы, тотто — йотто.

Эштәр яйланып ҡына бара тигәндә, 1757 йылда граф Чернышев ике Йоҡ заводын ҡаҙнанан үҙ ҡарамағына алды. Алды ла шул заводтарҙы сеймал менән тәьмин иткән рудниктарҙы ла үҙенә ҡарманы. Ҡаҙылған рудаларға ла баш булды. Шулар иҫәбенән Тасимовтарҙың уңлап рудниғы тартып алынды, биш йөҙ мең бот ҡаҙыулы рудалары бушлай китте. Шулай итеп, граф бер һелтәүҙә ғуж бүреләй барын ҡапты ла йотто. Күп рудопромышленниктар һемәйеп, кәкре ҡайынға терәлеп ҡалдылар. Терәк рудниктары ҡулдан ысҡынды.

Ятып ҡалғансы, атып ҡал тигәндәй, рудопромышленниктар даулашырға тотондолар. Китте шунда дау-дәғүә.

---

[1] С е й м а л —сырьё.

Бына нисәмә йыл инде уның осо-ҡырыйы юҡ...

Тәүге гауга Санников тигән приказчик менән килеп сыҡты.

Тасимовтарҙың алты-ете рудниғы Йоҡ баҡыр заводы эргәһендә генә ине. Заводтан күп булһа өс-дүрт саҡрым үрҙә. Аҫта ғына завод мөрйәләре төтәп ултыра. Руда иретеү мейестәре ус төбөндә кеүек. Яндарында быуаһы ялтырап ята.

Исмәғилдең был яҡын баҡыр рудниктары яңы һалынған — шахталары әллә ни тәрән түгел. Рудаһы биш-алты сажиндан сығыр менән еңел сығарыла. Өҫтәүенә, өс-дүрт рудниғы тау ҡабырғаһында. Улары тауҙы өңөп ингән. Руданы күтәрәһе лә юҡ, кескәй арбалар менән өң рәүешле шахталарҙан һөйрәп кенә сығараһы. Шуға эштәре лә ырам бара. Йәшкелт һоро баҡырлы мәғдән тау-тау булып өйөлөп китә. Ә уларҙы ун бишләп ылау эргәләге генә заводҡа өҙлөкһөҙ ташып тора. Тау түбәненә булғас, атҡа ла еңел, руданы әллә күпме тейә, ауырлығы, оло мәшәҡәте бик тойолмай.

Көнөнә Тасимовтың ылауҙары әллә ни саҡлы юллайҙар. Заводҡа йөҙәрләгән бот руда инә. Иретеп кенә өлгөр. 1760 йыл өсөнсө иретеү мейесе ҡоролғас, эштәр тағы шәбәйеп китте.

Тик ары күрше рудниктарҙа эштәр бик шәптән түгел. Приказчигы Федор Санников булған биш-алты ҡаҙна рудниғы заводтан шаҡтай алыҫ — 15—20 саҡрымдар. Юлы ла үрле-түбәнле, соҡорло-саҡырлы. Ҡаҙна крәҫтиәндәре, ылауҙары күп булһа ла, алыҫ булғас, эштәре бик ырамай. Приказчиктың үтә ҡатылығына, йәберенә түҙмәй, рудасылары ла бик күңел һалып эшләмәй, ҡасып китеүселәр байтаҡ. Эш, көнкүреш шарттары ауыр. Ашау-эсеү таҡы-тоҡо. Санников ҡаҙна биргән аҙыҡ-түлекте лә ҡыҫып, аҡсаны ла тейешенсә түләмәй, күберәк үҙенә йоморға, кеше көсө, ҡаҙна иҫәбенә байыу яғын ҡайыра.

Күрше рудопромышленниктарҙың, бигерәк тә Тасимовтарҙың, эше ырамлы булыуға, етмәһә, руданы заводҡа осһоҙораҡ хаҡҡа ташыуҙарына йәне көйә приказчиктың. Уларға нисек тә ҡамасауларға, үҙенән уҙҙырмаҫҡа, төшөмдәрен төрлөсә кәметергә мәкер ҡора. Бер саҡ рудниктарҙы берләштерергә, бер компанион булырға тип йөрөп тә ҡараны. Ләкин ҡомһоҙ, бары үҙ яғын ҡайырған моҡот приказчиктан зыянынан башҡа ни файҙа — шәхси промышленниктар күнмәне. Күршеләре кеҫәһенә инмәй торһон әле. Төрлө хәйләләр, этлектәр ҡылып ҡараны — йүне сыҡманы барыбер.

Бер ҡарлы-буранлы ҡышты башҡорттар алыҫыраҡ рудниктарына ҡар йырып юл һалып ҡына бөтһәләр, әҙер юлға Санников ылауҙарын йәһәт кенә үткәрҙе лә, рәхмәт әйтәһе урында, хаслығына барып, һуцғы йөктәренең береһен тар юлға арҡыры яңылыш ауҙарған булып, бар юлды быуҙы ла ҡуйҙы.

Ярҙамға тип Исмәғил бер нисә кешеһе менән үҙе килде. Бүтән ылаусылары ла йыйылып китте. Ләкин Санников күрше рудопромышленниктарҙы ауған йөккә яҡын да ебәрмәй булаша. Үҙе ҡотортоп ҡуйған биш-алты мужигы сыбырҡыларын тотоп юлды ҡаплаған.

Исмәғил приказчикка йомшаҡ өндәште:

— Федор Иваныч, юлды асырға ярҙамлашайыҡ. Күпме ылау тотҡарланып тора бит.

— Тотҡарланһын! Был — ҡаҙна юлы. Ә ҡалғаны беҙҙең эш, — тине ҡырыҫ итеп Санников.

— Беҙ ҙә ҡаҙна кешеләре. Бер үк эш атҡарабыҙ. Хөкүмәткә хеҙмәт итәбеҙ.

— Һеҙ несчастный частниктар, антихристар! — тип ярһып әрләшә башлағайны приказчик, Исмәғил, һүҙ көрәштереүҙең мәғәнәһе юҡлығын күреп, дүрт-биш уҫлаптай ылаусыһы менән юлға арҡыры баҫҡан теге сыбырҡылы мужиктарҙы һөрөп тигәндәй юл ситенә һырыҡтырҙылар. Күмәк, ҡамсылы кешеләргә бүтәнсә ҡаршырға бик баҙманы былар. Санников «ҡаҙна кешеләренә һөжүм ҡылаһығыҙ. Был эш былай ғына ҡалмаҫ, боласылар!» — тип янайянай, үҙе лә тегеләр артынса бер яҡҡа янтайҙы.

Ылаусылар ауған йөктө рудаһы-ние менән юлдан алып, тығынды астылар.

Бындай хәлдәр булғылай торҙо, бөтә торҙо.

Тик бер заман Йок баҡыр заводтарын граф Чернышев, ҡаҙнанан һатып алып, завод һәм рудниктарына баш приказчик итеп Санниковты ҡуйып китмәһенме. Шунан көн дә бөттө Тасимовтарға. Әллә граф менән килешеп, әллә үҙ белдеге менән бөтә рудниктар ҙа хәҙер Иван Григорьевичтыҡы тип, Исмәғилдең рудниктарын да һалдырып алды ул. Уға үҙ кешеләрен ҡушты. Тау булып өйөлгән әҙер рудаларына ла бер тин хаҡ түләмәне. Юлдан ғына түгел, милкен ҡайырып алып, үҙ еренән һөрөп сығарҙы элекке конкурентын.

Исмәғил, нишләһен инде, баш приказчикка баш эйеп, бер нисә тапҡыр һөйләшеп ҡараны.

— Батша законы, Берг-коллегия указдары буйынса, рудниктар элекке хужалары ҡарамағында ҡалырға тейеш йәки уларҙан һатып алыныу әйтелгән бит! — тип үҙ хоҡуғын яҡламаҡ итте.

— Заводты уның рудниктары менән тулай һатып алған граф Иван Григорьевич. Бөтәһенә хәҙер ул хужа, — тип кенә яуапланы баш приказчик.

— Ә ул һатып алыу партикуляр ҡағыҙы менән таныштырға мөмкиндер бит. Һатылған аҡсала беҙҙең өлөш тә булырға тейештер.

— Улары Петербурҙа хужа ҡулында. Граф — барыһына баш. Миңә граф указы ғына указ.

— Ә батша закондары? Берг-коллегия указдары?

— Закон ул, Исмаилка, Сенат төймәһендә. Яп-ялтыр. Үҙе шыма, шылып тора...

Үҙе лә бик шымаға, шылғалаҡҡа әйләнде был баш приказчик тигәне. Башта элекке үстәрен алғандай, бик һарауһыҙ, тупаҫ ҡыланды. Аҙаҡ баш ҡалаға берәй үҙем барғанда йәки граф үҙе килгәндә асыҡларбыҙ, тип һылтау тапты, эште юрый һуҙырға тырышты. Пермь тау начальствоһына мөрәжәғәт итеп ҡарау ҙа әллә ни һөҙөмтә бирмәне. Унда баш приказчиктың үҙ кешеләре ултыра ине. Улары эште ҡағыҙ волокитаға төрҙөләр.

Тасимов шулай уң руднигынан яҙып, күп ерҙәрен юғалтып, граф Воронцов заводтары ҡарамағына ҡараған дүрт руднигы менән генә тороп ҡалды. Ҡөслөнөң ҡулы тирмән тартты.

Тора-бара былдай баш-баштаҡлыҡтарҙы күреп, Берг-коллегиянан комиссиялар килгеләне. Бер саҡ кенәз Вяземский Йок заводтарының эшен, баш приказчиктың баш-баштаҡлыҡтарын тикшереп китте. Санниковка унан бик нык эләккән икән, уны эшенән алырға, хөкөмгә тарттырырға, тип әйткән имеш, тигән хәбәрҙәр таралды. Төп хужаһы граф Чернышев килеп төшкәс, Санников баҫылып ҡалғандай итте. Тик шамбылай Санниковты айғолағынан эләктерә алманылар, хәрәмде руда һыуы менән йыуҙырып, алтын бөртөктәре сүпләнеләр, ахры.

Халыҡ араһында Федор Санников тураһында төрлө һүҙҙәр йөрөнө. Ул үҙе әллә ҡайһы яҡтыҡы. Бер аҙ Берг-коллегияның үҙендә эшләгән әҙәм тинеләр. Шунда бик шымарып алған икән. Төрлө тау управлениеларының, Демидов, Строгановтарҙың завод эштәре менән шөғөлләнеп, графтарҙың үҙҙәренән, баш приказчиктарынан, варистарынан әллә күпме алымдар алған, аҙаҡ үҙе ҙур түрәләргә аҡса, алтын төртөп, коллежский асессор дәрәжәһенә эйә булған, тиҙәр. Ниһайәт, алымсаҡлығы, мутлыҡтары асылып, коллегиянан ҡыуылған имеш. Шунан алтын, баҡыр, тимерҙең үҙе сыҡҡан ояһы Уралға килеп оялаған. Бер управляющийҙы төп башына ултыртып, юлынан алып, приказчик булып киткән, ти. Ә граф Чернышев заводтар һатып алғас,

тау эштәренең нимә икәнен белмәгән, үҙе Петербургта зиннәтле һарайында ғына йәшәгән генерал-фельдмаршалдың алыҫ хужалығында үҙен сабаҡтар араһына ебәрелгән суртан итеп тойған.

Кем белә, бынаһы суртан булһа, тегеһе йәйендер, бәлки.

## 2

Кисә генерал-прокурорҙан килеп төшкән повестка уйға һалды графты. Иван Григорьевич иркен ҡунаҡ залы буйлап байтаҡ үрле--түрле йөрөнө.

Әллә ни эшләп мәшәҡәтле эштәргә килеп тарыны бит. Граф Воронцовтар, Шуваловтар Уралда ҡаҙнанан заводтар һатып ала, ти. Граф Чернышев кемдәрҙән кәм, йәнәһе. Ул нишләп ҡалышырға тейеш? Воронцовтар заводлы граф икән, Чернышев та шулай булыр. Екатерина Алексеевна ғәлиә йәнәптәре алдында авторитеты тағы артыр. Императрица, вот Иван Григорьевич империябыҙҙың ҡеүәтен арттырыу юлында заводчик эшен дә алды, тип маҡтар, бәлки. Өҫтәмә төшөм килер, ҡалта ҡалынайыр.

Бик ҡалынайҙы, ул иҫке завод-рудниктарҙың файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк. Ә мәшәҡәте, хәстәре, төрлө һүҙе күпме. Хәҙер оло дәрәжәләреңә, граф исемеңә тап төшмәгәйе.

Юҡҡа ғына Санниковҡа ышанған булды. Бар эшен шуға тапшырып ҡуйҙы. Ул шыма эҙәмде йылғырыраҡ булыр, тип уйлағайны. Һиҙәр генэ вәғәҙә итмәне бит: Иван Григорьевич, мин һеҙҙең, имеш, Демидовтар кеүек данлы заводсы исемен күтәрешермен; счетығыҙға капитал йылға булып ағыр. Сит илдәр менән баҡыр экспортына договорҙар төҙөлөр. Данығыҙ донъяға таралыр.

Таралды, ана, киреһе — яманатың сығып тора. Тишек суманға ултыртты был, берәҙәк.

Ҡайҙан анау мәкеренә күнде: шәхси промышленниктарҙың, башҡорттарҙың рудниктарын завод территорияһына ҡарай, тип тартып алабыҙ ҙа ҡуябыҙ, уптым илаһи. Бына һиңә әҙер капитал, саф төшөм, имеш. Атаҡлы графҡа, Сенаттың элекке обер-прокурорына бирәү бер ауыҙ һүҙ әйтмәҫ, йәнәһе. Ә башҡорттар наҙан, түбән халыҡ. Указ, обер-прокурор һүҙе, тип бер екереү етер. Закон, граф, үҙ ҡулыбыҙҙа, Берг-коллегия үҙебеҙҙеке. Көслөнөкө замана, имеш.

Бына хәҙер шул сырмалсыҡтарҙан сығып ҡара. Баш приказчикка нимә? Ул бары — башҡарыусы. Бөтә яуаплылыҡ — хужаға. Теге эшләгәнде һин иңең менән күтәр. Заводсы граф, дәрәжәнде, капиталыңды ҡурсыла хәҙер. Берг-коллегия, Сенат алдында һүҙ күтәреү, исемең сығыу үҙе

оло оят. Хәбәр императрица йәнәптәренә барып етһә... Нисектер, йоморға йә хаҡлығыңды төрлө әмәлдәр менән яҡларға кәрәк. Ниндәйҙер частный промышленниктар, башҡорттар һүҙе түгел, граф һүҙе һүҙ булырға тейеш. Нисек тә.

Иртәнге ашауының да рәте булманы графтың. Аппетиты ла, кәйефе лә юҡ ине. Екатерина II тәхеткә ултырғас та, Иван Григорьевичты ололап биргән генерал-поручик мундирын кейеп алгас, ҡиәфәте олпатланып китһә лә, кәйефе күтәрелмәне. Кәрәге булыр тип, төрлө ҡағыҙ, документтарын алып, ҙур ҡунаҡ залы аша үткәндә, стеналарҙағы алтын буталлы ҙур рамдарҙан ҡарап тороусы ағаһы, олатаһы, туғандарының буяулы рәсемдәре, беҙҙең аҫыл зат-тоҡомдарыбыҙҙың дәрәжә-исемдәренә тап йоҡтора күрмә, тип оҙатып ҡалғандай тойолдо.

Тик Берг-коллегияның зиннәтле залдары үҙ ҡунаҡ залың түгел икән шул. Граф саҡырылған кабинетҡа эре генә үтеп китергә тигәндә, юлын юрист-секретарь бүлде. Туҡталып, ирекһеҙҙән уҡалы-погонлы мундирын һалып, юрист-секретарҙың генерал-прокурорға инеп, ҡабул итеү рөхсәтен белеп сыҡҡанын көтөргә мәжбүр булды. Шунда ғына ҡырҙағы өҫтәл аръяғында стена буйындағы креслоларҙа ике кешенең тыныс ҡына ултырғанын шәйләгәндәй итте. Әммә үҙен дәүләттең ҙур вельможаһы, атаҡлы графы икәнен ныҡ танытырға теләнме, әллә аристократлыҡ ҡылығынанмы, тирә-йүнде һис иғтибарламаған булып, ҙур көҙгө ҡаршыһында затлы ыҫпай кейемен рәтләп, ҡалын паригын һыйпаштырып, төҙәтенеп булашты. Бейек үксәле ялтыр туфлиҙары килешле шығыр-шығыр килде.

Графты уңарсы оло кабинетҡа ла саҡырҙылар. Дворяндар этикетын еренә еткереп, действительный камергер генеральный прокурор менән үтә ипле, мөләйем күреште. Иркен креслоға йәйелеп ултырып алған граф ситуацияны асыҡлап, алдан килешеп һүҙ төйнәү уйында иркенләберәк һөйләшергә тотонғас, кенәзгә әңгәмәне ирекһеҙҙән бүлергә тура килде:

— Оло хөрмәтле Иван Григорьевич, һеҙ яҡшы беләһегеҙ, беҙҙе бит ике яҡтың бергәләп һөйләшеүе көтә. Ә һеҙ теләгәнсә, алдан килешеү, миңә — рәсми хеҙмәт кешеһе генерал-прокурорға — баштан уҡ юридик статус ҡағиҙәләрен боҙоу булыр ине. Етмәһә, икенсе яҡтың шаһитлығы ҡаршыһында.

Йөҙөн һытыбыраҡ булһа ла, графҡа килешмәй сара ҡалманы — дәғүәселәрҙе саҡырҙылар.

Генерал-прокурорҙың бик массив ҡарағусҡыл яҫы имән өҫтәленә буй төкәтелгән кесерәк өҫтәлдең уң яғында крес-

лола граф ирәйеберәк ултырһа, һулдағы ике креслоға Исмәғил менән Яҡуп инеп сүгәләне. Ҡара-ҡаршы ике яҡ бербереһенә, нейтраль ара төҫлө өҫтәл аша ҡарашып, алышҡа әҙерләнгәндәй, бер аҙ тынып ҡалдылар.

— Хөрмәтле граф Иван Григорьевич, һеҙгә мәғлүм булыуынса, башҡорт рудопромышленниктарының прошениеһы буйынса һөйләшергә, мәсьәләне хәл итергә йыйылдыҡ, — тип, графтың үҙенә мөрәжәғәт итеп, һүҙҙе башланы генерал-прокурор. — Исмәғил Тасимов менән Яҡуп Аҙнағоловтың, компанияларының дәғүәһе шунда: улар һеҙҙең ҡарамаҡҡа күскән, дөрөҫөрәге, килешеүһеҙ алынған элекке рудниктарын үҙҙәренә ҡайтарыуҙы, 500 мең бот әҙер рудаларының хаҡын түләүҙе, рудниктарынан әле һеҙ файҙа алған сумманың уларға тейеш өлөшө менән хисаплашыуығыҙҙы талап итәләр.

— Хөрмәтле кенәз генерал-прокурор, — тип итәғәтле генә һүҙен башланы граф. — Исмәғил Тасимов һәм К⁰ ҡаҙна рудниктарының әҙер шурфында эш башлағандар. Әҙерҙе үҙләштергәндәр. Шул элекке ҡаҙна руднигы һатып алыуысыға күсергә тейешме? Тейеш. Тимәк, был законға һыйышлы башҡарылған. Мин ул саҡта, бынан алты йыл элек, 1758 йылда уҡ, Берг-коллегияға прошение биргән инем бит.

Һүҙҙе Исмәғил Тасимов алды:

— Генерал-прокурор Ваше превосходительство, һеҙ беләһегеҙҙер, граф Иван Григорьевичтың был прошениеһы Берг-коллегия комиссияһы тарафынан раҫлау тапманы. Сөнки ул нигеҙһеҙ, ерлекһеҙ ине. Бының нигеҙһеҙлеге, Берг-коллегияла асыҡланғанса, беренсенән, шул рудниктар ере, Мулла, Ташлы йылғалары буйы борондан беҙҙең ата-бабаларҙың, аҫаба башҡорттарҙың ере. Ул ер һуңғы тапҡыр Петр Беренсе батша ғали йәнәптәре грамотаһы менән нығытылған (шунда Тасимов грамотаның копияһын алып кенәз Вяземский алдына һала). Икенсенән, Йок, Мотовилиха баҡыр заводтары һалынырҙан күп алда уҡ ул руда ятҡылыҡтары минең атайым Тасим тарафынан табылып, Петербургҡа Берг-регламент буйынса, генерал-берг-директорумға хәбәр ителгән. Быға махсус танытма-привелигия алынған (был документ копияһын да Исмәғил кенәз ҡулына бирә). Ә 1756 йылды беҙҙең тарафтан табылған яңы баҡыр ятҡылығы Пермь тау начальствоһының берггешворены Москвин стәкселегендә тикшерелеп, беҙгә беркетелгәнгә шулай уҡ танытма документыбыҙ бар (был ҡағыҙ ҙа өҫтәлгә ята).

Генерал-прокурор был документтар менән электән таныш булһа ла, әле дәғүәселәр үҙҙәре күрһәткән копияларын яңынан әйләндереп ҡарай-ҡарай, графтың шикәйәтенең

нигеҙһеҙ булыуын һәм промышленниктарҙың рудниктарының үҙҙәренеке икәнен иҡрар итте.

— Ә Пермь тау начальствоһындағы, Берг-коллегиялағы беҙҙең документтар? Санников аргументтары? — тип һорау бирҙе граф.

— Циркулос вициозус [1], — тине лә кенәз тағы өҫтәп ҡуйҙы, — раҫланмай улар, граф.

— Был законлы үҙ рудниктарыбыҙҙы тартып алыу өҫтөнә Санников 500 мең бот әҙер рудабыҙҙы ла һалдырып алды. Ярты йыл буйы заводты тәьмин итер руда. Уны үҙе генә файҙаланмайынса, артығыраҡ хаҡҡа Аннинский заводсыға, Строганова баронессаға ла һатып ятты. Беҙгә, хужаларына, бер тин хаҡ түләмәне.

— Быныһын мин белмәйем. Уныһын Санников менән асыҡлағыҙ, — тип белмәмеш булып, еңелерәк ҡотолорға уйланы Чернышев.

— Заводҡа һеҙ хужа бит, Иван Григорьевич, Де юре [2] һеҙ яуап бирәһегеҙ.

— А беан ментир куи виент де лони [3], — тип яуапланы быға граф.

— Санников кс сь есть ле тупе! [4] — тине уныңса кенәз. Шул саҡ кенәз баш приказчик менән үҙенең нисек осрашҡанын хәтерләп алды.

Урал заводтарынан, бигерәк тә ошо Санников баш приказчик булып эшләгән Юғары, Түбән Йоҡ заводтарынан, Берг-коллегияға күп ялыуҙар яуҙы. Кенәз былтыр шуларҙы урында тикшерергә ебәрелгәйне. Генерал-квартирмейстер булып. Барҙы. Йөрөнө. Завод крәҫтиәндәренең, яллanып эшләүселәрҙең ауыр шарттарҙа эшләүен, фәҡир йәшәүен күреп иҫе китте. Баш приказчиктың баш-баштаҡлыҡтарын, йәбер-золомдарын һөйләүҙең сиге булманы. Шахталар ярым емерек, юлдар алама. Һәр ҡайҙа хәстәрле хужа юҡлығы күренеп тора.

Төпсөнә-соҡсона башлағас, башта бик өлтөрәп йөрөгән баш приказчиктың һөмһөрө ҡойолдо, ҡырыҫ-мырыҫ ҡылана башланы. Аҙаҡтан конторағa саҡыртты быны кенәз. Күпселек ялыуҙарҙың раҫланыуын, закондан тыш күп эштәр ҡылыныуын, урлашыу, мутлыҡтарҙы атап күрһәтте приказчикка. Санников баш баҫыбыраҡ тыңлап-тыңлап ултырҙы ла бер аҙ танып булашты. Күралмайҙар, ялғанлайҙар, тип һылтанды. Кенәзде былай ғына ышандыра алмағас, яҡшатланырға, юмаҡайларға тотондо. Һатып алмаҡ булып,

[1] Осо-осҡа ялғанмай, ялған (*латинса*).
[2] Юридик яҡтан (*латинса*).
[3] Алыҫтағы алдарға ла ирекле, тигән мәғәнәлә (*французса*).
[4] Санников — оятһыҙ авантюрист ул (*французса*).

алтын тәҡдим итеүгәсә барып етте. Бығa кенәз ҡырҡа баш тартыу ғына түгел, ҡаты киҫәтеү яһаны. Сығырынан сыҡҡан приказчик кенәзгә яла яғырға, янарға кереште. Түҙмәне кенәз, Санниковты контораһынан ҡыуып уҡ сығарҙы. Шул кисте үк баш приказчикты бөтә ҡара эштәре, яман ҡылығы тураһында ҡыҫҡаса заключение яҙып, эшенән ҡыуырға, үҙен хөкөмгә тарттырырға тигән ҡарарга килде.

Вяземскийҙың Петербургка әйләнеп ҡайтыуына күп тә үтмәй, Санниковтан квартирмейстер өҫтөнән яла яғыусы пасквиль килеп төштө. Граф Чернышев иһә, кенәзде өгөтләп, Санниковты алыштырам, тип эште йоморға тырышты.

Шул граф әле һаман шул урынында ҡалған баш приказчигын яҡлап, уның күләгәһенә йәшеренергә, барып уға һылтарға булаша.

Ҙур түрәләрҙең ят телдә һөйләшкәндәрен абайлап, Яҡуп Исмәғилгә башҡортса өндәште:

— Былар нимәлер үҙҙәренсә хәйлә-мәкер ҡоралар, ахры, ят телдә.

— Ҡәмәләре ҡомға ултырһа, әллә ҡайҙа бармаҫтар, — тине Исмәғил дә башҡортсалап.

— Батша указдарына таянып, хоҡуҡка һуҡтырырга ла кәрәк.

Үҙҙәренең французса һөйләшеүгә күсеп, уйға батыбыраҡ алған арала, ҡаршыларындағы башҡорттарҙың үҙ телдәрендә һөйләшеп киткәндәрен абайлап, генерал-прокурор үҙ теленә ҡайтты:

— Нишләп әле үҙегеҙсә һөйләй башланығыҙ. Бында, рәсми урында, ярамай, — тине ул.

Исмәғил аҡланыуға ҡарағанда төрттөрөп яуап бирҙе:

— Үҙегеҙ ят телгә күскәс, беҙ ҙә үҙебеҙсә мөңгөрләшеп алдыҡ, эс бошоп. — Унан кенәзгә ҡарап етди һөйләп китте: — Генерал-прокурор әфәнде, баш приказчик Санниковтың баш-баштаҡлыҡ эштәре судҡа бирелергә, беҙҙең рудниктар ҡайтарылырға, руда хаҡтары түләнергә тейеш, тибеҙ. Ә граф Иван Григорьевич, алты-ете йыл буйы рудниктарыбыҙҙан файҙаланып, төшкән сумманың тейешле өлөшөн бүлеп бирер, тигән өмөттәбеҙ.

— Һүҙ булһа, элекке рудниктарҙы ҡайтарыу-ҡайтармау хаҡында ғына булырға мөмкин, — тине граф ҡырыҫ ҡына.

— Хикмәт бит ҡоро рудниктарҙа гына түгел, граф Иван Григорьевич, — тип дауам итте Исмәгил. — Законлы хоҡуҡты аяҡҡа баҫтырыуҙа, ғәҙелһеҙлекте бөтөрөп, төшөмдөлә ғәҙел бүлешеүҙә. Беҙ, рудопромышленниктар, Петр Беренсе ғали йәнәптәре заманында Берг-привелигияның һәр граждандың руда табыу һәм эшкәртеү тураһындагы ука-

зын, 1739 йылғы Берг-регламент, 1755 йылғы Берг-коллегия указдарындағы төп положениеларҙы боҙмауҙы, шәхси хоҡуҡтарҙы хөрмәт итеүҙе һәм үтәүҙе үтенәбеҙ.

— Баш приказчиктың төрлө эштәре өсөн мин яуап бирмәйем, — тине Чернышев. — Уныһын тейешле органдар ҡарар. Әммә минең завод доходыма өмөтләнергә, ҡул һонорға юл ҡуймам. Граф милке олуғ батшаға оло хеҙмәттәр менән алынған, действительный камергер, генерал-поручик доходтары, закон буйынса, тейелгеһеҙ. Шуны яҡшы белегеҙ, дәғүәсе промышленник башҡорттар.

— Ғәфү итегеҙ, граф, һүҙ бит һеҙҙең яҡтан тартып алынғанды хужаларына кире ҡайтарыу хаҡында бара. Унан беҙҙең компаниондар башҡорттарҙан ғына тормай. Беҙ, һеҙҙең приказчик тартып алған рудниктарҙан 7 башҡорт һәм татар, 9 рус рудопромышленниктарының вәкиле булып килдек...

Шулай граф Чернышев төплө дәлилдәр менән креслоһына яйлап һырыҡтырылһа ла, аристократлығына һәм дворянлыҡ өҫтөнлөгөнә, оло таяныстарына арҡаланып, барыбер үҙен һауалы тотто, тейелгеһеҙ итеп тойҙо. Берг-коллегиялағы һәм Сенаттағы ҙур әшнәләренә ышанды. Улары, тәбиғи, уға ел-ямғыр тейҙермәҫкә тырышты. Эште юрамал һуҙып, төрлөсә бутап, ҡағыҙ волокитаһына күмеп ташланылар. Бер учреждениенан икенсеһенә, түрәнән түрәгә һылтандылар, иләктән иләккә бушаттылар. Дәғүәселәргә ярҙам урынына күбеһе ярҙан этте.

Әммә промышленниктарҙың бирешергә бик самалары юҡ ине әле. Исмәғил, юлында төрлө кәртәләр тороп, түрә түрәне яҡлашырын алдан самалап, билде ныҡтан быуғайны. Тартып алынған мөлкәтенең, күргән зыянының ҡоһорон ҡайтарыр өсөн, ул ваҡытын да, малын да йәлләмәне. Вәкил булып күпме ваҡыт Урал заводтары приказы, Пермь тау начальствоһы, Берг-коллегия ишектәрен асты, әллә күпме юл йөрөнө, ни саҡлы аҡса тотто, зыян-михнәт күрҙе. Тик хаҡ юлынан боролманы. Киреһенсә, кәртә артҡан һайын, кәре көсәйеп, сәмләнә генә барҙы кеүек.

Күк өҫтөндә күк булһа, түрә өҫтөндә түрә бар. Берәүһендә һүҙе үтмәһә, икенсеһенә инде, үрҙәгеләренә үрелде. Берг-коллегиялағы әлеге осрашыу-алыш шул үрҙәрҙең бер түре ине.

Тегендә алыш башлыса баш приказчик менән барһа, бында — төп хужа граф Чернышевтың үҙе менән. Граф — Санников түгел, уның менән алыш — ҡыйралыш йә ҡалыш.

Дәғүәсең ҙур түрә икән, йөгөнмә тиҙәр. Исмәғилдәрҙең берҙән-бер таянысы — кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәре. Әммә

уларҙы ла граф кире ҡаҡмаҡ булып, уйҙырма һылтауҙар ҡороп булаша.

Тәүәккәлләгән таш ярған: Тасимовтар Сенаттың үҙенә мөрәжәғәт итергә булдылар. Дворяндарҙың дәүләт банкыһында эшләүсе иң оҫта подканцеляристан шикәйәттең яңыһын яҙҙырып алдылар. Был мәшәҡәттәр менән баш ҡалала тағы ике ай үтеп китте.

1765 йылдың февраль аҙағында Сенатҡа саҡырҙылар. Юлдашы Яҡуп, ҡаты сырхаулап, бара алмай ҡалды. Сенаторҙар башта Исмәғил менән һөйләштеләр. Ул был юлы батша указдарына таянып, шәхси предпринимательствоны графтың ҡыйырһытыуына, закондан тыш эштәренә баҫым яһаны. Был эштең дәүләт кеҫәһенә лә һуғыуын нарыҡланы. Иван Григорьевич менән күҙләштергәндә, Исмәғил күберәк ҡаҙна мәнфәғәте мәсьәләләренә ҡағылды.

Шулай ҙа Тасимов Сенаттағы был һөйләшеүҙән һуң да «аҡсаңды юғалт, өмөтөңдө юғалтма» уйы менән йәшәне. Низер өмөт итте — тағы бер йыл көттө. Түҙмәнеләр, йәйгекөҙгө эштәр бөткәс, ҡышына Санкт-Петербургка ике вәкил йәнә юл тотто.

### 3

Өмөт иткән мораҙына еткән, ти. Ниһайәт, 1766 йылдың 7 февралендә Тасимовтар Тау заводтарының главный правленеһынан уларға граф Чернышевтан рудниктарын ҡайтарып биреү һәм күргән зыяндарын түләтеү тураһында ҡулдарына ҡағыҙ алдылар. Вәкилдәрҙең ҡыуанысының сиге булманы: күпме ғүмерҙәр үтмәне, күпме малдар китмәне, аҙмы ыҙа-ғазаптар сикмәне улар — юҡҡа булманы, һүҙҙәре өҫтөн сыҡты, хаҡлыҡ яҡланды. Графтың графын енделәр түгелме?

Ҡайтып компанионларын шатландырҙылар, күңелдәре үҫеп китте. Ғәҙел рапорт Берг-коллегияға бирелде, Берг-коллегия Пермь тау начальствоһына ебәрҙе. Ҡарарҙы үтәү эше ҡушылды.

Ҡушылыуын ҡушылды, тик граф ҡына уны үтәргә йыйынманы. Дәүләт ҡарарын һанға һуҡмай, үҙе шикәйәттәр, кассациялар яҙырға кереште. Күп түрәләрҙең ауыҙын япты.

Шулай тағы дүрт йыл ғүмер үтте. Тасимовтар һаман Воронцов граф ҡарамағына ҡараған рудниктарында ғына эшләне, тағы бер нисәне асҡан булдылар. Чернышев граф, уның баш приказчигы йәнә үсләшә төштө. Һуңғы өмөтһыҙаныстарҙы ла нисәмә ҡыштың ҡарҙары ҡаплап, нисәмә яҙҙың һыуҙары йыуып алып китерҙәй тойолдо.

Шулай ҙа промышленниктар ҙа тик ятманы. Исмәғил һуңғы сараға тәүәккәлләне. Әбей батшаның үҙенә барырға. Уларҙың аҙаҡҡы ике прошениеһы Екатерина II исеменә яҙылғайны инде. Петербургка шул йылдарҙа икенсе тапҡыр барғанында был ниәтен Генеральный прокурор кенәз Вяземский ҙа хуплағандай, дәүләт вице-канцлеры ла яйға килгәндәй итте.

Ниңек тә рөхсәт алынып, императрица менән аудиенция тәғәйенләнде. Исмәғил осрашыуға ныҡ әҙерләнеп, тулҡынланып барҙы. Затлы еләнен, йомшаҡ ситеген кейҙе, старшиналыҡ миҙалын оҙон ебәк таҫма менән тағып алды. Әмәлгә таянғандай, бынан ике йыл элек табылған сифатлы яңы баҡыр рудаһы араһынан сыҡҡан йәшкелт мәғдән ҡатыш малахит ташын һаҡлап йөрөткәйне — шуны ҡуйынына тыҡты.

Вице-канцлер Исмәғилде Ҡышҡы һарайҙың кесе ҡабул итеү кабинетына алып ингәндә, императрица кәкре тояҡлы оҙонса өҫтәл артында ниҙер яҙышып ултыра ине. Тәхеткә оҡшаған бейек артлы бәрхәт креслола. Перламутр биҙәкле. Паркет иҙәнгә өҫтәлгәсә йомшаҡ келәм һуҙылған. Бер яҡ стена тулы китап шкафы. Китаптар бер тигеҙ сафьян тышлы. Ике стенала алтын менән ҡаймалы ҙур рамдарҙа ярым шәрә кеше һүрәттәре.

Барын шәйләп, ҡапыл ҡаушап ҡалғандай тойҙо үҙен Исмәғил. Еңел йомшаҡ ситектәре менән келәмгә тауышһыҙ баҫып килеп, әбей батша ҡаршыһында нисек бөгөлөп сәләмләүҙәрен дә һиҙмәгәндәй итте.

— Һаумы, промышленник башҡорт! Бына ҡалай икән һин! — тигән яғымлы-һораулы тауышына бер аҙ айнып киткәндәй булды. — Ә үҙең старшина ла...

Исмәғил һаман телһеҙ ине. Мөләйем тауыш йәнә ҡабатланды:

— Старшиналыҡ менән промышленник эше ярашамы һуң?

Шунан ғына ул телгә килде:

— Олуғ батша ғалиә йәнәптәре, старшиналыҡ ата-бабанан уҡ килә. Беҙ, ғәйнәләр, — аҫаба башҡорттар. Тәғәйен яһаҡты түләйбеҙ. Һунар эше хәҙер шул яһаҡ өсөн генә. Төп кәсебебеҙ — руда сығарыу.

— Һунарға ҡарағанда ауырыраҡ, мәшәҡәтлерәк эш түгелме ул?

— Мәшәҡәтлеһен, әлбиттә, мәшәҡәтле. Әммә үҙебеҙгә лә, ҡаҙнаға ла файҙаһы күберәк. Унан һунар өсөн ерҙәребеҙ ҙә ҡыҫылды бит. Урал рудаһы хәҙер, промышленниктар әйткәнсә, — Рәсәй кеш-кейеге. Бер әсминник ер ун кеште алыштыра.

— Былай яҡыса, предпринимателсә фекерләйһең, старшина, — тине лә Екатерина Алексеевна кинә һорау ҡуйҙы. — Ә граф Чернышев менән уртаҡ тел тапманығыҙмы ни? Бергәләп, уға, Иван Григорьевичҡа, компаньон булып булмаймы?

Әҙ генә уйлап алды Исмәғил:

— Олуғ батша ғалиә йәнәптәре, граф Иван Григорьевич промышленник, заводчик түгел бит. Ул бары номиналь хужа. Бар эшен баш приказчигы Федор Иванович Санников башҡара. Ә ул, һөйләшмәй-нитмәй, беҙҙең рудниктарҙы, әҙер рудаларҙы тартып алды. Үҙ еребеҙҙән ҡыуҙы. Ундай баш-баштаҡ менән компаньон булып булмай. Етмәһә, хәҙер рудниктарҙы, заводты тарҡатып бара. Дәүләтсә ҡараш, хужаларса ҡул етмәй.

— Дәүләтсә ҡараш. — Был һүҙҙе ҡабатлап, уйланып торҙо императрица. — Һин нисек тип уйлайһың ул дәүләтсә ҡарашты? Шуға бәйле ниндәй конкрет тәҡдимдәрең бар?

— Олуғ батшабыҙ, рудопромышленниктарҙың рудниктарын тартып алыу, законға һыймау менән бергә, үҙе ук дәүләткә ҡаршы сара. Руда сығарыу аҙайыуҙан хужа ғына түгел, дәүләт тә зыян күрә. Өҫтәүенә, ҡомһоҙ приказчик бары үҙе байығыу ниәте менән бик күп төшөмдө хужаһынан һәм дәүләттән йәшереп алып ҡала. Дәүләткә был икеләтә зыян. Бына шундай урлашыу, баш-баштаҡлыҡ булмаһа икән.

Тәҡдимгә килгәндә, әғзәм батшам, урында эшләүсе заводчиктарға, рудопромышленниктарға күберәк инициатива биреү хөкүмәткә файҙалы. Тик бында тейешле контроль булыуы шарт.

Йәнә, бына мин, олуғ батшам, бер рудалы минерал алып килдем. — Шунда Исмәғил ҡуйынынан әлеге малахит ташты һаҡлыҡ менән генә, ҡуш усында императрицаға табан һондо. Малахит яҡтыға ялтырап китте. — Бына был — рудалы малахит. Үҙ еремдә таптым. Рудаһы бик сифатлы. Баҡырынан фәҡәт аҡса һуғырға мөмкин. Малахиты — айырым эшкәртелер аҫыл таш.

Екатерина II ташты ҡулына алып, әйләндерен-әйләндереп ҡараны, аҫыл таш тағы баҙлабыраҡ күренде.

— Тапҡас, эшкәртә башланыңмы һуң уны?

— Ғалиә йәнәптәре, мин уны әле яңы таптым һәм тәүге өлгөһөн һеҙгә алып килдем. Һеҙ, әғзәм бадишам, һеҙ дәүләтебеҙ уға хужа. Ә мин бойороғоғоҙҙо үтәргә әҙер ҡолоғоҙ. Табышым һеҙгә, ғалиә йәнәптәре, кескәй бүләгем дә булһын!

Быға эстән ҡәнәғәт ине императрица. Ҡырҙараҡ торған вице-канцлерга боролоп, ят телдә өндәште:

— Ау данес фортуна юват. А бон дроит юват [1].

Исмәғилгә таба ҡарап һуңғы һүҙен әйтте батша:

— Старшина Измаил, тыныслап йортоңа ҡайт. Еңһыҙғанып эшләй башла. Үтенестәрегеҙ үтәлер.— Тағы ярым киҫәткәндәй һәм кәңәш иткәндәй өҫтәне. — Ә шулай ҙа граф менән уртаҡ тел табыу кәрәк.

...Өс көндән һуң вице-канцлер Исмәғил менән Яҡупты үҙ кабинетына саҡырҙы. Унда граф Чернышев та ултыра ине. Күрәһең, императрица үҙе лә, вице-канцлер ҙа граф менән һөйләшкән. Иван Григорьевичтың төҫө бик булмаһа ла, үҙен былай ипле тотто, вице-канцлер тәҡдимдәренә еңел ризалашты. Дәғүәселәр уртаҡ фекергә килеп, һәүетемсә айырылыштылар кеүек.

Төҙгән түш ите ейгән, ти. Промышленник Тасимовтарҙың Чернышев граф һынлы графты, Екатерина II батшаның иң яҡын вельможаһын еңеп сығыуы заманаһы өсөн иҫ китмәле ине. Нисек иҫ китмәһен, рудниктар кире ҡайтарыласаҡ, руда хаҡы түләнәсәк, етмәһә, ете йыл буйы килгән төшөмдән ҙур өлөш сығарыласаҡ, юллап йөрөү сығымдары ҡаплатыласаҡ. Тик өнмө был, төшмө? Ышанырғамы, юҡмы?

Өндөр, оҙаҡламай императрицаның үҙе ҡул ҡуйған указы, шул еңеүҙең бер документы булып, Исмәғил Тасимовтарҙың ҡулына инде. Бына ул:

Указ нашей Берг-коллегии .

По производившемуся в Сенате спорному графа Ивана Чернышева с рудопромышленниками делу помирились они между собою добровольно на 70 000 руб. И как они деньги нарочно для того удержаны в казне при покупке графа Чернышева заводов, то и повелеваем в число оной суммы выдать тем рудопромышленникам здесь из Берг-коллегии 20 000, да в Екатеринбурге из тамошного меднаго передела 50 000 руб. И для того в Екатеринбургскую монетную экспедицию дать знать из Берг-коллегии кому оныя 50 000 руб. к выдаче принадлежат, а Монетной экспедиции указ о том от нас дан.

На подлинном собственною е. и. в. рукою тако:

Екатерина

21 августа 1770 г.

Хикмәтле түгелме һуң был указ!

---

[1] Ҡыйыуҙарға яҙмыш ярҙамға килә. Закон нигеҙендә ярҙам итергә кәрәк (*французса*).

## 4

Батша указы менән йорт-еренә ҡайтты Тасимов. Еңсүсе булып.

Графтың эше иһә көрсөккә терәлгәйне. Унан заводчик сыҡманы, бары яманаты сыҡты. Башҡорттарҙың башҡортонан еңелеп хур булды. Ирекһеҙҙән килешкәндә, бары йылғырлығына барып, Екатерина Алексеевна ғалиә йәнәптәренең һүҙен йыҡманы. Императрицаның тел төбөн төшөндө шикелле, яйы табылыр әле.

Батшалар фавориттарын ҡыйырһыта буламы: Адмиралтейство коллегияһының вице-президенты итеп тәғәйенләнгән Чернышев тиҙҙән үҙен һыуға ебәрелергә хөкөм ителгән суртан итеп тойҙо. Заводтарын рудниктары-ние менән ҡаҙнаға һатты ла ебәрҙе. Бишләтә хаҡҡа тип һөйләнеләр. Батшаныҡы аҙмы ни, ҡаҙнаныҡы йәлме ни! Ә һатылдыҡ завод-рудниктар ташландыҡ хәлгә килгәйне. Тасимов үҙенә ҡайтҡан, ҡаҙнаға күскән рудниктарҙы әрнеп ҡарап йөрөнө: күбеһе ярым емерек, байтағын һыу баҫҡан. Штольняларҙың терәүҙәре ауған йә сереп бөткән. Уларҙа эшләүе хәтәр. Шахталарҙан һыуҙарҙы таҙартырға, ныгытма, терәүҙәрен йүнәтергә кәрәк. Был исеме генә рудниктарҙы аяҡҡа баҫтырыу аҙ, уларҙы бөтә яҡтан яңыса ҡораһы, ҡорамалландыраһы бар. Компаньондары ла шул фекерҙә.

Исмәғил Йок, Мотовилиха заводтарында йыш булды. Бигерәк тә ул Түбән һәм Юғары Йок баҡыр заводтарында ҡарт мастер знакумы менән заводтың бөтә цехтары, домна мейестәре, баҡыр ҡойоу эше менән танышып йөрөнө. Күп һорашты, барыһын да белергә тырышты. Домна горнаһы алдында мастер менән сәғәттәр буйы уралғаны, баҡырҙың нисек ҡойолоуын, роштейн, ҡара баҡыр, бүтән ҡушылмаларының нисек барлыҡҡа килеүен күҙәткәне булды. Баҡыр ҡойоу оҫталары — штенмейстер, шихтмейстер, гармахер, шмельцерҙар эше, эш технологияһы хаҡында улар менән күп һөйләште, үҙҙәре менән дуҫлашып бөттө, кәңәштәр итеште. Фурма, кузнец цехтары менән ныҡ ҡыҙыҡһынды.

Йок заводтарының бергмейстеры Гримотчиков, заводсы Осокин менән бер нисә тапҡыр осрашып һөйләште Исмәғил. Уға күп нәмәләрҙе асыҡлайһы бар ине.

Башта әле уның үҙенә оло мәсьәләләрҙең осона сығырға кәрәк: иҫке рудниктарҙы аяҡҡа баҫтырып, нисегерәк яңыса ҡорорға? Яңыларына ҡалай тотонорға? Ҡаҙна рудниктарын арендағамы, әллә һатып алыу яйлымы? Завод менән договорҙарҙы ниндәй шарттарҙа төҙөргә? Яҡын кәңәшсең, үҙ кешең, мастерҙарың булһа икән шул саҡта. Үҙ ҡулыңда, үҙ яйыңда булһа икән барыһы.

Батшаларга етеп, графтың үҙен еңгәндәй булды ла бит, ә ҡалғанын ҡалай хәл ҡылырға?

Тасимовтар былай төшөп ҡалғандарҙан түгел. Бер бүркең менән, бер үҙ күркең менән кәңәш итеш, ти. Улан-кейәүҙәрен, ҡоҙа-ҡайныларын йыйып кәңәшләште бер нисә.

Әле яңыраҡ кәләш алып биргән улы Исхаҡ, буй еткән уртансыһы Мөхәммәтрәхим, оло һәм кесе кейәүҙәре, ҡоҙалары ярҙамсы ғына түгел, хәҙер үҙ аллы компанион булырлыҡ. Үҙе юҡта күп эштәрен ана Исхағы алып барҙы, уға Мөхәммәтрәхиме, оло кейәүе ярҙамлашты. Тик ҡоҙалары, нишләптер, яйыраҡ ҡуҙғала. Көтәйек әле, ни сығыр, тиҙәр микән?

Исмәғил бер көндө оло йортоноң ҡунаҡ яғына йыйып алды ир-ат ҡорон. Төптәнерәк кәңәш-төңөш итмәгә. Һыйҙы ла мул әҙерләтте. Оҙон өҫтәл янында бер аҙ һыйланып алғас, араларында иң оло, иң абруйлы хужа кеше ил-йорт тотҡаһы булыр ир туған-тыумасаларына һүҙен дә уртаға һалды.

— Күреп тораһығыҙ, уң ҡулым булыр, ир ҡорона кергән улан-кейәүҙәремде, яҡын ҡоҙа-ҡайнағаларымды ғына йыйҙым был юлы, бергәләп һүҙ төйнәү өсөн, — тип башланы әңгәмәһен хужа. — Күпме михнәт менән графтан рудниктарыбыҙҙы ҡайтарҙыҡ, ниһайәт. Күргән зыян-сығымды ла түләтергә мәжбүр иттек шикелле, иншалла. Шулай ҙа рудниктарҙан башҡалары әле хоҙай ҡулында. Управляющийҙан шәп мираҫ ҡалманы: яртыһы ярым емерек, шахталар һыу аҫтында, үҙегеҙ күрәһегеҙ, әле таҙартыу, йүнәтеүҙәрҙе башлаһаҡ та, эштәр әллә ни ырамай.

Үҙем ҡарап йөрөй-йөрөй, уйлай-уйлай хәҙер шундайыраҡ фекергә киләм. Демидов рудниктарында булғас, ҡарашым тағы нығыны: иҫке рудниктарҙы яңысараҡ ҡорорға. Яҡындарында шахтаны тағы тәрәнәйтергә. Штольняларҙы киңерәк алырға. Сығыр ҡорамалдарын яңыртырға. Шунһыҙ хәҙер мулыраҡ руда сығарыу, ҙурыраҡ табыш алыу ҡыйын. Быларын үҙебеҙ булдыра алырбыҙ, үҙебеҙҙең ҡулдағы эш, тим мин.

Икенсеһе — яңы урындар, яңы рудниктар асыу яғы. Аллаға шөкөр, хәҙер беҙ күмәк. Ә күмәккә күмәү кәрәк. Ишленең рудниктары ла ишәйһен. Уның әле табылғандары бар, яңыларын эҙләй йөрөрбөҙ. Мин самалайым, һәр кемебеҙ биштән дә кәм рудникһыҙ булмаһын. Шунда ғына ҙурыраҡ килем, олораҡ өмөт бар.

Өсөнсөһө — ҡаҙна рудниктарын үҙебеҙгә юллау мәсьәләһе. Ҡаҙна хәҙер арендаға бик биреп барыу яғында түгел. Етмәһә, хаҡы ла күтәренке. Ә беҙгә яҡын-тирәләге ҡаҙна рудниктарын үҙебеҙ файҙаланырға кәрәк ине. Улар күп

рудниктарыбыҙға йәнәш тә, эшләргә лә яйлы. Ул саҡ эштәребеҙ ҙә, төшөмдәребеҙ ҙә икеләтә артып китер ине. Хатта ҡаҙна рудниктарынан сығарғанды осһоҙораҡ һатырға килешергә мөмкин.

Атаһының төп эштәрен алып барған оло улы Исхаҡ һүҙ алды:

— Атайымдың төптән уйлап, барыһын үлсәп әйткән ниәттәрен хуп күрәм, — тине ул. — Рудниктарҙы яңыртмай, яңыларын асмай беҙгә һис ярамай. Ҡаҙнаныҡын алып эшләү ҙә табышлы. Мин үҙем дә бер саҡ иҫәпләп ҡарағайным: бер бот руданы ун тингә осһоҙораҡ һатҡанда ла үҙебеҙгә төшөмө барыбер арыу ҡала. Иҫке шахталарға ғына ышанып ятмайынса, мин үҙем ике рудник асырға ниәтләп ҡуйғанмын. Уларҙы киң алып, асыҡ көйө сығарырға ине уй.

Мәүлет ҡоҙаһы Исмәғилдең уйҙарын хуплау менән бергә, элек асылған бай рудалы урында эште йәһәтерәк башларға кәңәш итте.

Туған компаниондарының асылда төп хужаның фекерҙәрен хуплауына эстән һөйөнә һәм ғорурлана биреп, Исмәғил ике улы менән ике кейәүенә, ҡоҙаларына артабан нимәләр эшләргә, нисек эшләргә кәрәклек хаҡында конкрет кәңәштәрен әйткәс, серле һәм сетерекле бер ниәтен асмаҡ булды.

— Беҙгә хәҙер иҫкесә эшләү генә түгел, иҫкесә йәшәү ҙә ярамай, — тине ул уратыбыраҡ.— Беҙ былай ҡарамаҡта үҙ кәсебебеҙҙе яҡшы белгән кеүекбеҙ. Торғаны сәнғәткәрбеҙ. Руда табыу серҙәрен, руда һөнәрҙәрен дә күпмелер беләбеҙ төҫлө. Минеңсә, былар ғына әҙ хәҙер. Беҙгә рудник, завод һөнәрҙәрен дә ныҡлап төшөнәһе ине. Өйрәнеү генә түгел, йәшерәктәребеҙҙе уҡытыу хаҡында уйлайым мин. Тау школаларында, мәҫәлән. Тик унда беҙҙекеләрҙе алмауҙары теҙгә һуға. Шунан мин тәүәккәл уйға ла килеп ҡуям. Әллә, мәйтәм, үҙебеҙгә тау школаһы астырыуҙы юллап ҡарарғамы тип. Теге Екатеринбурҙағы кеүек кенә түгел, яңысараҡ. Мәҫәлән, кадетский корпус һымағыраҡ. Шул саҡта үҙебеҙҙән, беҙҙең халыҡтан да мастерҙар, тау белгестәре сығыр ине. Ул саҡта үҙ көсөң, үҙ кешеләрең, уҡымышлыларың менән завод һалдырыу, руда ҡайнатыу мәсьәләһе лә ғәмәлгә ҡуйылыр ине. Руда ташыу ғына етмәй, заводтың үҙе лә, уға белгестәре лә кәрәк беҙгә.

— Демидов, Осокин кеүек заводчиктар булырға тиһеңме ни, ҡоҙа? — тип төрттөрөп һүҙен бүлде Мәүлет ҡоҙаһы. — Унын өсөн башта суҡынырға кәрәк була түгелме һуң?

— Юҡ, ҡоҙа, суҡынмай ғына уйлап эшләргә лә була. Башта мастерҙар, белгестәр кәрәклекте иҫбатлайһың оло

түрәләр алдында. Унан үҙенән-үҙе школа мәсьәләһе ҡалҡып сыға. Уҡымышлыларың, һөнәр эйәләрең, булһа, заводына ла күп ҡалмаç.

Ҡаҙнаның ундай школа асырға аҡсаһы юҡ тип һылтау итһәләр, аҡсаны үҙебеҙ табабыҙ, школаны тотоу сығымдарын промышленниктар үҙебеҙ күтәрәбеҙ, тип әйтергә лә мөмкин.

— Ә ундай ҙур аҡсаны ҡайҙан табабыҙ? Буш кесәбеҙҙе бушатабыҙмы? — тине икенсе ҡоҙа.

— Мин бында тағы бер серҙе асырға мәжбүрмен, — тине Исмәғил борсолоборак. — Әбей батшабыҙ Чернышев графты ҡаты шелтәләгән булып, уны уртаҡ доходты бүлешергә күндерҙе лә ул күндереүен. Ләкин 70 мең һум мөбләғтең ҙур өлөшөн ҡаҙна ҡарамағына ҡалдырыу яғында ул. Ә беҙгә, промышленниктарға, шул өлөштән ҡалғандың 20 меңе килеп инһә, бәхетебеҙ олор ине. Уныһы ла бит әле граф кесәһендә.

Батшаның башы йомро, әлбиттә. Беҙгә лә юғалып, йомолоп ҡалмаçҡа ине бит. Үҙебеҙсә хәйләләберәк, әбей батша йәтмәһенән сығыу әмәлен дә эҙләгәндә, тим. Әйтәйек, беҙ юллап та хөкүмәт иçәбенә школа астырып булмай тип һылтау ҡуйһалар, промышленниктар үҙебеҙ иçәбенә тоторға үтенәбеҙ, әгәр әбей батша йәнәптәре теге ҡалған мөбәләғ-сумманы банкыға һалдыртып, процентын школаға бүлдертһә, ә беҙ уны яйлап йылын-йылға ҡаплата барыр инек тиһәк. Бында беҙгә тапшырған руданың һәр ботонан килгән получканың яртыһын түләргә ризалашырға мөмкин. Шуға бәйләп ҡаҙна рудниктарын беҙгә тапшырыуҙы ҡуйыр инек. Үҙебеҙгә лә файҙа, ҡаҙнаға ла. Школаһын астыра алһаҡ, яйлап заводы ла булыр ине әле. Ярты получканан киткән сығымды аҙаҡ саф баҡыр үҙе әллә нисә тапҡыр ҡаплатасаҡ...

Туған рудопромышленниктары шулай әбей батша указының хикмәтле яҡтарын күпмелер төшөнгәндәй булып, Исмәғилдең үҙенсә ҡорған пландарына эстән бары буш хыял тип ҡарап, үҙҙәре иçәбенә школа асыуҙы юллауға һүҙҙә ризалашҡандай иттеләр.

Исмәғил Ҡуян ауылының бүтән компаниондаштарымөсәһимдәре менән рудниктарҙы яңыса ҡороу, ҡаҙнаныҡыларҙы һатып алыу хаҡында һөйләшеп, школа тураһында ла ситләтеп һүҙ тишеп ҡуйҙы.

### 5

Хәҙер Тасимовҡа мотлаҡ Осокинды күрергә кәрәк. Күп ниәттәренең ғәмәле ошо заводсыға бәйле. Унан ашатлап

әле әллә ҡайҙа барып та булмаҫ. Бәлки, берәй төрлө уртаҡ тел табылыр.

Алдан бер килеште лә китте Исмәғил заводсыға. Хужаның үҙе тәғәйенләгән Пермдәге төп йортона.

Был тирәләге завод-рудниктарҙың хужаһы булып алған Осокиндың төп резиденцияһында булғаны юҡ ине әле Исмәғилдең. Барһа, уны ике ҡатлы ҡыҙыл кирбес йорттоң ҡунаҡ бүлмәһендә үҙенсә ололап ҡаршыланылар. Илларион Никифоровичтың янында управляющийы ғына бар ине. Бар йорто байҙарса: иркен бүлмәләр затлы йыһаз менән тулы, йөрөр юлдар, баҫҡыстар келәм түшәүле. Ҙур-ҙур тәҙрәләр, оло люстралар. Стеналарҙа буяулы һүрәттәр, портреттар. Вестибюлдә, фойела күҙ күрмәгән йылы яҡ гөлдәре. Бар ер таҙа, ялтлап тора.

Оло өҫтәлдәге һый муллығы ла Исмәғилде ғәжәпләндерҙе. Ризыҡ-ниғмәттең, эсемлектең ниндәйе генә юҡ. Шуныһы ғәжәп: ҡаты ҡуллы, бармағы бары үҙенә кәкре тип яманаты сыҡҡан хужа ла был юлы бик йомарт ҡылана, ҡунаҡтарын ҡыҫтай-ҡыҫтай һыйлай, маҡтау, хуплау һүҙҙәрен йыш яуҙыра.

Ашап-эсеп, шарап шауҡымынан ҡыҙып алғас ҡына, хужа башҡорт ҡунағына төп һүҙенә күсергә форсат бирҙе. Ҡиҫәгерәк сыҡты бүғай Исмәғилдең һүҙ башы:

— Илларион Никифорович, һеҙ — заводчик, беҙ — рудопромышленник, — тине ул. — Беҙ бер-беребеҙҙән башҡа йәшәй алмайбыҙ. Руда булһа, завод эшләй, булмаһа, юҡ. Беҙ контракттар төҙөшәбеҙ. Уның үтәлгән сағы бар, үтәлмәгәне. Өҙөклөк сыҡмаһын өсөн, рудник менән заводты нығыраҡ беркетергә, ҡуш ҡулдарға йыйғанда икән. Мәҫәлән, ике яҡ бер компаньон булып. Унан эш тә ырамлыраҡ китер ине.

Бар эште лә әле беҙ етерлек белеп, еренә еткереп эшләй алмайбыҙ. Йыш ҡына сит ил майстерҙарының күҙенә ҡарап торабыҙ. Ҡул эшләгәнде үҙ күҙебеҙ күрә белергә тейеш. Шунда эштең бер ырамы. Быны өсөн заводтар янында ҙурыраҡ школалар асырға, үҙ уҡымышлыларыбыҙҙы әҙерләргә ине... — Тасимов, әлбиттә, бер компания булғанда уға ла завод һалырға үҙ заводын тоторға мөмкинлек асылырын, школа булһа, үҙ халҡынан штейгерҙар, бүтән белгестәр әҙерләй алырын, заводчик менән тиң хужа булып китерен әйтмәне, әммә хужа ҡунағының тел төбөн тойҙо шикелле.

Осокин, Тасимовтың һүҙен бүлеп, икенсе яҡҡа һуҡтырҙы:

— Исмаил Тасимович, компаньон булырға тигән ҡарашыңды хуп күрәм: әйҙә, беҙ завод, рудниктарҙы ғына түрл-

гел, бөтә ер-һыуҙарҙы бергә берләштерәйек. Һеҙ, вотчинниктар, биләгән ерҙәргә беҙ ҙә хужа, һеҙ, үҙ сиратығыҙҙа, заводтарға ла хужалаш, бер вераға килгәндә.

Ана ҡайҙа ҡайыра бит каналья. Ҡомпанион тип, бар вотчина ерҙәрен ҡармамаҡсы. Ер-һыу ҡулдан килһә, башҡортҡа көн дә бөттө. Ер менән ҡуша иманыңды һатҡан тәҡдирҙә лә.

— Ер-һыу — башҡорттарҙың бөтә община милке, Илларион Никифорович. Уны заводчик-рудопромышленник компанияһына ғына тығып булмай, — тип иплән аңлатырға теләне Исмәғил. — Беҙ, рудопромышленниктар, теләһәк тә, бөтә башҡорттар уға күнмәҫ. Уларҙың көнө руда ғына түгел. Улар ата-бабанан мираҫ ер-һыуға ҡарап тора. Шунда солоҡ тота, һунар итә, балыҡ аулай, күмер үртәй, дегет ҡайната.

— Ә беҙ шулай итербеҙ: рудалар эҙләр, рудник ҡорор өсөн беҙгә ере етер. Башҡорттарға ул ерҙәрҙә һунар итергә, балығын тоторға, солоғон аҫрарға рөхсәт ҡуярбыҙ. Ул купчий ҡағыҙында күрһәтелер.

— Ай-һай, белмәйем. Башҡорттар был яҡтан да алданып һабаҡ алған инде. Ана, Демидовтарға, Строгановтарға ла улар әүәл ер-һыуҙарын бөтөнләй буш хаҡҡа һатып һемәйеп ҡалғандар. Һатыу-алыу ҡағыҙҙарында ул ерҙәрҙә солоҡ тотоу, һунар итеү, балыҡ аулау тураһында пункттар булған. Ә алған баярҙар аҙаҡ башҡорттарҙы был ерҙәргә аяҡ та баҫтырмаған.

— Исмаил Тасимович, беҙ хаҡты мулыраҡ түләрбеҙ. Әйтәйек, десятинаһына бер һумдан, хатта артығыраҡ та. Улар һораған шарттарҙы ла тоторбоҙ.

Һүҙгә управляющий ҙа ҡушылды:

— Минеңсә, ул ерҙәрҙә башҡорттарға хатта күмер үртәргә, дегет ҡайнатырға ирек ҡуйырға мөмкин. Уртаҡ хаҡына.

— Башҡорттар инде бер нисә тапҡыр ауыҙҙары бешкәс, хәҙер һыуҙы ла өрөп ҡабалар,— тине Исмәғил.— Улар һуңғы ер-һыуҙарынан яҙыуға бармаҫ. Был юл ярамай. Иң дөрөҫө, беҙгә, әгәр ихлас теләһәк, заводтарҙы, рудниктарҙы берләштереү. Ә беҙҙең ерҙә табылған рудалар, асылған рудниктар ул саҡ барыбер уртаҡ байлыҡҡа әйләнә бит. Сәрмая [1] ишәйә.

Хәйләкәр Осокин зирәк Тасимовтың йәтмәгә эләкмәҫен тойғас, был юҫыҡта бүтән артыҡ һүҙ ҡуйыртманы. Әммә ныҡыш рудопромышленниктың тәҡдимен йәһәт кире ҡаҡҡыһы ла килмәне. Уның шәп компанион булырын белә ине

---

[1] Сәрмая — капитал, төп мая.

ул. Тик ул заводчик булырға ла үрелә түгелме? Әллә ниндәй школаны килтереп ҡыҫтыра. Был ниәттәренән дүндереү хәйерле.

Хәҙер шаҡтай ҡыҙмаса баштан заводчик ҡәтғирәк һүҙгә күсте:

— Исмаил, һин үҙең компанион тиһең, үҙең тәҡдимде кире ҡағаһың. Һин уйлағанса, компанион булғанда икән, мин — бер яҡҡа, һин икенсе яҡҡа тартмабыҙмы? Улай эш сыҡмаҫ бит. Һин йәнә әллә ниндәй школа тиһең. Нимәгә кәрәк ул беҙгә? Ана, Екатеринбургта булғаны баштан ашҡан. Беҙгә әҙер сит ил специалистары бик еткән. Шуға бушҡа аҡса түгеүҙә зыяндан башҡа файҙа юҡ. Ул бер тинлек ҡуян икән, биш тинлек зыян. Булғас, капитал ҡалтаңда күренеп ҡалынайһын. Әйҙә, заводы, рудниктары артһын. Шәп йорттар, һарайҙар һал. Кемдеке? — Заводчиктарҙыҡы, тип шаҡ ҡатһындар. Бөтәһе һиңә баш эйһен, хатта ҙур-ҙур начальниктар ҙа. Был байлыҡтарға кем хужа? — Заводчик хужа. Осокин Илларион Никифорович! — Хужа хәҙер араҡы шауҡымынан ҡыҙып, айыҡ аҡылынан нәфселе асылына ҡайтып бара ине. — Йәшәгәс, Исмаил, донъяла барыһын ҡыл, йәшәп ҡал. Эшләр сағында эшлә, типтергәндә типтер. Ғишыҡ-ғишрәт ит. Береһе лә үкенескә ҡалмаһын...

Хужа үҙе шулай һөйләнә-һөйләнә, бер-бер артлы араҡы һемерҙе, ҡунаҡтарын ҡыҫтаны. Управляющийына «песельниктар!» тип ниндәйҙер бойороҡ бирҙе. Уныһы ни араларҙалыр ҡулына балалайка тотҡан бер йәш ир, сыбар сарафанлы ике йәш мәрйә ҡыҙы эйәртеп инде. Йыр-бейеү башланып китте. Ҡыҙҙар, частушка әйтә-әйтә, берсә һәлмәк, берсә етеҙ хәрәкәттәр менән өҫтәл тирәләй бейеп әйләнә башланы. Хужа кеше бейеүселәрҙе, үҙ янынан үткәндә, билдәренән һыйпаштырып, оса-боттарын һәрмәштереп ҡалғыланы. Береһе әллә юрый, әллә яңылыштан Исмәғилдең яурынына ҡулдары менән ҡағылғылап, йомшаҡ эстәре менән тейгеләп үтте. Бер аҙҙан Исмәғилгә ҡыҙҙар ғына түгел, бүлмәләге әйберҙәр, стеналағы портреттар ҙа өйөрөлгәндәй тойолдо. Аҙаҡтан иләҫ-миләҫле был тамашалар ҙа тынды, ахры. Управляющий ҙа, ҡыҙҙар ҙа күҙгә салынманы.

Исмәғил бер килке үҙенә нык һыйынып ултырған, үҙе бәлтерәп төшкән Осокиндың ярым бышылдау тауышын ишетте:

— Исмаилка, компанион бул, һинең юғары сифатлы рудаң бар бит. Шуны бергә сығарайыҡ. Монета һуғыр өсөн... Үҙебеҙ ҡойорбоҙ... Тсс... Сер. Бары икәү. Шунан йәшәрбеҙ беҙ. Төкөр школаһына! Төкөр барыһына!.. Йә!..

— Ул бит Екатерина Алексеевна галиә йәнәптәренә мәғлүм. Һүҙең хаҡ, ул монета рудаһы. Мин тапҡан. Уныһы сер түгел... Уға махсус завод һалырға рөхсәт юллайыҡ. Бына булыр уныһы эш!

— Алйот һин, Исмаилка! Бысағымамы ул завод? Юллаһаҡ та, һалһаҡ та, ул беҙҙеке булмаç. Бигерәк тә һиңә, иноверецҡа, уны тәтетмәйәсәктәр. Шиш!.. Ә беҙ үҙебеҙ монета һуҡһаҡ. Йәшерен. Ике-өс завод төшөмөн йылында алырбыҙ. Настоящий баҡыр. Ҡуш сәмреғош башлы баҡыр аҡса — белдеңме? Килештекме? Антмы? Үҙеңсә ҡөрьән үбеп. Мин — Библия тотоп...

Бер аҙ айнығандай итте Исмәғил. Ләкин серҙәре тағы ҡалай булғандыр, ҡалғанын хәтерләмәй. Күперенке карауатҡа ниндәйҙер йомшаҡ ҡулдарҙың килтереп һалғанын, йылы өнөн, нишләптер ҡағыҙ ҡыштырлауҙарын иçләңкерәй.

Ғүмерендә араҡы-шарап тигән нәмәçтәкәйҙе ят күргән кешене, белгәндәй, иртәгеһенә иртүк башы ярылырҙай булып уянып-уянмаçынан торғоҙоп, мунсаға алып киттеләр. Барып, эштер-эштәр сисенеп инһә, мунса эçе йәһәннәмме ни. Ләүкәлә ах-ух килеп оло түшкәләй ятҡан берәүҙе шаңылдығын сығарып сабалар, миндек, пар тауыштары шажпож килеп тора. Хужа үҙе икән — уның боçрап ужғырып килеп төшөүенә өçтөнә бер ушат һыу аҡтарҙылар. Артынса бер сөм сүмес кеүәç килтереп тотторҙолар. Йотлоғоп эскәндә, күмәгәй алмаһының аçҡа-өçкә йөрөшөн генә шәйләне Исмәғил. Уңарсы «лазь!» тип бойороуға Исмәғил йәлп итеп үҙенең ләүкәгә менгәнен, күн бейәләйле хеҙмәтсенең, пар өçтәп, уны шарт-шорт сапҡылай башлағанын да йүнләп абайламаны. Парҙан, шабыр тирҙән ул да әлһерәп төштө. Сабыу тынғастан бер ушат һалҡын һыу аçтында ҡалды. Уның ҡулына ла һалҡын кеүәç тоттоҡолдо. Эсеүе булды, йән ингәндәй, баш сатнауы баçылғандай итте.

Бөгөн заводсы хужа шаҡтай йомшаҡ, йомаҡай тойолдо. Берғәләп эшләргә, Исмәғилгә ярҙам итергә, үҙ күрергә вәғәҙәләр бирҙе. Төнөн һөйләшкәндәрҙе, тилергәндәрҙе үҙара ҡалдырырға үтенде.

Ләкин Исмәғил йәшермәне, школа мәсьәләһен Бергколлегия ҡаршыһына ҡуйып ҡарау ниәтендә ҡалыуын әйтте. Осокин, нишләптер, шыртлай төштө. Был эштең буш, мәғәнәһеҙ икәнен йәнә раçларға кереште. Үҙ-ара килешеп эшләргә, бер һүҙҙән булырға өндәне. Әллә ниндәй купчий ҡағыҙын күҙ алдында йыртып ташланы. Ниһайәт, әгәр Тасимовтар рудаларын фәҡәт уның заводтарына ташыһа, хаҡты бүтәндәргә тиңләргә, улдарына юл асырға, тағы әллә нәмәләр вәғәҙә итте.

Былай һәүетемсә хушлаштылар, эшлекле ирҙәрсә һүҙ ҙә беркетештеләр шикелле.

Шулай ҙа Пермдән ҡайтҡас, Исмәғил күп уйланды. Заводсы менән эш бешмәне. Уның йәтмәһенә эләкмәне эләгеүен. Ләкин ул уға ҡул да, юлдаш та түгел. Ә юлда күпме кәртә, күпме сик. Ашатлап сығырым тимә. Осокин әйткәнсә, инородец, иноверец булыуы тышау һала. Ерендә-мөлкәтендә һатһаң һат, ә динеңде, иманыңды һатып булмаç. Хоҙай шөмлөгө, йәнеңде шайтанға һатыу менән бер булыр ине. Йәштәрҙе белмәйем, Мөхәммәтрәхим улым байыр өсөн йән дә фиҙа тип әйтә әйтеүен. Юҡ, ул көфөр һүҙ. Донъялыҡҡа бирелеп, бер уңһаң да, икенсе туңыуың бар. Хоҙай ҡәһәре төшөүе ихтимал. Улай тиһәң, кем белә, тәүәккәлләгән, бәлки, таш ярыр, заводын да һалыр.

Нисек кенә итеп тә заводчик булһаң икән. Донъяһын өлөтөр ине ул саҡ Тасимовтар. Һуғылыр монеты ла таммаç, агыр ине ҡалын ҡалтаға. Хәйер, тотторорҙар микән ҡапсыгыңды?

Юҡ, тырышлыҡ, баш ҡына етмәй бында, гилем кәрәк. Хикмәтле китаптарҙан, гилем эйәләренән ерҙең бөтә серҙәрен, завод-ниһен белергә ине. Үҙебеҙҙең гүмер үткәндер инде, уландарҙы, кейәүҙәрҙе уҡытырга ине бит. Ырыу-тоҡомдаштарыңды. Күрер ииегеҙ ул саҡ донъяның кем ҡулында икәнен. Ҡөслөнөкөмө замана? Юҡ, уҡымышлыныҡы ла.

Могайын, школанан эште башларға кәрәк. Донъя малы — диңгыҙ ҡаны. Бөгөн бар, иртәгә юҡ. Аҡса-мал йәлләргә һис ярамаç школ өсөн. Йәшәрлеге, милекте ниәйтерлеге үҙ яйы менән килә торор. Граф кеçәһендәгене лә школа, дәүләт мәнфәгәте тип кенә алып булыр. Ҡаҙна файҙаһына тип, ҡаҙна рудниктарын юллау ҙа иң ҡулайы. Ятып ҡалғансы, йәнә атып ҡал — тәүәккәлләү хәйерлерәк.

Тасимов шунан ике-өс тапҡыр Екатеринбургҡа барып йөрөнө. Элекке бер белеше Ҡарамышев тигән учитель менән дуçлашып, уның аша Екатеринбургтың күренекле тау-завод школаһының уҡыу-уҡытыу эштәрен белеште, яңыһы хаҡында кәңәшләште. Ҡасандыр тоҡомо менән башҡорт булып, русса уҡып, күптән ҡалала йәшәп урыçлашып киткән Ҡарамышев Исмәғилгә ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә тырышты, яңы школаның профилен, программаһын асыҡлашты. Уның ярҙамында Берг-коллегияга прошение проекты төҙөлдө. Исмәгил үҙе яҙған тәүге төркисәһе оҙонораҡ һәм тарҡауыраҡ килеп сыҡҡайны. Ул хәҙерге заманда Уралда тау промышленносы тиҙ үçеп барғанда әҙерлекле кадрҙар кәрәклеген, уны был эште практик бел-

гән урындағы халыҡ вәкилдәренән булдырыуҙы, башҡорт рудопромышленник балаларын уҡытыу ихтыяжын үҙенсә нигеҙләргә тырышҡайны. Тау школаһын Йок заводтары янында асып, уның кадет корпусы тибында булыуын теләгәйне. Ҡарамышевтан, тағы бер инспекторҙан белешеп, уҡыу-уҡытыу программаһының үҙенсәлектәренә лә — металлургия, химия, механика, минералогия, геология, геодезия, фортификация, маркшейдер ғилеме буйынса белем биреү исемләп кителгәйне. Шул нигеҙҙә техника, технологияның камиллашҡаныраҡ төҫ алыуы, эшләп сығарыу артыны, тау экономикаһының нығынасағы әйтелгәйне. Ҡайһы бер иҫәп-хисаплауҙар — цифрҙар ҙа килтерҙе ул. Былар-ҙың белгестәр менән кәңәшләшеп, Екатеринбургтағы тау заводтары управлениеһы менән килешеп эшләнгәнлеген дә күрһәтте. Башҡорт промышленниктарҙың был яңы тау школаһын, хөкүмәттең үҙенән бер ниндәй сығым сығармай, үҙ иҫәптәренә тоторға вәғәҙә итәләр. Быны үҙҙәре заводҡа тапшырған руданың һәр ботонан килер получканың яртыһын аҡсалата школа иҫәбенә һала барыу менән нығыталар. Әгәр ҡаҙна рудниктары ла улар ҡарамағына тапшырылһа, уларынан да өләш сығарасаҡтар.

Ҡарамышев учитель менән был хатты ныҡлап ҡарап, йыйнаҡлап шымартып бөткәс, руссаға әйләндерелгәнен шәп писарҙан матурлап яҙҙырғас, прошение төплө, ышандырғыс, хатта ымһындырғыс килеп сыҡты.

Һәҙәнһеҙ һиҙәп булмаҫ, сәбәпһеҙ эш булмаҫ — китте тағы Тасимов Санкт-Петербургтың үҙенә. Әлеге Берг-коллегияға тапшырҙы сәйер прошениены. Төрлө түрә-чиновниктар сәйерһенеп танышты яҙма менән. Үҙҙәренең башы етмәй, Сенатҡа ебәрҙеләр. Ә Сенат сат йәбеште: ике йәпле ҡармаҡ бит был. Чернышев графтың бүленгән капиталын ҡаҙнага баш-аяҡ ҡаптыраһың, тик ятмаҫ башҡорттарҙы үҙ сәрмаяһы менән школа тип мисәүләп егәһең.

Исмәғил ул арала графтан тейешле өлөшөн алыуҙы тиҙләтеп йөрөнө, ҡаҙна рудниктарын алыуҙы нигеҙҙә хәл итте. Саймонов сенатор менән тау школаһының ҡайһы бер яҡтары хаҡында ҡат-ҡат һөйләште. Сенатор промышленник башҡорттоң тау эшен генә түгел, ғилем эшен үҙенсә белеүенә, төпсөнөүенә эстән иҫе китте. Ҡайһы бер мәсьәләләрҙә минерологты стенаға килтереп ҡыҫты. Уйла ·һин уны томана бер башҡорт тип!

Сенат байтаҡ уйланғас, 1773 йылдың 21 октябрендә Екатерина II-нең үҙенә доклад менән мөрәжәғәт итте. Тарихтарға теркәлер документҡа әйләнде ул доклад.

«Башкиры — Исмаил Тасимов с товарищами проез Берг-коллегию в 1771 г. о поставке своих руд на Юговские меде-

плавильные заводы и об отдаче им казенных рудников в содержание, изъяснили между прочим, что хотя они опытом и научаются и в горную экономию вникают, но, дабы промысел сей усовершенствовать, а горную экономию упрочить и через то, как себя и потомков своих, так и для общества сделаться сколько возможно более полезным, имеют свою нужду в сведущих руководителях. А потому просят о заведении офицерской школы на том же основании, на каком учреждены и кадетские корпуса. На содержание предполагаемой школы они соглашались жертвовать по полуполушне с пуда добываемой ими руды, что составляет около 2250 руб. в год».

Шуныһы ла бик фәһемле: тау экономикаһын төшөнөү, йәмғиәткә файҙалы эш башҡарыу, тәжрибәләре һәм сәрмаялары менән бүлешеү, хөкүмәт файҙаһына фиҙа итеү, промышленносты камиллаштырыу, йәштәрҙе уҡытыу кеүек төплө, аҡыллы фекерҙәрҙе ғилемле чиновниктар үҙҙәре Тасимовтың хатынан алып файҙаланғандар ине.

Тик түрәләргә ышанма, һыуға таянма, тигән боронғолар. Исмәғил ышанған булды, әммә мәғрифәтле әбей батшаның үҙе тарафынан төп башына ултыртылды. Батша школаны асырға, ләкин, башҡорттар теләгәнсә, Йок заводы янында һәм уларса түгел, Санкт-Петербургтың үҙендә, тау училищеһы итеп тип бойорҙо. Уны башҡорт промышленниктар үҙҙәре тотоуы бик мәслихәт. Дәүләткә.

Ғәмәлдә, тағы күбеһе батшасаға әйләнде. Башҡорттар юллап астырған училищеның ишектәре башҡорт балаларына ябыҡ ине. Хатта училищене нигеҙләгән, уны үҙ иҫәбенә тотошҡан Тасимовҡа үҙ улдарын унда уҡытыу ҙа насип булманы. Улар бары дворян балалары уҡыһын өсөн меңәрләп һум аҡса түкте, үҙҙәре ғилемһеҙ мәхрүм ҡалды. Батшалар уҡымышлы булырға теләгән башҡорттарға һабаҡты шулай уҡыттылар.

Батшаның үҙенән алданған, һемәйтелгән Исмәғил Тасимов ҡартайған көнөндә бер йыуаныс тапҡан булды: уға ярҙам итешкән Ҡарамышев учителдең улы Алексей Мәскәү университетын тамамлағас, Тасимовтың ошо Тау училищеһенә инеп уҡыны, аҙаҡ шунда уҡ металлургия менән химия фәндәре буйынса уҡытыусы булып ҡалды. Ғилем донъяһына оло исеме сығып, Россия һәм Швеция Фәндәр академияһының член-корреспонденты дәрәжәләренә күтәрелде. Тамыр үҙенсә тармытҡа тартты, тармыт илгә тартты. Аҙағыраҡ Петербург тау училищеһы Тау институтына әйләнгәс, башҡорт балаларына ла бер нисә вакансия бирелде. Тик уларҙы Тасимов үҙе генә күрмәне.

Изгелек ерҙә ятып ҡалмай икән, тарих үҙе лә Тасимовты онотманы. Уның изге эшен, хәләл көсөн тарих биттәренә яҙып ҡалдырҙы. 1873 йылда Петербург Тау институтының йөҙ йыллығын билдәләгән ваҡытта профессорҙар, уҡытыусылар, студенттар мәрхәмәтле башҡорт рудопромышленнигын хөрмәт менән иҫкә алдылар, тау институтының нигеҙ ташын һалыусы итеп танынылар.

Институтты тамамлаған А. Н. Алексеев тигән тау инженеры рәхмәт йөҙөнән шул юбилей көндәрендә Тасимовҡа махсус шиғыр бағышланы:

Сто лет тому назад тогдашний горный мир
Приятно изумил безграмотный башкир.
Он подал от своих товарищей прошение,
Чтоб рудокопам, им, безграмотным как сам,
Давать указчиков по рудным их делам...

Әммә заманында атаҡлы Чернышев графты еңеп сыҡҡан, аҡылы менән әбей батшаның диҡҡәтен биләгән, ҙур рудниктар тотҡан, Россияла беренсе башлап Тау училищеһы астырыуҙа инициатор булған кеше, ай-һай, наҙан булдымы икән? Берг-коллегияға яҙған прошениеһында ул, беҙ тәжрибә менән тау экономикаһын төшөнгән һәм тәрән өйрәнгән промышленник, тип юҡҡа әйтмәгәндер бит.

Тасимовтың улдары ла, атаһы астырған Тау училищеһы үҙҙәренә ябыҡ тип ҡул ҡаушырып йәшәмәне. Исхаҡы миллионлаған бот рудалар менән эш итер промышленникка әйләнде, руда эштәре ғилемен тормоштан алды. Икенсе улы Мөхәммәтрәхим дә байып, Пермдең сауҙагәрҙәр гильдия ағзаһы булды, үҙе завод төҙөү менән хыялланды. Шул уландары ата-бабалары ерендә ултырған заводтарҙан, шундағы рудниктарҙан рента хаҡы түләтеү мәсьәләһен дә күтәреп сыҡтылар. Сәрмая туплап, көсәйеп алғас, аталарының үтәлмәгән теләктәрен, һемәйтеү ҡоһорон алырға теләгәндәй, күрше заводчиктар, баярҙар менән йыш ҡына аяҡ терәп һөйләштеләр. Инде үҙҙәре байҙар ине шул улар.

---

Нева йылғаһына, һыуғаса, киң мәрмәр баҫҡыс төшә. Баҫҡыс башында ун ике аҡ колонналы, бейек фронтонлы зиннәтле бина мөһабәт булып ултыра. Колоннадаға илтеүсе таш баҫҡыстың ике яғында ике таш һын — скульптур төркөмдәр ҡалҡына. Уң яғында таш Геркулес Антей менән алыша. Ул ер улын ерҙән айырып алған да көсөргә-

нешле хәлдә ҡатып ҡалған. Һул яҡтағыһында шул уҡ антик ҡаһармандарҙан Прозерпиней менән Плутондың көрәше һынландырылған.

Был таш һындар, гүйә, хаҡлыҡ менән ялғандың, көслөлөк менән таҫыллыҡтың алышын символлаштырып, ошо бинаға, ундағы ғилемгә мөнәсәбәте булған бер башҡорттоң көрәшен дә ишаралайҙар кеүек.

Был — Тау институты бинаһы. Г. В. Плеханов исемендәге Ленинград Тау институты бинаһы.

*Өфө — Малеевка*
*1982. I—II.*

# ХИКӘЙӘЛӘР

## ЕТЕ ЫРЫУ

Ағиҙел менән Ҡариҙел килеп ҡушылған ерҙән төньяҡ
ҡарай күҙ күреме арала күкшелләнеп Ҡаратун тауы йә-
йелеп ята. Уны, хәйер, тау тип әйтеүе лә ҡыйын. Урман
менән ҡапланған көн бите яғы ғына текә ҡашлаҡлы булып,
төньяҡ менән көнбайышы һөҙәк, биләнле киң яланға әйлә-
нә уның. Ҡояш сығышы итәгенә һуғылып Ағиҙел аға.

Икһеҙ-сикһеҙ далалар уртаһында ҡапланып ҡуйылған
ҡалҡандай ҡалҡып ятҡан был һөҙәк түбә оло йәйләү, йы-
йын өсөн борон-борондан башҡорттарҙың иғтибарын тарт-
ҡан. Ни өсөн тигәндә, тирмә ҡороп ҡуналҡалар өсөн сәхрә-
ләй күрке, яйы бар был тирәнең, мал-тыуар йәйрәп китеп
юшар өсөн яландары киң, һыулар өсөн һыуы бар, ягыр өсөн
утыны эргәлә. Йәнә бер уңайлылығы, Башҡортостандың
ҡап уртаһында тигеләй үҙе. Бына шундай ер ул оло йыйын
майҙанына әйләнгән Ҡаратун итәге яланы.

Ер-һыу кибеп, урман-яландар йәшәргәс, мал-тыуар йәш
үләнгә утығып көрәйеп алғас, яҙғы эштәр бөтөп, иртә йәй
башланғанда, ҡәҙимгесә Ҡаратун яланына оло йыйынга
йыйылған ете ырыу башҡорттар бер заман. Дөйә-аттарга
артмаҡлап килтергән тирмәләрен һәр бер ырыу бер тирәгә
тош-тош итеп түңәрәкләп ҡорған. Тирә-яғы ваҡыраҡ тир-
мәләр менән уратылып, ҙур майҙан ҡалдырылған урта-
лыҡта ун биш ҡанатлы оло аҡ тирмә ҡоролған. Тирмәләр-
ҙән арыраҡ, ялан типһенендә тиҙ-тиҙ генә ойҡаштырылған
елеләргә әллә ни хәтле бейәләр бәйләнгән. Ярлы-ябаға
төрлө эш-көш, йыйын хәстәрлеге менән мәшгүл.

Иҙел аръяғындағы Нуғай тауҙарынан сыҡҡан ҡояш
һөңгө буйы булып күтәрелеп килгәндә, әлеге аҡ тирмә
янындағы майҙанга һәр ырыуҙың атаҡлы батырҙары, ар-
ҙаҡлы бейҙәре, аҫыл аҡһаҡалдары йыйыла башлай. Йәм-
йәшел бәрхәт сиҙәмгә оло түңәрәк итеп түшәлгән аҫалы
балаҫтар өҫтөнә һалынган ваҡ мендәрҙәргә һәр береһе, үҙ
дәрәжәһен белеп, олпатлыҡтарын һаҡлағандай, яйлап ул-
тырыша бара. Түңәрәк табындың түре булмаһа ла, ҡор-

ҙаштарының ҡыҫтауына күнеп, ҡалҡыу яҡҡараҡ үҫәргән ырыуының түрәһе Бикбау бей ұҙып ултыра. Уның йәнәшәһенә ултырған Юрматы ырыуы башлығы Тәтәгәс бей иһә кәүҙәгә мыҡты, йәшкә лә шаҡтай йәш күренә. Ҡыпсаҡ ырыуы башлығы Ҡарағужаҡ батыр иһә тағы ла баҙығыраҡҡа оҡшай. Шулай түр түңәрәккә ултырғандарҙан Дим буйы меңле башҡорттарының башлығы Ҡәнзәфәр бей ҙә, Бөрйәндән Иҫке бей аҡһаҡал да, Әйле буйы Дыуан ырыуынан Ишмөхәмәт батыр ҙа, Тамъяндан Шәғәли Шаҡман да, үҙ йәшәр Айҙар сәсән дә — оло йыйын күрке булыр, илйорт хәлен хәл итешер абруйлы ил азаматтары. Был ырыу башлыҡтары менән йәнәш йә улар артындараҡ һәр ырыуҙың йорт-түбә булыр аҫыл ир-егеттәре, аҡһаҡалдары, батырҙары оло түңәрәкләп теҙелеп ултырышалар.

Үҙ-ара иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, ил-йорт хәлдәрен, малтыуар именлектәрен һөйләшкеләп алған арала, аяҡсылар, бер нисә тәпән ҡымыҙ килтереп, ҡорҙағыларҙы ауыҙ иттерергә лә өлгөрҙөләр. Халыҡ ултырышып бөтөп, бер аҙ тын алғас, йәнә йәш ҡымыҙҙың тәмен татығас, йыйындың тыныслана төшөүен көтөбөрәк тора ла Айҙар сәсән — иң өлкән, иң абруйлы аҡһаҡалдарҙың береһе — йола буйынса оло йыйынды асып ебәрә:

— Ырыу башлыҡтары, ил-йорт азаматтары, аҡһаҡалдар, — тип башлай һүҙен сәсән, — ата-бабаларыбыҙҙың йолаһы буйынса, ил-йорт хәлдәре хаҡында кәңәш-төңәш итешер, һүҙ беркетешер оло йыйыныбыҙҙы асыу бәхете, иншалла, быйыл да миңә тейҙе. Йылдарыбыҙ шулай имен-аман, үҙебеҙ иҫән-һау булырға, күптәребеҙгә миңсә йәшкә етергә, көнкүрешебеҙ ырыҫлы, мал-тыуарҙарыбыҙ ишле булырға яҙһын.

Кәңәшле ил таркалмаҫ, тигән боронғолар. Әлеге йыйыныбыҙҙа ла уртаға һалып һөйләшәһе, кәңәш төйнәйһе һүҙҙәребеҙ байтаҡ. Ырыу-түбә именлеге вә ырыҫы ил-йорт именлегендә. Улай ғына түгел, бөтә донъя, ил-дәүләттәр аманлығында. Шуныһы шөкөр: аҡ батшаға ҡушылғас, илебеҙгә именлек килде, элек ҡанса ек-ыҙа күргән ил баҫҡынсыларынан, барымта-ҡарымталарҙан[1] ҡотолғандай булдыҡ. Хәйер, быға әле бары мөсәл ярым ғүмер уҙған. Урмандарыбыҙҙа солоҡтарыбыҙ[2], йылғаларҙа һыуҙарыбыҙ, яландарҙа төлкөләребеҙ, быуаларҙа ҡондоҙҙарыбыҙ бөтмәһә, яһаҡ түләү генә беҙҙе артыҡ миктәтмәҫ. Тик шуларҙы ил-ерҙәр аралап, ҡанса урман-һыуҙар яғалап алыҫ-

---

[1] Барымта, ҡарымта — мал-тыуар, мөлкәт өсөн йәки ҡан өсөн ҡан даулап баҫҡынсылыҡ яһау.

[2] Солоҡ — ағас ҡыуыштарына оялаған бал ҡорттары ояһы.

алыҫтарға ҡышын-яҙын илтеп тапшырыуы, ылау ҡыуыуы йонсота. Шунан ҡотолоуҙың берәр юлы-әмәле юҡмы икән? Бына быйыл йыйыныбыҙҙа кәңәш-төңәш итешер һүҙҙең бер башы. Оло йыйыныбыҙҙы асып, ошо кәңәште башлап ебәрер өсөн, ырыуҙаштарыбыҙҙың өлкәне вә фекер төйнәп килгән аҡһаҡалыбыҙ Бикбау бейгә һүҙ бирәм.

Бикбау бей тамағын ҡырыбыраҡ ала ла һалмаҡлап ҡына һөйләргә керешә:

— Йәмәғәт, Айҙар сәсән хаҡ әйтә, хәҙергеһе көндө бөтә ырыу халайыҡтарын[1] да уйландырғаны вә уртаға һалып һөйләшер төп нәмә — яһаҡты ҡайҙа илтеп түләү яғы. Һәммәгеҙгә лә мәғлүм, Ҡазан ҡалаһы беҙҙән ифрат алыҫ, яҡшы ат менән арыу саҡта барғанда ла, утыҙ-ҡырҡ көнлөк юл тау яҡтарына. Барыуы-ҡайтыуы менән ике-өс ай үтеп китә, тигән һүҙ. Нисәмә ырыуҙың юлсыларының ҡанса ғүмере ыҙа менән ошо юлда үтә, ни хәтле ат-мал интегә. Йөк-йөк йәнлек тиреләрен боҙмайынса, батман-батман балдарҙы бүҫкәртмәйенсә имен-аман илтеүе лә еңел түгел.

Үҫәргән, Бөрйән ырыуы халайыҡтарының шундайыраҡ фекере бар, йәмәғәт: Ҡазан ҡалаһының Ағиҙел, Дим, Һаҡмар, Ашҡаҙар, Яйыҡ, Әй буйҙарынан ифрат алыҫ икәнлеген, йөк-йөк яһаҡ тиреләрен, балдарҙы илтеү мәшәҡәтен иҫтә тотоп, Башҡорт иләүенең[2] үҙендә, бер үҙәктәрәк, яһаҡ малын илтеп түләр өсөн, кәрәк-йораҡ алыш-биреш өсөн аҡ батшанан бер кескәй генә ҡәлғә[3] һалдыртыуын һорарға. Шул хаҡта бөтә ырыуҙарыбыҙ, ошо йыйыныбыҙ исеменән хат яҙырға. Бар ырыу халайыҡтарына ла яйлыраҡ, йыраҡлығы бер самалараҡ булһын өсөн ул ҡәлғәне, тәғәйен әйткәндә, ошо йыйын майҙаныбыҙҙан төньяҡтараҡ ятҡан анау Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ергә яҡын бейек моронға ҡорорға булыр ине.

Бикбау бей был һүҙҙәрҙе әйткәндә, үҙе, шул яҡҡараҡ ҡарап ултырған көйө, уң ҡулын һуҙып күрһәткән ыңғайға, йыйындағылар бер юлы тиерлек һонолобораҡ ҡараштарын шул төбәккә төбәнеләр. Арттағы рәттәгеләр ҡалҡыбыраҡ ҡуйҙы, бәғзеләре аяҡҡа баҫып уҡ алды. Әҙ-мәҙ хәрәкәтләнеп, шау-гөр килеп алған шул арала, көрәгәселәр һабатурһыҡтарға, аяҡсылар туҫтаҡтарға ҡымыҙ ҡойорға ла етеште. Ҡыйыу тәҡдимдәнме, йәш ҡымыҙ шауҡымынанмы йыйын инде ярайһы йәнләнеп тә бара ине инде хәҙер. Шул шау-шыу, хәрәкәт баҫыла төшкәс, Бикбау бей һүҙен дауам итә:

---

[1] Халайыҡ — халыҡ.
[2] Иләү — ил, провинция мәғәнәһендә.
[3] Ҡәлғә — крепость, нығытма.

— Шундай бер ҡәлғә һалынһа, уның икенсе бер файҙаһы ла тейер төҫлө. Әле төрлө ил баҫҡынсыларынан ҡотолдоҡ тиһәк тә, юҡ-юҡ та йә көньяҡтан ҡырғыҙ, ҡалмыҡтар, көнсығыштан Күсем хан баҫҡынсылыҡ йә барымта ҡыла. Йорт-ер емерелә, мал-тыуар тарала, кеше ҡырыла, ил бөлгөнлөк күрә. Ҡәлғә ана шулай баҫҡынсыларҙан да ҡурсалар бер ҡалҡан булыр ине. Бына төп әйтер һүҙем шул.

Биҡбау бей һүҙен тамамлағас, йыйын йәнә шау-гөр килеп ала. Ҡилтерелгән бер тәпән-тәпән ҡымыҙҙар ҙа, табаҡ-табаҡ турам иттәр ҙә һиҙелмәй бушай тора. Үҫәргән ырыуы башлығының һүҙен ҡеүәтләп, Тәтигәс бей, уның артынса Ҡарағужаҡ батыр нотоҡ [1] тота.

Шулай һүҙ ыҡҡа ғына килеп барғанда, Әйле-Дыуан ырыуынан Буртас бей ярһып сыҡмаһынмы: Башҡортостандың ҡап уртаһында аҡ батшанан ҡәлғә һалдырырға һорау һарыҡ араһына бүре индереү, үҙ-үҙеңдең ҡул-аяғыңды бәйләтеү менән бер, ти ул. Урыҫ батшаһынан ҡәлғә һалдырырға ялбарғансы, яттарға көнөң ҡалғансы, Күсем ханға һыйыныу, уға яһаҡ түләп, үҙ мосолмандарыңдан шәфҡәт эҙләү мең яҡшыраҡ та, тип ебәрә был бей.

Был ярһүҙҙән [2] һуң бәғзе берәүҙәр күпмелер иҫәңгерәп ҡалғандай булмаһын, Ҡәнзәфәр бей, йәнә тағы бер нисә аҡһаҡал һүҙ алып һөйләгәс, йыйын аҙаҡтан барыбер уртаҡ фекергә килеп, аҡ батшанан Башҡортостанда ҡәлғә һалдыртырға һораүҙы хуплай. Шулай итеп, ошо оло йыйын хәҙерге Өфөнөң нигеҙе һалыныр баштағы урынын, тәү таштарын һайлай.

Йыйын икенсе мәсьәлә буйынса Рәсәй иленә көнбайыштан һөжүм иткән дошмандарға ҡаршы аҡ батшаның башҡорт ир-егеттәрен яуға сығырға саҡырып ебәргән фарманын дәррәү күтәреп ала ла яуға әҙерләнергә һүҙ беркетә.

Был йыйын тарихтың туғыҙ йөҙ ҙә һикһән берендә, йылҡы йылында [3] була.

Йыйын ҡороп, байһүҙ [4] тотҡан бей-аҡһаҡалдар башҡорт халҡының тарихы өсөн оло ғына эш ҡылғандарын артыҡ абайлап тормаҫтан, кәңәштәре берегеүгә ҡыуанышып, йыйындың икенсе өлөшөн — көрәш, ярыш, ат сабыш бәйгеһен дә асырға йыйыналар. Тик ул көндө төш ауып, көн ҡыҫҡа һарҡҡанға күрә, бәйгене иртәгәгә ҡалдырып, йыйын халҡы тирмәләргә аш-һыу мәжлесенә таралыша. Байҙар бал эскәндә, ярлы меҫкен ярҙан ятып һыу эскән тигән шикелле,

---

[1] Нотоҡ — телмәр мәғәнәһендә.
[2] Ярһүҙ — асыулы һүҙ, сығыш.
[3] Был иҫкесә йыл хисабы буйынса. Яңыса 1573 йылға тура килә.
[4] Байһүҙ — авторитетлы рәсми һүҙ мәғәнәһендә.

оло йыйындарҙа ла ярлы-ябағаға һыйҙың бары ҡаты-ҡоτоһо, ҡалдыҡ-боҫтоғо тейгән, ә иләүҙәрҙәге ҡанса ярлы халыҡта мал-мөлкәт түгел, баш ҡайғыһы, йән аҫрау хәстәре... Бейҙең эше фарман менән икән, ярлыныҡы дарман менән.

Йыйын иртәгеһенә иртүк, ҡояш ҡалҡыр-ҡалҡмаҫтан, аяҡҡа баҫҡан. Ни тиһәң дә, оло йыйындың кисәге ултырҙаш өлөшөндә ил азаматтарының, аҡһаҡалдарҙың аҡылы, һүҙ-фекер ҡеүәһе һыналған икән, хәҙер бәйгелә һәр ырыу ир-егеттәренең көс-ҡеүәте, таҫыллығы һыналыр көн бит.

Халыҡ ашап-эсеп ҡуҙғала башлағансы, һыбайлылары менән йүгерек аттар сабыш башлау билдәләнгән урынға, йәйәүле өсөн көн ярымдай юл булыр араға, Өршәк буйына сығып та киткәндәр. Хәйер, улар киткеләгәнсе әле, ҡайһы яҡ аты уҙыр тип бәхәстәр ҙә ҡуйырғылап алған. Ҡайһы ғына йүгерек атты ҡарама, шул алдан килер төҫлө, барыһы ла һөлөк кеүек йылҡылдап, тейен кеүек уйнаҡлап тора. «Һайт» тип бер ҡыйҡыулап ебәр, уҡ кеүек атылып китер һымаҡ. Шулай ҙа ат йүнен белер һынсылар Еҙем буйынан Ҡатай араһынан килгән бер туры аттың алдан килерен юрайҙар. Арғымағы ла арғымаҡ шул: торғаны менән бер толпар тарпаны. Арала тағы бер ҡашҡа ат, йәнә ала сыбар кәттә шәп күренә. Уларын Үҫәргән ырыуы менән Ҡыпсаҡтыҡы, тиҙәр.

Алғыр сығыр юртаҡтар өсөн бүләктәре лә күптән тәғәйен икән. Улары үҙҙәре ни тора: беренсе килгәнгә — эйәрле-йүгәнле арғымаҡ, ти. Икенсегә — ынйы биҙәкле ҡәмәре менән алтын йүгертелгән ҡынлы алмас ҡылыс, өсөнсөһөнә — ең, яға, итәк буйҙары уҡа менән ҡайылған атлас сапан менән йылҡылдап торған ҡыҙғылт төлкө бүрек. Бүләгә бүләк инде, шулар менән килер, илгә таралыр даны тағы ҡәҙерлерәк.

Тирмәләрҙән бер аҙ аҫтараҡ, киң битләү һөҙәкләнеп уйһыу яланға ялғанып киткән ерҙә, халыҡ дәррәү йыйыла башлау менән, көрәш майҙанын да асып ебәрәләр. Арыраҡ сәпкә уктан атыусыларҙың, күҙ бәйләп көршәк ватыусыларҙың ярыш майҙандары китә.

Күптәрҙе иң ҡыҙыҡтырғаны, бәйгенең үҙәге, әлбиттә, әлеге көрәш майҙаны. Унда һәр ырыуҙың батырҙарының батырҙары алышасаҡ бит. Билдәле, һәр ырыуҙың үҙ батыры бар. Бына Табын ырыуы батыры Оморҙаҡ. Артыҡ булмаһа, буйға сажиндан һис кәм булмаҫ, яурындары ғына ике аршын саҡлы. Беләктәре уҫлаптай. Аштырмаһалар, тана хәтле тананы күтәреп алыу уға бер ни тормай, тиҙәр. Ә бына Дим буйы батыры Сураман буйға оҙон булмаһа ла, бик баҙыҡ ир-егет. Ҡаратау яғы батыры Илмерҙәк,

ғәйнәләләр батыры Байыегет тә мыҡты кәүҙәләләр. Былар әле күҙгә салынғандары, күптәрҙең иғтибарын тартҡандары ғына.

Көрәш майҙанын, гәҙәттәгесә, йәш-елкенсәк башлап ебәрә. Көслөнән-көслөрәге алып ташлай бара бирен, майҙанға ысын батырҙар сығырға ла нәүбәт етә.

Ҡара-Табын ырыуынан Аҡназар батыр менән Асылыкүл буйы Ҡаңны-Төркәй ырыуы батыры Ҡыҙрас бик оҙаҡ ҡына алыша. Ахырҙа Ҡыҙрас еңеп, затлы ғына бүләктәр алып, майҙандың шау-гөр килеп хуплауын тапҡас, күпмеләр ваҡыт уның менән алышырға сығыусы табылмағандай ҙа торон ала. Бер аҙҙан һалмаҡ ҡына баҫып, Сураман майҙан уртаһына ыңғайлай. Көрәшергә ҡушаҡ тотторғас та әле, ул әллә күпме билдән йәһәт кенә алмай өйөрөңкөләп йөрөй. Бына бер мәл Сураман Ҡыҙрастың билен бирмәй бирен ҡапыл ҡыҫып алыуы була, Асылы буйы батырын йәлп итеп баш аша һелкеп ебәреүе була. Теге батыр һеңк итеп ергә барып төшә. Майҙан да ыҫ-аҡыл тартып, шау итеп ҡала.

Сураман менән алышҡа Көтөр сыға. Көтөр батыр Сурамандан аша ҡарабыраҡ тора, шул хәтле һонтор. Был ике батыр көрәшергә үтә таҫыллы булып, бер-берәһенә бил бирмәй, көстө самалап оҙаҡ көрмәкләшә торғас, Сураман баяғыса ҡапыл һелтәйем тигәндә, Көтөрҙө баш аша ала алмайынса, үҙе аҫта торон ҡала. Майҙанда шау-шыу, ығы-зығы китә, юрматынысылар «Көтөр батыр йыҡты» ла «Көтөр еңде» тип геү килеп еңешә, Дим буйы Меңле башҡорттары Сураманды яҡлай. Көрәш майҙаны башлығы батырҙарҙы яңынан алышырға ҡуша, улар күпмеләр яҫҡышып йөрөгәндән һуң, Сураман батыр таҫыллыраҡ булып сыға, Көтөрҙө тубығына тәрәберәк ҡырға бырғыта.

Көрәштең иң ҡыҙығы ла, иң ғәйрәтлеһе лә Сурамандың Оморҙаҡ батыр менән алышында булғандыр, моғайын. Йә бил бирмәй, йә көс самалап йөрөп, Сураман тағы ҡапыл маҡып тотоп, Оморҙаҡтың билен ҡыҫып алып ҡарай икән, бил ташмы ни — ҡата ла ҡуя, ти. Шуға ҡушаҡ та шыуып тик тора икән. Ҡыҙрас, Көтөр менән алышып хәле бөтә башлаған Сураманды Оморҙаҡ үҙе лә байтаҡ албырғатып йөрөткәс, аҙаҡ еңеп сыға. Оморҙаҡҡа Байыегет, тағы бер-ике батыр сығып ҡараһалар ҙа, уны алып һалырлыҡ ғәйрәт күрһәтә алмайҙар. Шулай итеп, Оморҙаҡ оло бәйгелә көрәштә иң көслө батыр булып ҡала. Уға бүләк итеп аҫыл буҫтауға тәңкәләр менән ҡапланған көйәк — яу кейеме, башына кейер көмөш торҡа[1], шуларға иш итеп

[1] Торҡа — шлем.

һөйәк һаплы ҡорос суҡмар — яу-һунар ҡоралы бирәләр. Икенсе бүләкте алған Сураман батырға затлы ҡалъян [1] менән әҙернә йәйә, уҡ-һаҙаҡ, аҫыл ебәк тауарҙар тейә. Көтөр батыр сит-ситтәре һырлап семәрләп эшләнгән ҙур баҙыяп тәпән менән тулы ишемле бал, йәнә сиғеүле таҫтамалдар ала.

Бер заман һыртта күҙәтеп торған малайҙар «аттар, аттар!» тип ҡысҡырыша башлауҙары була, майҙандағылар ҙа Өршәк буйҙары ягынан туҙанын туҙҙырып сабып килгән юртаҡтарҙы шәйләп тә алалар. Тик ҡайһы аттың алдан килгәнен әле белер әмәл юҡ: уларҙы йә ҡыуаҡлыҡ, йә туҙан ҡаплай. Бына бер мәл туры ат атылып килеп сыга. Аргымаҡтың алгырлығы әллә ҡайҙан билдәле: атҡан уҡтай һонолоп елә генә. Унан әҙ генә арттараҡ ике ат башҡа баш тигәндәй тиң сабалар. Күпме генә ваҡыт үткәндер, майҙанға яҡынлашыу менән, улары ла танымалы була: береһе — аҡ бәкәлле ҡашҡа ат, икенсеһе — ала сыбар. Туры ат быларҙы бер ер буйылай ташлап, беренсе булып майҙанга атылып инә, бер аҙҙан ҡашҡа менән ала сыбар ҡолаҡҡа ҡолаҡ тиң булып бергә елеп уҙалар.

Һынсылар һүҙе раҫ булды: туры атҡа беренсе бүләк — эйәрле-йүгәнле аргымаҡ, ҡашҡа менән ала сыбарға алмас ҡылыс менән затлы кейемдәр тейҙе. Был юртаҡтар үҙ ырыуҙарының данын күтәргән кеүек, шул бүләктәрҙе әҙерләгән оҫталарҙың да данын танытты. Шулай инде, аргымагына күрә даны, батырына күрә әжере [2], оҫтаһына күрә ҡәҙере.

Көрәш менән ат сабышы ярыштары тамамланып, ҡояш кискә ауышыуга ҡарамаҫтан, бәйге һүрелергә һис оҡшамай әле. Тамаша ҡылырга яратыусылар әле бер урында мәргәндәрҙең уҡтан сәпкә атыу ярышын күҙәтә, ҡайһылары ецел һөйәкле егеттәрҙең һырғауылға үрмәләүен ҡарай, ҡомарлыраҡтары айбарлыларҙың аттан тартыш, яҫҡышыу ярышын ҡарап шау-гөр килә. Бер тошта һәүәҫкәрҙәр ҡош сөйөп уйнай. Ары тирмәләр янында урман-тау башҡорттарының аргымаҡтарға атланып алган ун-ун бишләп ирегеттәре Иҙел аръяғына һунарга сыгырга йыйына. Унлабының эйәр ҡашына йә яурынына сапсап һунар ҡоштары ҡунаҡлаган. Ҡоштары ла төрлө-төрлө: береһенеке бөркөт йә ыласын икән, икенсеһенеке шоңҡар йә ҡарсыға, ҡайһыһыныҡы хатта тойғон ҡош. Күренеп тора: ындай йылғыр ҡоштар, көйгәнәк йә әтәлгә һымаҡ, йомран-фәлән тотмаҫ, өйрәк йә ҡаҙ тибер, ҡуян йә төлкө аулар. Ҡанъяғаларына

[1] Ҡ а л ъ н — уҡ һауыты, һаҙаҡ.
[2] Ә ж е р — бүләк, баһа мәғәнәһендә.

суҡмар йә уҡ-һаҙаҡ тағып алған һунарсылары ла ҡуян осраһа ҡыумай, төлкө тап булһа, сапмай, бүрегә юлыҡһа, һуғып алмай ҡалмаҫ барыбер. Тура килһә, айыуын да торомдан-торомға сабып ҡамалап, һөңгө менән яралап, суҡмар менән дөмбәҫләп үлтермәй ҡалмаҫ.

Батырҙар алышып, юртаҡтар сабышып, мәргәндәр уҡ атышып, айбарлылар атта яҫҡышып бөткәс, тамаша ҡылған халыҡтың танһыҡтары ҡанғас, көн кискә һарҡҡан саҡта, бәйге таралыша, ә тау битендә киске һый-хөрмәткә әҙерләнеп, елегә бейә бәйләнгән ерҙә бисә-сәсәләрҙең ҡорОҡлап бейә һауғаны, тирмә тирәләрендә батмандарҙа ҡымыҙ бешкәне, ут-ҡаҙан янында уралғандары күренә.

Киске эңер яҡынлашҡанда, бөтә ырыуҙың башлыҡтары, бәйгелә еңеп сыҡҡан батырҙар, абруйлы аҡһаҡалдар, ғәҙәт буйынса, әлеге ун биш ҡанатлы оло аҡ тирмәгә йыйыла: донъя хәлдәре, бөгөнгө бәйге хаҡында гәпләшеп, һый-хөрмәт күреп, ҡурай-йыр тыңлап хозурланып ултырмаға.

Йылына бер килгән оло йыйын ниндәй күркәм күренмәһен, донъя үҙе һис тә байрам түгел шул. Ҡуңалтаҡ тормошонда нисек етте шулай көн күргән ярлы-ябаға, байғош күнме. Йыйында ваҡытлы ғына булһа ла күңелдәрен баҫҡан, донъя мәшәҡәттәрен онотоп торған уҫлантай ир-егеттәрҙе лә иртәгә шыҡһыҙ тормош ҡырыҫлығы, ҡыҫынҡылығы көтә.

Оло табында башлыҡтар, батырҙар, аҡһаҡалдар менән ултыраһы Айҙар сәсән был юлы әле һаҡал-мыйыҡтары саҡ беленеп кенә килгән йәш-елкенсәктәрҙең, егеттәрҙең күңелен күреп, гәпләшеп ултырмаҡ өсөн, үҙ тирмәһендә кескәй табын ҡормаҡсы булды. Йөҙ йәшәр сәсән оло табындарҙы күп күргән, һый-хөрмәтте күп татыған. Уға хәҙер тарих, хикәйәт тыңларға, ҡарһүҙҙәр ишетергә һәүәҫ, ололарҙан фәһем, аҡыл алыр йәштәрҙе йыйып, табын ҡороп, әңгәмәләшеп ултырыу хозурыраҡ.

Айҙар сәсәндең тирмәһе оло аҡ тирмәнән әллә ни йыраҡ түгел: уң ҡулда ҡалҡыу бер ерҙә. Тирмәһе шаҡтай ҙур: туғыҙ ҡанатлы. Үҙе Ҡәлсер-Табын ырыуынан булып, ошо тирәлә Ағиҙел буйҙарында йәйләүләгәндән, йыйын яланына ла бар әҙер-яраҡы, күсеп йөрөр мөлкәте менән килгән.

Тирмә шаршау менән икегә бүленгән. Ҡесерәк яғы ҡатын-ҡыҙҙар яғы икән. Унда түр яғына оло һандыҡ ҡуйылған, өҫтөнә бөхтәләп юрған-мендәрҙән өйөлгән, тағыраҡтарына таҫтамалдар теҙелгән, кейем-һалым өсөн сөйҙәр ҡағылған. Ишек төпләп һул яҡта ҡамыт-ыңғырсаҡ, эйәр-

өпсөн әйберҙәрҙе күренә. Тирмәнең сағырағы[1] оҙонсараҡ булып, түбәһе төнлөк менән барып ослана. Уны кәрәк сағында асып-ябыу өсөн баулы таяҡ беркетелгән.

Тирмә тибһененең тапалып бөтөүенә ҡарағанда, бында халыҡтың һис өҙөлмәгәнен дә шәйләргә мөмкин. Әле лә килгән йәш ҡунаҡтарын түңәрәк тирмә эсләп йәйелгән келәмдәргә аяҡ бөкләп ултырыуҙарын көтөп алғас, Айҙар сәсән үҙе башлап йәш һаумал ҡымыҙҙы туҫтаҡтарға бүлеп сыҡты ла быйылғы йыйын менән бәйгенең һәйбәт үтеүе хөрмәтенә аҡты ҡаплап ҡуйырға ҡушты.

Сәсәндең ғибрәтле йә киназәле аҡыллы һүҙҙәрен тыңлай-тыңлай бер нисә туҫтаҡ ҡымыҙҙы түңкәргәндән һуң, ҡорҙагылар шаҡтай кәйефләнеп тә өлгөрҙө. Йәш бер ҡурайсы ҡурайын һыҙҙырып ебәрҙе, уның артынса ошо уҡ ҡурайға ҡушылып бераүһе башҡорттоң оҙон бер йырын йырлап ташланы. Ҡурай, йыр моңо араларында Айҙар сәсән ҡарһүҙҙәр әйтеп, ҡобайырҙар һамаҡлабыраҡ алды.

Үҙән күрке тал булыр,
Айғыр күрке ял булыр.
Һыланмаһаң, талын киҫ,
Яп-ялангас сай[2] булыр.
Ялын ҡырҡһаң айғырҙың,
Бер алама тай булыр.
Батыр булған егеттең
Ҡылған эше хаҡ булыр,
Ил-йорт өсөн тырышһа,
Күңелдәре пак булыр.
Тәлтермәс[3] тә уҡ булмаҫ,
Тейһә лә күп үтә алмаҫ;
Торомтайҙан ҡош ҡалмаҫ,
Турғай тибеп, ҡаҙ булмаҫ;
Үз йәнкәйен аяп, байман[4] ятҡан
Ир-егеткәй булып ҡот алмаҫ.

Йәш табындаштарының ҡолаҡтарын ҡарпайтырлыҡ ошондай ҡобайырҙарын һамаҡлап торғандан һуң, түрҙәге тағыраҡта элеүле торған ҡумтаһынан ҡурайын алып, сәсән бер оҙон көй уйнап ебәрҙе. Берсә һағышлы, берсә дәртле, берсә тантаналы ул моң тыңлаусыларҙы үҙ ихтыярына буйһондора барғанда, сәсәндең әҙәпле генә әйҙәп баш ҡағыуы менән, баяғы йырсы егет ҡурайға ҡушылды. Ул бер быуынын[5] йырлап бөтөүгә, бөтә табын бер тауыштан икенсеһен бергәләп күтәреп үк алды:

---

[1] Сағыраҡ — көмбәҙ.
[2] Сай — ҡоро соҡор ер.
[3] Тәлтермәс — балаларҙың уйын уғы.
[4] Байман — тыныс.
[5] Быуын — бында йыр куплеты мәғәнәһендә.

Күгәрепкәй яткан Урал тауы —
Ете лә ырыу — илдең төйәге,
Ирек яулап үлгән иркәйҙәрҙең
Шунда ята изге һөйәге...

Йыр-моңдан дәрт ҡатыш һағышланып өлгөргән йәш-елкенсәк ошо «Етеү ырыу» тигән йырҙың тарихын да һөйләп биреүен үтенгәс, бер аҙ ғына тына, уйлана биреп, Айҙар сәсән уратыңҡырап һалмаҡ ҡына һүҙ асты:

— Уландар, йә дәртле, йә үтә һағышлы булып ишетелгән йыр-моң — халыҡтың ысын-ысындан күңел көҙгөһө ул. Шуға ла ул, һине моңландырып, уйҙарыңды әллә ҡайҙарға алып китә: берсә ул моңдан йөрәк өҙгөс аһ-зар ишеткәндәй булаһың, берсә ҡыйҡыулы оран, ат тояғы тауыштарын тойғандай итәһең, берсә ҡоштар һайрашыуын иҫләйһең. Йырҙың моңонда уҡ үткән хәлдәр, халыҡ тарихы яңғырап ҡалғандай миңә, ә башҡорт йырҙарының күпселеге үҙе үк ниндәйҙер бер ваҡиға, тарих менән бәйле. Әле йырлаған «Ете ырыу» йырының да үҙ тарихы бар.

Шуны ла әйтәйем әле, уландар: ир-егеттең егетлеге ҡоро ғәйрәттә, таҫыллыҡта ғына булмайынса, башында булыр аҡылда, күңелендә ятыр инсафлыҡта ла. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тигән боронғолар. Ирмен тигән ир кеше ил-йорт йолаларын да йолалай белер, ололарҙы ололоҡлар, ата-бабаларының изге әшенә, оло тарихына аманат итеп ҡарар. Һәр хәлдә, тамағы туҡ, өҫтө бөтөнгә генә ҡәнәғәт булып, бүтәненә аңшай булмаҫ. Бөгөнгөһөн дә, үткәнен дә ҡәҙерләй белер, киләсәген дә онотмаҫ.

Тарих тигәндәй, ата-бабаларыбыҙҙың бер аманат һүҙен дә иҫтән сығармайыҡ. Башҡортмон тигән башҡорт етмеш төрлө һөнәр өҫтөнә үҙе ата-бабаларының ете быуынға саҡлы нәҫел тайраһын [1], үҙ ырыуының шәжәрәһен, ил-йорт тарихын яҡшы белеүе шарт. Һеҙҙең һәммәгеҙҙең дә шуның тәүге ике шартын үтәүегеҙгә һис шигем юҡ, ә бына ил-йорттоң боронғораҡ тарихын сала-сарпы ғына белеүегеҙ ихтимал. Ни өсөн тигәндә, беҙҙең ата-бабаларҙың боронғораҡ тарихын тапшыра килеү ҡайһы быуындарҙалыр өҙөлә, югала яҙып ҡалған. Шуга һеҙгә быны белмәү ғәйеп түгел, белергә теләмәү генә ғәйеп булыр ине.

Әгәр теләгегеҙ булһа, әле һеҙ һөйләргә һораған «Ете ырыу» йыры тарихына бәйләп, ата-бабаларыбыҙҙың әүәлгерәк тарихына ла күҙ һалырға самам юҡ түгел...

Йәш ҡунаҡтар хужаның был ниәтен бер ауыҙҙан хуплагас, барыһы ла берәр туҫтаҡ ҡымыҙ эсеп, ит-ҡалъя ҡап-

[1] Т а й р а — ата-бабаларҙың исемдәр теҙмәһе.

ҡылап алғандан һуң, ниндәйҙер бер тантаналы тынлыҡ эсендә сәсән үҙенең һөйләр тарихын башлап та ebәрҙе:

— Тарихты уны, уландарым, бүлеп алып һөйләүе лә ҡыйын. Тарих ул быуын-быуын төҫлө. Бер быуынын төшөрөп ҡалдырһаң, икенсеһе аңлашылмай, унан һүҙ ҙә яҙа-йоҙаға китә.

Беҙҙең халыҡтың тарихы яҙылмаған. Әле әйткәнемсә, уны ата-бабаларыбыҙ телдән-телгә һөйләп, быуындан-быуынга тапшырып булған. Шунда уның ҡайһы бер ваҡиғалары онотолған, ҡайһыларынан сала-сарпы ғына мәғлүмәттәр ҡалған. Бына хәҙер ырыу шәжәрәләрен аҡҡа яҙа башлағас ҡына, иҫтән юйылырын яҙыу һаҡлай алыр, тим.

Уландарым, алдан уҡ иҫкәртеп ҡуям, минең дә был һөйләр тарихым ярым хикәйәткә оҡшауы бар. Ни өсөн тигәндә, онотола башлағандарын ялғағанда, ни эшләйһең, фараз итергә лә тура килә.

...Боронораҡ иген сәсмәгән, бесән сапмаған, фәҡәт мал аҫрап, һунар итеп йәшәгән олатайҙарыбыҙ мал-тыуарын ҡуйы үлән-сәскәлә утлатып, йәйен — үреш, ҡышын тибен эҙләп, ырыу-ырыу эркелешеп, ер-һыуҙар кисеп, гел күсеп йөрөр булғандар. Ололар һөйләгәндән ишетсәмсә, башҡорттар Алтай тауҙарынан Уралғаса, Уралдан Оло Иҙелгәсә [1] күсеп йөрөгәндәр борон. Хатта бер заман, бынан өс-дүрт йөҙ йылдар әүәл, Ҡара диңгеҙ, Дунай һыуы буйҙарынаса китеп ҡышлар булғандар, имеш. Ни өсөн тиһәң, ул яҡтарҙа ҡыш йылы, ҡар йоҡа, мал-тыуар тибенлектә ҡышлай. Яҙын-йәйен тағы ҡубарылып төньяҡҡа, Иҙел, Урал буйҙарына ҡайтыр булғандар.

Билдәле, бындай икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы, һанһыҙ урман-һыуҙарҙы ҡыҙырһалар ҙа, уларға гел иркенлектә бик ирәйеп йөрөргә лә яҙмаған. Ошо уҡ ерҙәрҙә күсеп йөрөр бәжнәк [2], ҡыпсаҡ, болғар [3], ҡырғыҙ [4] кеүек эре-эре ырыу халайыҡтар менән ер-һыу, яҡшы йәйләүлек, ҡышлаулыҡтар өсөн яулашырға, бер-берећенә сапҡындар яһарга ла тура килгеләгән. Тора-бара уларҙың бер-береһен аңлашышып, татыулашып, аралашып йәшәгән замандары ла булған. Ләкин көньяҡ далаларында ҡайһы бер яусыл ырыуҙар көйөҫ-көйөҫ [5] яу асып, бер-береһенең йәйләүен баҫып, мал-тыуарын, йорт-ерен йыш талай башлағас, башҡорт

---

[1] Оло Иҙел — Волга.

[2] Бәжнәк — печенегтар.

[3] Болғар — был урында боронго Дон-Волга буйында йәшәгән болғарҙар хаҡында һүҙ.

[4] Ҡырғыҙ — хәҙерге ҡаҙаҡтарҙың боронго ата-бабаларын элек шулай атағандар.

[5] Көйөҫ-көйөҫ — ара-тирә, ҡапыл.

ырыуҙары урмандары өҫкә ауып килгән, йәйләүлектәре лә ярайһы мул, үләне бил бауырына еткән Урал тауы ҡуйындарына, Ағиҙел, Яйыҡ, Һаҡмар, Ҡама, Туҡ, Ырғыҙ, Ыҡ буйҙарына ҡайтып, шул тирәләрҙә ныҡлап төйәкләнгәндәр. Башҡорт ырыуҙарының байтаҡ ырыу-ҡәбиләһе мадьяр, болғар ырыуҙарына ылығып, көнбайышҡа китеп, Ҡара диңгеҙ, Дунай һыуы буйҙарында ла ултырып ҡалған икән.

Урал — Иҙел буйҙарындағы муллыҡ, һалҡын ҡыш, ҡара урмандар күсәбә[1] ата-бабаларыбыҙҙы ултыраҡлыҡҡа күсергә, ҡышлар бура өйҙәр, мал ҡаралтылары һалырға зарурат[2] иткән, күрәһең. Үҙҙәре лә киң далалар ҙағы яман баҫҡынсыларҙан боҫор өсөн һилерәк, байманыраҡ таулыурманлы, йылға-күлле төбәктәргә төпләнеүҙе хәйерлерәк тапҡандар булһа кәрәк. Улар төньяғында ҡамалы ҙур йылғаны — Сулман иҙелен дә[3] үтеп киткәндәр. Бындағы уғырара ырыуҙарын арыраҡ, ылыҫлы урмандар араһына, ҡыҫырыҡлағандар.

Урман-дала ерҙәрендә әле бик һирәк осраштырғылаған ҡырағай аттар, тарпандар, ҡоландар ул заман ғәләмәт күп булған, өйөр-өйөр эркелеп йөрөгән. Болан, мышы, ҡоралайҙар тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Йәғни һунар иткәнгә, аҫрар мал-тыуарҙан тыш та, ит-түлек эргәлә генә булған. Урман-һыуында тейен, төлкө, һуҫар, ҡама, шәшке, ҡондоҙ, бурһыҡ ише кейек тиһеңме, бүтән ҡош-ҡортомо, йылға-күлендә балығы тиһеңме — күплегенә хайран ҡалырлыҡ икән. Ҡайһыһын ҡул менән һонолоп, таяҡ менән һуғып ҡына ал инде, шул хәтле, имеш.

Халыҡ бер заман затлы тиреле кейектәргә һунар итә башлаған. Ул тиреләр алыҫ баҙарҙарҙа бик ҡиммәт торғас, бәғзе бер халыҡ быуның менән кәсепләнеп байығыбыраҡ та киткән. Улар тире-яры, ит-бал менән алыш-биреш өсөн оло ҡайыҡ кәмәләргә ултырып, Ағиҙел, Сулман иҙел аша Оло иҙелгә төшөр булғандар. Оҙаҡламай сәхрәләр аша Хорезм яғына каруан юлдары ла һалғандар.

Хәҙерге миладый хисабы[4] менән иҫәпләгәндә, унынсы быуаттар самаһында күпселек башҡорт ырыуҙары ҡәбилә-түбә булып буралы өй, ҡаралтылы ауылдарҙа йәшәгәндәр инде. Ҡышҡылығын ауылда ҡышлап, йәйен генә бөтә мал-тыуары менән йәйләүгә сығыр булып киткәндәр. Мал

---

[1] Күсәбә — күсмә тормош менән йәшәүсе.
[2] Зарурат — мәжбүр иткән мәғәнәһендә.
[3] Сулман иҙеле — хәҙерге Ҡама йылғаһы.
[4] Миладый хисабы — христиан дине буйынса хәҙерге йыл хисабы.

аҫрауға һунар, солоҡсолоҡ[1], игенселек, алыш-биреш[2] кәсебе өҫтөлгән.

Оло һыу буйҙарында ҙур-ҙур ғына ҡалалар ҙа үҫеп сыҡҡан бер заман. Ҡала тигәс тә, уларҙы хәҙерге таш ҡалалар менән тиң күрмәгеҙ тағы. Ул замандағы башҡорт ҡалалары бәләкәй булған. Уларҙы ҡала тип түгел, ҡәлғә тип атау дөрөҫөрәк булыр ине. Ҡала ул шул ҡәлгә һүҙсенән ҡалған да инде.

Улар бик уңайлы йылға моронона йә ҡалҡыу ергә һалыныр булғандар. Йә яйлыраҡ ергә ҡорған[3] ҡорғандар. Шуның тирә-яғын осло имән бағаналар менән уратҡандар. Ҡәлғәне йәнә тәрән соҡор — ур менән уратып алғандар. Уға һыу ебәргәндәр. Ҡәлғәлә дүрт тарафҡа ғәҙәттә дүрт тәпәш бурама манара[4] яһағандар, шуға дүрт ҡапҡа уйғандар. Ҡапҡаны һыулы ур аша сығырлы күпер менән тоташтырғандар. Төндәрен йә хәүеф-хәтәр мәлдәрҙә, ул күпер күтәрелер, көндөҙөн асып ҡуйылыр булған. Имән бағаналарҙың эс яғына һаҡсылар, ҡарауыл йөрөр өсөн, яу килһә, тороп һуғышыр өсөн, тәрән улаҡ юлдар эшләгәндәр, бағана араларына уҡ атыр тишектәр тишкәндәр, һөңгө менән яҫҡыр уйымдар уйғандар, э ҡәлғә эсе тығыҙлап һалынған бурама өйҙәрҙән, ҡаралтыларҙан торған. Бындай ҡәлғә-ҡалалар Әхмәт хан ваҡытында, Болғар дәүләтенең көсәйә барыр заманында, нығытылғандар булһа кәрәк.

Ул башҡорт ҡалаларының тәғәйен ҡайһы урында, өй-ҡаралтылары нисегерәк, халҡының көнкүреше ҡайһылайыраҡ булғандыр — хәҙер әйтеүе ҡыйын. Ни өсөн тигәндә, улар аҙаҡ оло яуҙар ваҡытында емертелеп, яндырылып, хараба хәленә килтерелгән йә бөтөнләй янып юҡҡа сыҡҡан.

Хәҙер улар хаҡында айырым мәғлүмәттәрҙе ғәрәп-фарсы сәйәхәтселәре яҙмаларынан ғына тапһаң табып булыр. Олатайым әйтә торғайны: 850-се йылдарҙа Сәлләм-эт Тәржемәни атлы бер ғәрәп сәйәхәтсеһе Кавказ тауҙары аша Хазар диңгеҙе[5] буйлап сәйәхәт ҡылғанда, егерме ете тәүлек буйы «Башҡорттар иле» ерен үткәнен яҙған тип. Шунан етмеш ете йылдан һуң икенсе сәйәхәтсе Ибн-Фаҙлан Болғар иленә барышлай шулай уҡ Башҡорт ерҙәрен үткән икән. Йәнә ғәрәп ғалиме Идрисиҙең һүҙҙәре тип олатайым һөйләгәне булыр. Шул һүҙмә-һүҙ хәтеремдә: «Алтынсы

---

[1] Солоҡсолоҡ — ҡырағай бал ҡорттарын ҡарау.
[2] Алыш-биреш — һатыу итеү, сауҙа мәғәнәһендә.
[3] Ҡорған — курган.
[4] Манара — башня мәғәнәһендә.
[5] Хазар диңгеҙе — хәҙерге Каспий диңгеҙе.

климаттың[1] етенсе өлөшө — уныһы ни аңлаталыр ниде — эске вә тышҡы Башҡорт ере, уларға төньяҡтан яҡын торғаны Скония ере, тип яҙған, ти, был ғалим. — Был климат ерҙәре күбеһенсә таулы. Эске Башҡорт ерендә ҡалалар: Ҡараҡыя, Минжан, Ожан. Был тирәләрҙә халыҡ тығыҙ йәшәй. Минжан менән Ожан араһы һигеҙ тәүлек юл. Ул ҡала Скония төрөктәре ере. Был бик дәү, төҙөк, күп халыҡлы ҡала булған. Ул Иҙелдең төньяғында урынлашҡан. Ожан менән Ҡараҡыя араһы, һыу ағымына йөҙөп төшкәндә, һигеҙ тәүлек юл, ҡоронан барғанда көнбайышҡа табан ун алты тәүлек юл. Ҡараҡыя ҡалаһынан тышҡы Башҡорт еренә ун көнлөк юл».

Үҙебеҙсә самалап ҡарағанда, ти торғайны олатайым, Ҡараҡыя ҡалаһы Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған тошҡараҡ, әлеге йыйыныбыҙ ҡәлгә һалдырырға билдәләгән моронғараҡ тура килә. Ә ике ҡала — тышҡы Башҡорт ерендә тигәне — сама менән Сулман иҙеле буйҙарында булғанға оҡшай.

Бер заман Болгар дәүләте көсәйә барып, башҡорттарҙы ла үҙ ҡул аҫтына буйһондора башлаған. Улар Ыҡ, Ҡармасан, Сәрмәсән буйҙарын, Сулман иҙелдең түбән ағымын баҫып алғандар. Ағиҙел буйҙарына килеп сыҡҡандар. Ҡаты яуҙарҙан, көҫөк-көҫөк сапҡындарҙан һуң ғына, урман-дала яҡтарына, Ағиҙел юҫығына болғарҙарҙың яуы туҡтала бирел ҡалған. Уның ҡарауы, иң хәтәр ҡанлы яуҙар төньяҡта, әлеге һыу буйына һалынған ҡәлғәләрҙә булған.

Ҡайыҡ-кәмәләрҙә Сулман иҙеле менән күтәрелгән болгар ғәскәре әлеге ҡәлғәләргә килеп кәпселгән. Ҡәлғәне һыу юлы менән генә ала алмағас, уны ҡоронан ҡамағандар. Шулай ҡамап тотоп, халҡын, ғәскәрен асыҡтырып, һыуға сарсатып, баш һалдырырға булған самалары. Ләкин башҡорттар болғар яуын туҡтатып ҡына ҡалмай, дошман абайламағанырaҡ арала, ҡәлғәнән сығып сапҡындар ҙа яһаштырғандар, шул саҡта күп кенә улъя[2] ҡорал, аҙыҡ-түлек ҡулға төшөрөп, ҡәлғәләренә кире инеп бикләнер булғандар. Ә диуар артынан уҡ менән, таш атыр ҡоралдары менән дошманды ҡыра торғандар. Ҡамап тотоп та бик рәт сыҡмағас, бер мәл болгарҙар бик хәтәр һөжүм ҡылып, имән бағаналарҙы яндырып, ҡәлгә эсенә сайырлы торонбаш менән уттар атып, ҡаты янғын сығарғас ҡына, ҡәлгәгә бәреп инә алғандар.

---

[1] Ғәрәптәр элек ер йөҙөн бер нисә климатҡа — өлөшкә бүлеп ҡарағандар. Волга-Урал буйҙары етенсе климатҡа тура килгән.

[2] Улъя — трофей.

Бер ҡәлғәне шулай күпме яу менән алып, йонсоп, ҡанһырабыраҡ ҡалған болғар ғәскәре йылға-һаҙлыҡлы, ҡара урманлы төпкөл яҡтарға ярып инеүҙән ваз кискән. Оҙаҡламай болғарҙар менән башҡорттар араһында солох[1] төҙөлгән. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, болғарҙарға буйһоноп, яһаҡ түләргә мәжбүр булһалар ҙа, үҙ иреклектәрен, ер-һыуҙарын йән аямай ҡурсалауҙары арҡаһында, ил-йортона үҙ хоҡуҡтарын да күпмелер һаҡлап ҡала алған былар. Элеккесә мал аҫрап, солоҡ ҡарап, иген игеп йәшәү менән бергә бүтән төрлө һөнәрҙәрҙе лә үҙләштергәндәр. Әлеге ҡәлғәләр тағы ҙурайып, ҡала кеүек булып төҙөклөнеп, байып киткән. Башҡорттар болғар баҙарҙары менән ҡыҙыу сауҙа иткәндәр, килешеү буйынса, Оло иҙел аша ҡайыҡтарҙа төшөп, далалар буйлап каруан юлы менән алыҫ илдәргә — Византияға, Әрмәнстанға, Руми[2] илдәренә лә барып сыҡҡандар. Болғарға, әлеге илдәргә улар затлы йәнлек тиреләре, айырыуса бик ҡиммәтле бабур тигән бер кейек тиреһе, лазорд исемле аҫыл таш, батман-батман бал һатҡандар. Унан ебәк, сәй-шәкәр, бүтән татлы ашамлыҡтар, төрлө ҡыҙыл мал-тауар тейәп ҡайтыр булғандар.

Шулай болғарҙар менән килешеп, яҡын вә алыҫ илдәр менән аралашып, донъялары бер аҙ бөтәйеп, мал-тыуарҙар ишәйеп, ауыл-ҡалалар шәбәйеп, һөнәр-кәсеп эштәре алға китеп хиләүәт кенә ғүмер иткәндә, күпме йылдар үткәндер, бер заман ҡояш сығышы яғынан ғәләмәт яман яу ябырылған. — Шул ергә еткәс, Айҙар сәсән бер аҙ туҡталып, хәл алғандай иткәс, табындағыларға: «Мин һүҙем менән һеҙҙе бик ялҡытып ташламаныммы?» — тип һорап ала ла, ҡунаҡтарының ялҡыу түгел, тамам йотолоп тыңлап ултырыуҙарын тойоп, һүҙен дауам итә:

— Аҙаҡ донъяға яманаты ныҡ таралыр Сыңғыҙ хандың ҡара яуы була был. Ул яу шул хәтле ҙур, икһеҙ-сикһеҙ далаларҙы ябып, яр булып килә икән. Әллә ни хәтле ғәскәр бөтә ғаиләләре, бала-сағалары, мал-тыуары, мөлкәте менән бергә килгәс, ул иҫ китмәле имеш. Бер заман Сыңғыҙ үлгәс, Батый хан Болғар дәүләтен ҡыйратып, ауылдарын көл-күмер итеп, ҡалаларын хараба хәленә ҡалдырып, Оло иҙелдә аша сыҡҡан да урыҫ кенәзлектәре ерене инеп киткән.

Йәм-йәшел туғайлыҡтарҙы, уҙған ауылдарҙы ҡара ергә әйләндереп үтешләй, шул ҡара яуҙың уң ҡанатынан

---

[1] Солох — тыныслыҡ тураһында договор.

[2] Руми — Европа илдәрен Көнсығыш халыҡтары борон шулай тип атағандар.

әллә нисәмә алайҙары[1] төмәндәре[2] менән Ағиҙел буйҙарына ыңғайлаған. Яйыҡ буйындағы бер ҡаты яуҙан һуң ул алайҙар аҙна-ун көнлөк юлдан Ағиҙел буйындағы Ҡараҡыя ҡәлғәһенә килеп тә сыҡҡан.

Баш төмән Ҡараҡыянан ике уҡ атымы ерҙә ғәскәрен туҡтатып, оло табор ҡорған да ҡәлғәгә сапҡындарын ебәргән. Әмере — яуһыҙ-ниһеҙ баш һалығыҙ, шул саҡ йәнегеҙ аман ҡалыр, имеш. Ҡараҡыя ҡәлғәһенең был замандағы башлығы арҙаҡлы яугир Буран бей атлы башҡорт икән. Ул дошман сапҡынын кире бороп ҡына ебәрмәгән, баш төмәндәренә тапшырыр өсөн һынған уҡ менән үле сысҡан да өҫтәп оҙатҡан. Беҙгә ҡаршы яулашһағыҙ, ҡулығыҙҙағы ҡоралығыҙ һыныр, ғәскәрҙәрегеҙ мур[3] килер тигәндең билдәһе икән быныһы.

Бығаса йүнләп ишетмәгән-күрмәгән әллә ниндәй башҡорттарҙың донъяны тетрәтер Йыһангир ғәскәрен шулай мәсхәрәләп ҡаршылауына яман ғәрлеге килеп, ҡара көйгән баш төмән, ул замандарҙағы яу йолаһы буйынса, үҙенең аўан бер баһадирын ҡәлғә ҡаршыһындағы киң тигеҙ майҙанға сығарған. Ғәскәр яуы башланыр алдынан ике яҡ батырҙарының алышына сығыусы баһадир[4] инде был.

Ул алыш майҙанына етеп, атын сапсытып бер-ике тапҡыр бик фырт өйөрөлгөләп алған арала, ҡәлғә ҡапҡаһының сыңйыр менән аҫмалы бүрәнә юлынан бер ҡашҡа һыбайлы күренгән. Ул да, сесел булһа ла, көйәк — яу кейемендә; ҡулында — һөңгө, билендә — ҡылыс, иңендә — ҡалҡан. Был батыр Буран бейҙең үҙе булып сыға.

Ике батыр үлемесле алыш майҙанын самалап, аттарын ярһытып, ҡоралдарын һәлмәклә-йүнәлтләй сабып йөрөгәнсе, ике яҡтың яуы, арала бер уҡ атымынан йыраҡыраҡ ара ҡалдырып, тамаша ҡылырға теҙелеп тә өлгөргән.

Бына бер мәл ике яҡ батыры, бер-ике ер буйы аралыҡта аттарын үрәпсетеп туҡтатып, һөңгөләрен бер-береһенә тоҫҡап, ҡара-ҡаршы сабышып сығып та киткәндәр.

Был алышта Буран бай ҡаты яраланған. Шундай булһа ла яу ҡырын бөтөнләй ташлап китергә йыйынмаған. Ул үҙен ҡәлғәнең үҙәк манараһындағы күҙәтсү урынына мендереп ҡуйырға ҡушҡан да бөтә ғәскәрен, ҡәлғә халҡын яу ҡайтарырға әҙерләнергә бойорған. Намыҫланган бей алыш майҙанына тамашаға сығарган алғасҡы[5] ғәскәрен дошма-

---

[1] Алай — полк.
[2] Төмән — ун мең кешелек ғәскәр.
[3] Мур — үлем, ҡырғын.
[4] Баһадир — монгол һүҙе: батыр мәғәнәһендә.
[5] Алгасҡы — авангард.

ны алдында кире ҡәлғәгә индерергә ғәрләнеп, асыҡ ялан ерҙә яуҙы ҡаршылатырға булған. Алғасҡы менән етәкселекте Сурағол батырға тапшырған.

Сурағол батыр уҡ-һаҙаҡ, һөңгө, ҡалҡан менән ҡоралды йәйәүлеләрен уртаға теҙеп, ике яҡ ҡанатҡа һыбайлыларын ҡуйған. Бер мәл тере стена булып был яҡтың ғәскәре лә, теге яҡтыҡы ла бер-береһенә ҡаршы тигеҙ саф булып яҡынлаша башлаған. Тигеҙ баҫҡан ҡаты аяҡ тауыштарынан ерҙең гөпөлдәп тороуы ишетелгән, ҡояшҡа ҡалҡандар ялтйолт итеп киткеләгән, һөңгөләр һерәйешеп килгән. Ике яҡ яу бер-береһенә ҡара-ҡаршы ғәрәсәт тулҡындай килеп бәрелешкәндә, ҡалҡандарға бәрелгән һөңгөләр тауышы, буталыш, йән өҙгөс ҡыйҡырыш, һөрән яу яланын ҡаплап алған: һөңгө менән сәнсеш, ҡылыс менән иҫ киткес тураш киткән.

Таяҡ менән ҡыжғытҡандан яман мыжғышҡан ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләткән был яу өҫтөнә бер аҙҙан ике яҡтан да ҡара-ҡаршы атлы сабыуыл[1] ташланған. Атлылар бер-береһенең сафына уҡтай атылып ингән. Ҡылыстар ҡылысҡа, ҡалҡанға бәрелгән саң-саңдар, аттар кешнәүе, ергә гөрһөлдәп ауган кәүҙәләр асырғаныштар менән бергә буталған.

Шулай күпме алыштан һуң, Сурағол батырҙың һайланмыш һыбайлылары, йәйәүле ғәскәре дошман яуын сәнсеп-турап үтеп килгәндә, һырттан ташҡын булып дошмандың яңы һыбайлылар сабыуылы күренгән. Был ҡара яу инде һирәк-мирәк кенә ҡалған сурағолсылар сафын иҙептурап, ҡалғандарын ҡәлғәгә табан ҡыҫмаҡлап алып киткән. Ҡасҡан ғәскәренең ҡалдығын, ҡапҡаларҙы йәһәт кенә асып, ҡәлғәгә алыр инең, шул ыңғайҙа дошман яуының аралашып бәреп инеүе бар. Бер урынға ҡыҫмаҡлап уратып алынған һыбайлылар, Сурағол батыр үҙе, уның яҡын яһауылдары һуңғы һулыштарына тиклем һуғышып, ҡылыстан сабылып, һөңгөгә сәнселеп ятып ҡалғандар.

Был аяныс тиңһеҙ алышты күҙәтеү манараһынан ҡарап торған Буран бей ахыр сиктә ҡәлғәләге ғәскәренә уҡтан атырға бойороуы булған, дошман яуы өҫтөнә уҡ ямғыры яуа ла башлаған. Тик ул яу уҡтан ҡыйралып тырым-тырагай таралыша башлағансы, һырттан яңынан-яңы дошман сафтары эркелешеп сыға торған. Уҡ етмәҫ ара ғына ер ҡалдырып, бер заман ҡәлғәне тотошлай уратып та алған былар.

---

[1] Сабыуыл — атлылар атакаһы.

Яу яланында күпме ат, кеше туралып ятыуға, яралыларҙың аһ-зарҙары ишетелеп тороуға, күп инде кискә һарҡыуға ҡарамаҫтан, күрәһең, тын да алдырырға ирек бирмәү ниәтенән, дошман тирә-яҡлап бер юлы һөжүмгә күскән. Арттағы рәттәрҙең уҡтан атыуы аҫтында ҡалҡанға ышыҡланып, йәйәүле ғәскәр ҡәлғәгә яҡынлаша башлаған, улар уҙған арағa һыбайлылар үтеп, яҡынырaҡтан ҡәлғәнең эсенә уҡ яуҙырғандар. Шулай ҡәлғә эсендәгеләр ҙә уҡтан үлеп йә ҡаты яраланып, сафтан сыға башлаған.

Һөжүм итеүселәрҙе уҡтан ғына алып булмағанын күреп торған Буран бей таш атыр ҡоралдарын яйға ебәргән. Эре-эре таштар тура тейгәндә инде йәйәүлеләрҙе ҡалҡаны-ние менән емерә-иҙә төшөр булған. Ләкин тирә-яҡлап ябырылып килгән һанһыҙ ғәскәр оҙаҡламай ур ҡырҙарына ла килеп еткән, уларға оҙон-оҙон баҫмалар һалып, ҡәлғә стеналарына оҙон баҫҡыстарын һөйрәргә, һөйәргә тотонған. Стенаға үрмәләүселәрҙе эретелгән ыҫмала, ҡайнар һыу менән ҡойондороп, таш-уҡ менән кире ҡаға, яланға һибелгәндәрен таш-уҡтан ҡыра торғас, бер заман ергә ҡараңғы ла төшкән. Бик күп ғәскәрен, аттарын, ҡоралдарын юғалтҡан дошман әлеге уҡ алмаҫ арaға сигенергә мәжбүр булған.

Ҡараңғы төн нисектер шомло уҙып, таң беленер-беленмәҫ көйө, ҡәлғәләгеләр ни күрһендәр, өс яҡтан шығырлай-шығырлай ғәләмәт дәү өс шәүлә шыуышып килмәһенме алдарына. Таң һарыһынан саҡ айырымлана башлаған был ҡот осҡос нәмәләр аттар менән һөйрәтелеп, кешеләр көсө менән әллә ниндәй сығырҙар ярҙамында тәгәрләтеп килтерелер бейек бурама тарандар икән. Ҡәлғәләгеләр аңдарына килеп, яу ҡайтарырға әҙерләнгәнсе, был тарандар тағы шаҡтай яҡыная төшөп, таш етмәле ер ҡалғас, таран башындағы ышыҡламаларҙан эре-эре таштар атылған. Шул уҡ ыңғайҙа таран алдындағы әллә ни хәтле эреле-ваҡлы уйымдарҙан уҡтар яуырға тотонған. Шулай тағы хәтәрерәк яу ҡубып киткән. Тарандағы таш атҡыстарҙан килеп төшкән ғәләмәт дәү таштар стена улаҡтарын емерә-һыта башлаған, ғәскәрҙе ҡырған, яҡын аранан уҡтар ҙа дәһшәтле ҡоралға әйләнгән: тура килеп тейгәне кешене үтә тишеп сығыр булған.

Бер заман тарандарҙан сайырға ҡабыҙылған утлы торонбаштар ҙа яуа башлаған; улар ҡәлғәнең эсендә әле бер, әле икенсе ерҙә янғын сығарған. Бына бер мәл бер таран ур ҡырына килеп терәлеү була, алғы стенаһынан ҡәлғә стенаһына сығырлы оҙон баҫмаһы һалынып өлгөрә, шунан дошмандар стена башына һағыҙаҡтай ябырылырға ла керешә. Күптәре, баҫманан баҫҡынсылағанда, ҡыры-

лып тәгәрәүҙәренә ҡарамаҫтан, ташҡын, бер-береһен тапап йә ышыҡланып, ҡәлғә эсенә ауа-ага башлай. Стена эстәрендә ҡаты алыштар китә. Ул буталышта хатта ҡайһыһы үҙеңдеке, ҡайһыһы дошман икәнен айырырлыҡ та түгел икән.

Ул арала икенсе яҡтарҙан шыуышҡан ике тарап тагы ҡәлғә яғаһына етеп, уларынан да ғәскәр ҡырмыҫҡа иләүендәй булып эскә ағыла башлаған. Баҫҡыс буйлап менеүселәр ҙә эскә үтеп ингән. Шулай итеп, ут-янгын эсендә ҡалған ҡәлғә ябырылған дошман яуы менән әллә ни хәтле ваҡыт үлемесле алыш алып барһа ла, аҙаҡ барыбер тамам еңелеп, ҡыйратылып ташланган. Ҡара яу, кемдең кемлегенә ҡарамай, бала-сағаны ла, ҡарт-ҡороно ла, ҡыҙ-ҡырҡынды ла ҡырырға, өйҙәрҙе таларга, нәмәләрҙе ҡыйратырға, емерергә тотонған.

Ҡәлғә яныш-ҡыйралып, хараба хәленә килгән. Буран бей үҙе лә, яҡын яһауылдары, ҡор баштары, һанаттары тиңһеҙ алышта ҡалдыҡ нөгәрҙәре[1] менән бергә һәләк булған.

Ҡалған башҡорт ҡалаларын да шундай яҙмыш көткән. Бөтә көнкүрешен яуға ҡарап яйлаған, яу-яллашып күнеккән, күпме ил-ерҙәрҙе баҫып алған, күпме халыҡтарҙы үҙенә буйһондорған был оло яуҙы башҡорттарга үҙ алдына ғына кире ҡағыу һис мөмкин булмаған. Шулай итеп, был монгол яуы ҡырғынынан һуң башҡорт йорт-иле тамам бөлөп, ауыл-ҡалалары янып, ырыуҙары тарҡауланып ҡалган. Һөнәрселек эше ныҡ ҡаҡшаған, сауҙа кәсебе өҙөлгән, элекке ирек-иркенлектәр тамам ҡулдан киткән. Ил баҫҡынсыларҙың баҫҡаҡтары[2] халыҡтан күтәргеһеҙ яһаҡ түләтеп, малын-ерен тартып алып, өҙлөкһөҙ теңкәһенә тейгән, елеген ҡоротҡан.

Хәйер, өҙлөкһөҙ яуҙар алып барыр өсөн, хакимлыҡтарын нығытыуҙа таяныр өсөн, өҫтәүенә, башҡорттарҙың ғәйрәтле, яусыл халыҡтар икәнен күреп, уларҙың ҡайһы берҙәренә — ырыу башлыҡтарына, батырҙарына бейлек, тарханлыҡ дәрәжәһен бирер булғандар баҫҡаҡтар һуңыраҡ. Башҡорт ырыуҙарына ҡош, агас, тамға, оран тәғәйенләү ҙә ошо замандан ҡалган. Бына беҙҙең Ҡәлсер-Табын ырыуының ҡошо — торна, ағасы — ҡарама, тамғаһы — сата, ораны һорнай шул хан замандарынан килә...

Айҙар сәсән шул урында һөйләүенән туҡтала бирә лә, ҡаршыһындараҡ ултырған үҫәргән ырыуы егете Байдәүләткә ҡарап: «Һеҙҙең ырыуҙың ҡошо, ағасы, тамғаһы, ора-

---

[1] Нөгәр — отряд.
[2] Баҫҡаҡ — урындагы монгол түрәләре, наместниктар.

ны нисегерәк әле?» — тип һынаулы һорау ҡуя. Теге егет: «Ҡошобоҙ — торна, ағасы — миләш, тамғаһы — ҡойошҡан, ораны — Туҡсоба», — тип теҙеп китә.

— Ә һеҙҙеке, Ҡыпсаҡ ырыуы егете?

— Ҡошобоҙ — шоңҡар, ағасыбыҙ — мышар, тамғабыҙ — һәнәк, ораныбыҙ — Уран.

— Ә бөрйәндәрҙеке?

— Ҡошобоҙ — ҡарсыға, ағасыбыҙ — ҡарағас, тамғабыҙ — ҡапҡа, ораныбыҙ — Тарауыл.

«Һай, мәрҙәш [1] икәнһегеҙ», — тип хуплап ала ла һүҙен ялғап алып китә сәсән:

— Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ борон мәжүси [2] булған. Улар нимдәй ҙә булһа кейек-ҡошҡа — йә бүрегә, йә торнаға, йә шоңҡарға — табыныр булған. Үзбәк хан заманында ғына башҡорттар араһында ислам дине ныҡлап таратыла башлағас, ул боронғо табыныуҙар аҡрынлап онотолған. Башҡорттар араһында дин таратып төрлө ғәрәп әүлиәләре йөрөгән. Шуларҙың береһенең — Хөсәйенбәк әүлиәнең зыяраты бынан йыраҡ түгел ерҙә Дим буйында әле лә һаҡланған. Уның өҫтөнә кәшәнә лә [3] ҡоролған.

Татар-монгол яуҙарынан һуң да башҡорт йорт-ерендә бер нисә ҡаты яу-ҡырғындар булған. Шуларҙың иң ҡырылышлыһы Туҡтамыш хан заманында Аҡһаҡ Тимерҙең яуы булғандыр, моғайын. Ул яу Башҡортостан ере аша 1391 йылда үткән. Әлеге Ҡараҡыянан арыраҡ Ағиҙел ярында Буран бейҙең ейәне Ялыҡ бей батыр был яу менән айауһыҙ алышып ҡараған. Ялыҡ бей ҙә хәтәр ғәйрәтле яугир булған, тиҙәр. «Бүре олоуын ишетеп ҡалтырай башлаған йәш аңра ҡолон кеүек, дошман, Ялыҡ бей исемен ишетеү менән, ҡалтырап төшөр ине», — тип һөйләгәндәр уның хаҡында. Атаһына оҡшап, уның ике улы ла — Ҡармасан менән Сәрмәсән — бик батыр булғандар икән. Хәҙерге Ҡармасан менән Сәрмәсән йылғалары шул улдарҙың хөрмәтенә ҡушылып ҡалған исемдәр, уландарым. Ләкин былар ҙа ни хәтле ғәйрәтле яугирҙар булмаһын, ярты донъяны яулап алып килгән Аҡһаҡ Тимер яуынан барыбер ҡыйратылғандар. Шунан артынса илгә яман ҡырғын килгән.

Өҙлөкһөҙ яу, хан-төмәндәрҙең тәхет өсөн үҙ-ара яньялы менән бер заман Алтын Урҙа хәлһеҙләнеп, тора-бара төрлө ханлыҡтарға бүлгеләнгәс, башҡорттарҙың бер өлөшө — Ағиҙелдең түбән яғы — Ыҡ, Сәрмәсән буйҙары — Ҡазан ханлығына, икенсе өлөшө — Йүрүҙән, Әй буйҙары—

[1] Мәрҙәш — молодец.
[2] Мәжүси — язычник.
[3] Кәшәнә — мавзолей, көмбәҙ мәғәнәһендә.

Себер ханлығына, көньяҡтағылары — Һаҡмар, Йайыҡ, Дим буйҙары нуғай мырҙаларына буйһоноп, ырыуҙар тарҡаулаными, айырымланышып ҡалғандар.

Ошо замандарҙа бер килке илгә яман ҡытлыҡ килгән. Өс йыл буйы иген уңмаған, йылҡы-ҡуй малдары йоттан ҡырылған, күп халайыҡтар дарманһыҙ булған. Өҫтәүенә, бер туған ике нуғай мырҙаһы — Ҡаракилембәт менән Аҡһаҡкилембәт, тәхет өсөн янъял ҡуптарып, яулашып киткәндәр. Халайыҡтар ике ярыға айырылып, мәғәнәһеҙ яуға тарттырылған. Ахыр сиктә был килмешәк нуғайҙар, Урал яғының ҡышы һалҡын, йәйе эҫе, был ер беҙгә көйлө түгел, тип боронғо ата-бабаларының ерено — Кубангә кире күсер булғандар. Үҙҙәрено эйәртеп, әйҙәп, һанһыҙ башҡорттарҙы ла алып киткәндәр. Ошо нуғайҙар менән аралашып йәшәгән Бурнаҡ бей, Ҡәнзәфәр кенәз, беҙ бер ҡайҙа китмәйбеҙ, тыуған еребеҙ Иҙел — Яйыҡ, Дим буйҙары тип, үҙ ерҙәрендә ҡалғандар. Бурнаҡ бей вафат булғас, бейлекте Тәтәгәскә тапшырғандар.

Бер заман, тарих туғыҙ йөҙ илле туғыҙҙа, сысҡан йылында[1] аҡ батша Ҡазан шәһәрен алған, ханлығын ҡыйратҡан. Шунан күп ваҡыт та үтмәҫтән, башҡорт ырыуҙарының бейҙәре, аҡһаҡалдары йыйылып кәңәш ҡорған аҡ батшаға вәкилдәр ебәрмәгә. Кәңәш-төңәш иткәндән һуң, үҫәргән ырыуынан Бикбау бейҙе, Бөрйән ырыуынан Иҫке бейҙе, Ҡыпсаҡтарҙан Ҡарағужаҡты, Тамъяндарҙан Шәғәли Шаҡманды вәкил итеп Ҡазанға ебәрер булғандар. Улар аҡ батшаға барып баш һалғандар, үҙ ер-һыуҙарына башҡорттар үҙҙәре хужа икәнлеккә ярлыҡаш[2] алғандар. Яһаҡҡа һуҫар, ҡондоҙ, бал түләмәк булып, бигат[3] биргәндәр. Юрматыларға Нөгөш буйҙарынан Ағиҙел башынаса тармаҡ һыуҙары менән, ялан-урмандары менән, Шәке тауынан Өршәк буйҙарынаса урман-яландары менән күп ерҙәр теркәлгән. Һәр ырыу-түбә йәрәбә һалып, ул ерҙәрҙе үҙ-ара бүлешкәндәр. Ул бүлешкән ерҙәрҙе татыулыҡ менән дәфтәргә яҙҙырып, аҙаҡ Мәскәү кенәгәһенә ялғатҡандар. Инйәр һыуы буйындағы — Ҡатай, Эҫем буйындағы — Ҡаҙаяҡ, Ләмәз буйындағы — Төркмән, Өфө иҙеле буйындағы — Бүләкәй, Үҙән буйындағы — Шайтан-Көҙәй, Әй буйындағы — Дыуан, Ҡыйғы, Һаҡмар, Ағиҙел буйҙарындағы Бөрйән, Үҫәргән ырыу йәмәғәттәре лә үҙҙәренә аҡ батшанан ярлыҡаш ҡағыҙҙары алып, ерҙәрен ялғатып алғандар. Ҡыпсаҡ, Үҫәргән ырыуҙары үҙҙәренә ск-михнәт

---

[1] Хәҙерге яңы йыл хисабы менән был 1552 йылға тура килә.
[2] Ярлыҡаш — ерҙе беркетеү тураһында грамота.
[3] Бигат — вәғәҙә, ант.

күрһәткән нуғайҙарҙан Бусай ханды, Аҡтүш бейҙе аҡ батша Иван Василискә тотоп биргәндәр.

Шулай башҡорт ырыуҙары үҙ ихтыярҙары менән аҡ батшаға баш һалғас ҡына, бер аҙ иркен тын алып ҡалғандар. Элек айырымланып ҡалған ырыуҙарҙы ойҡаштырырға форсат та тыуған шунан.

Бер саҡ ырыу башлыҡтары, аҡһаҡалдар йыйылып, йәнә кәңәш иткәндәр. «Азаматтар, ырыу башҡа булһа ла, бауыр бер бит. Үҙ-ара тарҡаулыҡты, даулашты бөтөрөп, бер халайыҡтай булғанда, йорт-илебеҙ ҙә имен булыр, хәүеф-хәтәр ҙә аҙ булыр ине», — тигәндәр. Ете ырыуҙың берләшеүе ана шулай булған.

Ошонон хөрмәтенә йәнә оло йыйын, бәйге ҡоргандар. Шуның ҡомартҡыһы итеп, оҫта ҡурайсылар, йырсылар әлеге «Ете ырыу» йырын сығарғандар. Уны оло йыйындың бар халайығы ла яратып, үҙ итеп отоп алған.

Ете ырыуҙың берләшеп килешкәненең бер билдәһе итеп, Йылайыр һыуы буйындағы Имәнтауҙағы бер йөҙ йәшәр имән ағасына ете ырыуҙың ете төрлө тамғаһын ҡыҙҙырып һуҡҡандар.

Һуңғы ваҡиғалар, уландарым, барыһы ла минең күҙ алдымда үткәндәре. Байтағына үҙем шаһит. Ә аҡ батшаға вәкил булып барған башлыҡтарҙың күбеһе, үҙегеҙ үк күреп-белеп тораһығыҙ, быйылғы йыйыныбыҙҙың түрендәләр, бына тигән ил азаматтары.

Шуның менән тарих хикәйәтем дә тамам, ахры, уландарым.

Айҙар сәсән был ете ырыу хикәйәтен һөйләп бөтөп, йәш ҡунаҡтары үҙ тирмәләренә таралышҡан саҡта, Етегән йондоҙ ҡойроғо көнсығышҡа нык ауышҡайны инде.

*1970*

# ҠАРАҺАҠАЛ ХАҠЫНДА ҺҮҘ

(Тарихи бер байҡау)

Ҡараһаҡал — Башҡортостан тарихындағы атаҡлы шәхес. Ул — 1740 йылғы башҡорт восстаниеһы башлығы. Тәбиғәт биргән гәҙәттән тыш һәләте һәм дәүер тыуҙырған ҡатмарлы яҙмышы уны үҙ заманында уҡ, һуңынан бигерәк тә, төрлө легендалар һәм серлелек менән уратып алған. Ғәжәпләнерлек тә шул: Ҡараһаҡал — алыштарҙа ал бирмәҫ батыр, һүҙ ярыштарында иң оҫта сәсән, яуҙа иң яугир, уҡымышлылар араһында ҙур ғилем эйәһе, хатта «аҫыл заты» менән хан булып танылған уҙаман. Ул дан илгиҙәр төҫлө Ҡаҙағстанды, Урта Азияны, Волга буйҙарын, Кубанде, Яҡын Көнсығыш илдәрен, Ғәрәбстанды гиҙеп сыҡҡан, Мәккә-Мәҙинәлә хажда булған; ҡаҙаҡ, үзбәк, ҡалмыҡ, ғәрәп, фарсы телдәрен туған теле кеүек белгән; тейеш урында тапҡыр хафиз, кәрәк сағында үткер илсе-дипломат булған. Яҙмыш елдәре уны көтөүсенән аяныс ҡолға, ҡолдан ғәййәр батырға, батырҙан затлы ханға тиклем күтәреп-төшөрөп өйөрөлтөп йөрөткән. Халыҡ Ҡараһаҡал хаҡында йырҙар, легендалар сығарған, бәйеттәр һөйләгән; хатта уға арналған махсус эпос беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән. Тарих уның тураһында мәғлүмәттәр һаҡлаған, төрлө юрауҙар ҡалдырған.

Ҡараһаҡалдың батыр һәм хан тигән даны Башҡортостанға ғына түгел, Ҡаҙағстан, Урта Азия яҡтарына, Волга һәм Кубань буйҙарына тиклем киң таралған, уны ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ хан һәм солтандары үҙҙәренә тиң дәрәжәле зат итеп ҡараған, жунгар-ҡалмыҡ хан-тайшылары бынан ҡаты шөбһәгә төшкән, ул рус батшаһының да теңкәһенә тейгән.

Һәр хәлдә, Ҡараһаҡал батырҙың шаҡтай серле һәм ғибрәтле шәхесен, ҡатлаулы ғүмер һәм яу юлдарын күпмелер белмәй тороп, XVIII быуаттағы Башҡортостан тарихын, уның героик һәм трагик биттәрен, көрәш майҙанына сыҡҡан яугирҙарын, ниһайәт, милли ғорурлығыбыҙ Салауат Юлаевты тыуҙырыуға килтергән социаль-тарихи

шарттарҙы, героик традицияларҙы аҙағынаса төшөнөүе ҡыйын.

1740 йылдың 10-сы авгусы. Ур буйындағы ҡаланан ун ике саҡрым самаһындағы ғәйәт киң, тигеҙ һәм таҡыр бер ялан ергә биш мендән ашыу халыҡ йыйылған. Күбеһе һыбай йәки атлы-арбалы был халыҡ, боронғо яу лагерҙарындағы һымаҡ, бала-сағалары, бар кәрәк-яраҡтары менән ғаилә-ғаилә йәки ауыл-ауыл булып, туп-туп рәүешле тығыҙланып урынлашҡан. Уны, ҙур ҡулса итеп, ҡоралы һалдаттар ҡамап алған.

Ниндәй сәйер йыйын һуң был? Былар — батшалыҡҡа ҡаршы баш күтәреүҙә ғәйепләнгән һәм ҡыйратылғас, баш һалырға, ғәйеплеләрен язаларға, бәғзеләрен ярлыҡарға һөрөп килтерелгән боласы башҡорттар.

Бына бер мәл ошо халыҡ ташҡынын ярып, бер төркөм һанат-һалдаттары, ярандары менән погонында уҡалары ялтлап торған генерал уртаға үтә. Уны күргән халыҡтың күбеһе, ҡапыл ҡойолоп төшкәндәй, илап-ялбарып ергә сүгә, бөтә лагерь буйлап һыҡтау, аһ-зар ауаздары иңрәп китә. Ҡемде ярлыҡар, кемде язалатыр был әҙәм башҡорттарҙың иң оло түрәһе — Ырымбур губернаһының губернаторы генерал-лейтенант князь Василий Алексеевич Урусов икән. Әүәлдән үк ҡанһыҙлығы менән яманаты сыҡҡан был оло түрә уртала махсус әҙерләнгән бейек кенә бағма-трибунаға менеп баҫҡас та, тирә-яҡты һөҙөп бер байҡап ала ла киҫә ҡулын күтәрә: иңрәп-геүләп торған майҙан ҡапыл шымып ҡала. Ҡнязь бөтәһенә аяҡ үрә баҫырға һәм ул һөйләр һүҙҙе тын да алмай тыңларға бойора. Ҡағыҙын алып, бойороҡ уҡығандағы шикелле ҡалын һәм ҡаты тауыш менән уҡырға керешә ул. Бер тына уҡыған һайын, уның телмәрен йәнәшәһендәге тылмас ярым татарса-ярым башҡортсалап тәржемә итә бара.

«Башкиҫәр боласы башҡорттар, үҙ һәм ил тыныслығын боҙоусылар! — тип башлай һүҙен князь губернатор. — Һеҙҙең был боласы-бур[1] йыйынығыҙ менән иң ауыр үлемесле ғәйептәрегеҙгә ҡарамаҫтан, император ғали йәнәптәренән миһырбанлы ярлыҡау үтенеүегеҙ мине иҫ киткес ғәжәпләндерә. Был меҫкенлегегеҙ, хәйерселегегеҙ падишаһыбыҙға буйһонған бер халыҡта булмағанса бур-боласылығығыҙҙан килә. Хәйер, һеҙ бер кемгә ялыу итә алмайһығыҙ; һәр кем үҙен үҙе дошман һәм йорт-ил талаусы иткән...»

---

[1] Ҡнязь Урусов телмәрендә «вор» тип ҡулланылған һүҙ «боласы» мәғәнәһендә әйтелә.

Губернатор Урусов үҙ телмәрендә князь-аҡһөйәктәр ҡылығына хас булмаған тупаҫ һүҙҙәр менән башҡорттарҙы яманлап һүгә-һүгә лә Күсем, Алдар, Исмәғил болалары ваҡытында уҡ һеҙҙе бөтә йорт-ер, ырыу-тоҡомоғоҙ менән бөтөнләй ҡоротторға, ер йөҙөнән бер кемдең хәтерендә лә ҡалмаҫтай итеп һепереп түгергә, ҡырып бөтөрөргә кәрәк булған, тигән һөҙөмтәне әйтә. Телмәренең аҙағында үҙен хан итеп танытҡан алдаҡсы Ҡараһаҡалдан батшалыҡтың айырыуса ек күреүен, башҡорттарҙың уға эйәреп ил талап йөрөүен һөйләп, боласыларҙың башлыҡтарын, баш күтәреүҙә ҡатнашыусыларҙы тотоп бирмәйенсә, бер кемгә көн һәм ярлыҡау булмаҫын киҫәтеү менән һүҙен бөтөрә.

Урусовтың тарихсы П. И. Рычков тарафынан яҙып ҡалдырылған был янаулы телмәре, күпме яман булыуына ҡарамаҫтан, һөҙөмтә бирмәй: өс-дүрт көн үтеп китһә лә, бер башҡорт та үҙ ғәйебен танырға йә яу башлыҡтарын тотоп бирергә уйламай. Урусов элекке яман тәжрибәләре буйынса шуныһын да яҡшы белә: кемдәрҙелер былай тотоп язалау бушҡа ғына буласаҡ — ысын башҡорт барыбер бер-берен һатмаҫ. Аптыраған князь хәрби совет йыйып, шундай мәкерле ҡарар сығара: старшиналар үҙ ҡарамағындағылар араһындағы ғәйеплеләрҙе йәшерһәләр, бола башлыҡтарын тотоп бирмәһәләр, үҙҙәре аҫыласаҡ. Хәйләле мәкер үҙенекен эшләй: һатлыҡ йән мишәр старшиналары, улар артынса бәғзе бер мөртәт башҡорт старшиналары восстание башлыҡтарының кемлеген, яуҙа ҡатнашыусыларҙы оло түрәгә башыралар. Үҙ йәнен генә аяулылыҡ, ҡурҡаҡлыҡ һәм мөртәтлектең аҙағы, мәғлүм, — хаинлыҡ. Ул старшиналарҙың хаинлығы халыҡҡа ҡиммәткә төшә.

Тотолған яу башлыҡтарына һәм баш күтәреүселәргә ҡанһыҙ Урусов йәнә ҡанһыҙыраҡ яза ҡора. Меңәрләгән халыҡ һәм батша ғәскәре алдында ул Ҡараһаҡалдың иң яҡын яу-ярандары башҡорт Йыһанғол Иҫәкәевте, Янып Исмәғиловты, Ҡарабаш Уғлыйәновты, Яҡуп Ҡасимовты, татар Ҡантырҙы, сыуаш Максимовты ташҡа беркетелгән, һөңгөнән йыуан һәм үткер тимер ҡаҙау осона ултыртып үлтертә. Ун бер кешене, шул иҫәптән, Ҡараһаҡалдың ете есаулын ҡабырғаларынан терәләй тимер ырғаҡтарға аҫтыра. Ун һигеҙ кешене былай аҫтырта, егерме бер кешенең баштарын саптырып өҙҙөртә. Хатта үлгән Әйетҡолдоң — мәйет көйө — башы киҫтерелә (ул, тотолғас, ун көн буйы Ырымбурға килтергәндә үҙен ас тотоп, юлда аслыҡтан үлгән була).

Был яза-«экзекуцияһын» башҡартҡас, Урусов Һамар буйына бынан да яманыраҡ, унар мәртәбә ҡанһыҙыраҡ тағы ике иҫ китмәле яза ойоштормаға китә...

Баш күтәреүселәрҙе шулай унарлабын осло тимер ҡа-
ҙыҡҡа ултыртып, ырғаҡҡа ҡабырғаларынан аҫып, йөҙәр-
ләгәненең баштарын киҫтереп йә аҫып, меңәрләбен танау
һәм ҡолаҡтарын ҡырҡып язалау — башҡорт тарихының иң
фажиғәле ҡара биттәренең береһе. Быларҙы аҙаҡ
А. С. Пушкин менән Д. Н. Мамин-Сибиряк, рус түрәләре-
нең иң ҡот осмалы йыртҡыслығы, тип әсенеп ҡәһәрләгән.

Нишләйһең, тарихтың яҡты һәм данлы биттәре менән
бергә, уның ҡара һәм фажиғәле, хатта ғәжәп сәйер яҡта-
ры ла бар. Кинофильмдарҙы монтажлағандағы һымаҡ, ка-
раңғы һәм боҙоҡ кадрҙарҙы киҫеп ташлап ҡына ҡотолоп
булмай бында. Тарих яҡшыртыуға ла, хөртәйтеүгә лә мох-
таж түгел. Уның һәр ягын үҙенең эске үҫеш ҡанундары
ерлегендә дөрөҫ аңлай һәм аңлата алырға ғына мөмкин.

Әммә төрлө сығанаҡтарҙан алынған факт һәм мәғлү-
мәттәргә, уларға бирелгән төрлөсә аңлатмаларға ҡарап ҡы-
на, тарихтың теге йәки был ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы
ваҡиғаларын йәһәт кенә төшөнөүе лә ҡыйын. Етмәһә, та-
рих төпкөлөнә йыраҡғыраҡ киткән һайын, мәғлүмәттәр, ғә-
ҙәттә, һаранайа барып, быуаттар аша һындағы ваҡиғалар
бик бөләңгерт сағылыусан. Шул яғы менән тарихсының
эше миңә диңгеҙ төпкөлдәренең серле һәм мауыҡтырғыс
донъяһына сумған водолазды хәтерләтеп ҡуя.

Йөрьәт итеп, минең дә шул халыҡ тарихы диңгеҙенең
бер төшөнә сумып ҡарарға самам бар. Тик тарихсы булып
түгел, тарих менән ҡыҙығып бер һәүәҫкәр сифатында ғына
бары.

Мине, әҙәбиәтсене, әле ҡыҙыҡһындырғаны — тарихтың
бер сәйер яғы — башҡорт хандарына бәйләнешле һүҙем.
Уның да әлеге Ҡараһаҡал хаҡындағыһы. Бының бер сә-
йерлеге шунда: мин ҡуҙғатаһы һүҙ башҡорттар өҫтөнән
заманында хакимлыҡ иткән Тура хан йәки килмешәк Ба-
тый, йә Үзбәк, йә булмаһа Ҡазан, Себер, Нуғай хандары
тураһында түгел, бәлки башҡорттоң «үҙ» хандары ха-
ҡында.

Бүтән халыҡтарҙағы шикелле үк, башҡорт халҡының
баҫҡынсы һәм иҙеүсе хандарға ҡарата нәфрәте һәм үсе,
уларға ҡаршы өҙлөкһөҙ көрәше тарихҡа яҡшы билдәле.
Хандарға мөнәсәбәттә «Бейек тауҙың үлгәне...» тигән ҡоба-
йырҙың түбәндәге юлдары ла айырым-асыҡ һөйләп тора:

Ойошоп ятҡан ҙур йортто
Өркәкән ҡуйҙай итер хан;
Арыҫландай ирҙәрҙе
Йыуаш ҡуйҙай итер хан.
Илеңде алыр ҡулыңдан,
Ғәскәр алыр улыңдан;

Тартып алыр малыңды,
Иҫәпкә алыр барыңды;
Боғаҙламай эсер ҡаныңды,
Үлтермәй алыр йәнеңде, ау,
Үлтермәй алыр йәнеңде.

Ойошоп ятҡан ҙур ил-йортон татар-монгол баҫҡынсылары таркатып, Алтын Урҙа, аҙаҡ Ҡазан, Себер хандары ҡул аҫтында быуаттар буйы иҙелеп, ек күреп йәшәгән халыкта әкренләп үҙ ил ҡорон тергеҙеү, бойондороҡһоҙлоҡ алыу теләгеп көсәйткән. Башҡорттар үҙ ихтыярҙары менән аҡ батшага баш һалып, Рус дәүләтенә ҡушылгас, төрлө сит хандарҙың иҙеү-яфаһынан, баҫҡынсыларынан ҡотолһалар ҙа, бойондороҡһоҙлоҡтан, иҙелеүҙән азат булмаған, әлбиттә. Батша самодержавиеһының колонизаторлыҡ политикаһы, — башҡорт ерҙәрен талауы, тартып алыуы, халыҡты рәхимһеҙ иҙеүе — бер-бер артлы ҡабынып торған восстаниеларга ғына килтереп ҡалмаған, халыҡта был йәбер-золомдан йәнә нисек ҡотолоу юлдарын эҙләргә мәжбүр иткән. Шул юл-әмәлдәрҙең береһе булып, ҡайһы бер ырыу-йорт етәкселәренең башҡорттарҙың үҙ дәүләтен төҙөү, власть башына үҙ хандарын ҡуйыу теләген тыуҙырған, ахрыһы. Был теләк XVII быуат аҙағындағы һәм XVIII быуат башындағы эре восстаниелар ваҡытында бер ни тиклем төҫмөрләнә төшөп, көрәш майҙанына бер-бер артлы бер нисә ысын һәм ялған башҡорт ханын сығарып ҡарарға ла өлгөргән.

Тарихсылар башҡорттоң унлап үҙ ханы булған имеш, тиҙәр. Булһа ла булыр, әҙ генә яйы сығыу менән, ҡайһы бер башҡорт тархандары һәм старшиналары кемде лә булһа хан итеп иглан ҡылырға әҙер торғандар. Уларҙың күбеһе нисек тиҙ арала пәйҙа булһа, шунса тиҙлек менән һис бер эҙ ҡалдырмай ғәйеп тә була килгән.

Шулай ҙа, ил-йорт ханһыҙ булмаҫ тиһәләр ҙә, ундай бей-байҙар хан табыу һәм иғлан итеүҙең шартын, тәртипҡанундарын үҙҙәренсә тоторға тырышҡандар. Уның тәү шарты: хан фәҡәт хан нәҫеленән булырға тейеш. Ана бит заманында ярты донъяны тетрәткән һәм үҙ ҡулында тотҡан атаҡлы Тимер ысын Йыһангир, бөйөк полководец, әммә хан түгел. Уға баш Сыңғыҙ затынан үҙе тәғәйенләгән хан бар. Тимер үҙе ошо хандың әмире һәм кейәүе генә.

Шуға күрә, мәҫәлән, 1704—1711 йылдарҙағы восстаниеның етәксеһе, халыҡ алдында ҙур абруйлы һәм уҡымышлы Алдар старшинаның, — үҙе генә лә хан булырлыҡ бер уҙаман аҡһаҡалдың, — ситтән хан нәҫеленән булыр аҫыл зат эҙләүе һис ғәжәп түгел.

Изге урын буш булмаҫ. Алдар — Күсем етәкселегендәге восстаниеә бөтә Башҡортостанды ҡаплап алғас, «хан табырға» теләүселәрҙең тырышлығы менән ил-халыҡҡа баш булған ханы ла табыла.

Шуның береһе — Солтан-Ибраһим йәки Солтан-хужа атлы. Ул, ҡайҙандыр, Кубандән юллап килтерелгән хан заты имеш. Хан бар ерҙә, әлбиттә, ҡан бар. 1707—1708 йылдарҙа Алдар — Күсем батырҙар менән яуҙа йөрөгән Солтан-хужаны Өфө янындағы Чесноковка лагерында ла, Ҡазанға походта ла күрергә мөмкин булған. Ниндәй генә яуҙа ҡатнашмаһын, заты кем генә булмаһын, Солтан-Ибраһим йорт-илгә хан булыуға ҡарағанда, яу башлыҡтарына һәм яуҙағыларға асылда исем-символ хеҙмәтен генә үтәгән.

Был хан әллә яуҙа үлгәс, әллә нисектер гәйеп булғас, баш урынына баш тигәндәй, тағы яңыһы табылған. Быныһы — Солтан-Морат атлы. Ул Көсөк тигән ҡарағалпаҡ-ҡаҙаҡ ханының улы имеш. Атаһы ҡалмыҡ яуында үтеп, хан булып ағаһы ултырғас, ул, башҡорттарҙың үтенесе буйынса, уларға хан булырға ризалыҡ биргән, ти. Быныһы ла мәленә күрә әмәле, хәленә күрә ханылыр инде.

Ләкин башҡорт восстаниелары башында булаһы урында баштан уҡ үҙ ягын ҡайыра был хан. Яйыҡ буйына килеп, башҡорттарҙан ике мең кешелек ғәскәр туплай ҙа Яйыҡ казагы Толомбәт менән ҡалмыҡтарга ҡаршы яуға сыҡмаҡсы ул. Ләкин казактар уға ҡушылмағас, походын туҡтатып, Ҡырым ханынан таяныс һәм ярҙам һорарға барырга йыйына был. Бында ла башҡорттар ике ярыға айырыла: бер ярыһы хан фекерен хуплай, уға эйәреп, Ҡырымга барыу ягында, икенсе ярыһы — Башҡортостанда яу ҡыҙған мәлдә йорт-ерҙе ташлап китмәү фекерендә. Шулай ҙа хан ике меңле ғәскәренән илле кешелек нөгәр һайлап алып, башҡорттар исеменән үтенес хаты яҙҙырып, Ҡырымга юл тота.

Бер уңмаған юл һис уңмаҫ ти. Морат хан Волга буйына килеп етеп, Царицын менән Ҡара яр араһында һыбайлы һигеҙ башҡорто менән йылғаны башлап сығырға өлгөрөүгә була, теге ярҙа ҡалған һыбайлыларын ҡалмыҡтар ҡамап та ала, ҡырып та ташлай. Ул иҫән ҡалған юлдаштары менән Әстрхан ҡарай саба, нисәмә көндәр алһыҙ-ялһыҙ юлдан һуң Кубангә килеп етә. Нуғай мырҙалары һәм Кубань татар байҙары Морат солтанды ике-өс көн ҡунаҡ итеп, үҙ исемдәренән дә Ҡырым ханына хат яҙып, башҡорттарҙы яҡлашырга барырға ҡәһәт биреп, Ҡырымга оҙаталар. Йәнә бер аҙнанан ул Баҡсаһарайға етеп, ханды күреп, хаттарҙы тапшырыу бәхетенә ирешһә лә, маҡсатына етә алмай әле.

Ҡырым ханы бындай ғәләми мәсьәләттәрҙе Төрөк солтанынан башҡа үҙе генә хәл ҡыла алмай икән. Шулай итеп, илселек сәфәре тағы арыраҡ, Стамбулға тартыла. Мең бәлә менән Төркиәгә лә килеп юлыға Морат солтан, Мәхмүт вәзир менән осраша. Ләкин Төркиә һәм Ҡырым Россия менән солохта булыу сәбәпле, башҡорттарға вассаллыҡты һәм ярҙамды бирә алмауҙары яуабын ала ул. Ныҡыш Морат бер илсе башҡортон, төрлө әмәлдәрен табып, солтандың үҙе менән күрештерергә лә ирешә ирешеүен. Ләкин был да илселәрҙе кире ҡайтыр юлдары сығымдарын ҡапларлыҡ аҡсанан башҡа бер ни файҙа бирмәй.

Шулай итеп, Морат хан моратына ирешә алмай, юлда тағы мең бәлә менән Кубангә килеп йығыла. Бында өс айға яҡын ҡунаҡ булып ятҡандан һуң, мырҙаларҙы өгөтләп һәм ҡотортоп арыу ғына нөгәр туплай ҙа Волга ҡарай юл тота: башҡорт яуҙары баҫылмаған булһа, Башҡортостанға бармаҡсы йә иһә Ҡарағалпаҡстанға һыҙмаҡсы. Ҡайтыр юлы лә уңмай уның. Волгаға еткәс, рус ғәскәрҙәренә юлығыуынан шөрләп, ул нөгәре менән кире Кубангә килә, шунда ҡышламаҡ була. Ләкин дыуамал Морат хан тыныс ҡына ятмай, бер заман Терек ҡәлғәһенә һөжүм итеп, уны яртылаш алып һәм ҡалған өлөшөн ҡамап тотҡан сағында, ҡапыл үҙе ҡамалып, әсир төшә. Аҙаҡ хандың яҙмышҡынаһы уны рустарҙың Ҡазанға илтеп, аҫып үлтереүе менән ослана.

Бер һүҙ менән әйткәндә, Солтан-Мораттың исеме Башҡортостан тарихына күпмелер бәйле кеүек күренһә лә, уның есеме һәм күләгәһе ситтә ҡала. Күләгәһе тигәс, шуныһы ла хикмәтле: Солтан-Мораттан тәүләп яуап алған Әстрхан воеводаһы Петр I батшаға ебәргән донесениеһында үҙен хан тигән кешенең Өфө өйәҙе башҡорто икәнен яҙа. Нуғай юлы Өфө өйәҙенән Абдрахман тигән берәү бер аҙҙан Ҡарағалпаҡстанда үҙен Морат хан итеп танытмаһынмы. Имеш, ул Ҡазанда аҫылыр мәлендә хоҙайҙың ҡөҙрәте менән ҡотолоп ҡала һәм имен-аман тыуған иленә ҡайта. Тимәк, күләгәнең күләгәһе, йәнә бер ялған Морат хан пәйҙа була ҡайҙалыр.

Морат хан менән мораттарына ирешә алмауҙары ғына башҡорт түрәләрен был эштән һис дүндермәй әле. Улар әлеге Кубандең үҙенән йәнә бер хан йораты табып алалар. Ләкин уның кемлеге һәм эше тарихҡа сала-сарпы ғына билгеле.

Тынғыһыҙ Алдар батыр ҡаҙаҡ ханы һәм ҡарагалпаҡтарҙың Тәүкә ханы менән башҡорттарға хан тәғәйенләтеү хаҡында тағы һөйләшә. Эшкәртеү буйынса, оҙаҡламай, йәғни 1709 йылдың яҙында, ҡарағалпаҡтарҙан Алдар ба-

тырға Хажи хан килеп төшә. Тик зарураттан тәғәйен хандың хәсиәте лә шунса. Батырҙарҙың батыры, аҡыллы аҡһаҡалдарҙың уҙаманы Алдар Иҫәнгилдин үҙе юлбашсылыҡ иткән 1704—1711 йылғы башҡорт восстаниеларын еңеүгә килтерә алмаған хәлдә, быны килмешәк хандарҙан өмөт итеү, дәүләтселек дәғүәләү бары буш хыял ғына, әлбиттә. 1711 йылда Хажи хан да, уның батыры Алдар ҙа тар-мар ителә.

Үҙе еңелеп, ханы ҡасһа ла, был юлы Алдар һыуҙан ҡоро сыға. Нисектер, рус түрәләре менән килешеп, болалағы оло гонаһтары өсөн ярлыҡау табып, батшанан тиҙҙән ул тарханлыҡ грамотаһы ала. Әле ҡасан ғына Башҡортостанға хан юллап, яу менән рус дәүләтен тетрәткән батыр хәҙер шул рус дәүләтен тағы ҡеүәтләндерер өсөн, шул илдең бер илсеһе, оло тархан булып ҡаҙаҡ ханы Абулхайыр йәйләү резиденцияһында аяҡ бөкләп түрҙә ултыра. Һәр хәлдә, ҡаҙаҡтарҙың Кесе йөҙ ханы Абулхайырҙы өгөтләп-димләп Россияға ҡушыуҙа илсе Алдар Иҫәнгилдиндең роле шаҡтай ҙур. Ләкин һәр батшаның хөкөмө үҙ ҡулында: гонаһлы бәндәләрен теләһә ярлыҡар, теләһә язалар. Ана Алдарҙы ла батша башта ярлыҡап, оло абруйлылығын, оҫта илселеген таҫыллы файҙаланғас, уны аҙаҡ алдап ҡулға төшөртөп, Минзәләлә язалап үлтертеүгә лә күп алмай.

Берсә дөрләп, берсә һүреләнкерәп һигеҙ-туғыҙ йылға һуҙылған Алдар — Күсем яуҙарынан һуң Башҡортостан йорт-иле бер аҙ тынып, һил алып ҡалғандай була. Ләкин былары ла тағы гәрәсәтерәк дауыл алды йылдары ғына булғандыр, моғайын. 1735—1740 йылдарҙа Башҡортостанда йәнә яу-восстаниелар ҡуба. Улар утлы дауыл-өйөрмә төҫлө башҡорт илен йә киң, йә тарыраҡ иңләп бер нисә тапҡыр айҡап үтә. Шуның өсөһө — 1735—1736, 1737—39, 1740 йылдарҙағыһы — иң ҙур яу өйөрмәләре; шунан ҡупҡан өс вал, иң ҡеүәтле тулҡындар. Халыҡтың үс-асыу ташҡынынан тыуған өс ҙур тулҡындың ажарлы ялында башҡорттоң яңы яу батырҙары, башлыҡтары ҡалҡа. Тәүге яу тулҡыны ялында — Килмәк менән Аҡай старшиналар, икенсеһендә — Бәпәнәй абыҙ менән Күҫәп батыр, өсөнсөһөндә Ҡараһаҡал хан күтәрелә.

XVIII быуаттың утыҙынсы йылдарындағы был восстаниеларҙың төп сәбәбе Башҡортостанды колонизациялауҙың, милли-колониаль иҙеүҙең артабан көсәйеүендә. Был осорҙа батша хөкүмәте Көньяҡ Уралда күп заводтар, таш ҡала, ҡәлғәләр һалдыра башлай, бының өсөн бик күп башҡорт ерҙәрен тартып ала, ул урындарға рустарҙы күсереп ултырта, яһаҡ, штрафтарҙы арттыра.

Быларға ҡаршы башҡорттарҙың баш күтәреүе — тәүге

утлы дауыл ҡуҙғалышы Ырымбур экспедицияһы менән бәйләнешле. Уның башы шунан ғибарәт: Иван Кириллов тигән бер обер-секретарь, Уралды һәм Урта Азияны ныҡлап ҡулға төшөрөү, сауҙаны көсәйтеү хаҡында проект төҙөп, сенаттан раҫлата ла, шуны ғәмәлгә ашыра башлау буйынса, Ур йылғаһы буйында Ырымбург тигән таш ҡала һалдырыу эше экспедицияһын үҙ өҫтөнә ала. Был иһә асылда Башҡортостанды крепостар менән уратып алыуҙың төп нигеҙ ташы тигән һүҙ.

Хөкүмәттең был ҡарары экспедициянан күп элгәре үк Башҡортостанға ла беленә. Ҡотломөхәммәт Тевкилевте илсе итеп ҡаҙаҡтарға оҙата барыр башҡорт старшинаһы Туҡсора Элмәков Петербургта сағында был йәшерен ҡарар хаҡында нисектер ишетеп ҡалып, бер хатында был хәбәрҙе кинәйәләп еткереүгә ирешә. «Бөтә Башҡортостанда тос бойҙайҙы кәбәк-ҡарағуранан айырып, яҡшылап һаҡлағыҙ, һаламын яндырығыҙ, — ти ул хатында. — Дүртәр атты сәсеүгә әҙерләгеҙ». Был кинәйәнән башҡорттар «үҙ арағыҙҙан иң ышаныслыларҙы ғына һайлап, төрлө һатлыҡ йән һәм ят бауырҙарҙы айырығыҙ, дүрт юл башҡорттарын яуға әҙерләгеҙ», тигән мәғәнәне яҡшы аңлайҙар. Шулай, яуға әҙерләнмәккә сигнал була был.

Иван Кириллов Ырымбур экспедицияһы менән Өфөгә килеп ҡышлағас, 1735 йылдың яҙында көньяҡҡа Ур йылғаһына ҡарай юлға сыға. Башҡортостанда ҡәлғәләр һалдырырға теләмәҫ, яуға әҙер башҡорттар Кириллов экспедицияһына һөжүм итәләр, уның ҙур бер драгун полкын ҡыйратып ташлайҙар, Урал буйлап килеүсе аҙыҡ-түлек отрядтарын ҡамап алалар. Юл күрһәтеп барыусы бер башҡорттоң Ырымбур экспедицияһын Урал тауҙары аша юрамал иң ауыр, урау юлдар менән уратып алып барыуына, күп пушкаларын юғалтыуға, рус отрядтарына бик йыш бәрелештәр менән үтеүгә ҡарамаҫтан, Кириллов көс-хәл менән Ур йылғаһы буйына барыбер килеп етеп, 15 августа Ырымбур ҡалаһына нигеҙ һалдыра башлауға өлгәшә.

Боласы башҡорттарға үс иткәндәй, Кириллов ҡалаға нигеҙ һалыуҙы хәтәр тантаналы ойоштора. Йәнәһе, дуҫ күрһен, ул арҙаҡлы ҡаҙаҡтарҙы Абулхайыр хан менән тантанаға саҡыра; бында батша яҡлы башҡорт түрәләре лә була. Ҡунаҡтарҙы рус түрәһе аҙналар буйы һый-хөрмәт итә, айырыуса Абулхайыр хандың күңелен күреп, ныҡлап үҙ яғына ауҙарырға уйы. Тантана хөрмәтенә пушкаларҙан атыу тауышы, күккә әллә ни ғәләмәт утлы нәмәләр — ракеталар сөйөү генә ҡунаҡтарҙы шөрләтеп ҡуя ҡуйыуын, ләкин шарап-ҡымыҙ шауҡымы ул шаң-шаңҡыуҙарҙы ла тиҙ баҫып китә. Тик Кирилловтың үҙен тантана тыштан һө-

йөндөрһә лә, уның һаҡсы отрядтарына йыш ҡына һөжүм ҡылыусы Ҡараһаҡал өгәрҙәре, ҡышын экспедицияның аҙыҡ-түлекһеҙ ҡалыры үтә көйөндөрә, ҡурҡыта.

Рус түрәһенең ҙур ғына өмөтө Абулхайыр ханда. Ул ҡаҙаҡтарҙы башҡорт яуҙарын ҡыйратыр өсөн файҙаланмаҡсы. Әммә аҡыллы һәм хәйләкәр Абулхайырҙың үҙ әмәле лә әҙер. Рус түрә дуҫтарының һүҙен йыҡмай 1737 йылдың көҙөндә башҡорт яуҙарын баҫтырырға тип Башҡортостанға үтеп ингән Абулхайыр хан, киреһенсә, башҡорттар менән дуҫлашып, хатта ҡоҙа-ҡоҙағыйлашып, ҡыш буйы уларҙа ҡунаҡ булып, башҡорт ҡыҙына өйләнеп, кейәү булып йөрөмәһенме. Кириллов түрәгә ҡарағанда Абулхайыр хан, ханға ҡарағанда башҡорт старшинаһы Бәпәнәй хәйләкәрерәк булып сыға.

Тернәкле әҙәм түрәне лә ҡол итер, ти халыҡ. Бәпәнәй старшина — заманы өсөн уҡымышлы әҙәм. Абулхайыр хан — тома наҙан. Башҡортостанда ҡунаҡ булып ятҡан ханға рус түрәләренән килгән бөтә хат-яҙыуҙар Бәпәнәй ҡулынан үтә. Яуапты ла хан исеменән ул яҙа. Шулай итеп, восстаниеларҙы баҫтырырға, башҡорттарҙан штраф аттары түләтергә тип килгән хан аяҡ терәп башҡорттарҙы яҡлаша башламаһынмы. Абулхайырҙы ололау, уны Башҡортостанға ла баш хан төҫлөрәк йомаҡайлау маҡтансыҡ ханды йәнә маһайтып ебәрә. Етмәһә, Абулхайыр улдарының береһе Хужәхмәтте Башҡортостанға хан итеп тәғәйенләүгә лә күндерелә. Әммә ҡаҙаҡ мәҡәле әйтмешләй, туҡалдан тыуған ярым ярты ғына хан инде ул. Ошо замандарҙараҡ ҡаҙаҡ араһынан саҡырылған Һаҙый солтан һәм Бараҡ солтан улы Шиһап та шулай уҡ туҡалдың туҡалдары.

Ҡайһы ырыу көслө — ханды шул ҡуйыр, ҡайһы ырыу үсле — ҡанды шул ҡойор, ти халыҡ. Башҡорт ырыу старшиналары хандарҙы юмаҡайлай йәки тәғәйенләй торор, әммә яуҙар ҙа һаман ҡыҙа барыр. Ул яуҙар менән бергә Йосоп, Төлкөсура, Мәндәр, Сәйет кеүек яңы батырҙар ҡалҡып сығыр. Тик башҡорт яу-сапҡындары тулҡын-тулҡын булып ябырылһа, уға ҡаршы көс — рус карателдәре, ғәскәрҙәре лә — кире тулҡын төҫлө ғәрәсәтле була. Ер тетрәүҙән даръяла барлыҡҡа килгән хәтәр ҡаҡлыма тулҡындар һымаҡ, кире тулҡын юлындағы бар нәмәне лә ҡырып үтер. Кириллов һәм Тевкилевтең каратель отрядтарының башҡорт ауылдарын яндырып, халҡын бала-сағалары менән ҡырып үтеүҙәре нәҡ шундай.

1735—1739 йылдарҙағы оло яу-ҡырғындарҙан һуң, ҡанһыратылған башҡорт иле хәлһеҙләнеп тынып ҡалғандай була. Яуҙа үлеп ҡалған батырҙарын, яндырылып торомбаш-көлгә әйләндерелгән ауылдарын, бала-саға, ҡыҙ-

ҡырҡып мәйеттәрен ҡара күҙҙәрҙән һаҡлап, ап-аҡ кәфен менән ҡаплаған төҫлө ҡарлы-буранлы ҡыш килә Урал буйҙарына.

1740 йылдың февраль урталары. Тырнаҡлы волосының урман ҡуйынында Әй йылғаһына һыйынып ултырған бәләкәй генә бер аулаҡ ауылының ҙур ихатаһы ҡунаҡ саналары-кашауайҙар менән тулы. Йәрмөхәммәт тигән ҡарттың ҙур өйөнөң оло яғындағы түр һикелә аҫалы балаҫтар һәм мендәрҙәр өҫтөнә ун бишләп оло һәм урта йәштәрҙәге ир-ат халҡы теҙелеп ултырған. Алдарында аш-һыу, табаҡ-табаҡ ит тулы булыуға ҡарамаҫтан, йөҙҙәренең етдилегенән күренеүенсә, табындағылар — ҡунаҡҡа, табындары һый мәжлесенә һис оҡшамаған. Барыһының да иғтибары араларында иң өлкән һәм абруйлы аҡһаҡалдарының береһе Әйле волосы старшинаһы Алан Ейәнғолдоң һалмаҡ ҡына һөйләүенә йүнәлтелгән.

— Миңдеяр Аркаев старшина Уразлин тылмас аша Соймонов генералдың указын килтергән, — ти етмеш йәштәр самаһындағы был ҡарт. — Уҡып ишетеүегеҙсә, ул указ төрлө волостарҙың арҙаҡлы башҡорттарын, исемләп әйткәндә, Дыуан волосынан Миңдеяр менән улы Мәүлет Ҡарабаевтарҙы, шул уҡ волостан Һөйәрғол старшинаны, Һарт волосынан Уразымбәт Сираев старшинаны, Сөләймәнде, Мурзалар волосынан Ырыҫлы Ҡортҡасов менән Аблайҙы, мине, йәмғеһе 28 кешене янаралға тотоп ебәрергә бойора.

Ошо хәбәрҙән тыуған ауыр тынлыҡты боҙоп, Миңдеяр Ҡарабаев старшина һүҙгә ҡушыла;

— Әлеге указда исемләнгән бөтә башҡорттар, старшиналар 1738 йылдағы болала ҡатнашҡан өсөн, баш һалып, штраф аты түләп, ярлыҡау алғайнылар ҙа баһа. Хәҙер бинахаҡҡа ҡулға алмаҡсылар. Һәр беребеҙ күреп-белеп тора: Соймонов янарал ҡулына эләккән башҡорт, баш һалыуына ҡарамаҫтан, бығаса ярлыҡау тапҡаны юҡ әле, йә ул язаға тарттырыла, йә һөргөн ебәрелә. Мин унан имен әйләнеп ҡайтҡан кешене белмәйем.

Был һүҙҙе Сәйетбай батыр Алкалин элеп ала:

— Миңдеяр старшина хаҡты һөйләй. Бәпәнәй старшина, Төлкөсура батыр, Күҫәп батыр шул Саймон янарал ҡулдарынан аҫтырылды бит. Беҙҙе лә, йәмәғәт, шул бер дар ағасы көтә. Үҙ иркең менән баш һалып, дар аҫтында үлгәнсе, терс көйө, ҡулыңда ҡорал тотоп, яуҙа үлгәнең мең артыҡ.

— Шулайын ул шулай, — тип дауам итә һүҙен Ейәнғол. — Беҙ ошо указда исемләнгән һәммәбеҙ ҙә яуҙа үлергә әҙерҙер. Тик был бер нисә тиҫтә батыр, хатта бер нисә йөҙ

нөгәр батша яуы — меңәрләгән ғәскәр ҡаршыһында дицгеҙ янында кескәй күл кеүек кенә. Күмәкләшкән яу ҡайтарған тиҙәрме? Яу асыр өсөн ғәскәр кәрәк, халыҡты күтәрер кәрәк. Үҙегеҙ беләһегеҙ: башҡорттар оҙаҡ яуҙан, ҡырылыштан һуң бик миктәгән. Уларҙы хәҙер яңынан яуға күтәреү бик ауыр. Етмәһә, халыҡты кире һүреп, батырҙарға аяҡ салырға торған һатлыҡ йәндәр ҙә күп хәҙер арала.

Был кәңәш-төңәш күпмегә һуҙылғандыр, тарих уны бөтә деталдәре менән беҙгә килтереп еткерә алмаған. Ул кәңәшмәнән сала-сарпы ғына мәғлүмәттәр ҡалған.

Әммә 1740 йылдың февраленда Тырнаҡлы волосының Мөхәммәт ауылында Йәрмөхәммәт өйөндә йыйылған күп кенә старшиналарҙың, батырҙарҙың был кәңәшләшеүе әһәмиәте яғынан тарихта үҙенсә бер бәләкәй ҡоролтайға тиң. Бында 1735—39 йылдарҙағы яу баштарында йөрөгән старшина-батырҙарҙан, әле аталғанса Әй волосы старшинаһы Алан Ейәнғол, Дыуан волосынан Миндеяр старшина улы Мәүлет менән, Ҡаратаулынан Исламғол Юлдашев старшина, Ҡыуаҡан волосынан Айытҡол старшина, Тамьяндан Сәйетбай батыр, Ейәнсура батыр һ. б. йыйылған була.

Ошо йыйында оҙаҡ кәңәшләшкәндән һуң, Алан Ейәнғол старшина, Миндеяр һәм тағы бер-ике иң яҡын ярандары менән һүҙ беркетеүенсә, иң төп фекерен-әмәлен уртаға һала:

— Йәмәғәт, йонсоған, өрккән халыҡты яуға күтәрер өсөн, ашҡындырыр өсөн бер генә әмәл бар, — ти ул. — Ул да булһа ил-йортҡа баш булыр хан табыу, хан исеменән яу күтәреү. Арабыҙҙа ғәйрәтле батырҙар, абруйлы аҡһаҡалдар, старшиналар булһа ла, һөйләгәнебеҙсә, беребеҙ ҙә хан була алмай. Ни өсөн тигәндә, ҡаранан сыҡҡан хан булмаç, булыр тәҡдирҙә лә уға һан булмаç.

Йәмәғәт, мин һеҙгә төп серемде, әмәлемде асам: ике йыл самаһы инде мин үҙемдә бер серле изге әҙәмде йәшереп аçрап ятам. Ул Кубандән ҡаҙаҡтар араһына ҡасып, аҙаҡ беҙҙең яҡҡа килеп сыҡҡан хан. Солтангәрәй атлы, жунгар ханы Сунаның кинйә улы. Ҡаҙаҡ-ҡараҡалпаҡтар араһында ул хан исеме менән генә түгел, Ҡараһаҡал исеме менән дан алған оло батыр ҙа. Һәр яҡтан арҙаҡлы, уҡымышлы әҙәм; яу күргән ир, затлы нәçел. Солтангәрәй хандың Әстрхан диңгеҙе яғында, Имбы йылға янында 80 меңлек ғәскәре ҡалған. Әгәр беҙ уны халыҡҡа башҡорт ханы итеп иғлан ҡылһаҡ, ул ғәскәрен башҡорттарға ҡушып, Рәсәйгә ҡаршы яу асмаҡсы.

Был һүҙҙәрҙе иçтәре китеп тыңлап ултырған башҡорт старшиналарының бәғзеләре әллә ханды, әллә Ейәнғолдо хуплап, «Һай, мәрҙәс» тип ҡеүәтләргә керешә. Әйле аҡ-

һаҡалының һүҙен ҡеүәтләп, раҫлап Миндеяр старшина нотоҡ тота. Ул Солтангәрәй-Ҡараһаҡал хандың бик уҡымышлы һәм диндар, тәҡүә әҙәм булыуын, хажилығын һөйләй, уны үҙе күреп белеүен, батырлыҡтарын, аҡыллылығын дәлилдәр менән үҙенсә раҫлай. Хандың үҙ артынан ярҙамға ҡаҙаҡ һәм ҡалмыҡтарҙы ла эйәртә аласағына ышандыра ул.

Ҡыҙҡыу хәлдән ҡотолоу өмәленә, күктән төшкән был бәхеткә ҡыуанышҡан ҡорҙагылар Солтангәрәй ханды тиҙерәк саҡырып килтереп, хан итеп иғлан итеүҙе йәһәтләүгә лә дәррәү килешәләр. Йәрмөхәммәт хужаның туғаны Ҡөҙрәтте ханды саҡырыр сапҡын ебәртеүгә күпме ваҡыт үткәндер, бер заман ун биш һыбайлыһы менән Ҡараһаҡал хан килеп тә төшмәһенме. Ҡөткәндәренән күпкә артыҡ тамашанан күпме яу һәм батырҙар күргән башҡорт түрәбатырҙары гәжәпһенеп ҡаушабыраҡ та ҡала. Алдарында баштан-аяҡ ҡоралланған бына тигән ун биш һыбайлы, шуның башында йылҡылдап торған ҡара атҡа атланған, өҫтөнә йылы тун, башына төлкө бүрек кейгән ҡоңғорт йөҙлө, матур ҡара һаҡаллы мөһабәт кәүҙәле Ҡараһаҡал батыр баҫып тора. Атының эйәр-өпсөндәре затына тиң бүлгәндәй көмөш менән нағышланған, батырҙың биләндәге көмөш ҡынлы кәкре ҡылысы фирүзә таштар менән биҙәлгән.

Хан батырҙы ололап, эйәренән тигәндәй күтәреп өйгә алып ингәс, ул тағы олпатыраҡ һәм ҡырыҫыраҡ булып күренә. Ҡараһаҡалдың танауында йәмшәйтеп яра эҙе ярылып ята, һул ҡолағы өҙөк, сәнсей бармағы юҡ. Былары инде уның хан затына ҡарағанда батыр булып яуҙа, йә ҡол булып дауҙа алған яра-яза эҙҙәренә оҡшай.

Әле генә ат өҫтөндә яугир бер батыр булып ултырған Ҡараһаҡал өйгә инеп өҫтөн-башын һалып, йыуынып, түрҙә мендәр өҫтөндә аяҡ бөкләп ултырғанында елән,ситек кейеп алған, башына салма ураған дин әһеленә, тотошлай хажиға әүерелә.

Ҡараһаҡал артынан эйәреп, бөтә табын, һүҙҙәрен айырым-асыҡ ишеттереп, ярым көйләп оҙаҡ ҡына доға ҡылғандан һуң, уға йәнәш ултырған Ейәнғол старшина бер аҙ ҡайҡая биреп, һүҙ башлай:

— Ғиззәтле вә хөрмәтле Солтангәрәй хан, Себер юлы менән Нуғай юлы волостарының ошонда йыйылған иң абруйлы старшиналары һәм иң арҙаҡлы батырҙары кәңәшеп һөйләшкәндән һуң, ҡоролтайыбыҙ исеменән һеҙҙе башҡорт йорт-иленә хан итеп саҡырырға ҡарар ҡылды. Рәсәй падишаһынан, кафырҙарҙан йәбер-золом күргән фәҡир мөсолмандарығыҙҙы ҡурсылап, беҙҙе, башҡорт йорт-илен үҙ ҡөҙрәтегеҙгә алһағыҙ тибеҙ. Алла-пәйғәмбәребеҙ, ҡорол-

тайыбыҙ исеменән ҡорһән үбеп, башҡорт мосолмандарығыҙға хан булырға разыйлығығыҙҙы үтенеп һорайбыҙ, Солтангәрәй хан!..

Алан Ейәнғолдоң был үтенес һүҙен хуплап, ҡорҙағы бөтә башҡорт түрәләре-батырҙары Ҡараһаҡалға бороло-бораҡ баштарын эйҙеләр һәм, доға ҡылып, быны аллапәйғәмбәр исеменән дә нығытыуҙарын аңлаттылар. Бер аҙ ғына тын ултырғас, Ҡараһаҡал тамағын ҡырыбыраҡ ярым башҡортса, ярым төркисә, нисектер, һарт акценты менән һалмаҡ һәм талғын ғына һөйләргә кереште:

— Үҙем ҡасандыр мәжүси ирдем. Хәлбүки, һәммәһе үҙ ҡөҙрәтенә: мин хәҡиҡигә төшендем вә мосолман улдым. Аллаһы тәғәлә вә Мөхәммәтғәлиәссәләм пәйғәмбәребеҙ ҡөҙрәте фәҡирегеҙҙе Мәккә вә Мәҙинәгә хаж ҡылдырҙы. Шулар уҡ миңәр фарыз жунгар ыруглары хан тәхетен залим-абзам Галдан-Серендән алып бирмәккә монафиғә[1] итер. Ҡайда хан фарыз улсам, шунда хәҡиҡәт тыугар вә Аллаһы тәғәлә, Мөхәммәтгәлиәссәләм пигәмбәр аты шан улыр. Жунгарстанда минә «дәғи» дип ләкәпләмәкләр, әммә бу абзам алдында өркмәкдәндер, мин ғәскәр берлән ҡайтайым — бүтәнсә һөйләшерләр. Мин үҙемә ыругдашларымдың туғрылына, дәхи[2] нығыраҡ атам иҫтәлеге тугрылыҡтарына инанам.

Әммә-ләкин әле мөьминдәремдең ауыр хәлен күргәс, үҙ эшләремде ваҡытлыса ҡалдырып, мосолман хөрлөгө өсөн, каферҙарға ҡаршы яуға сығырға тайярмын. Һеҙ миңә хан тәхете ҡәһет[3] итәһегеҙ, ә миңә уны истихҡаҡ[4] итмәк лазым. Минең яҡлылар — әнсарларым Жунгарстанда ғына түгел, ҡырғыҙ-ҡайсаҡ далаларында ла күп. Мин 20 меңлек ғәскәр килтерә алам. Инабатығыҙға[5] хуш.

Ҡараһаҡал һөйләүенән туҡтап, ҡуйынынан төрөүле ҡағыҙ килтереп сығара ла документы менән ҡорҙағыларҙы таныштырып сыға. Был — уның хан затынан икәнен раҫлаусы хан тайраһы. Һарғая, таушала төшкән ҡалын ҡағыҙҙағы түңәрәк шәкел эсенә яҙылған исемдәр теҙмәһен аңлатҡандай итеп, Ҡараһаҡал: «Был тон вәсикәм[6] ханлыҡ тайраһында минең атым Солтангәрәй дип теркәлгән. Ғөрбәттә[7] йөрмәктә мине Ҡараһаҡал дип атамышлар. Ханлыҡ ҡылганда рәсми Солтангәрәй аталмыш лазым», ти.

---

[1] Монафиғә — файҙа.
[2] Дәхи — тағы.
[3] Ҡәһет — вәғәҙә.
[4] Истихҡаҡ — лайыҡ булыу.
[5] Инабат — ышаныс, өмөт.
[6] Вәсикә — документ.
[7] Ғөрбәт — ситтә.

Нисек кенә булмаһын, һәр нәмәнең үҙ тәртибе-низамы бар. Шуны шартына килтереп, ҡоролтайға йыйылған башҡорт түрәләре ҡөрьән үбеп, анттар биреп, Ҡараһаҡалды хан итеп иғлан итеүҙең тантаналы церемонияһын үткәрәләр. Ханлы булып, шуның шәрәфенә бер-ике көн һыйхөрмәт, дәғүәт күрһәткәс, башҡорт старшиналары, батырҙары Солтангәрәй хандан тәүге фарманды алып, йорт-ерҙәренә таралыр булалар.

Әлбиттә, ханына күрә ҡануны, хәленә күрә фарманы. Ҡараһаҡалдың башҡорттарҙы яу сабырға саҡырып оран һалған тәүге фарманы әлегә билгеле түгел. Әммә Ҡараһаҡал-Солтангәрәй хандың туғаны Искәндәр солтан исеменән таратҡан бер хаты хан фармандарының юҫығын асыҡ тойҙорор төҫлө. Төркисәнән руссаға тәржемәлә архивтарҙа һаҡланып беҙҙең көндәргә килеп еткән был хат-фармандың тотмары шундай:

«Йыраҡ ердән яҡын күңел берлә бездин Әсфәндиәр хан углы Искәндәр солтан Дәүләтгәрәй ханы улы Солтангәрәй батырдан күндин күп сәләм. Хәсрәтләнмәңез, 150 гәскәр илә без ошбу мартта килдек, 25 000 гәскәр бездән соңра Мөхәммәтхан солтан илә апрель ахырларында яхуд майның беренче көннәрендә килер, диңгеҙдән Дирәхән 80 000. Ул чак карасынлар иде. Мин Искәндәр алдан килдем, Мөхәммәт солтан Жим тамағында Ару-Урык кашында, ягъни Уркара дигән төбәкдә ак ком өстендә гәскәре берлә калды. Миннән, Искәндәр солтаннан, башҡорт ҡәүеменә, һәммә затлы старшиналарға, батырларга күндин-күп сәләмәтлек. Безнең ҡанун хәзер үз көдрәтендә. Мосолман ҡылычы күтәрелде, моңар бер кем шикләнмәсен. Кемдә кем инанмый, ул кофердер вә кануныбызның яуыз дошманы. Дыуан волосынан Миңдеярға, Әйленән Ейәнғолга, Ҡаратауынан Исламғолға, Ҡыуаҡандин Айытҡол батырга, Мурзалардан Йәрмөхәммәт муллага, Ҡыуаҡандан Абдулла батырға вә һәммә батырларға күндин-күп сәләмәтлек...»

Был ҡағыҙга Дәүләтгәрәй батыр хан, Искәндәр солтан, Солтангәрәй хан исемдәренән ҡөрьәндең тәүге бисмиллалары менән түңәрәк мөһөр — печать баҫылған.

Хан-солтан исемдәренән таратылған бындай хат-фармандар оран урынына ялған һөрәнгә тартһа ла, халыҡ үсен-ярһыуын ҡабартыр ҡур хеҙмәтен дә үтәгән күпмелер. Башҡорт старшиналары был ҡурҙы үҙҙәре теләгәнсә өҫтәп, самаһыҙ шаштырып, хәл-әхүәлде күпме генә ҡырҡыуландырып ебәрмәһен, хан ораны барыбер үҙ эшен эшләмәй ҡалмаған: бер заман төрлө волостарҙан нөгәр-нөгәр булып хан янына башҡорттар ағыла башлаған. Ҡараһаҡалдың ун биш һыбайлыһы бер мәл алтмыш кешелек нөгәргә, унан

өс йөҙ, биш йөҙ, меңәр кешелек ғәскәргә әүерелгән. Хандан фарман алып, сапҡын-яран булып киткән Миңдеяр Ҡарабаев старшина улы Мәүлет менән Дыуан яғынан, Алан Ейәнгол старшина Әй буйҙарынан, Исламгол старшина Ҡаратаулынан, Әйетҡол батыр Ҡыуаҡан, Сәйетбай батыр Тамъян яҡтарынан яу сапҡандарға ҡор баштары булып Ҡараһаҡал ставкаһына аллы-артлы тигәндәй килеп төшкән.

Хан яран-яһауылһыҙ булмаҫ. Шул уҡ ҡор баштары Ҡараһаҡал тарафынан яран-яһауылдар итеп тәғәйенләнгән.

Хәйер, улар тәғәйенләнеп, яу сабырҙай ғәскәр ойоша башлағансы, Ҡараһаҡал хандың һәм уның ҡорҙаштарының ғәйәт киңкен һәм мөшкөл хәлдәре лә булып ала әле. Улар ҡоролтайға йыйылып, хан иғлан итеп йөрөгән араларҙа, элекке бола башлыҡтарын тоторға генералдан указ менән килгән Раман Уразлин тигән тылмас, батша яҡлы Ҡөҙәш Рахманҡулов, Шиғанай Бурсаҡов, Уразмәт Сирасов кеүек старшиналар менән берләшеп, Ҡараһаҡалды ҡулға алырға самалайҙар. Был батша яҡлы түрәләрҙең шул уҡ Әй буйындағы Вәскәй тигән ауылда ике йөҙгә яҡын ҡоралы һалдаттары ла йыйылырға өлгөрә. Ҡыйыуыраҡ эш иткәндә шундай ғәскәр менән 20—30 бөртөк кенә хан нөгәрен һәм ярандарын уратып алыу һәм әсир итеү әллә ни тормаҫ ине кеүек. Әммә шундай ҡырҡыу хәлдә лә тегеләрҙән күп айбарлы һәм таҫыллыраҡ булып сыға Ҡараһаҡал батыр. Ханды ҡулға алырға тигән әмер менән Вәскәй ауылынан илселәр килеп етеүе була, Ҡараһаҡал бөтә яран һәм нөгәрен эйәртеп үҙе тегеләр янына килеп тә төшә. Хандың ҡоралы һыбайлылары нисек кенә ғәйрәтле күренмәһен, улар ике йөҙләп ғәскәр һәм халыҡ ташҡыны эсенә килеп кергәс, даръя уртаһындағы кескәй утрауға оҡшап ҡалғандай була; даръя аҙ ғына тулҡынланһын — утрау хәҙер йотолор төҫлө.

Күпмелер ығы-зығы һәм шау-шыуҙан һуң, ауыл уртаһындағы ҙур майҙандағы халыҡ ташҡыны тынып ҡалғандай була бер мәл: бөтәһенең күҙе, бар иғтибары элек күргән йәки ҡайһылары бергә йөрөгән атлы ҡоралы башҡорт старшиналарына ҡарағанда мөһабәт кәүҙәле, ҡара һаҡаллы, ҡоңғорт йөҙлө һыбайлыға — Ҡараһаҡалға төбәлгән. Ул ирәбә батыр ҡылысы менән бер һелтәһә, бер юлы бер нисә башты ҡыйып төшөрөр һымаҡ, ә күпме яу кискән ярандары әле ҡулсалап алған ҡоралы кешеләрҙе еңел генә ярып сығып китер төҫлө.

Бындай мәлдә Ҡараһаҡалға ҡорал көсөнә ҡарағанда аҡыл көсө өҫтөнөрәк барыбер. Ул үҙ дәрәжәһен белгәндәй, был хәтәр тынлыҡты үҙе башлап боҙорға ла йыйынмай

әле: ат өҫтөндә үткер һәм уйсан ҡараш менән ғорур ултырыуын белә. Берауыҡ ғәжәпһенеү-аптыраулы тын тамашанан һуң, Ҡараһаҡал йәнәшәһендәге Ейәнғол старшина телгә килә: көр тауыш менән ул Ҡараһаҡалдың Солтангәрәй хан икәнлеген һәм уны башҡорт старшиналары, батырҙары ҡоролтайҙа башҡорт ханы итеп танып, ҡөрьән үбеп ант иткәнлектәрен белдерә, халыҡты хан байрағы аҫтында рус түрәләренә ҡаршы яуға сығырға саҡыра. Уның һүҙен Көҙәш менән Шиғанай старшина бүлергә, Ҡараһаҡалды батша ғәскәрҙәре ҡулына тотоп бирергә тип бер нисә тапҡыр яҫҡыныуҙарына ҡарамаҫтан, улар һөрәнe халыҡ шауы һәм Ейәнғолдоң ҡалын тауышы аҫтында ҡапланып ҡала.

Ейәнғол артынса һүҙҙе Ҡараһаҡал үҙе ала. Ул ат өҫтөндә ултырған көйө, атының ҡарҙы шығырлатып тыпырлап баҫып тороуы аҫтында, ҡоролтайҙа һөйләгәнсәрәк ҡыҫҡа һәм ышандырғыс нотоҡ тота, һатлыҡ йәндәргә, ят бауырҙарға аяу белмәҫкә кәрәклек менән һүҙен бөтөрә был юлы. Үҙен бик сабыр һәм олпат тотошо, аҡыллы һәм оҫта һөйләүе менән Ҡараһаҡал күптәрҙе үҙенең яғына ауҙарырға, үҙенә хөрмәт уятырға ла өлгөрә. Аҙаҡҡа табан майҙан буйынса уның һүҙҙәрен хуплаған ауаздар көсәйеп китә. Бер аҙҙан инде Ҡараһаҡал нөгәрҙәрe тирәһенә бер төркөм һыбайлыларҙың, халыҡтың тығыҙыраҡ тупланып, хуплап шау-шыу килеүен, ә тирә-яҡтың әкренләп һирәкләнеүен, бер нисә ҡор һыбайлыларҙың ауылдан сығып һыҙыуын күҙәтергә мөмкин ине. Шулай итеп, Ҡараһаҡалды тоторға тип йыйынған батша яҡлы түрәләрҙең һыбайлылары, Көҙәш Рахманҡулов, Шиғанай Бурсаков старшиналар үҙҙәре Ҡараһаҡал батырҙан саҡ-саҡ ҡасып ҡотолалар. Был — халыҡ алдындағы тәүге сығышы, беренсе еңеүе ине хандың. Ҡараһаҡал белемле, үҙе сәсән, батыр ир, тигән данының башы ла ине был.

Әммә сәсән дауҙа, батыр яуҙа һынала тигәндәй, Ҡараһаҡалдың яу-алыштары алда ине әле. Уға башта әлеге Раман Уразлин, Көҙәш Рахманҡулов, Шиғанай Бурсаков старшиналар кеүек һатлыҡ йәндәр менән бер нисә тапҡыр алышырға тура килә. Был юлы һүҙ-сәсәнлек ҡеүәһе түгел, батырлыҡ, көс-ҡеүәт алға сыға, алыш майҙанын яу яланы алыштыра.

Әгәр яуыз түрәләрҙең йәбер-золомонан тамам биҙрәгән халыҡ ярлы-ябағалар Ҡараһаҡал тирәһенә тупланһалар, батша яҡлы старшиналар ҙа, хөкүмәт исеменән көсләп-ҡурҡытып, байтаҡ көс йыялар. Ҡараһаҡалдың башта өс йөҙ кешенән торған яуының Уразлин ҡул аҫтындағы өс йөҙ кешелек башҡорт һәм мишәр, йөҙ кешелек казак

отрядтары менән тәүге бәрелеше март урталарында була. Икенсе бәрелеш ваҡытында Ҡараһаҡалдың көсө икеләтә артып китә. Шул яуҙарҙың береһендә хөкүмәт ғәскәре яғында һуғышып йөрөгән Юлдаш мулла ҙур ғына отряды менән Ҡараһаҡалға килеп ҡушыла. Халыҡты нисек тә албырғатып йөрөгән һатлыҡ старшиналарға, яуҙан нисек тә боҫоп, айбанып ҡалырға теләүсе мөртәттәргә ҡаршы Ҡараһаҡал барымта рәүешлерәк көҫөк-көҫөк сапҡындар ҙа ойоштороғолай.

Ҡараһаҡалдың даны үҙенән алда йөрөй. Хан исеменән бирелгән фармандары халыҡты яуға күтәрер оран булһа, батыр тигән даны, аҡыллы һәм сәсән тигән маҡтанысы күптәрҙе бағындырыр ҡеүәт була. Уҡымышлылығы менән хажилығы ла үҙенсә бер ҡөҙрәткә эйә. Берәүҙәргә ул яуҙа еңелмәҫ батыр, берәүҙәргә ярышта ал бирмәҫ сәсән, бәғзеләргә иң уҡымышлы хафиз, ололоҡло хажи, олуғ хан булып алдарына баҫыр. Шул һәләт һәм титулдарҙың бер кешелә йыйылғанын уйлаһаң, һоҡланырлыҡ һәм ғәжәпләнерлек тә шул. Ҡараһаҡалдың һәләтлектәрен һәм батырлығын заманында рус түрәләре һәм тарихсылары ла танырға мәжбүр булған. Ә халыҡ Ҡараһаҡалды күрер-күрмәҫтән уның тураһында йырҙар, легендалар сығарырға ла өлгөргән. Айырата уның тураһында яуҙа уҡ та, пуля ла алмай тигән хәбәр киң таралған. Уның көс-ҡеүәте, ҡылысы, аты илаһилаштырылған, үҙе изге йән итеп күрелгән.

Әммә батыр даны ҡоро көстә, аҡыл һәм таҫыллыҡта ғына түгел, уға күптәрҙең инаныуында ла. Ә инаныу — ярты иман, олю ҡеүәт. Ҡараһаҡалдың күптәрҙе инандырыр хан исеме ялған, һалған ораны ҡоро һөрән булыуына ҡарамаҫтан, хыял менән ғәмәл айырмаһын, әсе хәҡиҡәт ҡәтғилеген дә таҫыллы һәм сабыр кисерә ул.

Әй буйындағы бер нисә ҡаты бәрелештәрҙән һуң, Ҡараһаҡал апрель башында, Әй, Йүрүҙән үрҙәренән Ағиҙел башына сыға. Яҙғы өҙөк юл, тау-таш араһы, өҙлөкһөҙ бәрелештәр Ҡараһаҡал яуын аяуһыҙ йонсота, уны үтә мөшкөл хәлгә ҡуя. Өҫтәүенә, батша ғәскәрҙәренең төп көстәренең тирә-яҡтан уратып яҡынлашып килеүҙәре тураһындағы шомло хәбәрҙәр ҙә көндән-көн көсәйә бара. Ә Ҡараһаҡал хан вәғәҙә иткән 80 меңле ғәскәр ҙә, унан хәбәрхәтер ҙә юҡ.

Хандың энеһе Искәндәр солтан ҡул аҫтындағы был ғәскәрҙе юллап, төшлөк яғына ике-өс рәт башҡорт сапҡындары ебәрелә ебәрелеүен. Тик уларҙың бер нисәһе Яйыҡ, Эмба буйҙарып күпме генә ҡыҙырмаһын бер ни тапмай кире әйләнә. Искәндәр ғәскәре Башҡортостанға яҡынлашып килә, Ырымбурҙы алған имеш, тигән хәбәр ҙә имеш-

мимеш булып сыға. Шулай ҙа Ырымбурҙан йөҙ илле саҡрымдар алыҫлыҡта ул ғәскәрҙе үҙ күҙҙәре менән күрсеүселәр ҙә була. Ләкин ул ғәскәр, күргән-белгән ике башҡорт раҫлауынса, Искәндәр солтандыҡы түгел икән. Үҙен Искәндәр солтан итеп танытыр был әҙәм элек башҡорттарҙа хеҙмәт иткән бер ҡаҙаҡ, Ҡараһаҡалдың дуҫы ғына булып сыға. Ул ғәскәре лә батша ғәскәрҙәре тарафынан ҡыйратылып, Ҡараһаҡалға килеп ҡушыла алмай тарҡала.

Ана шулай әсе хәҡиҡәт раҫланып, киҫкен ҡәрәмәт хәл килеп тыуғанда ла, Ҡараһаҡал быларҙы һалҡын ҡан һәм таҫыллыҡ менән үткәреп ебәрә, яуҙаштары ни хәтле генә аҙап һәм икеләнеп ҡалмаһын, уларҙы яңынан яуға тупларлыҡ аҡыл таба. Хатта Ҡатай волосының батша яҡлы бер Күҙәкәй Ҡолсурин тигән дыуамал башҡорттоң, ҙур ғына нөгәре менән ҡапыл Ҡараһаҡал яуы эсенә үтеп инеп, ханға: «Йә, вәғәҙә иткән ғәскәреңде күрһәт, булмаһа әсир итеп рустарға тотоп бирәм», — тип янаған сағында ла был башкиҫәрҙәрҙең ауыҙын ҡапларлыҡ һәм йүгәнләп алырлыҡ әмәлен таба ул. Уҡ етмәҫ ергә ҡылыс һуҙыуҙың да файҙаһыҙлығын белә батыр.

Бер мәл батша яҡлы Булат Йәлекәев тигән старшинаның Ҡараһаҡалды тотмаҡ булып эҙәрлекләп килгән сағында бер яуҙа бөтә отряды тиерлек ханға әсир төшә. Шунда Теләүкәй исемле бер ҡатай башҡорто үҙенең ханды йә тоторға, йә үлтерергә ебәрелгәнен таный. Быға ҡаршы Ҡараһаҡал: «Нигә әле яу мәлендә тотмаһығыҙ йә сабып үлтермәнегеҙ», — тип мыҫҡыллы көләп яуап бирә лә, башкиҫәрҙе үлтертәһе урында, үҙенә — ханға ғәскәр йыйышырға тип ҡайтарып ебәрә. Шундай егетлек эшләй алһа, үҙенә бер чин биреп, яҡын яраны итергә лә вәғәҙәләй ул.

Хандың әйткәне — булһа ҡот булыр: ана шул уҡ Ҡатай волосы башҡорто Теләүкәй Улатимеровҡа егетлектәре өсөн хан князь чинын бирә, ҙур бер ҡорбашы итеп тәғәйенләй.

Ҡараһаҡал иҙел башында хәрби лагерь ҡора. Бында, тау-таштар, урман-йылғалар менән ҡамалған һил урында, яу-юл менән аяуһыҙ арыған, йонсоған ғәскәрен ял-хәл алдырырға, яңы көстәр тупларға, алдағы иң хәтәр алыштарға әҙерләнергә уйлай ул. Батырға һөңгөлө яуға тимер ҡалҡаны өҙер булыу ҙа, уҡлы яуға һарайта-көйәгеһе һау булыу ҙа шарт.

Ҡараһаҡал тарафынан фарман менән ебәрелгән сапҡындар әле бер волоста, әле икенсеһендә халыҡты дәррәү яуға ҡуҙғата. Әле бер, әле икенсе урында яу ялҡындары ҡабына. 1740 йылдың апрель-май айҙарында был ялҡын Өфө, Пермь губерналарының байтаҡ волостарына таралып өлгөрә. Айырыуса Исәт провинцияһында хәтәр була яу уты.

Иҙел башында, Ҡыраҡа тау итәгендә туҡталған Ҡараһаҡал хәҙер ошо халыҡ ҡуҙғалышын бер ергәрәк тупларға, дөйөм етәкселекте ойоштороорға тырышһа, рус хөкүмәте был яу ялҡынын йәйгә хәтле баҫтырырға ашыға. Рус хөкүмәтенең биш меңгә яҡын регуляр ғәскәре төрлө яҡлап Ҡараһаҡал хәрби лагерына табан походҡа сыға. Князь Путятин менән Языков командаһындағы ғәскәрҙәр апрель айында Әй менән Үҙән араһындағы тауҙарҙа, Итбай ауылы янында бергә ҡушыла. Капитан Кублицкий мең ярымлы ғәскәре, туптары менән Табындан Миндәккә юл тота. Генерал Соймоновтың рапортына ҡараганда, рус гәскәре июнь айында ун меңдән ашып китә.

Урал тауҙарын ике яҡлап ябырылып килгән батша ғәскәре, баш күтәреүселәрҙең вағыраҡ отрядтарын ҡыйрата-ҡыйрата, ауылдарҙы көл-күмергә ҡалғансы яндыра-яндыра, май айҙарында Иҙел-Яйыҡ баштарына яҡынлай. Каратель отрядтарының баш күтәреүгә ҡатнашы булған ауылдарҙың халҡын кем булыуына ҡарамаҫтан язалап йә үлтереп, күптәрен әсир итеп үтеүҙәре арҡаһында, башҡорттар бөтә ғаиләләре, бала-сағалары, мал-тыуарҙары менән тауҙарга, Ҡараһаҡал ғәскәре яғына ҡасырга тырыша.

Иҙел башында 22 майҙа рус гәскәрҙәре менән Ҡараһаҡал яуы араһында ҡаты һуғыш була. Башлыса уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс, һөңгө, ара-тирә һыҙма мылтыҡ, суҡмар, киҫтән менән нисек етте шулай ҡоралланган башҡорт яусылары, йән аямай һуғышыуҙарына ҡарамаҫтан, баштан-аяҡ ҡоралы, туплы-мортиралы регуляр рус ғәскәренә оҙаҡ ҡаршы тора алмайынса, яу яланында байтаҡ ҡына кешеләрен ҡалдырып, көньяҡҡа Ҡыҙыл йылғаһына табан сигенә.

Өс-дүрт көндән Яйыҡ башында кисеүҙә икенсе тапҡыр ҡаты һуғыш башлана. Ҡараһаҡалдың алғасҡы нөгәрҙәре Яйыҡты кисеп сығыр-сыҡмаҫтан, тау юлынан һуҙылған гәскәре, ылауҙары тупҡа тотола. Йылғала, үҙәндә тәүлеккә яҡын һуҙыла һуғыш. Мең ярымлап ғаиләле, бала-сағалы, мал-тыуарлы халыҡты Яйыҡ аша сыгарып, ышыгыраҡ урындарга йәшереп, арыраҡ китеп бөткәнсе, Ҡараһаҡал йөл илле һыбайлынан торган сардауылы менән батша ғәскәрҙәренең әллә нисә сабыуылын кире ҡаға. Тау араһында таш урынына баҫып, барлы-юҡлы ҡоралы менән бер аҙым сигенмәй тәүлеккә яҡын ҡеүәтле яуҙы тотоп торор алһыҙялһыҙ был һуғыш баш күтәреүселәрҙең тиңһеҙ ҡаһарманлығының, иң героик алыштарының бер өлгөһө булырлыҡ.

Ошондай уҡ һуғыш тағы Ҡыҙыл йылғаһы буйында ла ҡабатлана. Бындағы хәтәр һуғышта Ҡыҙыл йылғаһы һыуы ысынлап та ҡыҙылға әйләнә. Йылға буйы һәм һыуы йөҙәрләгән үлек кәүҙәләре менән тула.

Шул яғы ла бар: бындай һуғыштарҙа Ҡараһаҡалдың ғәскәре күпме генә ҡырылмаһын, кәмеү түгел, киреһенсә, арта ғына бара. Үлгән йә яҙаланған бер һуғышсыһы урынына сафҡа икәү баҫа. Әгәр уның иҙел башындағы яуҙа мең ярымлап һуғышсыһы булһа, Сыбаркүл буйына килеп сыҡҡанда ул һан икеләтә артҡан — өс меңдән ашҡан була. Был ғәжәп тә түгел, сөнки ошо иң хәтәр алыш осорҙарында ғына ла Ҡатай, Тамъян, Ҡыуаҡан, Теләү, Күбәләк, Әйле, Ҡаратаулы, Ҡара-Табын, Күҙәй, Түңгәүер волостарынан баш күтәреүселәр отряды Ҡараһаҡалға йөҙәрләп-йөҙәрләп ағыла.

Бындай хәл, бая әйткәнебеҙсә, каратель отрядтарының ҡанһыҙлығына ла нык бәйләнгән. Каратель отрядтары яу үткән юлда ауылдарҙы яндырыу, иген баҫыуҙарын тапатыу, күптәрҙе һөргөнгә ебәреү өҫтөнә, унарлаған кешеләрҙе аҫып йә яҙалап үлтереүҙе яман бер ғәҙәткә индерә. Йәнәһе, шуның менән халыҡтың ҡотон алмаҡсы улар. Ләкин был яман ҡанһыҙлыҡ көткәндең киреһен бирә. Халыҡ бөтә ғаиләһе, мал-тыуары менән ҡубып, баш күтәреүселәр яғына ҡаса. Күбеһе дошманға бирелмәй, баш һалмай һуғышып үлә, яҙа ҡулына эләкһә, түҙемлек менән яҙа-үлем күҙенә ҡарап бара. Шуға, күрәһең, иң ҡанһыҙ түрәләрҙең береһе князь Урусов Ырымбурҙа хәрби советта, башҡорттарҙы аҫып йә баштарын киҫеп үлтереү, ҡабырғаларын һындырып, тимер ҡаҙыҡҡа ултыртып, ҡыҙған тимер баҫып яҙалау, ҡолаҡ һәм танауҙарын, телдәрен ҡырҡып алыу көткән һөҙөмтәләрҙе бирмәне, тип танырға мәжбүр булған.

Һәр хәлдә, ҡорҙан ҡоро ҡалғансы, яу эсендә үлеүҙе хәйерлерәк күргән халыҡ. Тотҡонда ла күптәр үҙҙәрен ҡыйыу тота белгән.

Был яҡтан Сәйетбай батырҙың үҙен тотошо айырыуса ғибрәтле. Ғәҙәттә, яу башлыҡтарын, тотҡас та, урынында яҙалап үлтерә торған булһалар, Сәйетбай батыр бер яуҙа яраланып ҡулға эләккәс, Минзәләгә генерал Соймонов ҡарамағына ебәрелә. Генерал иң абруйлы батыр ярҙамында уның улы Әминде һәм Ҡараһаҡал ханды ҡулға төшөрмәксе. Шуның менән ул, йәнәһе, Сәйетбайҙың да, улының да, хандың да ғүмерен һаҡларға вәғәҙә итә, батырға аҡсамал тәҡдим итә. Сәйетбай батыр был тәҡдимгә ҡаршы, аяҡ-ҡулындағы бығауға ҡарап, «бер тотҡон булыуы ла бик еткән, үҙ улымды һәм ханды, үҙ башымды аяп, һәләкәткә ҡуйырға бында алйот юҡ», тип ҡыйыу яуап бирә. Генералдың Сәйетбай исеменән ялған хат яҙҙырып, Әминде һәм Ҡараһаҡалды тоторға булашыуы ла бушҡа ғына була. Сәйетбай батыр, атаҡлы Алдар Иҫәнгилдин, Йәммәт Бикеев тархандар менән Минзәләлә бергә дарға аҫылһа ла,

уларҙың юлын Ҡараһаҡал яуы сафында улдары Әмин, Мысыр, Мулламмәт батырҙар дауам итә.

1740 йылдың 4-се июнендә Тубыл йылғаһы буйында Ҡараһаҡал яуының һуңғы хәл иткес һуғышы була. Был юлы ла баш күтәреүселәр үҙҙәрен аямай аяуһыҙ һуғышыуҙарына ҡарамаҫтан, туптар менән ҡораллы рус ғәскәренең һөжүмен туҡтата алмайҙар. Был яуҙа Ҡараһаҡалдың иң яҡын ярандары, яһауылдары Миңдеяр Ҡарабаев, Исламғул Юлдашов, Йәрмөхәмәт Хажиев һ. б. һәләк була. Ҡараһаҡал үҙе ҡаты яралана. Әммә бер өс йөҙләп ҡалған нөгәре менән дошман ҡулынан ҡасырға өлгөрә.

Батырҙың яраһы яуҙа ямалыр тиҙәр. Ҡараһаҡал шул көйө тағы бер нисә тапҡыр алышып ҡарай һәм, аҙаҡҡы сиктә тамам еңелеп, бер иллеләп һыбайлыһы менән эҙәрлекләүҙән ҡасып, ҡаҙаҡ далаларына инеп юғала.

Ҡараһаҡалдың төп көстәре, алайҙары ҡыйратылғас, батша ғәскәрҙәре баш күтәреүселәрҙең урман-тауҙарҙа бүленеп ҡалған айырым отрядтарын берәмләп юҡ итергә, урман-тауға ҡасҡан халыҡты эҙәрлекләргә керешә. Иҙел башында, Ямантау буйында, Инйәр үҙәндәрендә, Ҡыҙыл буйында яңынан һуғыштар ҡабынып китә. Ләкин бер-береһенән алыҫ йәки бүленгән, уратылған Теләүкәй, Әмин, Ака мулла, Сырымбәт батыр ҡарамағындағы нөгәрҙәр яуҙа берәм-берәм тар-мар ителә. Аҙаҡ каратель отрядтары урман-тауҙарҙа ҡасып-боҫоп ҡалған ғаиләләрҙе, ҡатын-ҡыҙҙарҙы, бала-сағаларҙы, мал-тыуарҙарҙы эҙәрлекләп тәрәшләп үтә; осраған бер ҡыҙ-ҡырҡынды, бала-сағаны мыҫҡыллап, йә үлтереп, йә әсир итеп бара; ауылдарҙы яндыра, игенлектәрҙе, кәбәндәрҙе үртәй, мал-тыуарҙы ҡыуып алып йә булмаһа ҡырып китә. Шуға күрә үлемгә дусар ителгән был ғаиләләрҙең күбеһе, ҡоралы йә ҡоралһыҙ көйө, ағас-таш араларында аҙаҡҡаса һуғышып үлеүҙе артығыраҡ күрә. Тау араларында өҙлөкһөҙ ҡан ҡойола.

Һуңынан, Минзәлә яза комиссияһының мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 1735—1740 йылдарҙағы башҡорт яуҙарында 40 меңләп баш күтәреүсе һәләк була, 7 мең ярым кеше язалап үлтерелә, 3 меңдән ашыу кеше һөргөн ебәрелә, 6 мең ярым самаһы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡол итеп алпауыттарға таратып бирелә, 17 мең йылҡы һәм һыйыр малы тартып алына, 400-ләп башҡорт ауылы яндырыла.

Россия колонизацияһының, каратель отрядтарының ҡанһыҙлығының йән өшөткөс «эшмәкәрлеге» — башҡорт тарихының иң ҡанлы, фажиғәле биттәре былар. Шуны князь Урусов 1740 йылдың 10 авгусында Ырымбур янында үткәргән язалауы, 17 сентябрҙә Һаҡмар крепосы эргәһендә тағы 125 кешенең башын киҫеп, 50 кешене аҫып үлте-

реү, 300 кешенең танау һәм ҡолаҡтарын ҡырҡып язалау менән ослай. Аҙаҡ А. С. Пушкин үҙенең «Пугачев тарихы» әҫәрендә был ҡанһыҙлыҡты, «генерал князь Урусов тарафынан Башҡортостанда эшләнгән язалар иҫ-аҡыл китмәле», тип ҡәһәрләп тамғалаған.

Ҡараһаҡал яуының аҙағы ошондай ҡот осҡос ҡанһыҙлыҡ, милли фажиғә менән бөтөүгә ҡарамаҫтан, ниндәй генә аҫыу-киҫеүҙәр ҙә яндырыу-үртәүҙәр ҙә башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәш рухын, ғәйрәтен һүндерә алмай. Ул көс-ҡеүәт тағы саяраҡ булып, аҙаҡ Батырша, Салауат Юлаев яуҙарында ҡалҡына. Ҡараһаҡал яуында көсәйә биреп ҡуйған халыҡтар берҙәмлеге — ул яуҙа батшалыҡҡа ҡаршы башҡорттар менән бергә татарҙар, ҡаҙаҡтар, сыуаштар, рустар ҙа ҡатнаша — 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғыштарында интернациональ дуҫлыҡ, оло берҙәмлек дәрәжәһенәсә күтәрелә.

Ҡараһаҡал үҙе лә уға ҡәҙәр булған яу башлыҡтарынан күп яҡтары менән айырылып тора. Берҙән, ул, алда әйтелгәнсә, заманы өсөн уҡымышлы кеше, оҫта дипломат, батыр һәм сәсән. Икенсенән, уның төрлө халыҡтар, йорт-ерҙәр менән бәйләнеше көслө. Өсөнсөнән, Ҡараһаҡал — нисектер үтә йылғыр, үҙен һис ҡулға төшөртмәҫ һәм үҙ абруйын ниндәй хәлдә лә һаҡлап ҡала алыр таҫыллы әҙәм. Үҙ заманында губернатор Татищев, статс-советник Кириллов, князь Урусов, генерал Соймонов Ҡараһаҡалды тоторға тип ниндәй генә универсалдар таратмаһын, күпме ҙур ярлыҡаштар тәғәйенләмәһен, иң ауыр саҡтарҙа ла, хатта ханлығының ялғанлығы беленгәндә лә, бер кем дә Ҡараһаҡалды тоторға йөрәге етмәгән һәм уны булдыра ла алмаған. Элекке яу башлыҡтары — Сәйет, Аҡай, Килмәй, Алдар, Бәпәнәй батырҙар тотолоп, аҫып үлтерелгән булһа, Ҡараһаҡал был хәтәр әжәлдән дә ҡотолоп ҡалған.

Шуға күрә Ҡараһаҡал шәхесенең дә, яҙмышының да үҙ заманында һәм аҙаҡтан легендалар һәм серлелек менән уратылып алыныуы һис ғәжәп түгел.

Ҡараһаҡал хаҡында тарихта төрлөсә юрау йәшәп килгән. Уның береһе — Ҡараһаҡал сығышы менән ҡаҙаҡ имеш тигән фекер. Быны Ҡараһаҡалды ҡаҙаҡтарҙың Абулхайыр ханы ла, Бараҡ солтаны ла ҙур хөрмәт итеүенә, хан итеп танылыуына ҡарап әйтәләр. Етмәһә, аҙаҡ ул ҡаҙаҡ далаларына ҡасҡас, шул хан һәм батыр тигән даны менән шаҡтай ирәйеп ала. Ҡаҙаҡтарҙан ике меңләп ғәскәр туплап, ҡалмыҡтарға барымта ойоштора; ҡалмыҡ-ҡарағалпаҡтарҙан бик күп ғәнимәт — мал-тыуар, әсирҙәр яулап алып ҡайта.

Ҡараһаҡалды сығышы менән ҡалмыҡ-ҡарагалпаҡтарға илтеп ялғаусылар ҙа бар. Быны, берҙән, Ҡараһаҡал үҙен ҡалмыҡ ханы Суна-Ҡонташлының улы Солтангәрәй хан тип танытыуынан сығып әйтеүҙәре. Икенсенән, ҡарағалпаҡ ханлығы шәжәрәһе Ҡараһаҡалды үҙ ырыуына илтеп ялғауҙан килә. Ҡарағалпаҡ ханы Шәйбәк хан Ҡараһаҡалды үҙ шәжәрәләрендә Байбулатхәсән исеме менән йөрөүен һәм ағаһы Ишем хандың улы икәнен раҫлай. Шуныһы ла ғибрәтле: Шәйбәк хан урынына анау ялган Солтанморат хан исеме менән Өфө өйәҙе башҡорто Абдрахман ҡарағалпаҡ ханы итеп үҙен дәғүәләй һәм Шәйбәк ханды шаҡтай ҡыҫырыҡларға ла етешә. Шуға, йәнәһе, ағаһы Шәйбәкте яҡлап Ҡараһаҡал — Байбулатхәсән ҡарағалпаҡтарға бер ике ҡарымта яһай. Тик нисек кенә булмаһын, ике хан исеме менән ике башҡорттоң яҙмышы ялғана бирәп ҡуя бында.

П. И. Рычков үҙенең «Ырымбур тарихы» тигән китабында Ҡараһаҡалдың бер ниндәй ҙә хан улы түгелен һәм ҡаҙаҡ та булмауын, бәлки ябай бер башҡорт икәнлеген иҫбат итә. Ҡараһаҡал яуҙарын үҙ күҙе менән күргән был рус тарихсыһы башҡорт батырын йәшләй тыуған яҡтарынан сығып китеп, Урта Азия, Ҡубань, Волга буйҙарын күп ҡыҙырыуын һәм шунда ҡалмыҡ ханы Ҡонташлы улы Солтангәрәйҙең яҙмышын белеп, шуны аҙаҡ үҙе итеп танытыуын раҫлай. Ғәмәлдә, ҡалмыҡ ханы улы Солтангәрәй үҙ атаһынан Волга буйындағы ҡалмыҡтарга ҡасҡан була һәм шунда кемдәрҙер тарафынан үлтерелеп ташлана. Ә үлгән йә үлтерелгән хан-батша урынына ялған хан-батшалар пәйҙа булыу тарихта киң таралған хәл: ялған Дмитрий, Петр III батша — Пугачев һ. б.

Ҡараһаҡалды хан итеп танытыу уйына килгән һәм шуны ғәмәлгә ашырған Алан Ейәнгол старшина батша ғәскәрҙәре ҡулына эләккәс, бик ҡаты яҙалау аҫтында хандарының ысын йөҙөн асырға мәжбүр булған. Ейәнғол әйтеүенсә, Ҡараһаҡал — Нуғай юлы Юрматы волосы башҡорто. Үҙ исем-фамилияһы: Миңлеғол Юлаев. Атаһы Ныязғол. Һәләүек һыуы буйында өйө, ғаиләһе бар. Унда әсәһе Емеш, бисәһе Ҡышбикә, ҡыҙы Рәхимбикә, туғандары Ситембәт менән Бикбулат йәшәй. (Был ғаилә оҙаҡламай тотолоп, барыһы ла яҙалап үлтерелә.)

Ҡараһаҡалдың 1740 йылғы яуҙы ойоштороуға, уның барышына бәйле материал тарихта шаҡтай күп һаҡланған. Р. Г. Игнатьевтың бай ғына архив материалдары нигеҙендә яҙылған «Ҡараһаҡал — Башҡортостандың ялған ханы» тигән мәҡәләһе башҡорт батырының шәхесен һәм тормошон тулы ғына күҙ алдына баҫтыра. Ләкин Р. Г. Иг-

натьевтың был хеҙмәтендә лә, П. И. Рычковтың «Ырымбур тарихы» китабында, С. М. Соловьевтың «Россия тарихы» томында ла Ҡараһаҡалдың күп эшмәкәрлеге аҙ яҡтыртылған, һуңғы яҙмышы бөтөнләй билгеһеҙ ҡалған. Хәйер, Р. Г. Игнатьев һәм В. Н. Витебскийҙың уға таянып яҙған «И. И. Неплюев һәм Ырымбур крайы...» тигән хеҙмәтендә Ҡараһаҡалдың әле 1740 йылға саҡлы Ырымбур ҡалаһын һалыуға ҡаршы яуҙарҙа ҡатнашҡанлығы, бер нисә тапҡыр ҡаҙаҡтар араһына сығып китеүе, унан Йосоп, Аҡай батырҙарҙың, атсабарҙар ебәртеп, уны үҙҙәренә саҡыртыуҙары тураһында айырым мәғлүмәттәр генә бар.

«Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса материалдар» томлығының 1-се киҫәгендә Ҡараһаҡалдың һуңғы яҙмышы хаҡында сала-сарпы ғына мәғлүмәт тә салынып ҡала. Ул 1749 йылдың яҙында Ҡаҙағстанда үлгән буғай. Нисек үлеүе тураһында заманында төрлөсәрәк хәбәр таралған. Ҡараһаҡалдың көсәйеп китеүенән ҡурҡыпмы йә Абулхайыр ханды хаиндарса үлтереүен аҡлар өсөнмө ҡаҙаҡтарҙың Урта урҙа солтаны Бараҡ башҡорт батырын ағыулатып үлтерткән тиҙәр. Солтан шул уҡ ваҡытта быны ҡалмыҡтар менән килешер өсөн уларҙың хас дошманы, ханлыҡ тәхетен дәғүәләүсене юҡ итеүе тип тә уйлайҙар.

Ҡараһаҡал батыр тураһында тарихи материалдарға таянып яһаған үҙенсә бер байҡауыбыҙ ҙа ошонда тамам. Әммә батыр үлһә лә, даны ҡала, тарихи шәхестең яманмыяҡшымы барыбер аты ҡала, тигән шикелле, беҙҙеңсә, Ҡараһаҡал батырҙың эшмәкәрлеге ныҡлап өйрәнеүгә, айырым бер иғтибарға мохтаж. Ни өсөн тигәндә, башта әйткәнебеҙсә, берҙән, ул башҡорт тарихы өсөн атаҡлы шәхес, икенсенән, Ҡараһаҡал яуын, уның яҙмышын ныҡлап белмәй тороп, ошо яуҙарҙа ҡатышҡан Юлай Аҙналиндың тормош ағышын, уның улы Салауат Юлаев шәхесенең тәрбиәләнеүен, ғөмүмән, 1773—1775 йылдарҙағы атаҡлы Крәҫтиән һуғыштарын, Салауат Юлаев етәкселегендәге башҡорт восстаниеһының характерын аҙағынаса төшөнөүе ҡыйын. Унан, беҙҙең милли батырҙарыбыҙ ишлелеге, тарихи күсәгилеш, тарихыбыҙҙың төрлө биттәре тағы асығыраҡ күренер кеүек.

*1969*

## БАТЫРШАНЫҢ БАТШАҒА ХАТЫ

Алыҫта-алыҫта, илебеҙҙең төньяғында, урманлы-һаҙламыклы даръялар уртаһында таш ҡойма менән уратылған Шлиссельбург тигән утрау-ҡәлғә бар. Әүәл ул батшалыкҡа ҡаршы баш күтәргән йәки тел тейҙергән ҡыйыу ир-егеттәрҙе — «ҡурҡынысл кешеләрҙе» — мәңгегә үҙ казематтарына алыр яманаты сыҡҡан ҡот осҡос таш төрмә булған.

Тарих шул таш ҡапсыҡтың үткән быуаттарҙағы йөҙәрләгән ҡорбандары араһынан өс хәтәр тотҡонон айырыуса яҡшы хәтерләй. Уларҙың береһе — ташҡа баҫҡан һүҙ менән батшаға ҡаты тел тейҙергән нәшриәтсе һәм яҙыусы Иван Новиков, икенсеһе — башҡорт восстаниеһе етәксеһе Батырша, өсөнсөһө — ...император Иоанн Антонович. Быларҙың береһе ҡорал, икенсеһе ялҡынлы һүҙ менән ҙур тәхетте ҡолатырға яҫҡынып, батшаларҙың ҡотон алһа, өсөнсөһө, киреһенсә, тәхет дәғүәләүе менән ҡурҡыныс булған.

Шул төрмәлә ошо политик тотҡондар менән бер замандараҡ ябылып бик оҙаҡ ятҡан һәм аҙаҡ нисектер ҡотолоп сыға алған бер сәйер әсирҙе лә иҫкә алғы килә. Ул — экономист һәм алхимик Филипп Беликов тигән бер бәндә. Батшаның монета дворында аҡса һуғыусы был әҙәм ниндәйҙер мутлығы өсөн һөргөнгә ебәрелгән. Әммә хәйләкәр Филипп, батшаға ҙур вәғәҙә һәм ышаныстар белдереп, Себер һөргөнөнән ҡотола алған: имеш, ул ике әҫәр яҙып ҡаҙнаны байытмаҡсы, баҡырҙан алтын тапмаҡсы. Шул әҫәрҙәрен яҙыу өсөн уға эш урыны итеп Шлиссельбург төрмәһе тәғәйенләнгән икән. Шуныһы ла сәйер, берәүҙәр яҙғаны өсөн, икенселәре яҙыр өсөн шул төрмәгә эләгә.

Баҡырҙан алтын булмаҫты, муттан ни өмөт тә, ни хәтәр. Хәтәрерәге — тегеләр. Шуға батша булып ултырмаҡ Иоанн Антоновичты ла, шул батшалыҡтың ҡоло Батыршаны ла бер үк аяныс яҙмыш — фажиғәле үлем көтә.

Батша һарайы интригаларының ҡорбаны булып, һаҡсы-бағауылдарҙан башҡа әҙәм һәм донъя күрмәй сабый сағынан уҡ тотҡон үҫкән үҫмер Иоанн уны тәхеткә ултыр-

тыр өсөн ҡотҡарырға теләп төрмәгә үтеп ингән офицерҙар булаһы ваҡытында сәнсеп үлтерелһә, Батырша иһә, үҙен-үҙе ҡотҡармаҡ булып, төрмәлә бер үҙе баш күтәреп, тиңһеҙ алышта һәләк була.

Батыршаның батырҙарса был һуңғы алышы 1762 йылдың 24 июленә ҡарай. Башҡорттарҙың 1755 йылғы восстаниелары баҫтырылғандан һуң тотолған Батырша Шлиссельбург төрмәһендә биш йыл ябыулы ята. Таш төрмәнең бер кешелек ҡараңғы, һаҫыҡ һәм һалҡын камераһында ятып тамам ыҙаланған был батыр, ниһайәт, аҡыл етмәҫ тәүәккәллеккә баҙнат итә: бығаса бер кем ҡасып ҡотола алмаған даръя уртаһындағы таш ҡапсыҡтан ҡулы-аяғы бығаулы көйө ҡасмаҡ була. Йоҡомһорап ултырған һаҡсы эргәһендәге балтаны эләктереп алып, ул бер нисә һалдат-һаҡсының баштарын яра-яра саба. Төрмә аяҡҡа баҫа. Шулай ҡул-аяғы бығаулы көйө, төрмә эсендәге тиңһеҙ алышта батыр аяҡ өҫтө йән бирә.

Батыршаның былдай алышын «Батша төрмәһе тарихы» тигән өс томлыҡ хеҙмәттең авторы профессор М. Н. Гернет башҡорт восстаниеһы етәксеһенең романдарға торошло һуңғы ҡыйыу аҙымы тип иҫкә ала һәм уға махсус бүлек бағышлай.

Батыршаның ҡанлы балтаһы менән бергә ҡауырый ҡәләме ятып ҡала. Башҡорттарҙы батшаға ҡаршы баш күтәрергә саҡырып өндәмә яҙған, аҙаҡ тотҡонда батшаның үҙенә табаҡ-табаҡ хат яҙған ҡауырый ҡәләм ул. Ҙур түрәләрҙән уҙып, аҡ батшаға барып юлыҡмаған был табаҡ-табаҡ хат, дәүләт архивтарында һаҡланып, быуаттар аша беҙҙең көндәргә килеп еткән [1]. Ул хат менән батырҙың ейәндәренең ейәндәре, тоҡомдаштарының тоҡомдаштары танышырға, белергә хаҡлы. Ни өсөн тигәндә, ул XVIII быуат уртаһының ҡиммәтле бер яҙма ҡомартҡыһы ғына булып ҡалмайынса, шул үткән замандың тарихын, халыҡтың көнкүрешен, уйҙарын һәм теләктәрен йәнле итеп хикәйәләгән ҙур әҙәби-тарихи бер әҫәр дәрәжәһендә лә. Батыршаның батшаға яҙған (ҡулъяҙма 100—130 биттәр самаһында) гәйәт ҙур хаты авторҙың үҙ башынан үткән хәлдәрҙе, XVIII быуаттың уртаһында Башҡортостанда булған ҡанлы һәм фажиғәле тарихи ваҡиғаларҙы күҙ алдына баҫтыра, шуларҙың тере шаһиты булып, тарих һөйләй.

...1750—1755 йылдар. Башҡорт йорт-еренә тағы бик күп өлгөнлөктәр, ҡазалар килтереп, әммә Рәсәй батшалығының ҡотон алып уҙған Аҡай, Күсем, Ҡараһаҡал яуҙарына

---

[1] Мәскәү. Боронғо Акттарҙың Үҙәк Дәүләт архивы, фонд 7, эш 1781.

ни бары ун-ун биш йылдар самаһы ваҡыт үткән. Ул яуҙарҙы рәхимһеҙ рәүештә баҫтырғанда, батша карателдәре, шуның Тевкилев ише ҡанһыҙ түрәләре тарафынан яндырылған ете йөҙләп башҡорт ауылдарының көл-күмерҙәре юҡҡа сығырға ла, меңәрләп үлтерелгән һәм язаланған баш күтәреүселәрҙең, меңәрләп ҡоллоҡҡа һәм һөргөнгә оҙатылыусыларҙың аһ-зары ҡолаҡтан китергә лә өлгөрмәгән саҡ. Таштарға соҡоп яҙылған ҡарғыш та юйылырлыҡ түгел. Тик ҡанһыратып ташланған Башҡортостан иле яуыз түрәләренән, иҙеүселәренән хәҙер үк ҡонон алырлыҡмы һуң? Халыҡ тамам өҙлөгөп-имгәтелеп ташланмағанмы, ғәйрәт сикмәгәнме? Иң ҡанлы һабаҡ һуңғыһылыр, бәлкем. Етмәһә, ҡорбанын еңеп, һаман шашына барған йыртҡыс төҫлө, батша хөкүмәте колонизаторлыҡ политикаһын тағы ла аяуһыҙыраҡ итә: башҡорт ерҙәрен талап алыу хаттин аша; йәйләүлектәр, һунар биләмәләре юҡҡа сыға бара; хатта тау-күлдәрҙән быуаса бушлай алыныр тоҙҙарға хәтле яһаҡ һалына; сиреү хеҙмәтенән, бушҡа ылау ҡыуыуҙан интегә халыҡ; яуыз рус түрәләренән, башҡорт старшиналарынан ярлы-ябағайға көн-байман юҡ; алдау, алым алыу, йәбер-золомдоң сиге юҡ. Христиан диненә көсләп суҡындырыу ҙа күптәрҙе матди һәм рухи йәберләй.

Ошондай бөткөһөҙ ыҙа-яфаларҙан халыҡтың сабырлығы төкәнеп, үс-асыуы ҡабара бара. Урал буйҙарында йәнә ҡара болоттар ҡуйыра. Бер саҡма саҡ, ҡыҙған һауа ҡапыл дөрләп китер кеүек. Бына шул мәл уҡ-һаҙаҡ түгел, ҡауырый ҡәләм алып көрәш майҙанына Батырша сыға.

Ил ағаһы булыр кеше шуны яҡшы аңлай: халыҡтың үс һәм нәфрәт ҡылысын ҡайрар өсөн әле ғәййәрләнеп ҡорал шалтыратыр батырҙан битәр аҡыллы бер етәксе-башлыҡ хәжәтерәк. Үҙе кем һуң Батырша? Шуларҙың ҡайһыһы?

Батырша — халыҡ тарафынан яратып ҡушылған исем-ҡушамат. Уның үҙ исем-фамилияһы: Абдулла Ғәли улы Алиев. Ул үҙ заманының уҡымышлы һәм абруйлы аҡһаҡалдарының береһе. Тыуған яғы, хатында әйтеүенсә, Башҡортостандың Себер юлындағы Ҡарыш ауылы [1]. Бөгөлмәнән бик үк йыраҡ булмаған Тайсуған тигән ауылда Надир Адрахман старшина командаһындағы ҙур ғына мәҙрәсәгә килеп уҡығанлығы билдәле. Мәҙрәсәләрҙә ул ун йыл тирәһе һабаҡ алған, зирәклеге, отҡорлоғо менән шәкерттәр араһында ҙур дан тотҡан. Мәҙрәсәне тамамлағанда, ҡөрьәнде ул яттан һәм шәрехләп уҡыған, ғәрәпсә яҡшы белгән, аҙаҡ Ырымбур, Өфө, Ҡазан губерналарында иң уҡымышлы мулла һәм мөҙәрис булып танылған.

---

[1] Башҡортостандың хәҙерге Балтач районында.

Батырша күп кенә урындарҙа мулла булып торған. Был турала батшаға яҙған хатында ул шуларҙы атай: «...йыл ярым миҡдары Ғәйнә илендә Илеш мулла ауылында тордом. Ғилемлектә вә дәхи Исәт провинциясендә Мөслим старшина ауылында тордом, дүрт йыл миҡдары. Андин соң үз еремә ҡайтып, Яныш командасында Ҡарыш ауылында тордом, алты йыл миҡдары...»

Үҙ хатында яҙыуынса, Батырша мулла халыҡтарҙы ислам дине, шәриғәт ҡанундары рухында булырға нәсихәттәр бирә, алланың ерҙәге наибы батшаларға тыңлаусан, итәғәтле булырға өндәй, ул фекерҙәрен ҡөрьәндән аяттар, сүрәләр килтереп, шәрехләп нығыта.

Шулай имен-аман ғүмер һөргәндә, халыҡтар араһында төрлө хәбәрҙәр һәм «боҙоҡ эштәр» ишетелә һәм беленә башлай: Ҡазан, Ырымбур, Тобол губерналарында йәшәгән мосолмандарҙы рус поптары, ғарезнамәләр[1] яҙып, тамғалар һалып, христиан диненә көсләп күсерергә керешкәндәр; мәсеттәрҙе ябалар, динен ташламаған мөхәмәдиҙәр (мосолмандар) өҫтөнә яһаҡтар һалалар; күп бурыс йөкләтәләр, төрлө тарлыҡ һәм ноҡсанлыҡ килтерәләр. Быға са тау-күлдәрҙән алыр тоҙҙарҙы ҡәлғәләрҙән һатып алырга бойоралар, шул хаҡта указдар килеп уҡыйҙар. Быға риза булмағандарҙы йәберләргә, туҡмарға тотоналар, бәғзеләрен ҡәлғәләргә яптырып ҡуялар. Яуыз түрәләрҙең төрлө йәберяфалары етмәгән, ҡайһы бер ҡыйыуыраҡ ир-егеттәрҙе үлтереп ташлау хәлдәре лә йышая. Батырша үҙе бик күп йәбер-золомдоң шаһиты була. Ғәҙеллек эстәп, был башбаштаҡлыҡтарҙы, залим наибтарҙан уҙып, батша хәҙрәттәренә еткерер әмәл юҡ.

Шулай донъяларҙың тарлығынан михнәттәр сигеп, зарылыҡтар ҡылып тора торғас, ишетелә башланы: Нуғай юлы башҡорттары ҡорал әҙерләйҙәр икән. Унан Себер, Уса юлы башҡорттары ла ҡоралланалар, тигән хәбәр таралды. «Был хәбәр ысынмы-бушмы, ул атлы, һаплы ҡоралдар төҙәмәк тик түгелдер, бында бер хикмәт барҙыр. Был серҙе мин аңламаҡ тейешмен», — тип Батырша ил-халыҡ араһына сығып китә. Башта Себер юлы Исәт провинцияһындағы Мөслим ауылына йүнәлә. Абруйлы миһман-ҡунаҡты халыҡ хөрмәтләп ҡаршылай. Күрше һалйығут волосы башҡорттары йәйләүҙә мәжлес ҡороп, ҡымыҙ эскәндә дин, донъя хәлдәре хаҡында гәпләшкән саҡта, халыҡ яуыз түрәләр тарафынан килтерелгән ыҙа-яфалар хаҡында зарлана. Батшаға ла тел тейә. Бәғзеләре ҡорал менән янап, ҡуҙғалырға

---

[1] Ғарезнамә — аңлатма яҙыу.

өндәп, Алдар батыр кеүек ир-егеттәрен иҫкә төшөрә, һүҙ әленән-әле элекке баш күтәреүҙәргә ҡайта. Һуңынан көрәш майҙаны ҡороп, башҡорттар, мишәрҙәр ике яры булып, көс һынашалар, батырҙарға бүләк өләшәләр.

Батырша шулай ике ай самаһы ауылдан-ауылға, өлкәнән-өлкәгә йорт-ил араһында халыҡтың тын алышын тыңлап күңеленә һалып йөрөй. Ул быны батшаға яҙған хатында ғына күпкә шымартып, аҡлап шулай, ти, күрәһең. Ғәмәлдә, Батыршаның был сәйәхәт-сәфәре халыҡтың кәйефен һәм тын алышын белеү генә түгел, уны яуға өндәү, шуға әҙерләү менән бәйле булыуы хағыраҡ. Сөнки Батырша уҙған урындарҙа аҙаҡ халыҡ дәррәү рәүештә яуға сыға.

Тора-бара Батыршаның үҙенә төрлө яҡтан халыҡ вәкилдәре килеп-китеп йөрөй башлай. Йәй көнө Ҡүҙәй иленән ике башҡорт туҡтала уға. Уран иленә[1] йомош менән барған һәм юлайҡан хәҙрәтебеҙгә кереп, мираҫ малы хаҡында һорашып китергә булғайныҡ, тип таныта улар үҙҙәрен. Батырша ил-йорт хәлдәрен һораша: «Ни хәбәрҙәр ишетәһегеҙ йөрөгән-торған ерегеҙҙә һәм йөрөгәндәрҙән, торғандарҙан? Йорттағы халайыҡтарығыҙ ни хәлдә вә ни кәңәштә?» Улар әйттеләр: «Һис бер ни юҡ». «Минән йәшермәгеҙ раҫлыҡты, әйтегеҙ. Минән яманлыҡ булмаҫ. Үҙегеҙ шуны белегеҙ: ислам дине хаҡына йәнен фиҙа ҡылыр кеше тип мине».

— Әй хәҙрәт, һинең кеүек кешеләрҙән йәшереп, кемгә әйтәһе булырбыҙ. Хәҡиҡәт һүҙ шулдыр, кем: хәбәр алышып хәл белешкәндәрҙер беҙҙең Ҡүҙәйҙәр Әй буйҙары һәм Урал аръяғы яҡтары вә Нуғай юлдары менән. Яуыздарҙың тәҡәт тотҡоһоҙ яфаларынан ғажиз улмаҡ сәбәпле, һуғыш ҡоралдарын әҙерләп, аттарға атланып, дошманыбыҙҙың өҫтөнә һөжүм ҡылырға.

— Ни ваҡытта?

— Әле ваҡыты билдәле түгел. Вә ләкин һәр кем әҙер тора.

Батырша Ырымбур яғынан, Ҡарғалынан, ҡунаҡҡа килгән бер таныш муллаһы арҡылы ла шул яҡтағы хәлдәр менән ҡыҙыҡһына, башҡорт һәм мишәрҙәрҙең ҡуҙғалырға әҙер тороуҙары хаҡында белешә.

1754 йылдың йәй, көҙ, 1755 йылдың ҡыш көндәрендә Әйҙән, Ҡүҙәй, Уран тарафтарынан Батыршаға кешеләр йыш килеп-китеп йөрөр булалар. Һәр береһе үҙенсә йомош табып, бәғзеләре бер-ике көнлөк, бәғзеләре өс-дүрт көнлөк йыраҡ юлдарҙан да килеп китәләр.

---

[1] Волость мәғәнәһендә.

Шул уҡ ваҡытта мираҫ малы бүлеү, дин эштәре һылтауы менән Батырша ҡайһы саҡ айҙар буйы ил ҡыҙырып ҡайта. Ғәмәлдә халыҡты яуға өндәр һәм күтәрер өсөн йәнен фиҙа ҡылыр бер тынғыһыҙ юламанға әүерелә ул.

Хәл иткес ваҡыттар яҡынлай. Бер заман Батыршаға бер сапҡын башҡорт хат килтереп тапшыра. Һорашыу китә:

— Ҡем булаһың?

— Ҡәлсер иленән Исмәғил атлы.

— Ҡайҙа бараһың?

— Әй иленә, үҙ йомошом менән.

— Был яҙыу кемдән?

— Уҡыһағыҙ, мәғлүм булмаҫмы?

Батырша аҡса менән баҫылған мисәтле хатты асып уҡый. Хаттың эстәлеге алла, дин исеменән халыҡты яуға күтәреүгә өндәүгә, шул яуаплы эште уға тапшырыуға бәйле.

Хат уҡылғас, тағы һорашыу, төпсөнөү башлана:

— Был яҙыуҙан мәглүм булмайҙыр. Һис кеше исеме юҡ.

— Мин яҙыу танымайым. Миңә яҙыу биргән кеше әйтте: «Был яҙыу кемдән икәнен уҡымаҡ илә тиҙ үк төшөнөр».

Бер ни ҡәҙәр ваҡыт уйға ҡала Батырша. Хат бик төплө һәм аҡыллы, уҡымышлы кеше тарафынан яҙылған. Әбделислам ахун остаздан булыуы бик ихтимал. Тик уның ҡулы түгел, ят ҡул. Батырша киҫәк кенә итеп башҡортҡа: «Һин бур икәнһең. Ул ҡараҡтарҙы[1] тотмаҡ кәрәк», — ти. Башҡорт уның аяғына йығылып, инәлгәндәй: «Әүәле нигмәт һиңә, мөбәрәк атыңды, яҡшы урыныңды ишеттем. Хажиҙар ҡәғбәне күрмәгә мохтаж булған кеүек, был йөҙөңдө күрмәгә мохтаж булып, йыраҡ ерҙән шатланып килдем. Ахыр siктә, был яҙыуҙы ҡабул итмәһәң дә, бары миңә рәнйеү ирештермә», — ти. Сапҡындың ҡурҡа төшөүенә Батырша: «Тор, әй һөйөклө, уйын йөҙөнән әйтәмен», — ти ҙә тағы шуны һорай: «Был яҙыу кемдән икәнлеге миңә һануз мәғлүм түгел. Һиңә уны кем бирҙе?»

«Муллабыҙ илә писарыбыҙ Ырымбур тарафына барып йөрөнөләр. Бер-ике мәртәбә йөрөп килгәс, был яҙыуҙы миңә бирҙеләр, һиңә тапшырыу өсөн. Был яҙыу кемдән икәнен әйтмәнеләр. Үҙе уҡығас, тиҙ төшөнөр, тинеләр...»

Батырша башҡортҡа юллыҡ аҡса биреп оҙатып ҡала.

Ошо мөрәжәғәт хатынан һуң Батырша халыҡты яуға күтәрергә саҡырып, үҙенең атаҡлы өндәмәһен яҙа һәм яҡын шәкерттәре аркылы уны, сапҡындар ебәреп, Башҡортостандың һәр тарафына тарата. Батырша Ҡазан губернаһы та-

---

[1] Ул заманда баш күтәрергә өндәүселәрҙе һәм восстаниела ҡатнашыусыларҙы хөкүмәт кешеләре «вор» — «бур» йәки «караҡ» тип йөрөткәндәр.

тарҙары менән, шулай уҡ ҡаҙаҡтар менән ныҡлы бәйләнеш урынлаштыра. Башҡорттар күтәрелешенә уларҙы ла ҡушылырға өндәй, асылда кафырҙарға ҡаршы мосолмандарҙың берҙәм йыһатын — дин һуғышын ойоштормаҡсы. Был идея уның өндәмәһендә ярылып ята. Баш күтәреү ер-һыу кибеп, аттар көрәйеп алған миҙгелгә — июль башына билдәләнә.

Хәҙер инде Батырша ил-халыҡ араһынан ҡайтып кермәй тиерлек: бер айҙа ул Урал аръяғы башҡорттарына барып сыҡһа, икенсе айҙа Ырымбур, Ҡарғалы тирәләрендә йөрөй. Нуғай юлы яҡтарын ҡыҙыра, үҙе етешә алмаған төбәктәргә тоғро шәкерттәрен, сапҡындар ебәрә.

Ләкин яуыз түрәләрҙән ыҙа-яфа сигеүҙән түҙемлектәре тамам төкәнгән халыҡ, Батыршаның өндәмәһендә ҡасан баш күтәрергә тәғәйен көндө көтөп тормаҫтан, стихиялы рәүештә күтәрелеп сыға башлай. Ул ҡуҙғалыш ниндәйҙер йыһат характерында түгел, ә иҙелгән халыҡ массаһының иҙеүселәргә, рус түрәләренә, башҡорт старшиналарына ҡаршы көрәше төҫөн ала. 1755 йылдың 15 майында Нуғай юлының Бөрйән волосы башҡорттары ҡәбәхәтлеге хаттин ашҡан рус түрәһе Брагин тигән бер бәндәне һәм уның ярандарын үлтереп ташлайҙар. Сапсал почта станын туҙҙыралар.

Шул йылдың август айында иһә восстание Бөрйән волосын, Урал аръяғын ҡаплап ала, оҙаҡламай Тамъян, Үҫәргән, Таңғауыр, Ҡыпсаҡ волостарына ла йәйелә. Баш күтәреүселәр Әүжән-Петров, Йылайыр ҡәлғәләренә һөжүм итәләр. Покров заводын ҡыйраталар, Уралдың бер ҡыҫыҡ тау араһында 50 кешелек казак драгундарын ҡырып ташлайҙар. Төньяҡта ғәйнә башҡорттары, мишәрҙәр ҡуҙғала.

Ошолай Башҡортостандың төрлө тарафында баш күтәреүҙәр көҫөк-көҫөк ҡабынып, ҙур ялҡынға әүерелә барғанда, ғәйнә башҡорттары тағы дәррәүерәк ҡуҙғалырға булып, идея етәкселәренең күҙенә һәм һүҙенә ҡарап торғанда, бығаса тынғыһыҙ юламан Батырша ҡапыл баҙап ҡала. Төрлө төбәктәрҙә ҡабынған восстаниеға етәкселек итер һәм уларҙы берҙәм хәрәкәткә әүерелдереп ебәрер урында, үҙен көтөп торған ҡораллы яҡташтары — ғәйнәләрҙе ташлап, урманға ҡасыуҙы хәйерлерәк күрә. Батырҙың бахырға әйләнеүе ошонан башлана булыр.

Хәйер, был хәл иткес киҫкен мәлде, йә яу сабырға, йә боҫоп ҡалырға тейешлектең яманатлы һуңғыһын Батырша әлеге хатында үҙенсә аҡламаҡсы. Йә иһә был батша алдында ярлыҡауҙы һорап, аҡланмаҡтың хәйләле бер әмәлеме икән?

Шулай ҙа киҫкен хәл, ваҡиғалар ағышы барыбер Батырша файҙаһына һөйләмәй буғай. Август аҙағында ғәйнә

башҡорттары Мостай һәм Аҡбаш етәкселегендә баш күтәреп, бер яуыз старшинаны үлтереп ташлайҙар һәм тирәяҡтағы залим түрәләрҙе, батша отрядтарын ҡыйратыр өсөн походҡа йыйыналар. Ләкин ғәйнәләр араһында батша яҡлы бер старшина отряд туплап, баш күтәреүселәргә һөжүм итә, халыҡты ике ярыға бүлә. Ҡапыл баҙап ҡалған халыҡ Батыршаның әмеренә һәм етәкселегенә мохтаж ҡырҡыу мәл етә.

Батыршаның хатына кире ҡайтайыҡ: ул үҙе нисек аңлата һуң быны? Хәл-ваҡиғалар ҡалайға борола хәҙер?

Батырша ғәйнә башҡорттарын һәм мишәрҙәрен баш күтәреүгә әҙерләү һәм уларҙың отрядын үҙенә килтереү өсөн, ике тоғро шәкертен ғәйнәгә ебәрә. Әммә уларҙан байтаҡ ғүмер — ун көн хәбәр-хәтер килмәй тора. Шулай бик борсолоп-хәүефләнеп көткән саҡта, Батыршаға бер сапҡын хат килтереп тапшыра: унда мөртәт старшиналарҙың хаслығы арҡаһында ғәйнәләр араһында халыҡтың ике ярыға айырылыуы һәм Батыршаны ҡулға алырға самалауҙары әйтелә. Уға йә хәҙергә йәшеренеп торорға, йә иһә бер 50—60 кешелек отряд ебәреп, батша яҡлыларҙы туҙҙырырға кәрәклек еткерелә.

«Ул төннө йоҡламадым, — тип яҙа Батырша. — Таң атҡанда күрдем: йортом тирәһе, ауылым тулыһы халыҡ. Йөҙ илле миҡдары кеше ҡораллар берлә хәҙер торалар. Хәүефкә төшдөм: бу ҡәдәр халыҡның эсендә миңә дошманлыҡ итәр кешеләр дә бардыр дип. Мөмкин булмады ул тарлыҡ хәлдә халайыҡларны өндәп, нәсихәтләп, үҙ жаныма алырға. Ахыр, насар улып, бер ходайыма тәүәккәл итеп, жәмәғәтем вә талмидларым (шәкерттәрем) илә алты садаҡ, бер сөнгө ҡоралымыҙны алып, ул халыҡның уртаһындан сығып китдек. Алты саҡрым урманға еткәнсә, сәләмәтлек берлә оҙатдылар. Беҙ урманға кердек, алар ҡайтдылар. Белдем: ул халыҡ араһында беҙгә дошманлар юк икәндер».

Батыршалар урманға инеп киткән юл менән ат эҙенән кискә табан уларға бер нисә кеше яҡынлаша. Башлыҡ ике шәкертен алып уларға ҡаршы сыға. Бер монафиғы, бик ҡаты ҡысҡырынып, мылтыҡтан атырға самалап тоçҡауы була, Батырша уҡ менән атып ебәрә. Ул теге әҙәмдең ҡолаҡ тәңгәленән елкәһен үтә тишеп сыға, ул йөҙ түбән ауа. Ҡалғандары сигенә. Был урманда улар ун көн самаһы торалар. Шул көндәрҙә оло юлдан халыҡтарҙың төркөм-төркөм булып уҙып-китеп йөрөүҙәрен күҙәтәләр. Шул уҡ ваҡытта боласыларҙың тарҡатылыуын, ғәскәрҙәрҙең кемдәрҙелер эҙләүен дә һиҙәләр.

Аҙаҡ Батыршалар, үҙ тирәләрендәге Ҡарыш урманы-

нан бер көнлөк юл китеп, Иҙел урманына керәләр. Унда егерме биш көн йәшеренеп йәшәйҙәр. Урман киҫергә килгән сирмештәр ҡасаҡтарҙы күрһәләр ҙә башта күрмәмешкә һалышалар. Бер мәл улар Батыршалар менән ҡапыл йөҙгә-йөҙ осрашып, был тирәлә батша ғәскәрҙәренең боласыларҙы эҙләгәндәрен хәбәр итәләр һәм уларға йыраҡыраҡ китергә кәңәш бирәләр. Әммә ҡасаҡтар шул урман эсенән фәҡәт ярты көнлөк кенә юл ары китеп туҡталалар һәм, аҙыҡтары бөткәс, урман ситендә утлап йөрөгән бер атты һуйып ашайҙар. Аҙыҡ алып килер өсөн бер нисә юлдаш шәкертен Батырша тыуған яҡтарына ебәрә. Ҡатыны, ике йәш балаһы һәм бер шәкерте менән тороп ҡалған Батыршаларҙы икенсе көндө ҡоралланған егерме һыбайлы сирмеш уратып ала. «Беҙ һеҙҙе бер айҙан бирле урманыбыҙҙа аҫырайбыҙ, һеҙгә һис бер яманлыҡ итмәйенсә, һис бер дошмандарығыҙға мәғлүм итмәйенсә. Ахыр һеҙ үҙегеҙ беҙгә яманлыҡ иттегеҙ: атыбыҙҙы һуйҙығыҙ. Хәҙер ҡурҡабыҙ һеҙҙән, үҙебеҙҙе үлтерерһегеҙ тип. Ҡоралдарығыҙҙы ташлағыҙ, үҙегеҙ китегеҙ», ти был һыбайлылар. Быға ҡаршы Батырша: «Атығыҙҙы һуйғаныбыҙ юҡ, яҡын килмәгеҙ, атырбыҙ», — тип яуап бирә. Батырша үҙҙәрендә булған ҡорал-яраҡтарынан ике уҡтың береһен сирмештәргә тоҫҡап атырға йыйына, сирмештәр ҙә уҡтарын төҙәйҙәр. Тик ике яҡ та баҙмай: сирмештәр, күрәһең, яҙа атыуҙан ҡурҡа, Батырша тегеләрҙең күмәклеген күреп тора.

Һыбайлыларҙан яҙлығырға теләп, Батыршалар урман эсләп бер-ике саҡрым ситкә китәләр, ләкин уларҙан былай ҡотолоу самалылығын һиҙенгән Батырша, «ахыр был мәлғүндәрҙән йәмәғәтемде ҡотҡара алмамдыр, бары үҙ башымды ҡотҡарайым», тип, ҡатынын, ике балаһын ташлап, Яхъя тигән шәкерте менән үҙе ҡасып китә. Ғаиләһе яттар ҡулына эләгә.

Мулла Батырша өсөн бындай яҙмыш барыһы ла хоҙай ҡушҡаны. «Әй йәмәғәттәрем, әй күҙемдең нурҙары, күңелемдең сырурдары, һеҙҙе һәм үҙемде яратҡан бер хоҙайыма тапшырҙым, — ти ул. — Әй илаһым, барса ғаләмдең халҡы вә барса милектең милке, барса бәләнең ниғмәтелер, барса эштең хикмәтелер һин. Миңә бындай бәлә вә ҡазаны, вә бындай хәсрәт вә зарҙы тәҡдир иткәнһең, хоҙайым, барса ниғманға ризамын, хоҙайым».

Яҙмышын шулай хоҙайға тапшырып һәм һәммәһенә разый булып, Батырша шәкерте Яхъя менән Ҡазан губернаһы тарафына юл тота, мәҙрәсә араһында йөрөп, ҡыш уҙҙырырға ниәтләнә. Әммә ул тирәгә барып еткәс, шул мәғлүм була: хәҙер мәҙрәсәләрҙә ят кешеләргә тороу һис мөмкин түгел икән, һәр ерҙә тикшереү, эҙләү-эҙәрләү бара.

Аптырауға ҡалған был хоҙай бәндәләренең береһе — шәкерте: «Әй хәҙрәт, алланың яҙмышылыр, барыр еремеҙ юҡтыр, урманға кереп, ҡар өҫтөнә ятып, асығып, туңып үләйек», — ти. «Алай ҡылмайыҡ, — ти был юлы Батырша. — Үҙебеҙҙе үҙебеҙ үлтермәк шәриғәттә хәрәмдер. Терс йәндә өмөт барҙыр. Нисек тә ҡышлайыҡ әле».

Шулай был ике ҡасҡы бәндә, нисек тә ҡыш ҡышламаҡ булып, Ҡазан юлының старшина Надир Уразмәтов командаһына ҡараған ауылдарҙа, шәкертбеҙ тип, өйҙән-өйгә инеп, хәйер һорашып бер аҙ аҙыҡ йыялар. Аҙаҡ, төндә Иҫке ауылдың мәсетенә инеп, соланының иҙән таҡтаһын ҡайырып асып, баҙында үҙҙәренә ятып торорлоҡ соҡор ҡаҙыйҙар. Инеп-сыҡмалы ғына бер кескәй тишек ҡалдырып, өҫтөн ябалар. Шулай мәсет соланының баҙында ҡаҙылған япма соҡорҙа хәйерҙән төшкән аҙыҡ менән ризыҡланып, ҡар ашап, мең михнәт менән ҡыш уҙғаралар. Ҡышын тәҡәт тотҡоһоҙ һыуыҡтан, аслыҡтан, соҡорҙағы ҡәберҙәй ҡараңғылыҡ һәм тарлыҡтан ыҙа сиккән был бәндәләр ҡот осҡос өрәк ҡиәфәтенә инеп, ҡоро һөйәккә ҡалалар.

Көндәр йылыта башлағас, был баҙҙан сығып, урманға йәшеренә былар. Аслыҡтан тамам шешенеп, йөрөр алмаҫ хәлгә киләләр. Тағы хәйер һорашып, көс-хәл менән йән аҫрайҙар.

Бер аҙҙан әҙәм рәүешенә инә төшкәс, юлдашым мулла Яхъя менән бик оҙаҡ кәңәшләшкәндән һуң, ярлыҡау һорап, батшаның үҙенә барырға ҡарар ҡылдыҡ, ти Батырша. Шул маҡсаттарына юлланмаҡ булып, бер әрәмәгә йәшереп ҡуйған аҙыҡ-нәфәҡәләрен алырға тип барғанда, алдағы Яхъяны тотмаҡ булып ниндәйҙер ят кешеләр ғауғалап урата башламаһынмы. Батырша һуңғы юлдашын яттар ҡулына ҡалдырып, үҙе ҡасып китә.

Уңмаған юл уны тыуған яҡтарына ҡайыра хәҙер. Хатында яҙғанса, ниәте Сөләймән старшинаға барып, уның менән Өфө ҡәлғәһенә, унан Ырымбурға сығыу, батша хәҙрәттәренә ирешмәккә юл тотоу...

Шулай итеп, Батырша Сөләймән старшинаның Әҙекәй ауылына йүнәлә. Башта ул-был хәлде белешер өсөн бер таныш кешеһенең тәҙрәһен шаҡый, хужаны һораша. Хужаның өйҙә юҡлығын, яланда ҡунып, бесән сабып ятҡанлығын әйтә ҡатын кеше. Ҡис ҡайтырға тейеш икән. Хужабикә юлсының кемлеген һораһа ла, ул яуап бирмәй генә китеп бара. Йәшенә-боҫа мәсеткә кереп, түбәһендә ятып йоҡлай. Бер килке кискә табан шау-шыуға уянып китһә, ни күҙе менән күрһен, мәсет тирәләй туп-тулы халыҡ. Аңарсы булмай, берәүһе түбә таҡтаһын асып, Батыршаны

күреп, «бур бында», тип һөрән һала. Уны-быны уйлағансы, Батырша, ялан аяҡ көйө, түбәнән һикереп төшә һәм тәҙрә аша сығып йүгерә. Уны егермеләп кеше ҡыуа сыға, етә алмағас, артынан һыбай төшәләр. Ахыр сиктә Батырша тотола (был 1756 йылдың 8 авгусы була).

Сөләймән старшинаға алып килгәс, уның кем икәнен танийҙар. Бәғзеләре: «хәҙрәтебеҙ, динебеҙҙең олуғы, күңелләремеҙ сырағы һин икәнһең. Белмәнек, әй хоҙай тәҡдире, гонаһтарыбыҙ шомлоғо», — тип хәсрәтләнә. Быға Батырша: «Хоҙайымдың хөкөмөнә вә ҡиғнәһенә разый улып, был рәүешле мәхбүс икәс, хәсрәтләнмәймен. Бәс, һеҙҙең хоҡуғығыҙға мең һум ярлыҡаш[1] һаҡланып, моратығыҙ хасил булған икән, ни өсөн хәсрәттәр йыяһығыҙ, ҡоро тел хәсрәте», — ти. Сөләймән старшинаның аңлатыуынса, ауылдарында бер бур төндә, бер нисә умартаны ватып, бал урлап киткән икән, шуны эҙләгән ваҡытта, хоҙай шомлоғона ҡаршы, хәҙрәтебеҙ килеп юлыҡҡан.

Батырша үҙенең батшаға әйтергә тейешле һүҙе һәм йомошо булып, уны һис нисек тә етештерер әмәлен тапмағас, Сөләймән старшинаға үҙ ихтыяры менән килгәнен һәм уны Өфө ҡәлғәһенә шулай тип хәбәр итеүен үтенә. «Һеҙҙе тотҡан кешеләргә мең һум ярлыҡаш тәсдиҡ ҡылынған. Был ҡәҙәр һеҙҙең батшаға кәрәклегегеҙ барлығы берлә һәм был ҡәҙәр күп халайыҡтар араһында тотолмағығыҙ фаш иткәс, мин һеҙҙе йәшереп ҡалмаҡ мөмкин түгел. Әлбиттә, һеҙҙе Уфаға илтермен. Унда үҙ һүҙҙәрегеҙҙе үҙегеҙ камилыраҡ һөйләп мәғлүм итерһегеҙ», — ти старшина.

Батырша бик ҡаты һаҡ аҫтында Өфөгә оҙатыла. Өфөнән — Ырымбурға. Губернатор Неплюев ҡаршыһына баҫа. Ул уны, Сенат ҡарары буйынса, Петербургка оҙата. Бығауланған тотҡондоң юлы Һамар—Арзамас—Муром—Владимир һәм Мәскәү аша Петербургка йүнәлә. Уны иллегә яҡын драгун һәм һыбайлы казактар һаҡлап бара.

Хатында яҙыуға ҡарағанда, Батырша былай бығаулы тотҡон көйө түгел, үҙ ихтыяры менән барырға ниәтләп, шул ҡәҙәре һаҡ аҫтынан ҡасмаҡ та була. Нисектер, сүкешбысаҡ табып, ун ике көн эсендә һаҡлыҡ менән бығауҙарын игәп аса, арбанан төшөп ҡаса, ләкин тотола.

Ғәжәп тә түгел, бер әҙәм ҡотола алмаҫ даръя уртаһындағы утрау-таш төрмәнән ҡасырға баҙнат итер тотҡондоң юлда уҡ ҡасырға йыйыныуы бик мөмкин.

«Ҡасдым, бер ер ҡәдәре барған ирдем, алдыма бер юлы йылға килде. Ғоман итдем: төшемдә күрдем йылға бу ил-

[1] Награда — Батыршаны тотҡан кешегә батша хөкүмәте мең һум аҡса вәғәҙә иткән.

меш ҡасмаҡ мөмкин дүгелдер дип. Артымдан килә торған кешеләрне көтөп алдым. Нисә фекерләр вә тәбирләр телә-һәм дә, үҙ фекерем вә тәбиремне ҡыла алмадым. Хаҡ тәғәлә хәзрәтенең тәҡдиренсә ҡалдым», — тип тамамлай Батырша башынан үткән был хәлдәрен.

Батыршаның батшаға яҙған хатында үҙ башынан кискән хәлдәрҙе «бәян ҡылған» — һөйләп сыҡҡан ваҡиғалары, нигеҙҙә, ошоларҙан ғибарәт. Ләкин был табаҡ-табаҡ ғәйәт оло яҙманың беҙҙең тарафтан ноҡсан ғына теҙеп сыҡҡан арҡа һөйәге, хәл-ваҡиғаларҙың фабулаһы ғына әле. Ул яҙма өсөн, ысын художестволы әҫәр төҫлө, хәл-ваҡиғаларҙы йыш ҡына төпсөп, тәфсилләп күрһәтеү, новелла һымаҡ кисәк-кисәк күренештәр индереп ебәреү, халыҡ һөйләшен, тел үҙенсәлектәрен оҫта файҙаланыу характерлы күренеш. Был хаттың уҡымышлы Батыршаға хас үҙ стиле, ҡәләме бар. Былар ул яҙманы заманының ҡиммәтле социаль-тарихи, тел-культура ҡомартҡыһы ғына түгел, ә әҙәби әҫәр итеп таныта алыр сифаттар.

Икенсенән, ул яҙманың XVIII быуат уртаһындағы башҡорт йәмғиәте фекеренең бер характерлы ағын күрһәткән ҙур социаль-философик трактат икәнен дә оноторға ярамай. Автор үҙенең башынан кискән ваҡиғалар ағышын заманының оло йәки кесе тарихи хәлдәре, социаль мәсьәләләр менән үреп алып бара, заманаһына бик киң һәм күп урында бик төплө социаль-политик баһа бирә, дини-философик мәсьәләләргә инеп китә, этик-мораль проблемалар күтәрә. Батшанан ғәҙеллек һәм мәрхәмәт эстәп, дини, донъяуи, әхлаҡи, хоҡуҡ һ. б. мәсьәләрҙе ҡуҙғата. Ул яҙмалағы мәсьәләләрҙең был яҡтары — тарихсыларыбыҙҙың, философтарҙың, социологтарҙың, хатта экономистарҙың махсус тикшеренеүҙәренә лайыҡ һәр береһе үҙе бер өлкә.

Беҙҙе, әҙәбиәтсене, иң беренсе нәүбәттә ҡыҙыҡтырғаны — был яҙманың әҙәби әҫәргә хас художество үҙенсәлеге, тел-стиль хосусиәттәре, унда сағылған тарихи ысынбарлыҡ.

Ҡемгә нисектер, Батырша хатындағы хәл-ваҡиғаларҙы юғарылағыса ноҡсан ғына һөйләп үтеү ҙә ул әҫәрҙең ғибрәтле һәм мауыҡтырғыс булырын күпмелер тойҙорта һымаҡ. Элекке замандың тарихсыһы С. М. Соловьев — «История России» тигән күп томлыҡ китаптың авторы — Батыршаның был хатын, «үҙ мажараларының ҡыҙыҡлы хикәйәһе», тип юҡҡа ғына атамай буғай.

«Буранбай» йырындағыса әйткәндә, табаҡ та ғына табаҡ был хаттың үҙен уҡыһаң, зар иларлыҡ һәм ғибрәт алырлыҡ, әҫәрләндергес әҫәр ул. Унда XVIII быуат уртаһындағы Башҡортостандың тарихы ла, халыҡтың көнкү-

реше, ыҙан-йолалары ла, уй һәм теләктәре лә, ыҙа һәм яфалары ла йәнле итеп тасуир ителгән. Шул яҡтан ул хат, Башҡортостандың шул замандағы тарихын яҙғанда, тарихсыларға быға мөһим һәм төп сығанаҡ — документ булғандай, бүтән ғалимдар өсөн дә шул бәрәбәрҙә. Тел-әҙәби материал булараҡ — бигерәк тә. Тел һәм әҙәбиәтебеҙ тарихындағы хәҙергә билдәле иң ҙур һәм мөһим ҡомартҡыларҙың береһелер әле ул.

Беҙ юғарыла Батырша хатының фабулаһын һөйләп үткәндә, аралаш аңлатмалар биргеләп барыуҙан тыш, авторҙың хикәйәләү һөрөлөшөн, ҡайһы саҡ тел-стиль төҫмөрҙәрен күпмелер һаҡларға тырыштыҡ; күргәҙмәлелек өсөн хатта ара-тирә цитаталар ҙа индергеләп ебәрҙек. Беҙҙең эште еңеләйтеүгә мәғлүм бер сара улар. Шуға күрә беҙгә хәҙер ҡайһы бер өҫтәмәләр, айырым үрнәктәр менән ҡәнәғәтләнгәндә лә ярар төҫлө.

Бына бер өлгө.

«Андан соң ҡыш көнөндә Өфө ҡәлғәсендән указ ҡеүәте берлә теләп, мине һәм Ирәкте иленең Шәриф старшинаны Уран иленә Уртауыл дигән ауылға алдырдылар. Султуҡ старшинаның теркә малын китап хөкөмө берлә мираҫ эйәләренең арасында өләшер өчен. Йортымыздан өч көнлек ер булыр. Ул Уран илендә алты-ете көн тордым, теркә эшне тикшереп вә һәм мәжлесләрдә йөрөп. Анда йомошло вә йомошсыз күп кешеләр жыелдылар. Ғалимләр мәжлесен күреп, нәсихәтләр вә ғибрәтләр алыр өчен һәм шараблар, баллар эчеп мәж улып, шадлыҡлар ҡыйлып бер ничә сүзләр сүзләштеләр. Әйтделәр: «Безнең урман тарафлы халайыҡларымыз — башҡортларымыз вә ғайреләремез ғәйәт дә пәһлеүәндәрдер. Вә һәм уҡ атарға мәргәнләрдер. Ҡырҡар-иллешәр тинлек санай йәйәләремез ялан башкортларының унар-егермешәр сумлык әҙернә йәйәләреннән артыҡтыр. Андай әҙернә йәйә эсе көндө егерме-утыз мәртәбәдән артыҡ атырга ярамайдыр. Безнеке ни кадәр эсе һауа көн булса да атышкан сайын ҡеүәтләнәдер. Аткан уҡларымыз һәр киз кейеккә туҡтамайдыр. Ботаҡҡа ҡунған тейенне, сусарны атҡанда, ботағы берлә өзөп төшөрәдер. Вә һәм саңғы берлә йөрөргә шул кадәр осталар, урман эчендә качкан кейек ҡотолмайдыр. Алдына арҡылы ятҡан ат бейеклеге ағачларны аша сикереп чығалар. Юлдан елеүче ат ҡардан елгән саңғылы кешеләремезгә етмәйдер. Вә һәм йөрәклелекдә шул ҡадәр. Узған йылдар мәғркәсендә Ғәйнә иле уртасына меңләгән урыс булҡы килеп, арбадан ҡәлғә сукуп ятды [1] ғәйнәне чабар өчен. Шул ваҡытта безнең ғәй-

---

[1] Ул 1735—1740 йылдарҙа булған хәл.

нәләр түрт йөз ҡадәре кеше уҡ-сөнгө берлә урысның (батша ғәскәрҙәренең — F. X.) өстенә чабып, ҡәлғәсен алып, тамам ҡырдылар вә тупларны ҡулға төшерделәр. Ярашыу булғандан соң тупларны килеп алдылар. Урман халҡы пәһлеүәнлеккә ялан халҡы булмас имде. Бер ходайымыздан күз дотамыз, ни көнләргә вә ни хәлләргә уғратыр диде. Вә моңа охшашынса сүзләр сөйләделәр.»

Был үрнәктәге ваҡиғалар халыҡтың һөйләүе рәүешендә бирелһә лә, шаҡтай йәнле тасуирлыҡты, шул замандың халыҡсан тел-стиль үҙенсәлектәрен һәм яҙма телдең стиль һыҙаттарын асыҡ тойорға мөмкин унда. Батырша стиленә хас инверсиялылыҡ бында ла көслө.

Бына тағы халыҡ фекерҙәре, халыҡ ҡарашы: «Бу падишаһымызның заманында тәҡәт тотарлыҡымыз ҡалмады. Бәғзесе әйтде: үз риғәйәсе берлә уйнаған, үҙ ҡулы астына золымлыҡ ҡылған йорт уңмас булыр, халыҡ теленә төшкән тик булмас. Бу усаллыҡларның, ахыр, бер ниһайәсе бардыр дию. Бәғзесе әйтде: залимлыҡ түрәләремездә, янаралларымыздадыр... Падшаһның үз жанубындан һич дә золымлыҡ хәбәре ишетелмәйдер... Бәғзесе әйтде: падишаһ ғәделдер, вә ләкин үз ҡуйынындан китмәгән, безгә килеп етмәгән ғаделлектән безгә ни файда? Һәр кемдең ҡулы тейгән ергә күзе теймәсме булыр. Күрәсез кем, безнең ҡулымыз ҡысҡадыр, йорт-кәртәмездән тышҡа узмайдыр. Йортымыз эчендә бер ҡузының аягын сындырған күрсәк, аны бәйлимез. Шуның тик (кеүек) без падишаһымызның ҡул астындабыз. Әгәр хәҡиҡәт падишаһлыҡ тикшереүе иллә тикшерелсә, күзе етмәсме булыр иде. Йортымыздан узмаған ҡысҡа ҡулымыз берлә түрәләр, янараллар ашасыннан эшемезне ҡачан шаһ хозурына етештерә алырмыз диде».

Батыршаның был хатында иһә үҙенең батша яҡлы Яныш старшина менән әңгәмәләшкән, батшалыҡҡа ике төрлө мөнәсәбәтте күрһәткән бәхәсе, һүҙ алыш өлөштәре — үҙе бер драматик картина, пьесаларға хас киҫкен диалог теҙмәһе. Ә Яныш старшинаға тулы характеристика — үҙе бер әҙәби портрет. Ә уның менән булыр йәшерен аҡса мажаралары — үткер новелла.

Батырша яуыз рус, башҡорт, мишәр түрәләренең халыҡҡа күрһәткән золом-яфаларын аяныс һөйләй: «Бындағы түрәләр кәрәк залим, кәрәк ғадел улсыннар, аларның хөкүме бозылмайдыр, — тип яҙа ул. — Угрыны туғры дисәләр, туғры буладыр, уғры дисәләр, угры буладыр... Түрәләр андан аҡчалар алдылар. Байларның малы төкәнде, ярлылар бурычлы булдылар. Көндә бөтәр эшне айға суздылар, айда бөтәр эшне йылға суздылар...

Халайыҡларға жафалар күргәзделәр, ҡыйнамаҡ, суҡмаҡ, алым алмаҡ берлә, малларны уғрыламаҡ берлә, вә һәм кешеләрне үлтерелгән берлә. Яныш командасында Туҡтар ауылының Туҡтарны указдан артыҡны бирмәгән өчен бер башлыҡ ағыулы шараб эчереп үлтерде. Сөләймән командасында Субай ауылының бер кешесен ылау озата барғанда юлда драгунлар ҡыйнап үлтергәндәр». Батырша Өфөнән Ырымбурға барышлай юлда үҙе күргән ике хәлде — ылаулы бер башҡортто сотниктар нисек ҡамсылап һәм атын имгәтеп китеүҙәрен, Ҡарғалы янында бер татарға бәйләнеүҙәрен — әсенеп тасуирлай.

Ана шундай золом-яфаларға, мәсхәрәләүҙәргә бер сик булырмы тип, халыҡтың тын алышын белеп, кәрәк мәлендә уға яу сабырға әҙер торорға өндәп, ил-халыҡ араһында йөрөгән юламан Батырша ҡайһы бер әңгәмәләрен хатына һүҙмә-һүҙ күсерә. Бына бер миҫал.

«Юлда яҡшы кейенгән, икесе ҡарт, икесе урта йәштәге кеше сәләм биреп күрешделәр. ...Ҡем буласың? — диделәр. Мин әйтдем: «Ил ҡыдырып йөрүче[1]... Fәли дигән булырмын» дидем. «Ҡайсы ғалимның мәдрәсәсендә тороп уҡыдыгыз» диделәр. «Фәлән-фәлән мәдрәсәдә уҡыдым» дидем. «Мулла Баһадир шаһ (Батырша) һәм Мортаза ахун хуш торалармы» диделәр. Мин әйтдем: «Бик хуш торалар, үзегез күргән рәүешчә» дидем. «Без икесен дә күрмеш юҡ, ишеткәнчә беләмез» диделәр. Атларындан төштеләр, без дә тәһарәтләнеп, намаз ҡылайыҡ, дип. Мин сорадым: «Үзегез ҡайсы иләүләрсез, ни йомышларга йөрисез» дидем. «Бөржән халкы буламыз. Старшина эшен тикшереп йөримез» диделәр. Мин әйтдем: «Сезнең Бөржән халыклары босып бөткән, дип ишетәмез. Инде сезләр босып барасызмы?» дидем. «Ворлар босып, берчә халыҡ ҡалдыҡ» диделәр. Мин әйттем: «ни өчен «ворлар» дип әйтәсез. Ни нәрсәләрегезне уғырап китделәр» дидем. «Һич нәрсәмез уғрамадылар... «Падишаһка ворлыҡ итеп, әмериндин баш тартып китделәр» диделәр. Мин әйтдем: «Падишаһның ҡайсы әмерендән баш тартып, вә ни ворлыҡ итеп китделәр» дидем. «Завод башлығын юлдашлары берлә үлтереп китделәр», диделәр. «Мин ни өчен үлтерделәр» дидем. «Ул завод башлыгы бик усал вә залим иде... Ҡурҡытып, талап та алдылар, еремездән, суымыздан ирексез итделәр. Хатта ки хатынларымыз вә ҡызларымызны күземез алдында көчләп зина итделәр. Шундай жафаларға чыдасынлармы?.. Үлем хаҡ; имди тәҡәтемез юҡдыр дип, ул эшне ҡылдылар» диделәр. Мин әйт-

---

[1] Былай күп нөктә ҡуйып киткән урындар хаттың төп нөсхәһендә юйылган йә йыртылған урындарҙы аңлата.

дем: «Падишаһ ул завод башлығына шундай эшләр эшләмәккә әмер иткәнме? Ул башҡортарыңыз падишаһның шундай әмерендән баш тартдыларма? Сез ҡалған башҡортлар падишаһығызның яуыз урысларындан урдырырмысыз?» дидем. Туктадылар, дәшмәк булмадылар.

«Саҡалларыңыз ағарган, сүрәтләреңез хуш, ғаҡылларыңыз һануз ағармаған вә сүзләреғез нәхешдер... Чын сүзләреңезне йәшерәсез. Мосолман мосолманның ярдәмчеседер. Мине үзегез дип белегез» дидем. «Әй мулла Ғәли дус, рас әйтәсең: сүзләргә базмайсыз... Безнең тарафларымыз арзу ҡылып торалар, түрт юл халҡы бер юлы хәрәкәтләннәйек, дип... Ничә мәртәбә халҡымыз мирзаға[1] бардылар, ничә мәртәбә янаралға бардылар. Ул мәлғүн завод башлығының жәфасы сәғәтендән һич файда табылмады. Ҡачан файда табылыр, алар үзләре Ырымбурға яҡын халайыкларны халыҡдан айыра үз хезмәтләре илә йотатдылар. Безләр вә халайыҡлар берлә бергә хәрәкәтләнәйек, дип торамыз ирде. Вә ләкин чыдарлыҡ мөмкин булмады, бәлкем, ярым көн ҡәдәре. Сабыр итмәк тәҡәтемез ҡалмады... Аталарымыз-бабаларымыз биләй торған ожмахтай хуш ерләремезне, суларымызны ташлап китмәбез» диделәр. Мин әйтдем: «Бу сүзләреңез хаҡдыр...»

Бөрйән волосы башҡорттарының 1755 йылдың 15 майында Талҡаç күле буйында яуыз бер түрә Брагинды һәм уның ярандарын үлтереп ташлау менән башланып киткән восстаниеға бәйле был әңгәмәлә юлсыларҙың һаҡсыллығы ла, сәфәрсенең кемлеген белгәс, тура-хаҡ һүҙҙәре лә, Батыршаның юлсыларҙың телдәрен астыра алыуы ла бик оçта һәм ҡыйыу еткерелгән. Бында Батыршаның кеше күңеленә юл табыр һәләте генә түгел, шуны теркәп ҡуйыр ҡеүәһе лә айырым-асыҡ.

Әлеге әңгәмәлә яманлап телгә алынған яуыз Ҡотломбәт мырҙа Тевкилевтең (Тәфтиләүҙең) ҡылығын һәм халыҡтың уға баһаһын Батырша батшаға яҙған хатының икенсе бер урынында сәнғәтсә үткер итеп биреү оçталығын күрһәтә:

«Ҡотломбәт мирзаның белдекмез заманындан бире һәр йылда ничә мәртәбәләр антын ишетәмез. — Ырымбур губернасы халайыҡларына падишаһның күп мәрхәмәтләре вә күп рәхимле указлары бардыр дип. Ул ялганчы ҡарт туңғыз, ялғанчы Ҡотломбәтнең сүзенә инанып ҡаһ ваҡытда аруза да ҡыламыз шаид. Без бәндәләрнең бичаралыҡ хәлләрен падишаһымыз хәзрәтенә иғлам ҡылынып, пади-

---

[1] Һүҙ Ҡотломөхәммәт (суҡынғандан һуң Алексей Иванович) Тевкилев тураһында бара.

шаһымыз жанубында безләргә мәрхәмәтләр ирешеп, ҡәдимге гәһедемезчә дин вә донъя көтөшләрмездә иманда вә сәләмәтдә улырмыз дию. Хәл бу кем бүгенәчә өстемезә бер ҡәтрә мәрхәмәт тамчысы таммыш юҡдыр. Бәлкем, көндән көн ҡәһәр вә ләғнәт яғмурындан хали улмаймыз. Безнең хәлемез шул миҫлелер: ҡиәмәт көнө тамуғ әһле күрерләр һауа йөҙөндә бер ҡара болот. Арзу ҡылырлар: өстемезгә яғмур яға, утымызны сүндерә, сусағанымызны рәфиғ идәмез дип. Тора торғач ул ҡара болотдан таш яға башлар. Аңларның ғазабының өстөнә ғазап артыр».

Дини легенда Ҡотломбәт мырҙаның ике йөҙлөлөгөнә, көткәндең киреһен эшләүенә ҡеүәт бында.

Болала ғәйепле эштәре өсөн ярлыҡауҙы һорап батшаға яҙған был үтенес хатында Батырша «ғиззәтле вә дәүләтле падишаһ»ты иң ғәҙел һәм мәрхәмәтле олуғ зат итеп күрһәтергә һәм күрергә тырышҡан сүрәттә лә, уның рәнйетелгән һәм ғазапланған күңеленән, ғисьянсы йөрәгенән сыҡҡан һүҙҙәренән, уларҙы күпме генә тыймаһын, барыбер йә бәғзеләр һүҙе итеп, йә кинәйә, ишара менән батшаның үҙенә лә тел тейә (юғарылағы бер үрнәкте генә иҫкә алығыҙ: «Падишаһ ғәделдер, вә ләкин үҙ ҡуйынындан китмәгән, беҙгә килеп етмәгән ғәделлектән беҙгә ни файда...»).

Батыршаның был табаҡ-табаҡ хатының башынан аҙағынаса лейтмотив булып уҙған бер идея бар. Ул халыҡтың ыҙа-зарын, түрәләргә шикәйәтен, үҙ теләктәрен аҡ батшаға еткереү ниәте. Ләкин уға һис әмәл табырлыҡ түгел: юлда мең-мең кәртәләр.

Ҡөнсығыш хакимдары шикелле, был хәҡиҡәтте Батырша әкиәт-легенда менән хикмәтләп нығытмаҡсы. Ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән үтә ныҡ сыбарланып, төрки теле хәҙерге уҡыусыға аңлашылып етмәҫ был әкиәт-легенданың үрнәген телселәр ҡарамағына ҡалдырып, уның эстәлеген һәм айышын ғына атап үтәбеҙ: «Һәр бер затлы әйбер ни менәндер һаҡлана булыр. Гөл шаһы розаның һаҡсыһы сәнскелер, мәмерйәләге хазина һаҡсыһы аждаһалыр. Шуның шикелле падишаһтарҙа үҙ зиннәтле һарайҙарында ситяттарҙан һаҡлана булыр. Зөбәржәт диңгеҙ төбөндә, әбелхаят — тереклек һыуы — зөлмәттә икән, һуңғыһының ғиззәт вә шәрәфәт [1] баһаһы бөтә донъя хазинаһының мең баһаһына тиң. Падишаһтар әбелхаят баһаһы миҫалылыр. Хәҡиҡәт тереклек шишмәһе икән, падишаһтар — тереклек шишмәһендәй хәҡиҡәт әйәһе. Ә мәрхмәтле вәзирҙәре һәм наибтары [2] әбелхаятҡа ҡойор ваҡ шишмәләр бәрәбәрендә, йәғни

[1] Шәрәфәт — хөрмәт, ҡәҙер.
[2] Наибтары — ярҙамсылары.

хәҡиҡәт шишмәһен ҡеүәтләндерер заттар, ә залимдар ул шишмәгә үткәрмәҫ зөлмәт миҫалылыр. Падишаһтар, бәлкем, тағы шәрәфәтле вә мәрхәмәтлерәктер. Шуға уларға ирешер юлда маниғ-кәртәләр ҙә юғарыраҡ һәм нығыраҡтыр. Уларҙы иҫ киткес ныҡышмалылыҡ вә ғәйрәт менән генә йырып, йә аша атлап булыуы ихтимал. Ә мин, ғөрбәтлектә[1] йөрөгән бер бәндә, залимдар зөлмәтен, маниғ-кәртәләрен үтә киҫеп, ул хәҡиҡәт-ғәҙәләт шишмәләренә етешеп һыуһынымды ҡандыра алырмынмы? Бер әмәлен тапҡанда, гонаһ карабыма ултырып ,диңгеҙҙәр кисеп, маниғтар емереп, олуғ падишаһыма ирешһәм икән».

Әммә ниндәй юлын, әмәлен тапмаҡ кәрәк?

«Һанузда падишаһ хәзрәтләренә барып, зарыйлыҡ ҡылып, мәрхәмәтләр, ғәдел вәдадлар[2] теләр ирдек, вә ләкин ул эш һәм мөмкин дөгүл. Аның өчен кем ул рәхимсез, залим старшина вә түрәләр беҙләрне ҡачан ебәрсенләр, үзләренең эшләрен ҡачан туздырсынлар. Әгәрчә киңәшеп падишаһ хәзрәтләренә мәрхәмәт теләр өчен барырға кеше йөрөтсәк дә, бындағы залим старшина вә түрәләр безләрне ворлыҡҡа киңәшкән ворлар дин, калудник итеп, безләрне ворлар нәфренә[3] ссылкаға ебәрерләр. Анда безнең бу хәлләремезне кем тикшерер вә туғрылығымызны кем белер, сүземезгә кем инаныр».

Баш күтәреүҙәр баҫтырылғас, күп уйлағандан һуң, Батырша үҙе батшаға юл тотмаҡсы. Был юлы инде халыҡтарҙың зарын, теләктәрен еткереү менән бергә үҙенең балалағы гонаһтары өсөн ярлыҡау ҙа үтенмәксе. Тотолғандан аҙаҡ ул бер үк һүҙҙе ҡабатлай: «Падишаһ хәҙрәттәренә еткерәһе кәрәкле һүҙҙәрем, йомошом бар».

Тағы шуныһы бик характерлы: Батыршаның Ырымбурҙа һәм Мәскәүҙә, аҙаҡ Петербургта һорау алыу барғанда, ул, «падишаһтан башҡа бер кемгә лә яуап бирмәйем, падишаһтың үҙенә генә кәрәкле һүҙҙәрем, серем бар» тип яуаплай. Падишаһ боласыны ҡабул итмәй, шуға күрә, үҙ «серҙәрен» хат итеп яҙһын тигәс, Батырша обер-секретарға уның хатын батшаға тапшырырға ант иттереп, ҡулына ҡәләм ала.

Шулай итеп, анттар әйтелһә лә, олуғ адресатына барып етмәгән әлеге табаҡ-табаҡ хаттар барлыҡҡа килә. Иҫке төрки телендә яҙылған был хаттың ҡараламалары Сенат

[1] Ғ ө р б ә т л е к — ситтә ҡыуылып, ҡасып йөрөү.
[2] В ә д а д — яҡшылыҡ, дуҫлыҡ.
[3] Н ә ф р е н ә — ләғнәт.

Тайная канцелярия түрәләре ҡулына үтеп, шулар өсөн рус-саға тәржемә ителеп, архивта беҙҙең көндәргәсә һаҡланып килә. Ул хаттың тәржемәләре аҙаҡ тарихи документ рәүешендә рус тарихсыларының китаптарына инә, мөһим сығанаҡ булып хеҙмәт итә.

Теге башҡорт ағайы тапшырған хатты уҡығандан һуң яҙылған өндәмә, ысындан да, үҙ заманының тәзкир вә тәхрифнамәһе — официаль бер ҡағыҙы булып, халыҡты батшалыҡҡа ҡаршы баш күтәрергә саҡырған үткер өгөт һәм ҡыҙҙырмаҡ яҙма була. Ул өндәмә бер нөсхәһендә һәм руссаға тәржемәһендә һаҡланып, шулай уҡ беҙҙең көндәргә килеп еткән. Ул яҙма үҙе махсус тикшереүҙе һорай.

Баш күтәреүҙә ғәйепле эштәрен аҡлап һәм үҙен яҡлап, батшанан ярлыҡау үтенеп яҙған хатында, тәбиғи, түбәнселекле дипломатия теле, үткер хәл-ваҡиғаларҙы йомшартыу, ҡайһы берҙәрен йомоп ҡалдырыу тенденцияһы көслө, әлбиттә. Ләкин ул яҙма, ҡабатлап әйтәбеҙ, шуларға ҡарамаҫтан да, барыбер үҙ ҡиммәтен юғалтырлыҡ түгел.

Урал-Иҙел буйҙарына мәшһүр мулла булып танылған, ахун дәрәжәһенә күтәрелгән, ҡөрьәнде яттан белгән һәм һәр сүрәһен, аятын ентекле тәфсилләй, шәрехләй алған, ислам дине өсөн йәнен фиҙа итергә әҙер Батырша тотҡон булып Петербургҡа барып юлыҡҡас, тарихсылар яҙыуынса, тағы бер әкәмәт ғилләә сығара. Ул Петербургтың атаҡлы бер побы менән осрашып, христиан дине менән ныҡлап танышмаҡсы була. Әгәр ул дин ислам диненә ҡарағанда өҫтөнөрәк икән, уйы — шул дингә сығып, христиан булып үлеү. Уның теләген үтәп, Петропавел соборының побы менән таныштыралар һәм уларҙың дин хаҡында бик оҙаҡ әңгәмәләшкәне, бәхәсләшкәне мәғлүм. Ҡайһыһы ышаныслыраҡ дәлилләп, кемдең фекере өҫтөнөрәк сыҡҡандыр, уныһы билдәле түгел; әммә уҡымышлы Батыршаның был дини бәхәсе, үҙен аҡлатырға һәм ғүмерен һуҙырға ниәтләгән бер хәйләле ахырғы сараһы булыу ғына ихтимал.

Тағы шуныһы ғибрәтле: нисек кенә булһа ла, батшаға халыҡтың зарын еткерергә йәки үҙен күреп һөйләшергә ынтылған Батырша мораҙына ирешә алмайынса, Петербург янында — Шлиссельбург ҡолғаһендә таш төрмә эсендә алышта һәләк булып ҡалһа, уның тотолоуына сәбәпсе Сөләймән старшина ошаҡлар өсөн батшаны күреү «бәхетенә» ирешә. Ләкин оҙон юлдан ауырып, ул да Петербургта үлеп ҡала. Уға Батыршаны тотҡанға ярлыҡаш итеп бирелгән затлы бүләктәре ямапатлы аманат булып улына ҡайта, ә Батыршаның аманаты — быуаттар аша беҙгә килеп еткән хаты.

*1970*

## ҺУҢҒЫ ТАРПАН

Тыуған ауылыма бер ҡайтҡанда, ҡасандыр һабан һөрөп йөрөгән саптар бейәне күреп, яманһыулап ҡалғаным бар. Заманында колхоздың ауыр йөгөн һөйрәшкән хайуан инде ҡартайып яраҡһыҙға сығып, тамам өшәнеп бөткән. Оса һөйәктәре һерәйеп ҡатҡан, күпме ауыр йөктән, күпме ҡолон аҫрауҙан ҡорһағы ике яҡҡа бүлтәйеп аҫҡа һалынып төшкән. Үҙе көскә баҫып тора. Башын эйгән көйө, үҙе даими юшамға талған, тоноҡ күҙҙәренән сыбашҡып йәш тама.

Ҡапыл йөрәгем жыу итеп китте: һабан атым өнһөҙ илай ине. Йәш, сапсан, тилбер саҡтарын, өйөр айғырына ҡушылып, өйөрө менән сапҡан, ҡолон үҫтергән, ер һелкетеп йөрөгән саҡтарын һағынып, өн аралаш төш күреп илай төҫлө тойолдо ул миңә. Ат ғүмеркәйенең һуңғы мөшкөл аяныс хәле йөрәгемде өтөп үтте.

Ғәлиулла бабайымдың хәҙерге башҡорт аттарының боронғо тоҡомдары ҡырағай аттар, ҡолан, тарпандар тураһында һөйләгәндәрен ишеткәнем бар минең. Әллә әлеге саптар бейәнең аяныс хәле, әллә әүәл ир-егеттәрҙең ҡанаты булыр аттарҙың хәҙер ҡәҙере китеүе, әллә кешенең йәшлектә йәшнәп, ҡартлыҡта иңрәп ғүмер һуҙы мөшкөллөктәре әле бабайымдың һуңғы тарпан хикәйәтен хәтергә төшөрҙө.

Борон ҡырағай аттар, ҡолан, тарпандар бик ишле булған икән. Ҡылғанлы далалар, туғай, үҙәндәр уларҙың төп төбәге булған. Ҡышын йоҡа ҡарҙа тибендә йөрөгән, йәйен төньяҡ урман-далаларына саҡлы йәйелгән. Тора-бара Яйыҡ, Иҙел ,Тын (Дон) буйҙарына халыҡ күсеп төпләнеп ултыра башлағас, далалар һөрөнтөгә әйләнгәс, тарпандарға йәйрәп йөрөр ерҙәре тарайған. Уларҙың байтағы һилерәк яҡтарға таралған. Өҫтәүенә, ите тәмле был ҡырағай йылҡыларҙы һуғым өсөн өйөрө-өйөрө менән ҡыра башлағандар. Шулай итеп, борон ер ябып йөрөгән тарпандар бөтөнләй аҙайып, хатта тамам бөтөр хәлгә еткән.

Уларҙы шул хикәйәт итеп һөйләргә генә ҡалды инде хәҙер.

Шулай ишле тарпандарҙан ҡасандыр бер нисә өйөр генә иҫән ҡалған. Ул да өйөр башы айғырҙың үтә сослоғо, ажарлығы арҡаһында, ахры.

Тарпан — үтә һаҡ, тилбер һәм йылғыр йылҡы. Әммә бер ғилләә өйөр башында. Өйөр башы сос икән, өйөр ҙә имен-аман. Бейә, тай, ҡолон, ҡонандар утлағанда ла, юшағанда ла айғыр һәр саҡ уяу. Өйөр уйһыуҙа утлап йөрөй, ә айғыр ҡалҡыулыҡта ҡолаҡтарын шымайтып һаҡта тора. Ул-был хәүеф-хәтәр тойолһа, ужғырып хәбәр һала, өйөр йәһәт кенә хәүефһеҙ ергә күсә йә ҡасып ҡотола. Ә айғыр тарпан өйөрҙө ҡурсылап иң арттан бара йә ҡурҡыныс һалған аусы-яусыға, ҡош-ҡортҡа ҡаршы алдан йомола. Айғыр ажар икән, өйөр ҙә иҫән-һау.

Өйөргә һил урын һайлаусы, үҙ биләмдәрен билдәләүсе, кәрәк сағында ҡурсыусы, һуғарыуға алып барыусы, юл башлаусы, кире бороусы ла — өйөр башы. Өйөр айғыр талбыр икән, өйөр ҙә туҡ. Айғыр аҫау икән, өйөр ҙә түлле.

Шулай һуңғы тарпан өйөрҙәренең береһендә оло баш, ҡыҫҡа муйын, шырт яллы, сысҡан һыртлы бер һайҙаҡ тай бүтән тай-түлаҡтарҙан айырылыбыраҡ торған икән. Ҡойроҡ сәнсеп сапһа, алғыр булған, йонсоу-йүшән көндәр килһә, талбыр булған. Тай-һәүректәргә ал бирмәгән. Моронона еҫ кергәс, бейәләр тирәһендә уралғылаған. Ужарынған, сапсынған. Ләкин ҡарт өйөр башынан бик тиҙ өлөш алып, тибелеп-биртенгеләп йыш ҡына шымып ҡалған. Ҡырағай йәш ҡан ҡайнаһа ла, дарман етмәгән.

Ҡиләһе йылынамы, нисек, күк үлән күтәрелеп, өйөр утығып, тыу бейәләр йомролап алғас, ер-уттан[1] ҡеүәт алып, шырт ял һайҙаҡ тай тарпан аҙау йәш айғырға әйләнгән. Үҙе өйөр башы, бейәләр эйәһе булыр өсөн ҡарт айғыр менән яман алышҡа сыҡҡан. Һайҙаҡ тай башта ер тырнап сапсынған, өйөр тирәләй өйөрөлөп йөрөгән, өйөр башына уҡталғылап ҡараған.

Былтырғылай бер-ике биртендергәнсе ҡаты-ҡаты тибеп, айҡап өркөтөп ташларға самалаған ҡарт айғыр йәш тарпандың һырт бирмәүенә башта бер аҙ маҙап ҡалған. Алғырлыҡҡа алыш үлем йә ҡалыш төҫөн алған. Хәйләкәр ҡарт тарпан тарпанлап һөжүм ҡылған, яман ужғырып, ҡолаҡтарын ҡайсылап йәш аҙауға уҡталған, бер-ике быраҡтырып осорған, үрһәләнеп күкрәгенә яҫҡынған, өс-дүрт тапҡыр умыра тешләп алған, баҫтырғылап йөрөткән.

---

[1] Е р-у т — үлән-һут.

Таңдан башланған алыш көн үҙәгенә ҡыҙа биргән. Ҡанға, туҙанға батһа ла, һөрлөгөп. ницрәп китһә лә, йәш айғыр был юлы бирешмәгән, йәш ҡан ҡыҙа ғына барған. Ҡөсө китә башлаған, арыған ҡарт өйөр башы йәш ҡаты тояҡ, үткер тештәрҙең кәрен ныҡыраҡ татыған, моронға-башҡа эләккән бер-ике тояҡтан алйып миңрәп төшкән. Аҙаҡтан аҫау айғырҙың үрәпсеп өҫтөнә ырғыуын, муйынынан кисә тешләп, түкмәстереп ебәреүен дә абайламаған. Ергә ауған ҡарт тарпандың башына, морононa, күкрәгенә, ҡорһағына ҡатынан-каты тояҡтар төшкән...

Шулай үлемесле алыш йәш айғыр файҙаһына тамамланған. Эшлектән сығарып ташланған баш тарпанға кәре китеп, туйлы ғүмере үтеп, ҡарт алаша хәлендә тереклек итәһе ҡалған.

Ҡанға, туҙанға буталған йәш тарпан кешнәп, ер тырнап сапсып, үҙенең өйөр башы, аҫау толпар икәнен белдергән. Шомланып, һағайып торған өйөр, тыу бейәләр йәш айғыр тирәһенә ығышҡан. Йылҡы туйлар, түлләр саҡтар еткән.

Йәш йылғыр өйөр башы яйлыраҡ яңы биләмдәр, туплaмдар, һыулауҙар тапҡан. Өйөрөн туры толпар айырым бер хиреслек менән ҡурсыған. Хәүеф-хәтәр, ҡытлыҡ, йотлоҡ онотолған. Бейәләр һәр береһе түлләнеп, тай-тулаҡтар, һәүректәр, ҡонан, дүнәндәр ишәйеп киткән, үрсем артҡан. Табун туп-туп булып иркен далаларҙы иңләгән, тарпан бауырына етер үлән-сәскәле туғай-яландарҙы ҡыҙырған. Йәш һайҙаҡлы, туҡ-түлле ҙур өйөргә ҡош-ҡорт та тейә алмаған.

Тик бер яман ҡарлы-боҙло йот йылды өйөрҙән бүленеп мал ҡырылған. Туры тарпан үҙ өйөрөн бауырҙан ҡарҙар йырып тибен ерҙәргә юллаған. Юлда йәш мал-тыуар ятып ҡалған, өйөр миктәгән.

Таяҡ өҫтөнә туҡмаҡ: миктәгән өйөрҙө бер мәл ас бүреләр ҡамаған. Буранлы ҡара төндө бүреләр өйөрҙө олоп, сыйнап дүрт яҡтан ҡыҫа башлаған. Ауырыу, йонсоу ҡолон, тай-тулаҡты уртаға ҡалдырып, бейә-дүнәндәр ҡулсалап, өйөрҙө ҡурсыған, ырғыған бер бүрене тибеп түкмәстереп торған. Турайғыр өйөр тирәләй сабып ҡурсып йөрөгән: яҡынлашҡан бер бүре өйөрөнә ташланған, тиберен тибен осорған, тапарын тапап үткән. Муйынына, түшенә йомолғандарын быргып ташлаған. Тәнендә умырып тешләнгән бүре эҙҙәре яраһы артҡан, үҙе ҡанһырап хәлдән тайған. Шулай таң беленгәнсе алышып, ас бүреләр өйөрө һөжүмен кире ҡаҡҡан. Тарпан өйөрө тирәләй бүре үләкһәләре ятып ҡалған. Ә арыраҡ имгәнгән йә баш-аяҡһыҙ ҡалған бүре-

ләрҙең ас иҫәндәренең шашынып ашауынан, ярһыуынан сыц-шың ишетелгән...

Шулай төрлө йот ҡырғындарҙан ҡырылып, ҡош-корттарҙан ҡотолоп ҡалған тарпан өйөрө тағы түлләнеп тернәкләнеп киткән. Яңы тибенлектәргә юлыҡҡан, һил-мул ерҙәргә мулыҡҡан. Турайғырҙың туйлаған, бейәләрҙең биләнгән, тай-тулаҡтың уйнаҡлаған, ҡолон-ҡолонсаҡтың ҡойроҡ сәнсеп сапҡан саҡтарында дала кешнәү, сырҡырау, тупырлау тауыштарынан геүләп торған. Йәйрәгән йәй, көҙрәгән көҙ, ҡыҫылған ҡыш яҙылған яҙ менән алышынған.

Турайғырлы тарпан өйөрөнөң иркен-ирәүән, һил-ауҡын, хәүеф-хәтәрһеҙ ғүмере шулай күпме дауам иткәндер, бер саҡ быға барыбер сик еткән. Ҡайҙандыр ҡара сапҡын килеп сыҡҡан. Тарпан тупламын шәйләп һағалай башлаған. Һағалап, башта һаҡсы сос Турайғырҙы уҡтан уҙғарғандар, аҙаҡ өйөрҙө ҡамап, боғаллаһын боғаллап, үлтерәһен һөңгө, уҡтан үткәреп ҡырып бөткәндәр. Тарпан һуғымын һоғонғандар.

Һуңғы турайғыр тарпан шулай һәләк булған.

Һуңғы тарпан өйөрө шулай ҡырылған.

Иркен далаларҙың иркен-ирәүән тарпанҡайҙары юҡҡа сыҡҡас, улар тураһында бары хөр хәтирәләр, моңһоу хикәйәттәр генә тороп ҡалған. Даланың мең йәшәр сал ҡылғаны ла шул ҡайғы-һағыштан салланған төҫлө.

Хәйер, бынан йөҙ йылдар самаһы элек бер баярҙың йылҡылары утлап йөрөгән яландарҙа, нисектер, бер ҡарт саптар тарпан бейә булған. Күпме япа-яңғыҙ йөрөүҙән ҡаңғырып микән, төрлө ҡош-корттарҙан биҙрәпме, әллә түлләнер өсөнмө, нисектер инде, ҡырағай мал йылҡы көтөүен ҡырлай башлай. Башта йылҡы быны ят итә, яҡын ебәрмәй. Тарпан, яйлап яҡынлашҡас, хәҙер уның үҙенә эйәләшеү еңел түгел: юҡ-барға өркөп-ҡурҡып бара.

Тарпан өйөргә ылығыр, ти. Әкренләп ылыға был, айғыр, тай-тулаҡ тирәһенә һырыға. Хәҙер йылҡы менән утлап йөрөй, юшап тора. Барына күнгәндәй итә.

Тик ҡырағай тиһәң дә ҡырағай шул, көтөүсене, әҙәм затын күреү менән ҡырыҫ бышҡырып, шымайып, өйөрҙө ташлап ҡырға саба, көтөүселәр китһә генә, яңынан өйөргә килә. Йылҡы малы ятып ял иткәндә, ул һерәйеп аяҡ өҫтө юшай. Утлауы ла, йоҡлауы ла бергә. Ҡыш йылҡы малы йылы аҙбарға ингәндә, ул, үҙ ғәҙәтен ҡыуып, ыжғыр яланда ҡала, көс-хәл менән ҡалын ҡарҙа тибенеп аҙыҡ таба, яҙғаса яңғыҙ йән аҫрай, тағы өйрәнгән йылҡы өйөрөнә ҡушыла.

Өсөнсө ҡыш тигәндә саптар тарпан бейә, үҙенең туры ҡолоно менән йылҡыға ҡушылып, йылы аҙбарға инергә баҙнат итә. Инеүе була, баярҙың бойороғо буйынса, уны бүтән йылҡынан айырып, айырым бикләп тә ҡуялар. Ҡәртә-ҡураны, сик-бикте белмәгән, ирекленккә, иркенлеккә күнгән ҡырағай тарпан меҫкен биккә алйып стенанан-стенаға һуғыла, сапсып-үрәпсеп, бәрелеп-оролоп башын-моронон емереп, һырт-ҡабырғаларын һыҙырып бөтә. Стенаға бәреп, һул күҙен сығара.

Өс көн, өс төн өҙләкһеҙ тулап, яман оролоп-бәрелеп, күҙенән яҙып, тамам алйып хәлдән тайғандан һуң, меҫкен тарпан бейә бер мөйөшкә һырлығып ҡапыл тынып ҡала. Тарпан тарға тарығып, ауыҙына бер тәғәм аҙыҡ ҡапмай, бер йотом һыу эсмәй, бер нисә көн ҡымшанмай ҡатып тора. Ярһыуы ла, алйыуы ла, бесән-һыуҙан баш тартыуы ла ирекһеҙ иткән әҙәмдәргә сая ҡарыуы булды, ахры, хайуанҡайҙың.

Әммә эс-эскә йәбешеп, асығыу, сарсау үҙенекен итә. Ҡырағай саптар семтемләп булһа ла бесән һәрмәштерә башлай, ҡар ашай. Ат ҡараусының ихтыярына буйһоноп, йүгән һалдыра. Тик һуғарырға сығарғанда, ҡулдан ысҡынырға ынтылышы ғына һөҙөмтә бирмәй. Яйлап йүгәнгә күнгән төҫлө тойолһа ла, аяҡҡа тышау, һыртҡа эйәр һалдырырға ирек ҡуймай.

Яҙын кәртәлә саптар бер ҡолон килтерә. Ҡолоно менән әүрәп кәртә-ҡураға ла, ҡулға ла эйәләшкәндәй итә. Ҡолонон аманат һымаҡ алып ҡалып, тарпан бейәне йылҡы менән ҡырға сығарһалар, тарлыҡҡа тарыҡҡан тарпан кешнәй-кешнәй сабып китә. Шул китеүенән ғәйеп була. Йылы ҡураға, хатта ғәзиз ҡолонсағына ла яландар иркен, үҙ иреклелеген алыштыра алмай хөр малҡай.

Күпмелер ирегеп йөрөгәс, елене тиртеп бер төн ҡураға ҡайта саптар, һаҡ ҡына кешнәп, сыңрап ҡолонон таба. Уны саңдау тотҡонлоҡтан ҡотҡарып, икәүләшеп яланға китеп юғалалар. Алдағы ҡышты тарпан бейә лә, ҡолоно ла йылы ҡураға бүтәнсә ҡайтмай.

Шуның икенсе ҡышынамы Яйыҡ буйында башҡорттар бер ҡырағай ат күреп ҡалалар. Ҡыҙығып ҡыҙышып китеп, уны ҡырпаҡ ҡарҙа нисек тә ауламаҡ итәләр. Дүрт-биш һыбайлы ике көн буйы уны ҡыуалап, ҡамап ҡараһалар ҙа, һис тота алмайҙар. Өмөттәре өҙөлдө тигәндә, һис көтмәгәндән ҡасҡын малдың тояғы йомран тишегенә эләгеп, аяғын һындырғас ҡына тоталар быны. Аяғы һынып, тыпырсынып, күҙҙәре аларып ятҡан аяныс малды уратып алып, ипләберәк ҡараһалар, был теге һыңар күҙле саптар тарпан булып сыға.

Йылы ҡураны ыжгыр ҡышҡа алыштырған, ирке өсөн күҙһеҙ, аяҡһыҙ ҡалған был хөр тарпанды ҡыҙғаныл, башҡорттар уға ағастан тояҡ яһайҙар, йылы аҙбарҙа аҫрайҙар. Баш, ирек бирмәҫ хайуан ағас тояғын тибеп һындырып, ашау-эсеүҙән баш тартып, аяҡ өҫтө йән бирә. Һуңғы тарпан ғүмере шулай өҙөлә.

Был тетрәткес хикәйәтте ишеткәс, ҡыҙыҡһынып китеп, мин аҙаҡ тарпандар тураһында әҙәбиәт ҡараштырҙым һәм һуңғы тарпандарға бәйле ҡыҙыҡлы, ғибрәтле мәғлүмәттәр осраттым. Бабайым һөйләгән ғәҙәти хикәйәт түгел, хәҡиҡәт — булған хәл икән. Ул хәл ысындан да йөҙ йылдар элек — 1879—1881 йылдарҙа — Яйыҡ буйы далаларында булған. Һуңғы өйөр тарпандарҙың, һуңғы тарпан тоҡомдарының баш бирмәй, йүгән, эйәр һалдырмай, кеше ҡулына эйәләшмәй һәләк булыуҙары Ҡара диңгеҙ буйы, Ҡырым далаларында ла ҡабатланған. Шулай итеп, бынан бер нисә йөҙ йылдар Үҙәк, Көнсығыш Европа, Урта Азия, Алтай яҡтарын ҡыҙырған тарпан тоҡомдары аяуһыҙ ҡырып юҡҡа сығарылған. Элек уларҙы тәмле ите өсөн йөҙәрләп-меңәрләп аулағандар. Көнбайыш королдәре табынында тарпан ите деликатес урынына йөрөгән.

Кеше тарпан тоҡомон һаҡларға тырышып, уны бүтән ат тоҡомдары менән тороҡтороп ҡараған. Шырт яллы, сыҫҡан һыртлы, ҡыҫҡа тороҡ, ҡаты тояҡ яңы нәҫелдәрен тапҡан. Поляктарҙың кониҙары, инглиздәрҙең пониҙары тарпандарҙы йорт аттары менән тороҡтороуҙан килеп сыҡҡан. Немец ғалимдары тарпандың яңы нәҫелдәрен үрсеткәндәр. Башҡорт атын ҡолан, тарпан менән тороҡторғандар.

Ләкин тәбиғәт йыш ҡына үҙенекен иткән. Аттың аҙғыны тарпан тиһәләр ҙә, яңы яһалма нәҫел бер нисә быуындан йорт аты нәҫеленә кире ҡайтҡан, тарпанлығын тиҙ юйған. Тарпандарҙың тибендә ҡыш сығыу, һыуыҡҡа сыҙам талбыр тәбиғәтен, ташҡа бирешмәҫ ҡаты тояғын кире ҡайтарыу, тарпан тоҡомон тергеҙеү әллә ни һөҙөмтәләр бирә алмай әле.

Тәбиғиен һаҡлауға, тәбиғилеккә ни етә.

Үҙем һуңғы тарпан тураһында тетрәткес хикәйәт-хәҡиҡәтте иҫкә алам, ә күҙ алдыма нишләптер һаман һабан атым саптар бейә баҫып тора. Ул әллә боронғо талбыр тоҡомдарын, әллә хәҙер ат-йылҡы малына ҡәҙерҙең китеңкерәүенә, әллә үҙенең һуңғы мөшкөл ҡартлығын уйлап, юшай-юшай илай төҫлө тойолдо миңә.

*1981*

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Авторҙан . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3

Повестар

Алдар батыр ҡиссаһы . . . . . . . . . . . . . . 5
Пугачев фельдмаршалы . . . . . . . . . . . . . 96
Рудасы Исмәғил Тасим улы . . . . . . . . . . . 192

Хикәйәләр

Ете ырыу . . . . . . . . . . . . . . . . . 224
Ҡараһаҡал хаҡында һүҙ . . . . . . . . . . . . 246
Батыршаның батшаға хаты . . . . . . . . . . . 271
Һуңғы тарпан . . . . . . . . . . . . . . . 290

**Гайса Батыргареевич Хусаинов**

**СКАЗАНИЕ О БАТЫРАХ**

ИСТОРИЧЕСКАЯ ПРОЗА

Повести, рассказы

*(на башкирском языке)*

Редакторы *Х. Т. Бикҡолов*
Рецензенттары *И. Ғ. Аҡманов, У. Х. Рәхмәтуллин.*
Рәссамы *З. Ғ. Ғаянов*
Художество редакторы *Л. Л. Костин*
Техник редакторы *Н. Г. Пятаева*
Корректоры: *Ф. Т. Ташбулатова*

ИБ № 2990

Наборға бирелде 24.06.86. Баҫырға ҡул ҡуйылды 22.09.86. П01725. Ҡағыҙ форматы 84×108¹/₃₂. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Тип. ҡағыҙы № 3. Шартлы баҫма таб. 15,54. Шартлы буяу отт. 16,22. Учет.-изд. таб. 17,01. Тиражы 15 000 экз. Заказ № 736. Хаҡы 1 һум 20 тин. Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18. Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекты, 2.

1 һум 20 тин